# Мөжәуир хәҙрәт



Мөжәуир хәҙрәт

رَبَّنَا افْتَحْ بَيْنَنَا وَبَيْنَ قَوْمِنَا بِالْحَقِّ وَأَنتَ خَيْرُ الْفَاتِحِينَ

*Лира Якшыбаева*

# Мөжәүир хәзрәт

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ · 2008

УДК 82-97=512.141
ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
Я 51

Ишморатова Самбо

**Яҡшыбаева Л. М.**

Я 51 Мөжәүир хәҙрәт. – Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте, 2008. – 348 бит.

ISBN 978-5-295-04611-7

Урал аръяғы халҡы араһында киң танылған, оло абруй яулаған арҙаҡлы шәхес-әүлиә, табиб, хәҙрәт Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улына (1876–1967) арнала. Баймаҡ ере изгеһе, Мәнһыр әүлиәһе, арҙаҡлы олуғ шәхесебеҙҙең ғүмере һәм тормошо уны күреп-ишетеп белгән кешеләрҙә һаман да ҡыҙыҡһыныу һәм һоҡланыу тойғоһо уята.

УДК 82-97=512.141
СИ – 2008 ББК 84-4 (2 Рос=Баш)

ISBN 978-5-295-04611-7 © Яҡшыбаева Л.М., 2008

# *Баш һүҙ*

Йыш ҡына миңә: «Нисек Мөжәүир хәҙрәт тураһында яҙырға баҙнат иттең?» – тигән һорауҙы бирәләр. Хаҡ һорау. Әҫәрҙе анализлағанда беҙ юҡҡа ғына иң беренсе уның яҙылыу тарихына туҡталып китмәйбеҙ. «Мөжәүир хәҙрәт» повесының да үҙенсәлекле яҙылыу тарихы бар.

Әҙәм ышанмаҫты дөрөҫ булһа ла һөйләмә, тигәндәр бит. Мин дә барыһын асып һалырға ашығып барманым.

Ысынлап та, мөғжизәле икән был донъя! Бар икән ул сер ғилеме, бар! Юғарынан бирелеү ҙә, һиҙенеү ҙә, ҡай саҡ рухтарҙың ярҙам итә алыу күренеше лә – бөтәһе лә ысын икән. Хатта элек үҙең бер ҡасан да уйлап ҡарамаған эштәрҙе эшләтә икән ул сер ғилеме!

...Бынан бер нисә йыл элек мин өн аша ғәжәйеп төш күрҙем. (Русса уны «видение» тибеҙ.) Имеш, таңдың әрә-һәрәһе, көнсығыш аллан-ған, әммә ҡояш әле ҡалҡмаған, иртәнге намаҙ ваҡыты. Мин урман юлынан барам, аяҡтарым ергә теймәй, әллә осам, әллә йөҙәм, имеш. Сәстәремдә ике толом итеп үреп төшөргәнмен, ап-аҡ күлдәгемдең итәге наҙлы таң еленә елберләй. Бына бер саҡ «Аллаһы Әкбәр! Аллаһы Әкбәр!» тигән аһәңле ауаз ҡолағыма килеп ишетелә. Тирә-яғыма әйләнеп ҡарайым: ҡайҙан ағыла был яғымлы тауыш? Шул саҡ кинәт урман икегә ҡайырылып китте лә алтын нурға күмелгән аҡланға килеп сыҡтым. Бына мөғжизә! Унда теҙелешеп ап-аҡ кейемле, башына сәллә ураған, аҡ һаҡаллы ун ике олпат ир заттары ултыра. Бөтәһе лә матур, һәммәһенең илһамлы йөҙҙәренән нур бөркөлә. Имеш, улар иртәнге намаҙҙарын тамамлап, түңәрәтеп ултырғандар ҙа бергәләп ҡояш ҡалҡ-ҡанын көтә. Бер кем бер ни әйтмәһә лә, үҙ ғүмеремдә берәһен бер күргәнем булмаһа ла, шунда ултырғандарҙың, ни ғилмә менәндер, барыһын да сырамытам икән. Ана, иң уртала – мәшһүр шәйех Зәйнулла, уның уң яғынан яҡташым Мансур хәҙрәт Халиҡов ултыра,

эргәһендә Хатип хәҙрәт, Сабир хәҙрәт, Әбйәлил мулла урын алған; һул яғында Зәйнулла ишандың тоғро дуҫы Ғатаулла ишан, артабан Байым ишан, Муллаҡай әүлиәһе Ғабдулла Сәиди, Таулыҡайҙан Хәлил мулла, Манһыр әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәт, Буранбай сәсән һәм Күгәрсен районы Ишбирҙе ауылынан Шәмиғол хәлфә урынлашҡан. Миңә иң башлап Зәйнулла шәйех өндәшә:

– Беҙ һәр яңы көндө ошолай намаҙ менән ҡаршы алабыҙ, тыуған халҡыбыҙға фатиха ебәрәбеҙ. Илебеҙгә, еребеҙгә янаған ҡара көстәрҙе ҡояштың тәүге нурҙары менән яндырып юҡҡа сығарабыҙ. Еребеҙ беҙҙең кеүек әүлиәләр, изгеләр бәрәкәтендә хәрәкәт итә, беҙҙең фатихала имен-аман тора.

Артабан изгеләрҙең һәр береһе миңә нисер әйтеп ҡалырға ашыға:

– Беҙ Еребеҙҙе афәттәрҙән һаҡлау өсөн торабыҙ!

– Кешеләр ошоно белһен ине!

– Тыуған ерҙәрен һаҡлаһындар!

– Тереләргә беҙҙең турала әшкәрт, ҡыҙым!

– Беҙ Ҡөрьән сүрәләренә һыуһайбыҙ!

– Халыҡ изгеләренең исемдәрен онотмаһын!

– Динен онотмаһын!

– Кәсеребеҙгә килеп аяттар уҡып торһон!

– Ата-бабаларының аҡылын тотһон!

Изгеләрҙең бар әйткәне үҙенән-үҙе һүҙһеҙ генә күңелдән күңелгә бирелә икән тим. Шунан бер писәһе ултырған еренән тороп, эргәмә яҡынланы ла ҡулыма дәфтәр тотторҙо.

Башлап эргәмә Әбйәлил мулла килде: «Барса ҡылған ғәмәлем ошонда яҙылған», – тине.

Артабан Мөжәүир хәҙрәт янына килеп, арҡамдан һөйҙө:

– Һин, ҡыҙым, тыуғандан минең ҡурсыулыҡта үҫтең. Тик быны үҙең генә һиҙмәнең. Аллаһ ҡөҙрәте менән һине үҙебеҙҙең яҡҡа ыҡлаттым, уй-хистәрең өлгөрөп, камил булғас, яҙышыр өсөн ҡулыңа ҡәләм тотторҙом. Бынан түбән беҙҙең кеүек изгеләр тормошон яҙырһың, ин шәәъ Аллаһ. – Ул да миңә ғәмәл дәфтәрен һуҙҙы.

Шунан эргәмә Сабир мулла килде:

– Беҙ, әҡрәбәләрбеҙ, балам, – тине. – Бында ата-олатаңдарҙы күреп торам. Рухтарыбыҙға аяттар бағышлатаһың, рәхмәт. Беҙҙең турала ла яҙырға онотма, – тине лә ул да дәфтәрен бирҙе. – Беҙҙең бар изге эштәребеҙ ошонда теркәлгән булыр, шуларҙы яҙып, халҡыбыҙға еткерһәң, рухыбыҙҙы шат ҡылырһың, туғаным!

Өс олуғ дин әһеленең нур сәскән ғәмәл дәфтәрен тотоп торам, имеш, ә үҙем:

– Нимә яҙырмын, нисек яҙырмын? Мин был шәхестәрҙе бөтөнләй белмәйем дәһә, – тип аптырауға ҡалам.



Мөжәүир хәзрәт

– Һис борсолма, ҡыҙым, бөтәһе лә юғарынан күңелеңә бирелер. Унан һуң, ерҙә-тирәңдәге бөтә мөьмин-мосолман һиңә ярҙам итергә әҙер тороп. Илгә таян: ил хәтере иркен, – тигән фекер күңелемә һеңә.

Шул саҡ ҡапыл уянып китәм. Иңләп кенә күҙемде асып ҡарайым: ҡараңғылы-яҡтылы мәл, тороп тышҡа сығам: офоҡта – таң һарыһы. Йорт тирәләй үҫкән ысыҡлы сәскәләр йым-йым итеп күҙҙәремә баға, баяғы өн аралаш күргән минең төштө белеп-ишетеп торғандай: «Яҙ, яҙ!» – тип миңә баш һелкә. Баҡсамдағы алмағастар ҙа шулай тип шыбырлағандай. Был хәлгә хайран ҡалып күккә бағам, унда йөҙгән аҡһыл болоттар ҙа миңә ҡул болғай. Бына ғәләмәт әд-донъя! Барыһы ла: «Яҙ, яҙ!» – тиҙәр. Мин, ап-ябай бер башҡорт ҡатыны, был тиклем мөғжизәне, сер ғилеменә сорналған хәлдәрҙе нисек яҙырға тейеш һуң?! Өн аралаш күрелгән төш иҫтән сыҡмай, уйланып йөрөгәндә, алыҫ Бөрйәндән Асия апай Әбйәлил ҡыҙы шылтырата: «Килеп ҡайт, – ти. – Сәйетбабалылар ауылдың 300 йыллыҡ юбилейын байрам иткәндә, атайымды ла иҫкә алһындар ине, яҙ әле атайым Сираев Әбйәлил тураһында», – тип үҙенең үтенесен белдерә. Теге саҡ күргән өн аралаш төш, Әбйәлил мулланың ҡулыма дәфтәр тоттороуы иҫкә төшә. Ул минең яҙыуымды теләне, мин яҙырға тейеш! Яҙып ҡарарға булдым. Үҙенән-үҙе бына тигән художестволы очерк килеп сыҡты. «Эргәһендә йөрөгән кеүек яҙылған, бөтәһен ҡайҙан белеп торған!» – тип хайран ҡалды яҡташтарым. Ауылдаштарым ҡыуанғанды ишетеп, үҙем дә шатландым. Артабан миңә тағы яҙырға ҡуштылар. Был юлы Йосопова Роза Ғәниулла ҡыҙы миңә тәҡдим яһаны:

– Лира апай, Мөжәүир хәҙрәт тураһында яҙырға ине. Ана, Мигре Анастасияны ҡайһылай итеп күккә күтәрҙе. Ә беҙҙең хәҙрәт ошондай ҙурлауға лайыҡ түгелме ни!? Ул бит әүлиә, бөйөк шәхес. Уны күреп белеүселәр ерҙән китеп бөтмәҫ элек яҙып ҡалырға, ашығырға кәрәк. Хәҙрәтебеҙҙең исеме онотолмаһын, мәңге йәшәһен ине, – тип өгөтләне.

«Мин был аҡыллы тәҡдимде хуплап, уның менән тулыһынса килешәм, тик хәҙрәтте бит күреп белмәйем, нисек яҙырмын?» – тигән һорау мейемде быраулай. Шул саҡ минең башҡа: «Ана, Булат Рафиҡов «Ҡараһаҡал»ды, Степан Злобин «Салауат Юлаев» романын яҙған бит, улар үҙ әҫәренең геройҙарын күреп белгәндәрме ни?» – тигән ҡыйыу фекер килә. Яҙыусы өсөн иң мөһиме фаразлау, ижад ҡомары, йәнә, күңелгә биреләү түгелме ни? Роза ла дәрт бирә:

– Яҙ, яҙ, булдыраһың! Барыбыҙ ҙа ярҙам итербеҙ!

Йәнә теге саҡтағы изгеләр ҡоро иҫкә төшә: ярҙам итербеҙ, яҙ, яҙ! Шулай итеп, дәртләнеп йөрөй торғас, үҙенән-үҙе ҡулға ҡәләм алынды. Айырым бүлектәрҙе тиҙ генә яҙып та ҡуйҙым. Ысынлап та, күп нәмә күңелгә бирелде. Китап уҡыусылар аҙаҡтан: «Гүмер буйы Мөжәүир

хәҙрәттең эргәһендә йөрөгәнме ни, шул тиклем дөрөҫ яҙған бит әле!» – тип хайран ҡалды.

Йыйып алған хәтирәләр шул тиклем күбәйҙе, хатта тәүге сыҡҡан китапҡа һыймай ҡалды. Был турала белеп, китап уҡыусылар тағы үтенде:

– Артабан яҙ! Беҙ ярҙам итербеҙ!

Бына бер саҡ мине төрлө яҡтан Мөжәүир хәҙрәт тураһындағы хәтирәләр менән күмеп ташланылар: хаттар яуҙыралар, телефондан шылтыраталар, әллә ҡайҙарҙан эҙләп, өйгә киләләр. Хәтирәләр иҫ китмәле, хатта береһен-береһе ҡабатламауына хайран ҡалырлыҡ. Тағы ихласлап яҙырға тотондом. Хәҙрәттең 130 йыллыҡ юбилейына бер бүләк булһын тип ашыҡтым. Шулай итеп, икенсе китабым да яҙылып бөттө.

Хәҙерге көндә Ғафури районы әүлиәһе Сабир хәҙрәт Халиҡов тураһындағы әҫәрем яҙылып бөттө. Айырым бүлектәре «Башҡортостан» гәзитендә донъя күрҙе. Бөйөк дин әһеле, әүлиә Сабир хәҙрәттең тыуыуына 155 йыл тулғанда, «Сабир хәҙрәт» китабы донъя күрер тип ниәт иттем.

Беҙҙең донъя сергә сорналған, ә сер ғилеменә төшөнөр өсөн беҙҙән күп ғилем, рухи ҡөҙрәт, күңел сафлығы талап итълә. Беҙҙән алда килеп киткән пәйғәмбәр, әүлиә, әмбиәләрҙең рухи мираҫын өйрәнеп, улар аҡылын тотоп, нәсихәттәренә тоғро ҡалып йәшәһәк, тормошобоҙ бермә-бер алға барасаҡ.

Көн дә сәхәр мәлендә тороп ихатама сығам, шулай итеп таңды ҡаршылайым. Йөрәгемде ҡояштың тәүге алһыу нурҙары менән мөлдөрәмә тултырам да өйгә инеп тағы яҙышырға ултырам. Мәңгелек мөхәббәт, изгелек, еребеҙгә һөйөү тураһындағы яҙмаларым ап-аҡ күңелемдән аҡ ҡағыҙ битенә тамсы-тамсы булып тама. Бер аҙҙан күбәйгән тамсылар шишмәгә әүерелә. Шишмә – оло йылғаға, ә йылға даръяға барып ҡушылыр. Ә даръялар ҡөҙрәте һәммәбеҙгә мәғлүм.

Минең ижадым да шулай халыҡҡа, иманға әйҙәүсе изге көстәр менән берләшһен дә ерҙәге ҡара көстәрҙе тар-мар итеүгә үҙ өлөшөн индерһен ине.

# I БҮЛЕК

## БӘЙӘН

## Ямғыр яуҙырған малай

Бәләкәй Мөжәүир яһил ҡатындың:

– Һуйылдай башы менән... ошо ғибрәт... майрығы әйләнеп, уятҡанды көтә лә ятасы. Бынан ары үҙең тор, былҡы! – тигән юҫыҡтағы көндәге әрен ишетмәҫ өсөн, арыған тәнен ял иттерергә өлгөрмәһә лә, таң һарыһынан үҙе уянырға өйрәнде. Мәрхүмә әсәһе урынына өйгә кергән үгәйгә ҡаршы өндәшеп, һүҙ көрәштереп тә тормай – уның йәберләүен, кәмләп-хурлауҙарын күтәрә алмай ул. Хәҙергә ҡараһына ҡатып, йыртыҡ-мыртыҡ кейеп, аслы-туҡлы йөрөһә лә, Мөжәүир күкрәгендә ниндәйҙер илаһи көс барлығын, рухи азатлыҡ хисен тоя. Моғайын, үҙен түбәнһеттергеһе килмәүе шунандыр ҙа әле.

Бөгөн дә көтөүсе малай ҡояштың тәүге нурҙары менән түшәгенән торҙо. Был өйҙә ғәзиз атаһынан да, үгәй әсәһенән дә тамсы мәрхәмәт көтмәгән үкһеҙ үҫмер үҙ яйын үҙе күрҙе: көбөнән бер сеүәтә ҡатыҡ һоҫоп алып һемерҙе лә итәге-еңе теткеләнгән иҫке кәзәкейен яурынына элде, ишек төбөндәге ағас сөйҙән сыбыртҡыһын алды. Шаршау артында яңы уянып, торорға әҙерләнгән ата-әсәһенә, урындыҡ ҡаплап теҙелгән береһенән-береһе кесе туғандарына, берҙән-бер генә ҡарындашына һирпелеп күҙ һалды һәм ололарса һәлмәк баҫып, тынсыу өйҙән тышҡа атланы. Тупһанан төшкәс тә ихатанан сығып китергә ашыҡманы, донъя күргән ҡарт бабай

кеүек, игтибар менән офоҡҡа текләне, икһеҙ-сикһеҙ зәп-зәңгәр күк киңлеген байҡаны. Әммә тиҙ үк уйсанланды. «Исмаһам, берәй болот әҫәре күренһәсе, – тип эсе бош-то. – Был ҡоролоҡ тамам үҙәктәргә үтә ләһә...»

Ауыл осона, мал туплана торған ергә етеп барышлай, юл ыңғайы Урғаҙаға төшөп, турһығына айран һыулап алды. Арыраҡ барып, яңы бешеп килгән муйылды усына һыпырҙы. Ҡытлыҡ йылы муйыл уңыр, ти торғайны өләсәһе. Быйыл, ана, уңа икән.

Быуыны ла ҡатып өлгөрмәгән малай өсөн башта ваҡ мал көтөү бик ауыр тойолғайны. Тиктормаҫ кәзә-һарыҡты йыйып алғансы алйыған саҡтары булды. Тора-бара зирәк бала эштең айышына төшөндө һәм көтөү көтөшөргә әүәҫ Ҡорлан исемле этте үҙенә ҡулайлаштырҙы. Сыбыртҡыны оҫта һелтәргә, һарыҡ-кәзә аңларлыҡ итеп һыҙғырырға өйрәнде. Малды туплау хәҙер артыҡ ҡыйын түгел. Тыңлайҙар, мәхлүктәр, Мөжәүирҙе.

Бөгөн дә ул, гел һуңлап йөрөүсән үрге ос Миңниса еңгәһен көтәүелләп, малды бер килке өйөрөп торҙо ла, һелкәү ҡатын кәзәләрен килтереп ҡушҡас, сыбыртҡы осон ергә эсе иттереп шартылдата һуҡты, һыҙғырып ебәрҙе. Үҙенән бер аҙым да ҡалмаған Ҡорланы лауылдап өрөп көтөү артынан төштө.

Бөгөн ул көтөүҙе ауыл ҡаршыһындағы Иманай тауы буйына борҙо. Ҡоролоҡ булһа ла, ундағы үҙәктәрҙә, Селтербей ҡыҫығында ваҡ малға аҙыҡ етәрлек әле.

1887 йыл, Ҡуян йылы, көтөлмәгәнсә насар килде лә ҡуйҙы шул. Май башынан июль уртаһынаса ямғыр күҙе төшмәгән ер өҫтө ҡоролоҡтан, эҫе елдәрҙән сарсап, шаҡмаҡланып-шаҡ-маҡланып ярылды.

Яҙ башында ҡар дымынан күтәрелгән үлән-сәскә йәй уртаһы етер-етмәҫтән шиңде, бесәнлектәр таҡырланып ҡороно. Фәйзулла ауылы эргәһендәге ҡайынлыҡтан баш алып, Манһыр эргәһендә Урғаҙаға ҡойған иркә ҡолонсаҡтай ирәбе холоҡло Шүрәле йылғаһы ла, ҡырыҫ йәйгә үпкәләгәндәй, тамсы һыуы ҡалмайынса ҡороно. Бары тыуған Манһырына сикһеҙ тоғролоҡ һаҡлаусы Урғаҙа ғына нык торҙо, гәзиз төйәген афәттән һаҡлап, һәүетемсә талғын ғына аға. Яр

буйҙары йәшел һыҙат булып, күҙҙе иркәләп, әллә ҡайҙарҙан күренә.

Мөжәүир малдарын Иманайҙың шишмәле үҙәгенә табан әйҙәне. Ундағы селек, тубылғы, сейәлек араһында ҡылған күп була. Әрһеҙ ҡылған эҫеһенә лә, һыуығына ла бирешмәй үҫә бирә. Уны ифрат туҡлыҡлы ла тиҙәр. Йылҡы малы менән кәзә-һарыҡҡа ҡылған булһа, башҡа бер ни кәрәкмәй. Мөжәүир был ғәжәйеп үҫемлекте ни ағы менәндер утты-һыуҙы кискән сал сәсле сая ҡатынға оҡшатып ҡуя. Әле лә Иманай битләүенән башланып, алыҫтағы күкһел тауҙарға тиклем йәйрәп киткән ҡылғанлы далаға һоҡланып та, яратып та ҡарап торҙо малай.

Ҡоро йылды ҡуй һимерә, тиеүҙәре хаҡ инде. Ана, ваҡ мал ҡайһылай көр. Әйтерһең, күпереп үҫкән күк үлән утлайҙар.

Көтөүсе тауҙың икенсе битләүендә йөрөгән һыйырҙарға ла күҙ һалды. Меҫкенкәйҙәрҙең сыҡмаған йәндәре йөрөй. Ҡаҡ һөйәккә ҡалып, ер ҡыртышын кимерә-кимерә ауыҙ-мороно ҡарайған, эсе эскә үткәшкән малдар уғата йәл малайға.

Бер генә ҡойоп ямғыр яуып үтһәсе! Үләндәр үҫеп, ер йәшәреп ҡалыр ине. Кешеләрҙең көнө-төнө ямғыр һорап теләк теләүенә ҡарамаҫтан, күк йөҙө шар аяҙ шул һаман.

Малдарын үҙ яйына ебәреп, Һорлан ҡарамағына тапшырғас, үҙәге өҙөлөп асыҡҡан Мөжәүир ҡуян кәбеҫтәһе осратмаммы тип тау битләүенән арлы-бирле йөрөштөрҙө. Мәскәй кәзә ундай татлы үләнде ҡалдырамы һуң инде? Тамаҡ ялғар тәгәм ризыҡ тапмаған малай, күңелһеҙләнеп, бер дүрткел таш өҫтөнә килеп терәлде. Эх, әсәһе тере булһасы! Ни эшләһә эшләр, балаларын асҡа тилмертмәҫ, ун йәшлек балаһын көтөү көтөргә сығармаҫ ине. Мәрхүмәкәй, алты балаһын алты етем итеп, уйламағанда китеп барҙы шул. Мөжәүир өйҙә ҡалған кескәй Мөьминәне, ҡустылары Мортаҙа, Теүәлбай, Бәхтейәр, Аллаярҙы йәлләне. Йоҡонан торғандарҙыр инде. Үгәй әсә тамаҡтарын ҡаранымы икән? Әллә, ғәҙәтенсә, ыжлап та бирмәнеме? Малайҙың күҙенә йәш эркелде...

Атаһы Уйылдан, ауылдың ажар ире, ҡатынын ерләп, йола үтәп ҡырҡын үткәрҙе лә, элек күҙ һалып йөрөгән, тыу бейәләй

уйнаҡлап торған бер йәш бисәне алып ҡайта һалды. Балаларына әсә була алырмы, тип тә торманы. Ауыл кешеләре әйткеләштерҙе: ул әсе телле, үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле, моңһоҙ әҙәм менән ни эшләрһең, тине. Әммә Уйылдан кеше кәңәштәренә ҡолаҡ һала торғандарҙан түгел. Күҙ йомоп, үҙенсә эшләне. Бер аҙҙан, өләсәһе мәрхүмә әйтмешләй (әсәй – ҡаҙна, атай – еҙнә, тиер ине) балаларына «еҙнә»гә әүерелде. Бисәһе ни тиһә, шул. Балалары асмы, ялангасмы, унда эше юҡ.

Өләсәләре иҫән саҡта – унда, аҙаҡ ил өҫтөндә тамаҡ ялғап йөрөүҙәрен белмәмешкә һалыша.

Өләсәһе барҙа еңелерәк ине. Ул да яҙын гүр эйәһе булып ҡуйҙы.

Мәрхүмдәрҙе хәтерләүҙән күңеле тулған Мөжәүир күҙ йәштәре аша тау битләүенән ус төбөндәгеләй күренгән ауылына ҡараны. Ана, өләсәһенең өйө. Ҡабыҡ башлы, тауыҡ кетәгендәй генә өй етемһерәп ҡалған. Хәҙер унда берәү ҙә тормай. Яҙ етеп, күк умырзаялар баш ҡалҡытҡас ҡына китмәй торһа ни була инде өләсәһе?! Хәҙер бер оя етемдәрҙең илаһа йыуатыр, ҡолаһа йәлләр кешеһе ҡалманы.

Мөжәүир өләсәһен фәрештәләй күрҙе. Ул ейәнен малайҙар рәнйетеүен әллә ҡайҙан белер, инә ҡарлуғастай талпынып килеп тә етер ине.

– Минең ҡашҡа ҡолонсағыма ҡулығыҙ менән, телегеҙ менән дә аслан ҡағылаһы булмағыҙ. Үҫеп еткәс, ул ҙур хәлфә буласаҡ, күрерһегеҙ, – тиер ине. Ысынлап та, Мөжәүирҙең башҡаларҙан айырылып тороуын, нимәһе менәндер өҫтөнлөгөн күргән көнсөл апһындары, зитына тейергә теләп, артынан үсекләп тә ҡалғылайҙар:

– Хәлфә, имеш... пшшш... етем быҙау тиң, ҡолаҡҡа яғыр...

Әммә әбей бирешмәй. Киткән еренән тегеләр эргәһенә кире боролоп килә, үҙенекен тыҡый.

– Күрмәйһегеҙме ни, баланың йөҙө нурлы, сырайында ҡот уйнап тора. Хас та Йософ пәйғәмбәр...

Ауыҙҙарын салышайтып мыҫҡыллы йылмайған апһындарына йәне көйөп, ҡулын һелтәй ҙә ары юрғалай:

– Хәйер, һеҙгә ни, аңшайғандарға, күренә тиһеңме ни ул?!

Ейәндәрен, шулай итеп, изге күңелле өләсәйе бер кемдән

рәнйеттермәне. Үгәй әсәгә лә әйтештереп, нотоҡ уҡып киткеләр ине.

— Балам, етемдәрҙе рәнйетмә, ярамай. Етем илаһа, барлыҡ ер-һыу илай, ти. Уларҙы рәнйеткән өсөн Аллаһы Тәғәлә өҫтөбөҙгә ҡаза ебәрер. Аслан йәнеңә гонаһ алма.

Тик быңдай һүҙҙәр үгәй әсәнең бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға. Ул икенсе әсәнең балаларын ярата алмай. Әллә шуға Хоҙай үҙенә бала бирмәй һаман.

Өләсәһе, ни эшләптер, Мөжәүирҙе айырыуса йәлләй. Әпәүләп арҡаһынан һөйә-һөйә теләк теләй.

— Ҡәҙерлемдең ҡәҙерлеһе ҡәҙерһеҙгә ҡалмаһын.

Эх, исмаһам өләсәй генәһе иҫән булһасы!

Ҡәҙерле кешеләрен хәтерләүҙән бәғере һыҙлап ултырған малай баш осонда сырҡылдап өйрөлгән ҡошсоҡҡа иғтибар итә ҡуйҙы.

Әллә, юғиһә, өләсәһенең йәне шулай осоп йөрөймө? Булыр, булыр! Хәсрәт диңгеҙенә сумған ейәнен әүерәткеһе киләлер. Могайын, өләсәһе ожмах ҡошона әүерелгәндер. Ана бит, нисек талпына, бер алдына, бер артына өлтөрәп сыға. Уның күңелен йыуатырға итәме? Ҡуй, ҡәҙерлеләренең йәнен борсоп, былай бойоғоп йөрөү ярамаҫ. Мөжәүир ултырған дүрткел таштан торҙо. Көтөүсе ҡарап, унда-бында йөрөштөрөп килде. Малдары теүәл. Һорлан уларҙы ышаныслы һаҡлай.

Эх, асыҡтырған...

Мөжәүир былтырғы ошо ваҡыттағы муллыҡты күҙ алдына килтерҙе. Аралтау үҙәктәрендә еләк-емеш йыйып бөтөргөһөҙ уңды. Кинәнеп ашай торғайнылар. Ҡағын ҡойоу ҡайҙа, йыйып киптереү ҡайҙа. Ҡыйыҡ башы тулы шул әйберҙәр ҡайҙа булып бөткәндер?

Мөжәүир Аралтау яғына бойоғоп ҡараны. Быйыл унда еләк-емеш түгел, һарына ла осрамай. Бөтәһенә лә әлеге ҡоролоҡ сәбәпсе.

Бөгөн ямғыр яуһа икән! Силәктән ҡойғандай ҡойһон да ҡуйһын ине.

Ямғыр теләп күккә ҡараған малай ҡибла яҡта ҡолаҡсындай ғына болот остоғон күреп ҡалды. Тыны менән шул болотто тартып алырҙай булып ялбарҙы:

— Эй, илаһым, шул болот күлдәй булып ҡабарһын да бында йөҙөп килеп, силәкләп ҡойһон!



Ҡыцғырташ

* * *

Малай үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Баяғы болот ҡабарғандан-ҡабарҙы. Бер аҙҙан күк йөҙөн баҫып алды. Дымлы ямғыр еҫе иҫеп ебәрҙе. Бына-бына яуа тигәндә, Мөжәүирҙе үлтерә яҙып йоҡо баҫты. Үҙенән-үҙе күҙҙәре йомола. Малай ҙур булмаған оҙонса ташты яҫтап, ваҡ ҡырсынға ятып торорға итте, иҫке кәзәкейен төрөп эргәһенә ҡәҙерләп һалды. Таң менән торған, йонсоған бала шунда уҡ иҙрәп йоҡоға сумды.

Ҡойоп яуған йылы ямғырҙан күшегеп уянды Мөжәүир. Берәй ағас, йә ҡыуаҡ төбөнә барып ышыҡланыу булды тәүге уйы. Ямғырҙы өркөтөүҙән ҡурҡты ла, ҡуҙғалмай ята бирҙе. Үҙ алдына, тоҙ түгелмен әле, иремәм, тигән өләсәһенән ишеткән һүҙҙәрҙе ҡабатланы.

Бер аҙҙан сарсаған ерҙе буйтым һуғарған ямғыр болотон дыуамал ел ары ҡыуҙы.

Күңеле шатлыкҡа тулган малай тормаҫтан йәнә йоҡомһораны. Аҙаҡ ул йәнен дә, тәнен дә наҙлаган сикһеҙ кинәнестән уянды. Бер килке күҙҙәрен асырға баҙнат итмәй ятты, үҙе ниндәйҙер гәҙәттән тыш хәл буласагын һиҙенде. Бер аҙ ятҡас, ипләп кенә күҙҙәрен асҡайны, ни гәләмәт – аллы-гөллө йәйгор нуры эсендә ята икән дәһә. Әле күренгән хәлгә хайран ҡалган малай ҡарашын күк йөҙөнә йүнәлтте.

Бына әкәмәт! Ҡибла ягынан йәйгор ҡалҡҡан да, икенсе осо нәҡ Мөжәүирҙең башы осона төшкән дәһә. Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән мөгжизәгә тарыган малай башта ҡыбырларга ла ҡурҡып ятты. Бер аҙҙан, әҙерәк өйрәнгәс, тороп уҡ ултырҙы. Күңеле күтәрелде, хатта аллы-гөллө баҙыҡ төҫтәр менән уйнарга теләне. Башта уларҙы ҡуш усына йыйырга тырышты, тотоп ҡарарга итте. Ҡоласын йәйеп, ҡосаҡлап ҡараны. Йәйгорҙоң төҫтәре яҡындан бигерәк сагыу була икән дәһә: ҡыҙыл, зәңгәр, һары, йәшел, күк шәмәхә... Мөгжизәгә әкренләп күнегә барган малай хыял диңгеҙенә сумды. Уның йәйгор күперенән күтәрелгеһе, ете ҡат күктә ниҙәр барын белгеһе, күргеһе килде. Һис югы, ҡошҡа әүерелеп, йәйгорҙоң анау иң бейек дугаһына ҡунып, һайраһа икән! Бәхетһеҙҙәр, зарлылар уның йырын ишетер ҙә күңелдәрен йыуатыр... Иң беренсе уның һеңлеһе Мөьминә ишетһен, етемлеген онотһон ине.

Асыгыуын да онотторог, Мөжәүирҙең йәнен илаһи шатлыҡ биләне. Ул үҙен берсә әкиәт батыры, берсә ни теләһә, шуны башҡара алыр йән эйәһе итеп тойҙо. Өләсәһенең йәйгор тәхет тураһында һөйләгәндәре иҫенә килеп төштө.

– Беҙ, улым, ерҙең кендегендә торабыҙ. Ҡотло ерҙә. Борон был тирәлә ҙур-ҙур ҡалалар булган. Унда тик әүлиә, әмбиәләр йәшәгән, ти. Имеш, ана шул Хоҙайҙың изге күңелле бәндәләре Әхирәткә күскәндә йәйгор тәхеткә ултыра икән дә, шул ыңгайы йәне йәннәт эйәһенә әүерелә икән...

Шулай йәйгор нурына сорналып, татлы хыялдарга сумып ултырганда эргәһенә йүгереп килгән Теүәлбайҙың сәрелдәк тауышы ишетелде.

– Мөжәүир агай, агай! Тиҙ бул, тиҙ бул, ҡайта һал! Атайым әйтте, тиҙ булһын тине!

– Ни булды? Ипләп һөйлә! Ут сыҡтымы әллә?

Йән-фарман сабыуҙан тыны ҡурылған ҡустыһы өсөн борсолоп, Мөжәүир урынынан тора һалды ла ҡаршыһына атланы.

– Беҙгә алыҫтан бер мулла агай килде. Ҡаланан, ти. Һине таптыра, – тине ҡустыһы. – Көтөүҙе миңә ҡарауылларға ҡуштылар.

– Килһә һуң, ниңә шул хәтле сабаһың?

– Тиҙ булһын, тине атайым. Эләгә атыу икебеҙгә лә!

– Ярай һуң, – тине Мөжәүир. – Хәҙер...

Башта йәйғор менән хушлашырға теләгәндәй, баяғы ергә боролдо. Әммә аллы-гөллө нурҙан ҡойолған дуға күренмәне. Ҡапыл Мөжәүиргә күңелһеҙ булып китте. Эх, бынау Теүәлбайҙы! Шундай саҡта йөрөмәй торһа ни була?! Ғәжәйеп серле мәлдең бәсен ебәрҙе, ут бөрсәһе. Мөжәүир ашыҡмай ғына өҫтөндәге еүешләнгән кейемен һығып кейҙе, түбәтәйен ҡаҡты:

– Ауылда ямғыр шәп яуҙымы? – тип һораны үҙенә сабырһыҙланып текәлгән ҡустыһына ҡарап.

– Яуҙы, яуҙы. – Теүәлбайҙың ағаһы ығышлығына тамам йәне көйҙө. – Тиҙ бул, тим дәһә.

Мөғжизәле урындан киткеһе килмәгән Мөжәүир йәнә үҙен йәйғор иркәләгән ергә боролоп ҡараны. Һыҙат-һыҙат нурҙарҙы йәнә күреренә өмөтөн өҙгәс кенә, тау түбәненә йүгерҙе. Ялан аяҡтарының һөйәлләнгән табандары ғына ялт-йолт итеп ҡалды.

Ихатаға килеп еткәс, Мөжәүир өйгә инергә ашыҡманы. Кем икән ул? Ниңә уны эҙләтә? Ҡайҙан белә? Башынан төрлө-төрлө уйҙар үтте. Йәшенеп кенә ҡыҫыҡ ишектән өйҙөң эсен байҡаны. Урындыҡҡа ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн генә тотолған һуғылған ашъяулыҡ йәйелгән. Түрҙә, йомшаҡ түшәк өҫтөндә, таныш түгел ҡаҡсараҡ бер кеше ултыра. Ыҫпай кейеменә, ҡупшы һаҡал-мыйығына, ҡарҙай аҡ сәлләһенә ҡарағанда ҡунаҡ ябайҙарҙан түгелдер, ахырыһы. Өҫ-башының аламалығынан оялған малай ишек төбөндә бер талай тапанып торҙо. Атай ҡушҡанды тыңламай булмай. Ул ҡыйыуһыҙ ғына эскә атланы, тик ҡунаҡтан тартынып, ишек төбөнән ары үтмәне.

– Улым, кил, ҡунаҡ менән көрәш, – тине Уйылдан ағай. Күптән малай ишетмәгән йомшаҡ тауыш менән өндәште.

– Ә-ә-ә, һинме ни, әле генә ямғыр яуҙырған көтөүсе малай?! – Ҡунаҡ етеҙ генә урындыҡтан төштө лә, күҙҙәренән йылы нур бөркөп, малайҙың ҡаршыһына атланы, көрәшергә ике ҡулын һуҙҙы.

– Әссәләмәғәләйкүм!

– Вәғәләйкүмәссәләм! – Мөжәүир оялып ҡына ҡунаҡтың ҡулын ҡыҫты.

Ишан һынлы ишандың урындыҡтан төшөп улына ҡаршы барыуы, йолҡош бер көтөүсене әллә кем итеп ике ҡуллап тороп күрешеүе Уйылдан ағайға бик тә сәйер тойолдо. Ул ни эшләргә белмәне. Аптырағас:

– Имам хәҙрәттәре, ҡуйығыҙсы әле шуны, бала-сағаны ул тиклем ҡупырайтып ни... – Үҙе хәҙрәттең аҫтындағы түшәкте ҡағып, йомшартып һалды. Өлтөрәп түргә – табынға саҡырҙы:

– Ошонда ултырығыҙ. Сәйегеҙ һыуымаһын, имам хәҙрәт.

Әммә Зәйнулла ишан Уйылдандың һүҙҙәрен әллә ишетмәне, әллә иғтибарға алманы. Һаман Мөжәүир эргәһендә булышты. Малайҙың ҡулын усынан ысҡындырмайынса уның менән әңгәмә ҡорҙо.

– Исем-шәрифтәрең кем, улым?

– Мөжәүир булам.

– Мәслихәт. Исемең ни мәғәнә аңлатҡанын беләһеңме?

– Юҡсы.

– Уҡыусы, шәкерт тигәнде аңлата ул.

Зәйнулла ишан малайҙың йәшкелт нур сәскән үткер ҡарашлы күҙҙәренә һынамсыл төбәлде.

– Мәҙрәсәгә йөрөйһөңмө?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, малай саҡ әлептә таяҡ тип кенә белә. Ҡыҙарынды. Хәлен белеп торған ишан уның арҡаһынан һөйҙө.

– Уҡырһың, улым, уҡытырбыҙ. Бынан түбән яҙмышың өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алам.

Ниһайәт, ҡунаҡ баяғы урынына менеп ултырҙы ла эргәһенән Мөжәүиргә урын күрһәтте.

— Кил, улым, тамаҡ ялға, асыҡҡанһың бит.

Мөжәүир, атаһы баш ҡағып рөхсәт иткәс кенә, күрһәтелгән урынға барып ултырҙы. Тәҡәтһеҙ асыҡһа ла, ризыҡҡа талымһыҙланып ынтылманы. Әүлиәлек һәләте аша баланың нык йонсоғанын да, етемлек үҙәгенә үтеүен дә һиҙеп-белеп ултырған ишан малайҙың алдына бал, май яғылған икмәк һалды.

— Аша, улым!

Зәйнулла ишан Уйылданға шелтәләп ҡараны.

— Баланы нык әрһеҙләгәнһегеҙ. Улың – өлөшлө бала. Бынан ары уны ҡаҡшатма, әрһеҙләмә.

Үҙе ҡараштарын алыҫҡа төбәп, ниҙер иҫәпләп уйланып алды.

— Мөжәүир кеүек бала, Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса, ун-ун бер мөсәлгә бер тыуа донъяға.

— Мөсәл тиһеңме? – Уйылдан ғәжәпләнеп улына ҡараны.

— Эйе, мөсәл тим. Был 120–130 йыл тирәһе тигәнде аңлата, ҡорҙаш.

Ишан Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтенән ҡәнәғәт ҡалып, йәнә малайҙың һипкелле йөҙөнә, уйсанланып киткән күҙҙәренә төбәлеп ҡарай, арҡаһынан һөйөп ала:

— Иманым камил, был нәҡ мин күрергә ашҡынып килгән баланың үҙе, – тине ҡыуанып. – Хоҙайға шөкөр!

Зәйнулла ишанды пәйғәмбәр урынына күреп ихтирам иткән хужа үҙенә ҡунаҡтың һүҙ ҙә ҡушмауы, һаман итек башындай балаға мөкиббән китеүе эсен бошорҙо. Ишандың иғтибарын үҙенә йәлеп итеү өсөн генә, ахырыһы, ҡыҫҡырыбыраҡ әйтте:

— Ярар, ярар, ишан хәҙрәттәре, уҡытырмын, өҫ-башын да ҡараштырырмын.

Балаларының күмәк булыуына һылтанып, аҡланырҙан, һүҙ башларға иткәйне, Зәйнулла ишан, Мөжәүир менән һөйләшеүсе мөһимерәк һананы, ахырыһы, бөтә иғтибары тик балала булды.

Йомшаҡ мөғәләмәнән күңеле нескәргән Мөжәүир үҙенә шундай яғымлы ҡараған, бик аҡыллы күренгән ҡунаҡ ағайға барлыҡ эс серен, аһ-зарҙарын һөйләп биргеһе килде. Әле генә

булған ғәжәйеп хәлде, тау итәгендә йоҡлағанда йәйғорҙоң бер осо үҙенә килеп тоташыуҙы тасуирлап әйтеп бирергә, серен белешергә теләне. Тик усаҡ эргәһендә үҙенә бер сәбәпһеҙгә йәмрәйеп текләгән үгәй әсәнең зәһәр күҙҙәрен күреп, теле тотлоҡто. Мөжәүирҙең ни уйлағанын белеп-һиҙеп ултырған әүлиә малайҙың йәнә арҡаһынан һөйҙө.

– Бирешмәҫһең, бала, ин шәәъ Аллаһ. Бөгөндән башлап һинең тормошоң ҡырҡа үҙгәрәсәк. Бар, өҫ-башыңды алыштыр ҙа һине мәсеткә алып барам. Унда ил ҡарттары йыйылған булыр. Бер ыңғай һине күрһәтеп, таныштырып китәйем.

Өйҙән сыҡҡас, юлда барғанда, Зәйнулла ишан Мөжәүирҙән нисек ямғыр яуҙырыуын һораштсы.

– Ямғырҙы мин яуҙырҙыммы ни? – тине сикһеҙ ғәжәпләнгән малай.

– Эйе, ямғырҙы һин яуҙырҙың.

– Әйтәм дә аҙаҡ йәйғорҙоң осо өҫтөмә төшөп торҙо.

– Йәйғорҙоң осо төштөмө? Бәрәкалла! – Зәйнулла ишандың йөҙө тағы ла яҡтырып, балҡып китте. – Һиҙенеүем хаҡ булған. Бөгөн был изге төбәктә яңы әүлиә тыуған даһа. Бына ул бала! Эргәмдә бара.

Мәсет алдында ишан йәш дуҫын туҡтатты ла:

– Һин, улым, ҙур көс-ҡөҙрәткә эйә буласаҡһың. Шуға күрә гел ғәҙеллек, тоғролоҡ юлынан бар. Донъя малына ҡыҙыҡма. Хоҙайға һыйын. Һиңә ҡөҙрәт бирелеү менән бергә халҡыбыҙ яҙмышы өсөн оло яуаплылыҡ та йөкмәтелә. Ошо әйткәндәрҙе мәңге хәтереңдә һаҡла, – тине лә, теле осонда әллә күпме һорауҙар торған баланы үҙе артынан мәсеткә саҡырҙы.

Троицк ҡалаһындағы күренекле «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең өлкән мөдәррисе ишан-хәҙрәт Зәйнулла Рәсүлев ике йылға бер Муллаҡай мәҙрәсәһенә килеп, дин әһелдәре менән йыйылыш үткәрә, уҡыу-уҡытыу торошон белешә. Был юлы, биш йыл элек һалынып ҡулланыуға тапшырылған Манһыр мәсетенең хәлен дә белешеп ҡайтырға ниәтләне. Юлда барғанда әүлиәлеге ошо төбәктә бер өлөшлө ир бала йөрөгәнлеген әшкәртте. Баланы күрергә ашҡынып килгән ишан шуға мәсеттән дә алда Уйылдандарға боролоп инде. Ниһайәт, ул

теләгенә иреште. Егерменсе быуаттың буласаҡ күренекле әүлиәһе, ана, эргәһендә килә.

Зәйнулла ишан Мөжәүиргә ғорурланып ҡарай. Хәҙерҙән үк ямғыр яуҙырырлыҡ көзрәткә эйә ләһә уның йәш дуҫы.

Мәсеткә инеп, үҙен сабыр ғына көтөп ултырған аҡһаҡалдар, мулла, хәлфәләр менән күрешкәндән һуң, шатлығы эсенә һыймаған Зәйнулла ишан Мөжәүирҙе алдарына килтереп баҫтырҙы һәм бөтә халыҡ ишетерлек итеп, асыҡлап әйтте:

– Мөхтәрәм мосолман ҡәрҙәштәр, һеҙ ҡаршығыҙҙа бик даланлы, бик өлөшлө баланы күрәһегеҙ. Хоҙай Тәғәлә уға бөтмәҫ илаһи ҡөҙрәт биргән. Тик башта беҙгә уны уҡытырға кәрәк. Ҡөрьән Кәримде бала яттан белергә тейеш.

Үҙе Мөжәүиргә ҡарап алҡышланып-алҡышланып фатихаһын бирҙе.

– Аҡ күңелле, изге фиғелле, илгә изгелекле бул, бала! Ғүмерең халҡыңа, тыуған ереңә хеҙмәт итеп үтһен, ин шәәъ Аллаһ.

Ишан хәҙрәттәре шулай тине лә быға тиклем мәсеткә аяҡ баҫмаған баланы иң түргә, эргәһендә ятҡан мамыҡ түшәк өҫтөнә, ултыртып ҡуйҙы. Тик шунан һуң ғына мәсеттең эш торошон һорашып, ғәҙәти шөғөлөнә тотондо.

Манһыр мәсетендә йыйылыш ябылыуы булды, бая Зәйнулла ишан әйткәндәрҙе иҫендә тотҡан дин әһелдәре бәләкәс Мөжәүирҙе уратып та алды.

– Собхан Аллаһ, машаллa, бирһен Хоҙай, – тине мөрәүәтле изге күңелле Ғабдулла Сәйетов малайҙың арҡаһынан һөйөп: – Нисә йәш һиңә, улым?

– Ун тулды. – Мөжәүир үткер йәшкелт күҙҙәре менән хәҙрәткә тултырып ҡараны. – Баланың йөҙө нурлы, бар булмышынан ҡот күренә. Үҙен тотошо, ҡылыҡ-фиғеле олпатлы.

– Уҡығың киләме, улым? – тип һораны Иҙелбай мәсетенең ҡарый хәҙрәте Фәтхетдин. – Беҙгә уҡырға кил. Беҙҙең өсөн мыуафиҡ бер эш булыр.

Таулыҡайҙан Хәлил мулла ла һүҙгә ҡушылды:

– Беҙҙең мәҙрәсәгә юллан, шат булырбыҙ.

Зәйнулла ишандың малайға мөкиббән китеү сәбәбен күрергә теләгәндәй, Хәсәндән килгән йәш ахун Ғабдулла

Биишев та Мөжәүиргә ҡыҙыҡһынып төбәлде һәм ихлас ҡәнәғәтлек менән әйтте:

– Остазыбыҙ юраған юш килһен, ин шәәъ Аллаһ.

Шул саҡ мәсет мөдәррисе мөтәүәллиһе менән эштәрен тамамлап, Зәйнулла ишан да былар эргәһенә килеп ҡушылды.

– Мөжәүир улым, һин дә, әйҙә, беҙҙең менән, – тине. Уның малайҙы эргәһенән ебәргеһе килмәй ине.

– Сәй эсеп алайыҡ та, Иҙелбай ҡарйаһына юлланырбыҙ, – тине мәҙрәсә хужаһы Әфтәхетдин ҡарый хәҙрәткә һораулы ҡарап. – Әҙерһегеҙме?

– Рәхим итегеҙ, Зәйнулла хәҙрәт!

– Унан һуң Муллаҡай, Таулыҡай мәҙрәсәләренә һуғылырбыҙ. Һин, Мөжәүир улым, беҙҙең эргәлә йөрөп, донъя күр, ил ағалары менән таныша йөрө.

Малай Иманай битләүендә ҡалдырған көтөүен иҫләне. Ҡустыһы Теүәлбай малды таратып ебәрмәһә ярар ине лә. Һорланды тыңлата алырмы?

Шулай ҙа Мөжәүир мөхтәбәр шәхестең әйткәнен тыңламай булдыра алмай. Ул дәрт-дарманы ташып, бөтә тирә-яҡтағыларҙы үҙенә ҡаратып торған ир уртаһы Зәйнулла ишанды яҡын күреп өлгөрҙө.

Мөжәүирҙең күңеле үҫте, илһамы артты. Ниндәй көн булды был! Бая ямғыр яуып, өҫтөнә йәйғор осо төшөп торҙо. Зәйнулла ишан уны мәсеткә етәкләп алып килде, төшөнә лә инмәҫ оло заттар менән осраштырҙы. Уларҙың йылы ҡарашын тойҙо, йомшаҡ, яғымлы һүҙҙәрен ишетте. Һуңғы ваҡытта рәнйетелгән күңеле, туңғаҙыған йәне яйлап ирей, ҡыуанысҡа тулыша.

Атаҡ, атаҡ, төшлөктәге ҡояш нәҡ уға ҡарап йылмая лаһа! Уҡ-саҡтылар уның битенә, ҡулына килеп ҡуна ла, Мөжәүирҙе нурға мансый. Ҡояш, ҡояш! Һин дә мине яратаһыңмы әллә? Миңә бәхет юрайһыңмы? Ә ҡояш тағы ныгыраҡ көләсләнә. Ҡашын һикертеп, шаяртып күҙен ҡыҫа. Эйе, эйе, мин һине яратам, тигәндәй башын һелкә. Эй, илаһым, донъя ниндәй ҙә матур. Мөжәүирҙең ошо ҡәҙерле, ғәзиз ерҙә оҙаҡ-оҙаҡ йәшәгеһе килә. Яҙмышы нисек булыр? Зәйнулла ишан:


Йәмле Урғаҙа йылғаһы

«Илаһи ҡөҙрәт бирелеү – Хоҙай Тәғәләнең һиңә оло һынауы, оло яуаплылыҡ ҡушыуы», – тигәйне.

Ун йәшлек кенә Мөжәүир үҙендә ошо һынауҙарҙы үтеп сығырлыҡ көс тойҙо. Бөгөн ул балалыҡтан сығып, ир-ат ҡорона, иман, мәғрифәт нуры таратыусылар рәтенә баҫты түгелме?

## Ғилем эстәгәндә

Троицкиҙағы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең данлыҡлы ишаны Зәйнулла Рәсүлев былтыр Манһырға килгәнендә Мөжәүирҙе:

– XX быуаттың буласаҡ әүлиәһе, – тип нарыҡлағайны. Был өлөшлө баланың мәҙрәсәгә килерен Иҙелбай ауылы ахуны Фәттәхетдин хәҙрәт ҡыш буйы көттө лә һаман хәбәре булмағас, ат егеп бер көндө үҙе юлланды. Олуғ шәхес танып

хуплаған малайҙы тиҙерәк үҙ ҡанаты аҫтына алмаһа, аҙаҡ остазы күҙенә нисек ҡарар Фәттәхетдин?

Буйтым ҡул араһына ингән, эшкә ҡатынҡы улын Уйылдан эргәһенән ебәрергә теләмәй ине. Башта атай кеше ҡаршылашты.

– Шул хикмәтле Троицк ишаны килеп баланың башын бутап китте. Әрһеҙләмәгеҙ, имеш. Йәнәһе, өлөшлө бала. Имеш, буласаҡ әүлиә...

Ҡартлас ҡыҙғандан-ҡыҙҙы:

– Беҙҙең һымаҡ ауыҙын асһа, үпкәһе күренергә торған ярлы балаһы ҡасан уҡып мулла була алды? Анау Янғаҙы ауылының Тажетдин хәлфәһе һымаҡ йөрөр йә Аллаһҡа, йә муллаға була алмай, эш мәйеле белмәй.

Уйылдан ҡапыл шулай ҡырлы-мырлы торһа ла, хәҙрәт һынлы хәҙрәт үҙе ялбарып торғас, тағы уйланды.

Күңелен күптән өйкәгән бер хис уның тиҙ ризалашыуына сәбәпсе булды. Атай кеше үгәй әсәнең холоҡһоҙлана барыуын, балаларына көн күрһәтмәүен күреп эсе боша. Нисек тә быға сик ҡуя һалырға кәрәк тип уйлай. Тауҙан таш артмай. Үҙенеке үҙенә ғәзиз. Етемдәрен бынан ары рәнйеттермәҫкә кәрәк. Ҡатыны, ниңәлер, Мөжәүиргә ҡаныға. Тик торғанда бәйләнеп, эй туҙына.

– Сәгер күҙ, мәсекәй, – ошондай әр, төрлө мыҫҡыл һүҙҙәре теленән төшмәй.

Уйылдан быndай саҡтарҙа улын йәлләй. Әле шуларҙы иҫләп, ауыр көрһөндө. Иҙелбайға уҡырға төшһә, исмаһам, үгәйҙең игәүенән ҡотолор.

– Ярар, бар, улым, – тине. – Әҙерлән.

Уҡырға атлығып торған малай атаһының ымын аңғарыуы булды, «һә» тигәнсә йыйынып, биштәрен арбаға сығарып та һалды. Сәй эсергә туҡтаған хәҙрәтте, өйгә кире инмәй, йөрәкһеп, ҡапҡа төбөндә көттө. Атаһының кире уйлап ҡуйыуынан ҡурҡты. Ниһайәт, Фәттәхетдин хәҙрәт өйҙәгеләр менән хушлашып, егеүле торған аты эргәһенә яҡынланы. Мөжәүирҙең үҙен көтөүен күреп, ҡәнәғәт ҡалды һәм атын Олоһаҙ яғына борҙо. Аллаһ бирһә, үҙе белгән тура юлдан бер нисә сәғәттә ҡайтып та инерҙәр.

Иҙелбай ахуны үҫмерҙе ҡапылда үҙ өйөнә алып ҡайтып

торорға булды. Уның Ғибаҙулла тигән үкһеҙ етем аҫрауы бар. Мәҙрәсәгә бергәләп йөрөрҙәр. Икәүһенә күңеллерәк булыр, тип уйланы. Йорт-ҡура ҡарашырҙар, йәйен көтөүен көтөрҙәр.

Хәҙрәттең уйлағаны ысынға тура килде. Малайҙар бер-береһен шунда уҡ оҡшатты. Бер аҙҙан айырылмаҫ йән дуҫҡа әйләнделәр. Фәттәхетдин хәҙрәт ғаиләһенә лә малай тиҙ ылыҡты. Киң күңелле абыстай уға үҙ улындай эҫенде. Эшкә әрһеҙ, зирәк малайҙарҙы дини ғаилә ана шулай ихлас һыйындырҙы үҙенә.

Белемгә һыуһаған малайҙар уҡыуға сат йәбеште. «Әфтиәк»те ярты йылда тамамлап, артабан Ҡөрьән сүрәләренә күсте, бер юлы ғәрәп телен дә өйрәнделәр.

Уҡыуҙарының икенсе йылында малайҙар «Рисаләи Ғәзиз», «Буҙйегет», «Йософ китабы» кеүек әҫәрҙәрҙе һыу эскәндәй уҡый ала ине. «Шөрүтөссалә» (намаҙ тәртибе), «Тәғлимөссалә» (намаҙ ғилеме), «Төхфәтелмөлөк» (диндең биш шарты) әсбаптарын да еңел үҙләштерҙеләр.

* * *

Уҡып йөрөүҙәренең өсөнсө йәйе ине. Мөжәүир менән Ғибаҙулла Илсебикә итәгендәге ҡарағаслыҡта ҡыуыш ҡороп, Фәттәхетдин хәҙрәттең малын көтөп яталар. Улар һыйырҙарҙы ебәрәләр ҙә, үҙҙәре хыялға сумып, киләсәк тураһында һөйләшәләр. Бер шулай күктәге өйкөм-өйкөм аҡһыл болоттарға ҡарап ята торғас, Мөжәүир:

– Минең анау дөйәгә оҡшаған болотҡа ултырып донъя гиҙгем килә, – тине. – Күкте лә, ерҙе лә ете ҡат, тиҙәр. Ниҙәр бар икән унда?

– Ә минең, малай, мәғдәнсе булғым килә. Ер аҫтында ниҙәр бар икәнен белгем килә. Элек йоҙроҡтай алтын киҫәктәре Ирәндек тауы башында, беҙҙең Балтатауҙа түшәлеп ятҡан икән, тиҙәр. Сит-яттар белеп ҡалып, ташып бөтөргән, имеш, ти. Һинең Рәмиевтар тураһында ишеткәнең бармы? Алтын приискылары бар, ти. Зимагур Хәмит ағайым йыл да йәйен шунда барып яллана.

– Рәмиевтарҙы күргәнме?

– Ҡайҙан?.. Уларҙың иллеләгән приискыһы бар, һәр ҡайһыһына барып тора алмай, ти.

Ғибаҙулла агаһынан ишеткән-белгәндәрен тағы бер аҙ сурытты ла өҫтәп ҡуйҙы:

– Беләһеңме, малай, минең шул Рәмиевтар кеүек бай булғым килә. Шахталар тотоп, шуларға үҙем хужа булып йөрөһәм, ай-һай!

Мөжәүир дуҫына сәйерһенеп ҡараны.

– Башың йомро, – тине. – Ә мин донъя малына ла, байлыҡҡа ла ҡыҙыҡмайым тим. Хыялым – табиплыҡ. Хәстәләрҙе (ауырыу), ғәриптәрҙе һауыҡтырыу, аяҡҡа баҫтырыу, етемдәрҙе бәхетле итеү. Йәнә әсәйҙәр үлмәһен ине. Кәрәк саҡта ямғыр яуҙырғым килә.

– Теләп кенә ямғырҙы яуҙырып булмайҙыр ул, малай.

– Була!

– Нисек?

– Хәҙер... Ҡарап тор.

Мөжәүир тыны менән тартып алырҙай булып баш осонда өйөрөлгән бер аҡһыл ғына болотҡа текләне. Балаларса һамаҡлап та алды:

– Ямғырым, яу, яу, иген үҫһен тау-тау!

Ышанһаң – ышан, ышанмаһаң – юҡ, баяғы болот ҡайнап, ҡабарып күк йөҙөн ҡаплап алды һәм күкрәп ямгыр яуа ла башланы. Мөжәүирҙең кирамәт тыуҙыра алыу һәләтлегенә һаман ышана алмаған Ғибаҙулла ҡыуыш эсенә йүгереп ингәс, көлөп, шаяртты:

– Әтеү һин ямғырҙы туҡтата ла алаһыңдыр әле.

Мөжәүир етди ине.

– Ҡарап ҡарайыҡ, – тине, әлегә тиклем һис тә былдай эшкә тотоноп ҡараганы булмаһа ла йәнә күккә ҡараны. Ҡулдары менән болотто ҡыуған хәрәкәттәр яһаны.

– Таралығыҙ, болоттар! Беҙгә ямғыр кәрәкмәй! Ары ағылығыҙ! Китегеҙ!

Яуын нисек тиҙ яуа башлаһа, шулай тиҙ туҡталды. Быны күргән Ғибаҙулланың гәжәпләнеүҙән күҙҙәре шарҙай булды.

– Малай, китсе, ысынмы? Һин әллә сихырсымы?

– Юҡ, түгел.

– Әтеү... нисек улай?

– Миндә ниндәйҙер илаһи ҡөҙрәт бар. Ул миңә йәйғор аша бирелде.

Мөжәүир иң яҡын дуҫына Иманай тауында көтөү көткәндә булған хикмәтте түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Иғтибар менән тыңлап бөткәс, күҙҙәре осҡонланып киткән Ғибаҙулла, урынынан һикереп торҙо.

– Малай, Зәйнулла ишан үҙе әйткәс, һиңә артабан уҡырға кәрәк. Иҙелбайҙа башланғыс белем генә бирәләр. Һин Муллаҡайға бар. Уҡып, йәнә ғилем эстә, ғилем ал... Ана, Фәттәх ахун һөйләне ләһә, Ғабдулла Сәиди Стәрлебашта 12, Бохарала 11 йыл уҡыған. Һин дә уҡып ҙур хәҙрәт бул, Мөжәүир.

– Һин дә уҡы, малай. Уҡымайынса ҡалай итеп мәғдәнсе булаһың?

– Әллә көҙгә Муллаҡайға тәүәккәлләйекме? Унда мәғдәнселеккә лә өйрәтәләр ти ҙәһә.

– Мин риза ла ул. Тик аҡса юҡ.

– Миндә лә шундай хәлдәр бит.

– Әллә Фәттәхетдин хәҙрәт менән кәңәшләшеп ҡарайыҡмы?

– Уйлашайыҡ әле.

Ошо һөйләшеүҙән һуң малайҙар Муллаҡайға барыуҙы өҙмәне лә ҡуйманы. Йәй буйы уҡырға барыу тураһында баш ватты, төрлөсә пландар ҡорҙо. Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына.

Сентябрь урталары ине. Көн аяҙ, сыуаҡлы. Иҙелбай мәҙрәсәһенә башына аҡ сәллә ураған, өҫтөнә билләп тегелгән бәрхәт кәзәкей кейгән, олпат ҡиәфәтле, оҙон буйлы алтмыш йәштәр тирәһендәге бер ир кеше килеп инде. Был Муллаҡай мәсетенең һәм мәҙрәсәнең имам-хатибы, мөдәррисе Ғабдулла Сәиди ине.

Ул башта ахун хәҙрәт менән, аҙаҡ шәкерттәр менән күрешеп сыҡты ла, Мөжәүирҙе танып эргәһенә туҡтаны. Үҫмерҙең ҙурайып, матурланып китеүен күреп ҡыуанды.

– Олораҡ мәҙрәсәгә китеп уҡыу теләге юҡмы, улым? – тип һораны.

Мөжәуиргә шул ғына кәрәк ине. Йәшкелт көрән күҙҙәре балҡып китте.

– Теләгем бар, тәҡсир! – тине ҡайнар хис менән. – Минең һеҙҙең һымаҡ ҡөҙрәтле табип булғым килә. Эргәһендә ҡыйыуһыҙ ғына торған дуҫына ла күрһәтте:

– Ғибаҙулла мәғдәнсе булырға теләй. Беҙ Муллаҡайға барып уҡыу тураһында көнө-төнө хыялланабыҙ.

Ғабдулла Сәиди Ғибаҙуллаға һынап ҡарап торҙо ла ҡәнәғәт ҡалды. Был малайҙың да зирәклеге, уҡырға теләге күҙенән күренеп тора.

– Бик шатмын, шәкерттәр, – тине Мөжәуирҙе юллап килгән хәҙрәт. – Әләйһәң икегеҙ ҙә йыйынығыҙ.

– Беҙҙең мәҙрәсә табиплыҡҡа ла, мәғдәнселеккә лә, иҫәп-хисапҡа ла, тел ғилеменә лә өйрәтә, төрлө һөнәр ҙә бирә. Беҙгә нәҡ һеҙҙең кеүек белемгә һыуһағандар кәрәк, – тине Ғабдулла Сәиди.

Һөйләшеүҙе ишетеп торған Фәттәхетдин ахун да һүҙгә ҡушылды.

– Хуплайым, хәҙрәт, хуплайым. Икеһе лә ифрат һәләтле, итәғәтле балалар. Рәт сығасаҡ. Киләсәктә абруйлы белгестәр булып китерҙәр, Аллаһ бирһә.

Муллаҡайҙың имам-хатибы айырылмаҫ дуҫтарҙың икеһенә бер юлы өндәште:

– Йыйынығыҙ, бер ыңғай алам да ҡайтам. Хәйерле сәғәттә ҡуҙғалырбыҙ.

Бер-ике сәғәт үтеүгә улар Ирәндек һыртына күтәрелеп баралар ҙа ине инде. Күсер атты ҡыуалай. Алтын һыуына мансылғандай һары япраҡлы ҡайындар изге теләк теләп оҙатып ҡалғандай, шыптыр-шыптыр килешеп, бышылдаша. Бәхетле малайҙарҙың да үҙ-ара серләшеп сере бөтмәне. Ә хәҙрәт иһә тәрән уйға сумған. Ике ут күҙ малайҙы алып ҡайтып барыу, уға үткән ғүмерен иҫенә төшөрҙө.

...Ҡасандыр, бынан утыҙ йылдар самаһы элек, ошо үҫмерҙәр кеүек ул да белем эстәп Стәрлебаш яҡтарына юл алғайны. Ғаилә ҡорҙо. Ниһайәт, 1870 йылда тыуған ауылына ҡайтып, мәҙрәсә асыу насип булды. Әлбиттә, эш башлап ебәреү еңелдән булманы. Мәҙрәсәгә яңы бина кәрәк ине. Халыҡҡа рәхмәт, иғәнә йыйҙы, Рәмиевтар ныҡ ярҙам итте.

Яңы мәсет төҙөлдө, ин шәәъ Аллаһ, шәкерттәре лә һынатмай, гел яҡшы эштәре ишетелә. Тимәк, яңы ысул менән уҡытыу үҙен аҡлай. Әле лә бынамын тигән ике шәкертте ултыртып ҡайтып килә. Мөжәүире бигерәк теремек. Табип булғым килә, тип атлығып тора. Үҙ уйҙарынан, уңыштарынан кәйефе күтәрелепме, бара торғас Ғабдулла хәҙрәт күкрәк тауышы менән матур итеп йырлап ебәрҙе.

*Арҡа өҫтәренән каруан килә,*
*Бохаранан түгел, Хиуанан,*
*Мал байлыҡҡайҙарым булмаһа ла,*
*Шәкерттәрем күпкә ҡыуанам.*

Мөжәүир менән Ғибаҙулла йырҙы тын алырға ҡурҡып тыңланы. Бына һиңә бер асыш: буласаҡ мөдәррестәренең күңеле тулы хазина икән дәһә.

* * *

Егет ҡорона тулып барған, ҙур хыялдар менән йәшәгән Мөжәүир менән Ғибаҙуллаға Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡыу баштан уҡ оҡшаны. Был нәҡ улар уҡырға хыялланған мәктәп икән. Дин уҡытып ҡына ҡалмайҙар, донъяуи фәндәргә лә төплө иғтибар бирелә. Дауалауға, табиплыҡҡа, мәғдән серҙәренә, һәр төрлө оҫталыҡҡа ентекле өйрәтәләр. Балта оҫтаһы, тимерселек, балсыҡтан буяуҙар яһау, йәшелсә, емеш-еләк үҫтереү, тәрбиәләү – былар бөтәһе лә тормош өсөн кәрәкле шөғөл мәҙрәсәлә уҡытыла.

Кемгә нимә оҡшай, Мөжәүирҙең күңеленә табиплыҡ серенә төшөнөү хуш килә. Ул бында им-том, арбау серҙәренән тыш, үләндәр менән дауалауҙы өйрәнеүгә ентекле туҡтала. Ҡайһы үләнде ҡасан йыйырға, ниндәй сирҙе дауалағанда ҡулланырға кәрәклекте белгәс, шифалы үлән-сәскә эҙләп йәш Мөжәүир Һаҡмар йылғаһы буйҙарын, туғай-болонлоҡтарҙы гиҙә. Тау итәктәрендә, үҙәктәрҙә була. Ниндәй генә шифалы үлән юҡ икән! Серен белһәң, һәр үлән, һәр сәскә, тамырҙар дауа икән. Хатта аяҡ аҫтында түшәлеп ятҡан бәпкә үләненә

тиклем ун төрлө сирҙән килешә, ти. Артышы ни тора! Ҡайыны – хазина! Еләк-емештәрен ни тиерһең? Баланы ҡаныңды таҙарта, ҡайын еләген бер туйғансы ашаһаң, йөрәгеңә ҡыш буйы етерлек көс бирә. Үҫмер бында уҡығанда тыуған яғын өйрәнеп, хозурлығына хайран ҡалып, уны мәңгелеккә яратты.

Дауалау һөнәренең байтаҡ серҙәренә төшөнә алған Ғабдулла Сәиди хәҙрәт, әлбиттә, медицина фәнен дә һис инҡар итмәй. Әммә табиплыҡ фәне дингә нигеҙләнергә тейеш, тигән фекерҙә ныҡ тора. Дарыу менән генә дауалап булмай торған сирҙәр була, ти. Ҡайһы табиптың нервыһы сирлене, психик ауырыуҙы, быуманы һауыҡтыра алғаны бар? Йә, әйтегеҙ әле? Юҡ бит, юҡ! Шуға күрә ҡайһы бер рәнйеүҙәр (ауырыу) тик им-томға, арбауға, өшкөрөүгә нигеҙләнергә тейеш, ти хәҙрәт. Балаға күҙ тейгән. Илай, тәҡәт итмәй. Әсә дауаханаға алып бара. Алға китеш юҡ. Аптырап, йонсоп барған балаһын хәҙрәткә алып килә. Мулланың бер ихласлап өшкөрөүе етә, бала башта күҙен аса, унан йүгереп тә китә. Шуға ни тиһең инде?

Арбауға оҫта хәҙрәт нисә тапҡыр шәкерттәре алдында йыландан сағылып, үлергә ятҡан әҙәмдәрҙе кире аяҡҡа баҫтыра. Нисә тапҡыр быума сирлене һауыҡтырҙы, хатта һуҡырҙарҙың күҙен асты.

Мөжәүир, табиплыҡ серен өйрәнеүгә мөкиббән киткән шәкерт, ер ямғыр һыуын нисек һеңдерһә, хәҙрәттең дауалау оҫталығын үҙенә шулай һеңдерҙе.

Муллаҡай мәҙрәсәһендә биш намаҙ мотлаҡ һанала. Хәҙрәт шәкерттәренә намаҙ уҡыуҙың, теләк теләүҙең, илгә, ер-һыуға, үҙеңә, ғаиләңә именлек һорауҙың зарурлығын башта уҡ төшөндөргәйне. Шуға уҡыусылар араһында намаҙ тәртибен боҙоусы булмай.

Бер йомала Ғабдулла хәҙрәт ошо мәсетте һалырға ярҙам итеүселәргә, айырыуса Рәмиевтарға рәхмәт әйтеп, доға ҡылдырҙы. Йәйге айҙарҙа шәкерттәр уларҙың приискыһына барып эшкә төшә ала, тине. Мәгдәнсе булырға хыялланған Ғибаҙуллаға етә ҡалды был хәбәр.

– Әйҙә, малай, йөрөп ҡайтайыҡ, Рәмиевтарҙы күрербеҙ, – тип Мөжәүирҙе өгөтләй башланы. Дуҫын яңғыҙ ебәргеһе

килмәгән егет ризалыҡ бирҙе. Йәй етеү менән улар юлға сыҡты.

Май урталары ине. Хәллерәк шәкерттәр мәҙрәсәнән тарала башланы. Ярлыраҡтары ҡалып, эшкә ялланыу тураһында уйлашты. Егет ҡорона тулып килгән ете-һигеҙ шәкерт берләшеп, Рәмиевтарҙың алтын приискыһына барырға әҙерләнә башланы. Ғабдулла хәҙрәт:

– Иң хосуллы прииск – Айҙарлы. Унда Ҡадирова Хәнифә тигән белешем управляющий булып тора. Минән сәләм әйтерһегеҙ. Һеҙҙе эшкә алыр, торлаҡҡа ла урынлаштырыр, – тине һәм Мөжәүирҙең ҡулына хат тотторҙо.

Айҙарлы приискыһы Орский өйәҙендә – 18, Кваркино өйәҙендә 122 приискыһы булған Рәмиев Закирға ҡарай. Ул Урал йылғаһынан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан. Йәйәүләп бер аҙнала барып етергә була икән.

Юлда туҡтап ҡуна-ҡуна, һораша-һораша аҙна тигәндә йонсоған шәкерттәр, кисләтеп кенә саҡ Айҙарлыға барып инде.

Алтын сыҡҡан ерҙәр ҡобараһы осоп ҡотһоҙлана икән, унда ендәр эйәләй, төн булһа, баяғы ен балалары ҡыҙҙар исемен әйтеп сыр-сыу килеп уйнайҙар икән, тип ишеткәндәре бар ине шәкерттәрҙең. Ысынлап та, Айҙарлы тирәһе йәмһеҙ ине. Әйтерһең, аяу белмәгән ендәр ерҙең ҡыртышын кимергән, ҡайҙа ҡарама аҡтарылып ташланған һары балсыҡ өйөмө. Ирәндек буйындағы матур, еләк-емешле тауҙарға, хәтфәле болондарға өйрәнгән егеттәр, был яҡты һис тә үҙһенмәне.

Ҡаршыларына осраған бер матур ғына ҡыҙҙан улар буйҙаҡтар ятағын һораны. Шунда инеп ҡунырға булдылар. Арып талсыҡҡан егеттәр арлы-бирле ҡапҡыланы ла, ҡаҡ һике өҫтөнә теҙелешеп ятты. Күбеһе шунда уҡ йоҡлап та китте. Йәнәш ятҡан ике дуҫ ҡына йоҡлап китә алмай ғазапланды. Тәҙрәнән төшкән ай яҡтыһына ҡарап ята торғас, хыялға бирелгән Ғибаҙулла:

– Их, малай, йоҙроҡтай алтын тапҡанда! Икебеҙгә лә мәҙрәсәне уҡып сыҡҡансы етер ҙә ҡуйыр ине. Анау балсыҡ араларын ҡараштырып йөрөрбөҙ әле, йәме, – тине.

Иртәгеһен шәкерттәр хәҙрәт өйрәтеп ебәргән управляющий ҡатынды эҙләп китте. Прииск конторaһы ятаҡтан әллә ни



**Баш ауыртыуҙан доға-бетеү**

*(Мөжәүир хәҙрәттең үҙ кулы менән яҙған доғаһы.)*

алыҫ түгел икән. Инергә ҡыймай торғанда бер мыҡты ир килеп сыҡты ла:

– Һеҙгә ни кәрәк? – тип һораштьı.

– Ҡадирова Хәнифә апай кәрәк ине.

– Ул килеп етмәгән, көтөгөҙ, – ирекәй үсеккәндәй ҡырт боролоп китеп барҙы.

Бер аҙҙан һомғол буйлы, дуғаланып торған ҡара ҡашлы, зәңгәр күҙле, ап-аҡ йөҙлө 35–40 йәштәр тирәһендәге һылыу ҡатын эш эҙләүселәр эргәһенән өндәшмәй үтеп китте лә конторағa инде.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс йәнә пәйҙә булды ла:

– Һеҙ әллә эш эҙләп килдегеҙме? – тип һораны. Егеттәр бер тауыштан:

– Эйе, апай, – тине.

Шәкерттәр управляющий Хәнифә тигәндәре ошомо икән әллә, тип аптырашып торған арала Мөжәүир остаздары Ғабдулла хәҙрәт ебәргән хатты ҡулына илтеп тотторҙо. Ул теге хатты уҡыған арала «ни тиер, эш булһа ярар ине» тигән уй менән бөтәһе лә тулҡынланып һылыу ҡатынға текләне.

Хәнифә етди төҫ менән бер аҙ уйланып торҙо ла, әйтте:

– Һеҙҙе ҡапылда көнләксе генә итеп алмаһаҡ... Ҡарарбыҙ, эшкә барымығыҙ булһа, шахтаға ла төшөрөрбөҙ. Беҙҙә бик ауыр. Кәйлә, көрәк менән эш итәбеҙ.

Хәнифә ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрен саҡыртып алды ла:

– Муллаҡай мәҙрәсәһе шәкерттәре. Ғабдулла хәҙрәт үҙе ебәргән, – тип «Ғабдулла хәҙрәт» һүҙенә айырым баҫым яһап, ихтирамлы тауыш менән әйтте. – Егеттәргә эште күрһәт, өйрәт.

Ете ят ерҙә үҙҙәрен тартып тороусы кеше табылыуға ҡыуанған эшкә ялланыусыларҙың эсенә йылы инде.

– Бәлки, аҡсаны мул ғына эшләп булыр, – тип тә уйлап алдылар.

Управляющий ярҙамсыһы уларҙы кешеләр мәш килеп эшләп йөрөгән быуа яғына табан әйҙәне лә буш торған вашгердтар эргәһенә килтереп туҡтатты.

– Ошонда эшләрһегеҙ. Ҡарап торођоҙ ҙа, өйрәнеп алғас, башларһығыҙ.

Ауыр эшкә күнекмәгән егеттәр тәүге көндәре нык арыны. Аяҡтарын саҡ һөйрәп ятаҡҡа килеп йығылдылар. Тик Ғибаҙулла ғына бирешмәне. Алтын табыу уйы уны балсыҡ өйөмдәрен ҡыҙырырға алып сыға һалып та китә. Дуҫының алтын менән үтә мауығыуын хупламаған Мөжәүир ятаҡта тороп ҡалды.

Тимер иләктең бер яғынан икенсе яғына йүгертеп таш ҡатыш балсыҡты йыуғанда, араһында баҙлап киткән шырпы осондай ғына ялтыр таштарҙы күреп, күҙе осҡонлана Ғибаҙулланың. Управляющий апайҙың:

– Вашгердтағы алтынға тейә күрмәгеҙ, хужа ярлыҡамаҫ, – тип киҫәтеп әйтеүен дә дуҫы онотоп ҡуя буғай. Алтынға мөкиббән китеүен күргән Мөжәүир тегенең еңенән тарта:

– Эшлә, эшлә!

Вашгердт тирәһендә ун көнләп йөрөгәс, егеттәрҙең ҡатынҡы икәнен күргәс мастер, ниһайәт, уларҙы шахтаға ебәрергә булды.

Күберәк аҡса эшләүҙәрен әллә ни күреп, шахтаға төшөргә ҡыҙыҡҡан шәкерттәр, иртәнсәк эшкә дәртләнеп әҙерләнде. Тик бадьянға ултырып бауға тотоноп ер аҫтына төшә башлағас ҡына йөрәктәрен ҡурҡыу биләне. Ҡояш нурының бер атҡыһы ла үтеп инә алмаҫ тәрәнлектә ҡулыңа көрәк йә кәйлә тотоп нисек эшләмәк кәрәк? Кире сығып булмаһа? Шахта емерелеп, ҡом, балсыҡ араһында ятып ҡалһаң? Абау, ҡурҡыныслығы! Шомло ҡараңғылыҡ артҡандан-артты. Ниһайәт, Мөжәүир менән Ғибаҙулла ултырған бадьян «дыңҡ» итеп ергә барып терәлде. Был ваҡытта бәләкәй генә лампаларын тоҡандырған эшселәр штольнялар буйлап, үҙҙәренең забойҙарына табан тарала башлағайны.

– Әйҙәгеҙ, – тине егеттәргә урта йәштәрҙәге бер ир. – Һеҙ мин аҡтарған балсыҡты шахта ауыҙына ташырһығыҙ. Ҡабат өндәшеп тормай, штүлкә буйлап эргәһенә барған кәйләһе менән ҡом ҡатыш балсыҡты умыра ла башланы. Мөжәүир менән Ғибаҙулла аяҡ аҫтына ҡуптарылып төшкән балсыҡты көрәк менән күнәктәргә тултыра башланы.

Ҡараңғы штольнялар буйлап шахта ауыҙына табан атлау ҙа еңел түгел икән. Башты, ҡулды ташҡа бәреп бөтәһең, рудалы күнәк ауыр. Мөжәүирҙең былдай эшкә сыныҡмаған ҡулдары

өсөн күнәктәр көс еткеһеҙ. Ә Ғибаҙулла ауырлыҡты, әйтерһең, һиҙмәй. Ул хатта забойсы туҡтап торғанда, кәйләһен алып, балсыҡ ҡатламдарын аҡтарғылап ҡараны.

— Шыйығыраҡһың, ҡусты, — тине ир кәйләһен кире алып. — Бына ошолай итеп һелтәнергә кәрәк уны, — тине лә сосолоп торған ташлы урынды умырып та алды.

Ғибаҙулла самородок түгелме икән тип, ҡом араһындағы һары таштарҙы ла алғылап ҡарап йөрөнө. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, самородок осраманы. Хазинаны тапһа ла барыбер үҙенә булмаҫ ине. Шахтанан сыҡҡанда энәһенән ебенә тиклем тикшереп сығаралар. Шуға күрә берәү ҙә хазинаға ҡул һуҙырға баҙнат итмәй.

Тәүге аҙна ауыр булһа ла, егеттәр яйлап күнегә барҙы. Ике айлап эшләп тә алдылар, байтаҡ бол да тупланды. Бына ҡайтыр саҡ та яҡынланы. Шуныһы ҡыҙғаныс, килгәндән алып самородок табырға хыялланған, алтыны йыуылған соҡор-саҡыр өйөмөн ҡалдырмай эҙләнгән Ғибаҙулланың уйы һаман барып сыҡмай. Мөжәүиргә дуҫы йәл ине. Нисек кенә уға ярҙам итергә? Үкһеҙ етем генә бит үҙе. Әҙәм булырға тырышып ята. Бер көндө шахтаға төшкәс, ниндәйҙер эске һиҙемләүе менән забой юлындағы ҡомло балсыҡты көрәге менән соҡоп аҡтара башланы.

Унан бармаҡ башы ҙурлыҡ һәлмәк һары таш килеп сыҡҡас, үҙе лә аптырап китте. Бәй-бәй, самородок таһа. Даланлы Ғибаҙулла... Мөжәүир ташты ҡулъяулығына төрҙө лә салбар кеҫәһенә тыҡты. Муллаҡайға ҡайтып барғанда бойоҡҡан дуҫына тотторор, әйҙә күңеле булһын. Алтынға бай был шахтанан сыҡҡан берәүҙе, әлбиттә, тентейҙәр. Ә бына Мөжәүирҙе күптән тикшергәндәре юҡ. Сөнки быны ул үҙе теләмәй. Моғайын, уны серле көс һаҡлайҙыр. Уйлағаны гел алдына юш килеп кенә тора лаһа.

* * *

Бер көндө Мөжәүир йоҡоһонан шөбһәләнеп, ниҙәндер күңеле һеркелдәп уянды. Ят, сәйер, шомло хис йәнен биләне.

Ҡараңғылы-яҡтылы саҡ. Ҡояш ҡалҡмағайны әле. Ул арлы-бирле кейенде лә ашығып тышҡа сыҡты.

– Зиләйлүк, һайт!

– Лилләйлүк, тайт!

– Әү-әукәй, Сибәркәй!

– Зәп-зәүкәй, Сибәркәй!

– Һин ҡайҙа, Айзифа?

– Мин бында, Буйзифа!

Атаҡ-атаҡ, таң һарыһында кемдәр унда сырҡылдаша? Егет тирә-яғын байҡаны, әммә тере йән әйәһе күҙенә салынманы. Ә сыр-сыулаған тауыштар һаман ишетелә. Шул саҡ Мөжәүирҙең башына: «Әллә ен ҡыҙҙары уйнаймы икән?» – тигән уй килде. Уйлауы булды, алдында еҙҙәй һары сәсле, йәшел күҙҙәре янып торған бер төркөм сибәр ҡыҙҙар пәйҙә булды. Улар алдарында һыу һөлөгөндәй егетте күреп уға яҡынлашырға самаланылар. Егеттең ҡапыл зиһене яҡтырҙы, үҙендә серле бер көс тойҙо. Ул ҡыҙҙарҙың матурлығына ышанмаҫҡа тейешлекте аңланы. Әҙәми булмаған заттарға ул ҡаты, бойороҡло итеп өндәште:

– Нимә бында зыҡ ҡубаһығыҙ? Ҡана әле ҡайыш сыбыртҡыны! Һыҙырып, үҙегеҙҙе тау аҡтарырға йә көнө буйы иләкләп һыу ташырға, сәсегеҙ менән ер һеперергә ҡушайым.

Был һүҙҙәрҙән ен ҡыҙҙары ныҡ шөрләне, ахырыһы. Араһынан һушты алырлыҡ бер сибәр ен ҡыҙы Мөжәүирҙең эргәһенә килеп ялбарҙы:

– Зинһар, абзый, сыбыртҡылама. Беҙ һиңә бер сер сисәбеҙ.

– Ниндәй сер ул? – Егет, сибәркәйҙең ялбырап арҡаһынан таралған оҙон сәсенән эләктереп алды: – Тиҙ әйт сереңде!

Ҡыҙ сәсенең йолҡонорҙай итеп ауыртыуына сыҙай алмай айҡашты.

– Әйтәм, әйтәм! Ебәр генә, абзый!

– Башта әйт.

– Йә, ярар, әйтһәм, әйтәйем.

Ен ҡыҙының күҙҙәре баҙрап торған күмерҙәй осҡонланды.

– Бөгөн һеҙ эшләгән шахта емерелер. Ер аҫтына төшмә, егет, һәләк булырһың.

– Ҡайҙан белдең?

– Атам-әсәм шайтан туйына әҙерләнә... Улар берәй шахта емерелһә, илереп күңел аса.

Егет әле генә ишеткән хәбәргә ышанырғамы, юҡмы тип уйға сумып албырағаи арала, әрһеҙ ен ҡыҙы унын муйынына һарылырға маташты. Һырпаланып:

– Егет, мине яратсы, – тине, үбергә итеп ирендәренә ынтылды. Ул арала иҫен йыйып өлгөргән егет:

– Тфү, мәлғүн, хәҙер юғал күҙ алдымдан, – тип доға уҡып, тирә-яғына төкөрөндө лә, ҡыҙҙың матҡып тотҡан сәсен ысҡындырып, үҙен осора этеп ебәрҙе.

– Мәлғүн, һине эйәләштерһәң, әллә нимәгә тарытырһың.

Ҡәһәтләнгән ҡыҙ зәһәр ыҫылданы:

– Юлымда осрарһың әле, меҫкен әҙәм балаһы. Әсир булып, шәреле юлдан барғанда, мине иҫләрһең!

Мөжәүирҙең әрһеҙ ен ҡыҙына тамам асыуы килде.

– Белеп ҡуй, – тине. – Юлымда тағы осраһаң, сыбыртҡылап үҙеңде эшкә ҡушырмын. Йәйрәп ятҡан бесәнемде сабып бирерһең. Тауҙан тауға таш ташырһың. Яҡшы саҡта, бар, һыпырт бынан, иблис ялсыһы!

Әллә Мөжәүирҙән ҡурҡып, әллә офоҡтан күренгән ҡояштың тәүге нурҙарынан өркөп, ен ҡыҙы күҙҙән юғалды. Сыр-сыулаған тауыштар ҙа алыҫлашты. Донъя һил булып ҡалды.

Егет уйға батты. Ысынлап та, шахтаның емерелеүе ихтималмы? Терәүҙәр бик күбәйгән, улар шығырлап та ҡуйғылай. Мөжәүир башҡаса инеп ятып торманы. Тәһәрәт алып иртәнге намаҙын уҡыны ла Ғибаҙулланы уятты. Хәлде уға һөйләп бирҙе.

– Управляющий Хәнифә апайға әйтә һалырға кәрәк, – тине дуҫы. – Әйҙә конторағa барайыҡ әле.

Башта управляющийҙың Мөжәүиргә ышанғыһы килмәне. Шахта емерелеп ҡуймаһын, тип ҡурҡҡан забойсылар һүҙенә төшәлер, тип уйланы. Егеттең, тишерҙәй булып үтә ҡараған, уттай янған йәшел-көрән күҙҙәренә ҡарап торғас, йәнә икеләнде. Был егет хикмәтле күренә. Тыңлау, һынап ҡарау дөрөҫ булыр.

Управляющий сәғәт һигеҙ тулыр алдынан бөтә приискы эшселәрен саҡыртып еҙ колоколды ҡаҡтырҙы. Йыйылған халыҡҡа:

– Бөгөнгә берегеҙ ҙә шахтаға төшөп йөрөмәйһегеҙ. Быға тиклем кемдәр унда булган, яңы шурфтар ҡаҙыу эшенә бараһығыҙ, – тине.

Күпте күргән Хәнифә үҙе лә шахтаның эсе селтәрләнеп бөтөүен ишетеп-белеп йөрөй, былдай шахталарҙың күпкә бармаҫын аңлай.

Көндөҙ, төшкө аш мәлендә, туптан атҡандай ауыр гөрһөлдәү тауышын ишетеп, эшселәр аптырап ҡалды. Нимә булды был? Тәжрибәле шахтерҙар һиҙенде:

– Шахта емерелде, – тине берәү. Ҡурҡыныс хәбәр шунда уҡ раҫланды. Эйе, шахта емерелгән икән. Бөтәһе бер юлы управляющийҙың үҙҙәрен шахтаға төшөрмәй, икенсе эшкә ебәреүе тиккә булмауын иҫенә төшөрҙө.

– Хәнифә әүлиәме икән әллә? – тине йыйылған халыҡ араһынан бер ир иҫе китеп. – Шахта емерелерен алдан белгән бит.

Әлбиттә, хәлдең асығын берәү ҙә белмәне. Мөжәүирҙәр үҙҙәре лә һөйләнеп йөрөмәне.

Баяғы хәлгә өс-дүрт көн үтте. Шурф ҡаҙып йөрөгән Мөжәүирҙе конторағa саҡырттылар.

Өҫтәл артында ҡағыҙҙар аҡтарып яҫы ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, ҡупшы һаҡал-мыйыҡ ебәргән, башына нағышлы түбәтәй кейгән 35–40 йәштәр тирәһендәге ир кеше ултыра. Мөжәүирҙе күргәс, ихтирам күрһәтеү йөҙөнән, урынынан торҙо. Егеткә ҡаршы атланы, күрешеү өсөн ике ҡулын һуҙҙы.

– Әссәләмәғәләйкүм! Мин Мөхәммәтзакир булам. Закир ғына тиһәң дә була, – тине.

– Вәғәләйкүмәссәләм! Мин Мөжәүир атлымын, – тине шәкерт.

– Ултыр, Мөжәүир, – Рәмиев ҡаршыһындағы йомшаҡ креслонан урын күрһәтте.

– Һин беҙҙе оло ҡазанан ҡотҡарҙың бит әле, Мөжәүир туған, – тине Закир, көр ҡалын тауышы яғымлы яңғыраны. Үҙе ишекле-түрле йөрөп алды. – Рәхмәт һиңә, мосолман

ҡәрҙәшем, меңрәхмәт. Ниндәй теләгең бар, әйт, барыһын да үтәйем.

Мөжәүирҙең шунда уҡ Ғибаҙулланың хыялы иҫенә төштө.

– Теләгем бар, бай әфәнде, дуҫым Ғибаҙулланы мәғдәнселеккә уҡытырға ине. Ул бала саҡтан мәғдән менән һаташа. Бында ла тырышып эшләне.

– Һеҙ Муллаҡай мәҙрәсәһенән бит әле, – тине Закир бай һүҙҙе икенсегә борборараҡ.

– Эйе.

– Ғабдулла Сәиди хәҙрәт ни хәлдә? Ул минең остазым. Шакир ағайым менән икебеҙҙе уҡытты. Мәғдән серҙәрен дә яҡшы өйрәтте. Иҫ киткес белемле кеше. Уны үҙем дә, туғандар ҙа бик ихтирам итәбеҙ.

– Бында эшкә беҙҙе хәҙрәт үҙе ебәрҙе.

– Рәхмәт яуһын. Ишеткәйнем.

Закир йәнә баяғы өҙөлөп ҡалған һүҙгә ҡайтты.

– Теләгең изге. Үҙеңдән алда дуҫыңды ҡайғыртыу ифрат яҡшы сифат. Һин миңә оҡшаның, Мөжәүир. Уйлашырбыҙ. Дуҫыңды Петербургтағы Тасимов училищеһына уҡырға ебәрербеҙ. Тик үҙе риза булырмы?

– Әлбиттә, риза буласаҡ. Бар хыялы – мәғдәнсе булыу.

Баянан бирле ситкәрәк ҡарап һөйләшкән Закир бай, Мөжәүиргә тура төбәлде. Йәшкелт күҙҙәрҙең янып тороуын, үтә ҡарауын шәйләп ҡалды. Илһамлы йөҙөнөң нурланып тороуы ла уның күҙ уңынан ысҡынманы.

– Әллә һиндә күрәҙәселек һәләте бармы, туғаным? – тине Закир егетте торған һайын ныҡыраҡ оҡшатып.

– Бәлки, – тине Мөжәүир.

Закир байҙың ихласлығын күреп, егет бала саҡта үҙҙәренә атаҡлы Зәйнулла ишандың килеүен, үҙен өлөшлө бала тип атауын һөйләргә ымһынды. Әммә уңайһыҙланды.

– Ҡасаныраҡ юлға сығырға йыйынаһығыҙ?

– Яңынан ун-ун биш көндән.

– Һеҙҙең арттан остазыма бүләк ебәргем килә. – Закир бай кеҫәһенән сылбырлы алтын сәғәт сығарып, Мөжәүиргә һондо.

– Ошо аманатты тапшыра күр, туған! Ҡайтыр саҡта әйтерһең, һеҙҙе үҙем ат менән ебәртермен.

Икеһе лә бер аҙға һүҙһеҙ ҡалды.

– Мөжәүир туған, бынан ары һиңә үҙем стипендия түләп уҡытырмын, – тине Закир.

– Ҡуйығыҙсы, – Мөжәүир ысынлап уңайһыҙланды. – Ғибаҙуллаға ярҙам итеүегеҙ өсөн дә рәхмәтлебеҙ.

– Һеҙгә ярҙам итеү миңә бер ни шайы түгел. Илленән ашыу мәсет төҙөттөм, иҫәпһеҙ-һанһыҙ шәкерттәргә ярҙам бүлдем. Хоҙай йомарт булған һайын бирә, Аллаһҡа шөкөр.

Мөжәүир ҙә уны хуплағандай итеп:

– Ғабдулла хәҙрәт тә, ошо мәсетте Рәмиевтар төҙөттө, тип йома һайын һеҙгә уңыш теләп, шәкерттәрҙән доға ҡылдыра.

– Остазыма мин үлгәнсе бурыслы, – тине Закир. – Хәҙрәткә шуны ла асыҡлап еткерерһегеҙ, йәме.

– Рәхмәт, бай әфәнде, изгелегегеҙ Хоҙайҙан ҡайтһын.

Күңеле нескәргән Мөжәүирҙең ҡапыл зиһене яҡтырып ҡуйҙы һәм Мөхәммәтзакирҙың бөтә яҙмышы ап-асыҡ булып күҙ алдына баҫты.

– Һеҙҙең исем халыҡ араһында бик оҙаҡ йәшәр, – тине шәкерт һыуға ҡарағандай алдында торған кешенең киләсәген күҙаллап. – Изгелектәрегеҙ барыбер онотолмаясаҡ.

Мөжәүир 15–20 йылдан һуң да приискы хужалары менән ни булырын күрҙе. Тәне семерләп, теле тотлоҡто. Илдәге ҡыр-талаш, үлеш, ҡыйралыш, түңкәрелеш – ниндәй ҡурҡыныс. Рәмиевтарға ул саҡтарҙа еңел булмаҫ. Ғазаптар үҙәктәренә үтер. Ергә һибелгән ҡиммәтле мәғдән кеүек ҙур ғаилә төрлөһө-төрлө яҡҡа тырым-тырағай сәселеп һибелерҙәр, ә бына ейәндәре-бүләләре олаталарын онотмаҫ. Бер ваҡыт хатта һәйкәл һалырҙар.

Һуңғы күңелһеҙ хәлдәрҙе Мөжәүир һөйләп торманы. Ҡапыл үҙгәргән кәйефенең сәбәбен үҙенә шундай изгелектәр эшләргә әҙер торған кешегә һиҙҙергеһе килмәй, урынынан торҙо.

– Һеҙҙе үҙем оҙатып ҡала алмамдыр. Управляющийға әйтеп ҡалдырырмын, – тине. Кеҫәһенән алып егеткә күп кенә аҡса һондо.

– Ал, туған, кәрәге тейер.

– Рәхмәт, әфәнде. Изгелегегеҙҙе ғүмерҙә онотмам.

Закир Рәмиев менән һөйләшеү Мөжәүиргә ныҡ тәьҫир яһаны. Ҡайһы берәүҙәр уны бай тип күрә алмай. Баҡһаң, ниндәй йомарт, күңелсәк, ихлас кеше.

Мөжәүир кеҫәһендә ятҡан самородок киҫәген ҡапшап ҡараны. Бына ул да байҙың байлығы быныӊ менән генә кәмемәҫ тине лә, бармаҡ башындай алтынды һалып алды. Әлбиттә, изге уйҙан: Ғибаҙулланы уҡытыр өсөн. Шулай ҙа Мөжәүир дөрөҫ эшләмәне. Егеткә оят ине. «Иртәгә үк самородокты емерелгән шахта егенә алып барып ырғытайым. Йәшереү хыянат... Ин шәәъ Аллаһ, ана, Хоҙай үҙе Ғибаҙуллаға ярҙам ебәрҙе. Уҡыу йорто ҡапҡалары үҙе асылырға тора.

Мөжәүир үҙендә еңеллек тойҙо, тыны иркенәйҙе. Кеҫәһендәге бүләктәрҙе ҡапшап торҙо ла ятаҡ яғына ашыҡты.

Ин шәәъ Аллаһ, былай барһа уға артабан уҡыу ҡыйын булмаҫ. Ҡөрьәнде лә ятҡа белер, им-том, дауалау серҙәренә лә ентекле өйрәнер. Хоҙай үҙе алдына сығарып биреп кенә тора лаһа, ин шәәъ Аллаһ.

## Сөмбәлә

Июль баштары. Иртәнге һалҡында ыратырға тырышып, Сусаҡтауҙа берәү еӊ һыҙғанып бесән саба. Кем икән ул? Бәй, Уйылдан ҡарттыӊ мулла улы Мөжәүир ҙәһә. Собханаллаһ, ҡайһылай күркәм егет булып киткән. Ул буй-һын, ул төҫ-баш, ул күҫ-ҡеүәт. Һелтәгән һайын ҡалын бакуйҙы ҡайыра ла һала. Көн үҙәге етеп, ҡояш тәҡәтһеҙ ҡыҙҙыра башлағансы шулай баш ҡалҡытмай эшләне ул. Тағы бер ҡайырымдыӊ осона сыҡты ла, салғыһын ҡуйып, ҡайынлыҡҡа атланы. Ундағы ҡыуыш эсендә томра үткәнсе ял итеп алмаҡ булды. Тамаҡ ялғап, айран эсеп алғас, егет шулай ҙа ҡыуыш эсендә оҙаҡ сыҙап ултыра алманы. Урғаҙа буйына төшөп үтәй инә үләнен йыймаҡсы, туйғансы еләк ашап килмәксе булды.

Быйыл еләк уңған. Суҡ-суҡ тәлгәштәре сапҡан һайын ҡайырым араһында түшәлеп ятып ҡала. Ни саҡлы күҙе ҡыҙһа ла, Мөжәүир уларҙы өҙөп ҡапмай. Күңеленән «эш ҡалдырғыстар» тип асыуһыҙ ғына шелтәләп ала ла, ҡолас ташлап



Мөжәүир хәҙрәт йәшәгән йорт

сабыуын белә. Аллаһ бирһә, был бесән ике-өс көндән кибеп тә сығыр, унан күбәләй башларҙар.

Байманлыҡҡа рәхәтләнеп, сәскә еҫе һеңгән һауаны күкрәк тултырып һулай-һулай, егет еләклеккә табан атланы.

Сеү! Туҡта! Кем ул унда? Хур ҡыҙындай бер сибәркәй сүгәләп еләк йыйып йөрөй. Егет баҫҡан ерендә ҡатты ла ҡалды. Ниндәй ҡыҙ икән ул? Ҡайҙан? Ниңә быға саҡлы уны бер ҙә осратмаған? Ҡыҙҙан ҡараштарын айырып ала алмаған егет, ҡыбырларға ла ҡурҡып, һаман тора бирҙе. Һоҡланһын өсөн Хоҙай яралтҡан затмы был, юғиһә? Яңы тыуған айҙай ҡыйылып киткән нескә ҡара ҡашы, ап-аҡ нәфис йөҙө, бешкән еләктәй бүлтәйеберәк торған ирендәре шундай һутлы, шундай килешле. Ҡыҙ үҙен күҙәтеүсе барын һиҙмәй ҙә, һаман еләк йыйыуын белә. Алдына төшөп ҡамасаулаған толомдарын нәзәкәтле хәрәкәт менән арҡаһына һалғанда сәс сулпылары серле сылтырай. Ҡайһы ауыл ҡыҙы икән? Исеме нисек?

Ғәлсекеме, Йәнйегетме, әллә Фәйзулланыҡымы? Моғайын, Фәйзулла ҡыҙылыр. Сибәр ҡыҙҙар бары ошо ауылдан, ти бит өйләнергә мөҙҙәте еткән егеттәр. Эшкә лә уҡған, холоҡҡа ла ирәбе тип, ошо ауыл ҡыҙҙарын күҙләйҙәр. Осҡонланып киткән күҙҙәрен һаман ала алмай торғанда, ниҙер һиҙенгәндәй, ҡыҙ тороп баҫты. Һай, буйғынаһының зифалығы! Әйтерһең, йәш ҡайынҡай. Мөжәүирҙең ғүмерендә тәүге тапҡыр ҡатын-ҡыҙ затына шулай йотлоғоп бағыуы... Еңгәйҙәре димләп ҡараған ҡыҙҙарҙың береһен дә күңеле хушһынманы. Ә был ҡыҙ! Тиңһенерме ул Мөжәүирҙе? Шундай матур. Әллә ер ҡыҙы түгелме? Әллә берәй... сихри затмы, юғиһә? Ен ҡыҙҙарын да күргәне бар уның. Тик уларҙың сибәрлеге күңелдә ытырғаныу хисе уята: еҙҙәй ерән сәстәрен ялбырлатып, сәгер күҙҙәрен бәзерәйтеп, әрһеҙ кыланып инеп баралар. Ә ер ҡыҙҙары иһә инсафлы. Уларҙың матурлығында илһамлылыҡ бар, гүйә, наҙ бөркөлә уларҙан.

Тирә-яғын байҡап торған ҡыҙ, үҙенә кемдеңдер төбәлеп ҡарауын тамам һиҙҙе, нәҡ егет торған яҡҡа боролоп ҡараны. Әҙерәк кенә ҡаушап торҙо ла, тиҙ генә күнәгән беләгенә элә һалды һәм ашығып Фәйзулла ауылына бара торған һуҡмаҡҡа тартылды. Шул саҡ Мөжәүир телгә килде:

– Һылыу, ҡурҡма минән, – тине ипле генә итеп. – Мин Манһыр егете Мөжәүир, анауында бесән сабам.

Ҡыҙ атлауынан туҡтап, ҡыҙыҡһынып эргәһенә яҡынлашҡан егеткә ҡараны.

– Мөжәүир? Ысынлапмы? – Ҡыҙ егеткә һынсыл ҡараш ташлағайны, уның ҙур яҡты күҙҙәренең серлелегенән арбалып, ҡойолдо ла төштө. Шулай ҙа һыр бирмәҫкә булды, бер ни булмағандай алсаҡ ҡына һөйләшеп алып китте.

– Ике туған апайым Гөлзифа һеҙҙең ауылда кейәүҙә ләһә.

– Ирйегет ағайымдамы?

– Эйе.

– Улайһа, һин миңә ҡоҙаса булаһың.

– Әлләсе...

– Ҡоҙасаның исемен ҡоҙаһына белеү фарыздыр?

– Сөмбәлә булам.

– Сөмбәлә? – Егетте был ят, ғәҙәти булмаған аһәңле исемдең яңғырашы хайран итте.

– Йондоҙ исеме, буғай. Ниндәй матур.
– Өләсәйем ҡушҡан. Ул гел шулай ҡыҙҙарға йондоҙ исеме ҡушырға ярата.
– Танышайыҡ, Сөмбәлә, мин Мөжәүир ҡоҙаң булам.
– Ә мин һине беләм. Апайым һөйләгәне бар.
– Нимә ти? Буйҙаҡ егет, кәләш эҙләй, тимәйме?
Ҡыҙ, егеттең күҙҙәрен ялтыратып, мут йылмайыуын күреп, уның һуңғы һүҙҙәренә яуап биреп тә тормай, ҡапыл ашығырға кереште.
– Эй, Аллам, онотоп тик торам, өләсәйем мине юғалтҡандыр әле. Янына, ҡана, бара һалайым.
Ҡыҙ егет яғына өҙҙөрөп бер ҡарап алды ла түңәрәк аҡландың икенсе осона юрғаланы.
– Өләсәйем, моғайын, анау ҡушҡайын тәңгәлендәлер.
Ҡыҙ артынан бара биреп, егет ҡысҡырып ҡалды.
– Сөмбәлә, иртәгә лә бында eләккә кил! Киләһеңме? Мин көтәрмөн!
Бер күреүҙән бөтә ҡайнар йәшлек хисе менән ғашиҡ булған егет күҙҙән юғалғансы ҡыҙ артынан ҡарап ҡалды. Eләк өҙөп ҡабырға ла онотоп, ҡыуышына табан атланы.
– Ниндәй сибәр ҡыҙ! Күҙҙәре йондоҙҙай яҡты!
Мөжәүиргә, Хоҙай Тәғәлә бөтә гүзәл затҡа тәғәйенләнгән матурлыҡты бары тик ошо бирәүгә, Сөмбәләгә, бүләк иткәндәй тойолдо. Сәсендәге сулпылар сыңлауын ишеткәндәй булып, йөрәге ярһыны. Ҡыҙҙың сымыры буй-һыны, тулған айҙай нурлы йөҙө күҙ алдынан китмәне.
Фәйзулла ауылы ҡыҙы тиген, ә?! Анау тауҙы аша төшһәң Фәйзулла инде. Уны икенселәй Шүрәле тигән исем менән дә атап йөрөтәләр.
Тауҙар ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған Фәйзулла ауылын ҡалын урмандары заманында шүрәлеләр аҫрап ятҡан, тиҙәр. Мөжәүир, халыҡ араһында киң таралып, телдән телгә күсеп һөйләнелеп йөрөтөлгән Фәйзулла ауылына бәйле төрлө ғибрәтле хәлдәрҙе иҫләп алды.
...Борон заманда ауылда Фәйзулла тигән бай йәшәгән. Ялсылары уға: «Бай ағай, аттарға әллә ни булды, көндән-көн йонсой, кибә, иртәнсәк тороуға аҡ күбеккә сумып, ҡара тиргә

батып ҡайтып инәләр», – тигәндәр. Хәйләкәр бай шунда уҡ уларҙы төндә кемдәрҙеңдер менеп йөрөүен һиҙә. Кистән бер нисә аттың арҡаһына ыҫмала ҡойҙортоп ҡырға ҡыуа. Иртән тороп ҡараһалар ат һайын ҡара йөн баҫҡан шәп-шәрә шүрәле ҡыҙҙары, ти. Ҡайһылары шунда уҡ өҙгөләнеп-йолҡҡоланып, аттан төшөп урман шырлығына инеп ҡаса. Ә бер шүрәле бисәһе бигерәк ныҡ йәбешкән, һис төшөрлөк рәте юҡ, ти, байғоштоң. Көнө буйы ат өҫтөндә ултыра теге. Урамда сыр-сыу килеп уйнаған бала-сағаға ҡарап берсә илай, берсә ҡыуанып көлә, ти. Үҙе:

– Ай, ике тешле Ҡайраным, – тип бер туҡтауһыҙ ҡабатлай, ти. Үҙенең имсәгенән сорлап һөтө ағып ултыра икән. Ауыл бисәләре тегене йәлләп ыҫмалаға уҡмашҡан йөнөн ҡырҡ-ҡылап меҫкенде ысҡындыралар ҙа ирекҡә ебәрәләр.

Шүрәләләр бынан һуң да аҡылға ултырмай, ти. Һаман да аттарға ла тейә, урманға барған егет-еләнде, ҡыҙ-ҡырҡынды баҫтыра. Оҙон бармаҡтарын һелкелдәтеп:

– Әйҙә, ҡытыҡлаш уйнайыҡ, – тиҙәр икән.

*Ҡытыҡ-ҡытыҡ-ҡытыҡай,*
*Әйҙә уйнайыҡ, ҡыҙыҡай.*

Ана шулай көйләп бер ҡыҙҙы тотоп алған, ти, шүрәле. Тегене ҡытыҡлай башлаған икән, меҫкен ҡыҙ тәҡәт итә алмайынса, шарҡылдап көлә лә көлә, ти. Тамам көлөп хәле бөтөп килгәндә, бәхетенә, бер һунарсы егет килеп сыҡҡан. Ул шүрәлегә төҫкәп атып та ебәргән, тегеһе ҡыҙҙы ысҡындырып, күҙ алдында юҡҡа сыҡҡан.

Шул уҡ көндө бер шүрәле егете байҙың ниндәйҙер байрамда ат сабышына тип әҙерләп торған бәйге айғырын әлһерәткәнсе менеп йөрөп, алып килеп ташлаған, ти.

Йәне көйгән Фәйзулла бай әйткән: «Тамам биҙрәтте ләһә был шүрәләләр. Урманға үрт һалығыҙ. Шунда улар ҡурҡып ҡасып бөтәр». Ауыл халҡы «Урманым – йылы юрғаным», тип әллә нисә күрһә лә, байҙы тыңлап риза булған, ти.

Ҡара Урман өс йыл буйы янған. Ҡышын туҡтап тора ла йәйен тағы тоҡанып янып китә икән. Шулай итеп, Манһыр

менән Фәйзулла араһындағы йырып сыҡҡыһыҙ ҡалын урман янып бөтә. Янып бөтөр алдынан ғына шүрәлеләр урмандан ҡасҡан, ти. Илай-илай һамаҡлап Шүрәле йылғаһы буйында ултырғандарын күреүселәр ҙә булған, ти, имеш.

*Төштөшәүи үбәһи,*
*Һәкүкәри — әрари,*
*Һәкөкөри — гизраһи,*
*Шүрәл, гәйри ансари,*
*Әбел йосоп тәм-тәни.*
*Шүрәл, Шүрәл, Шүрәлһыу*
*Төптәрендә алтын бар.*
*Шүрәлтауҙың башында*
*Байгусҡалдың ҡәбри бар.*

Шулай һамаҡлаған, ти тегеләр. Береһе:

– Мәғдәнебеҙ ҡала бит, ай. Кешеләр хужа була бит, вай, – тип илай икән.

Ысынлап та, Ғабдулла Сәиди хәҙрәт тә:

– Манһыр менән Фәйзулла араһы, Шүрәле йылғаһының буйынан буйына алтынлыҡ, – тигәйне. Тик ундағы алтын балсыҡ, ҡом араһында түгел, ә ап-аҡ ташҡа уралып ята икән.

Шулай итеп, Манһырҙан һигеҙ саҡрымда ғына ятҡан был ауыр сергә сорналған, легендаға әйләнгән урын булған. Ҡыҙҙарының да сихри серлелеге шунан киләлер, бәлки. Бер күреүҙән егеттәрҙе арбап, үҙҙәренә ғашиҡ итә ала бит, әйтәгүр.

Ҡыҙҙы бер минутҡа иҫенән сығара алмаған егет иртәгеһен уны көнө буйы көттө. Ҡыҙ иртәгенән һуң да, унан ары ла күренмәне. Көтөп сабырлығы бөткән егет, бында ниндәйҙер ғилләә барлығын тойоп алды. Күңеле әшкәртте. Уны бер бай ир ҡарпырға тора икән. Егет, хискә бирелеп, бер сараһын күрмәй йөрөһә, ҡыҙҙан ҡолаҡ ҡағасағын аңлай ҙа шунда уҡ Ирйегет ағаһына хәлде аңлатып, Гөлзифа еңгәһе менән икеһен Сөмбәләнең ауылына ебәрҙе. Барыусылар шул көндә үк барыһын да һорашып белә. Мерәҫ ауылы байы ҡыҙҙы икенсе бисәлеккә һората, ошо арала әйттерергә килергә тейештәр икән. Ата-әсәһенә баса тун, баса күлдәк, бер көтөү йылҡы малы, бер нисә һауын һыйыр бирергә вәғәҙә иткән.

Гөлзифа Сөмбәләне күреп һөйләшкән икән, күнгән ҡыҙ:

– Атам-әсәм ҡушҡас, мин ни эшләй алам, – ти икән.

– Һинең менән беҙҙең Мөжәүир ҡыҙыҡһына, әле еҙнәң менән мине күреп һөйләшергә ебәрҙе, – тигәс, ҡыҙҙың күҙ йәштәре ялтырай.

– Тамам килешеп бөткәндәр. Беҙ тигәнсә булмаҫ шул, – тип апаһын ҡосаҡлап илаған.

Сөмбәләнең тын алышын һиҙгәс, Мөжәүир уны теге байға икенсе бисәлеккә бирҙермәҫкә булды. Үҙенең тылсым көсөн ҡулланып булһа ла, ҡыҙҙы һаҡларға тырышты.

Бына гираси холоҡло Мерәҫ байы йүнәтелеп, Фәйзуллаға килергә сыға. Әпек ауылын ғына үткәйне, ни күҙе менән күрһен, ҡаршыһына биш-алты ажар бүре килеп сыға ла, арбалағы байға ынтылырға итә. Әммә ҡурҡҡан аттар үрәпсеп саба, йыртҡыстар ҙа ҡалышмай баҫтыра башлай. Атын кире бороп, саҡ ауылына ҡайтып йығыла «кейәү».

Теге бай икенсе тапҡыр юлға сығам тип торғанда, йәшен йәшнәп, күк күкрәп ямғыр ҡойоп яуа. Өсөнсөгә ынтылғанда егеп барам тигән күркле аты ҡасып китеп харап итә.

Байҙың күңеленә, ул ҡыҙҙы алып уңмам, ахыры, гел тиҫкәре килә лә тора, тигән уй төшә. Ул үҙен: «Һылыулығы менән һыу буйламам әле», – тип йыуата ла, шул ыңғайы ҡыҙҙан төңөлә.

Мерәҫ байын көтөп тә, килмәй ҡалыуына нық ғәрләнгән ата-әсә ҡыҙын һорап килгән Мөжәүиргә ҡуш ҡуллап риза булалар. Мерәҫ байы һымаҡ эре ҡыланмаһа ла, старатель булып эшләп, мәһәрлек йыйған була ул. Атаһы менән йәнәшә бәләкәйерәк булһа ла, өй һалып керәләр.

Әйттереү, оҙатыу, ҡушыу йолаларын үтеп, Мөжәүирҙең ҡарағай еҫе аңҡып торған өйөндә икәү генә ҡалғас, Сөмбәлә һүҙ башлай:

– Һине хикмәтле, тылсым эйәһе тиҙәр. Шул ысынмы? Әллә теге Мерәҫ байын берәй нәмә эшләттеңме?

Мөжәүир көлә:

– Теләйһеңме, һиңә лә бер кирамәт күрһәтәм, – ти. Сөмбәләнең алдында бала имеҙеп ултырған тас үҙе һымаҡ

ҡатын пәйҙә булды. – Был һин, беҙҙең бәпесебеҙ менән, – ти. Ҡатынын ҡосаҡлап ала. – Ғүмеребеҙ, һаулығыбыҙ булһа, балаларыбыҙ күп булыр.

– Һин тылсымлы булғас, кирамәттәр күрһәтә алғас, беҙ бик бай йәшәрбеҙ, шулаймы, Мөжәүир? – Сөмбәлә иренә һораулы ҡарай ҙа, яуап көтә.

– Байлыҡ ни ул – бер айлыҡ, ярлылыҡ ҡына мәңгелек, – тип шаярта кирамәттәр күрһәтеүсе. – Тиҙҙән илгә байҙарҙы яратмай торған яңы хөкүмәт киләсәк. Байҙарға көн бөтәсәк.

– Манһыр менән Фәйзулла араһында алтын йыуҙырған бай хужалар өсөн дәме?

– Эйе, уларҙың яҙмышы үтә лә аяныслы киләсәктә. Приискыларын хөкүмәт тартып алыр. Үҙҙәрен илдән ҡыуырҙар.

Мөжәүир кәләшенең аңлы булыуына ҡыуанды. Күңелендә күптән йөрөткән уй-фекерен әйтеп ҡарарға баҙнат итте.

– Мин үҙем иҫән саҡта Манһыр тирәһен болартып, тауҙарын аҡтарып, алтынын сүпләргә яй бирмәҫкә уйлап йөрөйөм. Ер аҫты байлығының кәмеүе кешеләрҙәге рухи байлыҡтың кәмеүенә килтерә. Һынап йөрөйөм: ере байҙың милләте бай. Талантлы, һәр йәһәттән камил заттар алтын-көмөшлө ерҙә ярала.

– Тимәк, беҙ бер ваҡытта ла бай булмайбыҙ, эйеме? – Сөмбәлә беше кәүҙәле, һәр төрлө һөнәргә маһир, камил аҡыллы иренә ышанмай ҡараны.

– Минең иң ҙур байлығым – һин, Сөмбәлә! – тип ҡатынын ҡосаҡланы Мөжәүир, тағы өҫтәне: – Бик бай буласаҡбыҙ, сибәрем. Зәңгәр күк, Ирәндек тауҙары, йылғалар, күлдәр, еләк-емешле туғайҙар, ҡалын урмандар, Урғаҙа йылғаһы – бөтәһе лә беҙҙеке булыр, иншәәъ Аллаһ.

– Һин ҡыҙыҡ кеше, Мөжәүир! – тине Сөмбәлә иренә ихтирамы артып: – Минең дә иң ҙур байлығым һин булырһың.

Сөмбәлә ире тураһында әле бик аҙ белһә лә, үҙен донъялағы иң бәхетле ҡатын итеп һиҙҙе. Уның тоғролоғона ышанды.

Мөжәүир ҙә бәхетле икәнен йәшермәне:

– Әллә Хоҙай Тәғәлә һине мин ҡарап һоҡланһын өсөн шундай сибәр итеп яралттымы?!

Ул күҙҙәре һөйөү менән мөлдөрәмә тулы кәләшен ҡайнар ҡосағына алды.

## Тәҡдир

Күңеле хәүефләнеп, йоҡлай алмай маҙаһыҙланып оҙаҡ ятҡандан һуң, саҡ күҙе эленгәйне, әйтерһең, йылан саҡты: Мөжәүир хәҙрәт ырғып уянып китте, һикереп торҙо. Ашыҡ-бошоҡ кейенә һалды ла, улы Варисты уятты.

– Тиҙ генә тора һал! Ҡара айғырҙы ектер. Харис ҡоҙаның өйө ҡазаланырға тора. Дүрт ваҡ бала һәләкәт алдында.

Атаһының әүлиәлеген яҡшы белгән улы «һә» тигәнсе кейенеп, сығып та йүгерҙе. Хәҙрәт өйҙән сыҡҡанда ат ҡапҡа төбөндә егеүле ине. Олпат кәүҙәһе менән хәҙрәт санаға еңел генә менеп ултырҙы ла, улына атты ҡыуырға ҡушты.

Яңы яуған өрпәк ҡарҙы ярып, ун саҡрымды бер тынала үтеп, йән-фарманға сапҡан айғыр аҡ күбеккә батып Биш-ҡайын ауылына барып та инде.

Хәҙрәт көткәнсә, ишек тыштан йоҙаҡлы. Өйҙә шәм яҡтыһы күренмәй. Тимәк, хужалары һаман ҡунаҡтан ҡайтмаған.

– Һай, башҡорттоң моңһоҙлоғо! Был ваҡытҡа тиклем нимә ҡарап ултырырға? – тип һуҡранды ла хәҙрәт улына яра һуғып тәҙрә аша өйгә инергә ҡушты. Һәр минут ҡәҙерле ине. Хәҙрәттең яңы бойороғо ишетелде:

– Балаларҙы бында алып килә һал, – тине төтөн борлаған ярыҡ тәҙрә эргәһенә килеп. Варис, ҡара төтөнгә сәсәй-сәсәй, балаларҙы берәмләп тәҙрә эргәһенә ташып торҙо, атаһы күлдәксән сабыйҙарҙы толобона төрөп санаға ултырта торҙо. Балаларҙы ҡотҡарып бөткәс, атаһы Варисҡа йәнә эш ҡушты.

– Түр башында һыу барҙыр. Шуны мейес араһында яна башлаған утынға һип!

Көнө буйы ҡыҙыу яғылған мейес араһына киптерергә һалынған утын, ысынлап та, ҡуҙлана башлағайны. Ут хәҙер генә ҙур булмаған өйҙө ялмап алыр ҙа, күҙ асып йомғансы уны көл-күмергә әйләндерер ине. Өлгөрҙөләр бит, өлгөрҙөләр! Ике-өс биҙрә һыу утты һүндерергә етте. Үҙе төтөнгә сәсәй Варис, үҙе уйлап йөрөй:

– Ярай һыуҙары булды, – тип ҡыуана. – Атайым кешеләргә юҡҡа ғына кистән йоҡларға ятҡанда өйөгөҙҙә бер-ике биҙрә һыу, ярты икмәк булһын, тип өйрәтмәй икән.

Тәҙрәгә тамам әлһерәп килеп ҡапланған улын атаһы һөйрәкләп алды ла күтәреп санаға алып барып ултыртты.

– Рәхмәт яуһын, балам, оло ҡазанан ҡотҡарҙың, – тине улын толоптоң осона төрөп. Үҙе өшөй башлаған балаларҙы күршеләргә индерә һалырға ашыҡты, үҙе һаман Харис ҡоҙаһын әрләне.

– Дүрт балаңды араҡыға алмаштырып ни, хәсис.

Харистың күршеләре арыу кешеләр икән. Шунда уҡ кейенеп сығып балаларҙы күтәреп индерештеләр. Хужабикә самауырына йәбеште.

– Хәҙрәт, сәй эсеп ҡайтығыҙ, – тине. – Балалар ҙа һыуһағандарҙыр.

Төтөнгә саҡ-саҡ тонсоҡмай ҡалған балалар, ҡурҡыуҙан, илау ҡеүәһен дә юғалтҡандар. Шаҡ ҡатып, өндәшә лә алмай ултыралар. Ҡоттары осҡан, меҫкендәрҙең. Хәҙрәт эргәләренә ултырып өшкөрөп алды. Әҙерәк йән ингәндәй булғас: «Иртәгә килеп хәлдәрен белермен тағы», – тип әйтергә итте лә күңелендәге бер һиҙемләү арҡылы, әйтер һүҙен өндәшмәй ҡалдырҙы. Бер аҙ балаларға текләп торҙо ла:

– Ин шәәъ Аллаһ, былай ҙа бирешмәҫтәр, – тине. – Улым, әйҙә ҡайтабыҙ, – тип ойоп барған Варисты ҡуҙғатты. – Сәйгә туҡтамайбыҙ. Балаларҙы тәрбиәләй һалығыҙ.

Өйөнә етеп, әбейе эргәһенә йылы түшәккә сумғас та, Мөжәүирҙе оҙаҡ ҡына йоҡо алмай ыҙалатты. Ниндәйҙер хәүефле тойғо һаман күңеленә тынғы бирмәне. Саҡ ойоп ҡына киткәйне, хәтәр төш күреп, йәнә уянды. Имеш, уны ҡоторған йыртҡыстар талай икән. «Был төш тигенгә булмаҫ, Хоҙай ниҙер әшкәртә», – тип уйланы ул. Бөтөнләй йоҡоһо осто. Тороп таң алдынан уҡыла торған доғаларын уҡыны. Тәһәрәтләнеп, иртәнге намаҙға баҫҡанда әүлиә ниндәй хәүеф йәнен талағанын ап-асыҡ белде. Уға яуыз көстәр тарафынан мәкерле тоҙаҡ ҡорола. Иркенән мәхрүм итмәкселәр. Уны тотҡонлоҡ – төрмә көтә... Ни өсөн икәнлекте лә белә ул.

– Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте киң. Ни хәл итәһең, тыуғанда маңлайыңа ни яҙылған, шуны күрмәй сараң юҡ, – тип уйланы ғилем эйәһе, үҙенә ҡағыласаҡ ғилләнең шауҡымы ҡайһы юҫыҡтан килерен тоҫмаллап. Халыҡты ил башлыҡтары үҙҙәре ҡаңғырта. Нахаҡ менән хаҡты, аҡ менән ҡараны айыра алмай, нишаналар, тип көйҙө. Ил башлыҡтарының хаттин ашҡан вайымһыҙлылығына сыҙаша алманы: «Әллә ниңә ышаналар бит шул мәлғүн нәмәләргә? Немец фашистарының ҡара эсле иблис икәнен, әйтерһең, аңламайҙар. Эх, ҡайһылай итеп кенә юғары түрәләргә шул иманһыҙҙарҙың планын аңлатырға? Улар бит беҙҙең илде бер-ике ай эсендә борҡолдатып үҙҙәренә буйһондороп, ҡол итергә йыйына. Ай, белмәйҙәр шул, белмәйҙәр. Ышаналар, ышаналар!»

Хәҙрәт тәрән уйға сумды. Әммә уйының осо-ҡырыйына сыға алманы. Илдәр яҙмышын күҙаллау бер-ике айырым кеше яҙмышын күҙаллау ғына түгел шул. Хәҙрәттең олуғ ҡөҙрәте, кирамәт әүлиәлеге лә байҡап бөтөрә алмай. Иң яманы – белгәнен әйтеп тә ышандыра алмай ҙаһа. Үҙенә Хоҙайҙан бирелгән ҡөҙрәттең ҡәҙерен белә лә бит. Әле лә көтөү көткәндә күргән әллә ҡасанғы аҫыл йәйғорҙо иҫенә төшөрөп ултырҙы, Хоҙайҙан ярҙам һораны. Зиһене яҡтырып киткәндәй булды, алда ниҙәр булыры ап-асыҡ булып күҙ алдына баҫты. Эйе, нисек кенә теләмәһәк тә, тиҙҙән Гитлер беҙгә һуғыш аса. Әҙер торорға ине. Юҡһа, ҡорбандар ифрат күп буласаҡ. Аңғартып та ҡарай ул, тик тәкәббер түрәләр ябай кешенең әйткәнен һис гәменә алырҙай түгел.

Әле көс-ҡөҙрәте арта барһа ла, яңы властың бер килеп бөтәсәгенә иманы камил. Әүлиәлеге ап-асыҡ әшкәртә: яңынан 50–60 йылдан илгә маңлайында иретелгән ҡурғаш саҡлы миңе булған тамғалы батша киләсәк. Шул Сәүитте бөтөрәсәк. Юҡ, хәҙрәт яңы властарҙы һис тә дошман күрмәй. Киреһенсә, яңы хөкүмәттең ыңғай яҡтары ла байтаҡ. Үҙенә лә файҙаһы тейеп тора. Ҡайһы бер закондары, әйткәндәй, әхлаҡи кодекс тигәндәре, әйтерһең, Ҡөрьәндән алынған. Гел ғәҙеллекте, тоғролоҡто, туғанлыҡты алға һөрә, яҡшылыҡҡа өндәй. Тик ни ғилмә менәндер, әллә үҙ башына ҡарышыпмы, был хөкүмәт Хоҙайҙың барлығын, берлеген инҡар итә, динде танымай.

Шул тиҫкәре яғы уға оҙон ғүмерле булырға ҡамасаулаясаҡ. Диндән яҙған әҙәм балаһының бәйеле аҙасаҡ, әҙәп, тәүфиҡ бөтәсәк.

Өйрәтеп әйттеңме, «халыҡ дошманы»на әүереләһең... Эх, ниңә кешеләр законға ла, батшаларға ла түгел, бары тик бер Хоҙайға табынырға кәрәклекте онота! Яңылышалар, тәрән яңылышалар! Гонаһты уйламайҙар. Гонаһлы ерҙә Хоҙай афәт-ҡазаһын ебәререн аңлатып булмай кафырҙарға.

– Йә, Хоҙай, бөтәбеҙҙе лә ярлыҡа. Аңһыҙ, динһеҙҙәрҙе кисер!

Хәҙрәт тиҫбеһен тилберерәк тартты. Намаҙ уҡып бөткән абыстайына әкрен генә өндәште.

– Әбекәйем, сәйеңде ашыҡтыр. Миңә берәй аҙналыҡ ризыҡ хәстәрлә. Ҡорот, талҡан, һары май кеүектән.

– Ҡайҙа йыйындың? – тине аптыраулы Гөлйемеш, – алдан әйтмәгәйнең дәһә.

Хәҙрәттең һаман асығын әйткеһе килмәне.

– Юлға сығам. Ҡышҡы йылы кейемдәрҙе ҡарап бир.

Ныҡ аптырауға ҡалған абыстайына хәҙрәт йәлләп ҡарап ултырҙы, уның бер ярҙамһыҙ ҡаласағын уйлап йөрәгенә ҡан һауҙы. Тик ни хәл итһен, күрәсәкте күрмәй, әҙәм гүргә инмәй.

Ысынлап та, закон һаҡсылары үҙҙәрен оҙаҡ көттөрмәне. Иртәнге сәғәт ундар тирәһендә өйгә хәрби кейемле ике кеше килеп инде.

– Беҙ НКВД-нан, – тинеләр. – Һин, Мөжәүир Сиражетдинов, Совет власына яла яғыуҙа, законға ҡаршы эштәр башҡарыуҙа ғәйепләнәһең. Һине ҡулға алырға бойороҡ бирелде. Йыйын!

Хәҙрәт, әйтерһең, уны төрмәгә түгел, күрше ауылға аятҡа алырға килгәндәр, тыныс ҡына тауыш менән:

– Мин әҙер. Йыйынып, һеҙҙе көтөп ултырам, – тине. – Алдан әҙерләп ҡуйған йылы көпөһөн, быймаһын кейеп, биштәрен ҡулына алды.

Эштең ниҙә икәнен аңлап алған Гөлйемеш абыстай инә бөркөттәй ирен яҡлап, яу ҡуптарҙы.

– Ҡартымдың уйлағаны яҡшылыҡ, эшләгәне изгелек. Быны бөтә тирә-яҡ белә, – тип ирен яҡланы. – Уның



Мөжәүир хәҙрәт гәзит уҡый

сәүиткә ҡаршы булғаны ла юҡ. Ниңә ҡаршы булһын ти, етемлектә үҫеп, саҡ яңы күҙен асҡан ярлы ҡаршы була тиме?

– Ҡуйсы, Гөлйемеш, ҡаңғырма, – тине хәҙрәт әбейен тынысландырырға теләп. – Улар бит һалдаттар, бары приказ үтәйҙәр. Мине хөкөмгә алып бармаһалар, уларҙың үҙҙәренә эләгәсәк.

Милиционерҙар икеһе лә Баймаҡ районынан булғанлыҡтан, хәҙрәттең әүлиәлек ҡөҙрәте тураһында хәбәрҙар ине. Гөлйемеш абыстайҙың хаҡ һүҙ һөйләгәнен дә аңлап торалар. Тик юғарынан приказ булғас, ҡушҡанды үтәмәҫкә хаҡтары юҡ.

– Хәҙрәт, зинһар, беҙгә үпкәләмәгеҙ, – тине берәүһе ипле генә итеп. – Моғайын, һеҙҙе оҙаҡ тотмаҫтар. Һеҙҙе белмәгән, ихтирам итмәгән кеше юҡ был тирәлә.

Мөжәүир үҙенә мөлдөрәп ҡараған ҡатынының ҡулын ҡыҫып хушлашты, балаларын уятып тормай, арҡаларынан һөйөп сыҡты.

– Хуш, Гөлйемеш. Балаларҙы айырмай, һәйбәт көт, – тине. – Минең ғәйебем юҡ. Шулай ҙа Хаҡ Тәғәлә ҡушҡанды күрермен инде.

Иренең күңелен уйлап, хушлашҡанда Гөлйемеш күҙенән бер тамсы йәш сығарманы, тешен ҡыҫып түҙҙе. Башҡорт ҡатыны бит ул, кәрәк саҡта саҡматаштай. Ул тышҡа сығып иренең артынан өшөгәнсе ҡарап ҡалды. Шунан ҡапыл аңына килде:

– Аһ-аһ, һапатам әйләнеп, аңшайып тик торамсы, – тип үҙен әрләп алды ла намаҙлығын түшәй һалып намаҙға ултырҙы. Хоҙайҙан ялбарып-ялбарып ҡартының имен-аман әйләнеп ҡатыуын һораны. Йоҡонан яңы уянған балаларына сәй ултыртып бирә һалды ла, яулыҡҡа мул ғына күстәнәс төрөп алып, Хафизә әбейҙәргә йүгерҙе. Изге күңелле әбейгә юл хәйере биреп, иренең һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуын бергәләп теләргә ниәтләне.

* * *

Манһыр менән Баймаҡ араһындағы сана юлы һәйбәт кенә ине. Көрт-фәлән һалған убалар ҙа осрамай. Ап-аҡ ҡар донъяға аҡлыҡ-паклыҡ бөркә, ынйылай емелдәп, күҙҙәрҙе ҡамаштыра. Әйтерһең, ерҙә илдең бәкәленә һуҡҡан 1939 йыл да түгел, ғәҙелһеҙлек тә, ялған да, хөсөтлөк тә юҡ.

Күпте күргән, донъяны зирәк аҡылы менән иңләп-буйлап сығырға һәләтле Мөжәүир юл буйы уйланып барҙы. Башҡорттоң ғына түгел, бөтә Рәсәй иленең киләсәген күҙаллап, күңелен ҡаты борсоу баҫты.

Бынан 60–70 йылдан һуң ниҙәр булыры ла ҡаты ҡурҡыуға һала уны. Моғайын, ер өҫтөндә эсер һыуҙар бысранып бөтөр, тупраҡ, нык ағыуланыу сәбәпле, уңдырышлылығын юғалтыр, һауа, шифалы үләндәр, һыуҙар бысраныр. Төрлө йоғошло аҙғынлыҡ сирҙәре күбәйер. Кешеләр, тәрегә табынған һымаҡ, мөйөшкә текәлеп ултырырҙар, ундағы «замана йәшниге»нән бөтә донъя әҙәпһеҙлек, ҡаты бәгерлелек, аҙғынлыҡ, әшәкелек сәселер. Кешеләр уның һайын «ҡумтаға» мөкиббән китер. Шулай итеп, ахырызаманды, Ҡиәмәт көнөн кеше үҙе

яҡынайтыр. Был афәттән ҡотолоу юлы ла бар: был – иман, әҙәп, тәүфиҡҡа ҡайтыу кәрәк. Йәнә кешеләр донъяһын, йәнә тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш ҡотҡарыр. Тик әҙәм әйткәнде аңлаймы ни? Ул, хәҙрәт, белгәнен бөтә донъяға иғлан итергә бөгөндән әҙер. Тик аҙған динһеҙҙәргә уның һүҙе үтемле түгел шул.

– Һиҙәйәт (гәҙел юл) табырға, Хоҙайым, үҙең ярҙам ит! Ярлыҡа аңһыҙҙарҙы!

Хәҙрәт юлда пәйғәмбәрҙәрҙең йәшәйеше тураһында ла уйланды һәм йәнә иртәнсәк үк аңына һалып ҡуйған, Хоҙай ҡушҡанды күрмәй форсатың юҡ, тигән фекерҙе нығытты. Иблис көслө. Ул хатта изге пәйғәмбәрҙәрҙе юлдан яҙҙырырға, уларға хаслыҡ ҡылырға маташҡан. Ана, Әйүп пәйғәмбәрҙе, үҙ ҡотҡоһона бирелмәгәне өсөн иблис нисек ыҙалай. Башта малын, барлыҡ нигмәтен тартып ала, юлдан яҙҙыра алмағас, ауырыуға һабыштыра, тәнен ҡортлата. Әммә Әйүп пәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләгә тоғро ҡала. Тәҡдиренә буйһона. Хаҡлыҡ барыбер бер килеп еңеп сыға, ул һауыға. Нисек көслө тойолһа ла, иблис еңелә.

Мөжәүир ҙә яҙмыш ҡушҡанды күрәсәк. Үҙен ҡулға алырға килеүселәрҙе, тылсым көсөн ҡулланып, ҡышҡы һыуыҡта аҙаштыра, ҡаршыһына йыртҡыс йәнлектәр пәйҙә итеп, ҡотон алып ҡурҡыта ла алыр ине. Әммә хәҙрәт үҙендәге Хоҙай биргән илаһи көстө, кирамәтлекте һис ҡасан урынһыҙ ҡулланмай, тәләфләмәй, ғилеменә хилафлыҡ килеүҙән ҡурҡа. Теге бала саҡта Иманай битләүендә мал көткәндә Аллаһы Тәғәләнең йәйғор нуры аша үҙенә биргән көстө изге һанай. Хоҙай биргән ҡөҙрәтте бары тик изге эштәргә сарыф итергә нәҙер әйтте бит ул.

* * *

Баймаҡ. Мөжәүирҙән тәүге һорау алыу. Милиция начальнигы, тәкәббер, ҡупырыш бер бәндә, ауыҙынан папиросын алмай ғына, теш араһынан уға екерҙе:

– Һине, ҡартлас, беҙҙең Совет власына яла яға, тиҙәр. Был дөрөҫмө?

– Нимә тип... Бәй... Әлхәм...

– Мәҫәлән, кешеләргә тиҙҙән немец Рәсәйгә һуғыш башлай, тип әйтә икәнһең. Ә һин беҙҙең Германия менән бер-беребеҙгә һөжүм итмәү тураһында Килешеү бар икәнлекте беләһеңме, бабай? Аңра башың менән, юҡты һөйләп, властарға, Сталинға ҡаршы сыҡҡанһың. Хәҙер провокация һөйләүеңде аңланыңмы, ахмаҡ?

Хәҙрәт үҙе һөйләгәндәрҙән баш тартырға йәки танырға һис йыйынмай. Киреһенсә, уның юғарыла ултырғандарға шул белгәнен аңғартҡыһы килә.

– Улым, – ти ул кеселекле генә итеп. – Мин – әүлиә. Алдан күрәм. Миңә Хоҙай үҙе әшкәртә. Ап-асыҡ әйтәм: германдар беҙҙең илде баҫып алыу планын ҡора. Миңә барыһы ла билдәле. Илебеҙҙе шул афәттән ҡайһылай әрсәләү хаҡында кәңәшләшкем килгәйне, балам. Был ҡаршы барыу түгел. Аңлағыҙ, мин илебеҙҙең халҡын уйлайым, – тине ул, уғата тулҡынланып.

– Тимәк, әйттең инде, ә?

– Әйтеүем хаҡ, улым, әйттем. Һиңә алып килеп яҡшы иттеләр. Исмаһам, һин хәлде ил башлыҡтарына еткерерһең. Герман батшаһына аслан ышана күрмәһендәр, харап булырбыҙ, тип әйтерһең.

Милиция начальнигы Мөжәүир хәҙрәттең ихлас яуабын берсә бер ҡатлылыҡ, берсә аҡылына зыян килеү күренеше һымағыраҡ аңланы. Барлыҡ һөйләшкәнде эргәһендә ҡағыҙға теркәп ултырған сәркәтибенә күҙ ҡыҫты:

– Күрҙең,борода нимә ти? Ғәйебен йәшермәй. Үҙе һөйләп биреп тора.

Хәҙрәт оло түрәнең килделе-киттеле һүҙен, әйтерһең, ишетмәне, һаман үҙенекен ныҡыны.

– Улым, үтенәм, юғарыларға, зинһар, шуны еткерә күр, аңғарт һис юғы. Һемәйеп ҡалмайыҡ, тим.

– Етәр, ҡартлас! Надоел һин миңә, еткер ҙә аңғарт, имеш. Беҙҙә лә баш бар. Һинең һымаҡ алйығандарҙың хәбәрен еткерә башлаһаң, үҙ башың ҡайҙа осоп барып ятырын белмәй ҡалырһың.

Милиция начальнигы иҙән буйлап кәттә генә арлы-бирле

йөрөп алды. Хәҙрәттең үҙенә төбәлгән үткер ҡарашынан бер аҙ албырғай төшһә лә, барлыҡ көсөн туплап, һорау алыуҙы дауам иттерҙе.

– Һин Совет власын да бөтәсәк, ти икәнһең. Был дөрөҫмө?

– Мин уны, балам, һис бер Совет власына хаслыҡ уйлап әйтмәйем.

– Ҡотҡо таратаһың инде, ә? Аҫтан ҡырҡаһың?

– Юҡ, юҡ, һис юҡ! Белгәнемде әйтеүем, киреһенсә, Совет власын нығытырға кәрәк тигән уйҙан. Алды-артты ҡарап йөрөргә кәрәк, тим. Сәүиттең 50–60 йылдан бөтәсәген көҙгөлә күргән кеүек әйтәм.

Һорау алыуҙан ҡәнәғәт милиция начальнигы хатта ҡулдарын ыуып алды. «Балыҡ»тың ҙурын эләктерҙе ләһә. Был аңра башты тағы ла күберәк һөйләндереү фарыз.

– Тәк-тәк, – үҙе тағы сәркәтибенә күҙ ҡыҫты. – Яҙып өлгөрәһеңме? Барыһын да теркә. Протокол кәрәк булыр, – тине. Һорау алыуҙы тағы ла эшлеклерәк алып барырға теләне.

– Совет власына ҡаршы ҡотҡо таратыусыларҙан тағы кемдәрҙе беләһең?

– Ниндәй ҡотҡо? – Хәҙрәт йәшкелт көрән күҙҙәрен ҙур асып һорау алыусыға төбәлде. – Ни һөйләйһең?

– Моғайын, яңғыҙың түгелдер. Кемдәр һине хуплай?

– Аңламайым. Нахаҡ һөйләргә йыйынмайым.

– Ну, кемдәр ҡаршы беҙгә? Уларҙы халыҡ дошмандары тип тә атайбыҙ. Әйт, исемләп әйт!?

– Ниндәй дошман? – Хәҙрәт ғәжәпләнде.

– Йәшермә, беләһең!

– Ҡуй, улым, гонаһлы булма! Һаташма, бер ниндәй дошман да, ҡотҡо ла юҡ.

– Молчать! – Начальник аяҡ үрә баҫты ла, ғәҙәтенсә, пистолеттың кобураһын һәрмәп ҡуйҙы. – Хватит! Мин һиңә ниндәй улың булайым, алйыған ҡарт! Ҡамсы менән бер-икене тамыҙып алһам, белерһең. Телең дә сиселер. – Ситтәрәк ултырғыста ятҡан сыбыртҡыһына ымланы. – Ана, күрәһеңме... тел аҫҡысын?

Хәҙрәт һаман уны ипкә килтерергә тырышты.

– Ҡуйсы әле, улым, көфөр булмасы. Минең һис гонаһым юҡ. Күңелем саф. Берәүгә лә зыяным теймәй, киреһенсә, изгелек эшләргә генә әҙермен.

Үҙенән-үҙе ярһып, бештан-бешҡа күҙҙәренә ҡан һауа барған начальник, үҙен ни ҡылһа ла хаҡы бар тип иҫәпләй, күрәһең. Тупаҫланғандан-тупаҫлана барған тауышы менән:

– Һинең һымаҡ ер ҡорттарын, Совет власына ҡаршы йөрөүселәрҙе, тотоп берәмләп барыбер һытып бөтәсәкбеҙ.

– Тәүбәңә кил, мосолманһың даһа.

– Тәүбәмә? Минме? Ха-ха-ха! Һин – борода алдындамы?

Начальник күҙҙәренән йәше атылып сыҡҡансы хахылдап көлдө.

– Хәҙер тәүбәне күрһәтәм мин һиңә!

Пистолет тоторға ҡулы ҡысып торған хөкөмдар ҡоралын алды ла хәҙрәткә тоҫҡаны.

– Ә быны күрәһеңме? Шалт и каюк! Шунан икмәк серетеүҙән туҡтайһың, и баста!

– Ни һөйләйһең, улым? Һин бит әҙәм балаһы! Иблискә әйләнмә! Ҡуй, аҡылыңды юйма!

– Молчать! Надоел! Был ғәйептәрең өсөн, белгең килһә, һиңә – явный расстрел!

Шулай ҙа бер аҙҙан ажар түрә йомшарҙы. Пистолетын да кобураһына кире тыҡты. Әллә иләҫләнеп, әллә хәле бөтөп, креслоһына ултырҙы ла кнопкаға баҫты. Бүлмәгә йәш кенә милиционер килеп инде. Өйрәнелгән ғәҙәте буйынса ҡулға алыныусыға шартылдатып быгау кейҙерҙе лә, хужаһына яҡшатланырға теләгәндәй, бүлмәнән елтерәтеп алып сығып та китте.

Хәҙрәт төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡты. Үҙ өммәтенән булған түрәгә ышаныу ҡарағайны ла, өмөтө аҡланманы. Зәрә лә вәхши әҙәм булып сыҡты.

Иртәгеһен, ни сәбәптәндер, Мөжәуирҙе ашыҡтырып Йылайыр төрмәһенә оҙатырға булдылар. Атын егеп, юлға әҙерләнеп йөрөгән урта йәштәрҙәге башҡорт санаға күпертеп бесән түшәне, хәҙрәткә ҡыптыр тире тун ырғытты:

– Өшөрһөң, кейеп ал!

Ҡуҙғалырға тип торғанда, уларҙың юлын бер хәрби бүлде, күрәһең, күсерҙең үҙ күргән кешеһелер.

– Ишеттеңме? – тине ул шыпырт ҡына. – Милиция начальнигы баҫҡыстан ҡолап үлгән.

– Нисек... ҡолап үлгән?

– Иртәнсәк эшкә ауырып килгән, ти. Теле көрмәлгән, бите салышайған. Баҫҡыстан тәгәрәп киткән дә йән биргән.

– Һап-һау, бүгәйҙәй әҙәм ине. Вәт әй...

– Эйе, иптәш, шулай. Бәйеле аҙмай башҡа бәлә килмәй... Ныҡ шашынғайны, әйтәгүр.

Быларҙың һөйләшкәнен ишеткән хәҙрәт ни эшләргә белмәй ыуаланды.

– Йә, Хоҙай, үҙең ярлыҡа! – тине кисәге допросты хәтерләп. – Ҡарғамағайным да. Үҙен үтә әҙәпһеҙ тотто шул. Ҡаргау кәрәкмәй, күңел рәнйей. Рәнйеш тиҙ төшә. Олоно оло тип белмәй, артыҡ шашынды шул...

Мөжәүир үҙенең теләһә – теләге үтәлерен, ҡарғаһа – ҡарғышы төшөрҙө күптән белә. Тик уны кеше һайын иҫкәртеп йөрөп булмай ҙа баһа. Әҙәп, тәүфиҡ төшөнсәләренең бала саҡта уҡ һәр кемгә һеңеүе фарыз.

Хәҙрәт шулай хафаланып ултырған саҡта, күсер сана янына килеп, ҡулына дилбегәһен алды.

– Малҡай, әйҙә! Яҡты күҙҙә Йылайырға етә һалайыҡ. Н-н-а-а-а!

Баймаҡтан сығып байтаҡ барғас ҡына күсер, үҙ алдына һөйләнгәндәй, әйтеп ҡуйҙы:

– Без суда и следствия атырға миңә право бирелде, тип шашына ине. Ҡотороуы үҙенең ҡара башына булды.

Исеме әйтелмәһә лә, Мөжәүир кем тураһында һүҙ барғанын яҡшы аңланы. Тимәк, күсер ҙә уны өнәмәгән икән.

Башҡаса юл буйы бер-береһенә һүҙ ҡатышманылар. Ошаҡ, яла, хөсөт берләшеп әҙәмдең ҡотон алған заманда кешеләр бер-береһенән ҡурҡа ине шул.

Йөҙ саҡрымды ете-һигеҙ сәғәттә үтеп, шәмгә ут алыр мәлдә генә Йылайырға инделәр. Күсер атын төрмә урынлашҡан йортҡа табан борҙо.

Мөжәүир хәҙрәтте шунда уҡ шөкәтһеҙ бер камераға яптылар. Ат башындай йоҙаҡ шалтыр-шолтор итеп ҡалды. Манһырының шау сәскә еҫе аңҡытҡан һауаһына өйрәнгән хәҙрәт өсөн камера һауаһы сыҙап торорлоҡ түгел. Яйлап күнекте. Таҡта түшәлгән һикегә ятып ҡараны. Аяҡ-ҡулы, бөтә тәне ни саҡлы талсыҡҡан булһа ла, бөгөн дә күҙенә йоҡо ҡунманы. Төрмә булһа ла, йәстү намаҙын уҡымаҡсы булғайны, тәһәрәтһеҙ икәнлеге иҫенә төштө.

«Намаҙҙың үҙ ваҡытында уҡылыуы фарыз», – тип уйланы тотҡон. Ишектең йоҙағын асып, тәһәрәткә сығыу уға бер шайы ла түгел дәһә. Хәҙрәт бер өшкөрөп ебәргәйне, ишек йоҙаҡтары үҙенән-үҙе асылды. Уға тәһәрәт яңыртып килергә мөмкинлек тыуҙы. Бына, ниһайәт, хәҙрәт ҡиблаға ҡарап баҫып, ҡулын күкрәгенә ҡуйҙы ла аҙан әйтеп, йәстү намаҙын уҡый башланы.

– Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Әлхәмдү-лил-ләһи Раббил ғаләмин...

Намаҙын тамамлағас, ҡулына тиҫбеһен алды.

– Сүбхәнәл-лаһ, сүбхәнәл-лаһ, сүбхәнәл-лаһ...

– Әлхәмдү-лил-ләһ, әлхәмдү-лил-ләһ, әлхәмдү-лил-ләһ...

– Аллаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр...

Берәйһе ситтән хәҙрәттең тиҫбе тартыуын ҡарап торһа, уның ҡулының тилберлегенә, нәҙек оҙон бармаҡтарының камиллығына хайран ҡалыр ине.

Хоҙайға оҙаҡ ваҡыт тәсбих әйткәндән һуң ул бер кешелек тар ғына һикегә ҙур кәүҙәһен саҡ һыйҙырып, йомарланып тигәндәй ятты ла, нисек тә әҙерәк серем итергә тырышты. Йоҡлап китер алдынан тағы бер ҡат: «Һорау алыусы артыҡ әшәке булмаһа ярар ине», – тип теләне. Ул тағы рәнйеше төшөп, кемдеңдер үлеүен йә ауыр хәлгә ҡалыуын һис теләмәй.

Әммә Йылайырҙа һорау алыу Баймаҡтағынан ҡалышманы. Иң беренсе тәфтишсене бикле ишектең серле рәүештә асылыуы ҡыҙыҡһындырҙы. Протокол яҙмалары менән танышып сыҡҡан һорау алыусы Мөжәүиргә ысын «халыҡ дошманы» итеп ҡараны. Йыуан, һары әҙәм һөйләшмәҫ борон уҡ күҙҙәрен таҫрайтты.

– Что за чертовщина? – тип үкереп ебәрҙе ул бикле ишектең нисек асылыуын белергә теләп. Әммә хәҙрәт был юлы дөрөҫөн әйтмәҫкә булды, не знай, тип белмәмешкә һалышты.

– Бусурманская морда, нацмен, захочу, так возьму да и расстреляю без суда и следствия! – тип янаны ҡотһоҙ. Хәҙрәттең ҡулында тиҫбе күреп, шуға бәйләнә башланы.

– Что, нас колдовать пришел что ли, бабайка? – тип ҡулынан тартып алырға ынтылды.

– Ҡағылма бысраҡ ҡулың менән, – тине хәҙрәт, ҡулын этеп ебәрҙе. Шул саҡ һары русты, әйтерһең, алмаштырҙы ла ҡуйҙылар. Тау ярырҙай аҡырған әҙәмдең теле көрмәлде, уҫал ҡараған күҙҙәре ғәрешкә терәлгәндәй йыуашайҙы, тын алышы ауырлашты, быуындары кәрһеҙләнде. Өнө быуылып, саҡ тын алып ултырһа ла, эшәке ғәҙәтен ҡуймай, ҡатлы-ҡатлы итеп һүгенде. Тотҡоно алдында ҡапыл меҫкен хәлгә ҡалып, бер ни ҡыла алмауына, эй, үкенде теге. Атып ҡына йығыр ине – ҡулы тыңлауһыҙға әйләнде. Тәфтишсе ҡарттың йәшкелт осҡон сәскән күҙҙәренә ҡараны. Серле, үҙенә упҡындай убып алырҙай утлы ҡараш тәфтишсенең бар булмышын ялманы. Шул саҡ, сиркәү юлынан ҡайтмаған олатаһы тәрбиәһендә үҫкән был әҙәм, ҡаршыһында торған ҡарттың ябай кеше түгел икәнлеген һиҙеп ҡалды. Олатаһы һөйләгәндән, ул бындай тылсым эйәләре тураһында ишеткәне бар ине. Һары рус был үткер ҡарашлы тиҫбеле башҡорттан нисек тә йәһәтерәк ҡотолоу яғын ҡараны. Инде ҡарттың бында бер бөртөк сәсе төшмәһен, рәнйеп китмәһен. Шул ғына.

Бер нисә минуттан төрмә хеҙмәткәре ҡәҙимге ипкә килде. Ҡыңғырау шылтыратып ярҙамсыһын саҡыртты ла ҡулы менән ымлап тотҡондо алып китергә бойорҙо. Үҙе шунда уҡ, ултырған еренән йәмһеҙ хырылдап, йоҡлап китте.

Иртәгеһен майлаған кеүек булған Йылайырҙың һары русы хәҙрәтте йәһәтләп оҙатыу тураһында ғына уйланы. Бәләһенән баш-аяҡ, тине, буғай. Яйы ла сыҡты.

Ошо арала «атыу» статьяһына хөкөм ителгән бер төркөм тотҡон Өфөгә оҙатылырға тейеш. Тәфтишсе, милиция начальнигы менән һөйләшеп, Сиражетдинов Мөжәүирҙе шулар

менән ҡуша оҙатырға кәрәк тапты. «Шәреле юлдан йәйәүләп барып эт күрмәгәнде күрһен әле, икенсе тапҡыр шауҡымы теймәҫкә яҡшы булыр», — тип тә уйланы хәйләкәр. Йылайыр төрмәһенең йыщылып бөткән хеҙмәткәрҙәре Баймаҡтан килгән допрос протоколын күсереп кенә яҙҙылар ҙа, ҡабат һорау алып тормай, ҡултамға ҡуйҙылар. Һәм «айырыуса ҡурҡыныс енәйәтсе», «Рәсәй йөмһүриәте енәйәттәр ҡанунының 58-се матдәһенә бинаән» тигән мөһөр буйынса Мөжәүир хәҙрәткә «вышка» — атыу тейеш буласаҡ.

Март баштары. Яҙ айы булһа ла, көндәр һыуыҡ. Ҡар ҡышҡы кеүек шығырлап ята. Атырға хөкөм ителгән ун бишләгән тотҡондо икешәрләп бығаулап, Өфө юлына табан ҡыуаланылар.

Үлемгә хөкөм ителгәндәр араһында Мөжәүир балалыҡ дуҫы Хәсәнов Ғибаҙулланы ла күреп ҡалды. Үҙ заманы өсөн бик уҡымышлы, Ленинградта тау институтын тамамлаған, Совет власы өсөн йәнен бирергә әҙер, шахта начальнигы ла, рудасылыҡ инженеры ла булып эшләгән был кеше нисек эләкте икән һуң? Баҡһаң, уға «халыҡ дошманы» мөһөрөн рационализатор тәҡдиме индергән өсөн генә сәпәгәндәр. Йәнәһе, Совет власы менән ҡәнәғәт түгел, ризаһыҙлыҡ белдерә була. Был власть Ғибаҙулланы ла аямаған... Ҡуй инде.

Мөжәүир менән Ғибаҙулла бергәрәк йөрөргә тырышты. Алдан да, арттан да һыбайлы конвой «халыҡ дошмандары»н ҡарауыллай. Аяҡтарын саҡ һөйрәп, йән көскә атлаған ошо тотҡондар ҡара репрессияның иң аяныс яҙмышлы ҡорбандарының береһе булғандыр. Былай ҙа юл аҙабы — гүр ғазабы, тиҙәр. Ә был меҫкендәрҙең ғазабын һөйләп тә килештерерлек түгел. Берҙән, һыуыҡ үҙәктәренә үтә, икенсенән — аслыҡ. Бығаулы ҡулдар зәңкеп өшөй, ышҡылып сейләнгән урындар тәкәтте ҡоротоп ауырттыра. Йәлләүсе юҡ, тотҡондарға ярҙам итеү ҡәтғи тыйыла.

Мыҡты кәүҙәле, тәбиғәттән һауһаҡ Мөжәүир ҡапылда әллә ни бирешмәне. Ә бына ҡаҡса ғына кәүҙәле Ғибаҙулла йонсой. Бер аҙҙан ауыр бығауҙы һөйрәп атларға кәре етмәй башлай. Етмәһә, ҡупшы хром итек аяғын ҡанатҡансы ҡыра. Аптырағас, бер ауыл аша үткәндә, хәҙрәт Ғибаҙулланың ким-

мәтле итеген систереп сабатаға алыштыра. Эстән йөн ойоҡ, тыштан сылғау урап кейеп алғас, йонсоған тотҡонға йән ингәндәй була. Сабата сабата инде, үҙе еңел, үҙе уңайлы. Әммә тәү баштан йонсоп ҡалған Ғибаҙулла күҙгә күренеп шиңә. Стәрлетамаҡты үткәс, ул бөтөнләй аяҡтан яҙа. Мөжәүир офицерға әйтеп, уны обозға ултыртып ҡарай. Бер йонсоһа, ирҙәр күтәрелә алмай, тиҙәр. Ғибаҙуллаға ылау өҫтөндә лә еңеллек килмәй. Бер аҙ барғас, мәрхүм булып ҡала.

Хәҙрәт ҡарауылсыларға әйтеп, тотҡондарҙы туҡтаттыра. Вафат булған яҡташын Ашҡаҙар ярына ерләй. Яҡташы ғынамы? Иҙелбайҙа, Муллаҡайҙа әллә нисәмә йылдар бергә уҡыған йән дуҫы. Теге ваҡыт Айҙарлы приискыһында эшләгәндә Закир Рәмиев иң ҙур теләгеңде әйт, үтәйем, тигәс: «Ғибаҙулланы мәғдәнселек училищеһына ебәрергә кәрәк», – тигәйне. Ысынлап та, дуҫы тырышып-тырмашып уҡып сыҡты, тәүге белгестәрҙең береһе булып абруй менән эшләп йөрөнө. Улар араһында һәр ваҡыт туғанлыҡ хисенә оҡшаған бер тойғо булды. Бына инде тәҡдире үҙ ҡулдары менән ерләтте ҡәҙерле кешеһен.

– Йәнең йәннәттә булһын, – тип теләне хәҙрәт, мәрхүмдең ҡәбере өҫтөнә услап ер һалып.

Мөжәүир өсөн донъя буп-буш булып ҡалды. Хатта башынан сыҡмаған балалары ла артҡы планға күсеп торҙо. Эх, Ғибаҙулла, Ғибаҙулла, ниңә иртә киттең? Сәмләнеп эшләргә, заманса йәшәргә ярата торғайның. Күңелеңдең уты ҡапыл һүнде лә ҡуйҙы. Аяныслы ла һуң был тормош! Ғибаҙулланан да Совет власына ихлас хеҙмәт иткән кеше булмағандыр. Үҙ тырышлығы менән уҡып сыҡты, янып-көйөп эшләне. Хатта ошо власҡа ярар өсөн йәндәй дуҫы Мөжәүир менән дә һирәк осрашты. Муллаға ҡатнаша тип, бәйләнеп ҡуйырҙарынан ҡурҡты. Хәҙрәт хәсрәтенең иге-сиге булманы. Әллә ҡайғы миктәтте, Талбазы тирәһенә етеп килгәндә, үҙенең дә рәте китә барыуын тойҙо.

Төркөмдән тағы ике кеше үлде. «Хәйләһеҙ – донъя файҙаһыҙ», – тип уйлап та ала хәҙрәт. Артабан былай барһа, аяҡты һуҙырға ҡала. Итәк тулы балалары атайһыҙ ни эшләр?

Ҡатыны һарыға һабышыр. Бер аҙ атлағас, башлыҡ урынында барған өлкән һыбайлыға мөрәжәғәт итте:

– Улым, мине ылауға ултыртырға ҡуш әле. Күреп тораһың, рәт бөттө. Үҙе, тылсымлы күҙ ҡарашы менән тәьҫир итергә теләп, офицерға төбәлә. Йотлоғоп ҡарау үҙенекен итә. Башта ыңғайлағыһы килмәгән һыбайлы ҡапыл ғына риза булды ла ҡуйҙы. Хатта тыңлаусан, күндәм бер әҙәмгә әйләнде.

– Эй, Юлайка! Бабайҙы санаңа ал. Хәле бөткән. Үҙе әмеренең үтәлеүен көтөп ҡарап тора. Ошо ултырыуҙан Өфөгә барып еткәнсе ылауҙан төшмәне хәҙрәт.

...1939 йылдың яҙы. Өфө төрмәһе «халыҡ дошмандары» менән лыҡа тулы. Уларҙан хатта һорау алып өлгөрә алмайҙар. Йылайырҙан егерме көн тигәндә ыҙалап саҡ килеп еткән ете тотҡондо урынлаштырырға камера етмәү сәбәпле, һорау ҙа алып тормай, судһыҙ-ниһеҙ сығарып аттылар. Бары Мөжәүир хәҙрәткә генә ҡағыла алманылар. Әммә һорау алыу протоколдарын уҡып, уны «Айырыуса ҡурҡыныс енәйәтсе» тип атайҙар һәм айырым камераға бикләргә ҡушалар. Мөжәүирҙән бер нисә ҡат һорау алғас, ниһайәт, суд көнө лә билдәләнә.

– Сиражетдинов Мөжәүир! – Надзирателдең ҡоро, талапсан тауышы яңғырай. – На выход!

Ҡурҡыныс енәйәтсене хөкөм итеүҙе ҡарарға байтаҡ кеше йыйыла. Алғы рәттә ултырыусы илленән ашыу кешене геүаһ итеп әҙерләгәндәр. Бына судья аяҡ үрә баҫып судтың башланыуын иғлан итә. Халыҡ дошманының енәйәттәре тураһында оҙон ғына итеп телмәр тотҡас, һүҙҙе шаһиттарға, йәғни, геүаһтарға бирә. Әммә сығыш яһарға әҙерләнеүселәргә, әйтерһең, зәхмәт ҡағыла: йә телдәре тотлоға, йә фекерҙәре сыуала, йә әйтер һүҙен онота. Геүаһтар йүнле хәбәр һөйләй алмай оятҡа ҡалғас, һүҙ һорап залдан йәнә ике кеше тороп баҫа.

– Беҙ Мөжәүир хәҙрәттең яҡташтары, – тиҙәр улар. – Әйтер һүҙебеҙ бар.

Бәй, былар ни, Бишҡайын ауылындағы Харис ҡоҙаһы менән бер ваҡыт сәхнәлә үҙен әләкләп уйнаған әртис Бәхтийәр ҙаһә. Ул әртистең мәҙәктәрен иҫләп, хәҙрәт мыйыҡ аҫтынан ғына көлөмһөрәне.

...Ул саҡта йәштәр араһында спектакль уйнау таралған була. Әртисләнергә яратҡан әлеге Бәхтийәр тас хәҙрәт булып кейенеп, сәхнәгә килеп сыға ла тамашасыны көлдөрөргә, тип ҡылана башлай. Уның бәйһеҙлеге хәҙрәттең зитына тейә. Тылсым көсөн һис ҡасан кәрәкмәгән юҫыҡҡа ҡулланмаған әүлиә, тота ла мәҙәксенең үҙен ҡыҙыҡ итә. Өҫтөндәге барлыҡ кейемен систертә һәм шәп-шәрә көйө сәхнәлә теләһә нимә ҡыландырып йөрөтә башлай. Бәхтийәрҙең ҡылығын оҡшатмай ултырыусы ауылдаштары тәгәрәп ятып көлә, ә ғәрлегенән буҙарған Бәхтийәрҙең бисәһе ирен нисек туҡтатырға белмәй. Иң ахырҙа Мөжәүир алдына килеп ялбара.

– Балаларым хаҡына үтенәм, зинһар, иремде ипкә килтерегеҙсе, – ти. – Икенселәй улайтмаҫ.

Ҡатын илап ебәрә. Шул саҡ үҙ аңына килгән кәмитсе кейемен эләктереп ала ла клубтан сығып һыҙа. Иҫендә, аҙаҡ килеп ғәфү үтенде. Әңгәмәсел, йор һүҙле Мөжәүир рәхәтләнеп бер көлә лә:

– Ҡуйсы әле, юҡты ни, – ти. – Тапҡанһың ғәфү үтенер нәмәне. Бер ҡыҙыҡ булды. Ауыл һаман һөйләп кинәнә.

Ана шул кеше, әртис Бәхтийәр, бөгөн судҡа шаһит булып килгән тиң, ә?! Харисына тейеш инде, теге ваҡыт янғындан ҡотҡарып алып ҡалды. Әлеге лә баяғы, шул күрәҙәселегә әшкәрткәйне. Хәҙрәт белә, улар икеһе лә уны ҡотҡарыр өсөн йөрөй.

Башлап Харис һүҙ алды. Ул хәҙрәттең кешеләргә ярҙамсыл булыуын, үҙенең өйөн яна яҙыу тарихын түкмәй-сәсмәй һөйләп, тыңлаусыларҙың һушын алды. Күптәр ышанманы. «Әкиәт», – тинеләр.

Бәхтийәр ҙә әртистәрсә матур итеп хәҙрәттең тирә-яҡта иң абруйлы кеше булыуын раҫланы. Уның ысын әүлиә булыуына бер нисә дәлил килтерҙе.

– Хәҙрәт беҙҙең закондарҙы ихтирам итмәһә, бөгөн бында ултырмаҫ ине. Уның ҡөҙрәте икһеҙ-сикһеҙ, – тине. – Ул бөтәһен дә алдан белә. Бар нәмәне, хатта ни уйлағаныңа тиклем үтә күрә. Хәҙрәт тәү ҡарашҡа ғына ябай күренә. Зирәклектә, аҡыл ҡеүәһендә уға тиңдәш юҡ. Берҙән-бер мөғжизәләр тыуҙырырға һәләтле кеше. Хәҙрәттең ләғнәтенән, бәддоға-

һынап ҡурҡырға кәрәк. Мине бында халыҡ ебәрҙе. Һиңә ышанабыҙ, хәҙрәт тураһында барлыҡ дөрөҫлөктө һөйләп бир, тинеләр үәт.

Бәхтийәр ултырҙы. Уның сығышы күптәрҙең күҙен асты. Икеләнеп ҡалған судья ла хөкөм ҡарары менән ашыҡмаҫҡа булды. Урал аръяғы халҡы күтәрелеп сығыуҙан ҡурҡты, ахырыһы. «Күренеп тора: был Сиражетдинов ябай әҙәм түгел», — тип һығымта яһаны ул. Уйлап эшләргә кәрәк.

Оҙаҡ ҡына кәңәшләшкәндән һуң судья Мөжәүир Сиражетдиновтың үлем язаһын ун йыллыҡ һөргөн менән алыштыра. Суд әһелдәре артабан хәҙрәткә ҡаты бәрелеүҙән тыйыла.

Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ. Бәхтийәргә тиклем яҡлашып тора. Ҡайҙан, ҡайҙа, нисек килеп еткәндәрҙер? Хәҙрәттең күңеле тулды, күҙҙәренә йәш эркелде. Тыуған яғының изге кешеләренә күңеленән алҡынып-алҡышланып рәхмәттәр уҡыны ул.

Шулай итеп, яҙмышына буйһонорға ниәтләгән хәҙрәт өсөн оҙаҡ йылдарға һуҙыласаҡ тотҡонлоҡ тормошо башлана. Мәгәр һаман да уны камерала күҙ ялыҡтырмай күҙәтәләр. Бәлки, халыҡ дошмандары менән бәйләнешенең берәй осо килеп сығыр, тип эргәһенә үҙҙәренең кешеһен ултыртып ҡарайҙар. Йәнәһе, тотҡон берәй мөһим хәбәр әйтеп һалмаҫмы? Эргәһендәге әҙәмде үтә күргән тотҡон теге бәҙрәфтән сыҡмаҫлыҡ итеп ҡыла ла ҡуя. Бер нисә көн эсе киткәс, хәлдән тая меҫкен. Шунан ғына шымсыны камеранан сығаралар.

Хоҙай Тәғәләнең изге ҡөҙрәтенә йәне-тәне менән ихлас ышанған хәҙрәт биш ваҡыт намаҙын, төрмә булһа ла, ихлас үтәй. Уға тәһәрәт өсөн сығыу ҡыйын булмай, кәрәк саҡта бер доғаһы етә: йоҙаҡ үҙенән-үҙе асыла. Сыҡҡанда ҡомғанын ҡулынан төшөрмәй. Кистән бикләнгән ишектең иртән тороуға асыҡ тороуына надзирателдәр ҙә күнегә.

Хәҙрәттең хикмәттәре тураһында ишетеп йөрөгән төрмә начальнигы бер көнө уны үҙенә саҡыртып ала.

— Ултыр, — тип урын күрһәтә, башҡорт икәнлеге йөҙөнән күренеп торған урта йәштәрҙәге, хәрби кейемле ир.

Хәҙрәт уның үҙенә ҡарата мәрхәмәтле уйҙа булыуын белеп, йомшаҡ ҡына итеп, үҙ күреп өндәште:

– Улым, ауырынҡырап тораһың бит, – тине. – Ҡана ҡулдарыңды бир әле.

Ысынлап та, ҡатыны төнө буйы ауырып, йоҡо төҫө күрмәй килгәйне ул бөгөн эшкә. Ниндәй генә табиптарга күрһәтеп ҡараманы ул быума сирле ҡатынын. Был ауырыу алдында медицина көсһөҙлөк күрһәтә. Әле хәҙрәтте саҡыртып алыуы ла аптыраған көндән.

– Ҡан баҫымың үҙгәргән. Нык ҡына көйәләнгәнһең, йоҡламағанһың, – тине хәҙрәт тегенең ҡулдарын усынан ысҡындырмайынса. – Хәҙер үтер, хәҙер тынысланырһың...

Хәҙрәт төрмә начальнигының булмышын үтәнән-үтә күрҙе. Йәшәү ауыр был аҡыллы кешегә. Төрмә хужаһы булғыһы килмәй. Хәҙрәт уның әле ниңә саҡыртҡанын да аңлап тора. Һөйөклө ҡатынының ауыр хәле мәжбүр итә. Тирә-яғың яу булһын, өйөң эсе һау булһын, тимәҫтәр ине бит. Әҙәмде өй эсендәге, яҡындарына ҡағылышлы ҡайғы бөтөрөүсән.

Начальник бер аҙҙан еңел һуланы, әйтерһең, башын ауырттырып һыҡҡан ҡоршау һүтелде. Барлыҡ тәненән һалҡын тир бәреп сыҡты, хатта арҡа үҙәге буйлап ағып биленә төштө. Ошонан һуң күҙҙәре асылып ҡалды, бар тәнендә еңеллек һиҙҙе.

– Зәхмәтеңде ҡыуып сығарҙым, улым, – тине хәҙрәт һәм үҙенә бая күрһәтелгән урынға күсеп ултырҙы. – Эшеңде яратмайһың икән, – тип һүҙен дауам итте ул. – Яйы сыҡһа, икенсе урынға күс.

«Ҡайҙан бөтәһен дә белеп тора? Иҫ китмәле!» – тип уйланы төрмә начальнигы, хәҙрәткә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап. Үҙенә һиҙҙермәҫкә тырышып, уны һынаны.

Оҙонсараҡ яҫы йөҙлө, бейек маңлайлы, аҡ сырайлы йөҙөндә иң башлап киң ҡара ҡашы күҙгә ташлана. Әйтерһең, ҡыйғыр бөркөт ҡанаты. Түрәнең һынағаны бар, бындай ҡаштар, ғәҙәттә, бик көслө ихтыярлы шәхестәрҙә, йә ҙур етәксе кешеләрҙә генә була торған. Барыһынан да бигерәк начальникты хәҙрәттең күҙҙәре хайран итә. Уларға тура ҡарап булмай, эс-бауырыңда ни ятҡанын үтә күрер төҫлө. Күҙҙәрҙә үҙенә һурып алырҙай серле зиһен көсө бар икәнен тоя ул.

Ҡулдары ла үтә үҙенсәлекле. Уҫлаптай ҙур ҡулдарҙың бармаҡтары шундай нәфис, әйтерһең аҡһөйәк ҡулы, йәиһә пианистыҡы: үҙе нәҙек, үҙе оҙон. Тырнаҡтары ла оҙонсаланып миндаль емешенә оҡшап тора икән дәһә.

Начальник был серле ҡарттың холоҡ-фигелен дә тоҫмалламаҡсы итте. Һис шикһеҙ, күпте күргән, күпте кисергән, йәшәгән илендә абруйлы кешелер. Ныҡ рухлы, камил аҡыллы, зирәк зиһенле. Иң мөһиме ышаныслы, тоғро күренә. Бер аҙ шулай бер-береһен һынап ултыра торғас, начальник һүҙ башлап, төп йомошон әйтте.

– Быума сирлене йүнәлтә алаһыңмы, хәҙрәт? – Тотҡоно әллә ни уйламаһын өсөн өҫтәне. – Минең яҡын танышымдың ҡатыны шулай сирләй.

– Алып килегеҙ. Ҡулдан килгәнсе тырышырмын.

– Юҡ, ул үҙе бында килеп тора алмаҫ. Һеҙгә барып дауаларга тура килер.

– Мин риза, – үҙе һиҫкәнеп ҡуя. – Әллә ошо ҡатынды һауыҡтырыр өсөн йөрөттөмө уны тәҡдире? Булыр, булыр. Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел, ти нәсихәт.

Ошо һөйләшеүҙән һуң, төрмә начальнигы яйын сығарып, хәҙрәтте өйөнә алып ҡайтты. Сибәрлеге һушты алырлыҡ йәп-йәш ҡатын табын хәстәрләп йөрөй. Күрәһең, хәҙрәтте башта ҡунаҡ итмәкселәр. Үҙ милләтенең йолаһын тоталар, хуп. Табын артында ултырғанда: «Ошо ҡатын ауырый», – тип ҡуйҙы күҙҙәрендәге әрнеүле ҡарашҡа игтибар итеп. Етмәһә, балаға ла уҙа алмай икән. Йәлләү хисе күңеленән сайпылырҙай булган хәҙрәттең ҡатынды хәҙер үк бәхетле иткеһе килде.

– Ҡатыныңдың сире ҡурҡыныс түгел, уны һауыҡтырып була, туғаным, – тине ул үҙ-үҙенә ышанған тауыш менән. Әҙерәк үҙе тураһында ла һөйләүҙе кәрәк тапты. – Мине табиплыҡҡа мәшһүр Ғабдулла Сәиди уҡытты. Иҫ киткес белемле тирә-яҡта бер хәҙрәт ине. Быума сирен тик имләү, өшкөрөү аша һауыҡтырып була, ти торғайны. Мин өшкөргәндән һуң мөслимәнең ауырыуы ҡабатланмаҫ, ин шәәъ Аллаһ.

Хәҙрәт ҡатын менән икәүһен генә ҡалдырыуҙы һораны. Өшкөрҙө, имләп ауырыуҙы ҡыуҙы, бетеү яҙып бирҙе.

– Бәпәй теләйһең икән? – тине хәҙрәт. – Уны ла имләп була. Тик бер юлы ике ауырыуҙы ҡарау кәрәкмәҫ. Тағы килермен, Аллаһ бойорһа...

Хәҙрәттең һуңғы һүҙҙәре ҡатынды тамам шаңҡытты. Әйтмәйенсә лә ҡайҙан белеп тора бөтәһен дә? Ул хәҙергә хәҙрәткә рәхмәтен генә әйтә алды.

Быума сире, ысынлап та, башҡаса ҡабатланманы. Ай-ай ярым ваҡыт үткәс, ауырға ла ҡалды. Бындай оло бәхет-шатлыҡтан үҙенә ҡанаттар үҫкәндәй хис иткән йәш ҡатын, бер көндө иренә әйтте:

– Хәҙрәткә ниндәй рәхмәттәр әйтһәм дә аҙ булыр. Төрмәнән азат итер инең уны һис юғы.

– Мин дә шул турала уйлап йөрөйөм. Ҡапыл эшләнә торған эш түгел шул ул, ҡәҙерлем.

– Тыуасаҡ балабыҙ хаҡына, зинһар, тырыштыр, – тине ҡатын иренә ялбарып. – Уның өшкөрөүе килешеп, Хоҙай Тәғәлә һаулығымды ҡайтарҙы лаһа.

– Дөрөҫ әйтәһең, ошондай затлы кеше төрмәлә әрәм булып ятырға тейеш түгел. Аллаһ бирһә, ҡулдан килгәндең барыһын эшләрмен.

Ошо хәлдәрҙән һуң хәҙрәткә төрмәлә мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрҙе.

Надзирателдәргә:

– Хәҙрәткә теймәгеҙ. Йөрөһөн үҙ яйына, – тигән бойороҡ бирелде. – Ҡасып китер булһа, күптән ҡасҡан булыр ине.

Табиплыҡ даны таралған хәҙрәтте шыпырт ҡына төрлө ергә алып йөрөтә башланылар. Мәҫәлән, соҡорға ҡолап, аяҡһыҙ ултырған ун ике йәштәр тирәһендәге бер ҡыҙҙы күрһәттеләр.

– Соҡорҙа аяғыңды бер нәмә тарттымы? – тип һорай хәҙрәт.

– Эйе, – ти ҡыҙыҡай, – аяғымды саҡ-саҡ һурып алдым. Һөйрәп, аҫҡа тартты.

– Ҡәбер емерелеп, ҡәбергә төшкән бит аяғың. Зәхмәтле урын булған. Ыңғайы доға уҡып төкөрһәң, сир улай йәбешмәҫ ине лә. Белмәгәнһең шул, эй, бала...

Ҡыҙҙы хәҙрәт өс ҡат өшкөрҙө. Күҙгә күренмәгән заттарҙы ҡыуҙы:

– Ҡышш-ҡышш, мәлғүндәр, ҡалдырығыҙ баланы, юғиһә, затығыҙҙы ҡоротормон, – тип төкөрә-төкөрә әрләне.

Башта һауығыуына әллә ни ышанмаған әсә, ҡыҙы аяғына баҫып атлап киткәс, хәҙрәттең аяҡтарын ҡосаҡлап иланы. Табиптың был тиклем дә алҡышланыуҙы беренсегә күреүе ине.

– Ҡуйсы, ҡуйсы, улай тимә, ханым. Һеҙгә файҙам тейә алыуға шатмын.

Кемдең балаһын имләп һауыҡтырыуын хәҙрәт аҙаҡтан ғына белде. Баҡһаң, судьяның ҡыҙы булған икән. Бәхетле әсәгә ғилем эйәһе шуны әйтте. Ҡыҙығыҙ дин юлынан барһын. Бәхете асылыр.

Май урталары ине, хәҙрәтте төрмә начальнигына саҡырттылар.

– Мөжәүир ағай, беҙ күмәкләп һине төрмәнән срогыңдан алда сығарыуҙы юлланыҡ. Эшебеҙ барып сыҡты. Документтар әҙер. Ошо беҙ биргән справканы күрһәтһәң, һине берәү ҙә тотмаҫ, – тине түрә. – Ҙур рәхмәт, әүлиә, яҙмышыма рәхмәт беҙҙе осраштырған өсөн. Тиҙҙән бәпәйебеҙ буласаҡ. Кәләшем көн дә һеҙгә рәхмәт уҡый.

– Мин дә рәхмәтлемен һеҙгә, – тине Мөжәүир хәҙрәт. – Балаларығыҙ күп булһын, изгелектәрен күреп, ҡыуанып, тыңтигеҙ йәшәгеҙ.

Төрмә начальнигы хәҙрәттең ҡулына бер сумка тотторҙо:

– Ҡатыным юлға аҙыҡ һалғайны. – Кеҫәһенән алып ҡағыҙ аҡса һондо. – Иҫән-һау ҡайтып етегеҙ.

Шулай итеп, ун йылға хөкөм ителгән хәҙрәт, дүрт йыл ултырғандан һуң, ирекка сығарылды.

Йә, Хоҙай, ниндәй ғәйептәре өсөн ошо тиклем ғазаптар кисерҙе һуң ул? Әллә, юғиһә, бында үҙе сирҙән ҡотҡарған кешеләрҙе һауыҡтырыу өсөн ебәрҙеме бында Хоҙай Тәғәлә? Әллә ныҡлыҡҡа, Хоҙайға тоғролоҡҡа һынау булдымы?

Төрмә ишеген тыштан япҡас, ул иркен тын алды. Ошо көндөң тиҙҙән килерен алдан һиҙеп йөрөһә лә, нисектер ышанып етмәгәйне. Аллаһҡа шөкөр, ул иректә! Төрмә еҫенән, тәмһеҙ ашынан, һоро төҫөнән тамам биҙрәгән хәҙрәт ҡайтыу яғына ҡоштай талпынды.

# Ҡайтыу

Эй, илаһым, иректә тормош ҡайһылай ҙа йәмле! Көн матурлығына кинәнеп атлаған хәҙрәт, ниһайәт, ҡала ситенә етте. Ана, Стәрле юлы күренеп ята. Ҡасандыр Йылайыр төрмәһенең атыуға хөкөм ителгән тотҡондары менән ауыр бығауҙарҙы шалтырата-шалтырата шәреле ошо юлдан Өфөгә килеп ингәйнеләр. Мөжәүирҙең йөрәге әрнеп ҡалды. Ун биш кешенән бер яңғыҙы кире ҡайтып килә. Ул үҙенең иҫән ҡалыуына, иреккә сығыуына бер килке ҡыуана ла алмай, баш баҫып атланы. Зәңгәр күк аҫтында һәр кемгә лә урын етәрлек тәһә. Хоҙай биргән ошо яҡты донъяны ниңә башҡаларҙан ҡыҙғанырға? Ниңә кешеләр һәүетемсә генә йәшәмәй? Бер-береһенең алҡымынан ала, йәнен ҡыя? Ниңә әҙәм балаһы бер-береһенә ҡаныға? Яһилдар намыҫлыларға, йыуаштарға көн күрһәтмәй. Үҙҙәрен Хоҙай Тәғәләнән дә юғары ҡуя. Үлгәс кешегә ике аршин ер етеүен аңламай улар. Бәндәнән бәндә һис кәм түгел, тәҡдирҙәр генә төрлөсә. Ҡайһы берәүҙәр, хәленән килһә, ҡояшты тик үҙе өсөн генә яҡтыртып ҡуйыр ине. Әммә Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң. Ул булған нәмәһен һәр кемгә тигеҙләп өләшә. Яһил, тәкәббер әҙәмдәрҙе Әхирәттә ҡаты һорау алыу көтә. Шуны ишетә-белә тороп, күптәрҙең насар ғәҙәттәрен ҡуймауын, тамуҡ киҫеүе булыуҙан ҡурҡмауын аңлай алмай хәҙрәт.

Ҡуйсы, ҡуйсы, бынау тиклем хозур донъяның бәҫен ебәреп, ниңә гел күңелһеҙ нәмәләрҙе уйлап бара әле? Ул юл ситендәге ап-аҡ сәскәгә төрөнгән муйылдан бер бәләкәс ботаҡ һындырып алды. Эх, хуш еҫкәйҙәре! Тәмле, тәмле! Ана, арыраҡ умырзаялар йылмайыша. Улар саф сабый күҙенә оҡшаш таждарын ҡояшҡа төбәгән. Ярай, уны матур мәлдә сығарҙылар төрмәнән. Яҙ – яҙ инде. Күңелдәрҙе елкендереүгә, йәшәүгә дәрт уятыуға һәләтле миҙгел. Бер аҙ баргас Мөжәүир ҡаҡы өҙөп ҡапты. Ана, улар бер аҡлан. Йәш ҡуҙғалағы, мине лә өҙөп ҡап тигәндәй, ялпылдашып ҡул болғай. Эх, ошо матур мәлдә ҡош ҡына булып Манһырына ҡайтып инһәсе! Балаларын, Гөлйемешен өҙөлөп һағынды бит. Олпат Урғаҙаһын, шаян Шүрәлеһен, Сусаҡтауҙа бесән



Ҡыңғырташ тауы

сапҡандарын хәтерләү хистәрен баҙратты, аҙымдарын да ҡыҙыулатты.

Әммә тиҙ ҡайтыу мөмкин түгел шул. 600 саҡрымлап араны йәйәү үтеүгә ай самаһы ваҡыт кәрәгер. Ярай, ҡайтып етер, иң мөһиме, ул иректә, ин шәәъ Аллаһ.

Башта Мөжәүир төрмә начальнигы биргән төйөнсөктәге ризыҡты самалап ашап барҙы, аҙаҡ үләндәргә, ризыҡҡа яраҡлы тамырҙарға күсте. Аҙаҡ, ныҡ йонсой башлағас, юл буйында осраған ауылдарға туҡтап, аят уҡыны, ауырыуҙарҙы дауалап, өшкөрөп, имләп тамаҡ туйҙырҙы. Ашыҡһа ла, Стәрлегә боролоп инеп, Ғибаҙулла дуҫының ҡәбере өҫтөндә аят уҡыны. Хоҙайҙан уның йәненә тыныслыҡ һораны.

Төрмә начальнигы биргән аҡса шул көйө әле. Һаҡлабыраҡ килә. Бәлки, ҡайтып етер алдынан арттырып, өйҙәгеләргә күстәнәс-маҙар алыр.

Ниһайәт, оҙон-оҙаҡ юл үтеп, июнь урталарында ул

Баймаҡҡа инде. Арып-талып өс саҡрымда ятҡан Иҙелбай ауылында төпләнгән ике туған ҡустыһына килеп йығылды.

– Атаҡ-атаҡ, Мөжәүир ҡайнаға, был һинме? – тип бер килке таный алмай торҙо Райхана килене. – Ҡуйсы, ҡуйсы, Хәмиҙулла, Хоҙай үтенесебеҙҙе ишеткән бит, – тип ҡыуанысынан ҡайнағаһын ҡайҙа ултыртырға белмәне, өлтөрәп йөрөп табын әҙерләргә тотондо. Мунса яҡтырҙы.

– Уй, ҡайнағамды ғына! – Берсә балалай күреп арҡаһынан тупылдатып алды, берсә тәтелдәп ғаиләһенең, туғантыумасаһының хәлен һөйләне.

Хәмиҙулла ла, ҡатын-ҡыҙ кеүек ялпылдап тормаһа ла, ағаһының иҫән-һау ҡайтып килеүенә сикһеҙ шат.

– Немец фашистары һуғыш асырға әҙерләнә, тип алдан күреп әйткән өсөн ултыртҡан булдылар. Йә, хаҡ булманымы ни? Ана, нисек ҡоторона дошман. Көн дә бер өйгә ҡара ҡағыҙ килеп кенә тора.

Ирҙәр бер аҙ фронттағы хәлдәр тураһында һөйләшеп алды.

– Ағай, был һуғыш ҡасан бөтөр икән? – тип һораны Хәмиҙулла.

– Ике йыллап барыр. Шулай ҙа һуғыш беҙҙең еңеү менән тамамланасаҡ. Беҙҙең һалдаттар немецты хатта өңөнә алып барып дөмбәҫләр.

– Ысынмы, ағай?

Өйҙәгеләр әүлиәнең һүҙен ишетеп, ныҡ шатланды: «Бирһен Хоҙай! Көнө-төнө теләгебеҙ шул», – тине Райхана ла һүҙҙе йөпләп.

Хәҙрәт туғандарына өйҙән сығып киткәндән алып ҡайтып килгәнгә тиклемге хәлдәрҙе бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Төрмәлә һәйбәт кешеләрҙе осратыуы, шулар ярҙамы аша ҡотолоуын әйтте.

– Ун йылға хөкөм иткәйнеләр. Төрмә начальнигы үҙе юллап, ғәйепһеҙ икәнде иҫбатлап, бына дүрт йыл тигәндә иреккә сығарҙылар, – тине хәҙрәт.

Хәмиҙулла агаһын бер нисә көнгә ҡалырға димләне.

– Хәл ал әҙерәк, юҡһа таный алмай торорҙар, – тип ағаһын йәлләп, ниндәй хөрмәт күрһәтергә белмәне.

Иртәнге сәй эсеп ултырғанда Мөжәүир хәҙрәт әйтте:

– Имен-аман әйләнеп ҡайтһам, ни һораһаң, шуны биреп, теге Мысыр иленән алып ҡайтылған Ҡөрьән китабыңды алырмын, тигәйнем.

Хәмиҙулла ҡомартҡыны ағаһының алдына килтереп тә һалды:

– Бер нәмәң дә кәрәкмәй, ағай, ал Ҡөрьәнде, ул һиңә фарыз. Иҫән-һау ҡайтыуыңа ҡыуанып, бүләк итәм. Былай ҙа ул һиңә тейешле аманат ине, – тине.

Аҫыл ҡомартҡы ҡулына килеп эләккәс, хәҙрәт ат менгәндәй ҡыуанды. Был изге китапта ахырызаман ғәрәсәттәренән һаҡланыу юлдары өйрәтелгәйне. Әҙ-әҙләп кешеләргә әшкәртә йөрөр. Дингә күндереү юлдарын табыр. Рухы ныҡып етмәгәндәргә – аҡыл, рухи көс, майырыҡтарға, һәүректәргә – үҙ-үҙенә ышаныу хисе бирер.

Фән һәм динде бер бөтөн итеп ҡарау тураһында фекер тупларға теләй ул. Кешелек донъяһын һәләкәттән барыбер дин ҡотҡарасағына ла уның иманы камил.

Ошолар тураһында хәҙрәт Хәмиҙулла туғаны менән оҙаҡ һөйләште. Уларҙың һүҙҙәре килешә, фекерҙәре бер иш.

Иҙелбайҙа ике-өс көн ял итеп, әҙәм төҫөнә ингәс, күңеле ҡайтырға атлығып торған хәҙрәт юлға сығырға булды.

– Атым булһа, «һә» тигәнсе алып барып килер инем, – тине ҡустыһы үкенеп. – Ағай, йәйәү ҡайтарғанға ғәйеп итмә инде, зинһар. Кискә табан ҡайтып инерһең.

Хәҙрәт Баймаҡ менән Манһыр араһын – 25 саҡрымды йәйәү барыуына хатта ҡыуанып та ҡуйҙы. Йәненә ғәзиз тыуған яғы шау сәскәгә күмелгән саҡ. Шүрәле йылғаһы буйлап барыуы үҙе бер ғүмер. Ниндәй хозур уның йәнтөйәге! Аҫты тулы хазина, өҫтө тулы байлыҡ. Ана, ҡыуаҡлыҡтары, шау ҡарағатлыҡ, балан ояһы, муйыллыҡ.

Олоһаҙ ҙа күренде. Тимәк, ауылына ҡул һуҙырлыҡ ҡына ара ҡала. Мең ғазаптар күреп, ниһайәт, үҙ иленә ҡайтып еткән хәҙрәттең йөрәге күкрәгенән сыға яҙып типте. Тирәһендә аллы-гөллө күбәләктәр өйөрөлә, әйтерһең, шатлыҡ хисен уртаҡлаша. Баш осонда өҙҙөрөп бер ҡошсоҡ һайрап ебәрҙе. Хәҙрәт уға өндәште:

– Ҡошсоғом, эй, бәләкәсем, бар әле, ос әле Манһырға! Гөлйемешемдең тәҙрәһенә ҡун да һайра әле! Мөжәүирең ҡайтып килә тиң.

Ҡошсоҡ, гүйә, уны аңланы. Йәһәтләп Манһырға табан йомолдо. Хәҙрәт тә аҙымдарын ҡыҙыулатты.

## Чабан Миңлеғол

Әүлиәлек ҡөҙрәте аша ла, гәзит-журналдарҙан уҡып та илдең тын алышын, донъя күләмендәге хәл-әхүәлде белеп ултырған Мөжәүир хәҙрәт Рәсәй юлбашсыһы Сталиндың етәкселек итеүенән ҡәнәғәт түгел ине. Илде күрәләтә ҡанға батырыусы мөрәүәтһеҙҙе иблис тип атаны, йә ғифритҡа тиңләне. Уның хөкөм һөрөүе күпкә бармаҫын белгән әүлиә, Сталиндың үлеүе хаҡында ишеткәс, еңел һуланы, әйтерһең, өҫтөнән тауҙай ғәм төштө.

– Ниһайәт, илде бөлдөрөүсе гонаһ шомлоғонан ҡотолдоҡ, – тине. – Артыңа ҡарама көлө.

Дәүләт башлығына ҡаты нәфрәтен кешеләргә былай тип аңлатты:

– Халыҡ араһынан һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ шикелле нәгеҙҙәрен һыпырып алып түктерҙе. Әҙәмдәргә аяуһыҙ, рәхимһеҙ. Хоҙай Тәғәләнең барлығын, берлеген танымаңы, иблис ялсыһы булды. Гел ҡарғыш, рәнйеш алды.

Аңды-тоңдо аңлап етмәгән бер ҡатлыраҡ әҙәмдәргә:

– Юҡҡа балауыҙ һыҡмағыҙ. Әҙерәк ваҡыт үтһен әле, күҙегеҙ дөрөҫлөккә асылыр. Уның кем икәнен белерһегеҙ ҙә үҙегеҙ үк ул хаинға ләғнәт уҡырһығыҙ, – тип тә өҫтәне.

Ҡаты күңелле Сталин тарафынан өркәккә әйләнеп бөткән халыҡ хәҙрәт әйткәндәрҙе өндәшмәй генә хупланы. Сәүит тирәһендә үҫкән йәштәрҙең ҡайһы бере ул әйткәндәрҙе өнәмәне, ҡаршы сыҡты.

– Сталин – беҙҙең атабыҙ. Ул – даһи. Юлбашсыбыҙҙың аҡылы менән яуыз Гитлерҙы еңдек, – тип һүҙ көрәштерҙе үҙен донъя тотҡаһы итеп һиҙгән партия ағзаһы, тәкәббер чабан

Миңлеғол да. – Иҫкелек ҡалдығы, тюремщик Мөжәүир мулла нимә һөйләмәҫ?

– Үҙең нимә һөйләгәнеңде беләһеңме, молокосос, – тине уға яу юлын үткән оло йәштәге ир. – Әллә һуғышта булдыңмы? Белә-белгең килһә, һинең яһил даһийың илде үҙ ирке менән утҡа тоттторҙо. Хатта ул яуызды, немец армияһы сикте боҙоп инде, тип килеп әйткән берәүҙе аттырып торған, тип тә ишеттек.

Былдай бәхәстәрҙән һуң хәҙрәттең дә күңел яралары ҡанһырай башлай.

– Йәмәғәт, мине төрмәгә енәйәт ҡылған өсөн ултыртманылар. Тиҙҙән герман Рәсәйгә һуғыш аса, беҙ ҙә әҙерләнәйек, тигәнемде оҡшатманылар. Йә, дөрөҫ булманымы ни? Фашистар йоҡлап ятҡан ерҙән килеп баҫты бит. Хәлемдән килһә, туҡтатыр инем ул ҡоторған эттәрҙе. Йөҙәр меңгә ҡаршы торорға ҡөҙрәтемдән килмәне. Әйткәнгә ҡолаҡ һалһалар, был тиклем ҡыйралыш, ҡан ҡойош булмаҫ ине. – Хәҙрәт үткер ҡарашын Миңлеғолға төбәне. – Икенсе уйлап һөйлә, улым, йәме.

Һикһәнгә етеп килгән хәҙрәтте, тормоштан артта ҡалғанға иҫәпләгән Миңлеғол, эстән генә мыҫҡыллы йылмайҙы: «Белемсе, байғош...» Хәҙрәт һүҙен дауам итте:

– Ҡара иҫәп менән һанайыҡ: репрессия ҡорбандары Ватан һуғышында шәһит киткәндәрҙекенә тиңәлә. Рәсәй халҡын Сталин менән Гитлер ҡырҙырҙы. Хәтер һандығына һалып ҡуйығыҙ, бер саҡ, бәлки, 10–20 йыл үткәс, үҙҙәре әйтер.

Хәҙрәттең былдай хәбәрҙәрен, Сталинға тел тейҙереүен, колхоз хисапсыһы Сөләй хөсөт тә ишетеп ҡалды.

Ошаҡ ташып, ғәйепһеҙ кешеләргә яла яғыуҙан йәм тапҡан был әҙәм, Мөжәүир хәҙрәттең теле тотлоҡҡан ҡыҙын һауыҡтырыуын да иҫәпкә алып тормай, иртәгеһенә үк юҡ йомошон бар итеп, район үҙәгенә юл тотто. Көнө буйы көтөп ултырып булһа ла, район башлығы Мәҡсүтовтың үҙенә инде.

– Мөжәүир хәҙрәт Сталин менән булыша, – тине ул шыпырт ҡына, – халыҡты уға ҡаршы ҡоторта. Чабан Миңлеғолдан башҡаһы уға эйәрә...

Был кешенең әүлиәлек ҡөҙрәте тураһында хәбәрҙар Вилким Сабирович күтәрелеп һуғылманы, тыныс ҡына итеп:

– Ҡуйығыҙ әле, туҡтатығыҙ оло кеше менән булышыуығыҙҙы, – тине, – ошаҡ килтергән әҙәмдең ярамһаҡ оҙонса йөҙөнә ҡарамаҫҡа тырышып. Эстән: «Әпкәләй, сволочь, – тип уйланы. – Бына шулай итеп башҡорт башына башҡорт етә лә инде. Әүлиә хәҙрәт һинең ни эшләп йөрөүеңде һиҙеп, әшәке телеңдән яҙҙырһа, белер инең ҡәҙерен...»

Ысынлап та, бер нисә көндән район хужаһы бухгалтер Сөләймәндең телдән ҡалыуын, һөйләшә алмауын ишетте. Хәҙрәттең хикмәттәре тураһында аҙым һайын ишетеп йөрөһә лә, был хәл уны хайран итте.

– Әллә минең ни уйлағанымды белдеме икән?

Вилким Сабировичтың хәҙрәткә ихтирамы артты. «Йылайыр» совхозы директоры әйтеп, уны һәр төрлө һалым, недоимкаларҙан азат иттерҙе. Бөтә халыҡ һөйөүен яулаған аҡһаҡалдың үтенесенә ҡолаҡ һалып ауыл тирәһендәге ерһыуҙы әрһеҙләтмәне: ферма-фәлән һалдыртманы, ҡылғанлы далаһын һөрҙөртмәне. Манһыр тирәһе йәм-йәшел сирәм булып, йөҙәр гектарға етеп, йәйрәп ята бирҙе. Аралтау, Иманай битләүҙәре, Ҡыҙылъяр, Сусаҡтау итәктәре, Шүрәле, Урғаҙа буйҙарында иһә, хәҙрәттең иң ятаҡан малы – йылҡыға хөрриәт хәҙер. Ярым ҡырағайға әйләнгән йылҡы өйөрҙәрен көтөүсе лә, иҫәбе-һанын белеүсе лә булмай. Талымһыҙ хайуанға күп кәрәкме, ҡылған булһа, шул етә. Ошо йылда бәләкәй генә колхозды совхоз бүлексәһе итеп теркәнеләр, әммә етәкселәр барыһын да хәҙрәт теләгәнсә эшләне.

Йәш совхоз был йылдарҙа игенселек, орлоҡсолоҡ менән күтәрелә башлай. Директор итеп таҫыллы етәксе Яхин Рәхимйәнде тәғәйенләп ҡуйғас, эштәр бигерәк йәнләнә. Ишелеп уңған иген тау-тау ята, мал-тыуар илереп үрсей, емеш-еләк баҡсаһы булдырыла, йәшелсә мул... Уттай эш ваҡытында ла, берәй форсатын табып, Рәхимйән Хәйретдинович Манһырға һуғылып киткеләй. Совхоз өсөн янып-көйөп ултырған хәҙрәткә яңылыҡтарҙы һөйләп, кәңәш-төңәш итә. Турһығына һаумал ҡымыҙ алып, юлын дауам итә.

– Яндырайлығын ауыҙлыҡлаһа, был кеше юғары күтәрелер, – тип юрай хәҙрәт, уға һаулыҡ, совхозға уңыштар теләп.

Бер шулай арып-талып Рәхимйән Хәйретдинович юл ыңғайы, гәҙәтенсә, Манһырға боролоп инә. Лупа тотоп, гәзит уҡып ултырған Мөжәүир хәҙрәтте күреп, хайран ҡала.

– Донъяла ниндәй яңылыҡтар бар? – тип һорауы була, хәҙрәт:

– Тиҙҙән Йылайыр совхозына ҙур хөкүмәт наградаһы тапшырасаҡтар, – ти.

– Гәзиттә бармы әллә? – тип Рәхимйән ынтыла.

– Юҡ, үҙем беләм. Йылайырҙың киләсәге зәһәр өмөтлө, – ти хәҙрәт. – Еребеҙ изге беҙҙең.

Ҡыуанысынан арыуын да онотҡан Рәхимйән хәҙрәтте ҡосаҡлап ала.

– Ауыҙыңа бал да май, йөҙ йәшә, хәҙрәт, – ти.

Ысынлап та, көҙгөһөн уңыш байрамында Өфөнән килгән ҙур түрә Йылайыр совхозына Ленин ордены тапшыра.

– Һөйөнсөһөнә ауылыңа движок ҡуйҙыртам! – ти Рәхимйән һәм һүҙендә тора.

Дүрт өйлө ауылға ниңә кәрәк ул, тип дау ҡуптарған баш инженерға ҡаты бойора:

– Иртәгә үк Манһырға күсереп йөрөтмәле бәләкәй двигатель ултырттыр. Унда бөйөк аҡыл эйәһе, бөйөк әүлиә йәшәй.

Бейәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа тимәҫтәр ине. Әҙәмдең дә төрлөһө бар. Гонаһ шомлоҡтарҙы ла, ни ғиллә менәндер, замана үҙе барлыҡҡа килтерә. Яңы власть ҡотҡоһона бирелеп, был саҡтарҙа, Аллаһты ла, мулланы ла һанламаусылар ҙа күбәйә. Әҙәпле, тәүфиҡлы булығыҙ тип өйрәтеүселәр, замандан артта ҡалыусылар һымаҡ күренә. «Тәүфиҡ» һүҙен ҡулланыуҙан төшөрөп ҡалдырырға итәләр, уның мәғәнәһен аңламамышҡа һалышалар.

Анау чабан Миңлеғолдо ғына алайыҡ. Олоно – оло, кесене кесе тип белмәй. Мин партийный, партбилетымды көтөү көткәндә лә йөрәк тәңгәлендә – түш кеҫәмдә йөрөтәм, тип шапырына. Яңғыҙ йөрөгәндә эт-ҡошҡа, бәлә-ҡазаға тарып

ҡуймаһын тип, бисәһе Мәхмүзә хәҙрәттән бетеү яҙҙыртып алып, иренә һиҙҙермәй генә, эс яҡтан бишмәт яғаһына тегеп ҡуйҙы. Шуны ҡайҙандыр белеп, Миңлегол өйҙә дау ҡуптарҙы. Бетеүҙе утҡа яҡты ла:

– Мине, партия ағзаһын, позорить итеп йөрөйһөң. Бынан һуң хәҙрәттең өйөнә ике аяғыңдың берен баҫаһы булма! – тип екерҙе.

Миңлегол хәҙрәт арҡаһында ауылдашы Ғабдрахман менән дә тәмһеҙләште.

...Ирҙәр тәмәке көйрәтеп торған ерҙә Ғабдрахман Миңниса апаһының ҡыҙы Райхана менән булған хәлде һөйләне.

– Педучилищела уҡып йөрөгән ҡыҙ бала тышта, йәшел сирәмдә, имтиханға әҙерләнгән. Йоҡоһо килеп, ятып торған. Өҫтөнән ниндәйҙер имәнес һалҡын нәмәнең шыуышып үтеп барыуына һиҫкәнеп уяна. Ни күҙе менән күрһен, йылан, ти. Ҡото осҡан ҡыҙыҡай шул ерҙә һушһыҙ ҡолай. Иҫенә килһә, телдән яҙған. Күпме тырышһа ла, бер һүҙ әйтә алмай ҙа ҡуя икән. Ата-әсәһе шунда уҡ дауаханаға алып бара быны.

– Беҙҙең ҡулдан килмәй, ҙурыраҡ ергә алып барып күрһәтегеҙ, – тип ҡайтаралар.

– Тороп тороғоҙ әле, – ти ҡыҙҙың өләсәһе, – ниңә уны йонсотоп, әллә ҡайҙа алып китергә? Ана, хәҙрәткә алып барығыҙ, шул ыңғайы ейәнемә һөйләшеү ҡеүәһе ҡайтыр.

Ата-әсә оло кешенең һүҙен йыҡмай, Райхананы Манһырға алып китә.

– Ҡыҙымды көтәүелләп сығып китмәй торҙом, – тип ҡаршылай уларҙы табип хәҙрәт. Былдай сибәр, уҡытыусы буласаҡ баланы нисек ҡарамайһың.

Хәҙрәт доға уҡып, баш-күҙенә өрә, ҡулы менән сәстәренән һыйпай, ауырыуҙы алып ырғытырға теләгәндәй, серле хәрәкәттәр яһай. Бер аҙҙан ҡара күҙҙәре менән үҙенә мөлдәрәп ялбарып ҡараған ҡыҙға өндәшә.

– Йә, балам, олатай, рәхмәт, һауыҡтырҙың, – тип әйт әле.

Һөйләшә алмау хәленә күнегеп барған ҡыҙыҡай, башта ышанмай тора. Шулай ҙа хәҙрәт әйткәндәрҙе ҡабатларға була.

Тауышы элеккесә гөрөлдәп тора. Ҡыҙ илап та ебәрә. Ата-әсәһе хәҙрәткә ни алып, ни бирергә белмәй шатлана, рәхмәттәр әйтә.

Ғабдрахман һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән әлеге лә баяғы чабан ырғып сыҡты.

– Чушь! – тине. – Демагогия! Хәйер-саҙаҡаны йыйыу өсөн тараткан әкиәт.

– Көфөр булма, Миңлегол, – тине тыңлап тороусыларҙың береһе, – хәҙрәт – ысын табип ул.

– Нindәй көфөр булыу, ти. Ана, минең бисә Рәмил улым ныҡ илагас, алып барган икән. Йәнәһе, күҙ теймәнеме, тигән.

– Шунан, шунан?

– Улыңа күҙ теймәгән, ауыртҡан ере лә юҡ. Бәләкәй бала – әүлиә. Ул ҡайғырып илай, тигән. Үҫкәс, йәнәһе, минең малай сит ерҙә йәшәй була. Үҙ теләндә һөйләшә алмай зарыға булыр. Йә, ҡайһынығыҙ шуға ышаныр? Алты айлыҡ баланың алдан ҡайғырып илауын ишеткән-күргәнегеҙ бармы?

Кешеләрҙең өндәшмәй һүҙһеҙ ҡалыуын үҙенсә аңлаған Миңлегол фәлсәфә ауын ныгыраҡ йәйелдерҙе.

– Хәҙрәт тоткан була ла, һыуҙы тәләфләмәгеҙ, гонаһ була, ер өҫтөндә эсер һыу ҡорой, ти. Чистый әкиәт! Ер шарының өстән ике өлөшө һыуҙан тороуҙы ул наҙан ҡайҙан белһен! Йәнә тагы. Ахырызаман етеп килгәндә бәндә мөйөшкә текәлер ҙә ултырыр, айырып алып булмаҫ, ти. Йә, аңлы кеше шуга ышанырмы? Ул аферистың һүҙен тыңлай башлаһаң...

– Хәҙрәт менән бульшып, үҙеңә гонаһ алма. Уның һиңә ни зыяны тейҙе? – тине лә Ғабдрахман китә башланы. Уның артынан башҡалар ҙа таралышты.

Миңлеғол бер яңғыҙы баҫып ҡалһа ла, сер бирергә теләмәне. Китһендәр әйҙә, тип уйланы. Береһенә лә ялынысы юҡ. Типһә, тимер өҙөрҙәй, баҫһа, баҡыр иҙерҙәй. Колхоздың абруйлы чабаны әле ул. Яңыраҡ съезга барып ҡайтты. Эше – эш, донъяһы – донъя. Әлбиттә, яңы замандың яңы кешеһенә, бер мәл Мөжәүиргә килеп баш эйермен, тигән уй килеп тә сыҡманы.

Ысынлап та, чабан Миңлеголдоң эштәре көйлө барҙы. Йәйгеһен ваҡ мал көтөүҙең артыҡ ыҙаһы юҡ. Һарыҡтарын тау битләүенә ебәреп, этенә тапшыра ла, үҙе берәй ҡуләгәлә ятып

ял итә. Кәрәк саҡта үҙ эше менән дә булыша. Ана, ҡыш сығырлыҡ бесәнен дә сабып күбәләне. Кәртә-ҡураһына һайғауын да әҙерләп ҡуйҙы. Алдынғы чабан үҙе менән китаптар ҙа алып йөрөтә. Һарыҡтарҙы фәнни нигеҙгә таянып тәрбиәләү мәсьәләләрен өйрәнә, йәнәһе.

Көҙгөһөн, ваҡ күҙле ямғырҙар йышайғас, ыжғыр елдәр иҫкәндә башлана көтөүсегә бәйнәт. Ел иҫеп ебәрһә, аңра мәхлүктәр, күҙен алған күгәүен кеүек, ҡайҙа барғанын белмәй, зыулап, унда-бында олаға.

Бер көндө, шулай, Миңлеғолға кәбәнен алып ҡайтырға трактор табылды. Ул һарыҡтарын ялан кәртәгә бикләне лә үҙ эшенә һыпыртты. Бесәнен алып ҡайтып, төштән һуң килһә, отаранан елдәр иҫкән. Был ни ғилләә?

Сәбәләнеп тирә-яҡты байҡай һалды. Һарыҡтарының әҙе-еле лә юҡ. Совхоз хужаларына дөрөҫөн әйтергә ҡыйыулығы етмәйенсә, башта яңғыҙы эҙләп маташты. Эш сығара алмағас, артыҡ йәшереп булмаҫты аңлап, управляющийға хәлде һөйләп бирҙе.

– Мин партийный, тип гел күкрәк һуҡҡас, эшкә яуаплы ҡарайҙыр, тип һиңә ышанып, иң ҙур отараны биреп ҡуйҙым. Өйөң бейек, өйрәң шыйыҡ булып сыҡты.

Унан Миңлеғолға халыҡ дошманына ҡарағандай уҫал текләп:

– Белеп ҡуй, көтөүҙе тапмаһаң, башыңды төрмәлә серетермен, – тине. Зоотехнигы ла сәүек эт кеүек ләңкелдәп ҡуштанланды.

– Съездарға ебәреп шаштырғас ни, һауаланды.

Управляющий әйткәнгә риза булһа ла, зоотехникка эстән рәнйене чабан. Ғаилә менән ҡатнашалар. Ҡатындары әхирәт. Былтыр бер трактор санаһы бесән сабып бирҙе. Хәҙер килеп ни һөйләп тора? Шул әҙәмгә ышан инде. Миңлеғол һарыуы ҡайнауҙан яңаҡ тештәрен шығырлатты, әммә өндәшмәне, ғәйебе булғас, түҙҙе.

Ҡайта һалып рюкзагына аҙыҡ тултырҙы ла, атына атланып, йәнә бер яңғыҙы юғалған һарыҡтарын эҙләп китте. Иң башта Урғаҙаны буйланы. Ҡыҙылъяр тауын, Сусаҡты үтте. Ғәли ауылына барып етте. Тапманы. Управляющийҙың:

«Башың төрмәлә серер», – тигәне ҡолағында нығыраҡ яңғыраны. Ураҡсыларҙы заманында бер кило арыш урлағаны өсөн НКВД ете йылға тиклем иркенән мәхрүм иткән. 1932 йылда Сталин сығарған закон һаман үҙ көсөндә. Бер көтөү, тимәк, биш йөҙ һарыҡ өсөн тиреңде тереләй тунамаҫтар тимә. Ҡаҙаҡтар ҡыуып алып китһә, бөттө баш. Миңлеғолдоң арҡа үҙәге буйлап һалҡын тир аҡты. Өйөнә ҡайтып та тормай, Ғәленән Фәйзуллаға сыҡты. Шүрәле йылғаһы буйлап үрләне, йөрөмәгән ерҙе ҡалдырманы.

Ике көн тигәндә саҡ ҡайтып инде. Малдар табылманы. Өсөнсө көнөнә быҫҡаҡлап ваҡ күҙле ямғыр һибәләне. Арып ахмалға төшкән Миңлеғол атын ғына алыштырҙы ла Байыш, Ҡарамалы яҡтарына йүнәлде. Һәр үҙәкте, ҡыуаҡлыҡтарҙы тентеп сыҡты. Малҡайҙар һыу төбөнә төшкәндәрме ни? Тағы буш ҡул ҡайтып инде.

Ҡатыны Мәхмүзә малын эҙләп хәлдән тайған ире өсөн ҡайғырып, ни эшләргә белмәне. Һыуланып, саҡ аяғын һөйрәп ҡайтып ингән иренә бер көн ялынып-ялбарып әйтте.

– Миңлеғол хәҙрәткә барып ҡараһаңсы... Башта әсе телең өсөн ғәфү үтен. Әүлиә кенә тотмай, шунда уҡ дөрөҫөн әйтер, ни эшләргә кәрәклекте өйрәтер. Ана, Сөләймән хөсөт тә, баш эйеп, ялбарып барғас, һауыҡтырып сығарып ебәргән, ти. Хәҙер һин дә мин һөйләшеп йөрөй. Хәҙрәтте теленән төшөрмәй маҡтай икән.

Һарыҡ көтөүенең табылырына тамам өмөтөн өҙгән Миңлеғол хәҙрәттең дә ярҙам итә алырына ышанманы. Мәхмүзәнең һүҙен йыҡмаҫ өсөн генә сараһыҙҙан барырға күнде. Төрмәгә ебәрһәләр, мин әйткәнде тыңламаны, тип үпкәләмәҫ, исмаһам.

Чабан Миңлеғолдоң килерен алдан белгән хәҙрәт, уны ҡапҡа тышына сығып ҡаршыланы. Атынан төшөп, эргәһенә килергә иткән Миңлеғолға:

– Бар, ана, һарыҡтарыңды алып ҡайта һал. Иҫән-һауҙар. Ел ыңғайына китеп, бер кәбән төбөндә торалар, – тине ҡулын һуҙып ҡайһы йүнәлешкә барыуҙы күрһәтте. – Хәүефһеҙ урында торалар, ҡайғырма, – тип өҫтәне.

Хәҙрәт хаҡында гел тиҫкәре һөйләп йөрөгән Миңлеғол, уға күтәрелеп ҡарарға ҡыйманы. Башын баҫып, күҙҙәрен йәшереп, ел ыңғайына атын ҡыуаланы.

Ысынлап та, ни күҙе менән күрһен — ауыл осонан өс-дүрт саҡрымда, ҙур кәбән төбөн уратып алып, һарыҡтары бесән ашап тора. Ышанһаң — ышан, ышанмаһаң — юҡ тигәндәй, һарыҡтарҙы күргәс, Миңлеғол, шатлана ла алмай, шаҡ ҡатты. Ниндәй мөғжизә, ниндәй хикмәт был?! Ошо тирәнән ҡырылмаһа ҡырҡ үтте ләһә. Нисек күрмәгән? Көтөүҙе табырына тамам өмөтөн өҙгән, суд-фәләнгә эстән әҙерләнеп бөткән Миңлеғолдоң бите буйлап бөрсөк-бөрсөк күҙ йәштәре тәгәрәне. Үҙе иҫ белгәндән иламағанды, әле килеп сыҙай алманы. Әсе булмай икән шатлыҡ, кинәнес йәштәре...

Һарыҡтарын ялан кәртәгә килтереп бикләгәс, көн кисләүгә ҡарамаҫтан, Миңлеғол өйөнә лә инеп тормай, тура хәҙрәткә йүнәлде.

Башына ап-аҡ сәллә, аҡ күлдәк кейгән хәҙрәт түрҙә, урындыҡ өҫтөндә, ниҙер уҡып ултыра ине.

— Һине көтөп ултырам, мөртәт, — тине шаян йылмайып. — Һарыҡтарың теүәлме?

— Әүлиәлегеңә ышанмағайным, хәҙрәт. Булдыра алһаң, мине ғәфү ит, — тине Миңлеғол тәкәбберлеген ҡуйып. — Һөйөнсөһөнә, ана, һуғымға тип һимертелгән тайымды ал.

— Кәрәкмәй. Мин саҙаҡа өсөн ярҙам итмәнем. Хоҙай бәндәһемен. Ерҙә кешеләргә изгелек итергә тәғәйенләнгәнмен, — тине. Бер аҙ үпкәләберәк өҫтәне: — Тыңлар булһаң, үтенесем бар.

— Әйтегеҙ, хәҙрәт, тыңлармын. — Миңлеғолдоң тауышы үтә лә ихлас яңғыраны.

— Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә ышан. Иблисте айыр, таны, мөртәт булма.

Нык йонсоған, шунлыҡтан, ахыры, йөҙөндә иман нуры пәйҙә булған, эшкә тырыш был кешегә хәҙрәт тағы бер нисә кәңәшен бирергә булды.

— Йәнә ҡатыныңды һис бер йәберләмә. Ифрат изге күңелле мөслимә. Улың хаҡында әйткәндәремә лә рәнйемә. Рәмилең Себерҙең бер ҡалаһында йәшәр. Ғаиләһе, балалары булыр. Тик ул тыуған ерен, туған телен, йыр-моңон һағыныш

зарығыр. Сабыйың шуны алдан белә. Ысынлап та, сабый бала әүлиә була. Һүҙҙәрем хаҡ.

– Хәҙрәт, – Миңлеголдоң тауышы ҡалтыранды, – изгелегегеҙҙе, әйткәндәрегеҙҙе мәңге онотмам. Балаларыма, ейәндәремә васыят итеп әйтермен, Аллаһ бирһә.

Үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр тәкәббер холоҡло ирҙең ауыҙынан «Аллаһ бирһә» тигән һүҙ ишетелде.

Ин шәәъ Аллаһ, яйлап булһа ла, илгә иман ҡайта, Аллаһҡа шөкөр. Хәҙрәт үҙе лә илаһи көҙрәт менән, исмаһам, бер кешене хаҡ юлға төшөрөүенә сикһеҙ ҡыуанды.

## Әүлиә аманаты

Мөжәүир хәҙрәт бөгөн дә иртәнге намаҙҙы Манһыр ауылы ҡаршыһындағы тауҙың үҙе яратҡан иң бейек еренә менеп уҡырға, таңды аят менән ҡаршыларға ниәтләне.

Йылы йәйге төн үтеп, таң һарыһы беленә башлаған саҡ. Аяғына еңел ситек, өҫтөнә ебәк елән, башына йәшел бәрхәт түбәтәй кейгән олпат кәүҙәле хәҙрәт үҙе кәлепләп һалған берләм һуҡмаҡ менән атлай. Киң шыма таштарҙы түшәп, намаҙ уҡырға ҡулайлаштырылған еренә килеп еткәс, ул ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырған бәрхәт намаҙлығын ергә түшәне лә ике ҡулын ҡолаҡ йомшаҡлығы тапҡырына ҡуйып, ҡиблаға ҡарап баҫты. Башта аҙан әйтте, унан ҡулын күкрәгенә ҡаушырып иртәнге намаҙын ниәтләне, ике рәҡәғәт сөннәт, ике рәҡәғәт фарыз намаҙын уҡыны. Оло ихласлыҡ менән башҡарылған намаҙҙан һуң илһамланған хәҙрәт кеҫәһендә ятҡан хөрмә төштәренән тәфсилләп теҙелгән, йылдар үтеү менән шымарып бөткән тиҫбеһен ҡулына алып, оҙаҡ итеп Хоҙайға тәсбихтәр әйтте, аяттар уҡыны. Арыуыҡ ваҡыт үтте. Тиҙҙән моронлап ҡалҡасаҡ ҡояштың тәүге алтын нурҙары икһеҙ-сикһеҙ булып йәйрәп ятҡан Ирәндек итәгенә һибелә башланы. Уйсанланып, ҡалҡып килгән ҡояш нурҙарына бер талай ҡарап торғандан һуң, Мөжәүир хәҙрәт урынынан ҡалҡты. Намаҙлығын ҡағып бөкләп, ни хикмәт менәндер бында килеп ятҡан дүрткел һандыҡташ өҫтөнә һалды ла тау

ситенәрәк барып баҫты. Ана, уның ауылы, Манһыры! Ата-бабаларының изге төйәге! Ана, Урғаҙа йылғаһының ярында ғына ултыра өйө. Арыраҡ мәсет күренә. Кейәү үләне еҫе һеңгән һауаны һулап, аҡ сәсле ҡылғандарҙың әкрен иҫкән таң еленә тирбәлеүен күҙәтеп, ҡояштың тәүге нурҙарын сәләмләп, хәҙрәт байтаҡ торҙо. Йөрәге тыуған еренә ҡайнар хис менән мөлдөрәмә тулышты. Ул ҡиблаға табан төбәлеп, теҙ сүкте. Ҡулдарын алдында тотоп, Хоҙайға ялбарҙы:

– Йә, Раббым, Аллам! Уҡылған намаҙҙарымды ҡабул ҡыл. Йәннәттәй хозур ғәзиз ерҙәребеҙҙе мәңгелек ит! Ил-йорттарыбыҙҙы афәт-гәрәсәттәрҙән һаҡла, үҙең ҡурсалаусы бул!

Хәҙрәт, офоҡтағы күтәрелеп килгән ҡояшҡа ҡарап, һандыҡташҡа килеп ултырҙы, әйтерһең, иртәнге баҙыҡ нурҙарҙан үҙенә көс ала ине.

Күк Ирәндек ҡуйынына һыйынған Манһыр ауылын үҙенә ғүмерлек төйәк иткәненә гел ҡыуанып йәшәне. Бөтә тирә-яҡты хайран иткән кирәмәттәр тыуҙыра алырлыҡ көскә эйә булараҡ, һәләт-ҡөҙрәтен тейешле юҫыҡҡа йүнәлтһә, әллә ниндәй ҙур ҡалаларҙа йәшәргә, бөтә уңайлыҡтары булған һарайҙай йорттарҙа маҙрап йәшәргә лә хәленән килер ине уның. Әммә ул Манһырын, ата-балалар һөйәге ятҡан, тамыры ереккән ерҙе ташлап китергә теләмәй. Киреһенсә, ул бындағы тау-йылғанан, сәскәле болондарҙан, емеш-еләкле Ирәндек тауы үҙәктәренән, өйөр-өйөр йылҡы йөрөгән киң далаһынан, бала саҡта көтөү көткән йәйғорло ерҙән башҡа йәшәүен күҙ алдына килтерә алмай. Тыуған тәбиғәттән ул үҙенә көс ала, тыуған ере энергия, ҡеүәт сығанағы икәнен ул белә.

Мөжәүир ултырған таштан тороп, тау башынан таҫмалай булып күренеп ятҡан оло юлға баҡты. Тиҙҙән ошо юлдан уға бер һуҡыр ҡыҙҙы алып киләсәктәрен һиҙҙе. Мосафирҙар бик алыҫтан юлланған булырға оҡшай. Беҙҙең өммәттеке лә түгелдәр. Булһын. Хәҙрәт милләт айырмай. Әүлиәлек кирамәтлеге уға килеүселәрҙең ихласлығын, үҙенә сикһеҙ ышаныс менән ҡарауҙарын әшкәртә. Быны һиҙеү хәҙрәттә ярҙам итеү теләген тағы көсәйтә. Ул йәнә ҡиблаға ҡарап доға ҡылды.

— Миңә күҙ терәп, ғажиз булып килеүсе бәндәләргә ярҙам итерлек, һуҡыр баланың күҙер асырлыҡ ҡөҙрәт бир, Хоҙа-йым, — тине ялбарыулы йомшаҡ тауыш менән.

Ошоларҙы әйтте лә, тиҙ генә йыйынып, намаҙлығын алып, ҡайтыу яғына атланы. Ҡояштың тәүге иркә нурҙарына ҡойонған ысыҡлы үләндәрҙе кисә-кисә барыу уға сикһеҙ рәхәт ине.

Хәҙрәт аҙымдарын ҡыҙыулатты. Алыҫтан килеүселәр дәрәжәле кешеләр булмаҡсы. Улар килгеләгәнсе, йорт-ҡураны ҡараштырып, әҙерләнеберәк торорға кәрәк.

Хәҙрәт ҡайтып инеү менән иртәнге сәйҙе ултыртып йөрөгән хужабикәгә фарман бирҙе.

— Әбей, ҡунаҡтар ҡаршыларға әҙерлән. Мунса яҡтыр. Ҙур еҙ самауыр ҡайнап ултырһын. Сәй эскәс, бер һарыҡты һуйып ҡуяйым. Киленгә әйтеп, тултырма яһаттыр.

Ул сығып тәһәрәтен яңыртты ла, самауырҙың боҫо борҡорап ултырған табынға яҡынланы. Урындыҡҡа менеп, аяғын салып, яҫтыҡ өҫтөнә ултырҙы. Күңелендә иренә оло ихтирам, һүнмәҫ мөхәббәт хисе һаҡлаған Гөлйсмеш абыстай ихлас йылмайып, хәҙрәт алдына сәйле касаны ҡуйҙы, аҡы эшкәртеп әҙерләнгән ризыҡтарҙы яҡыныраҡ этәрҙе.

Хәҙрәт көткән мосафирҙар төшкә табан килеп етте. Ҡапҡа төбөнә туҡтаған еңел машинанан башта башына — эшләпә, өҫтөнә бөгәрләнмәй торған һоро төҫтәге затлы туҡыманан тегелгән костюм кейгән һиммәтле бер ир килеп төштө. Ул артҡы ишекте асты ла, унан бөхтә генә кейенгән һары бөҙрә сәсле, бойоҡ сырайлы ҡатын күренде.

— Доченька, Настенька, приехали, — тине ир һәм 12–13 йәштәрҙәге ҡыҙыҡайҙы машинанан етәкләп төшөрҙө. Шунда уҡ һәрмәнә һалып әсәһенә йәбешеп барыуынан, баланың кеше ярҙамынан тыш атлай алырлыҡ түгел икәне аңлашылды. Ҡатып ҡалған ҙур зәңгәр күҙҙәрҙең хәрәкәтһеҙ бер нөктәгә төбәлеүен шәйләгән иғтибарлы һәр кем шунда уҡ уның тома һуҡыр икәнлеген аңлар ине.

Оло улы юлаусыларҙы эйәртеп өйгә алып ингәндә, өҫтөнә ап-аҡ күлдәк, башына ап-аҡ сәллә кейгән хәҙрәт урындыҡ түрендәге яҫтыҡ өҫтөндә тиҫбе тартып тыныс ҡына ултыра ине.

Инеүселәр һәйкәл кеүек туп-тура ултырған ҡарттың эс-бауырында низәр ятҡанын үтә күрерҙәй үткер ҡарашын күреп баҙап ҡалдылар. Үтергә батырсылыҡ итмәй ишек төбөндә туҡтап тапанған мосафирҙарға хәҙрәт яғымлы өндәште:

– Әйҙүк, үтегеҙ, мин һеҙҙе баянан бирле көтәм.

– Көтәһегеҙ? – Юлаусы ир ныҡ ғәжәпләнде. – Беҙ килеүебеҙ тураһында алдан хәбәр итмәгәйнек шикелле бит. – Күңеленә йылы ингән юлаусы хәҙрәткә һаулыҡ һорашырға тип ҡулын һуҙҙы. Иренән күрмәксе ҡатын да килеп күрешергә иткәйне, хәҙрәт ҡулын бирмәне. Ул, беҙҙә ирҙәр ҡатын-ҡыҙға ҡул биреп күрешмәй, тине. Ишек төбөндә таш һын һымаҡ ҡыймылдамай ҙа торған ҡыҙға мөрәжәғәт итте.

– Ҡыҙым, һин дә үт, кил әле бында, – тине ул үҙенең һурып алырҙай үткер ҡарашын һуҡыр ҡыҙға төбәп.

Әсә ҡыҙын хәҙрәт янына алып килде.

– Исемең кем? – тип һораны Мөжәүир хәҙрәт баланың нәҙек оҙон бармаҡлы йомшаҡ ҡулдарын ҙур усына алып.

– Анастасия.

– Матур исем.

Ҡыҙыҡайҙың ҡулын һаман ебәрмәй тотҡан ҡартҡа текләп һүҙһеҙ ҡалған әсә бер аҙҙан хәҙрәттең кире ҡаҡҡыһыҙ ҡәтғи тауышын ишетте.

– Был балаға ныҡ күҙ тейгән. Күҙҙән ҡатҡан, бахырҡай. Музыкантмы?

– Эйе.

– Ҡыҙығыҙ данлыҡлы пианистка буласаҡ.

– Әллә инде. – Әсә ауыр көрһөндө. – Һуҡыр көйө был мөмкинме һуң?

Хәҙрәт Анастасияның ҡулдарын ысҡындырҙы ла томомлап үргән сәстәренән, арҡаһынан, аяҡ-ҡулынан һыйпап, имләп сыҡты. Доға уҡып, өрөп тә ҡуйҙы.

– Сүбхәнәл-лаһ, ин шәәъ Аллаһ, төҙәлер ҡыҙыбыҙ, – тине, йөҙөнә ниндәйҙер ҡәнәғәтлек билдәһе сығарып. – Был баланың төҫ-башы ғына түгел, холоҡ-фиғеле лә күркәм икән, – тине ниндәйҙер эске бер һиҙемләү менән уның бөтә булмышын үтә күреп. – Итәғәтле бала.

Шунан Настяға ҡараны:

– Бар әле, ҡыҙым, сыҡ та, лапаҫтан бер ҡосаҡ утын алып ин, – тип ҡушты.

Ҡыҙҙың әсәһе шунда уҡ һикереп торҙо.

– Она не сможет! Простите ради бога, она ведь совсем ничего не видит.

– Борсолма, ҡатын кеше, – тип әсәне тынысландырҙы хәҙрәт, үҙе тағы ҡыҙ яғына боролдо.

– Бар, балам, бар, ҡурҡма! Әйткәнде үтә.

Ҡыҙыҡай урындыҡтан тороп ишеккә йүнәлде. Уны һәрмәләп табып асты ла тышҡа сығып китте. Таныш булмаған ерҙә эләгеп ҡолап ҡуймаһа ярар ине, тип ҡоттары осҡан ата-әсә, һикереп тороп, ҡыҙҙары артынан йүгерерҙәй булып ултырһалар ҙа, хәҙрәттән уңайһыҙланып, урындарынан ҡуҙғалманылар. Бер-ике минут та үтмәне, тупһала утын ҡосаҡлаған Анастасия күренде. Күҙҙәре зәңгәрһыу нур бөркөп яна. Йөҙө ҡояштай балҡыған, ә үҙе бер туҡтауһыҙ һөйләнә:

– Атай, әсәй, мин күрәм, күрәм, – тине ҡыҙыҡай ҡосағында утын барлығын да онотоп. Осоп ҡына китер ине үҙе – ҡанаттары ғына юҡ.

Ата-әсә көтөлмәгән мөғжизәнән ни әйтергә белмәй торған арала, хәҙрәттең илтифатлы тауышы ишетелде.

– Ҡыҙым, утыныңды көлдөксә алдына алып барып һал инде, үҙең түргә үт.

Һәр төрлө дауаханаларға, данлыҡлы табиптарға йөрөтөп тә һауыҡтыра алмаған һуҡыр күҙҙең шулай ҡапыл, бер ниндәй көсәнеүһеҙ-ниһеҙ асылып китеүе һәм күрә башлауына һаман ышана алмаған ата-әсә ныҡышып төпсөндө.

– Ысынмы, Настенька? Ысынлап күрәһеңме?

– Күрәм, атай, асыҡ күрәм, әсәй! – тине ҡыҙ үҙе лә оло ҡыуаныстан ни ҡылырға белмәй.

– Дедушка в белом! Ведь он мне помог? – тине ҡыҙ һәм баҫалҡы йылмайып ҡәнәғәт ултырған хәҙрәттең эргәһенә йүгереп килде. Рус халҡына хас ғәҙәт буйынса ҡосаҡлап, битенән уңлы-һуллы өс тапҡыр үпте.

Ҡыҙҙарының сикһеҙ ҡыуанысын күргән ата-әсә өсөн дә, гүйә, күк ҡабағы асылды.

– Һеҙ – Аллаһ, – тине нык тулҡынланған әсә кеше.

– Улай тимәгеҙ, ярамай, – тип ҡатындың һүҙен бүлдерҙе хәҙрәт. – Әҙәми затты Аллаһы Тәғәләгә тиңләү – ҙур гонаһ. Ярамай. Мин бары әүлиә. Күрәҙәсе тиһәң дә була. Ауырыуҙарҙы һауыҡтыра алам.

– Ҡөҙрәтегеҙҙе ишетеп, һеҙгә нык ышанып килдек һәм яңылышманыҡ. Рәхмәт, – тине ир кеше. Үҙ-үҙен тотошонан, ҡылыҡ-фиғеленән ҙур урында эшләгәне күренеп торған Мәскәү кешеһе һүҙен дауам итте.

– Берәй ҙур ҡаланан квартира алып бирҙертәйемме? Машина кәрәкме? Ни теләйһегеҙ, ни һорағыҙ ҙа ҡыуана-ҡыуана үтәргә ризамын.

Үҙ ғүмерендә сирҙән ҡотолоп, һауыҡҡандан һуң ни алырын, ни биререн белмәй ҡыуанған әҙәмдәрҙе күп күргән хәҙрәттең иҫе китмәне.

– Үҙегеҙгә рәхмәт, ҡәҙерле ҡунаҡтар. Һеҙгә игелек итә алыуыма шатмын. Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй. Донъя етеш. Барына Хоҙай бәрәкәт бирһен, – тине. Был хаҡта һөйләшеүҙе тамам һанап, һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борҙо.

– Һеҙ алыҫтан килгәнһегеҙ. Арып, асығып бөткәнһегеҙҙер. Инде тамаҡ ялғап алһаҡ та була. Унан ял итерһегеҙ. Мунса ла әҙер.

Ҡунаҡ ир тағы ғәжәпләнде.

– Ҡайҙан килеүҙе әйтмәгәйнек түгелме?

– Хоҙай әшкәртә, – тине әүлиә иркә генә итеп. – Бына әле лә берәү ашыға. Тик эсергә яратҡан әҙәм икән. Ағас төбөнә шешәһен йәшерҙе. Йәнәһе, хәҙрәтте алдай була, шилма.

Килгән ҡунаҡтар әле ишеткән һүҙҙәргә ышанырға ла ышанмаҫҡа ла белмәй, сикһеҙ ғәжәпләнеп йәнә хәҙрәткә ҡараны.

– Әйҙәгеҙ, шул әҙәм килеп еткеләгәнсе табынға ултырышайыҡ.

Ҡартының күҙенә генә ҡарап торған Гөлйемеш абыстай ҙа уның һүҙен ҡеүәтләне.

– Әйҙүк, ҡунаҡтар, түрҙән уҙығыҙ.

– Ҡыҙым, кил әле эргәмә, – тине хәҙрәт, Настенькаға үҙенең эргәһенән урын күрһәтеп. Әбейе ашъяулыҡҡа ит, бишбармаҡ алып килеп ултыртҡылағансы, ауыҙ эсенән ниндәйҙер

доғалар уҡып, ҡыҙыҡайҙың күҙҙәренә, битенә, ҡолағына, сәстәренә йәнә өрҙө.

– Бынан ары сиреҥ ҡабатланмаҫ. Күҙ тейеүгә бирешмәҫһеҥ, ин шәәъ Аллаһ, – тине ул тантаналы тауыш менән. – Бына доға яҙылған бетеү. Ошоно һис юғалтма, гел эргәңдә йөрөт. Ул саҡта Хоҙай Тәғәлә һине һәр төрлө бәлә-ҡазаларҙан, яуыз бәндәләрҙең хаслығынан да үҙе ҡурсалар.

Ул арала Гөлйемеш абыстай ашҡа рәхим итеүҙе һораны.

– Бишбармаҡты һыуытмайыҡ, – тине, үҙе ағас ҡалаҡ менән табаҡтан өс-дүрт бөртөк һалма һөҙөп алып, ҡабып ебәрҙе.

Алыҫ юлдан килгән ҡунаҡтар боҫорап ултырған бишбармаҡтың тәмле еҫенән тәҡәтһеҙләнеп китһәләр ҙә, ашҡа талымһыҙланып йәбешмәнеләр. Хәҙрәт алдында әҙәп һаҡлап, иҥ тәүҙә ипле генә итеп икмәктән ауыҙ иттеләр. Тәрилкәләргә бүлеп һалынған һимеҙ бишбармаҡты тәмләп ашай ғына башлаған бер мәлдә, ишек асылды һәм унан күп эсеүҙән шешмәкләнгән йөҙлө ир кешенеҥ ялбыр башы күренде.

– Хәҙрәт өйҙәме? – тине лә тупһанан аша атлап өйгә инде.

– Сыбыртҡыһы сөйҙәме? – тип өҫтәне хәҙрәт инеүсенеҥ яртылаш иҫерек ҡиәфәтенә һынсыл ҡарап. Эскән кешене тере биреһе күргән хәҙрәт уны табынға саҡырырға ла ҡул биреп күрешергә лә кәрәк тапманы. Етмәһә, ҡатынына ҡул күтәреп, ғаиләһен ҡаңғыртыуын да һиҙенә әүлиә ҡарт.

– Ағас – емешенән, әҙәм ҡылынышынан билгеле, – тип һүҙ башланы хәҙрәт түренән төшмәй генә. – Нимә, ҡатыныҥ ташлап ҡайтып киттеме?

– Эйе, – тине яҥы килгән ир илай яҙып. – Шул бисәне алып ҡайтырға миҥә ярҙам итегеҙ. Тоҙ булһа ла өшкөрөгөҙ. Тыусамды бирәм хәйеренә.

– Кәрәкмәй бер нәмәҥ дә! Эсмә! Эскән иргә ниндәй ҡатын сыҙаһын. Йәнә ҡулыҥды тый. Бар ана, ағас төбөнә йәшереп киткән шешәҥде барып алып, эсендәгеһен түк, шунан башҡаса ул шайтан эсемлеге яғына әйләнеп тә ҡарама. Ҡатыныҥ да кире ҡайтыр, тормошоҥ да яйға һалыныр. Бисәнән уҥғанһыҥ, ҡәҙерен бел, – тип килеүсенеҥ башҡа хәбәрен тыҥлап та тормай, бороп сығарып ебәрҙе.

Эсеп килеүселәр менән һөйләшергә яратмай ине шул әүлиә Мөжәүир.

Бая хәҙрәт ошо әҙәмдең килерен аңғартҡанды белгәс, Мәскәү ҡунаҡтары шаҡ ҡатты.

– Вот чудо! – тине Настя ла сикһеҙ ғәжәпләнеп. – Ҡайтҡас иптәштәремә һөйләһәм, береһе лә ышанмаҫ...

Әүлиә табын артында ултырыусыларға вәғәз һымаҡ итеп әйтеп ҡуйҙы.

– Минең һеҙгә бер генә үтенесем бар. Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә ихлас ышанығыҙ. Әҙәпле, тәүфиҡлы булығыҙ. Донъяны ҡаты афәттәрҙән, мәсәлән, һыу баҫыуҙан, ер тетрәнеүҙән, дауыл-гәрәсәттәрҙән бары, әҙәп менән тәүфиҡ ҡына ҡотҡарыр. Йөрөгән ерегеҙҙә әҙәмдәргә шуны төшөндөрөгөҙ.

– Рәхмәт, табип, – ҙур түрә әүлиәгә ихтирамын белдереп, башын эйҙе. – Һеҙҙең йөҙҙә мосолман халҡының ғәҙеллеген, ихлас күңеллеген күреп хайран ҡалдыҡ.

– Хоҙай Тәғәлә бөтәбеҙ өсөн дә бирәү, ин шәәъ Аллаһ, – тине хәҙрәт.

Ҡайтыр алдынан хушлашҡанда:

– Мин бында тағы килермен әле, – тине ҡунаҡ.

Ысынлап та, бер ике-өс ай үттеме, юҡмы, Мәскәү ҡунаҡтары йәнә килде. Был юлы улар ҡыҙы Настенька780ың ҡыуанысын уртаҡлашыу, йәнә рәхмәт әйтеп, саҡ ҡына булһа ла ризалатыу һәм быума сире менән яфаланған дуҫының ҡыҙын да әүлиәгә күрһәтеү ниәте менән йөрөй ине. Был сирҙе лә хәҙрәттең еңеренә ышаныстары ҙур ине һәм улар яңылышманы. Бала күҙ алдында ипкә килде лә ҡуйҙы.

Хәҙрәт ҡунаҡтарҙы оҙатырға тип ишек алдына сыҡҡайны, өр-яңы «Урал» мотоциклын күреп, уңайһыҙланды.

– Ҡуйығыҙсы. Мин әжере өсөн түгел, Аллаһ хаҡы өсөн һауыҡтырам, – тине. Шулай ҙа үҙенең күңеле ҡыуаныс менән тулды. Бер уйлаһаң, хеҙмәтенә күрә хөрмәте ләһә. Ҡунаҡ хәҙрәттең бүләкте кире ҡағып ҡуйыуынан ҡурҡып: «Үҙегеҙ йөрөмәһәгеҙ, улдарығыҙҙың береһенә бүләк итерһегеҙ. Баш тартмағыҙ, зинһар», – тине ныҡышып. Хәҙрәт мосафирҙың үтә ихласлығын күреп, уларҙы рәнйетергә теләмәне.

– Һеҙҙең аманатты, донъяны афәттән әҙәп менән тәүфиҡ ҡотҡарыр, тигән һүҙҙәрегеҙҙе гел иҫтә тотабыҙ. Ҡыҙыбыҙ ҙа шул юлдан тайпылмаҫ, – тине ир кеше хушлашҡанда.

– Ин шәәъ Аллаһ, шулай була күрһен.

Хәҙрәт уларға изге юл теләп, оҙатып ҡалды.

## Миһырбанлыҡ

Йыйылыш һайын: «Шәп механизатор, әүҙем коммунист», – тип телгә алынып, урынлы-урынһыҙға ҡупырайтыуға, бүләкләүгә өйрәнеп алған Әсҡәт йәнә эсеп ҡайтты. Төн уртаһы тип тормай, үҙен борсолоп көтөп ултырған ҡатынына бәйләнә башланы.

– Нимә, һәпрә, мине көтәһеңме? Әйттем бит, өйөр көсөктәреңде ал да мин ҡайтыуға өйҙән шыл, тинем. Аңламаныңмы? Игеҙ бала табыуҙан башҡаға эшкинмәгән бисә миңә ни бысағыма? Үҙемә достойныйға өйләнәм.

Ысынлап та, бөтә совхозды хайран итеп, ошо айҙай түңәрәк йөҙлө, ҡаҡса кәүҙәле, баҫалҡы ҡатындың ике пар игеҙәк балалары үҫеп килә. Тәүгеһе – малайҙар, Ғаяз менән Нияз, уларға өсәр йәш, икенсеһе – ҡыҙҙар, Әлиә, Зәлиә, икешәр айлыҡ ҡыналар. Шулай итеп, әҙәм ышанмаҫ әйтһәң, егерме ике йәшлек кенә әсәнең дүрт балаһы бар. Яҡындан белеүселәр Гөллирәне бик ярата. Донъяға әсә булыр өсөн генә килгәндәй күрәләр. Сибек кенә тауыш менән балаларына яғымлы өндәшеүе, сабыйҙарҙың ирәбе, отҡор булып үҫеп килеүе, ауырыуҙарға бирешмәүҙәре – бөтәһен дә ҡасаба халҡы күреп тора, оҡшата.

Тик бына Әсҡәткә генә Гөллирә һис ярай алмай. Эсеп ҡайта ла тотона көйһөҙләнергә. Ҡул күтәреүе лә йышайҙы. Сабыр холоҡло ҡатын, балалар аталы үҫһен тип, баш баҫып түҙгән һайын, теге әҙәм нығыраҡ ҡоторона.

Әле лә, ғәҙәтенсә, тупаҫ һүҙҙәрен эскә йотоп, Гөллирә ирен әүрәтергә, тынысландырырға итте.

– Асыҡтыңмы? Ваҡ бәлеш бешерҙем, әйҙә ашап ал!

– Юхаланма, кәнтәй! Кит бынан!

Нимәгә бәйләнергә белмәй ҡырсынған ир юлындағы ултырғысты тибеп осорҙо. Балаларын уятыуҙан ҡурҡҡан әсә, йәне көйһә лә, һиҙҙермәне, ипле өндәште.

– Арыныңмы? Ял ит! Әйҙә, ятайыҡмы?

– Телеңә һалышма! Мин һиңә нимә тинем? Мин ҡайтыуға өйҙә әҙең булмаһын, тинем.

– Ҡыш өҫтөнән ҡайҙа барайыҡ?

– Эшем юҡ. Һинең арҡала әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдым.

– Нисек? – Гөллирә ҡурҡып китте.

– Ҡайҙа барма, бөтәһе лә көләләр. Инде ҡатының, күрше ауылдағы Сәмиға кеүек, өсәрләп тапһын, Гиннесс рекорды китабына инергә тырышығыҙ, тиҙәр.

– Тиһендәр.

– Һиңә рәхәт, әҙергә – бәҙер, ир елкәһен генә кимереп ятаһың. Минең һымаҡ йәйен-ҡышын тракторҙан төшмәй эшләп ҡара.

– Әҙерәк түҙ. Әлиә менән Зәлиәне аяҡҡа баҫтырайым да эшкә төшөрмөн.

– Төштөң ти, төшмәй ҙә. Былары күҙен асыуға яңылары готовый торор.

– Хоҙай ҡушҡанды күрербеҙ.

– Ә-ә-ә, һин шулаймы, кәнтәйкә? Туйманыңмы, һаман игеҙ кәрәкме?

Әсҡәт йоҙроҡтарын төйнәп бисәһенә боролдо:

– Сығып кит. Иҙмәңде иҙәм.

– Дүрт бала менән ҡайҙа барайым?

– Эшем юҡ унда. Мин бүтәнгә өйләнәм.

– Әле һөйәркәңдә булдыңмы? – Гөллирә иренән ҡото осоп ҡурҡһа ла, һорамай түҙмәне.

– Эйе булдым. Һеҙҙең һыҡрағығыҙҙы еҫкәүҙән надоел! Культурно йәшәргә теләйем.

Аҙарынған ҡатын һаман ялбарҙы:

– Әсҡәт, балаларҙы етем итмә! Ташлама!

– Көсөктәреңде ал да һыпырт тим, бар, күҙемә күренмә!

Әсҡәттең тауышы ҡырҡыуланды. Аҡырып-баҡырып ҙа арып туҡтар, тип өмөт иткәйне йәш ҡатын, ул уйлағанса

булманы. Әпәүләгән һайын шашына. Йәнс көйгән ҡатын да уйындағыһын әйтергә йөрьәт итте.

– Игеҙәктәр өсөн, белгең килһә, үҙең ғәйепле. Врачтар әйтте, уәт!

– Ә-ә-ә, шулаймы, албаҫты? Мине ғәйепле итергә булдыңмы? Туйып һикерәһеңме, етем быҙау?!

Әсҡәт бисәһенә киҙәнеп һуғып ебәрҙе. Меҫкенкәй әллә ҡайҙа осоп барып төштө. Торорға тип ҡуҙғалғайны, бәгерһеҙ ир типкеләргә тотондо. Ҡатынының ауыҙ-морононан ҡан китеүҙе күреп, уғата йыртҡысланды.

– Үлтермәҫ элек һыпырт!

Бынан булыр, тип уйланы иренең холҡон белгән ҡатын. Ҡасырға кәрәк, тик нисек? Үҙе яулығын сисеп ауыҙ-моронондағы ҡанды һөртөштөрҙө, үҙе нисек сығып ҡасыу планын ҡорҙо. Ғаяз менән Нияз бирешмәҫ. Уларға өсәр йәш. Илаһалар – ҡарар, үҙ атаһы лаһа. Ике бәләкәсте әләктерә һалып алырға ла... Сабыйҙарын имеҙергә ваҡыт еткәнде белдереп әсәнең имсәгенә һөт тиртте. Эх, бәләкәстәрен алдына алып тыныс ҡына ултыртып имеҙергә ине. Хут бирәме ни ата йораты? Ул арала асыҡҡан сабыйҙарҙың илауы ишетелде. Әсә түҙмәне, йән асыҡҡа һикереп тороп, сәңгелдәккә ташланды. Эскән ир уны-быны аңғарғансы игеҙәктәрен тырнап алып күкрәгенә ҡыҫты ла, ялан аяҡ, ялан баш көйө өйҙән сығып та йүгерҙе. Шығырлап ятҡан аҡ ҡар өҫтөндә ҡатындың ҡанлы аяҡ эҙҙәре генә ярылып ятып ҡалды.

Ҡайҙа барырға? Сабыйҙарҙы ҡайһылай итеп өшөтмәҫкә? Балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫкән Гөллирәнең совхозда, исмаһам, морон төртөр туғаны юҡ. Шул саҡ изге күңелле Хәфизә әбей иҫенә төштө. Килеп балаларын ҡарашып, ярҙам иткеләп китә. Моғайын, индерер. Балаларын өшөтмәҫкә теләп күкрәгенә нығыраҡ ҡыҫҡан әсә йән-фарман шунда сапты.

Әсҡәт, бисәһен енләнеп ҡыуһа ла, ул сығып ҡасҡас, оторо ҡоторҙо. Шарт та шорт йөрөнө. Тик ятҡан бесәйҙе һуғып осорҙо, әшәке һүгенде. Һыу эсергә тип ҡулына алған бокалды иҙәнгә яра бәрҙе. Бына ул Ғаяз менән Нияз улы йоҡлап ятҡан урындыҡ ситенә килде, ҡотороноп екеренде:

– Был көсөктәрен ниңә ҡалдырған? Миңәме? Кәрәкмәй!

Имәнес тауышҡа һиҫкәнеп уянған сабыйҙар ҡурҡып илай, әсәһен таптыра башланы.

– Әсә-ә-ә-әй! Ә-ә-әй!

Әсҡәт йәнә ажғырҙы:

– Етәр һеҙгә! Йәнде көйҙөрһәгеҙ, тышҡа сығарам да ырғытам.

Йәмһеҙ тауышты ишетеп, игеҙәктәр оторо ярһыбыраҡ иланы.

– Әсә-ә-ә-әй! Ә-ә-әй!

– Туҡтамайһығыҙмы, көсөктәр?

Талағы ташҡан ирҙе иблис үҙе ҡоторттомо ни? Урындыҡта ятҡан балаларҙы икеһен ике ҡулына эләктереп алды һәм елтерәтеп ишектән тышҡа, өтөп алып барған сатнама һыуыҡҡа сығарып бырақтырҙы.

– Илап бөткәс инерһегеҙ, – тине һәм ишекте япты.

Үҙе инеп, бая алып ҡайтҡан яртыһынан бер стакан араҡы ҡойоп эсте, тәнтерәкләп диванға барып туңҡайҙы. Тышҡа сығарып ебәргән сабыйҙарын да онотоп, хырылдап йоҡлап китте. Иҫереккә диңгеҙ тубыҡтан.

Ныҡ ҡурҡыуҙан һыны ҡатҡан, илай ҙа, ҡысҡыра ла алмаған, бер-береһен ҡосаҡлап таш һынға әйләнергә торған сабыйҙарҙың икеһен бер юлы уҫлаптай кәүҙәле кешенең хәстәрлекле ҙур ҡулдары ҡармап алды ла ҡалын йылы тундың эсенә тыҡты. Балаларҙы үлемдән ҡотҡарған әҙәм өй яғына әйләнеп тә ҡарамай, ҡапҡа төбөндә ҡалдырған егеүле атына табан ашыҡты. Санаһына ултыра һалды ла, ашығып дилбегәһен ҡаҡты.

– Әйҙә, малҡай, ҡыҙыулат әле...

Үҙе йылы эҙләп ҡуйынына ныгыраҡ һырылған сабыйҙарҙы эскә ҡымтыны.

Сәғәт тә үтмәне, толпар булып осҡан тимер күк айғыр уларҙы Манһырға индерҙе лә Мөжәүир хәҙрәттең ҡапҡа төбөнә килтереп туҡтаны. Сабыйҙарҙы ҡотҡарыусы, дилбегәһен ҡаҙыҡҡа элгәс, өйгә ашыҡты.

– Өлгөрҙөм, әбекәйем, – әүлиә үҙен ашҡынып көтөп ултырған абыстайына ҡуйынынан бер-бер артлы ике малайҙы

сығарып тотторҙо. Ах та ух килеп ҡапылда ни эшләргә белмәй албырап йөрөгән әбейенә кәңәштәр бирҙе.

– Тәндәрен эспирт менән ыуырбыҙ. Үлән сәйе әҙерлә, ҡурай еләге, бал кәрәк. Дебет шәлдәрең ҡайҙа, урай һал. Мин – хәҙер...

Хәҙрәт өҫ кейемен һалып, ҡулын сайҙы ла, ат туғарыуын да ҡалдырып тороп, сабыйҙарҙы тубығына алды.

– Ҡоттары осҡан. Илай алмайҙар, меҫкендәр. Һыуыҡ алдырғандарҙыр, күлдәксән, ялан аяҡлы сабыйға күп кәрәкме ни?

Меҫкен әсәнең үҙенә ялбарған, ғәзизкәйҙәремде һауыҡтыр, хәҙрәт, тигәндәй ҡарашын тойғандай булды ҡотҡарыусы. Гөллирәгә яуап биргәндәй, ышаныслы әйтте.

– Ин шәәъ Аллаһ, һауыҡтырырбыҙ. Быға са ҡулдан килмәгән сир булманы.

Теле үҙенән-үҙе Әсҡәтте битәрләне, әрләне.

– Йыртҡыс, вәхши икәнһең. Юҡ, юҡ, йыртҡыстың йыртҡысы үҙ балаһын аяй. Һин унан да яманыраҡ.

Төнө буйы бер уянмай хырылдап йоҡлаған Әсҡәт иртәнсәк илереп килеп торҙо. Ниңә ул диванда ята? Бисәһе ҡайҙа? Тетмәһен тетергә кәрәк. Ниңә торғоҙоп, сисендереп, йомшаҡ түшәккә һалмаған, бер байғош кеүек диванда төнәгән?

– Эй, һәпрә, һин ҡайҙа? – тип һөрәнләне ул. Әммә уға яуап биреүсе булманы. Башҡа ваҡытта сыр-сыу килеп гөрләп торған өй эсе мәйет сыҡҡандай шомло тойолдо. Ҡапыл кисәге ыҙғыш, бисәһен өйҙән ҡыуып сығарыуы иҫенә төштө. Ә Ғаяз менән Нияз улы ниңә күренмәй? Улары ҡайҙа? Әсҡәт йылан саҡҡандай тертләне. Ах, шайтан алғыры! Ир, ғәҙәтенсә, әҙәпһеҙ һүгенде. Әсәһен таптырып илағас, әҙерәк ҡурҡытып алайым тип, тышҡа сығарып торғайны лаһа, ах инәңде... Ул тышҡа сығып йүгерҙе.

– Берәй мөйөшкә һырығып туңып ҡатҡандарҙыр инде, бахырҙар, – тип уйланы хафаға төшкән ата ишараты. Күңелен йәлләү хисе семетеп алды. Өйгә кире инеп, өҫ-башына кейенде лә, йәнә тышҡа сыҡты. Балаларҙың туңған кәүҙәһен тиҙерәк табырға кәрәк. Гөллирә ҡайтмаҫ элек. Әсҡәттең эҙләмәгән ере ҡалманы. Юҡ, бер ерҙә лә юҡ! Ҡайҙа булырға мөмкин?

Әсәләре алып киткән тиһәң, алдан сыҡты. Ул кире әйләнеп килмәҫ ике имсәк балаһын ҡалдырып. Әллә туңған мәйеттәрҙе эттәр алып киттеме, юғиһә? Холоҡһоҙ ирҙең сәстәре үрә торҙо.

Ни эшләргә, тигән уй мейеһен ярып үтте. Балаларҙы табыуға өмөтөн өҙгән йыртҡыс ата бынан ары уйлап эш итергә кәрәк, тигән фекергә килде. Әгәр уның этлеге арҡаһында икәнде белеп ҡалһалар, үҙен аҫып ҡуйыр уҫал совхоз халҡы.

«Эштең нисек булғанын һис кемгә белдермәҫкә! Белмәмешкә, күрмәмешкә һалышырға. Барлыҡ ғәйепте бисәгә япһарырға. Балалы бисәгә ғәйеп йоҡмай ул, – тип план ҡорҙо яуыз. – Ауырыу, тиер. Психикаһына зыян килгән, тиер. Үәт, үәт, ана шулай башты эшләтһәң, яйы ла сығыр әле».

Ул арала Әсҡәт юлда ҡанлы аяҡ эҙҙәрен күреп ҡото осто. Бисәһенең ялан аяҡлы эҙе. Кеше-ҡара күреп ҡалмаҫ элек тип, көрәккә йәбеште. Иғтибарлап ҡарағайны, йәнә бик сәйер эҙҙәргә юлыҡты. Ҡапҡа төбөндә егелгән сана, ат эҙҙәре ярылып ята. Ҙур аяҡлы кеше ишек төбөнә килеп боролған. Был ни икән? Кемдең эҙе? Әсҡәттең ҡото осто, күҙҙәре аҡшайҙы. Тимәк, уларға кемдер килгән, бөтәһен дә белгән. Балаларҙы, бәлки, шул әҙәм алып та киткәндер. Кем булыр икән?

– Ах, сволочь! – Әсҡәт йәнә әшәке һүгенде. – Бөттө баш! Барыһы ла бөттө!

Ул әле эргәһендә һөйәркәһе торһа, билләһи, ерғә һеңдерә һуғыр ине. Кисә, юрамал ҡыланғандай, эй һыйланы, эй эсерҙе, һырпаланды, ҡуштанланды, бисәһе Гөллирәнең төҫөнә ҡарамаҫлыҡ итеп, юҡ-бар хәбәр һөйләне. Әсҡәт, айыуҙай ир, ундай ғына эсеүгә бирешмәй торғайны. Әллә, юғиһә, теге ваҡыт совхоздың баш агрономын тилерткән кеүек, тилебәрән орлоғо һалып яһаған самогонын эсерҙеме? Булыр ул шайтанбикәнән. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәҫлек булып тилермәҫ ине ләһә, юғиһә.

Артабан ни эшләргә, ни уйларға белмәй аптыраған ир ҡабат өйгә инде. Стаканды тултыра ҡойоп араҡы һалып эсте. Баш төҙәтәм, тип аҡланды үҙ-үҙенә. Йән аяулы, баш ҡәҙерле. Әсҡәттең эскәне башына сыҡманы. Аҡылы теүәл ҡалды. Ул тағы ныҡыраҡ уйланды. Күрәләтә, аңра һарыҡ һымаҡ, үҙең барып элмәккә эләгергә ярамаҫ, тип уйланы ул. Бында хәҙер

хәйлә, мәкер кәрәк. Ни тиһәң дә, ул бит партия ағзаһы. Һөйәркәһе лә ярҙам итер. Табибә кешегә тейешле справканы яҙып биреү ҡыйын булмаҫ. Күпме уйлаһаң да, иң ҡулайы – бөтә гәйепте Гөллирәгә япһарыу. Йәнәһе, икенсе игеҙәктәрҙе тапҡандан һуң, яңылышып ауырый, ни эшләгәнен белмәй китә, төптө юҡтан алйотлана. Ауырыуы ҡотороп, төндә, Әсҡәт йоҡлап ятҡанда, балаларҙы алып, өйҙән сығып киткән. Нияз менән Ғаязды яңылышып тышта ҡалдырған, үҙе ҡайҙалыр барып йоҡлаған. Ышандырырлыҡ бит, ә? Әсҡәт ҡәнәғәт ҡиәфәттә ҡулдарын ыуғылап алды. Тағы һалып эсергә иткәйне, үҙен тыйҙы. Айныҡ булыу кәрәгер, тип уйланы.

Әсҡәт түҙемһеҙләнеп бисәһененң ҡайтыуын көттө. Төш етеп килгәндә Хәфизә әбей биргән кейемдәрҙе кейеп, Гөллирә ҡайтып инде. Йөрәге ниҙер һиҙенгәндәй, инеү менән: «Ғаязым менән Ниязым ҡайҙа?» – тип өйҙө урап сыҡты. Әсҡәт үҙен алдан уйлағанса тотто, иҫе китмәгәнгә һалышты.

– Үҙең менән алып сығып киттең дәһә. Мин иҫерек инем. Яттым да йоҡланым.

Йөрәге ярыла яҙып аптырап торған әсәгә боҙоҡ әҙәм үҙе һөжүмгә күсте:

– Ҡайҙа минең улдарым? Игеҙәктәремде ҡайҙа иттең? Мин уларҙы һағындым.

Психик атакаһының отошло икәнен күргән ир әшәкелеген дауам итте.

– Аҙып-туҙып сығып киттең дәһә... Әллә берәй кешең бармы? Мин көнө-төнө эштә.

Ишеткәндәренән ҡойолоп төшкән меҫкен ҡатын башта ире юрый ғына шаярта, тип уйланы.

– Ҡуйсы, улай тимә, – тигән булды. – Ҡана, тамаҡ бешерә һалайым. Асыҡҡанһығыҙҙыр.

Әсҡәт, ғәҙәтенсә, тупаҫ өндәште, артынса йәмһеҙ һүгенде:

– Кем шаярта, аңра бәрән?! Минме? Инәңде... Ҡайҙа минең улдарым? Тап, хәҙер үк тап, алҡымыңдан алам. – Ир йоҙроғон төйнәп, Гөллирәгә йәбешергә ҡырсынды. Башына тағы мәкерле уй килде. Кисәге күтәргән урындарын йәшереү өсөн бер-икене бөгөн дә тамыҙып алыу кәрәк. Йәнәһе, баланы таптырып һуҡҡан була. Бер гәйепһеҙ бисәһененң яңағына тондорҙо.

– Ҡайҙа балалар? Тағы табырмын әле тип, берәй нәмә эшләттеңме?

Аптырап, ни уйларға белмәгән ҡатын, һаман аҡланып маташты.

– Улар өйҙә йоҡлап ҡалды бит. Мине үҙең ҡыуҙың. Әлиә менән Зәлиә Хәфизә инәйҙә әле.

– Һин яңылышаһың. Мин ҡыуманым. Һин ни һөйләгәнеңде, ни эшләгәнеңде белмәйһең. Күптән һиҙәм, ауырыйһың. Психбольной һин, белдеңме, псих, ненормальныйһың.

Күҙҙәрен ҙур асып, үҙенә текләгән Гөллирәнең аптыраулы ҡарашын күрмәмешкә һалышып, яуыз ир кейенә башланы.

– Мин был хәл тураһында срочно милицияға хәбәр итергә тейешмен.

Ире сығып китеү менән Гөллирә үҙе улдарын эҙләргә тотондо. Бәлки, ҡурҡып йәшенгәндәрҙер ҙә йоҡлап киткәндәрҙер.

Өйҙөң аҫтын өҫкә әйләндерҙе, тапмағас, тышҡа сығып йүгерҙе. Балалар... ғәйеп. Ауыр ҡайғынан һығылып төшкән йәш ҡатын ҡатты ла ҡалды. Таш һынға әйләнгәнгәме, күҙенән, исмаһам, бер бөрсөк йәше тәгәрәмәне. Улдары менән бер-бер хәл булһа, йәшәй алмаясаҡ. Ул саҡта яңы тыуған сабыйҙары, Әлиә менән Зәлиәһе, ни эшләр? Әсәнең күкрәк һөтөнән башҡа улар ҙа йәшәй алмаҫ бит.

– Эйе, мин ғәйепле, – тип асырғанды йәш ҡатын, сәстәрен йолҡорҙай булып. – Ниңә шул йыртҡысҡа ышанып балаларҙы ҡалдырҙым?

Тағы икеләнде.

– Үгәй түгел, үҙ атаһы лаһа. Ирҙәр бисәһе менән асыуланышҡан көндә лә уландары өсөн йән атып тора торғайны.

Участка милиционеры тиҙ килде. Күренеп тора: ул Әсҡәт һөйләгәндәргә тулыһынса ышанған. Гөллирәгә асыулы ҡараны ла, шелтәле тауыш менән һораша, яҙа башланы. Балаларығыҙ ҡайҙа? Ниңә өйҙән сығып киттең? Игеҙәк малайҙары, игеҙәк ҡыҙҙары хаҡында белеште.

Өйҙөң эсен, ишек алдын ҡараштырҙы ла, Хафизә әбейҙәргә барып тикшереп килмәксе булды. Әлиә менән Зәлиә ысынлап

шундамы икән? Гөллирәнең күгәреп шешмәкләнгән йөҙөнә лә күҙ һалды.

Бер-береһенә ҡара дошманға әүерелгән ир менән ҡатын, ни эшләргә белмәй торған мәлдә, ҡапыл ишек асылды һәм унан Мөжәүир хәҙрәт килеп инде. Туҡһанға етеп килгән, ныҡ ҡартайған был ил ҡартын өйҙән сығып йөрөмәй, ауырыуҙарҙы ла һирәкләп кенә ҡарай икән, тиҙәр ине. Нисек ул бында, шул тиклем ыҙғыш-талашлы өйгә килергә булған? Тиккә түгелдер.

Әсҡәттең күңелен ҡаты ҡурҡыу, ә Гөллирәнекен өмөт солғап алды. Хәҙрәт үткер ҡараған йәшел күҙҙәренән зәһәр ут сәсеп Әсҡәткә төбәлде, бер генә һүҙ әйтте:

– Хәсис, исмаһам, ғәйебеңде ҡатыныңа япһарма, яуыз бәндә!

Унан Гөллирәгә боролдо:

– Ҡыҙым, улдарың өсөн ҡайғырма, улар әле беҙҙә, – тине йомшаҡ ҡына итеп, – һау-сәләмәттәр, ин шәәъ Аллаһ.

Мөжәүир хәҙрәт эштең нисек булғанын һөйләмәһә лә, әсә кеше улдарының ниндәйҙер илаһи ҡөҙрәт, әүлиәнең тыслым көсө менән иҫән-һау ҡалыуын төшөндө.

– Рәхмәт, хәҙрәт олатай, рәхмәт, әүлиә! Гүргә ингәнсе һиңә рәхмәт уҡырмын!

Үҙе шатлығынан күңеле тулып ҡысҡырып илап ебәрҙе, әйтерһең, һыны ҡатҡан ерҙән кире терелде.

– Ила, ҡыҙым, ила, ҡай саҡ күҙ йәштәре дауа ул, – тине хәҙрәт Гөллирәнең арҡаһынан һөйөп.

Улдарын туңып үлеүҙән хәҙрәт ҡотҡарғанын белгәс, Әсҡәт шаҡ ҡатты. Ҡорған хәйлә-мәкерҙәре юҡҡа сығыуҙы аңланы, сөнки белә: әүлиә үтә күрә. Ни уйлағаныңды, ни эшләгәнеңде хәҙер теҙеп әйтеп бирәсәк. Тимәк, уның ғәйебе фашланасаҡ.

Әсҡәт, оятһыҙлыҡҡа бер башын һалғас, был юлы ла мәкер менән алдырырға ниәтләне.

– Өйөмдән хәҙер үк сығып кит. Мин – партия ағзаһы. Юҡ-бар һөйләп, кеше алдап йөрөгән мулла-монтағайҙарҙы енем һөймәй, – тип урынынан торҙо һәм ишекте асты. – Бар, бар. Юҡһа хәҙер милиция саҡыртам. Ун биш суткаға ултырып сыҡҡың килмәһә, атла.

– Әстәғәфирулла тәүбә, тәүбә, шулмы рәхмәтең, мөртәт! – тип аптыраны Мөжәүир хәҙрәт. Был тирә кешеләренең тик ихтирамын, рәхмәтен ишетеп йәшәгәнлектән, Әсҡәттең ҡылығын башына һыйҙыра алманы, оятһыҙлығына иҫе китте.

– Һин Дәжжәл һымаҡ ҡыланма, мәлғүн. Бик шәррир икәнһең. Үҙ сабыйҙарыңды ла аямағас! Хәләлеңде ни хәлгә төшөргәнһең, иблис, – тине. – Партиялы берәү. Партия ла яуызлыҡҡа өйрәтмәйҙер, уға һылтанма... Мәкруһлығыңа ярлыҡау юҡ!

Әсҡәт һаман өйҙән сығырға ыңғайламаған хәҙрәттең иңенә килеп йәбеште. Һөйрәкләп ишектән ырғытырға теләне. Ләкин хәҙрәт уға ғына бирешерҙәй түгел ине. Тегенең ҡулдарын иңенән алып ырғытты ла, утлы ҡарашын әҙәм аҡтығына төбәне. Был ҡараштан бөршәйеп ҡалған боҙоҡ үҙен бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнеп ҡалғандай хис итте, күңелен ҡурҡыу тойғоһо солғап алды. Шулай ҙа шомло хискә бирешмәҫкә тырышып, Әсҡәт тукһан йәштәге ҡартҡа йәнә ынтылды. Хәҙрәт үҙ ғүмерендә тәүләп аңлы рәүештә кешегә йыға ҡараны. Был ҡараш Әсҡәттең тәнен үтәнән-үтә өткәндәй булды. Ултырған еренән ир гөрһөлдәп иҙәнгә ауҙы.

– Әстәғәфирулла тәүбә! – тине хәҙрәт был тиклем ҡатырғаныуына Хоҙайҙан ғәфү үтенеп. – Ҡабат яуызлыҡ ҡыла алмаһын өсөн генә булды. Белеп тораһың, төрмәләрҙә ултырҙым, әсирҙәр булдым, яманын да, яҡшыһын да күп күрҙем. Рәнйешем төшһә, төштө. Берәүгә бер ҡасан насарлыҡ эшләмәнем, – тине.

Хәҙрәт Гөллирә яғына боролдо.

– Ҡыҙым, һин борсолма, ул берәй сәғәттән иҫенә килер. Бөтөнләй икенсе кеше булып уяныр. Үҙ яуызлығына үҙе ғәжәпләнер. Ғәфү итә алһаң, ғәфү итерһең. Үҙ иркеңдә.

– Юҡ, мин уны ғәфү итә алмам. Һеҙгә ҡул күтәрҙе ул. Улдарымды харап итә яҙҙы.

– Мәйелең. Балаларыңды нисек аҫрап үҫтерермен тип тә борсолма. Һәр бала Хоҙайҙан үҙ ризығы, үҙ өлөшө менән тыуа.

Мөжәүир хәҙрәт был йәш мәғсүм ҡатындың холоҡ-фиғелен үтә күрә, шуға ла ихтирамы көслө ине. Ипле, итәғәтле ҡатынға:

– Ҡыҙым, – тип ягымлы өндәште. – Улдарың берәй аҙна беҙҙә булһын. Өшкөрөп, дауалап һауыҡтырғас, үҙем алып килермен.

– Рәхмәт, мең рәхмәт. – Гөллирәнең күҙҙәренән йәше атылып сыҡты.

– Ҡыҙым, бәпәйгенәләрең асыҡты, ахырыһы, бара һалып имеҙеп кил, – тине үҙ балаһындай яҡын күреп. – Мин дә ҡуҙғалайым.

Ысынлап та, йәш имсәкле әсәнең күкрәге тиртеп, һөтө ағып киткәйне.

Сәй эсереп, ҡунаҡ итә алмауыма үкенәм, – тине йәш ҡатын уңайһыҙланып.

– Булыр, сәй эскән саҡтар ҙа булыр, – тине хәҙрәт ишеккә йүнәлеп. – Алда ғүмер бар әле.

Хәҙрәтте оҙатҡас та Гөллирә, күңеле тынысланып сабыйҙары эргәһенә йүгерҙе.

Улар сығып китеп, бер ни тиклем ваҡыт үткәс, иҫенә килгән Әсҡәт уянып, күҙҙәрен асты. Тәне һыҙлай, әйтерһең, ныҡ туҡмалған. Сыҙап торғоноҙ эсе боша, ғүмере булмағанса йәне әрнеп-әрнеп иңрәй. Ни хикмәт был? Әсҡәт ярты тәүлек эсендә булған хәл-ваҡиғаларҙы кинолағы кеүек бәйнә-бәйнә күҙ алдынан үткәрҙе. Үҙе ҡылғандарға үҙе аптыраны. Оят, оят! Хәҙер нисек бисәһенең, балаларының күҙенә ҡарар? Иң яҡшыһы – өйҙән сығып тайыу, башҡаса бер ваҡытта ла күҙҙәренә күренмәү, тип уйланы ҡыҙыулығы менән. Ул бер бит ҡағыҙ алды ла, бер аҙ уйланып ултырғас, яҙҙы:

«Гөллирә, балаларым! Мин, йүнһеҙҙе, ғәфү итегеҙ. Бынан ары күҙегеҙгә тура ҡарай алмам. Хушығыҙ. Мин күҙ күрмәҫтәй, ҡолаҡ ишетмәҫтәй ергә китәм. Эҙләмәгеҙ».

Ашыҡ-бошоҡ кейенде лә күңелен сикһеҙ оялыу ғазабы солған алған Әсҡәт, өйҙән сығып, оло юлға табан атланы. Яңғыҙ әсә дүрт баланы нисек ҡарар, нимә ашатыр, ни кейҙерер, – был турала ла уйлар хәлдә түгел ине ул. Ул үҙенән-үҙе ҡасырға теләне. Күңелендә бары бер той-ғо – оялыу ине.

# Сая килен

Эре-эре бүрәнәләрҙән һалынған өйө артындағы артһыҙ эскәмйәлә йәш сағында үткерлеге, саялығы менән тирә-яҡтың һушын алған, инде хәҙер ологайыуы етеп миктәгән Фәйрүзә ултыра. Әбей ҙур итләс ҡулдары менән һыҙлаған тубыҡтарын ара-тирә ыуғылаштырып ҡуя ла байыуға юл алған ҡояшҡа ҡарап, талыҡҡан тауышы менән һуҙып көйләй:

– Һә-ә-ә-әй, үә-үә-үә-ә-ә-әй!..

Артынса үҙ алдына көнөнә йөҙ ҡабатлаған теләктәрен теҙә:

– Зиһендәремдән яҙҙырма, Хоҙайым. Бәндәләргә бәндә итеп тилмертмә! Ҡәҙерле сағымда гүреңә ала күр.

Эргәһендә – уң яҡ урамдаш күршеһе Һөйәрбикә апай. Ул баянан бирле берсә кейәүенең, берсә килененең тетмәһен тетә. Күпте күргән, зирәк аҡыллы Фәйрүзә әбей уны тыңлауын тыңлай, тик хуплаймы, юҡмы – белеп булмай. Һүҙ юҫығын аңламаған кешеләй, үҙенекен һөйләй:

– Һай, Мөжәүир хәҙрәттең алтын аҡылдары! Нәгеҙҙәрҙән-нәгеҙ зат ине. Кейәүеңде – улыңдай, килененде ҡыҙыңдай күр, икеһе лә үҙ балаң булыр, ти ине. Ин шәәъ Аллаһ, аҡыллының әйткәнен ныҡ тоттом. Туҡһандың өҫтөндәмен, күреп тораһың, Һөйәрбикә күрше, кейәүҙәрем дә, килендәрем дә «әсәй» тип кенә өндәшә. Алламдың биргәненә шөкөр.

Тирә-яҡта телдән телгә күсеп маҡталған әүлиәнең исемен ишетеүе була, Һөйәрбикә тел сарлауҙан шып туҡтай.

– Эй, илаһым, хәҙрәтте бер күрергә яҙманы миңә... Бер районда йәшәнек, – тип үкенесле тауыш менән әбейҙең һүҙен күтәрмәләп ала:

– Һин, Фәйрүзә апай, ҡайһылай бәхетлеһең. Күреү генә түгел, хәҙрәттең ауылына килен булып төшкәнһең дәһә.

– Алламдың биргәненә мең-мең шөкөр, тап шулай, – йөҙө яҡтырып киткән Фәйрүзә әбей, тәмләп-тәмләп хәҙрәт тураһында белгәндәрен күршеһенә бәйән итә.

– Урыны йәннәт түрендә уның. Сөнки гел изгелеккә өйрәтте. Ғөрөф-ғәҙәтте ныҡ тотто. Беҙгә, йәш килендәргә: «Ҡояштан алда торогоҙ ҙа, тупһағыҙҙы һепереп, тәҙрә пәрҙәләрегеҙҙе асығыҙ. Ҡояштың тәүге нуры менән донъяғыҙға ырыҫ-бәхет килер, Хоҙай үҙегеҙгә һаулыҡ, муллыҡ бирер», – ти торғайны.

Һуңғы ваҡытта дингә ылығып, намаҙ уҡый башлаған Һөйәрбикә күршеһенең ауыҙынан сыҡҡан һәр бер һүҙҙе йоторҙай булып тыңлауын күреп, Фәйрүзә әбей тағы ихласыраҡ дауам итә.

– Күп йәшәнем, күп күрҙем, әммә хәҙрәткә тиң аҡыллы, зирәклекте күрмәнем. Ярҙамсыл, тоғро булды. Өшкөртөр, имләтер өсөн ҡайҙан ғына килмәнеләр! Хатта быума сирлеләр һауығып ҡайта торғайны. Беҙҙең ергә биргән Хоҙай Тәғәләнең оло рәхмәте өсөн яралған зат булды ул хәҙрәт.

Тормош юлын, үткәндәге күргән барлыҡ хәсрәт юшҡынын, күкрәгенән һығып сығарырға теләгәндәй, әбей тағы, гәҙәтенсә, һуҙып ебәрҙе:

– Һә-ә-әй, үәй-үәй-үәй...

– Фәйрүзә апай, йәш, сая саҡтарыңды һөйлә әле, – тип үтенде Һөйәрбикә, Мөжәүир хәҙрәт тураһындағы һөйләшеүҙе дауам иттергеһе килеп.

Бөгөн күңеле болоҡһоп торһа ла Фәйрүзә әбей күршеһенең һүҙен йыҡмаҫҡа булды. Оло кешегә йөрәк түрендә йөрөткән күңел сәхифәләрен әйтеп ҡалдырыу фарыз даһа.

*Үткән ғүмер менән ҡалған хәтер,*
*Ҡайтмай, һыуҙар кире аҡһа ла...* –

тип, йәнә бер әй-үәйләп алды ла күршеһенә тормошоноң иң сағыу биттәрен асып бирҙе әбей.

* * *

– Фәйрүзә, күк күгәрсенем, яусы ебәрһәм, миңә сығырға риза булырһыңмы?

Бешкән еләктәй еткән ҡыҙ ризалығын һүҙ менән әйтергә ҡыйманы. Күптән Һибәткә тип исемен яҙып сиккән ҡулъяулығын алып бирҙе лә, оялып, аҫҡа ҡараны.

– Тимәк, ризаһың, Фәйрүзә!

Зимагорҙар менән бергә старатель булып эшләгән егет ебеп ҡала торғандарҙан түгел. Ул ҡыҙҙы ҡосағына ҡарманы ла, биттәренән үбеп тә алды. Манһырҙың был аҫыл егетен күптән оҡшатып йөрөгән үткер ҡыҙ артыҡ ҡырыҫлыҡ күрһәтмәне.



Урғаҙаның шифалы һыуы

Һөйгәне менән бергә булырға ашҡынған егет өйләнешеүҙе оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа булды: бер йомала барып әйттерҙеләр, икенсеһендә оҙатып та алдылар. Ниһайәт, һомғол буйлы, бөгәренә етеп торған ебәк толомло, аҡ йөҙлө, ынйыы тешле, күрмәлекле ҡыҙ – уның хәләл ефете. Холҡо ла башҡа ҡыҙ-ҙарҙыҡына әллә ни оҡшамаған кеүек. Һәр эшендә сая тәүәккәллек, ҡатынҡы булдыҡлылыҡ һиҙелә. Һибәткә ҡыҙҙағы был сифаттары айырыуса оҡшаны.

Уңған килен ул табыр тигәндәй, йыл да үтмәнс, ғаиләлә бәхет өҫтөнә бәхет өҫтәп, ир бала тыуҙы. Был ике аралағы мөхәббәтте тағы көсәйтте. Һибәт улының кәләшенән күҙен ала алмай өҙөлөп тороуы ҡәйнә кешегә генә ниңәлер оҡшамай башланы.

– Күрәләтә шашындыра Фәйзулла ҡупырышын. Былай ҙа шытып сығып килгән нәмәне боҙоп ҡына ҡуя инде, – тип көйҙө һынсыл Ғәйшә әбей. Төҫкә сибәр, эшкә тилбер,

кәрәгендә ирәбе, кәрәк саҡта сая булған Фәйзулла ҡыҙҙары уны элек-электән шикләндерә торғайны. «Килендең теҙгенен бушатырға ярамай», – тип уйлаған әбей, йөрөй торғас, тегене әҙерәк уҡытып алырға булды. Иртәнге сәйҙе эскәндә:

– Ҡоҙалар һағындырҙы. Саҡырып алайыҡ, тим. Бабай, һин Фәйзуллаға барып, килендең ата-әсәһен алып ҡайт, – тине. Шунда уҡ, әбейе әйткәнгә риза булған ҡарт, аты, сана-фәләнен ҡараштырырға сығып китте. Илап уянған сабыйын имеҙеп ултырған киленгә лә әбей бойороҡ бирҙе:

– Беҙҙең Манһырҙа ҡәҙерле ҡунаҡтарға баш ите ашатыу йолаһы бар, – тине. – Һин анау һыйыр башын бешерергә һал. Һалма йәй. Мөжәүир хәҙрәттәргә лә әйтербеҙ, – тип өтөлмәгән, таҙаланмаған баш янына төртөп күрһәтте. Иртәнсәк болғап, мейес соҡалына ултыртылған ҡамырға ла ымланы.

– Ә быныһын баҫа һал. Ҡабарып сыҡҡас, бешерерһең.

Килене башты ҡайһылай итеп тәрбиәләп бешереү хаҡында һорашып өлгөрә алмай ҙа ҡалды, ҡәйнә кеше йәһәтләп ишеккә табан атланы:

– Һибәтемә башалтай өлгөртә һалайым. Ғәтифә әхирәттәргә барып бер аҙ ултырып ҡайтам. Әтеү өйҙә эш ырамай, – тине бәйләмен көпө кесәһенә тығып. «Киленгә килен булмай торайым әле», – тип аҡланы ул үҙенең ҡылығын.

Әлегә тиклем бер ҙә мал башына тотоноп ҡарамаған йәш килен иң тәүҙә ни эшләргә белмәй аптыраны. Зирәк Фәйрүзә ҡәйнәһенең хәйләһен дә һиҙмәй ҡалманы: ата-әсәһе, ауылдың абруйлы аҡһаҡалы Мөжәүир хәҙрәт алдында оятҡа ҡалдырырға самалағанын төшөндө. Юғиһә, ниңә нәҡ шундай саҡта өйҙән сығып китә? Хатта йәш имсәкле икәнен дә иҫәпкә алмай.

Йәш килен бирешмәҫкә булды. Башты, туҙ яндырып, апаруҡ өтәҫләне, тырышып йыуҙы. Унан ҡаҙан тултырып тураҡлап һалып ебәрҙе. Йәнә бәпәйен имеҙеп ятҡырҙы. Ул арала ҡамыры ла ҡалҡып сыҡты. Мейесте яғып, икмәкте әүәләй һалып ултыртты.

Кискә табан Ғәйшә әбей әхирәтенән һыңар башалтайҙы бәйләп бөтөп ҡайтып инеүгә Фәйрүзә килендең ата-әсәһе лә килеп еткәйне. Ҡунаҡ янына саҡырылған Мөжәүир хәҙрәт менән Гөлйемеш абыстайҙар ҙа көттөрмәне.

Бына өлтөрәп йөрөгән Ғәйшә әбей ҡунаҡтарҙы табын янына саҡырҙы. Йәш килен түңәрәк еҙ батмусҡа өйөп һалынған баш итен килтереп ашъяулыҡ уртаһына ҡуйҙы.

– Рәхим итегеҙ, был юлы килен үҙе бешерҙе, үҙенә ихтыяр иттем, – тине ҡәйнә, батмустағы күрмәлекһеҙ ит киҫәктәренә хәйләкәр ҡарап. Йүнләп өтөлмәгәнлектән, төктәре унда-һанда тырпайышып торған ҡойҡа, урыны-урыны менән ҡара көйгән көйө булғас, табындағылар аптырашып ҡалды. Етмәһә, ҡойҡа бешеп етмәгән ине. Күрәһең, килен уны ит ыңғайына бешә тип уйлаған да, бер-ике сәғәт тирәһе генә бешергәндер. Ҡойҡаның оҙаҡ бешеүен йәш ҡатын ҡайҙан ғына белһен инде. Ҡунаҡтар сәйерһенеп, иткә ынтылырға аптырап ултырғанда, ҡәйнә кеше тағы нығыраҡ ҡыҫтарға тотонды. Һәр кемдең алдына өлөшләп һөйәкле итте һалып сыҡты.

– Ашағыҙ, ҡунаҡтар, һыйланығыҙ, баш ите беҙҙә тик ҡәҙерле ҡунаҡтарға, – тине. Берәү ҙә алдына ҡуйылған иткә ҡағылмағанды күреп Ғәйшә әбей шартына килтерә башланы:

– Бына беҙҙең килен шулай, эш мәйеле белмәй. Ҡоҙағый, үҙең күрҙең, – тине. – Һәлкәү...

Баянан бирле Фәйрүзәһе өсөн берсә борсолоп, берсә оялып ултырған әсәһе өнһөҙ ҡалғас, Фәйрүзә шаршау аҫтына боҫто. Үлемдән оят көслө. Инде ни хәл итергә? Сабыйын төрөп алып сығып ҡасырғамы? Ҡыш өҫтөнән ҡайҙа барырға? Шулай ҙа килен кеше тешен ҡыҫып түҙергә булды. Ул арала Мөжәүир хәҙрәттең көр яғымлы тауышы ишетелде.

– Ҡуй, Ғәйшә еңгәй, аш хурлама – ҡоҫторор, йәште хурлама – боҫторор. Киленде йәштән генә алғанһығыҙ. Белмәгән ерен үҙең иплəп өйрәт. Башты таҙалап бешерергә күп аҡыл кәрәкмәҫ. Татыу булығыҙ. Килен ҡәйнә буҫағаһынан, ти. Ҡыҙым тиһәң, ул һиңә әсәй, тиер. Бар, табынға саҡыр килененде.

Оялышынан бурлаттай булған килен, ҡәйнәһе артынан табын эргәһенә килеп урынлашты.

– Йәш саҡта төрлөһө була ул. Берәү ҙә белеп тыумай. Киленебеҙ ҙә өйрәнер. Ана, Гөлйемеш абыстайығыҙ ҙа килгәндә бишбармаҡ бешерә белмәй ине. Хәҙер унан да оҫтаһы юҡ.

һүҙгә ҡушылырға бирәү ҙә баҙнат итмәгәс, хәҙрәт дауам итте.

– Утыҡһын әле киленебеҙ. Баҫҡан ерендә ут сәсрәтер. Күрерһегеҙ саялыкта берәүгә ал бирмәҫ, ин шәәъ Аллаһ, – тине лә алдындағы итте ҡырҡып алып ҡабып ебәрҙе.

– Ашағыҙ, йәмәғәт, аштан оло булмағыҙ.

Баянан бирле ҡатынын ҡурсалағыһы килеп, үҙенә урын таба алмай ултырған Һибәт тә итте ашарға тотондо.

Ата-әсәгә лә йән инде. Улар ҙа итте өҙөп алып сәйнәштерә башланы.

Ғәрләнгән Фәйрүзә генә иткә ҡағылманы ла. Ул сәмләнеп: «Һәр бер эштең айышына төшөнөп алмаһам, исемем Фәйрүзә булмаһын», – тип уйланы. Үҙе лә бер яйын сығарып, тупһыҙ ҡәйнәне аҡылға ултыртырға ҡәһәтләнде. Уйлауы булды, әйтерһең, асыулы киленкәйҙең уйҙарын уҡыны хәҙрәт, йәнә телгә килде:

– Аслан ҡәйнәң әйткәнде ауырға алып, ҡырын тартып үпкә һаҡлап йөрөмә, килен. Иҫәр – еңдем, аҡыллы – ҡуйҙым, тиер. Оло кеше әйтер ҙә ҡайтыр.

Хәҙрәттең киҫәтеүен ҡабул итте килен. Бөгөнгө табындан ул үҙенә байтаҡ һабаҡ алды. Хәҙрәт саялыҡ тигән һүҙгә баҫым яһаны. Нимә була икән ул саялыҡ? Мәғәнәһен бөткәнсә аңлап етмәһә лә, Фәйрүзәгә ошо ят, танһыҡ һүҙ, ниңәлер, оҡшап ҡалды. Күңеленән уны ҡат-ҡат ҡабатланы, яңғырашы сихырланы.

Ата-әсәһенең аяулы балаһы булып, иркә үҫкән ҡыҙ тормоштоң ауырлығын, ҡатмарлығын күреп белеп бөтмәй шул. Үҙенең бер саҡ ҡатын-ҡыҙ иңе күтәрә алмаҫтай хәлдәргә тарырын да, шуларҙан һуң сая ғына түгел, ажарға әйләнерен дә күҙ алдына килтермәй әле киленсәк.

Бер көндө Һибәте эштән һуңлабыраҡ бошонҡо ҡайтты. Йөҙө үтә етди ине.

– Ултыр, әле, кәләш, – тине. – Һөйләшәһе һүҙ бар.

Фәйрүзәһе эштең ниҙә икәнен шунда уҡ һиҙенде, әммә башлап һорашманы. Һибәт тә йәш кәләшен йәлләп, байтаҡ өндәшә алмай торҙо. Тик әйтер һүҙе йәшерә торғандарҙан түгел ине.

– Мине һуғышҡа ебәрәләр, Фәйрүзә, повестка бирҙеләр. Һуғыш үлемесле бара тиҙәр. Приискылағы эш мөһим булһа ла, һаман ебәрәләр. Шахтерҙар аҙайҙы.

Иренең ошо һүҙен көн дә көткән, хатта йәшереп кенә уға барлыҡ кәрәк-ярағын йүнәтеп ҡуйған Фәйрүзә, сәбәләнеп Һибәтен ҡаңғыртманы, ҡайһы бер бисәләр кеүек илап йығылманы. Күпте күргән башҡорт ҡатындарына хас фиғел менән тыныс ҡына һораны:

– Ҡасан китәһегеҙ?

– Иртәгә. – Һибәт өнһөҙ торған кәләшен ҡосаҡланы. – Һағынырмын инде. Улымды хатта күреп тә туя алманым. Һине һөйөп тә хатта танһыҡтарым ҡанманы...

– Илгә килгән афәт. Аңлайым, һин унан ситтә тороп ҡала алмайһың, – тине тауышы үҙгәреп, ҡатырғанып киткән ҡатын.

– Һеҙ бирешмәςһегеҙ. Атайым, әсәйемдәр бергәһегеҙ. Старатель ғаиләһе итеп яҙҙырттым. Улым менән икегеҙгә паек алып тороρһоғоҙ.

– Беҙ нисек тә йәшәрбеҙ. Үҙең генә иςән-һау йөрөп ҡайт, – тине Фәйрүзә, тыныс булырға тырышып. Ул ире алдында һулҡылдап илап, бәлйерәп төшөүҙән ҡурҡты. Нисек тә түҙергә ҡарар итте.

Һөйөшөп туя алмаған ике йәш йөрәк һуңғы төндө Урғаҙа буйында үткәрҙе. Серләшеп серҙәре, һөйләшеп һүҙҙәре, яратып наҙҙары бөтмәне уларҙың. Яңы ғына гөрләтеп донъя көтә башлаған ғаиләнең бәхетенә немец фашистары арҡыры төштө.

– Ләғнәт яуһын, ҡороп ҡалығыҙ, ҡороғорҙар, – тип ҡарғаны уларҙы Фәйрүзә.

Йөрәге ярһып, күкрәгенән атылып сығырҙай булған Һибәт, ҡатынына бер нәмәне ныҡыны.

– Көт мине, күк күгәрсенем, көт, йәме. Хатта үлем ҡағыҙына ла ышана һалма. Тамуҡтарҙан юл ярып булһа ла барыбер һиңә ҡайтырмын. Күңелемдә һиңә һүнмәς мөхәббәт дөрләй. Ул мине һаҡлар, – тине.

Тамуҡтарҙан бында юлдар юҡлыҡты аңларға теләмәй ине шул ярһып һөйгән ике йәш йөрәк. Һибәт тә яҡындарын, тыуған ерен мәңгелеккә ҡалдырыуын белмәй ине шул.

Ирен һуғышҡа оҙатҡас, Фәйрүзәгә донъя буп-буш булып ҡалды. Бары эш менән күңелен баҫты. Баш ҡалҡытмай бесән сапты, күбәләне, кәбәнен ҡойҙо. Һибәтен һағыныуҙан тәҡәт тапмаған саҡтарҙа, улын алып, Урғаҙа буйҙарына сығып йөрөнө. Кистәрен ултырып иренә оҙон-оҙон хаттар яҙҙы, йырҙар теҙҙе.

*Ҡулымдағы мәрйенемде*
*Өҙәмен дә теҙәмен.*
*Һағынамын, һарғаямын,*
*Һағынһам да түҙәмен.*
*Герман ҡыҙы сәсен тарап,*
*Үрмесләп үрер әле.*
*Беҙгә күрһәткән нужаны*
*Ул да бер күрер әле, —*

тип шиғырҙар сығарҙы.

Егәрле ҡайныһы, киленен эргәһендәрәк йөрөтөп, һәр төрлө ирҙәр эшенә өйрәтте. Мал ҡарау, ат егеү, туғарыу, бесән хәстәрләү, утын ташыу кеүек эштәрҙә һауһаҡ йәш килен ҡайныһы өсөн ҙур терәк булды. Ат егеп, дилбегә тота белгән Фәйрүзәгә эш-көш табылып торҙо. Иң тәүҙә Баймаҡтан биш көнгә бер барып, старатель ғаиләләре өсөн паек алып ҡайтырға ҡуштылар. Был йомошто арыу башҡарыуын күреп, бригадир уны тағы яуаплыраҡ эшкә күсерә һалды. Фәйрүзәгә Симон аръяғындағы Пригородный тигән утарҙан йәшелсә ташыу эшен йөкмәттеләр. Йәш ҡатын арбаһына кәбеҫтә, кишер, һуған тултырып тейәп ала ла, Баймаҡҡа алып барып тапшыра.

Бер көн шулай Фәйрүзә Баймаҡтан ҡайтышлай Фәйзуллаға һуғылып, әсәһен күреп ҡайтмаҡсы булды. Атаһы гүр эйәһе булғас, меҫкен әсәһе көнө-төнө илай. Ҡәҙерле кешеһен йыуатып, әҙ-мәҙ күстәнәс алып барып, күңелен күргеһе килде уның.

Бер-ике каса сәй эскеләгәнсе көҙгө көн кисләй ҙә һалды. Әсәнең Фәйрүзә ҡыҙын төнгә ҡаршы юлға сығарып ебәргеһе килмәй ине.

– Оло һаҙҙа ҡаҫҡындар йәшенеп ята икән, тиҙәр. Малтыуар ҙа юғалғылай. Әллә, ҡыҙым, төнгә ҡаршы ҡуҙғалмайһыңмы? – тине ул.

– Улым көтөр бит. Йоҡламай, мине таптырыр, – тине йәш әсә өҙәләнеп.

– Ҡайның, ҡәйнәң, балаңдан күҙ яҙлыҡтырмай, бер төнгә бер ни ҙә булмаҫ.

– Ҡуй, әсәй, борсолоп бөтөрҙәр. Атым шәп, һаҙҙа һаҫып ятҡан ҡаҫҡындарҙы ғына еткермәҫ әле, – тине Фәйрүзә атының ҡамытын рәтләштереп. – Һигеҙ саҡрымды ни, һә тигәнсә ҡайтып инермен, – тине лә атын Манһыр юлына борҙо.

Шулай ҙа Олоһаҙға етәрәк Фәйрүзәнең йөрәге шомланды. Ысынлап та, бынауындай ҙур ҡалын һаҙлыҡта ниҙәр булмаҫ! Күңеленә шик төшкән ҡатын таҡыр арба юлынан атын шәберәк ҡыуаланы. Бер аҙ баргас, ерәнсәй ат ҡаты бышҡырып ебәрҙе лә, әйтерһең, ниҙер аңғартырға теләне, артына боролоп хужаһының күҙҙәренә ҡараны. Былай ҙа күңеле һеркелдәп килгән ҡатын ҡорт саҡҡандай тертләп, ялт итеп артына әйләнде. Ни күҙе менән күрһен, башына пилотка, өҫтөнә таушалып бөткән йәшел китель кейгән ике һалдат арбаға йәбешә яҙып килә. Берәүһе етеп йәбеште хатта. Ҡаҫҡынға арбаға һикереп менеп ултыраһы ғына ҡалды. Айбарланған йәш ҡатын баҙап торманы, ҡулындағы сыбыртҡыһы менән тегегә шартылдата һуғып ебәрҙе лә үҙе йән асыҡҡа «һайт-һайт»лап атын тағы шәберәк ҡыуҙы. Ҡатындан бындай ҡыйыулыҡты көтмәгән ҡаҫҡын сабылған ҡамыштай ергә ҡоланы ла саңлы юлда ятып ҡалды. Ә икенсеһе тағы ныгыраҡ гәйрәтләнеп баҫтырырға тотондо. Ярһыған атын Фәйрүзә лә ашыҡтыра төштө. Тегеләр ике-өс саҡрымдай баҫтырғас, тороп ҡала башланы.

Фәйрүзә Манһыр түбәләсенә менеп еткәс кенә атын атлатырға йөрьәт итте һәм артына боролоп ҡараны. Хурлыҡҡа ҡалган үсле һалдаттарҙың береһе һүгенеп йоҙроғон күрһәтте:

– Ах, сука, догадалась, а то мы бы тебя!..

Бары шунда ғына Фәйрүзә үҙенең ниндәй бәләнән ҡотолоуын асыҡ аңланы, күңелендә был икәүгә нәфрәт уянды. «Беҙ-

ҙең ирҙәр яу ҡырында ҡан ҡоя, ә былар һаҙҙа ҡасып ятып, мал һуйып ашап, һимереп ята», – тип уйланы. Ҡай саҡ ул хатта ҡатын-ҡыҙ булһа ла, фронтҡа китергә тип уйлап ҡуйҙы. Улын ғына йәлләй.

– Рәхмәт, ерәнсәйем, тоғро атым, – тип бышылданы ул өйөнә етеп килгәндә. Ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағас та ялдарынан иркәләп һөйөп алды. Ауыр көсөргәнеүҙән хәлһеҙләнгән аяҡтарын саҡ һөйрәп ҡапҡа асырға ынтылһа, үҙен көтөп торған ҡайныһын күрҙе. Аттың дилбегәһен уға тотторҙо.

– Атаҡ, балам, Ерәнсәйҙе аҡ күбеккә батырғанһың даһа, ҡалай ныҡ ҡыуғанһың, – ти әле бер ни аңламаған ҡайныһы. Килененең ағарынып киткән йөҙөнә ҡарағас, низер булғанын һиҙенә. Фәйрүзә:

– Ҡамытты алмай тор, ҡайным, башта ат һыуынһын, – ти ҙә өйгә атлай. Уның тиҙерәк улын күргеһе, йән киҫәген күкрәгенә ҡыҫҡыһы килә.

Сәй эсергә ултыргас ҡына, өйҙә үҙен көтөп ултырыусыларға Манһыр менән Фәйзулла араһындағы баяғы хәтәр мажараны һөйләп бирә ул.

– Уй, киленкәйем, бәпәйем, – тип ҡәйнәһе зыулап илай башлай, ә ҡайныһы ирҙәрсә тота үҙен, ҡутәрелеп һуғылмай, ипле генә итеп:

– Оло ҡазанан ҡотолғанһың, ҡыҙым, Хоҙай аралаған, – тине. – Өйҙән сығып киткәндә былай ҙа ҡыҙғанып ҡала инем. Дилбегә тотоп йөрөү ҡатын-ҡыҙ эшеме ни ул? Һуғыш бәкәлгә һуҡты. Һибәтең өйҙә булһа, һис кенә лә әрһеҙләмәҫ ине лә бит үҙеңде, – тип һуғышты ҡәһәрләне.

– Иртәгә иртәнсәк хәҙрәткә хәйер бир, килен, – тине уға ни алып, ни биререн белмәй киткән Ғәйшә әбей. Килеп берсә арҡаһынан һөйҙө, берсә йәшен һөрттө, берсә йоҡлап ятҡан ейәнен ҡараштырҙы.

Фәйрүзә килгәндә Мөжәүир хәҙрәт, кемдәләр көткәндәй, бехтә кейенеп, түр башында тиҫбе тартып ултыра ине. Киленсәктең һүҙ башлауын да көтөп тормай:

– Белеп ултырам, балам, бөтәһен дә белеп ултырам, – тине. – Зирәк күренә, моғайын, аңғарыр, тип атыңды бышҡырттым, боролтоп ҡараттым. Ин шәәъ Аллаһ, һиҙгерһең.

Йөрәклеһең, килен, саяһың! Һине кафырҙарҙан рәнйеттермәҫ инем барыбер. Бер сараһын күрәйем инде, тип кенә йыйынғайным, үҙең өлгөрҙөң. Шәплеһең, килен!

Хәҙрәт саҙаҡаны алып, айырым бер ихласлыҡ менән доға ҡылды.

– Моғайын, хәҙер килер тип, бынау бетеүҙе яҙып әҙерләп ҡуйҙым үҙеңә, – тине лә өскөлләп тегелгән әйбер һуҙҙы. – Юғалтып ҡуйма, ҡәҙерләп йөрөт. Унда изге доға яҙылған. Хоҙай Тәғәләгә һыйынып йөрөһәң, юлың уңыр, ин шәәъ Аллаһ. Рәхмәт әйтеп, ишеккә йүнәлгән ҡатынға йәнә бер аҙға туҡтарға ҡушты:

– Бер кәңәшем бар, тыңлаһаң, – тине. – Һин – ҡатын-ҡыҙ. Дилбегә тотоп, ирҙәр эшендә йөрөү килешмәҫ. Атыңды һыйырға алыштырһаң, яҡшы булыр. Байыштан Хөснулла ҡорҙаш ат эҙләй, ти ине. Һыйыры һөтлө икән.

– Рәхмәт кәңәшеңә, хәҙрәт. Ҡайнымдар ни тиер?

– Улар ҙа һин әйткәнде раҫлар.

Мөжәүир хәҙрәттең аҡылын тоттолар. Фәйрүзә атының мал ҡәҙерен белгән Тәпей Хөснулла ҡарт ҡулына барып эләгеүенә ҡыуанып, уның ҡыҫҡаҡ ботло лапаҡай һыйырын етәкләп ҡайтты ла ҡуйҙы. Һыйыр, ысынлап та, һөтлө булып сыҡты. Һауған һайын бер биҙрә! Үҙе ҡаймаҡлы. Ҡәйнәһе кинәнеп аҡты эш итте, ә Фәйрүзә колхоз мәшәҡәттәренә сумды.

Һуғыш йылдарында, әллә һунарсылар юҡлыҡтан, бүреләр ғәләмәт үрсей. Хатта бер пары ауылдан өс саҡрымда ғына ятҡан Олоһаҙға эйәләп, шунда көсөкләгән икән, тигән хәбәр таралды. Ваҡ малға көн күтһәтмәүе етмәй, ҡороғорҙар, һыйырҙарға ла ынтыла, тинеләр. Кешеләр төндә генә түгел, көндөҙ ҙә тышҡа сыгырга ҡурҡа башланы.

Кисләтеп кенә ҡайтмай ҡалған һыйырын эҙләргә сыҡҡан Ғилминиса әбей юғалғас, бының баяғы бүреләр эше икәненә бераү ҙә шикләнмәне. Шул уҡ ваҡытта йыртҡыстың артынан төшөүсеһе лә табылманы.

Ноябрь баштары ине. Ҡара көҙ булһа ла, ҡураға ингеләгәнсе ер еҫкәп, бауыр аҫтынан ел үткәреп йөрөштөрөп ҡайтһындар тип, кешеләр малын ҡырға ҡыуҙы. Кис етеп килә.

Лапаҡҡайы һаман күренмәгәс, йөрәгенә түҙмәгән Фәйрүзә, малын эҙләп, һыртҡа сығырға булды. Бүре-фәләнгә осраһам тип, оҙон таяҡ башына ҡалын итеп туҙ ураны, шырпы һалып алды. Зыяратты үтеп, һыртҡа күтәрелгәйне генә, ауылға табан йән-фарман сапҡан һыйырҙарҙы шәйләп алды. Килен шунда уҡ аңланы: малдар ҡото осоп низәндер ҡурҡҡан. Төркөм араһында Лапаҡҡайын абайламаған ҡатындың йөрәге дерелдәне. Ҡысҡа ботло һыйыр артта ҡалғандыр, тип үҙен йыуатып, ул ары йүгерҙе. Бер аҙ барып, икенсе һөҙәк һыртҡа күтәрелгәйне, Фәйрүзәнең күрелгән хәлдән йөрәге ярыла яҙҙы. Лапаҡҡайын бүре өйөрө уратып алған! Ике ҙуры, атаһы менән инәһелер, ике яҡлап һаҡсы кеүек саба. Ике балаһы ике яҡлап муйынына йәбешкән, икәүһе ике яҡлап еленен талай, берәүһе ҡойроҡҡа ынтыла. Ҡапыл аңы сыуалып киткән Фәйрүзәгә бүре өйөрө немец һалдаттары, ә үлемесле яраланған Лапаҡҡайы Һибәте булып күренде. Аҙарынған йәш ҡатын ҡурҡыуын да онотоп:

– Эй Аллам, фашист, харап иттең дәһә йәндәй күргән һәүкәшемде, Аллаһтың ләғнәте төшкөрө, – тип яр һалып ҡысҡырып ебәрҙе.

Бүреләр, тағы ла яманыраҡ ырылдашты, һыйыр эргәһенән китергә уйламаны ла. Алдан ҡайын туҙы урап әҙерләгән таяҡ-ҡа килен кеше ут ҡабыҙҙы. Дөрләп янган туҙлы таяҡты ялпылдата болгап, сая ҡатын бер үҙе бүре өйөрөнә ҡаршы атланы. Уттан ҡурҡҡан йыртҡыстар теләр-теләмәҫ кенә юлдан бороллолар ҙа урман эсенә инеп юғалдылар.

Тамам хәлдән тайған, ҡаны субырлап аҡҡан Лапаҡҡайҙы Фәйрүзә ихатаға саҡ килтереп еткерҙе. Ишек алдына инеүе булды, меҫкен һыйыр йән дә бирҙе. Хатта салырға ла өлгөрә алмай ҡалдылар. Яратып һауған, күлдәй һөт биреп торған һыйырының күҙ алдында харап булыуын күргән Фәйрүзә килен, иламаҫҡа тырышып, ҡанатҡансы ирендәрен тешләне. Күҙ алдында бүре-фашистар араһында ҡалған ире Һибәт торҙо. Юҡ, былай ҡалдырмаясаҡ, үс аласаҡ ул йыртҡыс-тарҙан, үс аласаҡ. Үлемгә – үлем, ҡанға – ҡан. Шунһыҙ яуызлыҡты еңеп булмаясаҡ.

Ире Һибәттән, күпме тилмереп көтһә лә, күптән бирле хат-хәбәр юҡ. Төштәре лә сыуала. Ҡанға ҡаныҡҡан йыртҡыстың

нәфсеһе туйыуҙы беләме ни, тамаҡлауын, ҡырыуын белә. Илдең йөрәгенә ынтыла. Эх, Һибәт, Һибәт! «Хәлгенәйеңде иҫкән елдәр аша булһа ла белгертһәңсе», — тип уйланы йәш ҡатын, күңелен билдәһеҙ хәүеф солғап алды. Юҡ, юҡ, күрәләтә һыйырының башына еткән бүреләрҙе ул ерҙә йәшәтмәйәсәк. Әйҙә, Манһыр килененең кем икәнен бөтә йыртҡыстар белһен, был яҡҡа аяҡ баҫырға ҡурҡып торһондар.

Кистән үсле ҡатын ҡайныһының келәттәге урындыҡ аҫтында ятҡан мылтығын ҡараштырып, һөртөштөрөп ҡуйҙы. Әҙер яһауҙарҙы кеҫәһенә һалып алды. Һибәте уға мылтыҡ тоторға, атырға өйрәткәйне. Бына һөнәрҙең кәрәге лә тейҙе.

Ҡатын төнө буйы уйланып план ҡорҙо. Иртәнсәк торғас, төндәге уйҙарын урыны-еренә еткерә башланы. Иң тәүҙә үлгән һыйырының бер һанын умырып арбаға тейәне лә зыярат һыртындағы теге юлға сығарып һалды. Моғайын, йыртҡыстарҙы ҡанлы ит еҫе тартыр. Үҙе кискәрәк, ҡоролған мылтығын алып, юлдан йөҙ-йөҙ илле аҙымдағы ҡарағай йәйегенә менеп боҫто.

Бына эңер етте. Көҙгө һыуыҡ електәргә үтә. Әммә Фәйрүзә һаман көтә, күңеленә тегеләр барыбер килер һымаҡ. Ысынлап та, темеҫкенеп бүре өйөрө кисәге табышлы ергә бөгөн дә һуғылмай үтә алманы. Ит киҫәген күреп ҡалған инә бүре көсөктәрен эргәһенә саҡырҙы. Улары шунда уҡ емтекте өҙгөсләргә тотондо. Фәйрүзә мылтығын балалары һоғаланып ашағанды кинәнеп күҙәткән инә бүрегә тоҫҡаны. Һауаны шартлау тауышы ярҙы. Ҡатын мылтығын ҡора һалып йәнә тәтегә баҫты. Был юлы ла атыу ҡоро булманы. Йәҙрә ҡасып барған көсөктө ҡыуып етте лә инәһенән саҡ ҡына ары тәгәрәтте. Ҡалғандары алдын-артын ҡарамай урманға һыпырҙы.

Өйгә ҡайтҡас, сая килен ике атҡанда ике бүре алыуын һөйләгәйне, ҡайныһы менән ҡәйнәһе ышанырға уйлап та ҡараманы.

— Кит, башты ҡатырма, һаташып бараһыңмы әллә? — тине ҡайныһы. — Әҙәм ышанмаҫты ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр. Туҙға яҙмағанды ни, бисәләрҙең бүре атып алғанын ҡасан, кем күргән? — тип килене әйткәндәргә ыжламаны ла.


بس استغفار بودر
بسع واختتام قراءت اولنه فضيلتى غايت چوقدر غفلت اولنديكه
بسم الله الرحمن الرحيم
بسم الله استودع الله اعيذه بالواحد من كل حاسد وقائم
عن السبيل حائد على الفساد جاهد وكل خلق فاسد نافث
عاقد وكل جن مارد يأخذ بالمراصد في طريق الموارد لا يضرونه
لا يطرقونه في يقظة ولا منام ولا ظعن ولا مقام يد الله فوق ايديهم
وحجاب الله دون عاديهم
نويت ان اقرأ القرآن واتشرف بقراءة الفرقان لرضاء
الرحمن وطرد الشيطان اللهم يسره لي وتقبله مني

Игтигфар догаһы

Күрше-тирәһенә әйтеп, иртәнсәк бүреләрҙең тиреһен һыҙырып алып ҡайтҡас ҡына, ҡайныһы өнһөҙ ҡалып, бот сапты.

— Ай-һай, килен, йөрәклеһең! — тине һоҡланып, шул уҡ ваҡытта ҡото осоп яу ҡорҙо. — Йә инде, шундай хәтәр ергә яңғыҙ сығалар тиме ни? Уйыңда булғас, исмаһам, үҙемә әйтер инең, икенсе аслан улай итмә, килен, — тине шелтәләп, хатта асыуланып.

Ҡәйнәһе лә иламһырап:

— Һибәтемде кәләшһеҙ ҡалдырып, мәхрүм итә яҙҙың даһа, килен. Ейәнемде уйлаһаңсы, исмаһам. Икенселәй артыңдан ҡалмай, күҙ яҙлыҡтырмай йөрөмәһәмме? — тип әрләне, үҙе килененең арҡаһынан тапап һөйҙө:

— Бәпәйгенәмде, хас үҙемдең йәш сағым. Хәҙрәт: «Килен ҡәйнә буҫағаһынан», — тип хаҡ әйткән икән теге саҡта.

Фәйрүзә өйҙәгеләрҙе йыуатырға ашыҡты.

— Хәҙрәт миңә утты-һыуҙы бәлә-ҡазаһыҙ үтә торған бетеү бирҙе. Шуға мин хәҙер ҡуйыйөрәк, ҡәйнәм, — тип Фәйрүзә лә бирешмәне.

Бүре атыу тураһындағы хәбәр ауылға йәшен тиҙлеге менән таралды. Төшкө сәйгә ултырырға торғанда уларға борсолған хәҙрәт килеп инде.

— Һүҙ юҡ, ир йөрәклеһең, балам, ажарһың, — тине ул килендең саялығына, мәргәнлегенә хайран ҡалып.

— Миңә бүреләр өйөрө немец фашистары булып күренде. Шуға ла нәфрәтемдең иге-сиге булманы.

— Боронғолар көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ, тигән. Балам, мин биргән бетеү һине һаҡлауын һаҡлар. Тик үҙең дә һаҡлыҡты онотма. Бүре хаслыҡлы, үсле йыртҡыс. Ишеттегеҙме, төнө буйы ата бүре һыҡтап, олоп сыҡты? Ишен юғалтыуға ҡайғырҙы. Беҙгә ата бүрене тиҙерәк юҡ итергә кәрәк. Хәҙер ул үтә ҡурҡыныс, малдарҙы ҡураға инеп ҡырыр, кешеләргә ташланыр.

Ҡалған бүреләрҙең ауылға зыян килтереү ихтималын башына ла килтермәгән Фәйрүзәнең сәстәре үрә торҙо. «Эҙенән килеп, улына тейеп ҡуймаһын ул дәжжәл!..» Йөрәге ярыла яҙған килен хәҙрәткә төбәлде:

— Олатай, беҙгә тиҙерәк өйрәтегеҙ. Ни эшләйек?

– Иң башта ауыл менән сығып Олоһаҙҙан ҡыуып ҡарайыҡ. Унан, барып сыҡмаһа, күҙ күрер.

Ошо уҡ көндө, төш ауғас, көрәк-һәнәк, суҡмар менән ҡоралланған манһырҙар Олоһаҙға йүнәлде. Мылтыҡлы Фәйрүзә ҡайныһы менән йәнәшә атланы.

Инәһеҙ ҡалған бүре ояһын борҡолдатыу әллә ни ауыр булмай икән. Кисәге шаңҡыуҙан һиҙгерлегән юйған бүреләр өңөндә ине. Көтмәгән ерҙән кешеләрҙе күреп ҡалған ата бүре, көсөктәрен яҡларға кәрәклекте лә онотоп, оянан ҡасырға ырғылды. Сабып барған бүрегә Фәйрүзә мылтығын тоҫҡаны һәм уңайлы мәлде тап итеп, тәтегә баҫты. Атыу тауышы оло һаҙлыҡты яңғыратты. Йыртҡыс тырпырап ҡаулан үләнгә ауҙы.

– Ә-ә-ә, дөмөктөңмө, фашист, хәҙер минең улыма тейә алмаҫһың, – тине Фәйрүзә тамам үсе ҡанып, һәм күңеле булып, еңел һуланы. Үҙе хәлһеҙләнеп ергә сүгәләне. Һибәтенә ябырылған йыртҡыстар төркөмөн әлән-борхан килтергәндәй һиҙҙе ул үҙен.

Өс бүре атып алған киленгә колхоз бер бот он, бер һарыҡ бирҙе. Тапҡыр телле Манһыр кешеләре уны «Бүре алған Фәйрүзә» тип тә йөрөтә башланы.

* * *

Иренән хат килмәүгә ныҡ ҡайғырған килен түҙмәйенсә бер көндө хәҙрәткә кәңәшкә килде.

– Һуғышҡа ебәреүҙәрен һорап ҡарайыммы әллә, хәҙрәт олатай? Һибәтемә ҡанатябып булһа ла йөрөр инем, – тине.

– Ҡуй, улай итмә, киленкәй, сабыр ит. Һуғыш һеҙҙең зат эше түгел. Ҡатын-ҡыҙ донъяға әсә булыр, бала тыуҙырыр өсөн ярала. Һибәтеңдең төҫө – улың ҙурайып килә. Уны үкһеҙ етем итмә, – тине.

Фәйрүзә уның тел төбөнән үҙе өсөн ҡот осҡос хәҡиҡәтте аңланы. Ире, тимәк, яҡты донъяла түгел. Хәҙрәт ныҡыш дауам итте, ҡабатлап әйтте:

– Һин, ҡыҙым, бында кәрәкһең. Улыңды йәтимһерәтмә, ишет шуны.

Һибәтен юғалтыуҙы төшөнгән ҡатын, хушлашып, тышҡа сыҡты.

...Тимәк, Һибәтен, йән киҫәген, ысынлап та, фашист-бүреләр харап иткән. Ул өйҙәренә тура ҡайта алмай, һуңғы тапҡыр бергә булған Урғаҙа буйына төшөп китте. Шул саҡта ғына ул күҙ йәштәренә ирек бирҙе.

Бөтә нәмәнең дә аҙағы булған кеүек, ниһайәт, ҡанлы һуғыш та тамамланды. Миллион-миллион ҡорбан биреп, илдә Еңеү таңы атты. Һибәттән бер хәбәр ҙә юҡ. Фәйрүзә йәнә хәҙрәткә килде.

– Әйт, олатай, дөрөҫөн әйт, Һибәтем тереме?

Хәҙрәт һүҙҙе уратып башланы.

– Яҙмыш һине, ыуыҙ ғына көйө, эй, һынаны балаҡайым, – тине. – Бирешмәнең, сая, үткер булыуың арҡаһында, ауырлыҡтарҙы еңә килдең. Дөрөҫөн әйтмәй булмай. Тормошоң ал да гөл булмаҫ. Һынауҙар күп булыр.

– Ниндәй һынау, хәҙрәт олатай, әйтегеҙ?

– Тәүге һынау шул. Һибәтеңдән күптән ҡара ҡағыҙ килгән. Сельсовет һеҙҙе йәлләп, ҡапылда әйтергә баҙап тора.

Иренең ысын хәлен асыҡлап ишеткәс, һаман да берәй мөғжизәгә өмөт итеп уны көткән Фәйрүзә таш һынға әүерелде лә ҡуйҙы. Исмаһам, күҙенән бер бөрсөк йәше сыҡманы. Күҙ алдына Лапаҡҡайын тамаҡлаған бүреләр өйөрө килеп баҫты. Ана, улар һыйырҙы түгел, Һибәтен талайҙар. Иң ҙуры боғаҙына йәбешкән. Фәйрүзә ни эшләп ҡатып ҡалған? Ниңә, ирен яҡлап бүре өйөрөнә ташланмай? Ҡурҡаҡ бисәме ни ул?

– А-о-а-а! Йыртҡыстар! Һибәтем! Китегеҙ бынан, хәҙер үҙем һеҙҙең менән көрәшәм. Хәҙер мин һеҙҙе ҡырып һалам...

Күҙҙәре аҡайып, ни ҡыланғанын белмәй сәбәләнгән киленкәйҙең хәлен хәҙрәт шунда уҡ аңлап алды. Ир бирмәк – йән бирмәк. Меҫкен киленкәй, ҡара ҡайғыны күтәрә алмай, ахырыһы, алмашына башланы.

Хәҙрәт барлыҡ көҙрәтен ҡулланып, Фәйрүзәне урындыҡҡа алып килеп ултыртты ла, күҙ ҡарашы менән арбап, тынысландырҙы. Уның ҡайғыһын ҡыуырҙай доғалар уҡып, оҙаҡ итеп өшкөрҙө. Йәненән, тәненән ҡара ҡайғыны һыпырып алып ырғытты. Йәш ҡатындың киләсәге алда әле. Яңынан

тормошҡа сығып, балалар үҫтерер, ин шәәъ Аллаһ, уларҙың сая килене. Әлеге хәле башҡаса һис ҡасан да ҡабатланмаҫ. Зирәк аҡылы, үткер зиһене ҡартайғанса юлдаш булыр. Мөжәүир хәҙрәт үҙе шулай әмәл ҡылды.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, Фәйрүзә күҙҙәрен асты. Бөтәһе лә хәтерендә, әммә йөрәген һары һағыш таламай ине. Нимә булған уға? Ҡаршыһында серле йылмайып ултырған хәҙрәтте күргәс, ул барыһын да аңланы.

— Рәхмәт, хәҙрәт олатай, йәнемде афәттән ҡурсалап алып ҡалдығыҙ, — тине.

— Ҡыҙым, Һибәтем юҡ, тип, ҡайны-ҡәйнәңде ташлап ҡайтып китмәй тор, — тип өйрәтте Мөжәүир хәҙрәт уға. Кесе улдары армиянан ҡайтҡанды көт. Яу ҡырында ятып ҡалған Һибәтеңдең хаҡын уйла. Үлгән иреңдең изгелеге һиңә ғүмер буйы тейер. Артабан, яугир ғаиләһе һаналып, хөкүмәттән ярҙам күреп йәшәрһең, ин шәәъ Аллаһ.

Хәҙрәт әйткәнде тыңлап, Фәйрүзә һаулығы ныҡ ҡаҡшаған ҡайны-ҡәйнәһен кесе улдары һалдаттан ҡайтҡанса ҡәҙерләп көттө, төпсөктәре ҡайтыуға сикһеҙ ҡыуанған әбей менән бабай:

— Еңгәңә өйлән. Киленде әсәһенә кире ҡайтарғыбыҙ килмәй. Ул беҙгә ғәзиз балабыҙҙай, — тип тырышып ҡараһалар ҙа, Фәйрүзә башҡаса Манһырҙа тороп ҡала алманы. Асыҡ белә, ҡәйнешенең яратҡан ҡыҙы бар. Әйҙә, исмаһам, улар бәхетле булһын.

— Тағы бер һынауҙы үттең, — тине хәҙрәт киленгә. — Кеше бәхетенә ымһынмай дөрөҫ эшләнең. Өлөшөңә төшкән көмөшөң осрар, сабыр ит.

Хәҙрәт Фәйрүзәне оҙатҡанда үҙе килде.

— Хоҙай Тәғәлә һиңә балалар бәхете бирер. Ҡартайған көнөңдә ҡәҙерле булырһың, — тине. Артынан доғаларын уҡып, Хоҙайҙан йәш киленгә изге иман, бәхет, тәүфиҡ һораны.

Йылдар үтте. Ҡасандыр саялығы менән дан алған Фәйрүзәнең дә ҡулдарының ҡәре, күҙҙәренең нуры ҡайтты. Ебәктәй оҙон толомдары үрмескә ҡалды, ыңйы тештәре һарғайҙы. Әммә йылдар уны тағы аҡыллыраҡ итте. Балалар әсәһе, ҡәйнә, ҡоҙағый, күптәрҙең яратҡан инәһе ул. Ауыр эшкә

барымы бөткәс, бәйләм бәйләп өй алдындағы эскәмйәлә ултыра. Ҡайғылының ҡайғыһын уртаҡлаша, ярҙам кәрәктәргә ярҙам итә.

— Һә-ә-ә-әй, үәй-үәй-үә-ә-әй, — тип көйләп һуҙып ебәрә лә, күпте күргән, күпте кисергән ил инәһе йәштәргә белгәнен өйрәтә.

— Яҡшылыҡтан — яҡшылыҡ, аҡылдан — аҡыл ярала, — ти ул. — Боронғоларҙың аҡылына етеү ҡайҙа! Һай, Мөжәүир хәҙрәттең алтын аҡылдары! Әүлиә ине. Әҙәм ыңғайлы, ябай булды. Берәүҙе хәленән килгән ярҙамынан мәхрүм итмәне.

Фәйрүзә әбейҙең хәтер һандығының хазиналары быныҡ менән генә бөтөрлөк түгел. Ул шулай бәйнә-бәйнә, шәлкем-шәлкем итеп һөйләй. Унан Һөйәрбикә күршеһе генә түгел, бик күптәр аҡыл эҫтәй.

Фәйрүзә инәйҙе мин дә ныҡ ихтирам итәм. Хәҙрәттең холоҡ-фиғелен, икһеҙ-сикһеҙ аҡыл-ғилемен йәш быуынға еткереүселәрҙең береһе тип иҫәпләйем үҙен.

## Йәйғорҙан туҡылған тәхет

Унынсы тиҫтәгә аяҡ баҫҡан Мөжәүир хәҙрәт ныҡ ҡартайыуҙан миктәне, быуындарының кәре ҡайтып, хәлһеҙләнде. Тик зиһене элеккесә үткер, йәшел ут сәскән күҙҙәре осҡор булып ҡалды һәм күңел һиҙгерлеген юғалтманы. Үҙ хәлен асыҡ белгән әүлиә яҡындарын алдан борсомаҫ өсөндөр, түшәк тартып бик ятмаҫҡа тырышты. Таяғына таяна-таяна, әкрен генә атлап, Иманай итәгенән йыуа йыйып алып ҡайта, балтырғанынан аш бешертә. Бер көндө ап-аҡ муйыл сәскәһенә күмелгән Шүрәле йылғаһын урап әйләнде. Иртәгеһенә Урғаҙа буйына сығып баланлыҡтарын гиҙеп ҡайтты. Сәскәгә тумалған ҡыуаҡтарҙы күргәс, быйыл уға баҙрап ултырған баландарҙы тиреп ашау насип булмаҫын аңлап, күңелен һағыш биләп алды. Емеш-еләктән айырыуса баланды ярата торғайны. Көҙ байында йыйып, бер нисә көбөгә һалып туңдырыр ҙа, ҡыш буйы быҡтырып ашап сығыр ине.



Урғаҙа буйы. Мөжәүир хәҙрәттең йорто ошо ерҙән алыҫ түгел

Ҡайһы бер көн хәҙрәт Урғаҙа буйындағы үҙе яратҡан тирәк төбөнә сығып ултыра. Тиҫбеһен тарта-тарта, ҡоштар һайрауын тыңлап кинәнә. Барса тере йән эйәһенең телен белгән әүлиә ялҡмай-йыбанмай шулай сәғәттәр буйы ултырғылай. Яҙ – йыл миҙгеленең йәшлек осоро. Тәбиғәттәге барлыҡ тереклек йәшәү дәрте менән яна, ҡояшҡа, яҡтылыҡҡа ынтыла. Һәр береһе үҙенә иш таба, ҡушағы менән оя ҡора, нәҫел ҡалдырырға ашыға. Әйтерһең, ерҙәге тормоштоң мәңгелек икәнен раҫлай.

Июнь урталары ла етте. Ерҙә бирелгән көндәренең иҫәпле ҡалыуын, ҡасан китерен асыҡ белгән әүлиә эргәһенә үҙенең иң яратҡан улын – Мөхәммәтте саҡырып алды.

– Янымда бул, улым, – тине Йософ пәйғәмбәрҙәй матур күрмәлекле улының арҡаһынан һөйөп. – Гел белем эстәп ситтә йөрөнөң, исмаһам, күргәндәй булайымсы.

Хәҙрәт яңылышманы. Үҙенең йәш сағына ике тамсы һыу кеүек оҡшаған Мөхәммәт уғата иплe, уғата мәрхәмәтле. Ул

атаһының һәр уй-теләген күҙ ҡарашынан һиҙеп, хәл-әхүәлен тын алышынан тойҙо. Ҡайтҡас та, борон атаһы үҙенә килгән ауырыуҙарҙы гел аҡтан кейенеп ҡаршылауын иҫләп, әсәһенә аҡ күлдәк, аҡ ыштан хәстәрләргә ҡушты. Еңгәһенә әйтеп, мунса яҡтырҙы. Атаһын балалай тәрбиәләргә тотонған Мөхәммәт, башта Иманай ҡылғанындай салланып һирәгәйгән сәстәрен рәтләне, унан шырт баҫҡан һаҡал-мыйығын тәртипкә килтерҙе. Ипле генә тотоноп ҡыу ағастай булып ҡалған аяҡ-ҡулының тырнаҡтарын киҫте.

Мунсаға индергәс, Мөжәүир улынан:

– Ҡайын миндеге менән танһыҡтарымды ҡандырғансы сабындыр әле, – тип үтенде. Мәтрүшкә ҡушып бәйләнгән ҡайын миндегенең хуш еҫе менән тулышҡан тәмле һауа мунса яратҡан оло кешегә килеште: тын юлдарын иркенәйтте, һулыш алыуы еңеләйҙе. Йәне-тәне рәхәтлектә иҙрәне.

– Рәхмәт, улым, тәнемде пакландырҙың, – тине хәҙрәт мунсанан сыҡҡас йыуыныуҙан ҡәнәғәт ҡалып. Тымбаҙап ятҡан еренән иҙрәп күҙҙәрен йомдо.

Атаһы гел генә:

– Һәр мөъмин-мосолман ысын донъяға күсер алдынан таҙарыныу фарыз, – ти торғайны. Бына үҙенең дә киң яурынлы мыҡты кәүҙәһе баланыҡы кеүек ҡуранысланды. Ите төшөп, тире менән ҡаҡ һөйәккә ҡалды. Тотһа тимер бөгөрҙәй ҡулдарҙың да кәре ҡайтты, тубыҡ быуындары мөсһөҙләнде. Беләк-ҡулының ҡан тамырҙары, ана, йолҡолған ағас тамырындай күгәрешеп тарбаҡланған. Элек күптәрҙе хайран иткән музыканттыҡы кеүек нәҙек оҙон бармаҡтар ҙа ҡыу ботаҡҡа оҡшап ҡалған. Миндаль сәтләүегә емешенә тартым оҙонсаланып түңәрәкләнгән тырнаҡтар ҙа кителеп кимтелгән, төҫһөҙләнгән. Тик ни ғилләә менәндер һис үҙгәрергә теләмәгән күҙҙәр генә тәрән йыйырсыҡ менән һырланған йөҙҙә элеккесә йәшкелт нур сәсеп донъяға үтә ҡарай. Зирәк зиһене, камил аҡылы әүәлгесә, үҙгәрешһеҙ. Әҙерәк серем итеп, күҙҙәрен асҡан хәҙрәт, эргәһендә Мөхәммәтте күреп, күңеле нескәрҙе.

– Фатихамды бирәм, балам, ризамын, – тине, алҡышланып доға уҡыны. Үҙе туймаҫтай булып улының ҡот уйнап торған нурлы йөҙөнә һөйөп ҡараны.

— Замана зәхмәттәренә, шайтан-иблис ҡорған хәйлә-мәкерҙәргә ҡаршы тора алһаң, ил ағаһы булырһың, ин шәәъ Аллаһ, — тине хәҙрәт, улын ҡурсалағыһы килеп. — Кафыр көстәр минән ала алмаған үсен һинән алырға тырышыр. Уларҙы, ныҡ булһаң, дөрөҫ йәшәһәң, еңерһең. Хоҙайға һыйын, Аллаһтың барлығына, берлегенә ышан. Бирешмәҫһең.

Әүлиә, күп һөйләүҙән талсығып, күҙҙәрен йомдо. Атайым тынсып ял итһен тип уйланы Мөхәммәт. Тороп китергә генә иткәйне, хәҙрәт йәнә күҙҙәрен асты, телгә килде.

— Ултыр әле, улым. Минең илгә әшкәртер оло аманатым бар. Шуны һиңә әйтеп ҡалдырайым, тим. Ҡөрьән китабының ситтәренә лә яҙғанмын да ул. Минең яҙыуҙы таныған кеше уҡып белә алыр.

Хәҙрәт үтә мөһим хәбәр әйтергә теләгәнлектән, тороп уҡ ултырҙы, ҡарашын тәҙрәнән алыҫҡа төбәне.

— Манһыр менән Кәрешкә араһында ятҡан күк һыртлы Ҡыңғырташ тауын беләһеңме?

— Эйе.

— Унын йәшел зөбәржәт ташына ҡыҙығыусылар бихисап ине.

— Шулай тиҙәр.

— Киләсәктә лә күп булыр. Таш, йымылдап кешеләрҙе әүрәтер, арбап, үҙен ҡулға алдыртырға итер. Аслан ҡыҙыҡмаһындар, аслан ул тауға теймәһендәр. Ул зәхмәтле тау. Ҡуйынында әҙәми затҡа зарарлы көс-нур һаҡлана. Үҙем иҫән саҡта унда берәүҙе лә яҡын ебәрмәгәйнем. Инде Хоҙай саҡырған теге донъяға китергә күп ҡалманы, шул Ҡыңғырташты һаҡлауҙы, улым, инде һиңә ҡалдырам.

Мөхәммәт хикмәтле тау серен асығыраҡ белгеһе килде, ахырыһы, төпсөндө.

— Тейһәң, нимә була? — тип һораны.

— Афәт була. Тауҙан илгә ҡаты ауырыу таралыр. Кеше ҡырылыр. Үлемдең ниҙән икәнен белеүсе булмаҫ, дауаһын тапмаҫтар.

Хәҙрәт, үҙенә генә ишетелгән серле тауыштарҙы-ауаздарҙы тыңлағандай, күҙҙәрен йомоп, иғтибарын тупланы. Бер аҙҙан әйтте:

– Ергә бер саҡ яңы әүлиә килер. Ауырыуҙан ҡотолоу серен ул өйрәтер. Тик был хәл тиҙ арала булмаҫ.

– Ҙур эш йөкмәттең дәһә, атай! Мине тыңларҙармы?

– Тыңларҙар. Мөжәүир әүлиә әйтте тиһәң, тыңларҙар.

Ике ҙур серен әйткәс, хәҙрәткә еңел булып ҡалды. Әҙерәк тынысланғандай итте. Йәнә бер аманаты ҡалды. Шуны ла әйтһә, ерҙәге бурысын үтәр, ин шәәъ Аллаһ. Юғарынан үҙенә тапшырылған эштәрҙе атҡарып бөтөр. Әҙәм балаһы фани донъяла ҡунаҡ ҡына. Ғүмер араһы күҙ асып йомғансы. Әруахҡа әүерелеп, баҡыйлыҡҡа күскән йәндәр генә мәңгелек. Ана, үҙенә лә кисә Аллаһы Тәғәлә әшкәртте, Әхирәттә урыны әҙер, көтәләр, ти. Бына-бына Ғазраил, ғәләйһис-сәләм, фәрештә осоп килер ҙә, уның йәнен ысын донъяға алып та китер. Мөҙҙәте етте.

Хәҙрәт тағы телгә килде.

– Күҙ ҡараһындай һаҡлар ер ҡото бер күл бар. Күлтабан эргәһендәге Яугүл күле... Һуғыштан алда, әйткәнде тыңламайынса, эргәһендә сусҡа үрсеткәйнеләр. Күл ҡороно. Район хужаларына аңлатып әйткәндән һуң, сусҡаларҙы унан алдылар. Бер йыл тигәндә Яугүл йәнә һыу менән тулды. Тирә-йүненә ҡото ҡайтты.

Хәҙрәт хозур Яугүл тирәһен күҙ алдынан үткәреп бер талай өнһөҙ ятты.

Тымыҡ саҡтарында ҡаршылағы Сағылтауҙың күләгәһе күлгә төшөр ҙә хәс тә көҙгөләге кеүек сағылыр ине. Яры тулы төрлө-төрлө өйрәктәр, ҡаҙҙар булыр, сыр-сыулап аҡсарлаҡтары осор, яр буйлап утыҙ ике ҡаҙаҡлыҡ туғаҙаҡ елдереп үтер, батҡаҡлы, һаҙлыҡлы күл ситтәрендә торналар бәпкә сығарыр ине. Таллыҡта «әүирләү-әүирләү» тип әүирләү ҡошо саҡыра. Ожмах ҡоштары тоҡомонан булған, инде бөтөр сиккә еткән әүирләүҙе ныҡ һаҡларға ине. Бөгөнгө көн менән йәшәүсе әҙәмдәр уны уйлаймы? Тәмле ашап, үҙе рәхәт йәшәһә булды. Киләсәк быуынды ҡайғыртамы ни ундай бәндә?

– Ахырызаманды еткермәү кешенең үҙенән тора, – тине хәҙрәт, байтаҡ уйланып ятҡас. Ете ҡат ерҙе, ете ҡат күкте, тау-урмандарҙы, йылға-күлдәрҙе бөтә ғәм халҡы бергәләп

һаҡларға тейеш. Яуғыл кеүек ҡотло урындарға айырыуса иғтибар кәрәк. Был эште ил башлыҡтарына атҡарыу фарыз.

Хәҙрәт олатай йәнә талсыҡҡан күҙҙәрен йомдо. Әммә йоҡламай ине. Әле генә әүлиәлек кирамәте әшкәрткән хәлдәр менән хәбәрҙар аңы уны тиҙҙән буласаҡ ваҡиғалар менән таныштырҙы.

Әлбиттә, зирәк аҡыл эйәһе бөтәһен дә белеп-һиҙеп йөрөнө йөрөүгә. Үҙе бала саҡта мал көткән Иманай тауының нилектән быйыл шау сәскәнән кейенеүен дә белде. Йөрөгән юлдарына йомшаҡ йәшел хәтфә келәм түшәлеү сәбәбен дә аңланы. Кистәрен мең төрлө туғай сәскәләренең хуш еҫе хушбыйҙай татлы еҫ аңҡытып, ауыл өҫтөнә тарала. Хәҙрәт ятҡан өй эсе һулап туйғыһыҙ хуш еҫкә тулыша. Ана, бөтә ауылдаштарын хайран итеп, Урғаҙа буйындағы ҡыуаҡлыҡтарға күрелмәгән аҫыл ҡоштар килеп ҡунған. Ағаслыҡтан көнө-төнө һандуғас моңо ағыла. Йөҙйәшәр тирәктә кәкүк саҡыра, ҡайҙандыр әүирләү ҡошоноң һағышлы тауышы ҡолаҡҡа салынып ҡала. Ҡоштар бөтәһе лә алҡышланып хәҙрәткә маҡтау яуҙыра. Был күренештәрҙең барыһының да тиккә түгеллеген асыҡ аңлай олуғ аҡыл эйәһе. Эйе, күренеп тора: Манһыр тәбиғәте тантанаға әҙерләнә. Хушлашыу йәки хәҙрәттең изге йәне ысын донъяға күсеү тантанаһына.

Бына йәй миҙгеленең иң гүзәл мәле етте. Бөгөн дә, ғәҙәтенсә, Мөжәүир хәҙрәт таң һарыһынан уянды. Тороп тәһәрәтләнде, иртәнге намаҙын уҡыны, шунан йылдар үтеү менән йыйырылып шымарған хөрмә төштәренән теҙелгән тиҫбеһен ҡулына алды. Шул саҡ ул ниндәйҙер серле көс ишаралауға буйһоноп Иманай яғына боролоп ҡараны һәм ғәжәйеп мөғжизәгә тап булды. Күк ҡабағын ҡап уртаға ярып, ҡибла яғынан йәйғор ҡалҡҡан. Нәҡ хәҙрәт ҡараған мәлдә генә һауала йәйғор түҫөндә аллы-гөллө тәхет пәйҙә булды. Бына Хоҙайҙың хикмәте! Малай сағында көтөү көткән урыны лаһа был. Кисәгеләй хәтерендә, шул йәйғор нуры аша үҙенә әүлиәлек ҡөҙрәте бирелгәйне бит. Йәйғор урта төш еренән семәрләп бөгөлгән дә ике яҡлап тәхеткә килеп тоташҡан. Талғын иҫкән таң еле, ни ғилләлә менәндер һауала эленеп торған баяғы аллы-гөллө ғәжәйеп тәхетте әкрен генә тирбәлтә,

әйтерһең сәңгелдәктә бәүетә. Тәхеттән тирә-йүнгә аҫыл нур сәселә. Бына мөғжизә, бына ғәләмәт донъя, ә!? Күпте күргән, күпте белгән олуғ аҡыл, олуғ тылсым эйәһе хәҙрәтте лә хикмәт хайран итте. Серле тәхеттән күҙҙәрен айыра алмай торғанда, хәҙрәттең сос ҡолағына ғәжәп бер серле тауыш килеп ҡаҡлыҡты:

– Әүлиә ғали йәнәп, киттек, – тине.

Тауыш эйәһе, күҙгә күренмәгән зат, уны етәкләп алды ла әлеге нурҙан ҡойолған тәхеткә табан әйҙәне.

– Ерҙә ҡылған бөтә изге эштәрең хаҡына һин бөгөндән йәйғор тәхет эйәһе булаһың, – тине лә күренмәгән зат күҙ асып йомған арала уны осортоп тәхеткә алып барып та ултыртты. Сикһеҙ рәхәт булып китте. Хәҙрәт йәтешләнеп ултырыуға баяғы тантаналы тауыш уға тәүге һорауҙы бирә лә һалды.

– Әүлиә ғали йәнәп, ҡөҙрәтеңде кемгә ҡалдыраһың?

Мөжәүир уйға ҡалды. Балалары, ейәндәре, бүләләре, туған-тыумасаһы бихисап. Береһенә ҡалдырһа, икенсеһе үпкәләр. Ни эшләргә?

Тауыш эйәһе уны ашыҡтырмай, ныҡлап уйларға форсат биреүелер. Бер аҙҙан әүлиә хәҙрәт тамаҡ ҡырҙы, үҙенең яуап бирергә әҙер икәнлеген аңғартты.

– Тартынма, ғали йәнәп, – тине тауыш. – Әйт.

– Мин үҙемдең ҡөҙрәтемде ғәзиз халҡыма, тыуып үҫкән еремә һебә ҡылам, – тине хәҙрәт. – Ерем-һыуым мәңгелек булһын. Мәңге ахырызаман ғәрәсәтен күрмәһен. Халҡым көсәйһен. Башҡорттар араһынан донъяла эҙ ҡалдырыр данлы заттар, әүлиәләр, ғилем, аҡыл эйәләре үҫеп сыҡһын. Сәнғәте, йыры, бейеүе, әҙәбиәте менән дә донъяны хайран ҡылһын. Ер-һыуҙы һаҡларҙай иманлы быуын алышынып торһон. Ерәсәбеҙҙе барлыҡ афәт-ҡыйралыштарҙан әрсәләр батыр ирҙәр тыуһын.

Хәҙрәт ошоларҙы әйтте лә тәхет бейеклегенән тыуған-үҫкән еренә күҙ һалды. Уны ерpermissionең киләсәге өсөн хәүефләнеү тойғоһо солғап алды. Ҡыңғырташҡа ғына тейә күрмәһендәр! Йәнә лә ер ҡото Яугүлде ныҡ һаҡлаһындар. Ерҙең юрғанын тишкеләргә ярамағанды хәҙер ғалимдар үҙҙәре лә аңланы. Һыуҙы ла

һаҡларға тырышалар. Ин шәәъ Аллаһ, еребеҙ йәшәр! Аманатым үтәлер.

Ул арала баяғы тауыш йәнә ишетелде.

– Хуплайым яуабыңды. Теләгең изге, ғали йәнәп. Ул тиклем үтенгәс, теләгең ҡабул булыр. Халҡың ерҙең кендегендә мәңге йәшәр.

Күңеле күтәрелеп киткән хәҙрәт йәнә телгә килде.

– Мин һорау бирә аламмы?

– Йә, һора!

– Ергә ҡасан яңы әүлиә тыуыр?

– Һинең донъяға тыуыуыңа 131 йыл тигәндә, күктә йәйғор ҡалҡыр. Бер аҙҙан күк ҡабағы асылыр. Бөтә ғаләм нурға сумыр. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ гәм халҡы араһынан шуны тик берәү күрер. Ана шул аҫыл зат һинең ҡөҙрәткә эйә булыр, һинең мәсет таяғыңды уға тапшырырҙар.

Тәүге һорау-яуап шуның менән тамамланды. Донъя һиллеккә сумды. Тәхет, сабый ятҡан сәңгелдәк кеүек талғын тирбәлә, ете төҫтәге буй-буй аҫыл һыҙатлы йәйғор нурҙары йым-йым йымылдаша, күҙҙе һәм йәнде иркәләй.

Бер аҙҙан хәҙрәт Иманай итәгенә ағылған халыҡ төркөмөн күрҙе. Һәммәһе лә матур кейенгән. Йөҙҙәре иманлы, илһамлы. Бары күҙҙәрендә генә йөрәк түренән сыҡҡан юғалтыу һағышы сағыла.

– Бәхил бул, хәҙрәт, – ти килеүселәр, әүлиә алдында баштарын эйеп.

– Улымды үлемдән ҡотҡарҙың!

– Һауыҡтырҙың, табип!

– Яҙып биргән бетеүеңде күҙ ҡараһылай һаҡлармын!

– Бәлә-ҡазаларҙан әрсәләнең, изге йән!

– Сихырҙы ҡайтарҙың, бағымсы!

– Оло дин әһеле!

– Күрәҙәсе!

– Арҙаҡлы шәхес!

– Әүлиә!

Мөжәүирҙе ер кешеләре гәрешкә күтәреп маҡтаны ла маҡтаны. Бөтмәҫ рәхмәт яуҙы ла яуҙы. Фәрештәләр изге йәндең барлыҡ изге эштәрен яҙып алды.




Мөжәүир хәҙрәт ҡәбере

Бер аҙҙан барлыҡ тереклек, бөтә тәбиғәт йыназа уҡырға тотондо. Уларҙың күптән-күп, суҡтан-суҡ рәхмәт ауаздарын ишетеп хәҙрәттең йәне йәнә кинәнде. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, үләндәр, сәскәләр, Урғаҙаһы, иркә ҡолонсаҡ Шүрәлеһе, муйыллы, баланлы ҡыуаҡтар, аҡ ҡайындар хәҙрәткә баш эйеп бәхилләште.

— Йәнең йәннәттә булһын, ерҙең олуғ әүлиәһе!

Кешеләрҙең иблискә эйәргәндәре генә бөгөн бында килмәй ҡалды. Сөнки шайтан ҡолона әүерелеп, ниндәй изге йән вафат булыуын абайламай, аңлай ҙа алмай ҡалды улар.

Йылдар үтер. Бер саҡ уларҙың да хәҡиҡәткә күҙе асылыр. Үкенерҙәр. Тик һуң булыр.

Барыһы менән бәхилләшеп, аманлашып бөткәс, ерҙә ҡалғандарға изге фатихаһын биреп, көҙрәтен ҡалдырып, Хоҙай Тәғәләнең ҡашҡаһы Мөжәүир Уйылдан улы, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа юлланды. Йәне ниндәйҙер оҙон ҡараңғы торбаларҙан осоп үтеп нурлы донъяға барып сыҡты. Ни күҙе менән

күрһен, ҡараһа ҡаршыһында Иманай тауы. Йәйғорҙан туҡылған тәхет тә һауала эленеп тора. Таныш тауыш Мөжәүир хәҙрәткә өндәште.

– Әүлиә ғали йәнәп, йәйғор тәхетеңә килеп ултыр, изге эштәреңде дауам иттер. Бында ла беҙгә һеҙҙең кеүек изге йәндәр бик кәрәк. Әйҙүк, рәхим ит йәннәткә!

## Йән дауаһы

Оҙаҡ йылдар бергә татыу ғүмер иткән һөйөклө ҡатынын ерләгәс, йөрәк әрнеүҙәренә тәҡәте ҡороған Ғәҙелгәрәй берҙән-бер көндө әүлиәлек даны тирә-яҡҡа таралған, күптән гүр эйәһе Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә килеп теҙләнде.

– Олатай, зинһар, ейәнеңә ярҙам итсе?! Имләсе яралы йәнемде! Мин йәшәүҙән туйҙым. Ни эшләргә?

Ҡарап тороуға тирәктәй буй-һынлы урта йәштәрҙәге ирҙең бите буйлап ике бөрсөк күҙ йәше мәрмәр менән көпләнгән ҡәбер ташына тамды.

– Олатай, йәнем ауырый! Төштәрем бутала! Күҙемде йомһам, һаташам. Ни эшләргә миңә, олатай?

Ғәҙелгәрәй бала сағынан олатаһының табиплыҡ көҙрәте, әүлиә булыуы тураһында ишетеп үҫте. Тере сағында меңәрләгән кешене һауыҡтырып, аяҡҡа баҫтырған, ти. Хәҙер уның ҡәберлеген, ҡәбер убаһындағы тупраҡты ла изге тиҙәр. Килеүселәр услап-услап һалып ала. Әүлиә ҡәберенә килеү, уны иҫкә алыу, ярҙам һорау, айырыуса, Ғәҙелгәрәй һымаҡ, йәшәү мәғәнәһен юғалтыусыларға файҙалы икән. Күңелдәргә өмөт осҡоно һалып, йәшәүгә дәрт уята. Күптәр ҡәбергә йән тыныслығын ҡайтарыу өсөн дә ағыла.

Әле лә ҡатынынан башҡа йәшәүҙән йәм тапмаған Ғәҙелгәрәйҙең, ысынлап та, әжәл тотҡаһына үрелгеһе килде. Ҡәҙерлеһенең гүр эйәһе булыуына йыл үтте. Ә ире уны бер сәғәткә лә иҫенән сығара алмай. Ҡатыны теп-тере һымаҡ күҙ алдында баҫа ла тора. Йәиһә аш-һыу бүлмәһенән йылмайып сыға ла:

– Йәнем, бишбармаҡ әҙер, әйҙә ашарға! – тип ҡулынан һөйрәй, йә ҡосағына һарыла ла шашып үбергә тотона:

– Яратам, Ғәҙелем, үлеп яратам, – ти, ҡосаҡлап эргәһенә ятҡырырға итә. Йә, имеш, түшәктә ята, асырғанып ялбара:

– Ирем, балаларым минһеҙ ни эшләр? Йәллә, Хоҙай! Ғүмеремде алма, Аллам! – ти. Әле лә, ана, былай табан килә ята лаһа. Атламай, йөҙөп килә. Зәңгәр күлдәген кейгән, сәстәрен икенән үреп төшөргән. Аһ, йәнем! Әҫәрләнгән ир тубыҡланған еренән һикереп торҙо ла, ҡатынының ҡаршыһына йүгермәксе булды. Ҡапыл шул саҡта күктә көслө итеп ҡысҡырған ҡош тауышы ишетелде. Ғәҙелгәрәй, әйтерһең, йоҡонан уянды, һиҫкәнеп күккә ҡараны. Төпһөҙ зәңгәрлектә ҡаңғылдап һыңар аҡҡош осоп бара лаһа. Ҡоштоң тауышы үтә лә зарлы, әллә уның да ҡушағын юғалтып, ҡаңғырып йөрөүеме? Аҡҡоштар ишен юғалтһа, мәңгелеккә яңғыҙ ҡала, башҡаны ярата алмай, зарығып үлә, тигәнде ишеткәне бар ине Ғәҙелгәрәйҙең. Яңғыҙ аҡҡош уға бигерәк йәл тойолдо. Үҙе лә һиҙмәҫтән: «Ишеңде тап, аҡҡошҡай!» – тип ҡул болғаны.

Көн кискә һарҡығайны. Тиҙҙән анау түбәләс аръяғындағы юлдан Сибайға автобус уҙасаҡ. Манһырға инеп, туғандарын күреп сығырға тигән ерҙән, ир ҡапыл ҡайтырға булып, автобус туҡталышына ашыҡты. Шәп-шәп атлап, туҡталышҡа табан барған ирҙең артынан әкрен генә йылы ел иҫте, әйтерһең, мулланың өшкөргәндәге тыны. Талғын ел Ғәҙелгәрәйҙең ҡуйы бөҙрә сәстәренән, арҡаһынан һыйпап үтте, ҡуйынына тулды. Танауына дала сәскәләренең иҫерткес хуш еҫе бәрелде. Шул саҡ, нисектер, донъя һил ҡалғандай тойолдо Ғәҙелгәрәйгә. Ул баяғы елдең тағы-тағы иҫеүен теләне. Әммә ел ҡабатланманы. Шулай ҙа юлаусыға сикһеҙ еңел булып ҡалды, күңеле күтәрелде, аҙымдары дәртләнде.

Автобус оҙаҡ көттөрмәне. Салонға ингәс, Ғәҙелгәрәй берәүгә лә күтәрелеп ҡарамаҫтан, бер буш урынға сумды ла, йоҡоһо килгән кешеләй, күҙҙәрен йомдо.

Йәнәш ултырған мөләйем йөҙлө ҡатын, юлдашы өсөн борсолоп, уға һирәк-һаяҡ күҙ һала килде. Сыҙаманы, ҡулына ҡағылды:

– Һеҙгә ҡыйынмы әллә? Әллә ауырыйһығыҙмы? Ниңә өндәшмәйһегеҙ?

Һорауҙарының яуапһыҙ ҡалыуы ҡатынды уғата борсоно.

– Ҡәҙерлем, ошо дарыуҙы ҡабығыҙ әле. Зыян булмаҫ. – Үҙе йәнә һаҡ ҡына ирҙең ҡулдарына ҡағылды. Юлдашынан яуап ала алмағас, ҡатын уның ризалығын көтөп тормаҫҡа булды, үҙе дарыуҙы ауыҙына ҡаптырҙы. Ирендәренә хәстәрлекле иркә бармаҡтары ҡағылып үтте.

– Тел аҫтына һалығыҙ.

– Нимә ул?

– Йән дауаһы.

Ҡатын көтмәгәндә-уйламағанда тап Ғәҙелгәрәй эҙләгән һүҙҙе әйтеп һалды. Ул ҡасандан бирле йән дауаһы эҙләй ҙаһә. Олатаһы ҡәберлегенә нәҡ шуның өсөн килеүе. Күршеһе, һиҙгән кеүек, төпсөнөүен дауам итте.

– Һеҙҙең йәнегеҙ ауырый, эйеме? Хәҙрәттең ҡәберенә барҙығыҙ, йән тыныслығы эҙләйһегеҙ, шулаймы?

Ир йоҡомһорап килгән еренән уянды, ҡыҙыҡһыныуҙан күҙҙәре ҙур асылды.

– Ҡайҙан белдегеҙ?

– Үҙемдең дә шулай булғаны бар.

– Нимә, әллә һеҙ ҙә?..

– Эйе.

– Ә?

– Ыһһһ... Ыһһһы-һы-ы...

Бер-береһен, ғәжәп шикелле, ярты ауыҙҙан аңлаған юлдаштар шымып ҡалды. Эй, Аллаһ, ҡайғылаштар икән дәһә. Бер аҙ барғас ҡатын һорап ҡуйҙы.

– Балаларығыҙ бармы?

– Бар. Уларҙың... үҙ ғаиләләре.

– Минекеләрҙең дә шулай.

Ошонан һуң улар, һәр кеме үҙ уйына сумып, бер-береһенә һүҙ ҡатманы. Бары тик күңелендәге йәлләү хисе наҙға әйләнә барған ҡатын, юлдашына яҡыныраҡ шылып, терәлеп ултырҙы. Әйтерһең, күңелендә уянған туғанлыҡ хисен хәсрәтле ирҙең йәненә күсерергә теләне. Туңғаҙыған йөрәген иреткеһе, күңелен йыуатҡыһы килде.

Шулай инде, был донъяла берәүҙең дә һарайы буш түгел. Ҡайғы ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөй. Йән

һөйгәненде юғалтыу ғазабының ни икәнен үҙе кисергәндәр генә аңлай. Бер-береһенең әллә тән йылыһын, әллә күңел йылыһын тойоп, ойобораҡ барған юлсылар автобус йөрөтөүсенең көр тауышын ишетеп һиҫкәнде.

– Килеп еттек. Сибай.

Ҡайҙалыр ашыҡҡандай, автобустан төшә һалып, шәп-шәп атлап, үҙенән алыҫлаша барған ҡатындың Ғәҙелгәрәй бары миһырбанлы күҙ ҡарашын, һөйкөмлө ап-аҡ түңәрәк йөҙөн, наҙлы иркә бармаҡтарын ғына хәтерләп ҡалды.

Олатаһы Мөжәүир әүлиәгә зыярат ҡылыу, рухы менән осрашыу, ысынлап та, Ғәҙелгәрәй күңеленә еңеллек килтергәндәй булды. Мәрхүмә ҡатыны элекке кеүек, күҙенә күренеп йонсотмай, йоҡоһо тыныс. Кешеләр юҡҡа ғына әүлиә ҡәберенең юлын таҡырлатмайҙыр, хатта тупрағының хәсиәте бар, тиҙәр бит. Былтыр ҡәбер өҫтөндәге ер буйтым кәмегәс, дин әһелдәре менән кәңәшләшеп, өлкән улы Варис тупраҡ өҫтәтте лә өҫтөнә мәрмәрҙән плитә һалдырҙы. Шулай итеп, изге урынды мәңгеләштерҙе. Бөтә халыҡ шатланып:

– Рәхмәт, Ғабделварис уҙаман, былай булғас, балаларыбыҙҙың балалары, быуаттар үтһә лә, килеп, әүлиәгә зыярат ҡылыр, – тинеләр.

Ғәҙелгәрәйҙең әүлиә ҡәберенә килеүенә ун биш көн үтеп тә китте. Ҡатыны күҙенә күренеүҙән туҡтаны, уны юҡһыныу тойғоһо ла әкренләп кәмей барҙы. Тик, ни ғәжәп, ирҙең күңелен ниндәйҙер билдәһеҙ бүтән хис биләне. Быныһы – йәнә ҡәберлеккә барыу теләге ине.

– Барып, олатайыма аят уҡып, хәйер һалып ҡайтайым, – тип уйланы улан һәм бер ялды йәнә Манһыр яғына юлланды.

Автобустан төшөп, йәйәү атлаған арала, ялан сәскәләренән ҙур ғына гөлләмә йыйҙы. Ҡәберлеккә етеп килгәндә Ғәҙелгәрәй унда бер аҡ күлдәкле ҡатынды күреп, туҡтап ҡалды. Артабан барырғамы? Ҡамасау булмаҫмы? Әллә киткәнен көтөп, ошонда йөрөп торорғамы? Әммә ниндәйҙер билдәһеҙ ҡөҙрәт уны алға әйҙәне.

– Һаумыһығыҙ?!

– Иҫәнмеһегеҙ?!

Ғәҙелгәрәй ипләп ҡарағас, зыярат ҡылыусыла теге ваҡыт автобуста осратҡан ҡатынды таныны.

— Бәй, был һеҙме? Нисек... һеҙ бында? — тине ир ҡатындың хәстәрлекле, миһырбанлы күҙ ҡарашы менән осрашып. — Һеҙҙе осратыуға өмөтөмдө өҙгәйнем...

Ул теге ваҡыт автобуста ҡатындың йомро гына кәүҙәһе менән үҙенә һыйынып ҡына ултырыуын һаман хәтерләй. Юлдашының булмышынан бәрелгән наҙ ипкененән уянған яҡынлыҡ тойғоһо күңелендә әле лә йәшәй. Ҡатындың исемен, адресын һорап ҡалмауына, эй, үкенгәйне аҙаҡ. Донъяла мөғжизә юҡ тиң. Бына бит, насип булғас, осраштылар. Икеһе лә, осрашыуҙары өсөн ныҡ шатланғанғамы, тулҡынланыуҙанмы, бер килке һүҙ башлай алмай торҙо. Ҡатын баҙнатлыраҡ булып сыҡты.

— Ныҡ ҡыйын булғанда, йәшәүҙең йәмен тапмаған мәлдәрҙә ошонда киләм, — тине ул башын ҡалҡытмай ғына.

— Мин дә, — тине ир. Һүҙгә яйлап һүҙ ялғанды.

— Хәҙрәтте тылсым эйәһе булған тиҙәр. Бер Щибря тигән кеше уны самородокка, ҙур алтын киҫәгенә оҡшата. Мөжәүир хәҙрәт кеүектәр ергә бик һирәк тыуа, ул — әүлиә, ти. — Ҡатын үҙен өндәшмәй генә иғтибарлы тыңлаусыға һирпелеп ҡараны ла дауам итте: — Йәл, иҫән сагында үҙен күрергә форсат теймәне. Бик матур, аҡыллы кеше булған, тиҙәр. Әңгәмәсел, йор һүҙле ине, тип тә хәтерләйҙәр.

— Хәҙрәтте миңә лә оҡшатып ҡуялар ул, — тине ир кеше, үҙенең йөҙөндә эске бер ғорурлыҡ сағылды.

— Ысынлапмы? Ниңә?

— Сөнки, ул — минең олатай.

— Олатай? — Ҡатындың ғәжәпләнеүенең иге-сиге булманы. — Китсе, ысынмы?

«Булыр ҙа, — тип уйланы ул. — Бынауындай олпат кеше юкты һөйләмәҫ». Ҡатын эргәһендәге күрмәлекле ирҙең буйһынына, уйсан серле күҙҙәренә, илһамлы матур йөҙөнә һынап ҡараны.

— Хәҙрәттең ейәнен осратырмын тип һис бер көтмәгәйнем. Былай булғас, һеҙ миңә кәрәк кешенең тап үҙе ләһә, — йөҙө тамам яҡтырҙы ҡатындың.

– Ниңә улай тиһегеҙ?

– Мин бит хәҙрәт тураһында китап яҙырға йөрөйөм. Тормош юлын өйрәнәм. Уға ҡағылышлы һәр бер нәмә минең өсөн оло әһәмиәткә эйә.

– Был изге эштә һеҙгә ярҙамсы була алһам, шатланыр инем.

– Рәхмәт.

– Ҡулдан килгәндең барыһын да эшләрмен. Тик исемегеҙҙе белмәйем бит әле.

– Мин дә.

Ғүмер буйы бер-береһен белгән кешеләр кеүек рәхәтләнеп баянан бирле һөйләшкән ир менән ҡатын икеһе бер юлы ихлас көлөштө.

– Ҡарлуғас, – тине ҡатын башлап һәм күрешеү өсөн ҡулын һуҙҙы. – Мин – журналист.

– Ә мин – Ғәҙелгәрәй. Табипмын. Исемемде олатайым ҡушҡан. Гел тоғро, ғәҙел юл менән йәшәһен, тигән.

– Мин һеҙҙе, Ғәҙелгәрәй, күргәс тә тап шундайҙыр тип уйлағайным. Һеҙгә алдашыу, хыянат, икейөҙлөлөк һымаҡ сифаттар яттыр, тигәйнем.

– Һеҙ ҙә... үтә күрәһегеҙме әллә, Ҡарлуғас?

– Булғылай.

Ҡатын менән оҙағыраҡ һөйләшкән һайын уны нығыраҡ оҡшата барған Ғәҙелгәрәйҙең теле сиселгәндән сиселде. Хатта байтаҡ хәтирәләре яңырҙы зиһенендә.

– Беҙ бәләкәй саҡта олатайымды һирәк күрә торғайныҡ. Ул күпселек ваҡытын үҙенә күренергә килгән сирлеләрҙе дауалап үткәрҙе. Йә булмаһа Сусаҡтау, Ҡыҙылъяр буйҙарында шифалы үләндәр йыйып йөрөр ине. Таштар йыя, уларҙың серен өйрәнә, беҙ торған ер бер саҡ икенсе Мәккәгә әүерелеүе ихтимал, ти ине. Был төбәктә бик борон замандарҙа гел изгеләр, пәйғәмбәр, әүлиә, әмбиәләр йәшәгән, ти торғайны.

Ғәҙелгәрәй олатаһы ғүмер иткән ауыл яғына ҡарап ҡулын һуҙҙы:

– Ана, күрәһеңме йылғаны? Урғаҙа ул. Олатайымдың өйө шуның ярында ине.

– Туҡтап тор әле. – Ҡарлуғас Ғәзелгәрәйҙең ҡулына ҡағылды. – Мин хәҙер. Сумкаһынан кескәй диктофон алып, һөйләп тороусының ауыҙына микрофонын терәне.

– Яҙып алайым, рөхсәттер?

– Ҡуйығыҙсы, зинһар. Әҙәмсә һөйләшкәндә ниңә ул? – тип ир ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

– Тауышығыҙ иҫтәлеккә ҡалһын, тигәйнем.

– Һеҙ минән улай еңел ҡотолормон тиһегеҙме? Тауышымды, теләһәгеҙ, көн дә ишетерһегеҙ.

Ҡарлуғас:

– Журналист ғәҙәте буйынса, – тип көлөп алды ла диктофонын кире һалды. Үҙе өҙөлгән һүҙҙе ялғап ебәрерлек кенә һорау бирҙе.

– Урғаҙа яры буйлап ауырыуҙар көтөп ултыра торғайны тиһегеҙме?

– Эйе, күптәр ат егеп, арба менән килә. Ҡайһы бере шунда усаҡ яғып, ашарға бешерә, ҡайһыныһы самауыр ҡайната. Яр буйы гөрләп тора. Килеүселәр ни, сират ҙур булғас, ике-өс көн көтөп ята торғайны.

Хәҙрәт тураһында мөмкин тиклем күберәк белеп ҡалырға теләгән хәбәрсе һорау артынан һорау яуҙырып ҡына торҙо. Әллә тыңлаусының ихласлығы, әллә олатаһының һағыныу хисе әңгәмәне ҡуйыртҡандан-ҡуйырта, һүҙгә һүҙ сылбырҙай ялғанды.

– Олатайым ахырызаман тураһында йыш телгә алыр ине. Фән үҫкән һайын, кешеләрҙең тормош шарттары еңелләшкән һайын, ерҙең ғүмере ҡыҫҡарыр. Кешелек донъяһы тау дәүмәле боҙ ҡаяһына табан ашығып йөҙгән корабль һымаҡ үҙ һәләкәтенә ашыға. Эйе, ашыға. Ваҡыт етмәүгә зарлана. Ул алдағы боҙ тауына барып бәрелеп, селпәрәмә килерен дә белә, әммә һәләкәтенә уның һайын шәберәк йөҙә, ти торғайны.

– Күктең ерҙе һаҡлап торған юрғанын тишәләр, шул тишектән урғылған аяуһыҙ нурҙар бер саҡ килеп ерҙәге бар тереклекте ҡороторон уйламайҙар, – тип ныҡ көйә ине.

– Кешелек донъяһы өсөн ҡотолоу юлы бар: был – ныҡышмалы күмәк әхлаҡи көс, – тиергә яратты. – Бының өсөн һәр кемдең дөрөҫ йәшәүе мөһим, тәбиғәтте һаҡлауы фарыз. Ә ешәкелеккә этәргән күңел асыуҙарҙы туҡтатыу кәрәк. Әҙәм

балаһы үҙен ергә мәңгелеккә килгәндәй ҡылана. Тыуымдан ҡалмагас, үлемдән ҡалмаҫын уйламай. Ерҙә изгелек, яҡшылыҡ ҡына мәңгелек. Ә изгелек, яҡшылыҡ – ул Ер-әсәне һаҡлау. Әсәңде йәлләгән кеүек йәлләү, яратыу. Ерҙәге иң ҙур хәҡиҡәт бына шул, – тиер ине олатайым.

Эйе, кешеләрҙе һауыҡтырып ҡына ҡалмай, йәшәйешебеҙҙең киләсәге тураһында ла төптән уйлаған икән әүлиә.

– Олатайым кеше айырмаған, милләт айырмаған. Бары тартҡан, эскән әҙәмдәрҙе һөймәгән...

Ғәҙелгәрәй эргәһендәге ҡатынға ҡарап ҡуйҙы.

– Уның әңгәмәләре күп. Сурытып һөйләп, ялҡытып ташламаһам?..

– Һөйлә, Ғәҙелгәрәй, һөйлә! Мин көнө-төнө тыңларға әҙер.

– Баяғы эсеүҙе яратмауына ҡағылышлы бер ҡыҙыҡты гел иҫләйҙәр.

...Олатайыма ниндәйҙер йомош менән бер ир килә. Араҡыһын, ҡайтышлай эсермен тип, ағас төбөнә йәшереп ҡалдыра. Йомошон йомошлап сығырға торғанда йор һүҙле хәҙрәт тегегә:

– Ағас төбөндәге теге нәмәңде онотоп ҡуйма, – тип көлә.

Онотоу ҡайҙа, ти. Араҡыға әүәҫ ир өйҙән сығыу менән теге ағас төбөнә ашыға. Үләнде ике яҡҡа айырып, инде алайым ғына тип үрелһә, ни күҙе менән күрһен, шешәгә ҡара йылан уралып ята, ти. Күҙҙәрен секрәйтеп, башын сәкәйтеп быға ҡарап тора, имеш. Ҡото осҡан әҙәм алдын-артын шәйләмәй һыпырта. Ошонан ары «араҡы» һүҙен ишетергә лә теләмәй. Әшнәләренә: «Миңә хәҙрәт үҙе эсмәҫкә ҡушты», – тип һөйләп йөрөгән, ти.

– Әүлиәне көслө табип та булған тиҙәр, – тине Ҡарлуғас тағы берәй фәһемле нәмә ишетергә теләп.

– Был шулай. Уның табиплыҡ һәләте ифрат йоғонтоло булған.

– Тимәк, һеҙ, табип булараҡ, олатайығыҙ һөнәрен дауам иттерәһегеҙ? Бәлки, һеҙҙә лә ҡөҙрәт барҙыр.

– Юҡ миндә, юҡ. Бөтә нәҫелебеҙгә Хоҙай Тәғәләнән тейешле ҡөҙрәт беҙҙә бер кешегә тупланып бирелгән – олатайыма. Ҡалғандарыбыҙ өлөшһөҙ ҡалған, ахырыһы. Беҙҙә

ул ғына кеше күңелендә йәшеренгән уй-фекерҙе белә, ни булырын алдан күрә, кирамәттәр күрһәтергә һәләтле. Шулай бер кеше олатайыма: «Ошо Байсураның, исмаһам, бүреһе лә юҡ», – тигән. Кирамәтле олатайым: «Ә, шулаймы ни?» – тигән дә тегенең юлына бер өйөр бүре сығарған. Меҫкен юлсы ҡото осоп ни эшләргә белмәй, хатта ҡысҡырырға тауышы ла сыҡмай торғанда, бүреләр үҙенән-үҙе юҡ булған. Шул саҡ әллә ҡайҙан тылсымсы килеп сыҡҡан да:

– Бүреләр юҡ тиһең, күрҙеңме инде? – тип көлгән, ти. Шаян холоҡло, әңгәмәсел булған олатайым.

– Ғәҙелгәрәй берсә иҫе китеп тыңлаған хәбәрсе ҡатынға, берсә күк йөҙөнә ҡараны. Ҡояш ашығып офоҡҡа тәгәрәй. Ир сәғәтенә күҙ һалды.

– Автобусҡа күп ҡалманы, Ҡарлуғас, ҡуҙғалайыҡ.

Йән дауаһы эҙләүсе ике яңғыҙҙы, шулай итеп, хәҙрәт һуҡмағы осраштырыу ғына түгел, ҡауыштырып та бәхетле итеүе тураһында ишеттек.

## Шаңдау

– Эһе-һе-һе-һе-һәй! Табын ырыуының ихлас балаһы! Һине эҙләп киләм. Тороп тор, китмә. Мин һиңә киләм.

Көслө тауыш ҡаршылағы тауҙарға барып ҡаҡлыҡты ла шаңдау булып кире килде.

– Ихлас балаһы… Китмә! Киләм! Ҡайҙа, кем эҙләй мине?

Иманай тауы битләүендә шифалы үләндәр йыйып йөрөгән ерҙән боролоп тауыш килгән яҡҡа ҡарайым. Бер кем дә күренмәйсе. Тауыш йәнә ҡабатлана.

– Табын башҡорто, рухташым. Быуат аша өндәшәмен һиңә! Ишетәһеңме? Мин һине күрергә атлыҡтым.

– Кем һуң һин?

– Мөжәуи-и-и-ир әүлиә!

Ҡапылда аңғармай һорайым:

– Ниндәй Мөжәүир әүлиә?

– Ошо китабыңда яҙған әүлиә Мөжәүир!

Баҫҡан ерҙә ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай иҫемә килә алмай өнһөҙ торғанда, ҡаршымда йәйғор нурынан юлаҡ хасил булды. Шул

саҡ ни күрәйем, башына ап-аҡ сәллә ураған, өҫтөнә аҡ сапан кейгән ялан аяҡлы, оло йәштәрҙәге һөйкөмлө бер әҙәми зат пәйҙә булды. Сапаҡ йөҙө, ҙур йәшкелт көрән күҙҙәре таныш та кеүек, әммә тәғәйен, күргән кешем дә түгел. Ҡыҙыҡ, бик ҡыҙыҡ! Баяғы серле зат яҡты юлаҡ буйлап, әйтерһең, елкәнле кәмәлә йөҙҙө, эргәмә яҡынлашты һәм телгә килде.

– Һиңә рәхмәт әйтергә килдем, Табын балаһы! – тине. – Ырыуҙаштарымдың мине мәңге онотмаҫын беләинем. Әммә һинең, бүтән ырыу затының, мине былай ҙурларын көтмәгәйнем.

Әүлиә бер аҙ өнһөҙ торҙо, ниҙер хәтерләргә итте, буғай. Икенсе һөйләмендә ул әле генә үҙе әйткәнгә үҙе ҡаршы килде.

– Эйе, эйе, бер килеп һис юғы ҡәберемә баш эйерһең, тип көттөм көтөүгә. Сөнки һиңә изгелегем күп тейҙе, бары тик был турала үҙең генә белмәй торғайның. Илаһи затҡа хайран ҡалып төбәләм.

– Нисек уйлай?

– Йәшәйешеңде күптәнән күҙәтәм, рухи туғаным! Кәрәк саҡта һаман ярҙам итәм, яҡлайым да ҡурсалайым.

Мөжәүир әүлиә әле генә әйткәнен иҫбатларға теләгәндәй тулҡынланып дауам итте.

– Иҫеңдәме, Еҙем йылғаһында һыу ингәндә бата яҙғайның. Тәрәнгә йөҙөп индең дә хәлең бөттө. Манһырҙа көйө мин шуны белдем һәм Хоҙай Тәғәләнән һиңә ярҙам итеүен ялбарҙым. Ярға сығып еткәнеңсә күҙәттем.

– Иҫемдә, иҫемдә! Хәлем бөтөп, ағым ыңғайына аға башлағайным, ниндәйҙер көс мине ярға етәкләне.

– Иҫеңдәме, бер саҡ һин ултырып китеп барған замана арбаһы юлдан тайып китеп, ике-өс ҡат әйләнеп, тәкмәсләп барып төштө. Арбағыҙ йәнселде, тимер-томоро йәмшәйҙе, тәҙрәләре селпәрәмә килде. Ә эсендәге кешеләр зыян күрмәне. Ғәжәпләнеп бер-берегеҙгә ҡараштығыҙ. Һин дә мин көйөһөгөҙ. Шатлығығыҙҙың сиге булманы.

– Ҡуйсы, ҡуйсы, иҫемдә, олатай, иҫемдә!

– Еләк-емешкә йөрөргә яраттың, эйеме? Бер саҡ Ирәндектә сейә йыйғанда бер ҙур ҡара йыланға тап булдың. Һин

уны үҙең күрмәй ҡалдың, юлыңдан алып, ағыулы йән эйәһен икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрҙем.

— Иҫ китмәле! Шулай булды шул.

Аҡ кейемле изге йән ҡолаҡҡа ятышлы яғымлы тауыш, тәмле тел менән һөйләне лә һөйләне. Ә мин арбалғандай уға баҡҡанмын да тыңлайым да тыңлайым.

— Иҫеңдәме, һиңә минән ярҙам килер көндө ниәт иткән юлыңа сығып китә алманың. Сумкаңда ятҡан билетыңды таба алмай аптыраның. Ә бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уның урынында ятҡанын күреп хайран ҡалдың.

— Эйе, эйе. Бына ул нисек булған икән дәһә, — тим. — Әкиәткә оҡшаған күренешкә хайран ҡалам, берсә ошо күренеш оҙағыраҡ булһа ине, тип теләйем.

— Хәҙрәт, һеҙҙе халыҡ телдән төшөрмәй, ихлас ярата.

— Беләм. Ризамын. Халҡыма иман ҡайта.

Изге йән ашығыбыраҡ дауам итте.

— Ырыуыңдың аҫыл заты — Әбйәлил мулланы, Сабир хәҙрәтте күреп йөрөнөм. Ул да — йәйғор тәхет эйәһе. Һинең әҡрәбәң икән.

— Күреп йөрөйөм тиһеңме? Бына мөғжизә! — тим, ауылымдың арҙаҡлы муллаһын хәтерләп.

— Эйе, күреп йөрөйөм. Улар һеҙгә бәхет юрай.

Һөйләшеүҙән тамам илһамланып, хәҙрәткә мин үҙем өсөн иң мөһим булған һорауҙы бирергә батырсылығым етте.

— Хәҙрәт, ергә яңы әүлиә киләсәк тип көтәләр. Шул дөрөҫлөккә тап киләме?

— Эйе, Ерҙе ахырызаман афәттәренән ҡурсалау өсөн ергә яңы әүлиәләр, ҡөҙрәтле затта ебәреләсәк. Айырыуса Манһыр, Баймаҡ, Ғәҙелша кеүек мәғдәнгә бай ерҙәргә тәғәйенләнә улар. Мин тыуғандан һуң йөҙ ҙә утыҙ бер йыл тигәндә 10–12 йәштәр тирәһендәге бер ир балаға Хоҙайҙан илаһи ҡөҙрәт бирелер. Ул шундай көскә эйә булыр: теләһә, ерҙе туфан һыуынан әрсәләр, теләһә, ялҡыны тауҙай янғынды һүндерер. Заман сирҙәрен, эскелекте, иҫте-һушты алып миңрәүләтер эфиунсылыҡты бөтөрөр. Әммә ҡара көстәр, иблис ялсылары уға хөсөтлөк ҡылмаҡсы. Кешеләр шул йәш әүлиәне көс-ҡөҙрәтенә тулышҡансы ныҡ һаҡлаһын ине.

– Нисек танырбыҙ?

– Эйе, башта кешеләр уны белмәҫ. Йонсоу ғына булыр, ярҙамға мохтаж, йәлләүес күренер. Кемдәр мәрхәмәтле, кемдәр дөрөҫ йәшәй, күҙәтеп һынағас, шуларҙы изге эшенә йәлеп итер.

– Ғали йәнәп, йәйғор тәхет эйәһе! – Йыһандан гөрһөлдәүгә оҡшаш тауыш килде. – Күңелең булдымы? Һеҙҙе унда юғалттылар.

Ни күҙем менән күрәйем, Иманай тауы итәгенә йәйғорҙан йәнә юл һалынды. Нәҡ урта тошонда нурҙан ғына туҡылған йәйғор тәхет пәйҙә булды. Илаһи нурға сорналған аҫыл йән эйәһе ҡәнәғәт ҡиәфәттә әлеге тәхеткә ултырҙы, шул уҡ мәлдә күҙҙән дә юғалды. Артынан бары ап-аҡ нур һыҙылып ҡалды.

Ни булды был? Өнмө, төшмө? Һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫ! Йәшәйеше мөғжизәнән туҡылған олуғ ғали йәнәптең күҙгә күренеүе, һүҙҙәре быуаттан быуатҡа һаҡланып шаңдау булып ҡайтыуы хикмәтлененң йәнә бер хикмәте булғандыр. Ҡабатланмаҫ, берҙән-бер, шанлылыҡта тиңдәшһеҙ Мөжәүир әүлиә!

Изге рухың ғәзиз еребеҙгә шаңдау булып ҡына булһа ла гелән шулай ҡайтып ураһын.

# II БҮЛЕК

## ХӘТИРӘЛӘР

## Атайым

Йыш ҡына минән атайым тураһында һорашалар: «Һөйлә әле, Мөжәүир хәҙрәт ниндәй кеше ине?» – тиҙәр. Үҙем дә, бигерәк тә, инде ологая төшкәс, атайым тураһында йыш уйланам, уның булмышын аңларға тырышам.

Атайым минең күҙ алдымда һәр саҡ ике сифатта һынлана: беренсеһе – һәр кем килеп үҙенең ҡайғы-хәсрәтен, ыҙалатҡан ауырыуын тартынмайынса һөйләй алырҙай, һәр кемде аңларҙай ябайҙарҙан да ябай ҡәҙимге кеше; икенсеһе – беҙгә аңлашылып етмәгән рухи юғарылыҡҡа эйә бөйөктәрҙән дә бөйөк илаһи зат.

Бала саҡта мин атайымды, әлбиттә, аңлап етмәгәнмен. Атай атай инде: беҙҙе, балаларын, кеше итергә, уҡытырға тырышты. Эш һөйөргә, мал тәрбиәләргә өйрәтте. Еләк-емешкә, шифалы үләндәр, сәскәләр йыйырға, бесән сабырға алып сығып китер ине. Туған-тыумасаға ярҙамсыл, килгән-киткәнгә шәфҡәтле, һәр йән эйәһенә мәрхәмәтле булды, беҙҙән дә шуны талап итте. Ипле һүҙле, уйынсыл, мәрәкәләргә, шаяртырға әүәҫ – бына шундай кеше булып иҫтә ҡалған ул.

Үҫеп еткәс кенә мин атайымдың ябай кеше булмауын аңланым, уның бөтә халыҡ ихтирамын яулай алыу сәбәптәре тураһында ныҡлап уйлана башланым. Мине уның көслө рухлы, ныҡ ихтыярлы булыуы һоҡландырҙы. Көндәр буйы һәр бер килгән кешенең аһ-зарын тыңлау, бөтәһенә ярҙам итеп

ултырыу өсөн ниндәй оло йөрәк-ле, кеше йәнле, сабырлы булыу кәрәк!

– Миңә юғарынан шулай ҡушылған, ерҙәге бурысымды атҡарам. Бөтәһе лә Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн, – ти торғайны атайым.

Был һүҙҙәрҙең оло мәғәнәһен мин хәҙер генә аңлайым. Ул бөтә йөрәге, уйы-хисе менән тик Аллаһы Тәғәләгә бирелгән, динебеҙ ҡушҡанса йәшәгән.



Можәүир хәҙрәткә 90 йәш. Ғүмеренең һуңғы йылдары

Күңелемдә бер теләк йәшәне: эх, китап яҙырға ине атайым тураһында. Исеме тарихта ҡалһын ине! Ул бит быға лайыҡ!

Яҙыусы Лира Яҡшыбаева был изге эшкә тотонғас, уға ныҡлап ярҙам иттем. «Мөжәүир хәҙрәт» китабына ингән күп нәмәләр, мәҫәлән, атайымдың тышҡы ҡиәфәте, төҫ-башы, ауылыбыҙ тәбиғәте, ер-һыу исем-дәре, кешеләр менән аралашыу алымдары – минең һөйләүгә буйынса яҙылды. Уға, әлбиттә, минән башҡа мәғлүмәт биреүселәр, ярҙам итеүселәр ҙә бихисап ине. Яҡташтарыма, китап авторына, туғандарыма атайымды онотмағандары, ихтирам иткәндәре, рухына аяттар бағышлағандары өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Китапты алыусы, уҡыусы, уны иҫләүселәргә атайым рухының рәхмәте яуһын!

*Сиражетдинов Мөхәммәт,*
1945 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Ямғыр ташы — «Быҙауташ»

*Баймаҡ районының Төркмән ауылында тыуып үҫкән, аҙаҡ оҙаҡ йылдар Сибай баҡыр-көкөрт комбинатында эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан 1924 йылғы Туҡаев Мөхәмәтйәр Мөхәмәтғәле улы һөйләгән хәтирәләр минең өсөн айырыуса ҡыҙыҡлы тойолдо. Ысын мәғәнәһендә хикмәтленең хикмәттәре асыҡ сағылыш таба уның хәтирәләрендә.*

Ғүмер буйы слесарь, монтажник, сварщик һымаҡ етди һөнәрҙәр менән шөғөлләнгән, дини хөрәфәттәргә ышанмаған Мөхәмәтйәр ағай башта Мөжәүир хәҙрәттең хикмәттәренә әкиәт итеп кенә ҡараған.

– Үҙҙәре уйлап сығарған әкиәткә үҙҙәре ышана, – тип, Олатайҙың хикмәттәрен иҫе китеп һөйләгән кешеләрҙән көлөбөрәк йөрөгән.

Быҙауташ менән булған мөғжизәне үҙ күҙе менән күргәс кенә, хәҙрәт олатайҙың ҡөҙрәтенә хайран ҡалып, аҙаҡ бөтә ғүмер буйы йөрәк түрендә уға оло ихтирамын һаҡлай ул. Әле һикһән дүрт йәшлек Мөхәмәтйәр ағай белгәндәрен һөйләп ҡалдырыр өсөн мине өйҙәренә саҡырып алды. «Мин һау саҡта, ҡыҙым, яҙып ал әле хәтирәләремде, – тине. – Бәлки, мәңгелек йортҡа барғанда, Олатай рухы үҙе минең йәнемде ҡаршы сығып алып торор».

Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, һәйбәт хәтерле, айыҡ аҡыллы был ил ҡарты һөйләгәндәр минең күп нәмәгә, үҙем һиҙенеп кенә белеп йөрөгән ҡайһы бер хәл-күренештәргә күҙемде асты.

– ...Был хәл 1948 йылда була, – аҡһаҡал хәтирәләр йомғағын шунан башланы. – Сибай ҡалаһында бер туҡтауһыҙ ике аҙна буйына алһыҙ-ялһыҙ ямғыр яуа. Брамы ҡоя ғына, әйтерһең, күктең төбө тишелгән. Ни икәнен бер кем аңламай. Туҡтатырҙар ине, ерҙә тәбиғәт көсөн буйһондорорлоҡ ҡөҙрәт юҡ. Халыҡ оло хәүефкә ҡала. Һыу урам буйҙарында кисеп йөрөмәле, Ирәндек битләүендәге үҙәктәрҙән гөрләүектәр йылға булып аға. Кешеләр оҙон ҡуныслы итектәр кейеп йөрөй. Былай барһа, беҙ тиҙҙән һыу аҫтында

ҡалабыҙ икән, тип ҡурҡа барса халыҡ. Инде ни эшләргә тип аптырап торғанда, аранан берәү:

– Мөжәүир хәҙрәткә әйтеп ҡарайыҡ. Уның белмәгәне юҡ. Моғайын, ямғырҙы туҡтатыу сараһын да табыр, – тигән.

Алланы ла, мулланы ла танымайынса, яңы властың хаттин ашҡан сағы. Мөжәүир хәҙрәт тә, был саҡтарҙа дин әһеле булараҡ, совет власы өсөн зарарлы кеше тип һаналып, яңы властың иң күрә алмаған дошманы тип иҫәпләнә. Мулла тип кәмләп хурлауҙар, балаларын ситләтеп ҡағыуҙар, төрмәләргә ултыртып яманатын таратыуҙар, башҡа һәр төрлө рәнйетеүҙәр – нәҡ ошо йылдарҙа иң юғары нөктәһенә еткән була.

– Түрәләр белеп ҡалһа, бының өсөн эштән ҡыуыр бит.

– Ҡыуһа ҡыуыр, зато ҡаланы һыуҙан баҫтырмабыҙ. Ана, кешеләр бала-сағаларын, ағып китмәһен тип, өйөнән дә сығармай. Былай барһа, тиҙҙән кәмәләр менән йөрөй башларбыҙ. Туфан һыуы ҡалҡмағайы.

Кешеләрҙең күңелен ҡурҡыу хисе солғап алды. Аллаһы Тәғәләнең барлығын танымай, уны онотоп йөрөгән кешеләр йәшеренеп кенә белгән доғаларын уҡый башланы.

– Ағып барыусы һаламға тотона. Бындай саҡта күп уйлап торорға ярамай. Мөжәүир хәҙрәттең ҡөҙрәтен бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, саҡыра һалайыҡ, – тине күпселек.

Ниһайәт, Манһырға барып, Олатайҙы алып киләләр.

– Анау шахтерҙар карьерҙан тапҡан «Быҙауташ»ты кире урынына илтеп күмегеҙ, шунан ямғыр үҙенән-үҙе тымыр, – тигән Хәҙрәт. – Ямғырташты һеҙ урынынан ҡуҙғатҡанһығыҙ.

Бөтә халыҡ шаҡ ҡата. Ысынлап та, бынан ике аҙна элек, шахтерҙар ер аҫтынан хәс тә һары быҙау һымаҡ ҡыҙыҡлы ҙур таш табып ала. Уға шунда уҡ «Быҙауташ» тип исем бирәләр. Карьерҙа раскомандировка урыны була. Ул ситәндән генә үрелгән бер урын, шунда иртәнсәк эшселәр йыйыла, мастерҙар эш бүлеп бирә. Ҡыҙыҡ күреп, баяғы ташты шунда, бөтә кеше күрерлек ергә, элеп ҡуйған булалар.

– Дөрөҫ, – ти бер эшсе иҫәпләп ҡарап – ысынлап та, нәҡ шул ташты тапҡан саҡтан алып ямғыр ҡоя.

Кешеләрҙе хәҙрәттең шахтерҙар тапҡан «Быҙауташ» тура-

һында белеүе хайран итте. Ҡайҙан белгән, әллә берәйһе әйттеме?..

Аранан берәү шул турала һорау бирҙе. Олатайҙың тауышы талапсанға әйләнә.

– Уны тикшереп торғансы, «Быҙауташ»ты тиҙерәк урынына илтеп күмеү хәстәрен күрегеҙ.

Шахтерҙар Мөжәүир хәҙрәттең әйткәнен тыңлап, «Быҙауташ»ты алған еренә тиҙерәк алып барып күмәләр. Бөтә ғәм халҡын хайран итеп, ямғыр шунда уҡ шып туҡтай.

– Бына мөғжизә, бына был хикмәт, исмаһам. Ҙур түрәләргә әйтһәң, биллаһи, ышанмаясаҡтар, – тип үҙ-ара һөйләшә эшселәр. Был хәлде үҙ күҙе менән күреп белгән барлыҡ кешенең күңелендә олатайға ҡарата оло ихтирам хисе уяна.

– «Быҙауташ» күмелгән шул урынды хәҙер иҫләйһегеҙме, – тип һорайым Мөхәмәтғәле ағайҙан.

– Иҫке Сибай юлында ине ул урын. Хәҙерге Алтын ҡасабаһы янындараҡ, карьерҙың отвалы аҫтында ҡалды ул.

«Был серле, хикмәтле хәл шуның менән тамамланды. Мөжәүир хәҙрәттең дә аҙаҡтан «Быҙауташ» тураһында ләм-мим хәбәр һөйләгәне ишетелмәне. Ниндәйҙер хикмәтле сер булып ҡалды ул күңелдә», – тип һүҙен тамамлай Мөхәмәтйәр ағай.

## Хикмәтле ҡөҙрәт

«Быҙауташ» менән булған хикмәттән һуң беҙҙең эшсе халҡы ауырый-сырхай башлаһа, Мөжәүир хәҙрәткә барҙы.

Бер көндө эшкә барһам, мастерыбыҙ Әхмәтшин Шәрифйән саҡырып алды ла әйтә:

– Слушай, еңгәңдең күҙҙәренә ҡапыл ғына әллә ни булды, төптө юҡтан күрмәҫ булды ла ҡуйҙы. Врачтарға ла алып барып ҡараным, улар ҙа асыҡ ҡына бер ни ҙә әйтә алманы. Кабинетта, врач эргәһендә ултырған медсестра артыбыҙҙан сығып шыпырт ҡына, ҡатынығыҙҙы Мөжәүир хәҙрәткә күрһәтеп ҡарағыҙ, тип кәңәш бирҙе. Будь другом, Мөхәмәтйәр, еңгәңде хәҙрәткә алып барып күрһәт әле. Үҙем барһам,

юғарынан һүҙ тейер тип ҡурҡам, минең ҡатыным тип әйт тә ҡуй, һиңә өндәшмәҫтәр, – тине.

– Ярар, алып барам. Олатайға алып барырға мин һәр саҡ риза. – Мөхәмәтйәр ағай атын егеп, Шәрифйәндең ҡатыны Мәрхәбәне ултыртып ала ла юлға сыға.

Манһырға барып етһәләр, ҡапҡа тышындағы арбала бер мәрйә ер-һыу илап ултыра. Мөхәмәтйәр ағай тегенән һорай:

– Зачем плачешь?

– Ейәнем өс көн, өс төн алһыҙ-ялһыҙ илай, өс көн, өс төн ашағаны ла, эскәне лә, йоҡлағаны ла юҡ. Мине танымай. – Мәрйә тағы һығылып иларға тотона.

Ул арала ҡапҡанан өс-дүрт йәштәрҙәге бер ир бала йүгереп килеп сыға. Ауыҙы ҡолағына етеп йылмайған. Бала:

– Бабушка, я больше не болею, я здоров, – ти.

Әбей:

– Батюшки, – тип кенә әйтте лә арбанан иҫһеҙ булып ҡоланы ла төштө. Бер аҙҙан аңына килеп, ейәнен ҡосаҡлап алды ла, әй суҡына башланы.

– Я такого целителя впервые вижу. Спасибо, тебе, родной, спасибо тебе, старец, век не забудем, – тип алҡышланып рәхмәтен әйтте, шунан улар ҡуҙғалып ҡайтып китте.

Хәҙрәт Мөхәмәтйәр менән Мәрхәбәне йылмайып, көләп ҡаршы ала.

– Йә, хужаңдың ҡатыны оҡшаймы? Әллә бер юлы үҙегеҙгә никах уҡып ҡайтарайыммы?

Икеһе лә хәҙрәттең барыһын да алдан күреп белеүен аңлай, ныҡ уңайһыҙланалар.

– Ғәфү ит, олатай, минең бында килгәнемде белһәләр, иремде эшенән сығарасаҡтар. Беҙ үҙебеҙ һеҙҙе ихлас ярата- быҙ, – ти Мәрхәбә.

– Беләм, барыһын да беләм, ҡыҙым, – ти олатай. – Мин бит шулай мәрәкәләргә, әңгәмәләшергә яратам, һеҙ ҙә миңә үпкәләмәгеҙ.

Олатай Мәрхәбәне оҙаҡ ҡына өшкөрҙө. Сығыр саҡта:

– Аллаһ бирһә, юлда уҡ күҙең нуры ҡайтыр, балам. Тик әле килгән юлдан түгел, икенсе яҡтан ҡайтығыҙ, артыңа әйләнеп ҡарама, – тине.

Улар уңай ғына ҡайтып еттеләр. Ысынлап та, Мәрхәбәнең юлда уҡ күҙе күрә башлай. Тик ҡайтып еткәнсе өндәшмәне. Сөнки быңдай мөғжизәгә үҙе лә ышанып етә алмай килде. Була икән дәһә донъяла шундай ҙа хәлдәр. Ниндәй хикмәтле ҡөҙрәткә эйә икән ул бабай. Һин дә мин шаярып, көлөп кенә ултырған кеүек, ә үҙе шул арала бер табип башҡара алмаҫтай эштәр атҡарып ултыра.

Мәрхәбә өсөн яңы ғына донъя ҡап-ҡараңғы бушлыҡ ине, ярты сәғәт тә үтмәне ҡояш нурын, сәскәләр төҫөн үҙ күҙе менән күрә алды. Ниндәй рәхмәттәр әйтергә һуң быңдай изге эше өсөн әүлиәгә? Күңеленә бер мәғлүмәт килде: «Һин Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә инанырға тейешһең». Эйе, бынан түбән ышанасаҡ ул Алланың барлығына. Доғаларын да ятлар, намаҙын да уҡыр. Уның инаныуын партия ла, власть та тыйып тора алмаҫ.

Ҡайтып еткәс, Мөхәмәтйәр ағай дуҫына барыһын һөйләп бирҙе.

– Һай, көс-ҡөҙрәт бар икән дә үҙеңдә, – тип, тағы бер хәҙрәттең илаһи көсөнә һоҡланды улар.

## Күстәнәсеңде онотма

Минең бажам Ҡорбанғәлиев Йәүҙәт менән балдыҙым Гөлсирәнең бер нисә йыл торһалар ҙа балалары булманы. Улар Магнитогорскиҙа йәшәнеләр. Ҡайным быларға Мөжәүир хәҙрәткә күренеп ҡарағыҙ, тип өйрәтеп ебәргән. Бер шулай беҙгә килеп йоҡланылар ҙа иртүк тороп Манһырға юлландылар. Бажа бер яртыһыҙ йөрөмәй торғайны. Юлда араҡыһын, тәмәкеһен билдәле урынға йәшереп ҡалдырып киткән, ҡайтҡанда кире алырмын, тигән.

Олатай быларҙы ҡараған да әйткән:

– Һәй, борсолма, улым, тоҡтоң ауыҙы бер асылһа, күбәйер балалар, – тигән. Йәнә өҫтәгән:

– Йәүҙәт улым, юлда ҡалдырған теге күстәнәсеңде алырға онотоп ҡуйма.

Олатайҙың был һүҙе һағайтҡан Йәүҙәтте. Бер нәмә лә әйтмәгән дәһә, ҡайҙан белде икән, тип аптыраған. Шулай ҙа

ҡайтышлай ҡалдырған нәмәһе ятҡан ергә туҡтаған. Килеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, шешә урынына ыҫылдап ҡара йылан ята, ти. Ҡурҡышынан тороп һыпыртҡан.

Йәүҙәт бажа аҡыллы кеше ине. Аҡыллыға ишара булған был. Аҙаҡ ул араҡыға ҡағылманы ла. Олатай миңә эсергә лә, тартырға ла ҡушманы, тине. Ысынлап та, Гөлсирә балдыҙҙың бер аҙҙан балалары тыуҙы. Икәүләп матур ғүмер кисерҙеләр.

## Балдыҙым йүнәлде инде

Был хәлде Мөхәмәтйәр ағайға дуҫы Сәғиҙулла һөйләп ишеттерә.

Бер көн Олатай иртәнсәк тороп тәһәрәт алып йөрөй, Гөлйемеш абыстай иртәнге сәй табынын хәстәрләй икән.

– Әбей, сәйҙе ултыртмай тор. Бында бажа килә ята. Эй, атын ҡыуа, эй, атын туҡмай, сәсәтеп кенә үлтереп ҡуймаһа ярар ине, – ти.

– Ниңә ашыға һуң шул тиклем? – тип һорай абыстай.

– Балдыҙ ауырып киткәйне, мин уны һыртынан ҡарап йүнәлттем инде.

Бер аҙҙан ах та ух итеп бажаһы килеп инә. Сәйгә саҡырһалар ҙа ултырмай.

– Тиҙерәк беҙгә бара һалайыҡ, ҡатындың хәле хөрт, – ти.

– Балдыҙым ни унда һин дә мин йөрөп ята, – ти хәҙрәт.

Бажаһы ышанмай. Яңы ғына ауырып тәгәрәп ятып ҡалды, тип һаман үҙенекен тыҡый.

– Ышанмаһаң ни, атың бар, ҡайт та күр.

Хәҙрәттең хикмәттәрен күп күргән бажаһы теләр-теләмәҫ кенә булһа ла сәйгә туҡтай. Тиҙ генә бер сынаяҡ сәй эсә лә ашығып ҡайтып китә. Ҡараһа, ҡатыны, ысынлап та, һап-һау. Ирен ҡаршы алып тора.

– Нисек йүнәлдең? – тип аптырай ире.

– Әле генә еҙнәм килеп өшкөрөп китте, – ти ҡатыны.

– Ҡайҙан килһен, ти. Мин әле генә уларҙа булдым, бергәләп сәй эстек.

– Килде, – тине ҡатын да үҙ һүҙен бирмәй.

Икеһенең дә үҙ бише биш. Икеһе лә үҙенең һүҙен һүҙ иткеһе килде.

Эй бәхәсләштеләр, эй иҫбатлаштылар былар. Ниһайәт, ир кеше әйтте:

– Әйҙә, әләйһәң, Манһырға барып асығын белешеп ҡайтайыҡ.

Бәхәс ҡороусылар шул ыңғайы йыйынып, өйҙән сығып та китте.

Был хәл тураһында икеһе лә юлда уйланып барҙы. Элегерәк тә ошоға оҡшаш күренештәр тураһында ишеткеләгәне булды уларҙың.

– Олатай беҙҙә булды, кешеләрҙе ҡараны, ҡунаҡ булды, – тип әйтәләр. Ә был саҡта Мөжәүир хәҙрәт бер ҡайҙа ла бармайынса үҙенең Манһырында килгән кешеләрҙе ҡарап ултырған була.

Бажаһы менән балдыҙы килеп ингәс, Мөжәүир хәҙрәт көлөп ебәрә.

– Әһә, беләм нимә юллап йөрөүегеҙҙе, – ти. – Был – суфыйҙар сере. Тәриҡәт юлында булһағыҙ, белер инегеҙ, уны былай ғына аңлатып бөтөп булмай.

Кире ҡайтҡанда улар тағы ла нығыраҡ аптырауға ҡала. Икеһе лә хаҡлы булып сыҡты ла баһа. Нисек инде бер үк ваҡытта ике ерҙә лә тороп йә күренеп була? Күпме генә баш ватһалар ҙа, улар был сергә төшөнә лә, аңлай ҙа алманылар.

Хәҙрәттең бажаһы менән булған хәтирәне һөйләп ултырған Мөхәмәтйәр ағай һаман да был хәлгә аптырауын әйтте.

– Эй, ағай, был донъяның беҙ белмәгән серҙәре бихисап, тим. Ә Мөжәүир хәҙрәт сер ғилеменә эйә зат булған. Ул бер кем белмәгәнде белгән, берәү күрмәгәнде күргән, һис кем ишетмәҫте ишеткән. Бәлки, уның ғилеме даръя һымаҡ төпһөҙ, икһеҙ-сикһеҙ булғандыр. Шуның өсөн дә әллә ҡасан ерҙән киткән әүлиә һаман халыҡ күңелендә. Телдән төшмәй, хәтерҙән китмәй, һаман беҙҙең эргәлә йөрөүен дауам итә. Бәлки, бының да бер хикмәте барҙыр әле. Хәҙрәт хикмәтенең серҙәренә төшөнөп етмәйбеҙ әле беҙ, барыһын да белмәйбеҙ.

# Онотмабыҙ һине, хәҙрәт олатай!

Үлмәҫбикә инәй «Мөжәүир хәҙрәт» китабын ҡулына алды ла, тышлыҡтағы һүрәткә төбәлеп, мөғжизәгә юлыҡҡандай, телһеҙ ҡалды. Шунан иң ҡәҙерле әйберен тапҡан кешеләй ҡыуанып, китапты ныҡ итеп күкрәгенә ҡыҫты, керпектәре йәшкә сыланды. Ирендәре бер туҡтауһыҙ:

– Хәҙрәт олатай! – тип бышылдай, ә күҙҙәренән субырлап йәш аға. Тик бер ни тиклем ваҡыт үткәс кенә, ул үҙен ҡулға алды һәм тынысланып телгә килде:

– Һин яҙҙыңмы?

– Эйе. – Ниңәлер уңайһыҙланам, сөнки тауышы ҡарлығып тоноҡ сыҡты.

– Мин башҡара алмаған бурысты атҡарып ҡуйғанһың даһа, туғаным. – Инәйебеҙҙең күҙҙәре шатлыҡлы йылтырай. Бер ни аңламайым:

– Ниндәй бурыс?

Инәй ҡапылда яуап бирмәй, әйтерһең, ишетмәй. Китапты Ҡөрьәндәй ҡәҙерләп тотоп, эсен асып ҡарай башлай. Күңеле бер аҙ һилләнгәс кенә, ул миңә күтәрелеп ҡараны:

– Рәхмәт, туғаным, – тине. – Былай булғас, йылдар буйы йөрәк түремдә ҡәҙерләп һаҡлаған хәтирәләремде һиңә аманат итеп ҡалдырам, тыңлайһыңмы әллә яҙып алаһыңмы? – Ул ҡарашын алыҫҡа төбәп, һүҙҙе йыраҡтан уратып башланы.

– ...Хәҙрәт олатай бит ул Хоҙай Тәғәлә рәхмәтенән яралған, кешеләргә тик изгелек ҡылыр өсөн донъяға килгән аҫылдан-аҫыл зат. – Үлмәҫбикә инәй белгәнен кешеләргә әйтә

һалып ҡалырға ашыҡҡандай, хәбәрен ҡыҙыулатыбыраҡ дауам иттерҙе.

– Олатай иҫән саҡтарҙа миңә уның менән күп тапҡырҙар осрашыу бәхете насип булды, – тине лә оло кинәнес менән хәтирәләр йомғағын тағата башланы.

– Мөғжизәләр эйәһе әүлиә ун дүрт йәшлек сағымда, аҡ әбей ҡиәфәтенә инеп, мине ауылыма килеп үҙе эҙләп тапты. Был уның миңә тәү күрһәткән кирамәте булды, – тип башланы бәйәнен Үлмәҫбикә инәй. – Шунан алып беҙҙең аралашыу башланды. Ул ни сәбәптәндер, юлдарымда йыш ҡына осрап торор булып китте. Әллә уның донъяның серлелегенә, мөғжизәләргә ышаныусан ихлас holoҡ-фиғелем әсир итте, әллә күңеленә халыҡтың ауыҙ-тел ижадын яҡшы белеүем, тел биҫтәһе, шаян, йор һүҙле булыуым хуш килдеме, ни өсөн оҡшатҡандыр инде ул мине?! Рәхмәт әүлиәгә, күҙ күрешкәндән миңә иғтибарлы булды, – тип дауам итте хәтирәләрен Үлмәҫбикә инәй.

– Туҡһанды ваҡлай башлағайны, мине күрергә теләүен әйтеп ебәргән. Барҙым. «Ҡыҙым, – олатай миңә һынап тура ҡараны, – һин зирәкһең, тапҡыр теллеһең, үткәрә әйтә беләһең. Дини байрамдарҙа, Ҡөрьән аштарында, дуҫ-иш ултырҙаш булған ерҙәрҙә мине гел генә иҫләп һөйләп йөрө, телдән дә төшөрмә, йәме. Минең рухыма Хоҙай ризалығы өсөн доғалар бағышлатырһың».

Хәтирәләрҙән илһамланған инәйебеҙ тағы дәртләнеберәк дауам итте:

– Изге эштәремде ни тиклем күберәк хәтерләп һөйләһәләр, Аллаһы Тәғәлә алдында дәрәжәм дә шул тиклем ҙурыраҡ булыр. Мине онотмау дини ҡәрҙәштәремдең үҙҙәре өсөн дә кәрәк: үлгәндәргә хөрмәт бөтһә, тереләргә лә дан ҡалмаҫ. Йәнә шуны ла онотмаһындар: милләттең дәрәжәһен уның изге рухлы кешеләре билдәләй.

– Олатайҙың был һүҙҙәрен беҙ аманат итеп һанларға тейешбеҙ, – тине Үлмәҫбикә инәй, бер аҙҙан уның илһамлы йөҙөнә үкенеү билдәләре сыҡты:

– Теләгеңде үтәрмен, олатай, тип ихлас вәгәҙә бирҙем, исемен дә телдән төшөрмәнем. Әммә шуныһы үкенесле: күрһәткән кирамәттәрен, һирәк осрар һәләтен ташҡа баҫтырып сығарып, бөтә халыҡҡа еткерә алманым.

Инәй йәшле күҙҙәре менән ялбарып ҡараны:

– Ҡыҙым, улай китап сығарырлыҡ һәләтең булғас ни, хәтирәләремде яҙып ал да ташҡа баҫтырып сығар, үҙеңә сауап булыр, – тине.

Бер аҙҙан хатта ялбарып үтенде:

– Аллаһ хаҡы өсөн тырыштырып ҡара, туғаным!

Үлмәҫбикә инәйҙең йөрәк түренән сыҡҡан бындай үтенесе хәтирәләр яҙыу теләгемде тағы ла нығыраҡ дөрләтте. Ысынлап та, тим, бөйөк шәхесте белгән-күргән кешеләр китеп бөтөр. Телдән телгә һөйләнеп йөрөгән хәтирәләр ҙә йылдар үтеү менән онотолор булыр. Ә китап мәңге йәшәр! Киләһе быуын кешеләре уны алып уҡыр ҙа ҡасандыр беҙҙең еребеҙҙә олуғ әүлиә йәшәгәнен белер. Күңелдә икеләнеүҙәр ҙә булмай тормай бит инде.

– Китап сығарыуға хәҙрәттең рухы ризамы икән? – тип, инәйгә һораулы ҡарашымды төбәйем. – Әүлиәләр рухы мәңге тере, гел беҙҙең менән бәйләнештә икән, тиҙәр.

– Риза булмаған ҡайҙа ул! – тип инәйҙең ялҡынлы ҡарашы дәртле осҡонлана. – Риза ул, риза! Әгәр риза булмаһа, тәүге китабыңды ла сығара алмаған булыр инең! Һиңә фатихаһын да биреп яталыр әле! Олатай үҙе әйтә торғайны, кемдәр минең ярҙамға мохтаж, үҙем үлгәс, ҡәберемә килһендәр, бер сихәтем тейер, мине уйлап ҡына йөрөһә лә, эше уңға китер, ти торғайны.

Үлмәҫбикә инәй һөйләгәндәренә шик белдермәйемме икән тигәндәй миңә бер килке ҡарап торҙо:

– Бына әле лә үҙен хәтерләгәнде белеп, рухы эргәбеҙҙәлер, йәне бәйтуллаһына ҡыуанып ҡайтыр, ин шәәъ Аллаһ.

Тамам күңеле күтәрелгән сәсәниә әбейебеҙ хатта арҡамдан тупылдатып һөйөп алды:

– Китабыңды тиҙерәк сығар! Уны бөтә халыҡ көтә! Хәҙрәтте белеп яратыусыларҙы ҡыуандыра һал!

Бындай оло ышанысты, ихтирамды күреп күңелем шатлыҡ менән тулды. Эйе, Мөжәүир хәҙрәттең шәхесен ололау беҙгә, тереләргә кәрәк! Ошондай әүлиәләребеҙ була тороп та уны белмәһәк, ҙурламаһаҡ, беҙгә яҙыҡ булыр ул.

Күңелдә үҙ заманының бөйөк заты, дин әһеле, әүлиәһе, табибы, аҡыл эйәһе тураһында хәтирәләрҙе йыйыу, яҙғы килеү хисе көсәйҙе. Миңә ең һыҙғанып был маҡтаулы эшкә йомолорға кәрәк икәнлекте аңланым.

– Рәхмәт, Үлмәҫбикә инәй, һин минең эшләгән эшемдең хаҡлығын, кешеләргә кәрәклеген раҫланың.

Шунда уҡ ашығып инәй һөйләгәндәрҙе түкмәй-сәсмәй ап-аҡ ҡағыҙ битенә төшөрә башланым. Был минең Баймаҡ ерененең изге заты тураһындағы икенсе китабым була саҡ. «Мөжәүир әүлиә тураһында хәтирәләр» тип аталасаҡ ул!

## Яуаплама

Зирәк аҡыллы, сәсән телле, илгәҙәк холоҡло Үлмәҫбикә инәйҙең эсе тулы хазина булып сыҡты. «Мөжәүир хәҙрәт» китабын ҡулына тотоуҙан күңеле нескәргән инәйебеҙ бер саҡ ни алырын, ни биререн белмәй, өлтөрәп китте. Ихласланып алып, стена буйында ултырған төрлө иҫтәлекле әйберҙәр менән лыҡа тулы ҙур һандығын асып ебәрҙе.

– Бына был – үткәрмә йәсин, – тине ул ап-аҡ туҡымаға түңәрәтеп, тәфсилләп ғәрәпсә яҙылған әйберҙе миңә һоноп. – Мә, ал! Һиңә, халыҡ араһында күп йөрөгән кешегә, кәрәк нәмә ул. Тел-тештән, күҙ тейеүҙән, төрлө боҙомдан һаҡлай, йәнтәнеңдән сир-сорҙо ҡыуа. Был минән һиңә бүләк. Олатайыбыҙҙы ҙурлағаның өсөн!

Үлмәҫбикә инәй тағы һандығының төбөнән ниҙер эҙләй башланы, бер аҙ ҡаҙынғандан һуң унан һарғайып, ситтәре ыуалып бөткән бер бит ҡағыҙ килтереп сығарҙы ла бик ҡәҙерләп кенә алдыма һалды:

– Был – яуаплама. Быны миңә хәҙрәт олатай үҙ ҡулы менән яҙып бирҙе.

– Яуаплама? Нимә була ул яуаплама?

– Кеше үлгәс, бер ҡат уралған кәфене өҫтөнән түшенә һалына торған доға. Гүргә инеүсе теге донъяға барғас, шул яҙыу ярҙамында яуап бирә.

Мин, ат башындай алтынға юлыҡҡандай тулҡынланып, изге доғалыҡты ҡулыма алам.

– Йә Хоҙай! Хәҙрәттең үҙ ҡулы менән яҙылған яҙыуҙы тотоу, күреү бәхетенә лә ирештем дәһә, Аллама шөкөр!

– Яуаплама ҡырҡ бүлек, ҡырҡ бүлеккә ҡырҡ яуап, – тип Үлмәҫбикә инәй ҡасандыр хәҙрәт ауыҙынан ишеткән һүҙҙәрҙе ҡабатлап, унан бер аҙ уйланып ала ла бәйәнен дауам итә:

– 1964 йылдың йәйе ине. Ҡорбан байрамына бер нисә көн ҡалған. Байрам алдынан өйөн таҙалап, иҙәндәрен йыуып бирәйем әле тип әсәйемдең бер туған апаһы Өммөкамал инәйемдәргә килдем. Уның тормош иптәше Бикчурин Мөхәмәдиә – юл ҡараусыһы, өйҙәре, Баймаҡтан килгәндә, күпергә етмәҫтән һул яҡта ине.

Сәсән телле Үлмәҫбикә инәй, һәр әйткән һүҙен мәҡәл-әйтемдәр, лаҡаптар менән биҙәп, тәмләп-тәмләп оҙон хәтирәләргә төшөп китте.

– Мөхәмәдиә апам менән Өммөкамал инәйем икеһе лә бик дини кешеләр ине. Хәҙрәт олатай менән бер ҡашыҡтан ашап, бер-береһен ҡәҙер-хөрмәт итеп йәшәне, һөйләшеп һүҙе бөтмәҫ яҡын дуҫ, фекерҙәш булды улар. Юл ыңғайы булғанғамы әллә һүҙҙәре килешкәнгәме, Мөжәүир хәҙрәт уларға бик йыш туҡтап йөрөнө.

Бәйән итеүсе үҙ алдына кеткелдәп көлөп алды.

– Шулай, үҙем өй аҡлап йөрөйөм, үҙем, их, олатайҙы тағы бер күрәһе ине, тип уйлап йөрөйөм. Шул саҡ күҙемә әзбиз тамсыһы килеп сәсрәмәһенме! Услап тупраҡ һиптеләрме ни, күҙҙе асып та ҡарап булмай, ҡыра, әсеттерә. Бумаламды тотҡан көйө күҙемде йомғанмын да, ни эшләргә белмәй сүгәләгәнмен:

– Эх, хәҙрәт олатай килеп инһен ине, минең күҙҙәремде асыр ине, – тип теләйем.

Шул саҡ, әйтһәм әҙәм әкиәт тиер, ишек асылып китте лә һағынып көткән кешемдең:

– Әссәләмәғәләйкүм! – тигән көр тауышы ишетелде.

Үҙ ҡолағыма үҙем ышанмайым. Бына мөғжизә, исмаһам!

– Хәҙрәт олатай! – тип бышылдауым булды, ни ғилләменәндер күҙем дә асылды, ҡырыуы ла, әсетеүе лә баҫылды. Өҫтәлдән төшә һалдым да, оялып икенсе бүлмәгә боролдом.

– Үҙең саҡырып килтерҙең дә үҙең ҡасып бараһыңмы, алабарман? – ти олатай мут йылмайып.

Хәҙрәтте күреп тыштан килеп ингән Өммөкамал инәйемә:

– Баймаҡҡа тип сыҡҡайным. Бына, ҡыҙым саҡырып килтерҙе, мине күргеһе килгән, – ти, үҙе көлә.

Ул арала инәйем өлтөрәп табын әҙерләргә тотондо. Тиҙ булһын типтер, ахырыһы, сөгөндә ҡайнап ултырған һыуҙан һалып, самауыр торбаһына ҡуҙ төшөрҙө.

– Сәй эсеп китегеҙ, хәҙрәт!

Олатай һаман мәрәкәләүен ҡуймай:

– Ыҙалама, һыйлым, самауырың бөгөн барыбер ҡайнамаҫ, – ти. – Үҙем иҫән саҡта һеҙгә бынау яуапламаларҙы тапшырып ҡуяйым тигәйнем.

Олатай киндер тоҡсай эсендәге Ҡөрьән китабы араһынан ҡағыҙ биттәрен сығарып инәйемә, миңә, Мөхәмәдиә апама исемләп атап яҙған доға яуапламаларҙы таратып бирҙе.

– Ҡорҙашҡа сәләм әйтерһегеҙ, – тип беҙҙең менән ашығыс хушлашты. Сығып барғанда ул миңә ҡарап тағы мәрәкәләне:

– Шулай саҡырғылап тор, Үлмәҫбикә ҡыҙым, йәме. Мине онотма!

Хәҙрәтте ҡунаҡ итә алмауына эсе бошҡан инәйем:

– Самауыр ҡайнағандыр, ҡана, үҙебеҙ булһа ла ултырып сәй эсеп алайыҡ, – тип түрбаш яғына ингәйне, бот сабып кире килеп сыҡты:

– Бынағайыш, ғүмере булмағанды, эҫе һыу ҡойоп, тере күмер һалып тороп ҡуйған самауырым һып-һыуыҡсы. Торбалағы күмере янып бөтөүгә урғып сыға торғайны лаһа.

Мин инәйемдең һиҙенеү ҡеүәһе юҡлыҡҡа, быының ни бары хәҙрәттең сираттағы хикмәте булыуын аңламауына аҫтан ғына йылмайып ҡуйҙым. Ысынлап та, ул көндө беҙ самауырҙы ҡайната алманыҡ. Инәйем иртәгеһенә генә быының аңы-тоңона төшөндө:

– Кисә Мөжәүирҙең бер хикмәте булды шикелле, – тине лә көлә-көлә иртәнге сәй табынына өҫтәлгә боҫо борҡорап торған самауырын килтереп ултыртты.

Үлмәҫбикә инәй уғата кәйефләнеп, хәтер дәфтәренең яңынан-яңы биттәрен ҡтарырға тотондо.

## Хәҙрәт шишмәһе

– Олатай миңә кирамәттәрен күп күрһәтте ул, – тип һүҙен дауам итте Үлмәҫбикә инәй, тағы бер мөғжизәһен хәтерләп. – Миңә ҡоп-ҡоро ерҙән шишмә сығарып та күрһәткәне булды уның, – тип, ғәҙәтенсә, үҙ алдына кеткелдәп көлөп ҡуйҙы ла, ҡарашын алыҫҡа төбәп, сәсәниәбеҙ тағы хәтирәләргә керешеп китте.

– ...Бер шулай Мөжәүир хәҙрәт Мөхәмәдиә апамдарға килде лә, ат егеп алып, икәүләп Урғаҙаның уң яғындағы бесәнлектәрҙе ҡарап килергә тип ҡырға сығып киттеләр. Төш етеп килгәндә Өммөкамал инәйем миңә:

– Тегеләр асыҡҡандыр, бар әле, тамаҡ илтеп кил, – тине.

Мин инәйем әҙерләгән төйөнсөктө алдым да бесәнлеккә ҡарай йүгерҙем. Икеһенең дә саф һауала йөрөп билбау аҫты ныҡ ҡына бушаған булғандыр, ахырыһы, мине ҡыуанып ҡаршы алдылар.

– Кил әле, ҡыҙым, – тине хәҙрәт. – Хәҙер мин һиңә бер мөғжизә күрһәтәм. Аҙаҡ иҫләп кешеләргә ҡыҙыҡ итеп һөйләп йөрөрһөң.

Ултырған еренән ҡулы менән тигеҙ генә ерҙе һыйпаны-һыйпаны ла, Мөхәмәдиә апам менән минең күҙ алдында ер аҫтынан һыу сығарҙы. Бер аҙҙан баяғы һыу кескәй генә шишмәгә әүерелеп ағып та китте. Хәҙрәт башлап һыуҙа үҙе ҡулын йыуҙы, шунан беҙгә өндәште:

– Мөхәмәдиә ҡорҙаш, Үлмәҫбикә ҡыҙым, килегеҙ бында, мин сығарған һыуға һеҙ ҙә ҡулығыҙҙы йыуығыҙ, – тине ул мут йылмайып.

Шунан ул хәтфә үләнгә ашъяулыҡ түшәп, тамаҡ ялғарға ултырҙы. Ә мин һаман хәҙрәттең кирамәтенә хайран ҡалып, шишмә эргәһендә торҙом да торҙом, һыу ерҙең аҫтынан уҡ урғылып-урғылып сыға ла һөҙәк ерҙән аҫҡа тәгәрәй. Тырыша торғас, әҙме-күпме ваҡыт эсендә үҙенә үҙән дә ярып алды. Бына мөғжизә!

Аҙаҡ та мин был шишмәне йыл да килеп ҡарап йөрөнөм. Ул ҡороманы, моғайын, әле лә терелер. Инде нык ҡына ологайған Өммөкамал инәйемә килгән һайын Хәҙрәт шишмәһенән һыу барып алып бирә инем. Гел шул тирәлә колхоз малы тулып йөрөй торғайны, тапап шишмәне ҡоротторҙар инде, тип ҡайғырҙым. Ни хикмәт менәндер, малдар шишмәне урап үтер булды, йә етеп килгәндә икегә айырылды. Аҙаҡ шул шишмә эргәһендә бер яңғыҙ ҡайын баш ҡалҡытты. Инде уға ҡырҡ биш йыллап ваҡыт үтте, баяғы ҡайын да ҙурайҙы, бейек булып ҡапрайып үҫеп ултыра, әйтерһең, шишмәне ҡоро елдәрҙән, төрлө бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалаусы бер һаҡсы инде...

*Ҡәҙерғолова Үлмәҫбикә,*
1929 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Мөжәүир хәҙрәт

Лира Яҡшыбаева (ҡыҙ фамилияһы – Рәхимова) Сибайҙа йәшәй. Ғафури районының Сәйетбаба ауылы ҡыҙы ул. Уның «Мөжәүир хәҙрәт» тигән хеҙмәте художестволы китап булараҡ та, тикшеренеү, документаль хеҙмәт булараҡ та бик ҡиммәтле.

Мөжәүир хәҙрәтте бала саҡта миңә күрергә тура килде, әлхәмдү-лил-ләһи. Уның хаҡында легендалар һөйләй торғайнылар. Алйырап, иҫәрләнеп, тилереп ауырыған, бер кемгә лә баш бирмәгән дыуамал сир менән сирләгән кешеләрҙе Мөжәүир хәҙрәт өшкөрһә, ул кешеләр һауығып, ипкә килеп ҡайтып китә торғайны.

Тамағына аш үтмәй, ҡыл үңәс менән яфаланыусылар иһә Мөжәүир хәҙрәт менән бергә ултырып бишбармаҡ ашай һәм бәғзеләре һауыға, бәғзеләренең туғандарына хәҙрәт туранан-тура сирҙең ниндәй һөҙөмтә килтерәсәген әйтә торғайны.

Бер ваҡытта ла сирле кешенең өмөтөн өҙмәне ул, һәр саҡ иғтибарлы, ихтирамлы булды. Асыҡ күрә белеүе, дини мәғлүмәтлелеге лә уға оло шәхес дәрәжәһенә күтәрелеү форсатына өлгәшергә ярҙам итә, Аллаһтың бирмешенән. Советтар Союзының бөтә республикаларынан да, Украинанан да, Кавказдан да, Балтик буйы республикаларынан да, Урта Азия төбәктәренән дә килә торғайнылар уның янына. Берәүҙәр: «Сирҙән арынырға ярҙам итер, өшкөрөр, йә бетеү яҙып бирер», – тип килһә, бәғзеләре тикшереү, һынау өсөн килә. Һынарға, мәҙәк эҙләп килеүсегә туранан-тура әйтеп, кире бороп ебәреүсән була торғайны ул.

Мөжәүир хәҙрәттең Мөхәммәт исемле улы мәктәптә беҙҙән бер синыфҡа түбәнерәк уҡыны. Йәше буйынса ла бер йәшкә кесерәк ине ул. Әммә спортсы булараҡ, йүгерек булараҡ, бергә сығыш яһай инек. Йүгереү буйынса бик көслө ине уның улы.

Өлкән улы Варис ағай мәрхүмде күрергә, видеоға төшөрөргә насип булды миңә. Манһыр ауылында әле өс-дүрт ғаилә көн күрә. Әммә Мөжәүир хәҙрәттең рухы бөтә республикала ла балҡый төҫлө.

*Яшыдәүләтов Йәркәй,*
хажи, 1941 йылғы.
Өфө ҡалаһы

# Мөжәүир хәҙрәт тыуған ерҙә

## Манһыр ауылы ҡасан нигеҙләнгән?

Әйтеүе лә оят, әммә һуңғы ваҡытҡа тиклем беҙ район ауылдарының тарихы тураһында бер ни ҙә белмәнек. Ошо арҡала уларға нигеҙ һалыу айҡанлы юбилей көндәре лә билдәләнмәне. Был турала БДУ-ның тарих факультетында уҡып йөрөгән сағымда миңә ғилми етәксем – тарихсы Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров әсенеп һөйләгәйне. Был саҡта ул республика ауылдарының тарихы өҫтөндә эшләй ине. Хәҙер инде уның алты китабы донъя күрҙе. Икенсе китабы беҙҙең район ауылдары тарихына арналған.

Минең һорауым буйынса ул беҙҙең фамилияның нисек килеп сығыуын һәм Манһыр ауылына ҡасан нигеҙ һалыныуын асыҡланы.

Бөрйән волосының отставкалағы старшинаһы Әликаш Һөйөндөкөв Кинйәбулат Әликашевтың атаһы була. Ул старшиналыҡ иткән осорҙа ауыл уның исеме менән йөрөтөлә. Әликаш (1679–1755 йылдар) 1755 йылғы күтәрелештә ҡатнаша, Ырымбур төрмәһендә язалауҙарҙан үлә.

Уның улы Бикбулат XVIII быуат урталарынан волость старшинаһы була. Волосҡа карателдәр етеп килгәс, 1755 йылдың 22 майында Бикбулат «үҙенең гонаһын йәшереү өсөн» улар яғына сыға. Һорау алыу ваҡытында Бикбулатты «һуҙып һалып ҡамсы менән бер нисә тапҡыр һуҡтыралар» һәм оҙаҡламай ул алған яраларынан үлә. Уның ҡустыһы Кинйәбулат волость старшинаһы булып китә (бер үк ваҡытта



Йәмле Урғаҙа буйҙары

Түңгәүер волосының да старшинаһы булып һанала). Кинйәбулат – әүҙем пугачевсы, биш йөҙ кешенән торған баш күтәреүселәр отрядына етәкселек итә.

Ревизия материалдарында Кинйәбулаттың улдары, ейәндәре, бүләләре һанап кителә: өлкән улы Табынбай (1776 йылда тыуған), уның балалары – Фәйзулла (ә улыҡы – Фәтҡулла, Ғөбәйҙулла) һәм Сәйфулла (улыҡы – Рәхмәтулла). Кинйәбулаттың кесе улы указлы мулла Аралбай була, 1815 йылда Этҡол ауылына күсерелә. 1795 йылда Кинйәбулат ауылында алтмыш ете хужалыҡ булып 490 кеше йәшәй. Кинйәбулат ауылы хәҙер Буранбай исеме менән йөрөтөлә. Кинйәбулат кешеләре яңы ауылдарға нигеҙ һалған. 1812 йылда Урғаҙа буйындағы утар урынына 35 ғаилә Бәхтигәрәй тигән яңы ауылды нигеҙләй. Ул етмеш тығыҙ йәшлек Бәхтигәрәй Ҡасимовтың исеме менән йөрөтөлә. Уның улдары Хисбулла, Ғөбәйҙулла, Ирназар, Нурғәли, Иргәли (уның улы Байтүрә) була.

Был ауылды атаһы Бикбулат Әликашев үлгән йылда йорт старшинаһы Манһыр Бикбулатов исеме менән Манһыр тип тә

йөрөтәләр. Унының балалары – Сабит, аҙансы Хәмит, көтөүсе Хәмзә, Сәғит, Ғәббәс, старшина Ғәбит Манһыровтар. Кинйәбулаттың бер улы Аҙнабай ҙа ошо ауылға күсеп килә. Унының балалары – указлы мулла Ибакан (уныҡы – Ялалетдин, Хисаметдин, Сиразетдин) һәм Юлбарыҫ.

Ырымбур сик буйы комиссияһы Яйыҡ йылғаһы (1775 йылдан – Урал) аша сыҡҡан ҡаҙаҡтарҙы ошо ауылға ебәрә. Улар 12 йыл һәр төрлө һалым түләүҙән азат ителә. Улар araһында һуңыраҡ башҡа бөрйән ауылдарына күсерелгән Тәнәй, Тумас, Ямантай Туҡановтар, Бикташ Мунбаев, Бурһыҡ Дәүләтов була.

1834 йылда ауылдағы 71 хужалыҡта – 388, 1885 йылга 53 хужалыҡта – 344, 1920 йылда 88 йортта 50 кеше йәшәй. Хәҙер Манһырҙа ике генә ғаилә көн күрә.

*Сиражетдинова А.*

## Олатай ҡанаты аҫтында үҫтем

– Үҙем иҫ белгәндән ул яҡты донъянан киткәнсе гел олатайым эргәһендә булдым, – тип хәтерләй хәҙрәттең абыстайы Гөлйемештең (хәҙрәттең хәләл ефете) бер туған энеһе Байтүрә улы Йәнтүрә.

– Олатай бер ваҡытта ла Ҡөрьәнен ҡулынан төшөрмәне. Гел көйләп уҡый ҙа йөрөй торғайны. Хәҙер Ҡөрьән аштарында яттан уҡып йөрөгән байтаҡ сүрәләрҙе шунда ишетеп ятҡа бикләп алғанмын.

Хәҙрәт тураһында хәтерләүҙән Йәнтүрә ағайҙың, ҡарап тороуға ныҡлы, сабырлы күренгән ир кешенең, күҙҙәренә йәштәр килде:

– Үлем түшәгендә ята ине, янына килдем. Гөлйемеш инәйем: «Ана, яратҡан улың килде», – тине.

– Улым, риза бул! – Олатай һуңғы тапҡыр күргәнен белеп, ахырыһы, миңә үтә ҡараны.

– Мәңге йәшәр кеүек тойолған изге йәндең бәхилләшеүе күңелде тетрәндерҙе, – ти Йәнтүрә ағай. – Шуныһы йәл, һуңғы минуттарында эргәһендә була алманым. «Баймаҡтан Хөснөтдин ҡарттың әбейе Үәвилә килергә сыҡҡан, шуны Шүрәленән (был ауыл Баймаҡ юлында ята, икенсе исеме Фәйзулла) барып ҡаршы ал», – тип мине шунда ебәргәйнеләр. Кире әйләнеп килгәндә, хәҙрәт үткәйне инде. Эргәһенә уландары, ҡыҙҙары, яҡын туғандары йыйылған, һуңғы көнөнә тиклем эргәһенән китмәгән, хәҙрәтте бала урынына тәрбиәләгән бер туған ҡустыһы Бәхтейәр йәсин уҡый. Мин күҙ йәштәремә быуылып олатайҙың баш осона эйелдем:

– Бәхил бул, олатай! Урының йәннәт түрендә булһын. Изгелектәреңде мәңге онотмам.

– Һуңғы юлға оҙатырға килеүселәрҙең иҫәбе-һаны булманы, Манһыр тирәһе, һабантуйға йыйылғандай, халыҡ менән шығырым тулы булды, ҡайһы арала ишетеп-белеп өлгөргәндәрҙер. Былай йыйылыу яҡташтарҙың сикһеҙ һөйөүе, ихтирам билдәһе булды, – ти Йәнтүрә ағай. – Кешеләрҙе бераү ҙә саҡырманы, килергә ҡушылманы, улар шул арала әллә ҡайҙан белеп, үҙ ихтыяры менән, йөрәк ҡушыуы буйынса йыйылды.

Йәнтүрә ағай берсә илһамланып, берсә һағышланып, хәтирәләрен дауам итә:

– Э-й-й-й, хәҙрәт олатай һымаҡ кеше ҡайҙа?! Күңеле даръялай киң ине. Бөтә етем-еҫер уға һыйынды, уның ҡанаты аҫтында үҫте. Быны бер мин түгел, уны белгән һәр кем әйтер.

Беҙ бик оҙаҡ һөйләштек. Күңел түрендәге иң изге хәтирәләре яңырған Йәнтүрә ағай һалмаҡ ҡына уларҙы бер епкә теҙҙе лә теҙҙе:

– Кешегә ҡаты бәрелмәне, килгән-киткәндән тарһынманы. Асыҡ йөҙлө, йор һүҙле булды. Мәрәкәләп, шаяртып һөйләшергә яратты. Әйләнә-тирәһе гел кеше булыр ине. Уға инеп күренер өсөн ишек алдынан сират өҙөлмәне. Олатайыбыҙ кешеләрҙе, минең белеүемсә, фәҡәт «Ҡөрьән»дән сүрәләр уҡып дауаланы, өшкөрҙө, тыны килешә, ти торғайны килеүселәр. Ҡулынан «Ҡөрьән»ен төшөрмәне.

Бер килке уйланып ултырғандан Йәнтүрә ағай ниндәйҙер фекеренә йомғаҡ яһағандай, үҙ алдына ҡәтғи итеп тамаҡ ҡырып ҡуйҙы ла ошолай тине:

– Йылдар үткәс кенә шуны аңланым, олатай өсөн донъяла иң изге әйбер «Ҡөрьән» булған. Аҡ ҡына киндер тоҡсайына һалып, урап ҡына йөрөтөр, «Бисмиллә» итеп кенә тотор ине:

– Аслан тәһәрәтһеҙ көйө «Ҡөрьән»гә тейәһе булмағыҙ – гонаһ, – тип киҫәтә торғайны ул беҙҙе.

Үҙе хатта сәй эскәндә лә лупаһын тотоп китабын уҡып ултырыр, уҡығанын беҙгә аңлатып барыр ине. Бер унан ошолай тип һорай ҡуйҙым:

– Олатай, һин бит Ҡөрьәнде яттан беләһең, барыбер уҡый ҙа уҡыйһың, ниңә?

– Балам, ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, Ҡөрьән уҡыуҙан күҙ туймай. «Ятлап уҡыуға ҡарағанда, ҡарап уҡыуҙың сауабы ҙурыраҡ», – ти торғайны мәшһүр остазым Ғабдулла Сәиди, – тип яуап бирҙе ул етди итеп.

Бер шулай ҡырҙа емеш йыйып йөрөгәндә һорай ҡуйҙым:

– Олатай, кешеләр ни өсөн ауырый?

– Аллаһҡа ышанысын юғалтҡан өсөн ауырый, – тип башланы ул аңлатыуҙы. – Сөнки бөтә ауырыу ҙа Аллаһы Тәғәлә язаһы, уның кешене иҫкәртеүе – яуыз эш ҡылыуҙан туҡта, Хаҡ юлға – изгелек юлына баҫ, Хаҡ Тәғәләнең әйткәндәрен иҫеңә төшөр... Гонаһтан, яман ниәттәрҙән арын, күңелең, рухың изге булһын. Кеше тормошонда бер нәмә лә осраҡлы булмай, бөтәһе лә Аллаһтан. Кешеләр Хаҡ Тәғәләне ауырып киткәс, йә берәй бәләгә осрағас ҡына иҫенә төшөрә. Уның тураһында һау саҡта хәтерҙән сығармаҫҡа кәрәк. Сөнки кеше юғарынан, Хаҡ Тәғәләнән алған энергия менән йәшәй.

– Йәнә шул иҫемдә, – тип дауам итте Йәнтүрә ағай. – Байлыҡ ишәйгән һайын, рух ярлылана. Байҙарға һирәгерәк керегеҙ, был Аллаһы Тәғәләнең һеҙгә биргән ниғмәтен кәмһетмәүегеҙ булыр, ти торғайны. Йәнә мәсеткә йөрөүҙе хуп күрҙе:

– Мәсет – Аллаһ йорто. Унда ҡара көстәрҙең йоғонтоһонан, көнсөллөктән, рух төшөнкөлөгөнән һаҡлай торған илаһи ҡөҙрәт бар, – тине.

– Олатай дауалау өсөн шифалы үләндәрҙе, тамырҙарҙы киң ҡулланған, тиҙәр. Шул турала ни әйтерһегеҙ?

– Эйе, эйе, – тип һөйләп алып китте Йәнтүрә ағай. – Ул үләндәрҙе бик яҡшы белде. Йәй етһә, ҡырға йәйәүләп сығып китер, шифалы үлән-сәскәләрҙе күпләп йыйыр, киптереү хәстәрен күрер ине. Беҙ, бер төркөм малай-шалай, уның артынан эйәрәбеҙ. Яҙ башынан талғыр йыуаһын йыйып ашайбыҙ. Олатай уны, иң шифалы үлән, тип яратып ашай, бешкән ашҡа ла һала, ҡышҡылыҡҡа ла турап киптерә. Унан тыш, ул еләк-емеш йыйырға ла әүәҫ булды. Ҡыҙылъяр тигән

## Исме әғзәм доғаһы

دعاء اسم اعظم بودر

بسم الله الرحمن الرحيم

يا حميد يا الله يا قريب يا الله يا مجيب يا الله يا نجيب يا الله

يا رزاق يا الله يا معروف يا الله * يا عظيم يا الله يا لطيف يا الله
يا حنان يا الله * يا منان يا الله * يا ديان يا الله يا سلطان يا الله *
يا سبحان يا الله * يا مستعان يا الله * يا محسن يا الله * يا رحمن يا الله
يا الله * يا رحيم يا الله * يا كريم يا الله * يا مجيد يا الله *
يا حميد يا الله * يا حكيم يا الله * يا مقتدر يا الله * يا عليم يا الله *
يا غفور يا الله * يا غفار يا الله * يا مبدئ يا الله * يا قدير يا الله *
يا مجير يا الله * يا قديم يا الله * يا رافع يا الله * يا شكور يا الله *
يا لطيف يا الله * يا صابر يا الله * يا بصير يا الله * يا سميع يا الله *
يا اول يا الله * يا آخر يا الله * يا ظاهر يا الله * يا باطن يا الله *
يا وكيل يا الله * يا قدوس يا الله * يا سلام يا الله * يا مؤمن يا الله *
يا مهيمن يا الله * يا عزيز يا الله * يا جبار يا الله * يا خلاق يا الله *
يا بارئ يا الله * يا رزاق يا الله * يا عليم يا الله * يا علام يا الله
يا حي يا قيوم يا الله * يا قابض يا الله * يا باسط يا الله * يا معز
يا الله * يا مذل يا الله * يا قوي يا الله * يا مجيب يا الله * يا مانع يا الله *
يا حافظ يا الله * يا رافع يا الله * يا جميل يا الله * يا جليل يا الله *
يا مجيد يا الله * يا ذا الجلال والاكرام يا الله * يا حنان يا الله *

*(Башы. Дауамы 167-се биттә.)*

## Исме әгзәм догаhы

*(Дауамы. Башы 166-сы биттә.)*

سيد السادات يا الله * يا غياث المستغيثين يا الله * يا مجيب
الدعوات يا الله * يا منزل البركات يا الله * يا كافي الحسنات
يا الله * يا محو السيئات يا الله * يا رافع الدرجات يا الله *
يا قوي يا الله * يا مفتح الابواب يا الله * يا دائم يا الله * يا فرد
يا الله * يا وتر يا الله * يا احد يا الله * يا صمد يا الله * يا معبود يا الله
يا صادق الوعد يا الله * يا علي يا الله * يا شافي يا الله *
يا كافي يا الله * يا عافي يا الله * يا مستعان يا الله * يا متعالي يا الله *
يا هادي يا الله * يا قادر يا الله * يا قاهر يا الله * يا قهار يا الله *
يا فتاح يا الله * يا رب السموات والارض يا الله * يا ملا الملا يا الله
اللهم اني اسئلك بحق هذه الاسماء كلها ان تصلي على
محمد وعلى آل محمد وارحم محمدا وآل محمد كما صليت
وسلمت وباركت على ابراهيم وعلى آل ابراهيم في العالمين
ربنا انك حميد مجيد برحمتك يا ارحم الراحمين *
تابقای هرکم اوقمق کرک ثوابنی نازل ناموش نماز
یتی یوز رکعت

ерҙә, сабынлығынан өҫтәрәк, үҙе генә белгән еләклектәре, сейәлектәре булды. Сусаҡтау буйлап ҡыҙыл ҡарағат ишелеп үҫте. Урғаҙа буйында балан, ҡарағат уңыр ине. Бөтәһен дә бергәләшеп йыйып ала торғайныҡ. Ә көҙ етһә, шифалы тамырҙар ҡаҙып киптерергә тотона. Айырыуса, дегәнәк, андыҙ тамырҙарын маҡтаны ул. Ғөмүмән, беҙҙең олатай тәбиғәт балаһы ине.

– Ер беҙҙе тыуҙырған, ашата, йәшәтә. Ерҙең ҡәҙерен белегеҙ, уны яратығыҙ, һаҡлағыҙ! – тип өйрәтте ул беҙгә. Хәҙрәт өйрәткәндәрҙе беҙ ғүмер буйы тотоп йәшәнек, – тип был теманы йомғаҡлап ҡуйҙы ла, Йәнтүрә ағай икенсе хәтирәләргә, хәҙрәттең үҙен нисек үлемдән йолоп ҡалыуы тураһындағы иҫтәлектәргә күсте.

– Ун ике йәштәр тирәһе ине, күҙемде лә асып ҡарай алмаҫлыҡ булып ауырып йығылдым. Балнис юҡ. Насибулла ағайҙың арбаһына һалып мине Манһырға оҙаттылар. Мөжәүир олатайымдарға мине күтәреп индергәндәр. Урындыҡҡа иҫһеҙ ҡолағанмын. Тик бер аҙҙан, өшкөргәндән һуң ғына, аңыма килдем. Хәҙрәт ҙур йәйенке тәрилкәгә, бер буш ерен ҡалдырмайынса доға яҙҙы, шунан унда йылымыс һыу һалып, яҙыуы иҙелеп бөткәнсе тотто. Шул һыуҙы Гөлйемеш инәйем миңә әҙ-әҙләп, бөткәнсе эсерҙе. Йоҡлап киткәнмен, иртәнсәк тирләп килеп уяндым, хәл апаруҡ арыу. Иртәнге сәй эскәс, олатай тағы өшкөрҙө:

– Бирешмәҫһең, улым, бына күрерһең, үҙ аяғың менән йүгереп ҡайтып инерһең әле, бөгөнгө был өшкөрөүем бөтә ғүмереңә етерлек, ҡартайғансы ауырыу-сырхау күрмәй йәшәрһең, – тине ул арҡамдан тапап һөйөп.

– Олатайҙарҙа ун биш көнләп торҙом. Гөлйемеш инәйемдең шифалы үләндәрҙән яһалған тәмле сәйен эсеп, мунсаға инеп, тамам арыуланғас ҡына ҡайтырға рөхсәт бирҙе миңә олатай. Ысынлап та, 12 саҡрым араны йүгереп ҡайтып еттем һәм, ул күрәҙәлек иткәнсә, ошо йәшемә тиклем башҡаса бер ҙә ауырыманым. Алламдың биргәненә шөкөр, тим дә, әйләнгән һайын һоҡланғыс кешегә, ҡөҙрәтле табипҡа, илаһи

затҡа рәхмәт уҡыйым, – ти үҙе лә дин юлында йөрөгән, Ҡөрьән уҡыған Йәнтүрә ағай.

Шулай итеп, Йәнтүрә ағай хәтирәләренән, уны яҡындан белеп, күреп йөрөгән яҡын туғанынан, хәҙрәттең Ҡөрьәнде нисек ололауын, ҡайһы бер холоҡ-фиғелен белдек.

Беҙ был матур ғаилә менән бик йылы хушлаштыҡ.

*Иҙрисов Йәнтүрә,*
1924 йылғы.
Әбдрахман ауылы

## Хәҙрәт олатай беҙҙе никахланы

Манһыр ауылы ҡыҙы Миңлеямал менән Әбдрахман ауылы егете Йәнтүрә 1953 йылда ғаилә ҡорорға ҡарар итә. Никахты уларға Манһыр ауылы муллаһы Мөжәүир хәҙрәт уҡый. Илле йылдан ашыу бәхетле йәшәгән был матур ғаилә никах көнө һәм ятҡан хәҙрәттәре тураһында күңел түрендә иң яҡты хәтирәләр һаҡлай. Тиңһәлеп татыулыҡта, муллыҡта, имен-аман ғүмер итеүҙәренең сере – хәҙрәт фатихаһын алыуҙан, тип иҫәпләй улар. Етмәһә, тормош юлдашы Йәнтүрә хәҙрәттең абыстайы Гөлйемештең энеһе икән. Йәғни, атаһы Байтүрә менән Гөлйемеш абыстай бер туғандар.

– Хәҙрәт олатай беҙгә килергә яратты, – ти бәхетле ғаилә ағзалары. – Берәй яҡҡа китеп барышлай йәиһә ҡайтып килешләй ҙә юл ыңғайы тип, беҙгә инә һалып, хәл белешеп, аят уҡып сығыр ине. Фатихалы ҡол арымай, фатихаһыҙ ҡол йәремәй, тип ҡабатларға ятты ул. Үҙе фатиха биргән ғаиләнең тырышып донъя көтөүе, килененең уйынсыл, сәсән телле булыуы ла оло кешенең күңеленә хуш килгәндер, күрәһең.

– Балаларыбыҙға ла исемде үҙе ҡушты, – ти Миңлеямал апай, иң кесе улына исем ҡушҡандағы мәҙәктәрҙе хәтерләп көлөп ала:

– Был уғландың исем-шәрифтәре Имен булыр, – тип, ғәҙәтенсә, хәҙрәттең үҙе һайлаған исемде әйтеүе була, Миңлеямал: «Ҡайһылай ямаҡ исем, йүнлерәге табылманымы икән ни?» – тип уйлай. Шунда уҡ хәҙрәт:

– Имен тигән исемде һис тә ямаҡ тимә, килен, Имен... Именлек... Унан да матурыраҡ һүҙ булырмы? Ин шәәъ Аллаһ, улылыбыҙ зыян-әүрәт, бәлә-ҡаза күрмәй тыныс йәшәр, – ти.

Хәҙрәткә күңел түрендә сикһеҙ һөйөү һәм ихтирам һаҡлаған сәсәниә Миңлеямал үҙҙәренең алтын туйын үткәргәндә, рәхмәтен ошондай һүҙҙәр аша әйтеп бирҙе:

*Хәҙрәт олатай беҙҙе никахланы,*
*Фатихаһын бирен ҙурланы.*
*Бәрәкәтле ғүмер, бәхет теләп,*
*Хоҙайҙан ялбарып һораны.*
*Хәҙрәт олатай никахлағандарҙы*
*Хыҙыр Ильяс, тиҙәр, ҡурсалай.*
*Тормоштары түп-түңәрәк була,*
*Һәр бер эше була, ти, уңай.*
*Хаҡтыр. Гөрләп торҙо тормош,*
*Сәскә атты бәхет гөлөбөҙ,*
*Тырыш хеҙмәт, уйын-көлкө менән*
*Матур үтте һәр бер көнөбөҙ.*
*Алты бала – алты шатлығыбыҙ*
*Үҫте маҙрап йылы ҡосаҡта.*
*Алтын туйҙар насип итте Хоҙай –*
*Хәҙрәт фатихаһы һаман да.*

* * *

Мәғдәнгә бай ерҙәр таланттарға ла бай була, тигән юрауырым йәшәй халыҡ телендә. Хаҡтыр был юрау. Сөнки мәғдәнле Баймаҡ ере нәҡ шулай: аҙым һайын сәсәндәр, йырсылар, бейеүселәр, ижадсылар.

Ихлас дәртле халыҡ йәшәй был төбәктә. Мөжәүир хәҙрәттең ауылдашы Манһыр ауылы ҡыҙы Миңлеямал быға бер дәлил. Ул йырлай ҙа, бейей ҙә, тирә-яҡта сәсәнлеге менән дә дан алған, бар йәһәттән килгән талантлы ҡатын. Донъяһын да көтә, малын да аҫрай, иренә лә ярай, балаларына ла хәстәрле әсә, унан тыш, тегеү, сигеү, бешеренеү оҫтаһы. Ә иң мөһиме – ул ата-бабаларҙан ишеткән бәйет, мөнәжәт, дастан, таҡмаҡ, һамаҡ кеүек бик күп халыҡ ижады ынйыларын хәтерендә һаҡлай. Хәҙрәтебеҙ Мөжәүирҙең бынан

50–60 йылдар элек әйтеп йөрөгән мөнәжәте лә Миңлеямал апайҙың хәтер һандығында һаҡлана. Бына ул мөнәжәт:

*Әнтә Шәмси, әнтә Бәҙри,*
*Әнтә Нури, Фәүҡинур.*
*Әнтә лә шаһ йә Мөхәммәт,*
*Әнтә Мифтах, Хисхудур.*
*Китте әҙәм һәммәһе лә,*
*Китмәгәйсә ҡалмағай.*
*Был донъяны мәңге дейеп*
*Үйламағыҙ һеҙ, боғай.*

– Хәҙрәт олатайым ошо мөнәжәтте көйләй ҙә йөрөй торғайны, – тип хәтерләй Миңлеямал апай. – Уға атайым ҡушыла:

*Ожмахты Хаҡ яратты,*
*Бер йыласты бар итте.*
*Әттәхиәт исеме итте*
*Ушал ожмах эсендә.*

Халыҡ ижадын белеүҙән тыш, Миңлеямал апай үҙе лә шиғырҙар яҙа. Хис-тойғоға бай был ҡатынды яратып, «Сәсәниәбеҙ, тыуған еребеҙҙең былбыл ҡошо», – тип ҙурлап йөрөтә баймаҡтар. Ул ижадында үҙенең тыуған яғын, хәҙрәт йәшәгән төбәктең матурлығын данларға ярата.

*Ай-һай ғына тигән бер ҡырлас бар*
*Урғаҙаһынҡайҙың буйында.*
*Ауылҡайым аҫты һары алтын,*
*Ниндәй хазина юҡ ҡуйынында.*
*Урғаҙаһын буйы бигерәк йәмле,*
*Урғаҙаһын буйы тирәкле.*
*Урғаҙаһын буйы саҡ муйыллы,*
*Урғаҙаһын буйы еләкле.*
*Саҡ-суҡ тиеп кенә ҡош саҡыра*
*Урғаҙаһын буйы туғайҙа,*
*Донъялыҡта – дәүләт, Әхирәттә – йәннәт,*
*Манһыр кеүек гүзәл ер ҡайҙа!*

Сәсәниә үҙе менән: «Мин Манһыр ҡыҙы, – тип таныштырырға ярата. – Данлыҡлы Мөжәүир хәҙрәт йәшәгән ерҙә тыуғанмын, һоҡлангыс шәхесебеҙҙең исемен генә әйтһәм дә йөрәгемдә илаһи хис урғыла, күҙҙәремдән йәш атылып сыға. Уға булған һоҡланыуым, рәхмәтем, ихтирамым сикһеҙ, – ти ул. – Еребеҙгә ошондай аҫыл затты ебәргәне өсөн Аллаһы Тәғәләмә мең-мең рәхмәт! Уның серен, мөғжизәләрен өйрәнергә лә өйрәнергә кәрәк!»

*Иҙрисова Миңлеямал*,
1931 йылғы.
Баймаҡ районы, Әбдрахман ауылы.

## Олатайымды бик яраттым

Мөжәүир хәҙрәт тураһында хәтер һандығында иң күп иҫтәлектәр һаҡлаусы бер туған ҡустыһы Бәхтейәрҙең улы Зәйнулла ағай ине.

– Өс йәшлек кенә сағымдан олатайымды иҫләйем, – ти ул. – Гүр эйәһе булғансыға тиклемге уның бөтә тормошо минең күҙ алдымда үтте. Ул мине үҙе менән күсер итеп алырға яратты. Юлда төрлө мажараларын да күрһәтеп алғылай. Күбеһенсә көлөп-шаярып һөйләшер ине. Бик ярата торғайным олатайымды. Уның һымаҡ изге күңелле кеше һирәктер.

Зәйнулла ағай һөйләгән хәтирәнең бер-нисәһен китапҡа индерҙек.

### Ағас танк

1939 йылдың ҡышы. Өс йәшлек сағым. (Өс йәштәгене әле лә хәтерләйем.) Ни сәбәптәндер, ике күҙҙән дә яҙып, бер ни күрмәй ултырам. Атайым ҡайҙалыр йөрөп ҡайта ла беҙгә һүҙ ҡушҡыһы ла килмәй күңелһеҙләнеп ултыра. Ә бер көндө әйтте:

– Ағайымды иртәгә Баймаҡтан Йылайыр төрмәһенә алып китәләр.

Бер аҙ торғас өҫтәне:

– Һаман беҙҙе ҡайғырта. Зәйнулла улымды һораша. Өрйәңы бер уйынсыҡ алып килергә ҡушып ҡайтарҙы.

Атайым магазиндан бер ағас танк һатып алып, шуны олатайға алып барҙы.

– Ошо уйынсыҡ менән уйнаһа, Зәйнулла улымдың күҙҙәре асылыр, – тигән әүлиә олатайым. Күрәһең, ул ағас танкыны өшкөрөп биргән.

Олатайҙы иртәгеһен алып китәсәктәр. Атайым да, башҡа туғандар ҙа уға бер нисек тә ярҙам итә алмауҙарына ҡайғыралар.

– Башҡаға шәп, әллә ниңә ошо тотҡонлоҡтан үҙен ҡотолдора алманы, – тип көйөнә атайым.

Ә мин ағас танкыны өс көн уйнатҡайным, күҙем асылды.

– Олатайыңдың кирамәте, – тине атайым. – Аллаһ бирһә, бер нисә айҙан имен-аман әйләнеп тә ҡайтыр, буш кеше түгел әле.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә олатайҙың тотҡонлоҡтан иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын теләнек.

### Калуш

Олатай төрмәнән, Аллаға шөкөр, иҫән-һау йөрөп ҡайтты. Бер аҙҙан күргән аҙаптары ла артта ҡалды. Ул тағы элекке фиғеленә ҡайтып, шаян, мәрәкәсел булып китте.

Бер шулай ҡайҙалыр китеп барабыҙ. Мин, гәҙәттәгесә, күсерҙәмен. Олатайым:

– Ай, улым, бер калушым төшөп ҡалған бит, – тип аяғына төртөп күрһәтә. Мин арбанан төшә һалып килгән яҡҡа йүгерәм. Әҙерәк барһам, алдымда еҙ ҡыңғырау ята. Был бит табыш! Юлдағы ҡыңғырауҙы алып кире йүгереп киләм. Олатай рәхәтләнеп көлә:

– Улым, калуш ни аяҡта булған ул, – ти. – Күрмәгәйнеңме ни? Ҡыңғырауыңды анау мөстән ҡуңыр танаҡайығыҙҙың муйынына тағырһың инде...

### Рамаҙан Йәнбәков

Олатайым йыр яратты. Ауыҙ эсенән генә көйләй ҙә йөрөй торғайны. Манһырҙан һигеҙ саҡрымда ятҡан Байыш ауылында шәп йырсы егет бар – Рамаҙан Йәнбәков. Аҙаҡ ул Өфөлә уҡый башланы. Ауылына ҡайтҡан саҡтарҙа юлы

Манһыр аша үтә торғайны. Олатайға инмәй китмәй. Иң тәүҙә асығып, йонсоп килгән студентты һәйбәтләп һыйлайҙар. Шунан олатай уны эргәһенә ултыртып ала ла арҡаһынан ҡағып:

– Йә, йырла әле, Рамаҙан улым! – ти. – «Төйәләҫ»те һиңә еткереп йырлаусы булмаҫ та инде!

Әүлиә һынлы әүлиә үҙе үтенгәс, Рамаҙан ялындырып тормай, өҙҙөрөп йырлап та ебәрә. Институт тамамлағас, биология уҡытыусыһы булырға тейешле егеттең һоҡланғыс йырҙарын тыңлап ултыра-ултыра ла, олатайым былай тип кәңәш бирә:

– Улым, уҡытыусы булып теләгән һәр кем эшләй ала. Һин йырсы булырға тейешһең! Аллаһы Тәғәлә үҙеңә һирәк осрар моң биргән. Талантты ҡәҙерләү фарыз. Беҙҙең ошо мәғдәнле Ирәндек буйҙары тыуҙырған мөғжизә бит ул һинең тауыш. Уны аслан тәләфләргә ярамаҫ!

Рамаҙан ағай хәҙрәт әйткәнде тоттомо, әллә үҙе шулай хәл иттеме, бөтә ғүмерен йыр сәнғәтенә бағышланы. Илдә халҡыбыҙ йырын башҡарыусыларҙың иң мәшһүре булып дан алды. Олатайымдың да иң яратҡан йырсыһы булып ҡалды ул.

### Хажиәхмәт Унасов

Был тарихты миңә атайым мәрхүм һөйләгәйне. Хажиәхмәт Унасов аҡтарға ла, ҡыҙылдарға ла ҡарамаған, тик башҡорт халҡының мәнфәғәтен генә күҙәткән, уның азатлығы өсөн көрәшкән милли герой кимәлендәге яугир була. Сығышы – Байыш ауылынан. 1919 йыл. Бына шул Унасов ике мең ғәскәр менән Манһыр аша Ғәли ауылына үтеп бара. Олатайҙың шәп ҡара айғыры була. Унасов үҙе теймәҫ ине, охранаһы ҡуймай. Атты менеп тә алалар.

– Үпкәләмә, Мөжәүир ағай, – ти командир. – Һинең әүлиәлегеңде беләм. Берәй аҙнанан айғырыңды кире саҡырып алырһың, һарайыңа үҙе ҡайтып инер. Ә ҡустыларыңа теймәйем.

– Улаҡ үҙәгендә йөрөгән бер өйөр йылҡыны һеҙгә бирәм,

изге юлда йөрөйһөгөҙ, әйҙә, алығыҙ. Атһыҙ яугир – ҡанатһыҙ ҡош.

– Рәхмәт, Мөжәүир ағай!

– Әхмәтзәкиебеҙ ни хәлдә? – тип һорай хәҙрәт. – Темәстә йыйынға әҙерләнә тиҙәр. Ҡасан була? Башҡорт мәркәз шураһының эше нисек бара?

– Йыйын тураһында һеҙгә хәбәр итерҙәр, хәҙрәт. Бөтә хеҙмәткәрҙәрҙе, нәшриәт менән матбуғатты Темәскә күсерҙек. Башҡорттар нык тора.

Ул ниндәй йыйын булғандыр, олатайым Темәскә барып йөрөп ҡайтты. Ике ҡустыһын ат ҡараусы, күсер итеп алып, өс көн буйы йөрөп, күңеле күтәрелеп ҡайта. Ә яратҡан теге ҡара айғырын, ысынлап та, ни ғилләә менәндер кире ҡайтарып ала. Байыштан сыҡҡан милли яугир тураһында ла олатайым үҙ фекерен әйтә:

– Унасов Хажиәхмәт – халҡыбыҙға бирелгән кеше, тик белеме самалы. Шул арҡала яңылышлыҡтар ебәрә. Киләсәк быуын уны барыбер ҙурлап иҫкә аласаҡ!

**Ғәбделварис Сиражетдинов**

Атайым мәрхүм һөйләп ҡалдырғайны:

– 1925 йылда Өммөгөлсөм еңгәйҙән улы тыуғас, ағайым бик шатланды. Минең вариҫым булып ҡалһын тип, исемде Ғәбделварис тип ҡуша. Ҡорбан итеп өс баш һарыҡ салдыра, бөтә ауылды саҡырып ҡунаҡ итә.

– Ғәбделварис ағай, ысынлап та, олатайҙың лайыҡлы вариҫы булды, – тип әйтер ине атайым. – Ата-баба төйәгенә хужа булып, Манһыр тирәһен ҡәҙерләп һаҡланы. Килгән туған-тыумасаны ҡаршы алып, ҡәҙер итеп торҙо. Ҡулы ҡотло булды, мал-тыуары уңды.

– Ғәбделварис ағайымды олатайым эргәһендә ерләнеләр, – тине Зәйнулла ағай. – Теге донъяла йәндәре осрашып, аталы-уллы бергәләп йөрөйҙәрҙер, ин шәәъ Аллаһ.

## Ат башындай алтын

Баймаҡтың 1-се һанлы мәктәбе артында бейек ҡом тауы булды. Олатайым эргәһенән үткән һайын, ошо отвал аҫтында ат башындай алтын ята, ти торғайны. Минең үҫмер саҡ, белгәс, ниңә ҡаҙып алмайбыҙ икән, тип уйлайым. Әллә әүлиә олатайым әйткәнде ишетеп, әллә үҙҙәре белеп, ул тауҙы 1957–1958 йылдарҙа ҡаҙҙылар. Ысынлап та, бөтә сыҡҡан алтынды бергә йыйғас, дәүмәле бер ат башындай булған икән, тинеләр. Аҙаҡ, тау урынында ҡотһоҙ бер күл ятып ҡалғас, олатайым үкенгәндәй итте, ер-һыуҙы әрһеҙләтергә ярамай, тигән фекерҙе гел әйтер булды. Ғалим, әүлиә булараҡ, ҡайҙа нимә ятҡанын белһә лә, башҡаса әйтеп йөрөмәне.

*Сиражетдинов Зәйнулла*,
1936 йылғы.
Баймаҡ ҡалаһы

# Мөжәүир әүлиә

Халҡыбыҙҙың исемдәре ташҡа баҫылып мәңгеләштерелгән күренекле шәхестәре, арҙаҡлы ир-уҙамандары, шөкөр, бихисап. Киң мәғлүмәт саралары уларҙы үҙ ваҡытында иҫкә алып, төрлө юлдар менән ҡайта-ҡайта халыҡ хәтерендә яңыртып һәм яҡтыртып тора.

Ә бер ниндәй махсус хәтерләүһеҙ ҙә исеме телдән төшмәгән, ил менән юҡһынып, өҙөлөп һағынған аҫыл заттар була. Әүлиәлеге, аҡыл ҡеүәһе менән әҙәм балаһының тән сирен генә түгел, йән сирен дә сихәтләндерерү һәләтенә эйә Мөжәүир хәҙрәт тап шундайҙар рәтенә инә.

Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улы (1876–1967) егерменсе быуаттың 67 йылын йәшәп, 91 йәшендә донъя ҡуя. Ул Баймаҡ районының «Йылайыр» совхозына ҡараған Манһыр ауылында ғүмер итә. Изге эштәре менән үҙенә үҙе һәйкәл ҡуйып, тыуған ауылы эргәһендәге зыяратта ерләнә.

Кешенең нимә уйлағанын үтә күргән, фекерен уҡый алған әүлиә-хәҙрәт тылсым көсө, төрлө кирамәттәре менән һәр кемде хайран иткән. Хәҙерге ваҡытта уның мөғжизәле серҙәрен өйрәнеп, асырға самалап ҡараусылар ҙа бар, тиҙәр. Тик булдыра алырҙармы, хәҙергә билдәһеҙ. Халыҡ, дин әһелдәре хәҙрәттең илаһи көсөн Хоҙай Тәғәлә тарафынан ебәрелгән изге ҡөҙрәт тип ышана.

Миңә инде исеме күптән легендаға әүерелгән тылсым эйәһен күреп белеү бәхете теймәне. Әммә, ниңәлер, нәҡ миңә уның тураһында яҙырға насип булды. Бәлки, уның рухы үҙе



Яҙыусы, автор Лира Яҡшыбаева Мөжәүир хәҙрәттең бер туған ҡустыһы Теүәлбайҙың ҡыҙы Кәримова Хәҙисә инәй менән

быны теләгәндер? Сибай яҡтарында заманында уның менән ҡатнашып, аралашып йәшәүселәр, туған-тыумасаһы, күҙ күрешкәндәре бик күп. Улар менән яҡындан аралашып, Мөжәүир хәҙрәт тураһында ниндәй юғары фекерҙә булыуҙарын аңланым. Нисек уны бөтәһе лә һағынып-һағынып хәтерләйҙәр!

– Дәү, мыҡты кәүҙәле, аҡ сырайлы, эс-бауырында ниҙәр ятҡанын үтә күрерҙәй үткер ҡарашлы, йәшкелт-көрән күҙле ине, – тиҙәр.

Холоҡ-фиғелен дә белеп кенә ҡылыҡһырлайҙар. Мәҫәлән, Йылайыр совхозында йәшәүсе Зәкиә апай уның тураһында бына нимә ти:

– Йор һүҙле, әңгәмәсел. Зирәк аҡыллы, изге күңелле, ярҙамсыл. Оҫта табип-имсе үҙен үҙе аямай хеҙмәт итеүе менән һәр кемде үҙенә арбаны. Ярҙамға, кәңәшкә мохтаждар, сырхау-хәстәләр уға магнитҡа тартылғандай тартыла ине.

Улы Мөхәммәт һөйләй:

– Атайыма кеше күп килде. Алыҫ тарафтарҙан, Себерҙән,

Мәскәү һымаҡ ҙур ҡалаларҙан килеүселәр була торғайны. Улар ауыл эргәһенән аҡҡан Урғаҙа буйына теҙелеп китер, икешәр-өсәр көнләп сират көтөр ине, – тип хәтерләй. – Ул милләтенә, диненә ҡарамай, кешене байға, ярлыға айырмай, һис кемде ярҙамынан мәхрүм итмәне. Бары эскеселәрҙе, тәмәке тартыусыларҙы үҙһенмәне. Сирлененң үҙен күрмәҫ элек үк кемдең көтөп тороуын, ни уйлап килеүен белеп ултырҙы. Ауырыуҙарҙы ул башына аҡ сәллә урап, ап-аҡ кейем кейеп ҡаршылай торғайны. Ҡулынан Ҡөрьән китабын, тиҫбеһен төшөрмәне, һәр килеүсегә иғтибарлы, итәғәтле булды.

– Анау йәш, имсәкле ҡатынды сиратһыҙ индерегеҙ әле, балаһы йонсоп китте, – тип ҡайһы берәүҙәрҙе үҙе йәлләп саҡыртҡан, үҙенең туған-тыумаса, күҙ күргәндәрен дә ҡай саҡ саҡыртып килтерткән.

– Сирендең шашыуын көтәһеңме? Ана, башҡалар мине ҡайҙан ҡайҙа эҙләп килә. Ә һеҙ йөрөйһөгөҙ, – тип әрләп тә алғылаған. «Йылайыр» совхозында йәшәгән Байназарова Зәкиә апайҙың ныҡ ҡына ауырып йөрөүен белеп, шулай итеп үҙе саҡырып алып имләп һауыҡтырған. Әлеге көндә лә Зәкиә апай имен-аман «Йылайыр» совхозында йәшәп ята, ураған һайын хәҙрәт олатай рухына аяттар уҡытып тора. Бынан 39 йыл элек гүр эйәһе булған хәҙрәткә халыҡ бөгөн дә алҡышланып рәхмәт уҡый. Хаҡ мосолмандар Аллаһы Тәғәләнең ҡашҡаһы Мөжәүир әүлиә рухына тәүге аяттарын бағышлай, һуҡырҙарҙың – күҙен, телһеҙҙәрҙең телен асҡан изге йәнде ғәрештәргә күтәреп данлай. Ин шәәъ Аллаһ, эшләгән изге эштәре менән ул быға лайыҡ.

Дауаханаларҙа байтаҡ ятып, төрлө табиптар тарафынан оҙайлы дауаланып та быума сирле ейәнен һауыҡтыра алмаған Һөйәрбикә әбей:

– Ә-ә-ә-әй, Мөжәүир хәҙрәтебеҙ тере булһасы! – тип өҙгөләнә. – Зар-интизар булып килеүсе ауырыуға бер ихласлап өшкөрөүе етер ине!

– Эйе лә баһа, – тип күршеһенең фекерен күтәрмәләй һикһәнде үткән Әсҡәпъямал инәй һәм шунда уҡ үҙ башынан үткән әҙәм ышанмаҫ бер хәлде нисәнсе ҡабат инде, йәнә иҫенә төшөрә.

– Һуғыш йылдары ине. Беҙҙе, йәп-йәш ҡыҙҙарҙы, урман эшенә ҡыуҙылар, – тип башлай ул һүҙен. – Эргәбеҙҙә, исмаһам, бер ир заты юҡ. Йән-фарман тырышып эшләйбеҙ. Йәш кенә бер ҡатынды ағас ҡолап имгәткәс, бөтәбеҙҙең дә эсе бошто.

Бер көндө бригадир эргәмә килде лә:

– Ошоларҙы ҡырҡ, – тине һәм теҙелеп кенә үҫкән өс һомғол аҡ ҡайынға төртөп күрһәтте. Ниңәлер матурҡайҙарҙы харап итергә йәлләнем, ҡулым барманы. Ҡарап торҙом-торҙом да арыраҡ барып, икенсе ағастарҙы йыҡмаҡсы булдым. Бригадир ҡатын күреп ҡалды ла шунда уҡ артымдан килеп тә етте. Уҫал итеп:

– Ниңә әйткәнде тыңламайһың ул? Хәҙер үк ҡушҡанды эшлә, – тип екерҙе. Ни хәл итәһең, кире килеп, әйткәнен үтәргә тура килде. Өсөнсө ағасты йыҡҡанда, ни сәбәптәндер, бер ни белмәй иҫһеҙ ҡолағанмын. Бер килке иҫәңгерәп ятҡандан һуң күҙҙәремде астым. Туҡмалғандағы кеүек бөтә тән һыҙлай, баш ауырта. Ни булғанын һис аңламайым. Эс бошоуға сыҙай алмай һулҡылдап-һулҡылдап иланым да, эшләрлек хәлем булмағас, ҡайтып киттем.

Йылдар үтте. Урман ҡырҡҡандағы ул хәл күптән онотолдо. Тормошҡа сыҡтым. Өс улым, ике ҡыҙым тыуҙы. Улдарым ҡайындай һомғол буйлы, ап-аҡ йөҙлө, бөҙрә сәсле булып, ғәҙәти булмаған матурлыҡтары менән һәр кемде ғәжәпләндереп үҫеп етте. Әммә өсөһө лә лә бер иш дөм һаңғырау, шыпа телһеҙ ине. Уларҙы йәлләмәгән әҙәм булманы. Бер саҡ оло йәштәрҙәге ир кеше:

– Улдарыңды Мөжәүир хәҙрәткә күрһәтер кәрәк, – тине. – Уның көсө-ҡөҙрәте етмәгән хәстә юҡ.

Йыйындым-төйнәлдем дә, улдарымды алып, юлға сыҡтым. Хәҙрәт беҙҙе көтөп торғандай, ҡапҡа тышында ҡаршылаy. Шунда уҡ эргәләге йылға аша сығарып, тәпәшерәк таш ҡойма менән уратылған ергә алып килде.

Туҡтағас, әйтте:

– Һин, ҡыҙым, әле йәп-йәш кенә сағыңда эйәле өс ҡайынды ҡырҡҡан икәнһең, – тине.

– Эйе, эйе, булды, – тим, – бригадир ирекһеҙләп ҡырҡтырҙы. – Теге ғәжәп хәлде һөйләп бирҙем.

– Шуның шауҡымы тейеп, улдарың телһеҙ, һаңғырау булған, – тине күрәҙәсе.

Һауыҡтыра алһа ярар ине, тигән уйымды һиҙеп, яуап биргәндәй әйтте:

– Ҡурҡма, әсә, ҡурҡма. Улдарыңа һөйләшеү, ишетеү ҡеүәһен ҡайтарып булыр, ин шәәъ Аллаһ.

Өшкөрөү, имләү оҙаҡ ҡына барҙы. Ниһайәт, хәҙрәт иркен тын алды:

– Ин шәәъ Аллаһ, хәсис мәлғүндәрҙе еңдек, – тине маңлай тирен һөртөп. Үҙе күҙҙәре яҡтырып киткән егеттәргә ҡарап өндәште:

– Ә-ә-ә, ишетәһегеҙме? Ағаслыҡта ҡоштар һайрай, шулаймы?

Бәхетле әсәгә ҡарап өҫтәне:

– Тиҙҙән телдәре лә асылыр, һөйләшә лә башларҙар. Тик, ҡыҙым, әҙерәк сабыр ит, ашыҡма.

Ҡыуанысының иге-сиге булмаған Әсҡәпъямал инәй бөгөн дә әүлиәгә алҡышланып рәхмәт әйтә, намаҙ уҡыған һайын рухына аят бағышлай.

– Мин һөйләгәндәргә ышанмайынса, экиәт тиеүселәр ҙә бар. Ни хәл итәһең? Мөжәүир хәҙрәт экиәти заттан ине шул, – тип һүҙен йомғаҡлай балаларынан ҡәҙер-хөрмәт күреп ҡәнәғәт йәшәгән Әсҡәпъямал инәй.

Эйе, ниндәй генә илаһи заттар килеп китмәгән был ергә? Күптәренең исемдәре лә һаҡланмаған. Уларҙың аҡылдары – халыҡ аҡылына, хәтерҙәре халыҡ хәтеренә әүерелгән. Юғары трибуналарҙан да ҡысҡырып һөйләнелмәгән, ташҡа ла баҫтырылмаған, хатта телдән дә әйтелмәгән нәғеҙ аҡыл, юғары аң быуындан быуынға күсә. Был – әүлиәләр, әмбиәләр, хәҙрәттәр хазинаһы. Улар төпкөл аңға (подсознание) әүерелеп, беҙҙе оҙата бара.

Манһырҙан һигеҙ саҡрым аралыҡта ятҡан Байыш ауылы эргәһендә археологтар боронғо ҙур ҡала тапҡан. Тиҙҙән уны ҡаҙыу эштәре башланасаҡ. Манһыр тирәһе – заповедникка, өйө йорт-музейға әйләндереләсәк. Мөжәүир тыумаҫ борон уҡ һалынған ҡомартҡы мәсетте тергеҙеү күҙ уңында тотола. Был мөғжизә түгелме ни? Тимәк, әүлиә-хәҙрәттең күҙ ҡараһындай

һаҡларға васыят иткән Ҡыңғырташты, Яугүл күле, ауыл тирәһендәге ҡыр-яландар һәм башҡа урындар ҡәҙерләп һаҡланасаҡ. Минеңсә, Мөжәүир хәҙрәт менән шул боронғо ҡала табылыуы араһында хәҙер ябай аң менән аңлап етмәслек ниндәйҙер бер мөғжизәле бәйләнеш ята һымаҡ.

Мин элек-электән ошо серғә сорналған шәхес тураһында һөйләгәндәрҙе йотлоғоп тыңларға яраттым. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ хәтирәләрҙе күңелемә һеңдереп йөрөй торғас, ябай, шул уҡ ваҡытта бөйөк тә булған оло шәхесте һағыныу, яратыу хисе ҡулыма ҡәләм тотторҙо, һәм күңелем ҡушыуы буйынса «Мөжәүир хәҙрәт» тигән повесты яҙҙым. Был әҫәр үҙнәшер юлы менән донъя күрҙе һәм, Аллаһҡа шөкөр, бер кемде битараф ҡалдырманы. Аҙым һайын рәхмәт һүҙҙәрен ишетәм. Айырыуса уны күреп белеүселәр шатлана:

– Эргәһендә йөрөп бөтәһен дә үҙ күҙе менән күргән һымаҡ яҙған да ҡуйған бит әле, – тиҙәр.

– Йылдар үтеү менән онотолор ине. Ана, Байым ишан тураһында халыҡ бер ни белмәй. Ташҡа баҫтырып, хәҙрәтебеҙҙең исемен мәңгеләштерҙең.

– Хәҙрәттең исеме онотолорға тейеш түгел!

Тәүге китапҡа ошондай баһа миндә артабан хәтирәләрҙе йыйып яҙыу теләге уятты. Дөрөҫөн әйткәндә, халыҡ теләге, кешеләрҙең үтенесе, эскерһеҙ ярҙамы менән яҙылды был китап. Мине тағы шул ғәжәпләндерҙе, һәр кем берәй хәтирә һөйләп ҡалырға ашыға, һәр кем уның тураһында яҡты иҫтәлек һаҡлай, һәр кем уны һағына, ярата. Был бик һирәк күренеш, тик ысын изге йәндәр өлөшөнә тейер оло бәхет.

Хәҙрәт ғали йәнәптәре Аллаһы Тәғәләнең ҡашҡаһы! Йәнең ожмахтан осоп килһә, ошо тиклем халыҡтың һөйөүен, һине һағыныуҙарын күреп, моғайын, ҡыуанып ҡайталыр, һинең йәшәйешең – беҙгә яҡшылыҡ, изгелек өлгөһө. Урының гел ожмах түрендә булһын. Был меңәрләгән халыҡ теләге.

*Яҡшыбаева Аира*,
яҙыусы

## Әүлиә олатайым хаҡында

Мин Кәримова (Сиражетдинова) Хәҙисә Теүәлбай ҡыҙы булам. Ҡартатайым – Сиражетдинов Уйылдан. Уның 6 балаһы булған: Мортаза, Мөжәүир, Теүәлбай, Бәхтийәр, Аллаяр, Мөьминә. Мортаза олатайым менән минең атайым Теүәлбай Беренсе Донъя һуғышында ҡатнашып, Николай батша ҡолатылғас ҡына иҫән-һау әйләнеп ҡайталар.

Ә Мөжәүир олатайым бәләкәйҙән дини ғилемлеккә ынтылған. Ауыл мәсетендә уҡып бөткәс, Баймаҡ янындағы Иҙелбай тигән ауылда уҡыуын дауам иткән. Атайым менән Мөжәүир олатайым ауыл мәсетенә бергә йөрөгәндәр. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа мәсеткә ялан аяҡ барғандар, юлда нык өшөй башлаһалар, аяҡтарын тире тундарының салғыйына урап йылытып алыр булғандар. Уларҙың ғаиләләре мохтажлыҡта йәшәгән, әммә улар тырышып уҡыған.

Әсәйем мәрхүмә һөйләгән бер хәтирә иҫемдән сыҡмай. Мөжәүир олатайымды 6–7 йәшлек сағында бер көн малайҙар туҡмай башлағандар. Ҡартәсәйем күреп ҡалып, йүгереп урамға сыҡҡан да: «Уй Алла, хәлфәмде әрәм итәләр инде», – тип ҡурсалаған. Апһындары: «Ул ниндәй хәлфә булһын инде», – тип көлгәндәр. Ысынында, әсәнең күңеле дөрөҫ һиҙенгән булып сыға. Олатайым үҙ заманының әүлиәһе булып китә.

Мөжәүир олатайым байтаҡ ваҡытын беҙгә, балаларына бүлә торғайны. Эш эшләтһә «эшеңде кеше күрмәй ҡалһын», тип тиҙ генә эшләтә торғайны. Ул үҙе лә бик эшсән кеше булды.

Тағы ла олатайым иртә яҙҙан, ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән, тауға алып сығып, тамыр йыуаһы менән һыйланырға ҡуша ине. «Ашағыҙ, дауа бит ул, ә һеҙ дарыу үләндәрен белмәй, тапап йөрөйһөгөҙ», – ти торғайны.

Олатайым күп кешеләрҙе дауаланы. Ихлас ышанып килгәндәр, юлда уҡ, килеп еткәнсе йүнәлгәндәр. Кирамәтлектәре булыуын мин ишетеп беләм. Күптәр ваҡытында хайран ҡалып һөйләйҙәр ине.

...Колхозлашыу осоронда уның арпа сәскән баҫыуын һөрмәй тракторсы уратып һөрөп йөрөй икән. Тракторы ҡапыл һүнеп, тик ултырғас: «Олатай, һинең ереңде лә һөрөп бирәм», – тип ялбарған. Шунан ғына эшләп киткән тракторы.

Олатайымды 1939 йылдың йәйендә 10 йылға төрмәгә ултырталар. Ни өсөн ултыртыуҙарының сәбәбен мин асыҡ белмәйем. Әммә камераның бикләнгән йоҙағы һәр ваҡыт кире асылып тороуы төрмә хеҙмәткәрҙәрен ныҡ ғәжәпләндергәнен ишетеп беләм. Төрмәнән ул 1943 йылдың көҙөндә ҡайтты. Ниндәйҙер бер ҙур етәксенең ҡатынының аяғын имләп аяҡҡа баҫтырғаны өсөн иртә сығарғандар, тип һөйләнеләр. Олатайым бик абруйлы кеше булды, һәм бөгөнгө көндә лә уны онотмауҙары, Манһырҙа мәсеттең тергеҙелеүе, ауылдың, зыяраттың төҙөкләнә барыуы туғандарым һәм минең өсөн ҙур ҡыуаныс.

*Кәримова Хәҙисә,*
1931 йылғы.
Баймаҡ районы, Байыш ауылы

## Кирамәт

Беҙҙең ғаиләлә мәшһүр ғилем эйәһе тураһында күп кенә хәтирәләр һаҡлана. Әсәйем, Зөһрә Шәйшәриф ҡыҙы, хәҙрәт олатайҙы бик ярата, йыл да барып хәйер биреп, күренеп ҡайтмаһа, күңеле булмай торғайны.

Мин 3-сө класта, һеңлем Миңзәлә 1-селә уҡып йөрөйбөҙ. Әсәйебеҙ йәнә Манһырға барырға йыйынды. Көтмәгәндә Миңзәлә һеңлем сумкаһынан ҡулъяулыҡҡа төрөлгән бер нәмә алды ла сығып китергә торған әсәйемә һондо:

– Хәҙрәт олатайға хәйергә тип аҡса йыйғайным, шуны бирерһең әле.

Әсәйем төйөнсөктө сисеп ҡараны ла:

– Бында ни гел бер, ике тинлектәр ҙәһә, һинең ул 12 тинеңә хатта бер булка икмәк тә килмәй, – тине.

– Әтеү олатайға нимә бүләк итәйем һуң? – тип һеңлем илар сиккә етеп, танауын мыш-мыш тарта ла башланы.

– Ярар, ярар, бирермен, илама, ҡыҙым, – тине әсәйем уны тынысландырып һәм ҡулына алдан әҙерләп ҡуйған юл моҡсайын алды. Манһырға барып ҡайтҡас, хайран ҡалып, әсәйем беҙгә ошоларҙы һөйләне.

– Өшкөрөлөп бөтөп, сығайым тип кейенеп торғанда, үҙенән-үҙе кесәмдән иҙәнгә сылтырап тинлектәр ҡойола башланы. Ҡараһам, Миңзәлә ҡыҙым биреп ебәргән аҡса. Был хәлгә шаҡ ҡатып, хәҙрәткә ҡарайым. Ул рәхәтләнеп көлә:

– Ҡыҙымдың ебәргән бүләген бирергә оноттоң бит, Зөһрә һылыу, – ти. – Бала бит өмөтләнеп көтөп тора. Аманатҡа хыянат итергә аслан ярамай.

Хәҙрәт ябай ун ике тинде ун ике алтын тәңкәләй күреп кеҫәһенә һалып алды ла ултырып тороп доға ҡылды.

– Был ҡыҙың бик бәхетле булыр, ин шәәъ Аллаһ.

Әсәйем һөйләгәндә ниҙер уйланып ултырган һеңлем һорай ҡуйҙы:

– Әсәй, ә һин хәҙрәткә ҡайһы ваҡытта ингәйнең?

– Төштән һуң, – тип яуап бирҙе әсәйем һеңләмә һораулы ҡарап.

– Мәктәптән ҡайтып килгәндә бер ҡыҙыҡ булды. – Һеңлем тағы уйланды. – Бер аҡ һаҡаллы, һөйкөмлө генә ҡарт йылмайып ҡаршыбыҙға килеп сыҡты ла:

– Рәхмәт, балам, ин шәәъ Аллаһ, бәхетле булырһың, һәйбәт уҡырһың, – тип башымдан һыйпаны, арҡамдан һөйҙө, төштән һуң ине. Әстәғ, беҙҙең Темәстә быңдай бабай булғаны юҡ та инде, тип уйланым да баяғы ят кешене танырга тип артыма боролоп ҡараным, унда бер кем дә күренмәне. Эргәмдән килгән класташым Зиләнән һорайым:

– Әле осраган бабайҙы таныныңмы? – тим.

– Ниндәй бабай? – ти Зилә.

– Һуң әле генә осраны, минең арҡамдан һөйҙө.

– Кит юҡты, мин бер ниндәй ҙә бабайҙы күрмәнемсе. – Үҙенең күҙе шарҙай булды. – Күҙеңә күренгәндер.

– Юҡ, күрҙем! – тип еңешәм һаман. Зилә, мине ҡалдырып, йүгереп ҡайтты ла китте.

Һеңлем илай яҙып беҙгә лә иҫбатларга тырышты:

– Күргәс күрҙем инде, бына ап-асыҡ итеп күрҙем.

Был һөйләшеүҙе тыңлап бөткәс, әсәйем уйсан ғына итеп әйтеп ҡуйҙы:

– Был хәҙрәт олатайҙың беҙгә күрһәткән кирамәте. Изге кеше юлыңда осрағас, тормошоңдан уңырһың, бәхетле булырһың, балам!

Ысынлап та, Миңзәлә һеңлем уҡыуҙа ла ал бирмәне, ирҙән дә уңды, тормошо ла етеш. Уның өсөн шатланып, бөтәбеҙ ҙә хәҙрәткә рәхмәт уҡыйбыҙ:

– Һеңлебеҙгә хәҙрәттең фатихаһы төштө! – тибеҙ. – Урыны йәннәттең түрендә булһын олатайыбыҙҙың!

*Ишбулатова Мәзүнә,*
1956 йылгы.
Сибай ҡалаһы

# Урҙаң төбө йүнәлгәндер инде

Инде тукһанын ваклаған, һуңғы бер нисә йыл эсендә егерме бер тапкыр Ҡөрьән сыкҡан Зәйнәп инәйҙәргә ҡасан барма, ҡулына лупа тотоп, Ҡөрьән уҡып ултырыр.

Аллаһына ғына табынып йәшәгән ихлас мөслимәнең ерҙә йәшәгән йәки йәшәп киткәндәр араһынан иң хөрмәт иткән кешеһе – Мөжәүир хәҙрәт. Әүлиәнең һәр әйткән һүҙе, мәңгелек рухи хазина булып, уның күңел түрендә ҡәҙерләп һаҡлана. Ниндәй генә иҫтәлектәр юҡ улар араһында.

Мөжәүир хәҙрәт менән Зәйнәп инәйҙең ҡарты Мәхмүтов Мөхәммәтзәки ағай бер-береһе менән яҡындан аралашып, ҡатнашып йәшәгәндәр. Улар икәүләп оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултырыр булғандар.

Мөжәүир хәҙрәт гел генә: «Кеше өсөн иң файҙалы ғәмәл – Ҡөрьән уҡыу һәм намаҙ», – тип ҡабатлай торған булған. Быга ҡағылышлы мәсьәләләрҙе һәр ерҙә әйтеп, өйрәтеп йөрөр булған.

Изге әүлиәгә бәйле хәтирәләрҙең һәр бер һүҙе уғата мөһим икәненә инанған Зәйнәп абыстай, уны яҡындан белеп күргән кеше буларак, иҫенә төшкәндәрҙең бөтәһен бәйнә-бәйнә һөйләп ҡалдырыуҙы үҙенең мөҡәддәс бурысы һанай. Бөгөн ул минең менән олатайҙың Ҡөрьән уҡыуға бәйле хәтирәләре менән уртаҡлашты.

– Мөжәүир хәҙрәт менән ҡартым һөйләшеп ултыра, мин тыңлай йөрөйөм, – ти инәй.

Шул фекер алышыуҙа ишеткәндәрҙән бер шәлкем.

...Бер бәндә (мосолман) Ҡөрьән Кәримде тулыһынса уҡып сыҡһа, алтмыш мең фәрештә уның өсөн Аллаһы Тәғәләнән шәфәғәт һорар. Ҡөрьән һис шөбһәһеҙ Аллаһының зияфат табыны (ҡунаҡ һыйы). Уның ҡәҙерен белегеҙ, көсөгөҙҙән килгәнсә унан файҙаланырға ынтылығыҙ.

«Әл-Бәҡарә» (Һыйыр) сүрәһен гел уҡыған кешенең башына йәннәттә таж кейҙерәләр, ти.

Мөхәммәтзәки ағай хәҙрәткә һәр төрлө хөрмәт үә ихтирам күрһәтер булған. Уны бөйөктәрҙән дә бөйөк шәхес тип иҫәпләгән. Уның менән ултырҙаш булыуын ҙур дәрәжәгә һанаған. Хәҙрәттең һәр әйткән һүҙен, ҡомға һеңгән һыу кеүек, улар әбей-бабайҙар күңеленә һеңдерер булғандар.

* * *

– Фазила апаһының ейәнсәре икәнемде белгәс, олатайымдың һөйләшеп һүҙе бөтмәне, – тине Зәйнәп инәй. – «Минең апайым һымаҡ кеше ҡайҙа! Унан өшкөртөр өсөн ат етер ерҙән килә торғайнылар. Кешенең ни уйлап килерен алдан белеп, әйтеп ултырыр ине, мәрхүмә», – тип өләсәйемде ул ҙурлап, маҡтап хәтерләне.

Зәйнәп инәй бик ихлас кеше булып сыҡты. Ул хәҙрәт тураһында белгәндәрен барлап, бер епкә теҙеп китте.

– 1957 йыл, хәҙрәткә 81 йәш тирәһе. Ҡарт булһа ла әле ныҡ көйө. Төҫө-башы ла таушалмаған. Уны күршебеҙ Ғәйдислам ағайҙар саҡырҙы. Олатайға йәмәғәтем Әхмәтзәкиҙе күрһәтеп ҡалырға булдым. Уң ҡулы йоҡлап торғансы ғына һалбырап төштө лә ҡуйҙы. Врачтарға йөрөттөк, берәү асыҡлап ни икәнен әйтә алманы. Хәҙер бөтә өмөт олатайҙа. Тиҙ генә һарыҡ һуйҙырып аш һалып ебәрҙем дә күршеләргә индем. Ике бүлмә туп-тулы кеше, хәҙрәтте сират тотоп көтәләр. Инеп, инде ни эшләргә, кеше күп бит әле, тип ишек төбөнә һөйәлдем дә торам. Хәҙрәтте үҙенә тәғәйенләп килергә сыҡҡан кешенең кем икәнен, ни уйлап килеүен белә тиҙәр, бәлки, минең үҙен көтөп торғанды белер әле. Фазила апайымдың ейәне, тип саҡырып алыр. Ошолай тип уйлап та бөтмәнем, олатайымдың миңә өндәшкән тауышы ла ишетелде:

– Ни йомош, ҡыҙым? Ин әле бында, Зәйнәп ҡыҙым.

– Өйөбөҙгә алып ҡайтайым тип килдем, – тинем.

Ике бүлмә тулы кеше, беҙ ҙә көтөп ултырабыҙ бит, тип гөж итеп ҡалды.

– Фазила апайымдың ейәненә бармай хәлем юҡ. Бәләкәй сағымда мин унан күп һабаҡ алдым, асыҡҡан саҡтарымда тамағымды туйҙырҙы.

Ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, инергә вәғәҙә биреп ҡалды.

Олатайым әйткән һүҙендә торҙо, төшкөлөккә беҙгә инде. Ашап-эсеп алғас, Әхмәтзәки кейәүен ҡарап өшкөрҙө лә: «Боронго ҡәбер булған ергә ҡолаған, ин шәәъ Аллаһ, йүнәлер», – тине. Ысынлап та, шул көнө үк иҫһеҙ бармаҡтар әкренләп ҡыбырлай башланы. Бер аҙҙан, бөтә ауыл кешеләрен хайран итеп, мәңге ыҡҡа килмәҫтәй һалбырап төшкән ҡул да хәрәкәткә килде.

– Врачтар күпме булышып, йүнәлтә алмағайны. Хәҙрәт бер өшкөрөүҙән, ауырыуҙы һыпырып алып ташланы, – тине был хәлде үҙ күҙе менән күргән барса халыҡ.

Ҡартымдың күҙенә ҡан һауып, күҙенең ағы ҡып-ҡыҙыл була ла ҡуя торғайны. Уны ла олатай имләне. Тоҙ өшкөрөп бирҙе лә ҡайнаған һыуға һалып иретергә, аҙаҡ, һыуығас, шуны күҙгә тамсылап тамыҙырға ҡушты. Был имләү шул тиклем килеште, бер аҙҙан ике күҙенең дә ағы ап-аҡ булып ҡалды.

Шунда ҡартым: «Ай, хәҙрәтебеҙ йәшәһен! – тине. – Мин дә уның юлынан барасаҡмын», – тип ныҡлап дин юлына баҫты, Ҡөрьән уҡый башланы. Олоғайған көнөндә кәрәк кешегә яуапламалар, доғалар яҙып биреп ултырҙы, яҙыуы матур тип һоҡланмаған кеше булманы.

– Хәҙрәттең име килеште, ул булмаһа, уң ҡулһыҙ ҡала инем, – тип бөтә кешегә Аллаһ ризалығы өсөн доға яҙып биреп ултырҙы.

Мөжәүир хәҙрәттең апаһы Фазила инәйҙең ейәнсәре Зәйнәп абыстайҙың хәләл ефете Мәхмүтов Әхмәтзәки ағайҙың үҙ ҡулы менән яҙған Йән һаҡлау доғаһын үҙебеҙҙең китапта бирергә булдыҡ.

– Был доғаның әйтелеш, төҙөлөш тәртибен миңә хәҙрәт олатай үҙе өйрәтте, – тип әйтә торған булған ул кешеләргә биргәндә. – Һыналған доға. Уны шоферҙар алып йөрөтһә, юлда бәлә-ҡазаһыҙ йөрөр, һалдаттар үҙе менән хеҙмәт иткән

ренә алып китһә, имен-аман әйләнеп ҡайтыр, уны үҙе менән йөрөткән кеше бәлә-ҡазаһыҙ йөрөр.

...Хәйбуллин Мөхәмәтшәрифкә һуғышҡа киткәндә әсәһе Гөлгәйшә ошо доғаны биреп ебәргән. Бер ҡаты һуғышта һалдаттар күпләп һәләк була, ә Мөхәмәтшәриф хатта яраланмай ҙа. Ул имен-аман Берлинға барып етә. Әҙәм балаһының бит мәһая торған ҡылығы бар. Мөхәмәтшәриф тә мин үҙем шәпмен, тип хис итә башлай, доғалы бетеүҙе үҙе менән алырға ҡыйынһына башлай. Әсәһенән: «Бетеүеңде ҡалдырма, һаҡлап ҡына йөрөт», — тигән хат килгәс, көлөп ҡуя ла бер яҙыҡ һүҙ әйтә:

— Ғүмерең бөтһә, бетеү генә ярҙам итә алмаҫ.

Һалдат шул көфөр уйлаған көндө үк яраланып госпиталгә эләгә. Ярай, бәхетенә бетеүе эргәһендә була. Немецтар госпиталь бинаһын бомбаға тота. Бина емерелә, ә Мөхәмәтшәриф иҫән ҡала. Ул быға ғүмере буйы хайран ҡала. Ни ғилләә менән тере ҡалды ул. Иҫән-һау илгә әйләнеп ҡайта. Совет заманы. Бетеү, доға кеүек һүҙҙәрҙе ишетһәләр, әллә быныҡ аҡылына зыян килгәнме, тип көлөүҙәренән ҡурҡып, был турала ул кешегә һөйләмәй, серен иң яҡын туғандарына ғына әйтә:

— Мин ошо доға арҡаһында иҫән-һау ҡайттым, — ти.

Беҙҙең китапты уҡыусыларҙы ла олатай бетеүе бәлә-ҡазаларҙан аралар, эштәрендә, ғаиләләрендә уңыштар насип итер, сәфәр сыҡҡан саҡтарҙа юлдарында Хыҙыр Ильяс булып оҙатып йөрөр, ин шәәъ Аллаһ, тигән өмөт менән баҫып сығарырға булдыҡ.

Зәйнәп инәй — хәҙрәттең төрлө кирамәттәре, хикмәттәре тураһында бөтмәҫ-төкәнмәҫ торғаны бер хәтирәләр һандығы ине. Бына шул һандыҡ хазиналарынан береһе.

Мөжәүир хәҙрәт Баймаҡҡа бара, дуҫы ҡаршы ала. Атай кеше улына хәҙрәттең атын һуғарып килергә ҡуша. Ғәйзулла тигән малай, күрәһең, тиҫкәрерәк холоҡло булғандыр:

— Атайым шул хәҙрәт өсөн үлә яҙа. Уның тураһында шаштырып һөйләгәндәре әллә ысын, әллә буш, — тип уйлай, һыу буйынан ҡайтҡас, уны һынап ҡарамаҡсы булып, хәйләле план ҡора. Атты һуғарып кире ҡайтҡанда Ғәйзулла күр-

мәғәнен күрә: йә ҡолағы төбөнән зыйлап пулялар үтеп китә, йә ҡаршыһына бүре өйөрө килеп сыға, йә алдында киң йылға пәйҙә була. Малай хитлана-хитлана саҡ ҡайтып инә. Хәҙрәт уны көлөп ҡаршы ала:

– Шунан, балам, атты һуғарғанда нимәләр күрҙең?

Шунан Ғәйзулла уйлай: «Әһә, баяғы хәлдәр олатайҙың хикмәттәре булған икән!»

– Йәмәғәтем Әхмәтзәки менән олатайым бик дуҫ булды, көндәр буйы төрлө фәлсәфәүи хәлдәр тураһында һөйләшеп ултыра торғайнылар. Улар икәүләп шәреҡ суфыйҙарының шиғырҙарын уҡырға яратты. Әл-Ғазали, Дже-лаль-эд-Дин Руми, Низами, Хаканий, Омар Хаям кеүек шағирҙарҙың исемдәрен телгә ала, фәлсәфәүи әҫәрҙәрен бик юғары баһалай, уларҙы бөйөк аҡыл эйәләре тип һанай, шиғырҙарының айырым куплеттарын яттан һөйләй торғайнылар, – ти Зәйнәп инәй. Күрәһең, инәйҙең үҙенең дә хәтере бик һәйбәттер, улар уҡығанда иҫләп ҡалғайным, тип бер шиғыр ҙа һөйләп күрһәтте:

*Мөмкин түгел быға яуап тапмаҡ:*
*Изге заттан нимә тыуа мөртәт?*
*Атаһының изгелеген мираҫ итеп,*
*Алып ҡалмай мөртәт хатта саҡ-саҡ!*

– Ҡартым менән икеһе ғилем донъяһына инеп китеп серләшерҙәр ине, – тип дауам итте инәй. – Рух, худур, силсилә, суфый, сер ғилеме, мөрит, мөршид, тәриҡәт, әбжәт, зекер һымаҡ миңә аңлайышһыҙ ят һүҙҙәрҙе ҡулланып, көндәр буйы гәпләшеүҙәрен хәҙер һағынып һөйләргә генә ҡалды. «Әхмәтзәки менән һөйләшһәң, күңел асылып ҡала», – тиер ине олатай. Урыҡ-һурыҡ ишеткәндәрҙән олатайҙың суфыйҙарҙы ихтирам итеүен, яратыуын аңланым. – Әүлиәләр, суфыйҙар Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө бәндәләре, беҙ шулар бәрәкәтендә йәшәйбеҙ, – ти ине ул. Улар күҙ тейеү, нәфрәт, сихыр һымаҡ кире күренештәрҙе бөтөрөү юлдары, был донъяла аҡылдың мең алтын булыуы тураһында ла һөйләшерҙәр ине. Олатайҙың бер ҡатынды: «Һин, ҡыҙым, күңел ҡаралығынан күҙеккәнһең», – тип өшкөрөүе, үҙемдең, күңел

## Йән һаҡлау доғалары

أعوذ بالله من الشيطان الرجيم بسم الله الرحمن الرحيم
اللهم بارد على علتنا و دفع منا بارلياء يا رحو تتيلة ارحم لتيلة و شفع
تتيلة و ان الله ايضا من فذ شوبر وصلى الله على محمد و آله و صحبه
اجمعين اطهرنا انا تائبينا و سلم تسليم كثير الله اكبر الله اكبر الله اكبر الله اكبر
يا الله يا الله يا رحمن يا رحمن يا رحمن يا رحيم يا رحيم يا رحيم يا احد
يا احد يا احد يا حميد يا حميد يا حميد يا صمد يا صمد يا صمد يا فرد يا فرد يا فرد
لا حول ولا قوة الا بالله العلي العظيم يا دائم يا فرد يا ذا الجلال والاكرام وصلى
الله وعلى آله وصحبه اجمعين. أعوذ بالله سميعول عليم من الشيطان
الرجيم أعوذ بالله سميعول عليم من الشيطان الرجيم ●

أعوذ بالله من الشيطان الرجيم بسم الله الرحمن الرحيم
اللهم رب ابراهيم وجبرائيل و ميكائيل واسرافيل وعزرائيل وابراهيم
و اسماعيل واسحاق و يعقوب و منزل بركات و منزل التورات و لا
نجيل الزبور و فرقان و لا حول و لا قوة الا بالله العلي العظيم لا اله الا هو
الملك الحق المبين محمد رسول الله صادق الوعد مبين ان الله هو الرزاق ذوا
القوة المتين يا الله يا الله يا الله يا رب يا رب يا رب يا حي قيوم يا ذا الجلال و ا
لاكرام اسئلك العظيم ان ترزقني رزقا حلالا طيبا برحمتك يا ارحم
الراحمين بحاه كلينا مرنوش دبرنوش سادنوش كفشططيوش قطمير ●

*(Башы. Дауамы 195-се биттә.)*

## Йән һаҡлау доғалары

*(Дауамы. Башы 194-се биттә.)*

أَعُوذُ بِاللّٰهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ
اَللّٰهُ لَا إِلٰهَ إِلَّا هُوَ الْحَيُّ الْقَيُّومُ لَا تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلَا نَوْمٌ لَهُ مَا فِي السَّمٰوَاتِ وَمَا
فِي الْأَرْضِ مَنْ ذَا الَّذِي يَشْفَعُ عِنْدَهُ إِلَّا بِإِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ أَيْدِيهِمْ وَمَا
خَلْفَهُمْ وَلَا يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِنْ عِلْمِهِ إِلَّا بِمَا شَاءَ وَسِعَ كُرْسِيُّهُ
السَّمٰوَاتِ وَالْأَرْضَ وَلَا يَؤُودُهُ حِفْظُهُمَا وَهُوَ الْعَلِيُّ الْعَظِيمُ ۞

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ
بِسْمِ اللّٰهِ مَا شَاءَ اللّٰهُ لَا حَوْلَ وَلَا قُوَّةَ إِلَّا بِاللّٰهِ
بِسْمِ اللّٰهِ مَا شَاءَ اللّٰهُ وَلَا يَسُوقُ الْخَيْرَ إِلَّا اللّٰهُ
كُلُّ نِعْمَةٍ فَمِنَ اللّٰهِ. بِسْمِ اللّٰهِ مَا شَاءَ اللّٰهُ لَا يَكْشِفُ السُّوءَ إِلَّا اللّٰهُ
بِسْمِ اللّٰهِ مَا شَاءَ اللّٰهُ لَا يَصْرِفُ السُّوءَ إِلَّا اللّٰهُ
بِسْمِ اللّٰهِ مَا شَاءَ اللّٰهُ الْخَيْرُ كُلُّهُ بِيَدِ اللّٰهِ ۞

дә ҡара буламы икән ни, тип ғәжәпләнгәнем иҫтә ҡалған.

– Эйе, олатайыбыҙҙың күңеле саф, йөрәге һиҙгер ине! – тип был әле һөйләгәндәргә йомғаҡ яһағандай итте Зәйнәп инәй. – Үҙенә төбәп өшкөртөргә тип сыҡҡан кешене белеп ултырҙы. Ҡайһы берен юлда килгәндә үк өшкөрөп йүнәлткән. Теге кеше килгәс: «Ана, шул ерҙә ауырыуың төшөп ҡалды. Унан ҡайтма, икенсе юлдан ҡайт», – тип бүтән юлдан ҡайтырға ҡуша торған булған. Шуға күрә лә инде ҡояш байығанда олатай ҡәберенең өҫтөндә факел булып нур балҡып тора икән, тип һөйләйҙәр, изге урын тип барып Ҡөрьән уҡыйҙар.

Инәйҙең хәтирәләре көнө-төнө һөйләһә лә бөтөрлөк түгел ине. Тағы бер ҡыҙығын ғына тыңлағыҙсы, тип тылсымсының яңы бер мәрәкәһен башланы.

– Ауылдашыбыҙ Мәймүнә апай ауырып китә. Тиҙ генә хәҙрәткә бара һалып өшкөртөп, башына бетеү яҙҙырып ала. Бер аҙ тағып йөрөгәс, башының ауыртыуы бөтә. Мәймүнә апай уны сисеп, юғалып ҡуймаһын тип, урҙаның төбөнә бәйләп ҡуя. (Урҙа – борон өйҙөң бер мөйөшөнә әйбер элер өсөн ҡулайлаштырып тағып ҡуйылған бау.) Бер аҙҙан Мәймүнә апай тағы ауырып китә. Йәнә хәҙрәткә бара.

– Ауырырһың шул, – тип мәрәкәләй уны әүлиә. Яңы бетеү яҙып биреп тормай, әйтә:

– Урҙаң төбө йүнәлгәндер инде, ҡасандан бирле тора, шуны кире алып таҡ! – тигән дә ҡайтарған. Шунан Мәймүнә апай үҙенең бетеүҙе урҙа төбөнә бәйләп ҡуйыуын иҫенә төшөргән. Ҡайтып килеп бетеүен тағып ебәргән икән, шунда уҡ баш ауыртыуы ебәргән.

Зәйнәп инәй тағы күп нәмәләрҙе хәтерләне: Латифа инәйгә Мөжәүир хәҙрәттең, миңә килгән ауырыуҙарҙы сәй эсереп ултырма, тип әйтеүен дә, Фатима менән Фәйрүзәнең күҙгөһөн олатайҙың ҡәбер өҫтөндәге ергә төшкән һары япраҡтарҙы йыйып алып ҡайтып, бер мөйөшкә элеп ҡуйыуын, шул алып ҡайтҡан япраҡтарҙың төнөн кыштырлашыуын, Фәйзулла менән Манһыр ауылы араһында һыйыр дәүмәллек алтын ятыуын, кем уны тота йәки күрә, үлеүен һөйләне. Сағыу хәтирәләрҙең бер нисәһен тулыһынса биреүҙе кәрәк таптыҡ.

* * *

Был хәлде Зәйнәп абыстайға Фатима тигән ҡатын һөйләгән.

Фатима дауаханала ятҡан. Баймаҡ яҡтарының йолаға әйләнгән ғәҙәте буйынса, Олатай тураһында һөйләшеү башланып киткән. Палатала Катя тигән бер рус әбейе лә булған. «Мөжәүир хәҙрәт» тигән исемде ишеткәс, теге мәрйәнең ҡолағы ҡарп итеп ҡалған:

– Ой, прости меня Господи, прости Мансурский мулла, – тип тиҙ-тиҙ генә суҡына башлаған. Ҡөрьәндән «Фатиха» сүрәһен уҡый һалған. Ҡурҡҡан кеше кеүек тирә-яғына алан-йолан ҡаранып ҡуйған. Тик шунан ғына һүҙгә ҡушылып киткән.

– Я знаю его, знаю. Он Мансуровский святой. Мы были у него, – тип һөйләй башлаған.

Был хәл 1967 йылдың яҙы була. Катяларҙың берҙән-бер яңғыҙ ҡыҙы ҡаты ауырып китә. Дауах括аларҙа ятып сыға бала, хәле арыуланмай. Шифаханаларҙа дауалана, аптырағас, халыҡ табиптарына, бағымсыларға күрһәтеп ҡарайҙар. Йөрөтмәгән ерҙәре ҡалмай. Береһенең дә файҙаһы теймәй. Бер танышы тәҡдим итә:

– Манһырҙа шәп мулла йәшәй, шуға алып бар.

Ҡыҙҙарын ире менән бергәләп былар Манһырға алып киләләр.

Йәше туҡһандан уҙған, ҡартайып, кәрһеҙләнгән Олатай ауырып ятҡан була. Шуға ҡарамаҫтан, рус ҡатыны хәҙрәт эргәһенә барып, ҡыҙының аянысла хәлен һөйләп бирә. Хәлһеҙләнгән, үлем түшәгендә көнөн һанап ятҡан хәҙрәт ҡатындың һөйләгәнен тыңламағандай, күҙҙәрен йомоп, ойоп ятҡан. Быны күреп, ҡыҙҙың атаһы, рустарҙың гәҙәтенсә, ҡаты итеп һүгенгән дә:

– Не видишь что ли, он ничеге не понимает, он умирать собрался, – тигән. Былар сығырға торғанда олатай күҙҙәрен асҡан да эргәһенә әбейен саҡырып:

– Әбей, кәштәнән анау бетеүҙе алып бирсе әле, – тигән. Гөлйемеш абыстай ҡыҙҙың әсәһенә бетеүҙе нисек тағып йөрөргә кәрәклекте аңлатып биргән дә:

— Урғаҙа аша сығып ҡайтығыҙ, — тип юл өйрәткән.

Хәҙрәттең өйөнә терәлеп аҡҡан йылға аша сығып, тирә-яғына ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, Урғаҙа буйы туп-тулы ҡарағат, ҡып-ҡыҙыл булып бешкән ҡурай еләктәре, ти. Былар туҡтап бешкән емештәрҙе ашай башлаған. Шул саҡ, көтмәгәндә, шар-аяҙ көндә, килеүселәрҙе хайран итеп, йылға буйына ап-аҡ булып томан төшә. Былар өсөһө өс яҡҡа китеп, бер-береһен күрмәй, аҙашалар. Ҡысҡырып ҡарайҙар, бер-береһен ишетмәйҙәр. Шул саҡ Катя иренең олатайға ҡарата илтифатһыҙ ҡыланышын, һүгенеүен иҫенә төшөрә. «Это дело того дедушки», — тип уйлай ҡатын. Үҙе белгән доғаларын уҡый, ялбара башлай:

— Мансурский мулла, прости, пожалуйста, прости нас, грешных, прости моего мужа, недоучку, — тип илай-илай үтенә. Мәрйә шулай ялбарып, ҡат-ҡат һорай торғас, ни ғәләмәт, томан асыла башлай. Тирә-яғына ҡараһа, бая ҡутарылып бешеп ултырған еләк-емеш тә күренмәй. Ҡатын ғаиләһен эҙләп китә. Башта юл буйлап әллә ҡайҙа барып сыҡҡан ҡыҙын табып ала. Ире лә олағып баш һуҡҡан яҡҡа киткән була. Уны сәнскеле ҡыуаҡлыҡтан тотоп алалар. Берен-бере табышҡас, баяғы ир үҙенең йәмәғәтен танымай ҙа ҡуя, ти.

— Чего тебе надо, я тебя не знаю, — ти икән.

Ҡурҡҡан Катя тағы илап, олатайға ялбара башлай.

— Прости, Мансурский мулла, — ти. — Һинең мосолманса молитваларыңды өйрәнеп, гел уҡып йөрөрмөн, тик иремде элекке хәленә ҡайтар.

Шулай тип үтенеп һорай торғас, ире иҫенә килә. Ҡатынын танып:

— Ни булды был, Катя, что за чертовщина? — ти.

— Тише, тише, а то Мансурский мулла услышит, опять что-нибудь покажет.

Улар иплап кенә баҫып ҡайтыр юлға сығалар.

Олатай һабағы ғүмерлек була. Ир башҡаса бер ҡасан да һүгенмәй. Ҡыҙҙары ла шул бетеүҙе тағып йөрөп һауыға, бер ҡасан да башҡа ауырымай.

Ә Катя һәр аҙнаның шаршамбы көнө доға уҡый, «святой» тип, олатай рухына хәйер бирә икән.

Был ғәжәп хәлде ишетеп, бер йәш ҡатын ышанмаҫҡа итә.

– Брехня, – ти. – Выдумка для слабоумных.

Катя ҡурҡып китә.

– Прости нас, грешных, святой, – тип суҡына-суҡына тәүбә әйтә.

Иртәнсәк тороуға, теге йәш ҡатындың күҙе шарҙай булған, ҡурҡа-ҡурҡа төшөн һөйләй:

– Ап-аҡ кейемле ҡарт бабай килде лә, теләһәң-теләмәһәң дә Катя һөйләгәндәргә ышанырға тура килер,тип әйтте, – ти. Был хикмәткә тағы бөтәһе лә хайран ҡалалар. Хикмәтленең хикмәттәре, ана шулай, төштәргә инеп булһа ла үҙенекен иҫбатлай икән шул.

## Эй, ғүмерҙең һуңғы минуты...

Мөжәүир олатайҙың йәшәйеше фиҙаҡәрлек өлгөһө булған, тибеҙ. Был ҡоро һүҙ генә түгел, быны раҫлаусы аныҡ миҫалдар халыҡ хәтерендә бөгөн дә ҡәҙерләп һаҡлана. Ғүмеренең һуңғы минуттарына тиклем, хатта үлем түшәгендә бына-бына изге йәнен Ғазраил фәрештә мәңгелек ысын донъяға алып китә тип көтөп ятҡанда ла, ул бер бала күтәргән йәш әсәнең, үҙенә күҙ төбәп килеүен, ауырыу улын күрһәтергә ашығыуын күреп, уны һауыҡтырыу хәстәрен күрә. Ул былай була.

Төркмән ауылынан бер әсәнең сабыйы, ҡапыл аяғы шешеп, ауырып китә. Дауаханаға һалалар, баланы хирургка күрһәтәләр.

– Аяғын ҡырҡырға тура килер, – ти табип. Был һүҙҙе ишеткәс, йәш әсәнең йөрәге ярыла яҙа.

– Нисек аяғын ҡырҡтырырға? – тип аңламаған кеше һымаҡ ҡабатлап һорай.

– Гангрена башланыуы мөмкин, ул саҡта баланы ҡотҡарып булмаясаҡ.

Сабыйының аяғын ҡырҡтырыуға һис тә ризалашҡыһы килмәгән ҡатындың башына бер уй килә. Ул сабыйын Манһыр бағымсыһы Мөжәүир хәҙрәткә күрһәтәсәк. Уға барып күренгән кешенең йүнәлмәй ҡайтҡаны юҡ әле. Ни бары ике йәшлек бала нисек һыңар аяҡ менән йәшәһен?! Ғүмер буйы

сатанлап, ҡултыҡ таяғы менән йөрөһөнмө? Был хәлде әсә кеше күҙ алдына ла килтерә алманы. Врачтар улын операцияға әҙерләп бөткән ерҙән, балаһын төрөп ала ла, дауахананан сыға ла ҡаса.

Йәше туҡһандан уҙған Мөжәүир хәҙрәттең түшәктә ятыуын, күпкә бармаç инде тигәндәрен ишеткеләп йөрөй йәш ҡатын. Шуға күрә юл буйынса:

– Эй, Раббым, олатайыбыҙ үлмәй генә торһон инде. Ул бер хикмәтен күрһәтер, балаҡайыма, йөрәккәйемә, бер ярҙамын күрһәтеп, аяғын ҡырҡтырмау сараһын табыр, – ти ҙә, өйөнә лә ҡайтып тормайынса, балаһын алып, Манһырға уҡтала. Юл буйынса:

– Рухыңа мәңге доғалар бағышлармын, мәңге исемеңде телемдән төшөрмәмен, балаларым быуындан быуынға исемеңде ололоҡлап телгә алыр, олатай, ярҙам ит, улымдың аяғын имлә инде, – тип үҙ алдына алғышланып бара.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәш әсә балаһын күтәреп килеп еткәндә, олатай үлгән була. Барса халыҡ шаҡ ҡатып ни әйтергә лә, ни уйларға ла белмәй, оло юғалтыуҙан шаңҡып телһеҙ ҡалған бер мәлдә олатай мәйете ятҡан йортҡа ике йәшлек ир бала күтәргән ҡатын килеп инә. Олатайҙың тере сағына килеп өлгөрмәнем, тип илап ебәргән йәш әсәне Гөлйемеш абыстай ҡаршы ала.

– Олатаң һуңғы һулышына тиклем һеҙҙе көттө, – ти. – Ир бала күтәреп килгән әсәгә бирерһең тип, бына ошо тоҙҙо өшкөрөп ҡалдырҙы. Ҡайтыу менән өшкөрөлгән тоҙ һалынған һыуҙа сайындырһын. Аҙаҡтан әҙләп эсереп йөрөһөн. Улыңдың аяғы йүнәлер, башҡа ауырымаç. Быны олатаң үҙе әйтте, – тине. Абыстайға ла әсә рәхмәтле булды, хәләлен юғалтыу ҡайғыһынан баш ҡалҡыта алмай торған бер мәлдә, абыстай хәҙрәт ҡушҡанды, изге аманатын, урыны-еренә еткереп үтәп ҡуйҙы.

Йыйылған халыҡ олатайҙың ошо тиклем дә изгелекле булыуына хайран ҡалды. Үлем түшәгендә Ғазраил фәрештә йәнен алырға һанаулы минуттар ҡалғанда хәҙрәт ауырыу баланың юлын уйлап, уны нисек һауыҡтырыу тураһында уйлап ятһынсы әле! Бындай хәлде берәүҙең дә ишеткәне йә күргәне булмағандыр. Хаҡ әүлиә генә быны булдыра алалыр.

Әсә кеше өйөнә еткәс, Олатай ҡушҡандарҙың барыһын урыны-еренә еткереп башҡара.

Мөжәүир хәҙрәт ҡараған кешеләрҙән, исмаһам, береһе һауыҡмай ҡалғаны булдымы? Юҡ! Һәр килеүсе Манһырҙан һаулыҡ алып, йүнәлеп, йәнен-тәнен сафландырып ҡайтты.

Төркмән ауылынан булған теге ир бала ла шул көндө үк арыулана башланы. Әүлиәнең әйткәне хаҡ булды: ҡырҡ биш йәшкә етте, ауырыу-сырхау төҫө күрмәй, матур итеп донъя көтөп йәшәп ята ул кеше.

Зәйнәп инәйҙән ишеткән, әүлиәнең һуңғы көндәренә ҡағылышлы был ике бәйән мине тетрәндерҙе. Илаһи заттың Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ҡөҙрәте һуңғы тамсыһына тиклем сайпылдырмай халҡына ҡайтарып биреүсе булғандыр инде был, тип ҡабул иттем.

Эй, изгеләрҙән-изге, беҙҙең һөйөклө әүлиәбеҙ, халҡыңа ҡылған изгелегең хаҡына урындарың йәннәттең иң-иң түрендә булһын. Йылдар үткән һайын халҡыңдың һине һағыныуы арта бара. Беҙ белеп-һиҙеп торабыҙ, изге рухың еребеҙгә фатихаһын ебәреп, төрлө бәлә-ҡазаларҙан еребеҙҙе ҡурсылап ята. Эй, Раббым Аллам, мәңге шулай булһын.

*Мәхмүтова Зәйнәп*,
1927 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Дыуамал Хажи

Әхәт ағай: «Был хәл 1935 йылда булған, мин уны атайымдың һөйләүенән хәтерләп ҡалғанмын», – тип башланы һүҙен.

– Халыҡ әҙ-мәҙ күҙен аса, терелә башлаған йылдар. Иҙелбайҙа (Баймаҡ эргәһендәге ауыл, хәҙер бөткән) һабан туйы бара. Был һабантуйға үҙенең кирамәттәре менән халыҡты шаҡ ҡатырған Мөжәүир хәҙрәт тә килгәйне. Бөтә тирә-яҡ уйын-көлкө, йыр-бейеү менән гөрләп тора. Халыҡ һабандан һуң рәхәтләнеп күңел аса. Атайымдың ике туған ҡустыһы Нуретдин ағайымдың өлкән улы Хажи, беҙҙең тирәнең иң шәп егете, ҡыҙмаса булып алған да, гармун һуҙа, йәштәрҙе бейетә, йырлата. Шулай уйын-көлкө һәүетемсә генә ҡыҙып барғанда, әллә йөгө етеп, баяғы Хажи килә лә төптө юҡҡа минең атай менән һөйләшеп торған Мөжәүир хәҙрәткә бәйләнә башлай бит. (Совет власының дингә ҡаршы ҡаты көрәш алып барған заманы, ә Хажи активист, йәнәһе, комсомолец.) Ул:

*«Хәҙрәт бар ерҙә, малым бар, тимә.*
*Ғазраил бар ерҙә, йәнем бар, тимә.*
*Хәҙрәт малыңды алырға ашығыр,*
*Ғазраил йәнеңде алырға ашығыр, –*

тигән бит хәҙрәткә. Мөжәүир әүлиә Хажиға бер ни тип тә өндәшеп тормаған, былар эргәһенән боролоп киткән дә барған. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Хажи ағай һөйләшергә итһә,

һөйләшә алмай ҙа ҡуя икән. Уйынсыл егет һабантуйҙа йырлай ҙа, бейей ҙә алмай, һөмһөрө ҡойолоп ҡайтып инә. Был хәлгә ике-өс көн үтеп китә. Хажи һаман һөйләшә алмай. Балнисҡа алып барып ҡарайҙар, файҙаһыҙ. Атайым ҡустыһы Нуретдингә:

– Быны йүнәлтеү хәҙрәттең үҙенең генә ҡулынан килер. Тиҙерәк Манһырға алып барырға кәрәк. Кабы егет телһеҙ ҡалып ҡуймағайы, – тип кәңәш бирә. Барһалар, хәҙрәт өйҙә юҡ, ти. Әле генә ошонда ине, ти уға ҡаралырға килеүселәр. Кискә тиклем көтәләр. Хажи ҙа күндәм генә тора, комсомолец-активистың телһеҙ тороп ҡалғыһы килмәй бит инде. Был көндө уны көтөп ала алмайынса ҡайтып китәләр. Эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалған Нуретдин ағай атайыма килә:

– Шиһабетдин ағай, һин барып һөйләшеп ҡара әле. Һине ағай тип ихтирам итә бит, – ти.

Ысынлап та, атайымды хәҙрәт һәйбәт ҡаршы ала:

– Шиһабетдин ағай, түрҙән уҙ, – ти. Борҡорап самауыр ултырған табынға саҡыра. – Һыуһап килгәнһегеҙҙер, эҫе бит, – ти.

– Мөжәүир туған, һинән ғәфү үтенергә килдек. Бынау дыуамал, тинтәк комсомол ишаратын кисерә күр инде, – тигән атайым.

– Аҡылға ултырһа, һөйләшер әле, – тип көлгән дә ҡуйған кирамәтсе, өшкөрөп тә тормаған, доға ла яҙып бирмәгән. Улар шул көйө ҡайтып киткәндәр. Хажиҙың инде телһеҙ ҡалыуым ошо икән тип ҡото оса.

Манһырҙан сығып Ирәндеккә үрләп барғанда, егет ҡапыл телгә килә:

– Шиһабетдин олатай, атыңды туҡтат әле, хәжәтемә барып киләм, – ти.

Атайым Хажиҙың һөйләшеп китеүенә хайран ҡала. Егет тә хәжәтен үтәүен дә онотоп, арбаға кире менеп ултыра. Атайым тегене шелтәләп:

– Бына күрҙеңме, тинтәк малай, – ти. – Башҡаса хәҙрәткә тел тейҙерәһе булма.

Әммә киҫекһеҙ Хажи ағай һаман аҡылға ултырмай әле. Баяғы хәлгә байтаҡ ваҡыт үтеп китә. Һуғыштан һуңғы йылдар.

Атаһы Нуретдин ағай яу ҡырынан ҡаты яра алып, билһеҙ булып ҡайта. Ә эшкә талапсан, һүҙгә үткер сос тәбиғәтле Хажи ағай ул саҡта Ленин исемендәге колхоздың рәйесе булып эшләп йөрөй.

– Улым, хәҙрәтте барып алып килсе, – ти Нуретдин ағай. – Яуыз дошманды еңеп ҡайтҡас, әҙ-мәҙ булһа ла йәшәге килә.

Хажи ағай үрәпсеп торған тура юрғаһын егеп ала ла:

– Көтөгөҙ, алып киләм хәҙрәтегеҙҙе, – ти ҙә саптырып сығып та китә. Һаман дыуамаллығын ҡуймаған йәш ирҙең башына юлда тағы бер уй килә. Ул тағы бер хәҙрәтте һынап ҡарарға була, ысынлап та, кешенең ни уйлауын беләме икән? Хәҙрәтте ултыртып ҡайтырға сыҡҡанда күсере Исхаҡов Ғәбиткә аңғартып ҡуя:

– Беҙҙең өй тапҡырынан үткәндә атыңды ныҡ итеп ҡыу, өйҙө саптырып үтеп китерлек булһын, ти. Әүлиә хәҙрәт ни эшләр, белерме үҙен ҡайһы өйгә алып килгәнде әллә юҡмы?

Нуретдиндәр тапҡырына етеп килгәндә Ғәбит атты йән-фарман ҡыуа. Әммә ат өй эргәһенә еткәс, күсер сыбыртҡылауға ла ҡарамаҫтан, шып туҡтай ҙа ҡуя, сараһыҙҙан хатта ышлыяға сүгәләй, ә ары китмәй. Арбала ултырған хәҙрәт асыуһыҙ ғына:

– Ҡуй, Әхмәтхажи, һин мине әпәт шаяртмаҡсыһың, – ти. – Дыуамаллығыңды ташла, кем олоһо кем кесеһе булған-һың бит инде. Ана, атың аҡ күбеккә батҡан, ҡуй, хайуанды ыҙалатма, ошо ергә төбәп алып килдегеҙ түгелме? – ти.

Ул арбанан төшөп Нуретдиндәргә инеп китә. Ошонан һуң яугир Нуретдин биленән арыуланып, хәҙрәткә рәхмәттәр әйтеп, апаруҡ йылдар арыу ғына йәшәп, гүр эйәһе була.

Ниһайәт, Хажи ағай ҙа Мөжәүир хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәтенә ышана.

– Була икән шул был донъяла мөғжизәләр! – тип ҡуя.

*Этколов Әхәт,*
1931 йылғы.
Баймаҡ ҡалаһы

## Әүлиә тирәге

Әсәйемдең: «Эй, Аллам, хәҙрәт олатайға тейешле әжерен тәки бирә алманыҡ. Фатиха апайыңды бит үлемдән ул ҡотҡарҙы. Бигерәк ярлы инек шул, – тип гелән өҙәләнеп һөйләүе, уфтаныуы күңелемә һеңеп ҡалған.

... Апайым йәшләй генә кейәүгә сыға. Тәүге бәпәйе тыуа ла, күп тә тормай үлә. Йәш әсә был ҡайғыны күтәрә алмайынса ҡаты ауырып китә, етмәһә, ферманың ауыр эшенән өҙлөк тә була. Йәш ҡатын аяҡтан яҙып йығыла. Ҡыҙы өсөн йән атҡан әсәйебеҙ: «Хәҙрәт олатайға алып бара алһам, төҙәлер ине», – тип уйлай. Автобустар йөрөмәгән саҡ, ярлы булғас, атыбыҙ ҙа юҡ. Былар Аҡморондан сығып китә йәйәүләп Манһырға. Баймаҡ осона еткәс, уң яҡҡа, Фәйзулла ауылына алып бара торған һуҡмаҡҡа боролоп, һарҡыуға табан ыҡлай йәйәүле мосафирҙар. Туранан егерме саҡрымлап араны, ахмалға төшөп үтеп, саҡ килеп етәләр. Хәлдән тайған ауырыу апайым килә лә йығыла. Шул саҡ өйҙән берәү сығып: «Әле яңы килгән бала инһен», – тип саҡыра. Инһәләр, бында сәй эсеп ултыралар икән. Олатай уларҙы табынға әйҙүкләй. Гөлйемеш абыстай икеһенә лә сәй яһап бирә. Һыуһап, йонсоп килгән юлаусыларға бер ни тиклем хәл керә. Шунда Мөжәүир хәҙрәт һүҙ араһында ғына әйткәндәй итеп:

– Илама, ҡыҙым, ҡайғырма балам үлде, тип. Ул гонаһһыҙ сабый хәҙер йәннәттә ожмах ҡошо. Киләсәктә балаларың күп булыр, өйөң тулып йөрөр әле, ҡайҙа ҡуйырға ла белмәҫһең. Ейәндәрең дә ишле булыр: килеп тулһалар, бер өй эсе булып

ултырырһығыҙ, бына хәҙрәт олатайым әйткәйне тиерһең, күрерһең шул көндәрҙе, ин шәә Аллаһ, – ти. Сәйҙән һуң өшкөрөп тоҙ бирә, юғалта күрмә, һаҡлап йөрөт, тип ҡулына бетеү яҙып тоттора. Инде әсәйемдең бөтә ҡайғыһы – сәҙаҡаһының әҙ булыуы. Юлда килгәндә үк: «Ошонан да ҡыҙым йүнәлеп китһә, яңғыҙ кәзәмде алып килеп бирер инем», – тип әйтеү әйтеп килә. Сығыр саҡта әсәйем баяғы юлда уйлап килгән уйын әйтергә тип ауыҙын асырға итә, ни хикмәт менәндер, өндәшә алмай ҙа ҡуя. Олатай мут йылмайып әсәйемә ҡарап тора ла һүҙ башлай:

– Юҡты уйлайһың, Фатима! Кәрәкмәй, кәрәкмәй! Һауып эскән берҙән-бер кәзәңде биреп ни, балаларыңа аҡты ҡайҙан алырһың?

Әсәйем ниҙер әйтергә, өндәшергә итә, теле аңҡауына йәбешкәндәй, бер нисек тә өндәшә алмай ҙа ҡуя икән. Үҙе эстән, юлда уйлап килгәнемде ҡайҙан белде, бына биғәләш, тип аптырай. Хушлашып сығыр алдынан олатай тағы ла:

– Хәйер әҙ тип борсолма, ошо биргәнең еткән. Ҡыҙыбыҙ төҙәлер. Юлда уйлағаның бурыс булып ҡалмаһын. Хәйер, – олатай күҙҙәрен алысҡа төбәй, – бәлки, нәҫелегеҙҙән бер саҡ ризалатыусыһы ла табылыр әле, – ти. Әсәйем уның ни әйткәнен аңламаһа ла ҡайтарып һорарға баҙнат итмәй.

Хәҙрәткә күренгәндән һуң, ысынлап та, Фатиха апайым һауығып, ире менән һин дә мин матур йәшәп китә. Ғаиләлә бер-бер артлы дүрт балаһы тыуа. Олатай әйткәненсә, ейән-ейәнсәрҙәре лә өй тулып йөрөй, һаулығы ла һәйбәт уның, сир-сорға ла бирешеп бармай. «Хәҙрәт фатихаһы һаҡлай, – тип ҡабатларға ярата һәр саҡ бетеүен күрһәтеп. – Йәнемдәй күреп һаҡлайым».

– Мин Фатиха апайымдың бәхете өсөн, үҙемде белә-белгәндән, ниңәлер, барыбер олатай алдында үҙебеҙҙе бурыслы тойҙом. Ул бит, дөрөҫөн әйткәндә, апайыма Аллаһы Тәғәләнән ғүмер һорап алып биргән! Беҙгә эшләгән шул изгелеген нисек ризалатырға, тигән уй күңелемә инеп ояланы ла башымдан сыҡманы. Был турала дин юлында йөрөгән кешеләргә лә әйткеләнем. Бер уҡымышлы ағай тыңлап, миңә ошондай кәңәш бирҙе.

– Һеңлекәш, мәрхүмдәргә беҙҙән бер ни кәрәк түгел. Уларға бары доға булһа етә. Беҙ әҫелә һыуға һыуһап йөрөгән кеүек, улар гелән Ҡөрьән аяттарына, доғаға сарсап ята. Рухына Ҡөрьән уҡытып тор, зыяратына барып ҡәбере өҫтөндә Ҡөрьән уҡып сыҡ. Шунан да хәйерлеһе булмаҫ.

Ошо һөйләшеүҙән һуң мин ғәрәп алфавитын өйрәндем, Ҡөрьәнде үҙ хәрефтәре менән уҡый башланым. Хәҙрәт ҡәбере өҫтөндә уҡыясаҡ сүрә аяттарын, доғаларҙы ятланым. Шунан тормош иптәшемә, мине Манһырға алып барырһың әле, тип әйтеп ҡуйҙым. Ирем сығышы менән хәҙрәттең ауылынан һигеҙ саҡрымда ятҡан Байыш ҡәрйәһенән. Ҡайным Ашырбаев Вәгиз заманында хәҙрәт менән йән дуҫ булып, аралашып, күҙ күрешеп йәшәгән, уны нык ихтирам иткән. Бына йәйҙ ла сыҡты. Руль артында иптәшем, мин һәм йәнә өс ҡатын ғөсөлләнеп, тәһәрәтләнеп, хәҙрәт ҡәберенә барып баш эйәйек тип ниәтләп юлға сыҡтыҡ. Сәфәребеҙ ыңғай ғына булды, бер ерҙә лә тоткарланмай, тиҙ генә елдереп килеп тә еттек. Бына хәҙрәт ерләнгән зыярат, беҙҙең хаҡ мосолмандар өсөн изге урын. Барса әруахтарға сәләм биреп, бынан 37 йыл элек ерләнгән олуғ хәҙрәт ҡәбере эргәһенә табан атланыҡ.

Көн шундай матур, сыуаҡ, хатта япраҡ һелкенер ел әҫәре лә юҡ. Бөтә тирә-йүн, тәбиғәт ихласланып үҙе беҙҙе ҡаршы ала төҫлө. Беҙҙең күңелдәр күтәрелеп китте.

Юлдаштарым Аллаһтың барлығына, берлегенә ышанһалар ҙа, хәҙергә Ҡөрьән уҡый белмәй, шуға күбеһенсә минең әйткән буйынса йөрөй. Иң башта оло хөрмәт менән ҡәберҙе ете ҡат урап сығып тәуаф ҡылдыҡ. Шунан үҙем алдан әҙерләп ятлап йөрөгән доғаны, сүрә аяттарын: Доғаи Хәбиб, Аятел-Көрси, Ихласты уҡый башланым. Тамам булғас, күмәкләп хәҙрәт рухына, бөтә ҡәберстан әһелдәренә бағышлап, «Аллаһу Әкбәр» тип доға ҡылдыҡ. Мин күңелемдә урғылған хистәрҙе үҙебеҙҙең телдә лә өҫтәп әйтергә булдым:

– Апайымды һауыҡтырғаның, әсәйемде ҡыуандырғаның өсөн оло рәхмәтлебеҙ һиңә, ҡәҙерле олатай! Улар ваҡытында аңлатып әйтеп еткерә алмаған хистәрҙе һиңә еткерергә килдем. Ятҡан ерең мамыҡтай йомшаҡ, йәнең йәннәттең иң түрендә булһын! Рухың ҡыуанып ҡайтһын!

– Үҙемдең йөрәктә урғылған изге хистәрҙән, ихлас теләктәрҙән күҙҙәремә йәш эркелде. Бына бер саҡ битемдән рәхәт кенә итеп, әйтерһең, хәҙрәттең өшкөргәндәге тыны, йылы ел иркәләп һөйөп үтте. Шундай рәхәт! Баяғы наҙлы ел тағы ҡабатланмаҫмы тип бер аҙ көтһәм дә, башҡаса илаһи наҙ ҡабатланманы. Шунан күп тә үтмәне Аллаһы Тәғәләнең ниндәй мөғжизәһе булғандыр, хәҙрәттең баш осонда ултырған тирәктең япраҡтары бер ниндәй ел юҡ көйө һелкенешеп, ҡыштыр-ҡыштыр, ҡыштыр-ҡыштыр итеп елберләшә башланы. Әйтерһең дә, япраҡтар үҙ-ара сер һөйләшә. Ҡыштырлау аҫтан өҫкә табан күтәрелде лә иң оска етеп, туҡтап ҡалды. Бөтәбеҙ ҙә хайран ҡалып үргә ҡарайбыҙ. Бына әкәмәт – тирәктең иң осо беҙҙең яҡҡа ҡарап эйелде лә башын һелкте. Быны бөтәбеҙ ҙә күреп торҙо. Юлдаштарым көтөлмәгән хәлдән аҙап ҡалды. Өләсәһе Манһыр ауылынан булған, хәҙрәттең кираматтәрен бәләкәйҙән ишетеп үҫкән Венера тигән юлдашыбыҙ хатта ҡурҡыуға төштө: урынынан һикереп торҙо ла әле генә күҙ алдында пәйҙә булған хикмәттән ҡото осоп, сергә сорналған был урындан тиҙерәк ҡасырға уйланы. Ҡулынан саҡ тотоп алып өлгөрҙөм, юлдаштарымды көскә-көскә тынысландырҙым.

– Ҡурҡмағыҙ, был бит хәҙрәтебеҙҙең бер мөғжизәһе! Ул беҙҙе тәбрикләй, беҙҙең килеп доға уҡыуға шатлана, – тим. Ә күңелем үҙемдең дә тыныс түгел. Ысынлап тирәктең япраҡтары беҙҙең доғаны ишетеп шыптырлаштымы? Эстән илаһи ниәт ҡылдым: әгәр мин уйлағанса булып, хәҙрәт рухы беҙҙең килгәнгә риза икән, мин бая уҡыған доғаларҙы ҡабатлағас, япраҡтар тағы баяғыса шулай ҡыштырлашһын. Ҡәберҙең баш осона барып торҙом да йәнә Доғаи Хәбибте, Аятел-Көрсиҙе, Ихлас сүрәһен ҡабатлап уҡып, доға ҡылдым. Баяғы хикмәт нәҡ шулай ҡабатланды: япраҡтар аҫтан өҫкә табан ҡыштырлашты, иң осона еткәс, йәнә, беҙҙең яҡҡа эйелеп башын һелкте. Тимәк, хәҙрәт рухы беҙгә риза, риза! Шул саҡ күңелемде әйтеп аңлата алмаҫлыҡ оло шатлыҡ биләп алды.

– Эй, бөйөк әүлиә! Әлдә һин ошо беҙ йәшәгән ергә килеп киткәнһең, һинең эҙҙәрең ҡалған ергә баҫып йөрөйбөҙ, был бит ниндәй ҙә оло бәхет!

Йөрәгем ҡоштай талпына. Күңелде биләгән юғары хистәрҙән илһамланып беҙ ҡайтыу яғына юлландыҡ. Байышҡа ҡайнымдарға инеп, хәл белешеп, Сибайға Йылайыр совхозы аша ҡайтырға уйланыҡ. Зыяраттан ике-өс саҡрым китеп тә өлгөрмәнек, ҡул күтәреп, беҙҙе ике ҡатын туҡтатты.

– Хәҙрәт ҡәберенә хәйер һалайыҡ тип килгәйнек, тик зыяратты таба алмай ҙа ҡуябыҙ. Ҡаршылағы тауға инде нисәнсегә менеп ҡарайбыҙ, ҡәберлек ус төбөндәгеләй ап-асыҡ күренеп ята, төшөп яҡын барайыҡ тиһәк, әллә ҡайҙа юғала, таба алмай ҙа ҡуябыҙ. Баш ҡатты, – тине өлкән ҡатын, – беҙгә юлды өйрәтеп ебәрмәҫһегеҙме?

Был икәү әсәле-ҡыҙлы беҙҙең урамда йәшәүсе яманаты сыҡҡан Миңъямал менән Әлиә булып сыҡты. Йыш ҡына уларҙы күршеләре яратмай һөйләгәнде ишетергә тура килгәне бар. Ҡара ҡуңыр йөҙлө, хәйләкәр ҡарашлы был бисәне беҙҙең тирәлә бөтәһе лә белә, самогонсы Миңъямал тип йөрөтә. Күршеһендәге танышым: «Көнө-төнө сәмәй ҡыуып һата. Бөтә эскесе ҡаҡырып-төкөрөп беҙҙең подъезда. Кәсеп итеп иномарка машина алды», – тип яратмай һөйләгәйне. Ҡыҙын аҙғынлығы өсөн үҙ итмәйҙәр: ике балаһын, ирен ташлап, икенсе йәш ир менән йәшәп ята, тәртипһеҙ, тиҙәр. «Ни кәрәк икән быларға, оялмай нисек килеп торалар?» – тип уйланым. – Әллә гонаһтарын ярлыҡауҙы һорарға йөрөйҙәрме? Ул арала Йәмил быларға аңлата башланы:

– Ошо туп-тура юлдан бараһың да уңға боролаһың. Зыярат өҫтөндә ҙур, бейек тирәк үҫеп ултыра. Әллә ҡайҙан күренеп тора.

– Беҙ әле генә шул юлдан үттек, – тине тегеләр. – Бер нәмә лә күрмәнексе.

– Күренмәҫкә ни, зыярат әнә түгел инде, – тип ғәжәпләнде ирем. – Тағы барып ҡарағыҙ һуң...

Ҡуҙғалып киткәс аранан берәү:

– Теләмәгән кешеһен шулай аҙаштыра, албырғата, ҡәберенә яҡын да ебәрмәй икән, тиҙәр бит. Бәлки, быларҙы ла хәҙрәт рухы эргәһенә килтергеһе килмәйҙер? – тине.

– Булыр, булыр!

Тегеләр тураһында күршеләренән ишеткәнемде юлдашта-

рыма сурытып торманым. Унын урынына берәй йүнлерәк хәбәр һөйләшербеҙ, тип уйланым. Нәк шулай булды ла: юл буйынса данлыклы хәҙрәтебеҙ, унын хикмәттәре тураһында һөйләшеп барҙык, һәр кемдең күңелендә ниндәйҙер бер хәтирә һаклана икән. Бер-бер артлы шуларҙы бәйән итәбеҙ. Өләсәйем һөйләгәйне тип, Венера бер ғәжәп хәлде башлап ебәрҙе:

– Бер шулай караңғы төшөп килгәндә уны-быны аңламаған өләсәйемдең йәш кенә килене сабыйын тышка алып сығып, аяғын тота. Дилә исемле ике-өс йәшлек кенә был кыҙ бала иҫ китмәле сибәр була: муйылдай кап-кара күҙҙәре, кыйылып торған кара кашлы, йылмайһа, ике сикәһе уймакланып соҡорая, сәстәре бөҙрә була. Йәш катын бер-ике минуттан балаһын кире өйгә индергәндә бөтөнләйе менән икенсе итеп алып индерә: ауыҙынан шылағайы койола, бите салышайған, ике күҙе лә атылып сығырҙай булып бәзрәйгән. Фәрештә кеүек сабыйының аяғын тотҡансы ғына ошондай хәлгә төшөүен күреп ҡото оскан әсә:

– Ай, Аллам, балакайыма ни булды? – тип илай башлай. Күпте күргән ҡәйнәһе тыныс кына итеп:

– Эҫе мәлендә таң менән тороп баланы Манһырға, олатайға, алып бара һалырға кәрәк, – ти. – Хәҙрәт барҙа кайғырма, килен!

Акырып илаған бала күтәргән катынды хәҙрәт капка тышына сығып каршылай. Тыйып тотҡоһоҙ булып сарбайланған баланың йөҙөнә карап доға укып өрөп тә ебәрә, сабый еңел тын алып, илауҙан да туктай. Йәш катынға карап хәҙрәт:

– Ниңә баланы кыҙыл эңер вакытында тышка алып сығып аяғын тоттоң? – тип шелтәләргә лә өлгөрә. – Ярамағанын белмәнеңме ни? Сабыйыңа ауырыу кағылған бит. – Үҙе шунда ук өйгә индереп ныгытып өшкөрә башлай. Бер аҙҙан, эшен тамамлағас, әйтә:

– Балаң төҙәлеүен төҙәлер, башка улай итеп ауырымаҫ. Ләкин үҫкәс, бала табыу, әсә булыу бәхетенән мәхрүм булыр.

Йәш катын, кыҙым һауыккас булды, тип кыуана. Дилә матур кыҙ булып үҫеп етә. Кейәүгә сыға. Әммә, теге сак хәҙрәт әйткәнсә, бала таба алмай. Дауаханаларға барып карай,

файҙаһыҙ. Шул саҡ әсәһе хәҙрәтте иҫенә төшөрә. Бөтәһе өсөн үҙен ғәйепләп илай. Инде үҙе кешеләргә ҡыҙы менән булған ошо хәлде һөйләп, ҡыҙыл эңер ваҡыттарында тышҡа сығырға ярамағанлыҡты өйрәтә. Миңә быны хәҙрәт олатай үҙе әйтте, ти.

Венера хәтирәһен һөйләп бөтөүгә Фариза һүҙ башлай.

– Ике туған апайымдар Байышҡа барғандар ҙа кисләтеп кенә ҡайтырға сыҡҡандар. Оло юлдан ҙур тиҙлек менән елдереп китеп барһалар, ҡаршыларында аҡ кейемле бер ҡарт пәйҙә була. Серле зат машина алдына арҡыры тороп алған да ҡулын болғай, юлаусыларҙы һис үткәрмәй ҙә ҡуя икән. Еҙнәм ныҡлабыраҡ ҡараһа, Мөжәүир хәҙрәт баҫып тора, ти. Машиналағылар ҡурҡып китә, әллә ҡасан үлгән кеше нисек улай йөрөй ала? Шунан еҙнәмдең башына уй килә: хәҙрәт рухы бушҡа күренеп йөрөмәҫ, әллә бер-бер хәүеф бармы? Ул кабинаһынан сығып, машинаһын тирәләп әйләнеп ҡарай башлай. Алғы яҡҡа килеп ҡараһа, алдарында ҙур бер таш ята, ти. Барып төкөлһәң, машинаң, бер һүҙһеҙ, селпәрәмә ҡыйраласаҡ ине.

– Ә-ә-ә, бына ни өсөн хәҙрәт рухы борсолоп йөрөгән! Ул беҙҙе бәләнән ҡурсалаған, – тип уйлаған еҙнәм, һәм ташты алып ташлап, хәҙрәткә рәхмәттәр уҡый-уҡый, юлын дауам иткән. Хәҙрәттең рухы тере, кәрәк саҡта, ана, шулай итеп кешеләргә ярҙамға килә икән, – тип Зәһиҙә һүҙен тамамлауға, әсөнсө юлдашыбыҙ Фәнүзә хәтирәләргә төшөп китте.

– Манһыр тирәһен һөрөргә тип килгән тракторҙар боҙола ла ултыра икән. Башта эштең низә икәнен төшөнмәгәндәр, ауыл халҡының: «Әүлиә еренә тейгәнде яратмай», – тип әйтеүенә лә иҫтәре китмәгән. Механизаторҙар тракторҙарын тиреп ташлап, эй ремонтлайҙар икән, бер аҙна буйы ыҙалағандар. Тик шунан ғына: «Ысынлап та, был тирәне һөрөргә ярамайҙыр», – тигән уй килә баштарына. Кире боролғанда, тракторҙар һис бер ҡаршылыҡһыҙ шыңғай ғына эшләй ҙә китә. Был хәлгә барыһы хайран ҡала, хәҙрәтебеҙ ерен шулай һаҡлай, күрәһең, тип башҡаса ул ерҙәрҙе һөрөп маташмайҙар.

Шулай итеп, ул көндө Байыш ауылына туҡтағанда ла, Сибайға ҡайтып барғанда ла һүҙебеҙ гел бөйөк яҡташыбыҙ,

изге хәҙрәт тураһында ғына булды. Халыҡ араһында йөрөгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ хикмәттәрҙе йыйып, ниңә берәй яҙыусы ташҡа баҫтырмай икән, тип һөйләштек. Үҙебеҙ ишетеп белгән хәҙрәттең төрлө кирамәттәрен алмаш-тилмәш һөйләнек тә һөйләнек. Кисен Сибайға ҡайтып еткәс, бөтәбеҙ ҙә сәфәребеҙҙән ҡәнәғәт булып, бер-беребеҙгә именлек теләп йылы хушлаштыҡ.

Ҡайтҡан көндөң төнөндә хәҙрәт олатай төшөмә инде. Имеш, ул миңә тырышып-тырышып бер доғаны өйрәтә, арҡамдан ҡағып һөйә икән, тим.

Был хәлдәргә инде бер нисә йыл үтеп китте. Әммә йөрөйөм-йөрөйөм дә баяғы күргән-ишеткәндәрҙе йәнә иҫемә төшөрәм: тып-тыныс көйө тирәк япраҡтары ҡыштырлаша, тирәктең осо беҙгә ҡарап баш һелкә, йомшаҡ ел биттәремдән һөйөп үтә. Юлдаш ҡатындарымдың һөйләгәндәре лә ғүмерем буйы хәтеремдә онотолмай һаҡланыр. Хикмәтле әүлиәнең сираттағы хикмәттәре менән осрашыу бына ошонан ғибәрәт булды.

*Ашырбаева Фәкиһа,*
1950 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Юрауҙары юш килде

Урал аръяғы райондарының данлыҡлы имсеһе, табибәһе Нурия инәй менән яҡындан танышып китеүем дә «Мөжәүир хәҙрәт» китабы арҡаһында килеп сыҡты.

Бөтә тирә-яҡта билдәле был данлыҡлы табибә тураһында күптән ишетеп-белеп, нисек күрергә икән тип йөрөй инем, бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына тигәндәй, ул миңә уйламағанда, көтмәгәндә үҙе килеп осраны. Нурия инәй минең бер таныштарыма килгәйне. Ап-аҡ ҡына мөләйем йөҙлө, төҫө-башынан уҡ изгелек нуры бөркөлөп торған был ағинәй тәү күреүҙән үк күңелемә хуш килде. Мосолман әбейҙәренә хас аҡ ҡына яулығын йәйеп ябынған, ыҫпай ҡупшы кейемле, күпте күргәнлеге төҫөнә сыҡҡан һикһән биш йәштәрҙәге инәй уғата ипле, уғата тыйнаҡлы ине.

– Һин Лира Яҡшыбаевамы? Олатай тураһында яҙыусымы? – тине ул яғымлы ғына итеп.

– Эйе, – тинем аптырабыраҡ.

– Бына ул китап! – Инәй сумкаһы төбөнән ҡәҙерләп ҡат-ҡат төрөлгән нәмә килтереп сығарҙы ла алып өҫтәлгә һалды. Әллә нисәмә ҡат урауҙы тағата-тағата торғас, ниһайәт, китапты килтереп сығарҙы.

– Уҡыйым да илайым, уҡыйым да илайым, – тине, йәшкәҙәп киткән күҙҙәрен аҡ яулығының осо менән һөртөштөрөп алды. – Табиплыҡты олатай миңә үҙе ҡушты бит.

– Бына нисек? Һөйләгеҙ әле, зинһар, был бик ҡыҙыҡлы!..

Бына шулай итеп танышып киттек беҙ күренекле Хәйбулла

табибәһе имсе Нурия апай менән. Ул һүҙҙе уратыбыраҡ башланы:

– Атайым Сәләхетдин булып, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмаған бик дини кеше ине. Яҡшылар, изгеләрҙе ихтирам итте, шулар менән ҡатнашырға яратты, мәрхүмкәйем. Йыш ҡына Зәйнулла ишанды саҡыра, атын егеп алыр ҙа бер нисә көн ҡунаҡ итеп, һөйләшеп, аралашҡандан һуң йәнә ҡәҙерләп үҙе үк илтеп ҡуя торғайны. «Беҙҙең Зәйнулла ишан кеүек изге заттар бер нисә быуатҡа бер килә, уларҙы ҡәҙер-хөрмәт итеү беҙгә фарыз», – тип әйткәндәре бөгөнгөләй иҫемдә. Әүлиәлеге менән дан алған Зәйнулла ишан беҙгә бер килгәнендә әсәйемдең йөклө икәнен күреп, атайыма сер итеп кенә әйткән:

– Сәләхетдин, – тигән, – һеҙҙең 14-се балағыҙ ҡыҙ булыр, бармағында күҙе булыр, тик ябай кешегә ул күренмәҫ. Ул балағыҙҙың юғарынан тәғәйенләнеше – имсе, – тигән.

– Ин шәәъ Аллаһ, юрағаның юш килһен, ишан хәҙрәттәре, – тигән атайым. – Беҙҙең тоҡомда ундай имсе табибәләр электән дә булған.

Әммә кеше ҡарау, имләү һөнәренә Нурия ҡапыл ғына тотоноп китә алмай. Эйе, ул үҙендә ниндәйҙер серле көс барлығын һиҙенә, тик уны ниҙер тотҡарлай, ҡапылда баҙнат итмәй. Күңеленә имселек менән шөғөлләнер өсөн кемдер уға рөхсәт бирергә тейеш һымаҡ тойола. Шулай йөрөй торғас, Нурияға 35 йәш тә булып китә. Бер шулай Нурия үҙенең бер туған ағаһы Нуретдиндәрҙә Мөжәүир хәҙрәт менән табындаш була. Хәҙрәттең үҙенә төбәлеп үтә ҡарап ултырғанын күреп, йәш ҡағын ҡаушап ҡала. Оялышынан ни ҡылырға белмәй, әллә тороп сығып китәйемме тигәндә, күрәһең, буласаҡ табибәнең ни уйлағанын алдан белеп торған ғилем эйәһе уны туҡтата

– Нурия ҡыҙым, – ти һаман уға үтә ҡарап. – Хоҙай Тәғәлә бит һине тыумыштан имсе итеп яралтҡан, һинең бармаҡтарыңда әҙәм балаһында һирәк осрай торған һиҙгерлек, үҙеңдә ҡөҙрәт тупланған. Ниңә уны кешеләрҙән йәшереп йөрөтәһең? Улай итмә, ҡыҙым! Был бит гонаһ! Һинең һымаҡ имсе-табиптар юғарынан тәғәйенләнә. Тимәк, һин ошо ерҙең

халҡына хеҙмәт итергә тейешһең, һинең Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан ерҙәге тәғәйенләнешең – табиплыҡ, – ти кире ҡаҡҡыһыҙ ҡәтғи тауыш менән. – Быуын төшөрөү, умыртҡа, умрау һөйәген ҡарау, кендек инәһе булыу кеүек мин булдыра алмаған нәмәләр һинең ҡулыңдан килә бит.

Ул быларҙы бер табын кеше алдында асыҡ итеп туп-тура әйтә лә ҡуя. Йәш ҡатын уңайһыҙланып ҡыҙарына, быны күреп хәҙрәт йәнә өҫтәй:

– Оялма, балам, был ояла торған нәмә түгел. Ҡулдарыңдың име – бындай юғары көстө Хоҙай Тәғәлә яратҡан ҡолона һынау өсөн бирә. Ин шәәъ Аллаһ, аҙым һайын кешеләрҙән фатиха алып, сауап алып йәшәрһең.

Ҡарындашы өсөн күңеле үҫеп киткән Нуретдин ағаһы, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡасандыр аталары Сәләхетдин мәрхүмдең Зәйнулла ишанға әйткән һүҙҙәрен ҡабатлай:

– Юрағаның юш килһен, хәҙрәт!

Ул саҡтарҙа был тирәлә Мөжәүир хәҙрәттең әйткәнен тыңламаған, ҡушҡанын эшләмәгән кеше булмағандыр. Халыҡ гонаһтан да ныҡ ҡурҡа. Хаҡ мосолман ҡатыны хәҙрәттең һүҙен йыға алмай, имләү эшенә ихласлап тотона.

Бер саҡ, әллә ысынлап, әллә һынар өсөн шаяртып, хәҙрәт үҙенең абыстайы Гөлйемеште йәш имсегә алып килә:

– Аяғын шаҡара баҫҡан. Быуынды һинең һымаҡ оҫта ултыртыусы юҡ бит башҡа. Инәйеңдең аяғын ҡарап ебәрсе, табибә һылыу!

Ысынлап абыстайҙың шайтан ашығы эргәһенән быуыны сыҡҡан була. Нурия иплəп кенә быуын сыҡҡан ерҙе майлап һылап ултыра-ултыра ла аяҡты көс менән тура тарта. Урынына ултырған быуын шырт итеп ҡала.

– А-а-а-ай! – Ҡапыл тәненән ток кеүек үткән көслө ауыртыуға сыҙай алмаған Гөлйемеш абыстай ҡыҫҡырып ебәрә.

Ә эшенең уң икәнен күреп ҡыуанған Нурия иһә үҙенсә ихлас һөйләнә:

– Ишеттеңме, ана, ана, шырт итеп ҡалды! – ти ҙә абыстайҙы иплəп кенә тотоп аяғына баҫтыра.



Манһыр менән Байыш араһындағы тау битләүе.
Был урындың энергетикаһы бик юғары

– Әстәғәфирулла, Нурия, был ысынмы? – ти Гөлйемеш абыстай. Гел хәләл ефете эргәһендә йөрөп, күпте күреп, күпте белгән, бер нәмәгә лә иҫе китмәҫкә өйрәнгән Гөлйемеш абыстай хайран ҡала. – Кеше белеп һине маҡтай икән дәһә.

– Оҫтаһың, Нурия ҡыҙым, оҫтаһың! – ти бөтә хәлде һынап ҡарап ултырған Мөжәүир хәҙрәт. – Киләсәктә ошо тирәнең данлыҡлы табибәһе булырһың, ин шәәъ Аллаһ, фатихамды бирәм.

Бөгөнгө көндә имселеге менән дан ҡаҙанған Иҫәнгилде табибәһе Нурия инәй, изге эшен бына шулай итеп, Мөжәүир хәҙрәт фатихаһынан башлап ебәрә һәм 45 йыллап тыуған халҡына алһыҙ-ялһыҙ тоғро хеҙмәт итә. Ул – 120 баланың кендек инәһе. Зарығып, имгәнеп, аяҡ-ҡулы һынып, умыртҡа һөйәге зарарланып, биле биртенеп килеүселәр бөгөнгө көндә лә унан йүнәлеп ҡайта. Бөтәһе лә, ауылдаштары ла, күренергә килеүселәр ҙә, туған-тыумаса ла, һөйләшеп ҡуйғандай, һикһән биш йәшлек табибәгә бер үк теләкте әйтә:

– Милләтебеҙҙең ҡото булып, еребеҙгә фатиха яуҙырып оҙаҡ-оҙаҡ йәшә лә йәшә, хөрмәтле Нурия инәй!

*Байгилдина Нурия,*
1922 йылғы, халыҡ табибәһе.
Хәйбулла районы, Иҫәнгилде ауылы

## Һеңлемдең исеме Гөлнур булһын

1946 йыл ине, сентябрь аҙаҡтары. Беҙҙең Ғәҙелша ауылында йәшәгән сағыбыҙ. Миңә 9 йәштәр тирәһе. Ғаиләбеҙгә ҡот, өйөбөҙгә йәм өҫтәп кенә бер ҡыҙ бала донъяға килде.

– Бәпәйгә исемде Мөжәүир хәҙрәттән ҡуштырайыҡ, – тине әсәйем. – Ул исем ҡушҡан балалар бәхетле була, ти.

Атайым да быға риза булды.

Бәләкәс кенә булһам да, бөтә ерҙә Мөжәүир хәҙрәт мөғжизәләренән хайран ҡалып телдән төшөрмәй һөйләгәндәрен ишетеп, күңелемә һалып йөрөйөм. Был ғәжәйеп кешене нисек күрергә тип йөрөгәндә, бына мөғжизә, ул беҙгә үҙе килергә тейеш. Хәҙрәт тураһында ниндәй генә иҫ китмәле тарих һөйләйҙәр, минең күҙ алдында ул әкиәт батыры һымаҡ. Шуға ла бик тә күрәһем килә. Төрмәлә саҡта бикле торған камера ишеген үҙе теләгән саҡта асып сығып йөрөй икән, тиҙәр. Кешенең ни уйлап килеүен дә һис яңылышмай әйтә, имеш һ. б.

– Инде ни эшләргә, данлыҡлы хәҙрәтте нисек итеп күреп ҡалырға? Әллә бөгөнгә мәктәпкә бармай торайыммы? Атайым асыуланһа? Эй, ярар, күп булһа кесерткән менән берҙе эләктерер.

Шулай тинем дә һарайға индем дә йәшендем. Атайымдың хәҙрәт олатайҙы алып ҡайтҡанын түҙемһеҙлек менән көтәм. Бына, ниһайәт, арба еккән ат ихатабыҙға килеп инде, атайым атты туғара башланы. Оҙон буйлы, яурынтаҡ кешенең йөҙөн күреп тә өлгөрмәнем, өйгә инеп тә китте. Хәҙрәт ингәс,

нимәләр булғанын миңә аҙаҡтан әсәйем һөйләне. Башта, исем ҡушырҙан алда, әсәйемдәр хәҙрәтте ҡунаҡ итмәксе булған.

– Әйҙә, табынға рәхим итегеҙ, – тигәндәр.

– Юҡ әле, тороп торогоҙ әле, аштан алда тышта бер ялбыр башлы ҡыҙ тора, шуны индерегеҙ, – ти икән хәҙрәт.

Был хәлгә аптырап ҡалған атайым тышҡа сыға, ә мин, исмаһам, хәҙрәттең тауышын булһа ла ишетеп ҡалайымсы, тип ишеккә ҡолағымды терәгәнмен дә тыңлап торам. Табынға ҡуйылған тәғәмдән дә тәҡәт иттермәй ауыҙ итке килә.

– Бәй-бәй, һин бында ни эшләп тораһың? – тине атайым мине күреп. – Әллә мәктәпкә бармаңыңмы? Дәресеңдән артта ҡалаһың бит.

– Ҡуй, ҡустым, ҡуй, шелтәләмә баланы! Ул бит мине күреп ҡалыр өсөн һабағына бармай ҡалды, – ти хәҙрәт көләмһерәп.

Атайым мине өйгә индерҙе.

– Кил, ҡыҙым, бында эргәмә ултыр, – тине хәҙрәт олатай үҙ ҡырынан урын күрһәтеп. Ҡулыма итле һөйәк тотторҙо. Миңә һынап ҡарап торҙо ла:

– Был баланың ҡулында тылсымы бар. Аслан уны рәнйетә күрмәгеҙ, теләгәнен эшләргә ихтыяр ҡуйығыҙ. Үҫеп еткәс, ул имсе буласаҡ, – тине.

Табындан торғас, хәҙрән аҙан әйтергә әҙерләнә башланы. Әсәйем бәпәйгә исемде Шәүрә тип ҡушырға ниәтләп йөрөй ине. Ә мин икебеҙҙеке оҡшаш булһын тип, Гөлнур тип ҡуштырғым килә. Хәҙрәт шунда көлөп ебәрҙе лә, арҡамдан тапап һөйөп:

– Ҡыҙым әйткәс, Гөлнур тип ҡушабыҙ инде, – тине һәм асыҡ итеп:

– Был ҡыҙ баланың исем-шәрифтәре Гөлнур булыр, – тине.

Шунда мин хәҙрәтте шул тиклем яраттым, шул тиклем яраттым! Кешенең ни уйлауын ғына белеп тормай, күңеле иркен, йөрәге мәрхәмәтле икәнен белдем.

Шул саҡта беҙҙең табында һөйләгән вәғәздәре бөгөн дә ҡолағымда тора.

– Ерҙе рәнйетмә. Үҫеп ултырған сәскәләр Хоҙайға тәсбих уҡып ултырыр, уларҙы һис бер тапама, өҙмә. Ерҙән фатиха алып йөрө! Юлда ятҡан ағас-ташты ситкә алып һалып йөрө! – Бына ошолар хәҙрәттән үҙ ҡолағым менән ишеткән һүҙҙәр. Мин уның өйрәткәндәрен ғүмерем буйы тотасаҡмын!

*Сирғәлина Гөлдәр*,
1937 йылғы, имсе.
Сибай ҡалаһы

## Рухы ҡыуанып ҡайтһын!

1960 йылдың йәйе, миңә 23 йәш кенә. Баштан сыҙамай ауырып киттем. Дауаханаға ла барып ҡарайым, дарыу ҙа эсәм, бер нәмә лә килешмәй. Аптырағас, ҡәйнәм мине Мөжәүир хәҙрәткә алып барып күрһәтеп, өшкөртөп ҡарарға булды. Был тиклем ҡаты ауырыу, ай-һай, «өфф-өфф» тип өрөүгә генә бөтөрмө икән, тигән икеле уй килә башҡа. Шулай ҙа ҡәйнәм әйткәс, уны тыңламай булдыра алманым. Сибайҙан Фәйзулла ауылы тапҡырына тиклем машина менән барып төшөп ҡалдыҡ та аръяғына йәйәүләп киттек. Ауылға инер алдынан бер йырынды аша сыҡтыҡ, алда ялтырап йылға күренде. «Был Урғаҙа йылғаһы», – тине ҡәйнәм. Йылғаға арҡыры һалынған баҫмаға баҫыуым булды, аша сығып та өлгөрмәнек, ҡапыл минең баш ауыртыуы ҡул менән һыпырып ташлағандай юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Был турала ҡәйнәмә әйтә һалдым.

– Хәҙрәттең ҡөҙрәте, – тине ул шатланып. – Һинең гоманлы икәнеңде белеп, хәлеңде еңеләйтергә ашыҡҡан. Шулай ҙа, килен, бер килгәс күренеп ҡайтайыҡ, – тине ҡәйнәм.

Бер аҙ буйҙан буйға һуҙылған оҙон сираттың иң аҙағына барып баҫтыҡ та көтә башланыҡ. Бер нисә көн ауырып йоҡлай алмағанлыҡтан, баш ебәргәс, үлтереп йоҡо килә. Түҙмәнем, йылға аръяғына сығып бер ағас төбөнә ултырып серем итеп алдым. Өйләгә тиклем беҙгә сират етмәне. Төш ауғас ҡына ишек төбөнә килеп еттек. Инде инәбеҙ тип торғанда, олатай өйөнән килеп сыҡты ла:

– Хәҙер бик ҡаты ауырыуҙы алып килеп еткерерҙәр. Был тирәлә торма, ҡыҙым, – тине миңә ҡарап. – Ауыр аяҡлы кешегә ундай зәхмәт тиҙ һирпелеүсән. Ана, баяғы кеүек, Урғаҙаның аръяғына сығып йөрөп тор, – тине лә кире инде.

Мин, килеүселәр алдан хәбәр итер ине, ауылда телефон-фәлән юҡ, ауырыуҙың килерен ҡайҙан белде икән, тип уйланым. Шулай ҙа, йөклө икәнемде лә әллә ҡайҙан белеп тороуы, баш ауыртыуын бөтөрөүе уның әйткәнен тыңларға мәжбүр итте. Мин һыу аръяғына сығып киттем, ҡәйнәм тороп ҡалды. Аҙаҡ ул миңә ошоларҙы һөйләне.

Кузовлы машинаға тейәп унынсы класта ғына уҡып йөрөгән йәш кенә егетте алып килгәндәр. Енләнеп ауырыусыны эргәһендә ыздарауай өс ир һаҡлап тора икән, барыбер тыйып тота алмайҙар, ти. Бахырҡай, аяуһыҙ тыпырсынып тулай, үрһәләнеп үҙен үҙе әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ташлай, ҡырағай тауыш менән ҡысҡыра, ти. Өс ир тегене тотоп тыя алмай. Шул саҡ өйҙән олатай килеп сыға. Доғаһын уҡып бер нисә ҡат өрөүе була, егет күҙ алдында үҙгәрә лә ҡуя: тынысланa, шып-шым була, үҙе ҡара тиргә бата.

– Был бала эҫкерт төбөндә йоҡлаған бит, ен ҡағылған, – тигән олатай. – Ярай, алып килгәнһегеҙ, балнистыҡы барыбер килешмәҫ ине. Ә хәҙер йүнәлер, – тип оҙатып ҡала.

Ҡәйнәм һөйләгәндәр мине шаҡ ҡатырҙы. Бая хәҙрәткә ышанмағандай итеп уйҙар уйлауыма оялып:

– Әстәғәфирулла тәүбә, эстәғәфирулла тәүбә, – тип тәүбәмә килеп, олатайҙан ғәфү үтендем, уйымды әүлиә белеп ҡалмаһа ярар ине, тип оялдым. Хәҙрәт ул көндө күпме кеше бар, барыһын да берәмләп ҡарап бөттө. Беҙ ҙә инеп сыҡтыҡ. Тоҙ өшкөрөп бирҙе. Ошо өшкөрөүҙән һуң, Аллаға шөкөр, бер ваҡытта ла башым ауыртманы, тешем һыҙламаны, име шулай ныҡ килеште.

1963 йыл ине, тормошобоҙ ниңәлер киреләнеберәк китте. Иремде, улымды алдым да Манһырға киттек. Иремә ҡарап ул бөтәһен дә нисек бар шулай туп-тура әйтте лә һалды:

– Хәкимйән ҡусты, һин өйләнгәндә киленде алтын тауҙар вәғәҙә иткәндәй булып алғанһың. Вәғәҙәңә тоғро булып ҡал, йәме. Шул саҡта үҙең дә, ҡатының да, балаларың да бәхетле булыр.

Мин йәнә хәҙрәттең, бер нәмә һөйләмәгән көйө, беҙҙең тормошто үтәнән-үтә белеп тороуына хайран ҡалдым. Аллаға шөкөр, Хәкимйәнем хәҙрәт олатай әйткәндәрҙе тотто, өс бала үҫтерҙек, матур ғүмер иттек.

Беҙҙең ул осрашыуға күп йылдар үтте, күп һыуҙар аҡты, әммә бөтәһе лә иҫтә һаҡлана. Йыш ҡына, их, әүлиәнең тере сағында ҡәҙерен белмәгәнбеҙ, тигән үкенесле уйҙар күңелде солғап ала. Әйе, хәҙер биш ваҡыт намаҙымды ҡалдырмаҫҡа тырышам, һәр намаҙҙан һуң әүлиәбеҙ рухына аят бағышлайым. Үҙе иҫән саҡта ризалата алмағанға күрә, исмаһам, хәҙер рухы ҡыуанып ҡайтһын, тим!

*Ҡәйепҡолова Фәриҙә,*
1937 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Күпме эсһәк тә самауырҙың һыуы бөтмәне

Беҙ бәләкәй саҡтан, ололар һөйләүе буйынса, Манһыр ауылында Мөжәүир тигән әүлиә йәшәүен, уның өшкөрөп кешеләрҙе һауыҡтыра алыуын, иҫ китмәле кəраməттәрен белеп үҫтек. Миңә ул әкиәт донъяһынан килгән серле зат булып күренә, шуға уны бик тә күргем килә торғайны. «Их, тылсым эйәһен бер генә күрһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем», – тип уйлағандарым иҫемдә. Ин шәәъ Аллаһ, күреү генә түгел, өйөбөҙгә саҡырып ҡунаҡ итергә, кирамәттәрен үҙ күҙҙәрем менән күрергә насип булды.

Элек-электән беҙҙең Икенсе Эткол яҡтарында Мөжәүир хәҙрәттең кирамәттәрен иҫе-аҡылы китеп, хайран ҡалып һөйләй торғайнылар. Бына шундай хәтирәләрҙең береһе.

Беҙҙең Икенсе Эткол яҡтары йәйрәп ятҡан дөм ҡара урманлыҡ. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан шул урман, ни ғилләменәндер, ныҡ ҡына ҡырыла. Яҙын көндөҙ ныҡ йылытып тороп, күп итеп ямғыр яуа ла, бер аҙҙан шатырлатып туңдырып ебәрә. Ағастар ҡалын боҙ менән ҡаплана, боҙло ботаҡтарына көсө етмәйенсә, һынып ҡолай, күптәренең тик төпһәһе генә тороп ҡала. Бер килке урман шулай ергә түшәлгәс, ауыл тирәһе күңелһеҙләнеп ҡалды. Был хәлде Мөжәүир хәҙрәт былай тип аңлатҡан: «Бер афәт сығырға тора, тәбиғәт шуны әшкәртә. Ошо тәләф булған ағас кеүек, әҙәм балаһы ла һәләк булыр инде».



لَآ اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ وَاللّٰهُ اَكْبَرُ
وَسُبْحَانَ اللّٰهِ وَالْحَمْدُ لِلّٰهِ وَ
اَسْتَغْفِرُ اللّٰهَ الَّذِىْ لَآ اِلٰهَ اِلَّا
هُوَ الْاَوَّلُ وَالْاٰخِرُ وَالظَّاهِرُ
وَالْبَاطِنُ يُحْيِىْ وَيُمِيْتُ وَهُوَ
حَىٌّ لَّا يَمُوْتُ بِيَدِهِ الْخَيْرُ
وَهُوَ عَلٰى كُلِّ شَىْءٍ قَدِيْرٌ ○

Ер һәм күк хазинаһы асҡыстары доғаһы

Ысынлап та, бер аҙҙан Германия менән миллион ҡорбандар талап иткән биш йылға һуҙылған ҡанлы һуғыш башланып китә. Халҡыбыҙҙың иң аҫыл ирҙәре еңеү өсөн башын һала. Аҙаҡ ишеттек: «Герман һуғышҡа әҙерләнә, беҙгә лә уяу булырға кәрәк», — тигән өсөн Мөжәүир хәҙрәтте төрмәгә ябалар, оҙаҡ ҡына ултырып ҡайта. Уның исемен әйтеү тыйыла. Әммә, властарҙың әҙәрлекләүенә ҡарамаҫтан, халыҡ уны теленән төшөрмәй. Ҡөрьән аштарында, төрлө дини байрамдарға йыйылғанда һәр кем уның менән ҡайһылай итеп осрашыуын, уны белеп күреүен, нисек өшкөрөүен, ниндәй мөғжизәләр күрһәтеүен хәтерләп һөйләй. Власть кешеләре, ни саҡлы тырышһа ла, ил ауыҙына иләк ҡаплай алмай. Иманым камил, хәҙрәт менән осрашыуҙан, уны күреүҙән һәр кемдең күңелендә иң изге хәтирә һаҡлана, телдән телгә күсеп һөйләнелә. Мин дә уның әсмухалы бөртөклө сәйҙе ҡайҙан алыуымды, иремде көсләшеп булһа ла үҙенә күрһәтергә тырышҡанымды белеүен, самауырҙың һыуын арттырыуын, иремде, Рәшиҙә исемле ҡыҙымды, дуҫ ҡатыным Фәхернисаның улы Тәлғәтте һауыҡтырыуын гел ғорурланып һөйләп йөрөнөм.

...Һуғыш һуңынан яҙмыш мине Ишмырҙа яҡтарына ташланы. Етешһеҙ генә йәшәйбеҙ, ирем аяҡ-ҡулы һыҙлап йүнләп эшләй алмай. 1953 йылдар. Ауылға хәҙрәт килгән икән, тигән хәбәр таралды. Ишмырҙаның иң өлкән аҡһаҡалы Әфләтунов Абдулла ағай хәҙрәтте йылдың-йылы саҡырып ҡайтара торғайны, быйыл да саҡырған икән. Мин иремә: «Олатайҙы саҡырып алайыҡ, ауырыйһың бит, күренеп ҡал», — тим. Ә ул риза түгел. Ит юҡ, ашҡа саҡырмағас, ҡоро

сәйгә генә оят бит, ти, һуя һалып ебәрер инек, ваҡ мал юҡ. Шулай ҙа өгөтләй торғас, ирем сәйгә саҡырырға риза булды. Хөрт кенә йәшәгәс, таҡта сәй генә, бөртөклө сәй ҙә юҡ. Маусуфа апайыма йүгерҙем. Ярай әле унда арыу сәй булып сыҡты. Иремә: «Бар, хәҙрәтте, Абдулла ағайҙы иртәнге сәйгә саҡырып кил», – тим. Ул һаман тиҫкәреләнә. «Беҙгә сират теймәҫ ул», – тип тик тора. «Яҙған булһа тейер, – тип әйтәм. – Иртәнге намаҙ бөтөүгә барып тор!» Үҙем сәй яһап эсерергә тартынып, күрше инәйгә өндәштем. Ул ҡыуана-ҡыуана килде. Ҡунаҡтар көттөрмәне, әйтелгән ваҡытҡа һуңламай килеп еттеләр. Ишектән ингәндән беҙҙе маҡтап килеп инделәр.

– Килендең уңғанлығы бына ошонан күренә: иртә торғандың эше бешә, һуң торғандың бите бешә.

Табынға ултырғас, хәҙрәт беҙҙең кем балалары булыуыбыҙҙы һораша башланы. Иремдең Мәмбәт ауылы Юныстың улы икәнен белгәс: «Мин уны беләм, ул миңә яҡын ғына кейәү тейеш», – тине. – Һин былай булғас, минең ейәнем булып сығаһың даһа. – Шунан миңә ҡарап йылмайҙы ла:

– Ҡыҙым, мине ниңә саҡырҙың әле? – тине.

– Бына улың ауырый: аяҡ-ҡулы һыҙлай, – тинем.

Хәҙрәт беҙҙе бер аҙ шаяртып алмаҡсы булды, күрәһең, көлөмһөрәп:

– Үҙең ауырымағас, кеше өсөн ниңә ыҙалайһың һуң? Мине саҡырғыһы килмәй ҡырталаша бит хәләлең.

Үҙе тағы көлә. Әйтерһең, беҙҙең кисәге һөйләшеүҙе үҙ ҡолағы менән ишетеп, тыңлап торған. Тағы мыйыҡ аҫтынан көлөп алды ла дауам итте:

– Кеше һимеҙ-һимеҙ һарыҡ ите ашата, ә һеҙ сәйгә генә саҡырҙығыҙ. Шулай ҙа ҡыҙымдың сәйе иттән дә һәйбәтерәк булды бит әле. Ярай әле күршеңдә хәлле генә апайың йәшәй икән, арыу сәйен, һеҙҙең һымаҡ әрһеҙләмәй, һандығында ғына тотоп һаҡлай икән.

Үҙе рәхәтләнеп көлә. Яңыраҡ бер әсмүхә сәйебеҙ булыуға, уны иремдең таҡта сәй эскем килмәй тип көсләп тотондороуына ишара яһауы ине олатайҙың. Бөтәһен дә ҡайҙан белеп-күреп тора, тип уйлайым эстән генә, үҙем тағы уйымды хәҙрәт белеп ҡуймаһын тип ҡурҡам. Ә хәҙрәт тағы мәрәкәләй:

– Эй, ҡыҙым, олатайығыҙҙы кешенең ни уйлауын белеп торған өсөн алып йөрөтәләр бит.

Хәҙрәт тағы ҡәнәғәтләнеп көлөп алды ла:

– Улым, тупһаң һәйбәт икән, иркәләп кенә ҡәҙерләп көт һин уны.

Абдулла ағай ҙа һүҙгә ҡушыла:

– Иркәләтә башлаһаң, ҡотора бит улар.

– Шәриғәт ҡатын-ҡыҙҙы ихтирам итергә, ҡәҙерләргә ҡуша, – тип уның фекерен кире ҡаға олатай.

Яйлап һөйләшә-көлөшә сәй эсә торғас, бер сак самауырыбыҙҙың һыуы бөттө лә ҡуйҙы. Мин кәрәк булһа тип күршеләрҙең самауырын алып торғайным, икеһен дә ҡушлап ҡайнатҡайным. Шуны индерәйем тиһәм, олатай рөхсәт итмәй:

– Ул самауырҙың һыуын үҙҙәре эсһен. Хәҙер үк үҙҙәренә кире илтеп бир.

Мин хәҙрәт әйткәнде тыңлап, самауырҙы шунда уҡ кире алып барҙым. Хәҙер ни эшләрмен икән, ҡайһылай итеп самауырҙы тиҙ генә тағы ҡайнатырмын, тип уйлап килһәм, күрше инәйем һаман бая уҡ һыуы бөтөргә тейешле самауырҙан сәй яһап эсеп ултыра. Мин аптырап киттем, түҙмәй әйтәм:

– Атаҡ-атаҡ, самауырҙың һыуы бөтмәй ҙә, ҡайһылай бәрәкәтле булды!

Олатай һаман мыйыҡ аҫтынан ғына көлөүен белә:

– Самауырҙа һыу күп әле, ҡурҡмағыҙ, эсегеҙ-эсегеҙ, бөтмәй ул. Сәйеңде яһа, яһа.

Эштең ниҙә икәнен аңламаған инәй, әҙерәк аптырап торҙо ла тағы сынаяҡтарға алҡындырып сәй яһарға тотондо. Бик күңелле итеп, көлөшә-көлөшә яйлап тороп рәхәтләнеп сәй эстек. Күпме эсһәк тә, самауырыбыҙҙың һыуы кәмемәне лә, бөтмәне лә. Олатай беҙҙән тиҙ генә сығып китергә ашыҡманы. Беҙгә тоҙ өшкөрөп бирҙе, доғалыҡ яҙҙы. Шунан аяҡ-ҡул һыҙлауға уҫаҡ япрағының бик ныҡ килешеүен әйтте.

– Етмеш төп уҫаҡ ағасынан япраҡ һыпырып алығыҙ, шунан уны быҡтырығыҙ, бер аҙ һыуый төшкәс, ауырыуҙы шуға урап һалып ҡуйығыҙ. Бик килешә, ин шәәъ Аллаһ, улыбыҙ һауығып китер. Уҫаҡ – Аллаһы Тәғәләнең фатихаһы

төшкән ағас ул. Уның япрактары (бармактарын тибрәндереп күрһәтә) бына ошолай итеп Хоҙайға тәсбих әйтеп ултыра.

Хәҙрәт беҙгә тағы бер үләндәрҙең шифаһы тураһында һөйләне, күп кенә өгөт-нәсихәт бирҙе, шунан һуң ғына фатихаһын биреп, бөтмәҫ дәүләт теләп, риза булып ҡайтып китте.

Ирем йүнәлеп, арыу ғына йәшәп киттек. Бәлә аяҡ аҫтында тигәндәй, 1961 йылда Рәшиҙә исемле ҡыҙым, уйнарға сығып киткән еренән, аяғын ауырттырып ҡайтты. Иртәгеһен ҡыҙымды Баймаҡҡа алып киттем. Врач анализдар бирергә ҡушты. Оҙон көнө буйына сират тора-тора анализдар тапшырҙыҡ. Иртәгеһен тағы килергә ҡушып ҡайтарҙылар. Ҡыҙым атлай алмағас, күтәреп алып йөрөтәм. Бер ҡайнағама барып йоҡларға булдыҡ. Ул Манһыр ауылынан ине:

– Былай итеп үҙеңде лә, балаңды ла ыҙалатып йөрөткәнсә хәҙрәт ағайға алып бар.

Ҡайттыҡ та ат егеп алып иртәгеһен киттек Манһырға. Барып ингәс тә хәҙрәт:

– Йә, ҡыҙым, килеп еттеңме, мин һеҙҙе көтөп ултырам бит. Был бала насар урында уйнаған. Бүтән ул ергә барып уйнама, йәме, ҡыҙым, – тине.

Ул бетеү яҙып бирҙе. Хәҙрәттең өйөнән Рәшиҙә ҡыҙым үҙ аяғы менән атлап арбаға сығып ултырҙы. Мөжәүир хәҙрәттең мөғжизәләрен, иренең килешеүен ни саҡлы күп ишетһәм дә был хәл йәнә мине хайран итте. Беҙҙең ул осрашыуға 50–60 йыллап ваҡыт үтһә лә, хәҙрәттең алсаҡ йөҙө, мәрәкәләп һөйләшеүе, иҫ китмәле кешелеклелеге һаман күҙ алдымда.

*Әминева Сәмигә,*
1924 йылғы.
Икенсе Этҡол ауылы

# Хәҙрәтте беҙгә Аллаһ үҙе ебәргән

– Беҙҙең ғаилә, туған-тыумаса Мөжәүир хәҙрәтте белеп, күҙ күрешеп йәшәне, уны сикһеҙ ихтирам итте. Атайым, әсәйем, күрше-тирә, килгән таныштар гел уның мөғжизә-кирамәттәрен һөйләп табынырҙай була, хайран ҡала ине, – тип башланы һүҙен Нәзифә апай.

– Атайым, Ибраһимов Саттар Әҙелмырҙа улы, Сибайҙың Рудник поселогы Силовая станцияһында (электр биреүсе сығанаҡ) оҙаҡ йылдар кочегар булып эшләне. Тырыш хеҙмәте өсөн Ленин ордены менән наградланды. Әсәйем Орҡоя, 8 бала әсәһе, тәрбиәле, ипле, кешелекле, ярҙамсыл ҡатын булды. Атайымдың хәҙрәт менән дуҫ икәнен белгәнлектән, уға күренергә теләүселәр, таныш-белештәр беҙгә килә торғайны.

– Ғәбделсаттар, тиҙ генә атыңды ексе әле, беҙҙе Манһырга алып бар, әллә нимә булды, баштан сыҙамайым, – тиҙәр, йәки башҡа төрлө рәнйеүҙең исемен атайҙар.

Йомшаҡ күңелле, кеше йәнле атайым көн тимәй, төн тимәй алып китә.

Бер ваҡыт кесе һеңлебеҙ Ғәлиәнең битенә шешек сыҡты. Битенең ныҡлап боҙолоп китеүенән ҡурҡҡан атайым атын йәһәтләп егеп Манһырға юлланды. Табип, ғәҙәтенсә, уларҙың килерен алдан белеп көтөп торған, һәйбәтләп тоҙ өшкөрөп биргән.

– Борсолмағыҙ, йүнәлер, ин шәәъ Аллаһ, – тип оҙатып ҡалған.

Манһырҙы сығып Фәйзуллаға ла етеп өлгөрмәйҙәр, шеш башта һурыға, бер аҙҙан яра бөтөнләй уңала. Был хәлгә хәҙрәттең өшкөрөү һәләте тураһында күпме белгән атайым хатта хайран ҡала. Ә бер-ике көндән биттәге шешектең эҙе лә ҡалмай.

Иҫемдә, атайым менән әсәйем ингән бераүгә Ғәлиә менән булған хәлде һөйләп:

– Хәҙрәтте беҙгә Аллаһы Тәғәлә үҙе ебәргән ул! – тип ҡыуанырҙар ине.

Нәзифә апайҙың хәтирәләре байтаҡ булып сыҡты. Бына тағы бер ҡыҙыҡлыһы.

– Бер апай тейешлебеҙҙең ире эсергә, ҡатын-ҡыҙ менән шаярырға яратты. Апайым: «Хәҙрәт олатай мөхәббәтле итеүгә тоҙ өшкөрөп бирә икән», – тигәнде ишетеп, нисек кәрәк еҙнәмде юхалап, Манһырға алып китә. Яртылыҡ юлда тоҙ алмауҙары иҫкә төшә. Боролоп инеп Кәрешкә ауылынан тоҙ алып сығалар, еҙнәм ике ярты ла һалып ала.

Хәҙрәт быларҙы мәрәкәләп ҡаршылай:

– Кәрешкәнән килеп алмаһағыҙ, Сибайҙа тоҙ менән араҡы бөттөмө әллә?

Күңел асырға яратҡан еҙнәмә тағы төрттөрҙө:

– Теге саҡта, ураҙа ваҡытында, Урғаҙа буйында ни эшләп йөрөгәйнең әле, ҡустым?

Еҙнәм, ысынлап та, эшнәләре менән ураҙа ваҡытында Урғаҙа буйында эске табыны ҡорорға булдылар. Уңарсы булмай, көслө ел сығып китеп, артынса ҡойоп ямғыр яуа башлай. Быларҙа араҡы ҡайғыһы китә.

Тиҙ генә машиналарына тейәләләр ҙә ҡайтырға булалар. Йөҙ метр ҙа бармайҙар, ямғыр туҡтай. Былар йәнә төшә – йәнә ямғыр яуа башлай. Еҙнәмдәр эштең ниҙә икәнен аҙаҡ ҡына аңлап алалар ҙа тиҙерәк һыпыртыу яғын ҡарайҙар.

Әле шулар иҫенә төшкәс, еҙнәмдең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китә, оялмайынса килеүенә үкенә. Тағы берәй ҡырын эшен һөйләп ҡатыны алдында ҡыйын хәлгә ҡалдырып ҡуймаһа ярар ине, тип тартына.

– Ҡурҡма, ҡурҡма, сереңде сисмәм, – тип һаман уны мәрәкәләй хәҙрәт. – Тик шуны бел, бәйеле аҙмай, ир-атҡа

бәлә килмәй, шашҡын хистәрҙе ауыҙлыҡламай донъя көтөп булмай.

«Ҡайҙан бөтәһен белеп тора?» — тип хайран ҡала еҙнәм.

Бына улар өшкөрөлөп, тоҙ өшкөртөп алып, Урғаҙаның аръяғында ҡалған машинаһы янына йүнәлә. Еҙнәмдең ишекте асырға тип тотҡаға үрелеүе була, унда эленеп торған теп-тере йыланды күреп, ҡото оса. Ишекте икенсе яҡтан асырға итә, унда ла йылан аҫылынып тора. Инде ни эшләргә тигәндәй, артына боролһа, ҡапҡа төбөндә хәҙрәт рәхәтләнеп көлөп тора, ти.

— Кабиналағы теге ике шешәң ике ҡара йыланға әүерелгән бит, әйтәгүр. Инде ни ҡылырһың икән, шәп ир? Йыландарҙы кире индереп һалырһыңмы, әллә анау һаҙға шыуыштырһындармы? — ти икән.

Ҡото осҡан еҙнәм шешәләрен сумкаһынан алып бырғай ҙа был хикмәтле ерҙән тиҙерәк ҡасырға ашыға.

Еҙнәгә им-том бик тә килешә: эсеүен дә, һулға йөрөүен дә ҡуйып, өлгөлө ғаилә башлығы булып китә.

Мөжәүир хәҙрәт тураһында бик күп белгән Нәзифә Ибраһим ҡыҙы үҙе менән булған бер ғәжәп хәлде һөйләп, йәнә һушты алды.

— 1963 йылдар, миңә 31 йәштәр тирәһе, — тип башланы ул хәтирәһен. — Аяғымдың баш бармағы шешеп китте. Дауаханаға барғайным, бармағыңды ҡырҡырға кәрәк, тинеләр. Их, Мөжәүир хәҙрәткә күренгәндә? Барыбер яйын табып йүнәлтер ине, тим. Тик мине унда кем генә алып барһын? Атайым күптән гүр эйәһе. Автобус менән Фәйзулла ауылына тиклем барып төшөп ҡалыр инем, аръяғына етеһигеҙ саҡрым йәйәү атларға. Ауыртҡан аяҡ менән был мөмкин түгел. Көнө-төнө, их, ҡайһылайтып ҡына хәҙрәт олатайға барырға, тип уйлап йөрөй торғас, бер көн төш күрәм. Имеш, олатай ап-аҡтан ғына кейенгән дә урындыҡҡа минең ауыртҡан аяҡты өшкөрөп ултыра. Ап-асыҡ күрәм, имеш, шешкән бармаҡтың эсенән ике ҡарыш оҙонлоғондай йылан сығып китте. Өндәге кеүек олатайҙың тауышын асыҡ итеп ишетәм:

— Йоҡондан тороуға бармағың төҙәлер, ин шәәъ Аллаһ, — ти ул.

Мин уянып киттем дә тора һалып аяғыма ҡарайым: бармаҡтағы шеш уңала яҙған, һыҙлауы баҫылған. Ағыма туфли кейеп урам буйлап китеп барам, ә шатлығым эсемә һыймай. Бөтә донъяны яңғыратып һөрән һалғы килә:

– Рәхмәт, хәҙрәт олатай! Мең-мең йәшә! Һинең һымаҡ кеше донъяла бүтән юҡ!

*Ибраһимова Нәзифә*,
1932 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Ҡартәсәйем Ҡөрьән менән дауалаһы

Ҡартәсәйебеҙ Көмөшҡолова Гөлъямал (ҡыҙ фамилияһы Дәүләтбаева) өшкөрөнә, йәғни, доға уҡый-уҡый, өрөп имләүе менән тирә-яҡҡа дан алған халыҡ табибәһе була торғайны. Иҫемдә, беҙ бәләкәй саҡта, уны эҙләп әллә ҡайҙарҙан, хатта ҡаҙаҡ яҡтарынан килеп етерҙәр, яҡшы машиналарға ултыртып, үҙҙәре менән алып ҡайтып китерҙәр ине. Ҡаҙаҡ далаларында айҙар буйы йөрөп, кешеләрҙе Ҡөрьән менән дауалап, өшкөрөүҙәре килешеүгә үҙе балалай ҡыуанып, ҡайтып төшөр ине. Өҫ-башын сынъяһау итеп кейендереп, намаҙлыҡтар, беләҙектәр бүләк итеп, күстәнәстәр тейәтеп, үҙ яғын, туған-тыумасаһын һағынған ҡартәсәйемде ҡәҙерләп алып килеп ҡалдырырҙар ине, — тип хәтерләй Рәйсә ейәнсәре.

— Гөлъямал инәй бәүелен тота алмаған улыбыҙҙы йүнәлтте, быума сирлене имләне, башы ауыртып йонсоған әсәйебеҙҙе өшкөрөп һауыҡтырҙы; ҡыҙып, енләнеп ауырыған баланы бәпләп ипкә килтерҙе; өй һайын йөрөп Ҡөрьән уҡыны, — тип, уны маҡтап, ололоҡлап, иҫ китмәле сихәтләндереү һәләтенә хайран ҡалып, ҡайтып китерҙәр ине, — ти ҡыҙы Гөлйыһан да. — Әсәйемдең доғалары бала саҡтан күңелемә һеңде. Хәҙер үҙем дә, ин шәәъ Аллаһ, биш ваҡыт намаҙымды ҡалдырмай, изге дин юлында йөрөйөм.

— Совет заманы, диңгә ҡаршы мәктәптәрҙә көслө агитация алып барылған саҡ. Иҫемдә, шунлыҡтан беҙ ҡартәсәйебеҙҙең билдәле имсе булыуынан ояла торғайныҡ. Уҡытыусыларҙың

мәктәптә өйрәтеүе буйынса, имселекте иҫкелек ҡалдығы, наҙанлыҡ билдәһе тип белә инек. Их, ниндәй аяныслы! – тип үкенә хәҙер ейәнсәрҙәре. – Ниндәй ғилем эйәһе эргәбеҙҙә йөрөгән, саф алтындың ҡәҙерен белмәгәнбеҙ! Ҡартәсәйебеҙҙең:

– Үәй-үәй, был ғүмерҙәр, минең доғаларымды бер ишетеү өсөн бөтә байлығын бирергә әҙер кешеләр булыр, тик мин булмам, – тигән һүҙҙәре иҫкә төшһә, ятып иларҙай булабыҙ.

Беҙҙе эргәһенә ултыртып алыр ҙа, күҙҙәрен нурландырып, ҡартәсәйебеҙ Манһырҙың данлыҡлы әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәт тураһында һөйләр ине:

– Миңә ҡырҡ ете йәштәр тирәһе булғандыр, Мөжәүир ағайым килһен тип әйтеп ебәргән. Ни булды икән, әллә үҙем дә белмәйенсә берәй хилаф эш ҡылдыммы, тип ҡурҡа-ҡурҡа ғына барам. – Өләсәйебеҙ тағы дәртләнеберәк дауам итә. – Ағайым мине ихлас ҡаршы алды. Эргәһенә ултыртып алып, хәл-әхүәлемде һорашты. Шунан етди һөйләшеүгәә күсте:

– Аллаһы Тәғәлә юғарынан һәр бер ергә тейешенсә имсе-табиптарын тигеҙләп бүлеп тәғәйенләп сыға. Бына мин ошо ергә төбәп ебәрелгәнмен, ошо төбәкте ҡарарға тейешмен, – тип һүҙен башлаған олатай, – һиңә лә бит Аллаһтан кешеләрҙе сихәтләндереү һәләте, илаһи көс бирелгән, Гөлъямал туғаным, һиңә силсилә ҡылынған! Бынан түбән кешеләрҙе Ҡөрьән менән дауалаһын, өшкөрөүе, тыны килешһен тип, һиңә юғарынан көс ебәрелгән.

– Силсилә нимә ул? – тип һораған ҡартәсәй.

– Силсилә – илаһи көстөң рух аша бирелеүе, йәғни, туранан-тура Аллаһы Тәғәләнең бирелгән сер ғилеме. Уны институтта уҡып та, академия бөтөрөп тә алып булмай.

Шулай итеп, ағаһы уны ипләп-ипләп байтаҡ нәмәгә өйрәтә, сер ғилеменә күҙен аса.

– Им-томдоң да юлдары төрлөсә була: берәүҙәр – ҡул көсө, икенселәре – шифалы үлән-тамыр, өсөнсөләре әмәл-әпсен менән һауыҡтыра. Ә һинең юлың – Ҡөрьән сүрәләре аша шифа биреү булыр, ин шәәъ Аллаһ. Быға мөҙҙәт етте инде, ауырыуҙарҙы ҡабул итеп, ҡарай башларһың, – тигән.

– Нисек? Минме? – тип хайран ҡалған ҡартәсәйебеҙ.

– Эйе, һин! – тигән олатай. – Бына мөритем булыу

иҫтәлеге итеп һиңә тиҫбемде бирәм. — Хәҙрәт зәйтүн ағасынан яһалған, хаждан ҡайтҡан тиҫбене һеңлеһенең ҡулына тоттора. Эргәңдә ошо тиҫбе барҙа яман күҙтәр һиңә зыян килтерә алмаҫ, ауырыуҙарҙың сир-соро һиңә ҡаҡлыҡмаҫ. Өшкөргән саҡтарыңда тиҫбең гел эргәңдә булһын, рөхсәтемде бирҙем, туғаным, әйҙә, тотон Хоҙай ҡушҡан эшкә, — тигән. Өйрәтеп тағы шуны әйткән: имселек нәфсене һөймәй, һин кешеләрҙе Аллаһ хаҡы өсөн сихәтләндерәһең. Уй-ниәтең гел изге булһын, яман эштәрҙән йыраҡ йөрө, хатта насар уй уйлама. Аллаһы Тәғәләнең һайлам бәндәһеһең, һәр эшеңде уйлап эшләргә, һәр һүҙеңде үлсәп һөйләргә өйрән. Белеп тороп та гонаһ ҡылһаң — юйылмай. Үҙе тағы өҫтәп ҡуйған: үпкәләмә былдай иҫкәртеү өсөн. Мин быны эшләргә тейеш инем. Һинең бар булмышыңды үтә күрәм, тотҡан юлың хаҡ, йәнең-тәнең пак, тормошоң ауыр булһа ла биш ваҡыт намаҙыңды ҡалдырмайһың, фиғелең изге.

Шул көндән башлап, Мөжәүир хәҙрәттең ҡушыуы буйынса, Гөлъямал инәй Ҡөрьән менән дауалау серҙәрен өйрәнә башлай, зирәк ҡатын доғаларҙы тиҙ ятлай, уларҙың серенә тиҙ төшөнә, бөтә иждиһатын һалып бер нисә ҡат Ҡөрьән сыға. Шунан ғына әкренләп изге эшкә тотонорға баҙнат итә.

Күршеһенең өс йәштәр тирәһендәге малайы бите, тәне ҡутырлап ауырып китә. Аҙна-ун көн тирәһе дауаханала ятҡырып сығаралар, килешмәй. Бысылдап торған лыс ҡутыр көйө ҡайтарып ебәрәләр. Ҡартәсәйебеҙ ниндәйҙер йомош менән быларға барып инһә, теге бала ауырыуы аҙып, бите, тәне бысҡылдап, күҙен саҡ асып ҡарап ултыра, ти. Ҡартәсәйебеҙ доғалары менән өшкөрөп-өшкөрөп ҡайтып киткән. Өс көндән һуң барып ҡараһа, ни ғәләмәт, теге баланың тәне тап-таҙа икән. Күршебеҙ ҡыуанысынан Фирғәт тигән был улын «Гөлъямал малайы» тип йөрөтә башлай.

Күптәрҙе аяҡҡа баҫтыра ҡартәсәйебеҙ. Уның һауыҡтырыу һәләте бөтә тирә-яҡҡа тарала. Бына ҡайһындай көс-көҙрәткә эйә булған беҙҙең ҡартәсәйебеҙ! Күңелдә әйтеп аңлата алмаҫлыҡ үкенес: ниңә быны беҙ һуңлап аңланыҡ икән? Бер ниндәй махсус белеме булмаған яп-ябай бер ауыл әбейе ауырыуҙарҙы һауыҡтыра алһын әле... Бәлки, һәләтенә

ышанып етеңкерәмәгәнбеҙҙер. Ә күптәр бит ҡартәсәйҙе аңланы, ҡәҙерен белде. Эргәһенән кеше өҙөлмәне: кемдер доғалыҡтар яҙҙырып ала, икенселәре өшкөрөүен һорай. Кәңәш һорап килеүселәр ҙә өҙөлмәй торғайны. Хәҙер шул саҡтарҙы уйлап, ҡартәсәйебеҙҙе яңынан терелтеп ултыртырҙай булабыҙ. Ейән-ейәнсәрҙәре бергә йыйылып алабыҙ ҙа ҡартәсәйебеҙҙе һағынып, уның беҙгә һөйләгәндәрен хәтеребеҙҙә барлайбыҙ, кирамәттәрен, холоҡ-фиғелен хәтерләйбеҙ.

– Кил, ҡыҙым, бер-ике доға уҡып өрөп ебәрәйем, талсығып тораһың бит, тиеп әйтер ҙә эргәһенә ултыртып өшкөрә башлар ине, – тип иҫкә ала Роза ейәнсәре.

– Иң беренсе – Аллаһы Тәғәлә! Унан Мөхәммәд пәйғәмбәр, беҙҙең Мөжәүир ағай шулар ҡоронан булыр, ул да юғарынан ебәрелгән илсе-әүлиә, – тип әйтергә ярату ҡартәсәйебеҙ. Дин юлын үҙ иткән ейәнсәре Рәшиҙә ҡартәсәһенең ошо һүҙҙәрен күңелендә һаҡлай.

Йылайыр совхозында йәшәгән ҡыҙы Гөлйыһан әсәһен иҫкә алып былай ти:

– Ул хәҙрәт әйткәнде юғарынан ҡушылған фарман итеп ҡабул итте һәм урыны-еренә еткереп үтәргә тырышты. Олатайҙың: «Тыуған тәбиғәтте, Хоҙай биргән хозур донъяны, ер-һыу, тау-урман, ялан-ҡырҙарҙы һаҡлау – иң сауаплы эш. Ерҙә үҫкән һәр үҫемлек, һәр сәскә Аллаһуға тәсбих әйтеп ултыра, уны урынһыҙ өҙөргә йә тапарға һис ярамай», – тигән һүҙен дә, шишмәләрҙе тәрбиәләп торорға ҡушыуын да ул тайпылышһыҙ үтәне. Юлда ағас-таш күрһә, мотлаҡ алып ситкә һалыр ине.

Гөлйыһан апайҙың ҡыҙы Роза табибәнең ейәнсәре, ҡартәсәһе менән еләккә барған саҡтарын хәтерләп, ошоларҙы һөйләне:

– Еләккә барырға тип сыҡһаҡ, юлда шишмәләр осрай. Ҡартәсәйем тубыҡланып тороп ала ла, ике еңен һыҙғанып, шишмәнең башын таҙалай башлай. Беҙҙән эре-эре таштар килтертеп, уны кәртәләп ҡуя. Шунан ғына юлыбыҙҙы дауам итәбеҙ.

– Ниңә улай итәһең? – тим ҡартәсәйгә, – ваҡыт үтә бит?

– Мөжәүир ағайым ҡушты, – ти. – Манһырының әйләнә-тирәһен йәнендәй күрер ине. Ерен һөрҙөртмәне, тау

битләүҙәрен һарыҡ-кәзәнән тапатманы, һирәк осрай торған сәскә-үләнде өҙҙөрмәне. Аяҡ баҫҡан һайын Аллаһҡа рәхмәт әйтегеҙ, еребеҙ хазина ғына тиеп әйтер ине.

– Ысынлап та, әсәйебеҙҙең Аллаһы Тәғәләнән, Мөхәммәд пәйғәмбәрҙән ҡала донъяла иң ололоҡлаған кешеһе Мөжәүир хәҙрәт булды, – тип хәтерләй ҡыҙы Гөлйыһан. – Мөжәүир минең ағайым: уның әсәһе Мәрғүбә менән минең атайым Мәсәлим икеһе бер туғандар, улар икеһе лә Дәүләтбай ҡарттың балалары, тип ғорурланыр ине. Әсәйебеҙ Гөлъямал Мөжәүир хәҙрәттән 27 йәшкә кесерәк. 1903 йылда тыуып, 1987 йылда гүр эйәһе булды. Инде икеһе лә ысын донъяла ята.

Гөлйыһан апай әсәһенең Мөжәүир хәҙрәткә ҡағылышлы тағы бер фәһемле хәтирәһен иҫенә төшөрҙө.

Йәнйегет ауылында Гөлъямал инәйҙе сәбәпһеҙгә бер ҡатын гел рәнйетер булған. «Һин – кулак балаһы, һин халыҡ дошманы ҡалдығы. Хафизың хас дошман булмаһа, Мәскәүгә үк алып барып атмаҫтар ине. Халыҡ дошманының ҡалдыҡтары беҙҙең балалар менән уҡымаһын, улар «Аллаһу Әкбәр» әйтеп совет балаларын боҙа һ.б.»

Биш баланы яңғыҙы тәрбиәләп былай ҙа ахмалға төшкән ҡатын телгә тел ҡалҡытып бер ни яуап бирмәй. Ире Хафиздың да бер гонаһһыҙ икәнен беләә, үҙенең дә бер кемгә насарлыҡ эшләгәне юҡ. Нескә күңелле ҡаты рәнйегән тол ҡатын бары тик Аллаһына ғына һыйына, унан ғына шәфәғәт көтә.

Шулай донъяға һыймаҫтай булып йөрөп ятҡанда теге ҡатындың ҡыҙы ҡаты итеп сирләп китә. Дауаханалар буйлап байтаҡ йөрөтә улар һөйөклө балаһын, ниндәй генә диагноз ҡуйылмай ауырыуға, ниндәй генә дарыу менән дауалап ҡарамайҙар. Ахырыһы, төҙәлмәҫ, үлер инде был сабый, тип врачтар өмөт өҙә. Ата-әсә һуңғы һаламға тотоноп ҡарай: аптырап-алйығас, ҡатын балаһын үҙе мыҫҡыл итеп йөрөгән дин әһеленә, Мөжәүир хәҙрәткә, күрһәтеп ҡарарға була. Хәҙрәт уны һалҡын ҡаршылай:

– Ҡыҙыңды бер генә кеше кире аяҡҡа баҫтыра ала, – ти.

– Кем? – Әсәнең күҙҙәрендә өмөт осҡоно тоҡана.

– Йәнйегет ауылындағы Гөлъямал табибә.

– Минең уға барғым килмәй.

– Ниңә?

Ҡатын ыҡ-мыҡ итә. Гөлъямалды нисек ыҙалатҡанын һөйләп бирә алмай бит инде ул хәҙрәткә.

– Эйе, һинең ҡыҙыңды тик шул имсе генә һауыҡтыра ала, – ти ҙә боролоп инеп китә. Берәүҙең дә ғәзиз балаһын үҙ ихтыярын гүргә илтеп һалғыһы килмәй. Әлеге ҡатын үҙе көн күрһәтмәй хурлап йөрөгән имсегә башын эйеп килергә мәжбүр була. Мәңге килмәç ине, зарурат мәжбүр итә. Гөлъямал табибә уны йылы ҡаршы ала. Үтенесен кире ҡаҡмай. Баланы бөтә ихласлығын һалып өшкөрә.

– Ин шәәъ Аллаһ, йүнәлер, – ти. – Тик башҡаса нахаҡҡа кеше рәнйетмә! Ер өҫтөндә миңә лә, һиңә лә урын етә, Аллаһы Тәғәләнең күҙрәте киң!

– Был хәл хәҙрәтебеҙҙең сираттағы бер хикмәте булғандыр. Үҙе иршатын (рөхсәтен) биргән ҡәрендәшен ул шулай итеп яҡлаған булыр, – тип һүҙен тамамланы Гөлйыһан апай. Шунан йомғаҡлап ҡуйҙы: – Ин шәәъ Аллаһ, хәҙер әсәйемдең бөтә балалары, ейән-ейәнсәрҙәре хәҙрәтебеҙ һәм әсәйебеҙ күрһәткән изге юлдан, дин юлынан бара: Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм берлеген таный, доғаһыҙ юлға сыҡмай, бисмилләһеҙ эш башламай, тыуған ерен һаҡлай.

Гөлйыһан апайҙың һүҙҙәренең хаҡлығын мин дә раçлай алам. Былтыр йәй беҙ Гөлъямал инәйҙең ейәнсәре Розалар менән Яугүл буйына ял итергә сыҡтыҡ. Ғаилә башлығы Йосопов Рәис, улы Тимур, ҡыҙы Гүзәл үҙҙәренең әҙәп-тәртибе менән мине хайран итте. Хәҙрәтебеҙҙең, әүлиәбеҙҙең ятҡан, һаҡларға ҡушҡан урыны тип килеп төшөү менән тоҡ алып, күл буйында йыйылған бөтә сүп-сарҙы, тырым-тыраҡай ятҡан ҡый-ҡыпырҙы күмәкләп тиҙ генә йыйып алдылар, шунан ғына һыу инергә төшөп киттеләр. Был күргәнем атай-әсәй, изгеләр әйткән-өйрәткән юҡҡа сыҡмай, быуындан быуынға аманат булып ҡалыуға бер дәлил булды.

*Буләкова Рәйсә*,
1956 йылғы.
Байым ауылы

## Гел бойҙай урлап йөрөмә, һолоһон да ал

– Хәҙрәт олатайҙы мин белеп үҫтем, – тип һүҙен уратыбыраҡ башланы элекке тракторсы, фронтовик ҡатыны Һәҙиә апай. – Әсәйемдең бер туған ағаһы Мөхәммәтғариф менән улар бала саҡтан, Иҙелбайҙа, Муллаҡайҙа бергә уҡып, йән дуҫтар булды. Аҙаҡ та бер-береһен ҡәҙер итеп, яҡындан ҡатнашып йәшәнеләр. Муллаҡайҙағы хәлдәр тураһында һабаҡташы Мөхәммәтғариф ошоларҙы һөйләй торған булған:

– Бергәләп ятып йоҡлайбыҙ, уянып китеп ҡараһам, Мөжәүир эргәмдә булмай. «Ҡайҙа икән тип тороп эҙләйем. Бәй, ҡараһам, мейес артында сытыр өҫтөндә ята. Ни эшләп бында ятаһың, тим. Һине маҙаһыҙламаҫ өсөн, ти дуҫым. Уны ғәйбәрәндәр, йәғни, фәрештәләр уҡытты, – ти торғайны ағайым.

Тырышып донъя көткән уңған Мөхәммәтғарифты, кулак тигән булып, 1931 йылда ҡулға алалар, 10 йылға хөкөм итеп, төрмәгә ябалар. 1941 йылда, етмешкә етеп килгәндә генә, ауылы Кәрешкәгә әйләнеп ҡайта. Бер нисә йылдан хәҙрәт тә тотҡонлоҡтан ҡотолоп, имен-аман ҡайтып төшә. Айырылмаҫ дуҫтар йәнә бергәләшеп ҡатнашып йәшәп китә. Әсәйемдең ағаһы Мөхәммәтғариф дуҫынан биш йыл алда гүр эйәһе була. Дуҫын ерләшергә килгән Мөжәүир хәҙрәт күҙҙәренә йәш алып:

– Мөхәммәтғариф үлде, Кәрешкәнең теләк ҡапҡаһы ябылды, – тип әйткән.

Һәҙиә апайҙың хәҙрәт тураһындағы хәтирәләре күп, бик күп. Бына шуларҙың береһе.

– 1941 йыл тракторсылар курсын тамамлап, ҡатын-ҡыҙҙар бригадаһын ойоштороп, эшләп йөрөйбөҙ. Йәшереп кенә бойҙай алып ҡайтҡылайбыҙ, – тип хәтирәләрен бәйән итә башланы инәй. – Бер көн шулай төнгө сменанан арып ҡайттым да ял итергә ятырға йөрөйөм. Әсәйем:

– Ятмай тор, ҡыҙым, хәҙер Мөжәүир олатаң килә, миңә сәй әҙерләш, – тине. Иң ҡәҙерле ризыҡты, икмәкте өҫтәлгә телеп ҡуйҙы.

Олатай, ғәҙәтенсә, сәләм биреп, йылмайып-көлөп, трактористкабыҙ өйҙәме, тимер аты сығынсыламаймы, тип мәрәкәләп килеп инде. Бергәләп сәй табынына ултырҙыҡ. Бер-ике сынаяҡ сәй эскәс, олатай мине, ялбыр баш, кил әле эргәмә, тип саҡырып алды ла ашъяулыҡтан алып ҡулыма ике һыныҡ икмәк тотторҙо.

– Мә әле, ошоно минең атыма ҡаптырып ин, – тине.

Олатай ҡушҡанды тыңламай булмай. Үҙем сығып барам, эстән уйлап барам:

– Әсәйемдең ыҙалап ҡул тирмәне менән тартып ҡына бешергән икмәген ниңә әрһеҙләп атына ашата икән? – тим.

Ҡушҡанын үтәп өйгә ингәйнем, олатай мине йәнә эргәһенә саҡырып алды:

– Гел бойҙай ғына урлап йөрөмә, икенселәй, олатамдың дуҫы килһә, һолоһон да алып ҡайтып ҡуй, – тип көлдө. Мин оялып ҡыҙарындым.

– Оялма, ҡыҙым, – тине хәҙрәт. – Ул һеҙҙең ҡул көсөгөҙ. Эшләгән кеше ешләргә лә тейеш. Ана, атҡа ла ҡамыт кейҙерер алдынан башта ашатып алалар. Тик ошо көндәрҙә һеҙгә һаҡ булырға кәрәк.

Ул ике бармаҡҡа ике бармағын һалып элмәк яһап күрһәтте, ҡапҡанға эләгеп ҡуймағыҙ, тигәнде аңлатты.

– Иптәштәреңә лә әйтеп ҡуй, теге НКВД-ның ҡоторған эттәре шашты, ошо арала беҙҙең яҡтарга килеп сығыр. Бер ус та нәмә һалып алмағыҙ, – тип ҡат-ҡат киҫәтеп әйтте.

Иртәгеһенә эшкә барғас, Һәҙиә әхирәттәренә быны аңғартырға ашыҡты. Араларынан берәү генә ышанманы:

– Чушь, – тигән булды. – Әкиәт для дураков. – Үҙе мыҫҡыллы йылмайып ауыҙын салышайтты. – Бигерәк белемсе булып китә ул бабай.

Бына бер нисә көндән ауылға НКВД кешеләре килеп тә төшә. Эштән ҡайтып килеүселәрҙе туҡтатып тентеү башлана. Хәҙрәт әйткәнде тыңлағандар тауҙай бәләнән ҡотола, ә теге ҡатындың моҡсайында бер-ике килолай ғына бойҙай табыла. НКВД-сыларға шул етә ҡала. Меңкенде, ире һуғышта Тыуған ил өсөн ҡан ҡоя, ике балаһы бар, тип тә тормайынса һис бер йәлләүһеҙ иркенән мәхрүм итәләр. Ә үкһеҙ ҡалған улы, ҡыҙы балалар йортона оҙатыла. Кеше башы бер кило бойҙай шайы ла тормаған замана ине шул. Аҙаҡ ул ҡатын бик үкенгән тиҙәр хәҙрәтте тыңламағанға. Ни хәл итәһең, эш үткәйне. Ул тракторсы ҡатындың, иренең, балаларының яҙмышы ла ауыл халҡы өсөн билдәһеҙ көйө ҡалды. Беҙ, бәләнән ҡотолоп ҡалғандар, хәҙрәткә ниндәй рәхмәттәр әйтергә лә белмәй, ҡыуандыҡ.

Бына ошондай хикмәтле хәлде һөйләп бирҙе Һәҙиә апай. Үҙе хәҙрәттең бынан 50–60 йылдар элек яҙып биргән бетеүен, өшкөртөлгән тоҙон ҡәҙерләп һаҡлай икән.

– Баштан, йөрәктән ауырыным, аяҡ-ҡулым һыҙлап йонсотто, бирешмәнем. Хәҙрәт өшкөрөп биргән тоҙ, яҙып биргән бетеү, доғалар арҡаһында ошоғаса йәшәнем. – Мөжәүир хәҙрәт әйтеп ҡалдырған васыятты тотоп йәшәүе менән дә ғорур Һәҙиә инәй.

– Аслан Хәсән ауылынан тайпылмағыҙ, – тине хәҙрәт олатай. – Был ауыл бер ҡасан да бөтмәйәсәк, мәсете ҡалҡып сығып, ҡабаттан терeләсәк, тигәйне. Ҡыҙым, әсәй, киттек Сибайға, бер үҙеңә ҡыйын бит, ти. Хәҙрәт ауылығыҙҙы ташламағыҙ, тип васыят әйтте, бер ҡайҙа ла китмәйем, үлгәнсә ошонда торам, тим.

Хәҙрәт әйткән һәр һүҙҙең хаҡлығына инанып йәшәгән, инде туҡһанды ҡыуған, күңеле тулы хазина Һәҙиә апай менән осрашыу күңелдә һоҡланыу хисе ҡалдырҙы.

*Рыскужина Һәҙиә,*
1922 йылғы.
Баймаҡ районы, Хәсән ауылы

## Артыңа әйләнеп ҡарама

Беҙ бәләкәй саҡта Мөжәүир хәҙрәт олатай Байрамғол ауылының (хәҙер был ауыл бөткән инде) иң оло кешеһе Абдулла апаларға килә торғайны, һигеҙ генә өйҙән торған был бәләкәй генә ауыл кешеләре бөтәһе лә хәҙрәтте белә, сикһеҙ хөрмәт итә, уға күренеп ҡалырға ашыға, уны ҡунаҡҡа саҡырып, ҡәҙер-хөрмәтен күрһәтергә тырышыр ине.

Иҫемдә, беҙ яҙа баҫып, аяҡтан яҙып ултырған ун йәшлек Йәмилә апайымды ла күрһәтеп ҡалырға булдыҡ. Беҙ олатайҙы үҙебеҙгә саҡырып алдыҡ. Табынға ултырыу менән ул бер баш һуған һорап алды. Уның тыуын әрсене лә эҫе генә итеп яһалған сәйгә һалды. Бер аҙҙан Йәмилә апайымды эргәһенә саҡырып ултыртып сәйгә һалып бешерелгән һуғанды бөткәнсе ашарға ҡуҡты. Апайым аҙаҡ гел шул хәлде хәтерләп беҙгә ошолай тип һөйләй торғайны:

– Бешкән һуғанды ашай торғас, тирләп киттем, оялып бөттөм, олатай әйткәс, тәки ашап бөттөм. Ошоно ашап бөтһәң, шешкән аяғың көнө бер йүнәлер, бүтәнсә аяҡ тип йөрөмәҫһең, һыҙлап та ыҙалатмаҫ, тигәйне олатай, ысынлап та, хәҙрәттең әйткәне килде, бүтән бер ваҡытта ла аяғыма зарланманым.

Атайым менән әсәйемдең дә аҙаҡ аптырашып һөйләшкәндәре иҫтә:

– Өшкөргәне лә һиҙелмәне, баланы былай ғына шаяртып ултыра икән тиһәк, ни арала өлгөргәндер, аяҡтан яҙып ҡыбырлай алмай ултырған ҡыҙыбыҙ, һуғанды ашап бөттө лә



Манһыр ауылы тирәһендәге панорама

һин дә мин эргәһенән тороп йүгерҙе лә китте, бына мөғжизә! Ҡыуанысыбыҙҙан хәҙрәткә ни алып, ни бирергә белмәнек, – тип һөйләй торғайны улар.

Был хәлдән һуң бер нисә йыл үткәс, әсәйем менән ҡәйнәм Манһыр ауылына барып, хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәтенә тағы нығыраҡ инанып ҡайта. Ат егеп алып, тейәлешеп, Темәстән (беҙ ул саҡта Темәстә йәшәй инек) ҡәйнәм, әсәйем, Йәмилә апайым – өсәүләп юлға сығалар. Көн эҫе була. Манһырға килеп еткәнсе аттары ҡара тиргә бата. Хәҙрәткә инергә, гәҙәттәгесә, сират. «Ҡәйнәм Яңылбикә атыбыҙ өсөн нык ҡына борсолоп уйланып торғанда, ишек асыла ла унда хәҙрәт күренә. Сират торған кешеләр араһынан ҡәйнәмә төртөп күрһәтеп:

– Атың өсөн нык хафаланаһың, әйҙә ин, ҡоҙағыйыңды ла, ҡоҙасаңды ла ҡалдырма, – ти.

Өсөһө лә инәләр, күренеп, өшкөрөлөп, тоҙ өшкөртөп алалар. Сығыр саҡта хәҙрәт быларға иҫкәртә:

– Ҡайтып барғанда юлда нәмә күрһәгеҙ ҙә артығыҙға боролоп ҡарамағыҙ, ул һеҙҙең ауырыуығыҙ булыр, мин әйткәнде тотмаһағыҙ, ауырыуығыҙ артығыҙҙан кире эйәрер, – тине.

Ысынлап та, Фәйзуллаға етеп килгәндә былар ҡаршыһына бер ҡыр ҡуяны сабып килеп сыға ла арттарынан төшә, бер килке эйәреп бара. Бәхеткә ҡаршы, хәҙрәттең әйтеүен бөтәһе лә иҫләгән була, бер кем дә артына боролоп ҡарамай. Өсөһө лә ауырыуҙарынан ҡотолоп, ҡыуанып ҡайтып инә.

Ҡайһы бер килеүселәр араһында хәҙрәт әйткәнде әллә онотоп, әллә иғтибарға алмай, уның ҡушҡанын еренә еткереп башҡармаусылар осрай. Бындай саҡта килеүселәр төрлө хәлдәргә тарый: йә аҙашалар, йә кире ауырып китәләр, йә аттары сығынсылай, йә күҙҙәренә нәмә күренә.

Манһырҙан йөрөп ҡайтҡас, әсәйем менән ҡәйнәм хәҙрәттең хикмәттәрен дә, изге эштәрен дә, илаһи көсө барлығын да һөйләп бөтә алманы. Ҡәйнәм: «Минең ҡоҙағый, ҡоҙаса менән килеүемде, атымдың йонсоп, көйһөҙләнеп тороуын ҡайҙан белде икән ул?» – тип хайран ҡалһа, әсәйем йәнлек осрая-саҡты әйтеүенә шаҡ ҡата.

– Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән донъяла һирәк осрай торған изге кеше, – тип һығымта яһай улар. – Уйыхисе кешеләргә тик яҡшылыҡ эшләү. Шуныһы йәл – заманында беҙ был оло йәнле кешенең ҡәҙерен белмәгәнбеҙ. Исмаһам, хәҙер тыуыуына 130 йыл тулғанда, бергәләшеп хәтергә алайыҡ, рухын ҡыуандырайыҡ, киң билдәләп үтәйек!

*Мәһәҙиева Әминә,*
1932 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Ендеҙ еңгән уҙаман

Баймырҙа ауылында булып уҙған ваҡиғалар хаҡында яҙырға булдым. Был тарихтың геройҙары әле лә иҫән-һау, Ишмөхәмәт ауылында көн күрәләр.

Баймырҙа ауылында йәшәүсе 27 йәшлек Йәрмуллин Йомағужа Йолалы ауылында колхоз өсөн ат менән бесән сабыуҙа йөрөй. Көндәлек нормаһын үтәгәс, Йомағужа, атын туғарып, уны бригадир Үлйәбаев Зәкәриәнән Баймырҙаға ҡайтыр өсөн биреп тороуҙы һорай. Рөхсәт булмағас, алыҫ ара ла түгел тип, үҙен йыуатып, ауылына йәйәү юллана.

Был саҡта Йомағужаның кәләше Йомабикәлә ауылдашы Ҡансурина Мәҙинә, уның улы Нәбиулла сәй эсеп ултырған була. Йомабикә эштән һуңлаған ирен көтәүәлләй, ара ла яҡын түгел, тип үҙен йыуата, әммә үҙе һуңлауына тағы борсола. Бер заман Йомағужа өйгә килеп инә. Пинжәгенең еңдәре терһәктәренәсә төрөлгән, ҡара туҙанлы битенән юлаҡлап тирҙәре ағып төшкән. Өйҙәге кешеләрҙе лә күрмәй Йомағужа, мейес башынан үрелеп тәмәкеһен ала ла кире боролоп сығырға ынтыла. Эштең тигенгә бармауын һиҙенгән Йомабикә күҙ асып йомған арала иренең ҡулынан тотоп ала, әммә Йомағужа, уны өйрөлтөп-өйрөлтөп стенаға бәрә һуға ла сығып китә. Йомабикә ҡапҡанан сығып барған ирен кире баҫтырып етеп, тотоп ала:

– Йомағужа, нишләүең был? Ҡайҙа бармаҡсы булаһың төнө менән?

– Йолалы үрендәге теге таш аҫтындағы кешене соҡоп сығарып, үлтерәм хәҙер. Ебәр мине.

Йомабикә Йолалы эргәһендәге ҡәберлек хаҡында һүҙ барғанын аңлап ҡала, иренә сат йәбешеп, уны бер ҡайҙа ла ебәрмәй. Йомағужаның әсәһе Нәсихә әбей, алмашынып ҡайтҡан улынан ҡурҡып, яҡын да бармай. Йомабикәгә 4 йәшлек улын ҡарау менән бергә, төнө буйы йоҡламай, һаман да Йолалыға барып ҡәберҙе аҡтарырға уҡталған ире менән айҡашып сығырға тура килә.

Таң һыҙылыу менән Йомағужа, ырғып тороп Йолалы яғына сығып китә лә, ауыл ситендәге йылға ярына барып ятып ала. Насар хәлде ишетеп, күршеләр хәл белергә килә, тик берәү ҙә өйгә инмәй. Нәсихә әбей улын Манһырға – Мөжәүир хәҙрәткә алып барырға була. Ат егәләр. Нәсихә әбей дилбегә тотоп алға ултыра, янына ейәне ҡунаҡлай, уларҙан һуң Йомағужа уртаға ултыра, Йомабикә арттан урын ала. Өшкөртөп алырға тоҙ булмағас, Йомабикә, Манһырҙан берәйһенән һорармын әле тип, тоҡ һалып ала.

Ауылдан ярты саҡрымдай ҙа ҡуҙғалып өлгөрмәйҙәр, ике ҡатын, бер бала һәм бер ир ултырған арбаны һөйрәй алмай, ат аҡ күбеккә бата. Көс-хәл менән йылғаға етәләр, кисеүҙе сығалар. Ат еңеләйеп, тилбер генә сығып китә. Юлда Йомағужа кемдәрҙелер тыңлай, нимәлер күргән кеүек ҡарап, көлөп бара, ырғып төшөп ҡалырға уҡтала. Йомабикә уны биленән ҡыҫып тотоп, ебәрмәй, тынысланa төшһә, арбанан төшөп арттарынан йәйәү бара.

Урғаҙа йылғаһы кисеүенә еткәс, туҡтап, ҡатындар йылға һыуында йыуынып ала. Йомағужа ла арбанан килеп төшә, аңына килеп, өҫ-башын йыуып алырға теләк белдерә.

Мөжәүир хәҙрәт Манһырҙа булмай сыға. Уны ауылдан ситтә, бесәнлектән барып табалар. Хәҙрәт килеүселәрҙе тыңлап та тормай, алдан бөтә хәлде белеп-күреп торған була. Йомағужаны шунда уҡ өшкөрә башлай, Манһырҙан тоҙ алырға башы еткән Йомабикәне маҡтай.

– Улым, ҡеүәтлеһең дә инде! – Мөжәүир хәҙрәт ихлас йылмайып Йомағужаның арҡаһынан һөйә. – Быға тиклем берәү ҙә енде күтәрә һуҡҡаны юҡ ине. Ярай янында этең булған, былайынса үле кәүҙәңде лә тапмаҫтар ине.

Өшкөрөп, бер арауыҡ ваҡыт үткәндән һуң, баймырҙалар ҡайтырға сыға. Уларҙы оҙатҡан саҡта ла Мөжәүир хәҙрәт енгә бирешмәгән Йомағужаны маҡтай.

– Бүтән һиңә ҡағылмаҫтар, бетеүеңде юғалтма. Ҡурҡһаң, юл алмаштырып ҡайтығыҙ...

– Шул барыуҙан бүтән ауырыманы Йомағужа, – ти Йомабикә инәй Йәрмуллина. – Хәҙрәттең әйткәнен тотоп, Байыш аша ҡайттыҡ. Аҙаҡтан, һил булғас, Йомағужа Йолалы үрендә ни булғанын һөйләп бирҙе.

Йәйәүләп бәләкәй Байсура битенән, ҡәберлек буйынан төшөп килгәндә, ҡапыл юл ситенән һыбайлы кеше пәйҙә була. Бейек атта боронғо кейемдә оҙон сәстәре ялбырап китеп, зәһәр ҡарашлы әҙәм ултыра, албырғап ҡалған Йомағужаға өндәшә:

– Ҡайҙа юл тоттоң?

– Ҡайтып барам...

– Бынан ҡайтыу юҡ һиңә!

Ошо һүҙ менән әҙәми зат атынан һикереп төшә, Йомағужаға табан атлай башлай. Ендең аты, үрәпсеп ер сапсып кешнәй ҙә, юҡҡа сыға. Йомағужа менән ен аунап китеп алыша башлайҙар. Берсә ен өҫкә сыға, берсә Йомағужа. Шул саҡта сысҡан баҫтырып китеп олаҡҡан Һорлан, Йомағужаның эте, сабып килеп етә һәм ялбыр башҡа ташлана: уны тешләп артҡа һөйрәй, өйрөлтөп абалай. Ни ҡөҙрәт менәндер Йомағужаға енде ситкә быраҡтыра ла ауыл яғына йүгерә, Һорлан да уның янынан китмәй, йәйәүле ен дә улар артынан эйәрә. Шулай итеп, ҡото осҡан Йомағужа, Һорлан һәм юҡтан бар булып, ерҙә аунап һуғышҡан, аҫта ҡалған ендән торған сәйер төркөм Баймырҙаға тиклем киләләр.

– Ауыл күренгәс кенә теге юҡҡа сыҡты, – тип һөйләй һуңынан ҡатынына Йомағужа.

Әлеге ваҡытта йәш сағында параллель донъя вәкиле менән яғалашҡан, үлемдән саҡ ҡалған Йомағужа олатайға 80 йәш. Элекке йылда ғына ла һыбай сабып йөрөгән ҡарт быйыл, эҙләп алыуы ҡыйын тип, ат көтөүҙән баш тартты. Ҡолаҡҡа ҡатылығын иҫәпкә алмағанда, Йомағужа олатай әле лә иҫән-һау. Енде һелтәй һуҡҡас, бабайҙың ҡеүәте ҡайтмағанына аптырау урынһыҙҙыр, моғайын. Бәлки, ярты быуат элек Мөжәүир хәҙрәт яҙып биргән бетеүҙе әле лә йөрөтөүе килешәлер.

*Ғәббәсов Р.*
Баймаҡ районы

## Изгелек ерҙә ятып ҡалмай

Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, тигән кеүек, мин дә билдәле Мөжәүир хәҙрәт тураһында ата-әсәйемдән ишеткәнемде яҙып ебәрергә булдым. Беҙҙең ғаиләлә уның тураһында яҡты хәтирәләр генә һаҡлана.

Мөжәүир хәҙрәтте күптәр алтынға тиңләй. Был юҡҡа ғына түгел! Ысынлап та, алтынга бәрәбәр бит ул! Уның үтә һиҙгерлегенә, зирәклегенә, уҡымышлылыгына иҫ китерлек! Алтын үҙенең төҫөн, баҙыҡлығын юғалтмаған кеүек, уның был фани донъяла ҡалдырып киткән изге эштәре, яҡты рухы юҡҡа сыҡмаясаҡ, халыҡ үҙенең әүлиәһен онотмаясаҡ! Ваҡытында күпме кешеләрҙе үҙенең тылсымлы ҡарашы, шифалы ҡулдары, ипле һүҙҙәре менән дауалаған, имләгән бит бөйөк хәҙрәт!

Мөжәүир хәҙрәт минең тыуған ауылым Йүкәгә (рәсми телдә – Ишмырҙа) йыш ҡына килеп йөрөгән. Атайымдың әсәһе Ғәйникамал ҡартәсәйҙәргә фатирға туҡталған, улар менән аралашып йәшәгән. Ҡайһы саҡ әбейе Гөлйемеш инәй менән дә, улы Мөхәммәт менән дә килгән. Ҡартәсәйем үҙе лә өлкән апайым Сәрүәрҙе эйәртеп, Сибай юлынан Фәйзулла ауылына төшөп, йылға аша Манһырға йәйәү йөрөгән. Хәҙрәт олатай ҙа, әбейе лә мөһабәт, дәү кәүҙәле, бик алсаҡ, йомарт, изге күңелле кешеләр булған. Килгән кешенең береһен дә кире бороп сығармағандар. Төбәп килгән кешенең килерен алдан уҡ белеп-һиҙеп, ҡапҡаларын шар асып ҡуйыр булғандар.

Бер ваҡыт әсәйем, ул Фәхерниса исемле ине, күрше Ғәйзә инәйҙәрҙә сәй эсеп ултыра, ҡулында имсәк бала була. Еңгәһе

Маһикамал инәй: «Әбейһаҙҙың магазинынан бына ошо яулыҡты 40 һумға һатып алдым», – тип яҙып һелкетеп күрһәтә. Инәйҙең шуны эшләүе була, әсәйемдең ҡулында имсәк имеп ятҡан Тәлғәткә әллә ни була. Әллә шул яулыҡтың елпеүе ҡағыла, бала тын ала алмай сәсәп быуыла. Ғәйзә инәй йәһәт кенә тороп, урҙала элеүле торған ашъяулыҡты алып: «Өндәшмәгеҙ», – ти ҙә, «бисмилла» әйтеп, баланың өҫтөнә яба. Бер аҙ ятҡас, сабый илап ебәрә.

Был хәл тураһында әсәйем икенсе күршеһе Шәрифъямал инәйҙең килене Сәмиға апайға һөйләй. «Улай булғас, ҡәйнәм менән Мөжәүир олатайға барып килегеҙ, беҙҙең Рәшиҙә лә аяҡтан яҙҙы», – ти әхирәте.

Иртәгеһенә әсәйемдең һыйлымы – Әбүбәкиров Ханнан олатай 8 йәшлек ҡыҙын күтәреп, арбаға сығарып ултырта. Шәрифъямал инәй Манһыр ҡыҙы булғанға күрә, юлды бик яҡшы белә. Монасип ауылынан Ирәндек һырты аша тура тарталар. Бейек ерҙән, тәгәрмәсте арҡан менән бәйләп, һыҙып төшәләр.

Барып еткәс, Шәрифъямал инәй: «Фәхерниса, бынау ейәнсәремде үҙең күтәреп индермәһәң, минең көс етмәç», – тиеүе була, Рәшиҙә: «Юҡ, ҡартәсәй, мин үҙем инәм», – ти ҙә, арбанан төшөп, һин дә мин атлап, әбейҙең артынан инеп китә. Мөжәүир олатай уны яман ергә, көлгә баҫҡан, тип әйтеп, өшкөрә. Әсәйемде күргәс: «Э-э-эй, Ғәйникамалдың килене килгән бит. Инәң өйҙә юҡ бит әле, баҙарға китте, сәй эсер инегеҙ», – ти.

«Хәҙрәт урындыҡта, яҫтыҡ өҫтөндә, яҡшы кейенеп, башына сәллә урап, күбәләй булып ултыра ине», – тип хәтерләй әсәйем.

Мөжәүир олатай Тәлғәткә күҙ һалыу менән:

– Үткенсе булған, ярай ҙа, ваҡытында килеп еткергәнһегеҙ, ҡыҙым, һеҙҙә сысҡан да, ҡомаҡ та юҡтыр инде. – Үҙе кеткелдәп көлгән була. – Шуның ҡойроғон кәпәсенең түбәһенә. ҡара бесәйҙең йөнөн күлдәгенең түшенә тағып ҡуй, – тип тоҙ, һабынды өшкөрөп, бетеү яҙып бирә.

Урындыҡ аҫтында торған оло табаҡтан өймәләмә итеп услап, баланың ҡалпағына печенье-кәнфит һала. Үҙе һаман

بسم الله الرحمن الرحيم

لا اله الا الله الملك الجبار * لا اله الا الله العزيز الغفار *
لا اله الا الله الواحد القهار * لا اله الا الله الملك الستار *
لا اله الا الله الكبير المتعال * لا اله الا الله محمد رسول الله
وحبيبه * ونحن الذين عصيناك في سواد الليل *
وجاهك عزيز وسلطانك قاهر وامرك غالب وانت
على كل شيء قدير * لا حول ولا قوة الا بالله العلي
العظيم برحمتك يا ارحم الراحمين *

بسم الله الرحمن الرحيم

اللهم اجعلني من المستغفرين * واجعلني من عبادك
الصالحين * القانتين واجعلني من اوليائك المتقين
برحمتك يا ارحم الراحمين *

Яуыз көстәргә ҡаршы доға

борсолоп: «Бына инәң өйҙә булманы бит әле, сәй эсә алманығыҙ», — тип ҡабатлай.

— Һин Шәрифъямал, Сәбилә әбейҙе беләһең бит, уға барып, сәй эсеп ҡайтығыҙ, ҡоро ҡайтмағыҙ. Унының өйө элекке һеҙҙең өй урынында ултыра, — ти.

Үҙе сығып, аттарын бороп, оҙатып тороп ҡала.

Ҡайтышлай, хәҙрәт өйрәткән баяғы Сәбилә әбейҙәргә туҡталып, сәй эсеп ҡайталар.

— Тәлғәт башҡаса быуылып ауырыманы, бетеүен һаман кейемenә тағып йөрөттөк, әле лә костюмында тора, — ти әсәйем.

Беҙ бала саҡта шифоньерҙың тартмаһында, сепрәк тоҡсай эсендә, бер киҫәк бәләкәй генә күк төҫлө күҙ һабыны ята торғайны. «Теймәгеҙ, ул өшкөртөлгән һабын», — тип беҙҙе тыялар ине. Бына ошо һабындың да кәрәге тейә: өлкән ағайымдың 3–4 йәшлек ҡыҙы Гөлфирәнең бер мәл күҙе ауыртып, битенә сабыртма сыға. Шул һабын менән баланың битен өс тапҡыр йыуыу бик килешә: күҙе лә йүнәлә, сабыртма ла бөтә, башҡаса сығып ыҙалатмай.

Бер мәл хәҙрәттең Баймаҡта йәшәгән бер туған ҡустыһына ҡунаҡҡа килгәнен ишеткәс, әсәйем менән Гөлзәминә инәй юлға сыға. Юлда инәй:

— Фәхерниса, ошо 10 һумды ваҡлатып бир әле, — ти.

Баймаҡҡа барғас, күрешеп хәл-әхүәл һорашып, һөйләшеп, сәй эсеп ултырғанда, һүҙ араһында Мөжәүир олатай мәрәкәләй:

— Миндә лә ваҡ бар ине, Гөлзәминә, — ти.

Кешенең ни уйлағанына тиклем белеп, үтәнән-үтә күреп ултырыу һәләтенә хайран ҡалырлыҡ бит?! Атайым, Ғәйникамал ҡартәсәй үлеп ҡалғас, гүр саҙаҡаһына тип хәҙрәткә һарыҡ алып бара. Сабира инәй ҙә, хәйергә тип кәҙә ебәрә. Пригородный бүлексәһе янында кәзә ысҡынып төшөп ҡала. Атайым атын туҡтатып, кәзәне эҙләп ҡарай, таба алмай. Манһырға барғас, атай ошо хәлде һөйләп бирә.

— Хәҙер һарығыңды һуй, инәң аш һалыр. Аш бешкәнсе, Нурислам, һин иҙәнде йүнәтеп һалып кит. (Өйҙәрендә ремонт яһап ятҡан саҡтары.) Колхоз кешеһе эшкә шәп була. Ә бына

кәзәнде ҡайтышлай Пригородныйҙа йәшәгән Вәлиулланан инеп алып ҡайтырһың, – ти хәҙрәт.

Атайым, хәҙрәт ҡушҡанса, ҡайтышлай Вәлиулла тигән кешеләрҙең баяғы ҡасҡалаҡ кәзәне алып ҡайтып, эйәһенә кире тапшыра.

– Һай, бик шәп кеше булды инде хәҙрәт олатай! Уның тәсбихе бар ине, ҡояшҡа ҡараһаң, мәсет күренә торғайны. Әгәр үлерен белһәк, әллә күпме нәмәне өшкөртөп алып ҡалған булыр инек, – тип үкенес белдерә әсәйем.

Бер нәмә лә мәңгелек түгел шул. Ләкин бөйөк хәҙрәттең исеме үлемһеҙ. Иманым камил: киләсәк быуын да уның менән ҡыҙыҡһыныр, ғорурланыр, хәҙрәттең яҡты рухына тап төшөрмәҫ. Изгелек ерҙә ятып ҡалмай.

*Әфләтунова Илүзә.*
Баймаҡ районы,
Билал ауылы

## Хәҙрәт име

Был хәл 1958 йылдың ноябрь айында булды. Бер ауылға туйға барып, шунда бик ҡаты ауырып киттем. Түҙер хәл ҡалмағас, өсөнсө көнө Мөжәүир хәҙрәткә юлландым. Ул мине бик һәйбәт ҡабул итте. Мин дә уға хәйер биреп, бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙем. Хәҙрәт ағай миңә доғалыҡ, бетеү яҙып, тоҙ өшкөрөп бирҙе. Унан һуң былай тип әйтте:

– Ҡустым, ҡунаҡтан бик насар рәнйеү алып ҡайтҡанһың. Улай ҙа миңә эсе мәлендә килгәнһең, рәнйеүең тиҙҙән китер, ул хатта һиңә төшөңдә күренер. Әммә шарап эсеүеңде ҡәтғи ташла, әгәр ҙә ташламаһаң, ул зәхмәттән янып үлерһең.

Аллаһҡа шөкөр, хәҙрәт ағайымдың доғалығы, өшкөргән тоҙо, сихри көскә эйә булған бетеүе бермә-бер килеште: дүргенсе көндә бик тыныс йоҡланым, ул алдан әйткән ғибрәтле төш ошо төндә күренде, зәхмәтле ауырыуым бөтөнләйгә китте. Аллаһҡа шөкөр, шунан һуң һауыҡтым, шарапты хәҙер өс тиҫтә йылдан ашыу ауыҙыма ла алғаным юҡ.

Тағы ла бер ваҡиға хәтеремдә ныҡ ҡалған.

...1953 йылдың бесән ваҡытында ат косилкаһында бесән саба инем. Салғы сарлағанда кинәт бысраҡ һыу сәсрәп, күҙем ауырып китте. Мөжәүир хәҙрәткә барҙым. Ул миңә тоҙ өшкөрөп бирҙе. «Ауырып китһәм, ауылда берәй кеше минең эшемде алып ҡуйыр», – тип уйланып ултыра инем, хәҙрәт: «Уйланма, ҡустым, эшеңдә эшлә лә йөрө», – тип ҡапыл ғына әйтте лә һалды. Мин аптырауҙан телһеҙ ҡалдым, бер нәмә лә әйтә алманым. Хәҙрәттең алдан күрә белеүе, кешеләрҙең уйын,

хатта уларҙың күргән төштәрен дә уҡый белеүе хайран ҡалырлыҡ ине.

Атайым мәрхүм хәҙрәт ағай менән аралашып йәшәне. Мин хәҙрәтте мәңге онотмам. Хәҙер мәсеткә йөрөйөм, уға алғышлап аяттар уҡытам, хәйер бирәм. Сөнки уның изге рухы һәр ваҡыт ғаиләмә лә ыңғай йоғонто яһай.

***Раҡаев Әксән,***
1936 йылғы.
Баймаҡ районы, Байыш ауылы

## Шафиҡ мулла ейәнеме?

1961 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, Мәғариф министрлығы мине Баймаҡ районына эшкә тәғәйенләне.

...1966 йылдың йәйе булһа кәрәк, партияның район комитетында инструктор булып эшләп йөрөйөм. Берҙән-бер көндө «Йылайыр» совхозына юл төштө. Йөрөп эште бөтөргәс, туҡта әле, мин әйтәм, Мөжәүир хәҙрәт халыҡ теленән төшмәй, уның хаҡында бик ышанмаҫтай имеш-мимештәр йөрөй, олоғайған да бит инде, һау сағында үҙ күҙем менән күреп, хәҙрәт олатай менән һөйләшеп алайым әле, тип Манһыр ауылына йүнәлдем. Хәҙрәт өйҙә ине. Мин ҡыйыуһыҙ ғына:

– Әссәләмәғәләйкүм, – тип барып индем.

– Вәғәләйкүмәссәләм! – тип олатай ҡаршы алды. Унан ниндәйҙер йәнлелек килгәнен һиҙҙем мин. Уның ошо ихласлығы минең ҡурҡыуымды ла, шикләнеү аша икеләнеүемде лә еңеләйтеп ебәргәндәй булды.

– Олатай, һеҙ мине ғәфү итегеҙ. Мин хәл-әхүәл белеп кенә сығырға тип ингәйнем, – тинем ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына.

Ошо мәл бер-ике бала йүгереп килеп инде. Хәҙрәт олатай:

– Барығыҙ, балалар, әйтегеҙ. Ҡымыҙ, ит килтерһендәр, самауыр ҡуйһындар, – тип, балаларҙы (ейәндәре икән) сығарып ебәрҙе лә, миңә ҡарап:

– Хәл белеү изге ниәт, улым. Ҡайһы нәҫеленән булаһың? – тип һораны.

– Мин, олатай, Күгәрсен районынан.

– Ҡыҙыл Мәсеттән әләйһә?

– Эйе.

– Шафиҡ мулланы беләһеңме?

– Ул минең ҡартатайым була, әгәр ҙә Суҡбаев Шафиҡ булһа.

– Йә Хоҙай! Оҡшашлыҡ бар шул. Ул бик арҙаҡлы кеше ине. Минән байтаҡҡа оло ине. Беҙ уның менән Зәйнулла ишанда осраша торғайныҡ. Хажға барып ҡайтҡан, тип тә ишеткәйнем. Нисегерәк донъя ҡуйҙы икән?

– Ишетеүемсә, олатай, үҙ өйөндә, үҙ түшәгендә тәрбиәле генә ятып Әхирәткә киткән. Аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа уға теймәгән, йәберләмәгән.

– Шөкөр, ауыр тупрағы еңел булһын. Йәнем тынысланды. Шулай булырға тейеш ине шул. Һинең ҡартатайың менән минең яҙмыш оҡшаш, улым. Беҙ юҡтан, хәйерселектән кеше булдыҡ бит. Уны Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә...

...Мин, өркә-ҡурҡа килгән кеше, хәҙрәт олатайҙың ошо тиклем йылы ҡаршы алып, минең менән ябай ғына итеп ихлас әңгәмәләшеүенә хайран ҡалып ултырам. Етмәһә, партиялымын, партия аппаратында эшләйем бит инде. Халыҡ араһында: «Мөжәүир хәҙрәт Баймаҡ яғына барһам, юлда (ауылға инер алдынан) бер ҙур начальниктың машинаһын туҡтатып ултыртҡан икән, үҙе йәйәү бара башлағас, үҙен дә кире атларға мәжбүр иткән, имеш», – һымаҡ хәбәрҙәр күп йөрөй торғайны ул саҡта.

Беҙ хәҙрәт олатай менән ҡымыҙ эстек, ит ашаныҡ, йылы хушлаштыҡ. Хушлашҡанда хәҙрәт олатай, көлөмһөрәп:

– Дин әһелдәре менән осрашырға ҡурҡмайһыңмы һуң, улым? Һин бит партия хеҙмәткәре. Ауырымаған яғыңа ятырға тырыш, улым, замана ла шулай ҡуша бит, – тип ихлас кәңәш бирҙе.

– Олатай, мин бит дин әһелдәренә түгел, оло кеше менән осрашырға, уның хәлен белергә генә килдем. Ул беҙҙең, йәштәрҙең, бурысы, – тинем.

Хәҙрәт, минең арҡамдан һөйөп:

– Рәхмәт, улым. Үҙеңдә заманауи фәлсәфәүи сифаттар бар, уларҙы артабан үҫтерергә тырыш, – тип оҙатып ҡалғайны.

Икенсе йылына, Мөжәүир хәҙрәт донъя ҡуйған икән, тигән хәбәр ишетелде. Оҙаҡламай юл төшөп, хәҙрәт ауылына тағы ла һуғылырға булдым. Оло улы (исемен онотҡанмын, Мирза йәки Риза ине, шикелле – ғәфү үтенәм) ҡаршы алды. Ишек алдында өр-яңы еңел машина ултыра. Ул саҡта һирәк кешелә «Волга» тигән еңел машина була торғайны. Ул совхоздың ошо Манһыр тигән бүлексәһендә һарыҡ көтөүен көтә ине, буғай. Беҙ килеп төшөп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң өҫтәл артына саҡырҙы. Хәҙрәт олатай йолаһы буйынса, ҡымыҙ, ит килтереп ултыртты. Беҙ:

– Мәшәҡәтләнмәгеҙ, – тигәс:

– Олатайым мәрхүм изге ҡунаҡтарҙы буш сығарма, улар Аллаһы Тәғәләнең мосафирҙары, тип әйтеп ҡалдырҙы. Әле һау саҡта, атайымдың васыятын үтәүҙе үҙемдең бурысым һанайым, – тип ул беҙҙе ихлас һыйланы.

Ҡыҫҡаһы, кешелеклелек сифаты хәҙрәт олатайҙа әйтеп бөтөргөһөҙ бай ине. Шул сифаттарҙың улына ла күсеүе шатландырҙы.

*Әҙелгужин Миһран.*
Күгәрсен районы

## Кеше күңелен аңлаған шәхес

Темәс педучилищеһында уҡыған ваҡытта, 1948 йылдың июнендә, миңә Мөжәүир хәҙрәт менән ике тапҡыр осрашырға тура килде. Беҙ һуңғы курста имтихандарға әҙерләнәбеҙ. Йәшәгән ятаҡхананың тирә-яғы сауҡалыҡ, шунда һалҡында әҙерләнә торғайныҡ. Бер көндө уҡып ятҡанда йоҡлап киткәнмен, ә иптәш ҡыҙҙар ҡайтҡан. Уянып китһәм, күкрәгем аша йылан шыуышып бара, ҡысҡырып, йүгереп ҡаса башланым, тын ҡурылды. Иптәштәрҙе саҡырам, ләкин үҙ тауышымды ишетмәйем, һөйләшә алмайым. Хәҙер ни эшләргә? Табипҡа мөрәжәғәт иттем. Ул мине Баймаҡ дауаханаһына ебәрҙе. Атай-әсәйемә хәбәр иткәндәр. Әсәйем ат менән килеп етте. Дауаханаға түгел, тура Мөжәүир хәҙрәткә алып китте. Мин олатайға күренергә ҡурҡам, сөнки комсомол сафындамын. Комскомитетта тикшерерҙәр, комсомолдан сығарырҙар, ә олатай, дини кеше булараҡ, ҡабул итмәҫ, тип уйлайым.

Ауылдан таң беленеү менән сыҡҡайныҡ, иртүк барып еттек. Олатай ишек алдында йөрөй ине. Ихлас сәләмләште, тик, атты туғармағыҙ, ҡапҡа тышына бәйләп тороғоҙ, оҙаҡламаҫһығыҙ, тип өйгә алып инде. Әсәйем хәлде һөйләй башланы:

– Килен, бөтәһен дә беләм. Ошондай һылыу ҡыҙҙың һөйләшмәй ҡалыуы мөмкин түгел. Сикәләре алма кеүек, сәс толомдары ҡыҫҡа булһа ла, ҡалын икән, – тип сәсемде тотоп, башымдан һыйпап һөйҙө лә инәйгә ҡымыҙ ҡойоп бирергә ҡушты. Миңә сынаяҡ өҫтө менән үҙе тотторҙо. Беҙ ҡымыҙ эскән арала әсәйемә:

– Килен, Баймаҡҡа инеп, килендәшеңдә сәй эсегеҙ. Тик бында булғанығыҙҙы әйтмә, ә юл һорашҡан бул, – тине. Ә миңә: – Һылыу ҡыҙым (һылыу булыу ҡайҙа ул), ҡурҡма, тикшермәҫтәр, һорамаҫтар, үҙең һөйләмә, – тине.

Баймаҡҡа беҙ сәғәт 3–4-тәргә әйләнеп килдек, һәм... самауыр ҡайнағансы мин һөйләшә лә башланым (башҡа нескәлектәрен һөйләп тормайым).

Хәҙер имтиханға барып етергә кәрәк. Синыфҡа барып ингәндә, дәрес башланғайны (алгебранан яҙма эш). Бөтәһе лә тын да алмай миңә төбәлгән. Мәрйәм Зариповна урынынан торҙо.

– Һаумыһығыҙ, ултырырға мөмкинме? – тигәс, бөтә синыфташтарым, йылмайып, эшкә тотондо.

Ысынлап та, ни өсөн хәҙрәткә барҙың, нисек булды, тигән һорауҙар булманы, тәртибемде комскомитетҡа ла ҡуймаңылар. Хатта үҙемдең бер туған ҡустым, һеңлеләрем, 40 йылдан ашыу бергә йәшәгән ирем дә һорашманы. Рәхмәт уларға.

Хәҙрәт олатайҙың әйткән дүрт һүҙенең (ҡурҡма, тикшермәҫтәр, һорашмаҫтар, ябылма) асылы бик тә тылсымлы булыуын, уның кешене аяныслы фажиғәнән ҡотҡарыуын аңлайым һәм ғүмерем буйы уның рухы алдында баш эйәм. Һөйләмәҫкә ҡушһа ла, һөйләнем, ғәфү итер. Тәбиғәттең фажиғә лә, тылсымлы мөғжизә лә бирә алыуын инҡар итергә ярамай.

Бөтөнләй һораманылар түгел. Бик күп йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, иҫкә төшөрөүселәр бар. Мин ундайҙарға иғтибар итмәҫкә тырышам.

Ә икенсе осрашыу былай булды. Беҙ йәшәгән ауылда олатайҙың туғандары, ауылдаштары бар ине. Шуларҙың береһе хәҙрәтте ҡунаҡҡа саҡырған һәм бөтә ауыл халҡы уны хөрмәтләп ҡунаҡ итте. Беҙ ҙә, һарыҡ һуйып, олатайҙы ҡунаҡ итергә булдыҡ. Ул өйгә етәрәк:

– Ә-ә-ә, һылыу ҡыҙым, һаумы, нисек йәшәйһең? – тине.

– Һәйбәт, һеҙҙең фатихала, – тип яуапланым.

– Шулай булырға тейеш, – тип, ул түргә үтте. Ашъяулыҡ алдында шаян һүҙҙәр һөйләп, көр күңел менән ултырҙы (минең менән булған хәлде иҫкә алманыҡ). Йола буйынса,

оло кешегә башты ла һалғайнык. Үҙе киҫеп һоғона ла беҙгә лә өләш итә. Иремә һоғондора ла:

– Баш та ҙур икән, һоғондороусы ла шәп икән, – тип мәрәкәләй.

Мине дауалауы тураһында өндәшмәне. Тик һаман да: «Һылыу ҡыҙым, бирешмә, нык бул», – тине. Шуға күрә мин уны кеше күңелен, кисереүҙәрен аңлаған, кеселекле, изге, тылсымлы мөғжизәгә эйә булған шәхес тип иҫемдә тотам.

*Абдуллина Рәйхана,*
75 йәш.
Баймаҡ ҡалаһы

## Атайың — Ҡужахмәт йыраү ине

1962 йыл. Миңә 21 генә йәш. Кейәүҙәмен. Атайың вәлидовсы булған, ҡулак балаһы, тип мине аяуһыҙ ситләтәләр. Әллә шуға, ниңәлер һыҙып сирләп, ыңғыр-шыңғыр итеп йөрөүҙән башым сыҡмай. Эстән генә, Манһырға барып Мөжәүир хәҙрәткә күренеп ҡарарға ине, тип тә уйлайым. Хәйергә тип йәшерен төпкө кеҫәмә биш тәңкәлек аҡса ла һалып ҡуйғанмын. (Ул саҡтағы биш тәңкәлек аҡса хәҙерге биш йөҙ һумға торошло.) Ә бер көндө күҙ асҡыһыҙ булып сәсрәп ауырып киттем: ҡоҫам, баштан сыҙап булмай. Ирем быны күреп ни эшләргә белмәй.

– Тиҙерәк хәҙрәт олатайға алып бар. Тик ул ғына минең хәлемде еңеләйтә алыр, – тим. Улай ҙа хәләлем үтенесемде кире ҡаҡманы. Тиҙ генә атын егә һалды ла Манһырға алып та китте. Хәҙрәткә күренергә сират торғандар, мин дә баҫтым. Әллә ҡайҙан йыраҡтан килеүселәр ҙә бар икән, бер нисәүе русса һөйләшә. Ауырыу бала менән килеүсенең береһе Себер яғынан булды, шикелле.

Ниһайәт, миңә лә инергә ваҡыт етте. Хәҙрәт йылы ҡаршыланы. Бер ҡарау менән:

– Һиндә боҙом бар, әмәлләп нәмә эсергәндәр, – тине. – Ярай әле ҡоҫоп өлгөргәнһең, ауырыу төпкә төшә алмаған. Үҙ ғүмереңдә бындай хәлдәр тағы осрар. Дин юлына баҫып, доғалар уҡып йөрөһәң, бер яуыз көс тә һиңә зыян итә алмаҫ. Аллаһы Тәғәләгә һыйын, ул һине һаҡлар. – Шулай тине лә тоҙ өшкөрөп бирҙе, йәнә ҡул сәғәтемде, яулығымды өшкөрҙө.

Ҡаралып бөткәс, кесәмдән алып теге биш тәңкәлекте хәҙрәттең алдына һалдым.

– Ай-һай, ҡыҙым, йыйнаҡсылһың. Ҡасандан бирле һаҡлап алып йөрөттөң бит ошоно.

Хәҙрәт көлөп ебәрҙе лә, оҙаҡ йөрөтөүҙән бөкләнеп, таушалған аҡсаны ҡәҙерләп кенә түш кесәһенә һалып ҡуйҙы, шунан ҡайһы ауылданһың, кем ҡыҙы булаһың, тип һораштыра башланы.

Ауылымдың яҙылышы – Ғөбәйҙулла, әйтелеше Ҡуштүбә икәнен, атайымдың Ҡужахмәт исемле булыуын әйтеп бирҙем.

Хәҙрәттең тыныс ҡараған күҙҙәре, арып талсыҡҡан аҡһыл сырайы үҙгәреп, яҡтырып китте, йөҙөмә диҡҡәт менән ҡарап алды:

– Атайыңды «Ҡужай йырау» тип йөрөттөләрме? Ә-ә-ә, беләм, беләм! Муллаҡайҙа Ғабдулла Сәиди ишан мәҙрәсәһендә уның менән бер осорҙа уҡыныҡ. Ул минән биш-алты йәшкә өлкән булыр.

Атайым тураһында бик һорашҡым, белешкем килһә лә, хәҙрәттең ваҡытын алыуҙы йәпһеҙ һанап, урынымдан торорға итәм. Әммә ул миңә ҡул ымы менән ултырырға ҡуша ла һүҙен йомшаҡ ҡына тағы дауам иттерә:

– Атаң үлгәндә һин имсәк кенә булып ҡалдың. Уның ниндәй кеше, кем булыуын асыҡ ҡына белеп тә етмәйһеңдер, ҡыҙым. Нужа ҡаласын күп ашаны ул. 1931 йылда бынамын тигән өйөнән ҡыуып сығарҙылар, һарай тулы малын тартып алдылар, шунан халҡым тип, Зәки Вәлидиҙәр менән бергәләп көрәшеп йөрөгәне өсөн бинахаҡҡа төрмәгә ябып ҡуйҙылар. Йәнәһе, йыры менән халыҡты советтарға ҡаршы өгә була. Халыҡ дошманы, кулак тигән ялған ярлыҡ таҡтылар.

Әсәйемдең өйҙән өйгә йөрөнөк, теләнселәп тамаҡ туйҙырҙыҡ, землянкала йәшәнек, тип һөйләүҙәре, мине кулак балаһы тип мәктәптән ҡыуып ҡайтарыуҙары иҫемдә ине, әммә гел ҡурҡып-өркөп йәшәгәнлектән, тел ҡалҡытыпниҙер әйтергә ҡыймайым. Ул арала олатай һүҙен тағы дауам иттерҙе:

– Аллаһы Тәғәләнән торор өй, көтөр донъя бирһен ине, тип һорап йөрөйһөң икән. Бөтәһе лә үҙең теләгәнсә булыр, ин шәәъ Аллаһ. Үлән бит ул үҫкән еренә үҫә. Даланың бар, ҡыҙым!

Мөжәүир хәҙрәттең данлыҡлы Ҡужахмәт йырсы ҡыҙын болоҡһоған күңел менән сығарып ебәргеһе килмәнеме әллә ул хәтирәләр үҙенә лә ҡәҙерле инеме, тағы йәш сағындағы иҫтәлектәргә төшөп китте:

– Һай, йырлай ҙа ине Ҡужахмәт ағай! Унан арттырһа, Буранбай сәсән генә арттыра алғандыр! Эй «Урал»ды бирелеп йырлауҙары! «Тәфтиләү», «Ҡаһым түрә», «Бейеш», «Буранбай» йырҙарының башта тарихын һөйләп бирә, шунан күкрәгенән урғылып сыҡҡан моң менән гөрләтеп һуҙып ебәрә, нисәмә йылдар үтһә лә, тауышы һаман да ҡолағым төбөндә! Әйтерһең, Ирәндек буйының бөтә моңон үҙ йөрәгенә йыйып туплаған да, хәҙер шуны халҡына ҡайтара. Бына шундай йырсы ине атайың! Уны ауылдаштары яратып «Ҡужай йырау» тип йөрөттө!

Хәҙрәт бер аҙ уйланып ултырҙы ла тағы һөйләй башланы:

– Ҡужахмәт ағайҙың йырын тыңлар өсөн генә йәйҙәрен Ҡуштүбәгә бара торғайным. Ул күбеһенсә мал ҡарап йәйләүҙә йөрөнө. Бушыраҡ сағы булһа, тирмә эсенә инеп ултырабыҙ ҙа, эй һөйләй Ҡужахмәт ағай! Башҡорттоң тарихын, уның көрәш юлын, арҙаҡлы кешеләрен – береһен ҡалдырмай, ул тиклемде ҡайҙан белеп бөткәндер! Башҡортом, халҡым, тип йәшәгән ир-уҙаман ине атаң мәрхүм. Шуны белеп йөрө, балам, рухың күтәрелер.

Ошоларҙы һөйләгәс, олатай ултырған еренән тороп, ҡағыҙҙары араһынан миңә бер бит яҙыу алып һуҙҙы.

– Мә, ҡыҙым, ал! Ҡужахмәт уҙамандың йәш саҡта үҙ ҡулы менән яҙып биргән аманаты – «Урал» йыры. Минең ҡартлыҡ етте, әйҙә, бынан ары йәш кеше һиндә һаҡланһын.

– Рәхмәт, – тип саҡ-саҡ әйттем дә ғәрәп хәрефле яҙыуҙы ҡуйыныма тыҡтым.

Хәҙрәт олатай эргәһенән атайым эргәһендә булып ҡайтҡандай шатланып, ат менгәндәй булып килеп сыҡтым. Баш ауырыуым да, ҡул менән һыпырып алғандай, юҡҡа сыҡты.

Нисәмә йылдар буйы кәмһенеп йәшәгән күңелемә ғорурлыҡ хисе тулды. Тимәк, минең атайым Аллабирҙин Ҡужахмәт халыҡ дошманы ла, бандит та түгел! Ул йырсы булған, йыры

менән кешеләр араһында дан ҡаҙанған! Быны әле генә миңә Мөжәүир олатай үҙе әйтте! Йылы һүҙҙән имләнгән күңелем ҡоштай талпынды. Рәхмәт, олатай, мең рәхмәт!

Мөжәүир хәҙрәт хаҡында яҙыуымды белгәс, Фәрзәнә апай ошо хәтирәләрен мотлаҡ китапҡа индереүемде үтенде. Хәҙрәтебеҙ яратып тыңлаған, һаҡлап алып йөрөткән мәшһүр йырҙы үҙгәртмәй, Ҡужай йырау яҙып ҡалдырғанса, бирергә булдыҡ. Ҡужахмәт йырау, гәҙәтенсә, башта «Урал» йырының тарихына туҡталып китә.

– Башҡорттар бынан мең йылдар элек үк сал Уралды үҙ төйәге иткән, унда улар ырыу-ырыу булып йәшәгән һәм Уралға дошман аяғын баҫтырмаған. Уралдың байлығы Башҡорт иленән ситтә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың күҙҙәрен ҡыҙҙыра. Баҫып алыу һәм алдау юлдары менән улар башҡорт еренә үтеп инәләр, ауылдар һалып, завод-шахталар теҙәләр. Шулай итеп, килмешәктәр бай башҡорт ерҙәрен талайҙар, ерле халыҡты йәшәгән урындарынан ҡыҫырыҡлайҙар. Бындай хәлгә башҡорт халҡының түҙемлеге бөтә. Үҙ Уралын ҡурсалау маҡсатында һәм азатлығы өсөн һуңғы дүрт быуатта улар унарлаған тапҡыр яу күтәрә, яуға саба. Әммә халҡыбыҙҙың изге көрәше аяуһыҙ рәүештә баҫтырыла. Ҡан йылға булып аға. Ир затын вәхшиҙәрсә ҡыралар. Ҡатын-ҡыҙын, бала-сағаһын әсир итәләр һәм Рәсәй буйлап байҙарға ҡол итеп һаталар, ә ауылдарҙы үртәп, Ер йөҙөнән юҡ итәләр, көлөн күккә осоралар. Тик барыбер баҫылмаған башҡорт яудауҙары. Ана, шулай итеп матур Урал буйҙарын киләсәк быуындарға һаҡлап алып ҡалған улар.

Бына шуларҙың барыһы тураһында ла халҡыбыҙ, ата-бабаларыбыҙ зарлы «Урал» көйө сығарған һәм шуның аша үк Уралын маҡтап йырлаған, үҙҙәренең аһ-зарын һөйләгән. Ошо хәлдәр бөтәһе лә түбәндәге куплеттарҙа сағылыш таба.

*Ҡиблаларҙан иҫкән елдәр менән*
*Шау-шыу итә Урал ҡайыны.*
*Махы ла бирмәй хас дошмандарға*
*Һаҡлағандар Уралҡайымды.*
*Талдарын да ҡырҡһам,*
*Ҡаны ла тама.*

*Ата-олатайҙарҙың ҡандары.*
*Үкһеп тә ғенә үкһеп, үкһеп илап,*
*Ҡол ителде ата-бабалары.*
*Күгәренкәй ятҡан Урал тауы*
*Ата-олатайҙарҙың да төйәге.*
*Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған,*
*Шунда ята батырҙар һөйәге.*
*Уралдан да бейек, ай, тау булмаҫ,*
*Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.*
*Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған*
*Ир-егеттәр ғүмере йәл булмаҫ.*
*Урал буйҡайҙары, ай, ҡылғанлыҡ,*
*Йәйрәп ята уның далаһы,*
*Һине дошмандарҙан һаҡлатырмы,*
*Һиндә үҫкән башҡорт балаһы.*
*Уралҡайым, һинән ҡырҡып алһам,*
*Ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың.*
*Тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан саҡта*
*Яуҙа үлгән батырҙар ҡандары.*
*Күңелкәйем уҡый тарихтарҙы,*
*Уралҡайым һине күргәндә.*
*Аятым һин, Урал, тәсбихем һин,*
*«Урал!» тиермен гүргә кергәндә.*

Ә хас дошмандар Урал хаҡында ошолай тип йырлай торған булғандар:

*«Уралҡайым» ти ҙә калаһығыҙ,*
*Уралығыҙ ҡыҙырым сауҡа икән.*
*Күрмәгәнгә Урал, ай, зауыҡлы икән,*
*Күрҙе ниһәң зауҡың ҡайта икән.*

Фәрзәнә апай Ҡужахмәт ҡыҙы менән осрашып һөйләшеү, беренсенән, 1931 йылғы репрессияларҙың кешеләр өсөн ни тиклем фажиғә, төҙәтә алмаҫлыҡ афәт икәненә тағы бер дәлил булһа, икенсенән, Мөжәүир хәҙрәттең дә яңы сифаттарын, уның халҡыбыҙ йырына мөкиббән булыуын асты.

Хәҙрәт олатай фатихаһына тоғро күпте күргән был ҡатын хәҙер Сибайҙа йәшәй, уны ололоҡлап «Фәрзәнә хажийә» тип йөрөтәләр. Биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмай, динебеҙгә, иманыбыҙға тоғролоҡ һаҡлаған мөслимә 2006 йылда хажға

барыу бәхетенә өлгәште. Тырышлығы, егәрлелеге арҡаһында матур, мул тормошта йәшәй.

– Бөтәһе лә хәҙрәт олатай фатихаһынан, – ти бәхетле диндәшебеҙ. – Әгәр теге саҡта уға күренеп йәнемде имләтмәһәм, рухым күтәрелмәһә, өмөтһөҙлөк мине ниндәй упҡынға һөйрәр ине, билдәһеҙ. Кешене йәшәткән – өмөт! Олатай һәр килеүсе күңеленә өмөт орлоҡтары сәсте. Шул орлоҡтары күпме йылдар үткәс тә шытып сыға, ин шәәъ Аллаһ!

*Аллабирҙина Фәрзәнә,*
1941 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Тылсымлы көсөнә барыһы инанды

1959 йылдың июнь аҙағы ине. Мине бесәнселәр звеноһына ауылдағы 50 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Урал тигән урынға илтеп ҡуйып, бесәнгә ебәрҙеләр. Ағайым, атайымдың ҡустыһы Нурислам Мерәсов, мине ҡуна ятып бесән сабырға китеремде белгәс: «Ҡустым, һин барып бер аҙ эшләгәс, мин арба егеп барырмын. Мөжәүир хәҙрәткә алып барып кил әле», — тип үтенесен белдерҙе.

Ул үҙе сирләй ине. Шулай итеп, күп тә үтмәй, ул килеп етте. Икенсе көнө ағай менән иртәнсәк пар ат егеп юлға сыҡтыҡ. Юлда йоҡлап, тәғәйен урынға төшкә генә барып төштөк. Мөжәүир хәҙрәттең өйө йылға эргәһендә генә ине. Йортонан 300 метрҙа мәсете күренеп ултыра. Беҙ барғанда ҡарттың өйө эргәһендә халыҡ мәж килә, сиратҡа теҙелгәндәр. Беҙҙең алдан бер ҡатын инеп сыҡты. Сыҡҡас, кешеләр, нимә тип әйтте һиңә, тип һорашалар, «Һин бер эт эйәртеп килтергәнһең», — тип әйтеп сығарған икән хәҙрәт тегегә. Һуңынан уның артынса бер рус егете инеп китте лә (ире булғандыр инде), күп тә үтмәй ҡулына ҡағыҙ (бетеү) тотоп сыҡты. Шунан Нурислам ағай инде. Артабан миңә лә сират етте. Солан эсендә бәләкәй генә урындыҡ, мөйөштә ашъяулыҡ йәйелгән. Ингәс тә хәҙрәт таҫтамал бирҙе лә, себен ҡыуырға ҡушты. Уларҙы ҡыуып сығаргас, ултырғысҡа ултыртты. Мин үҙемдең сиремде — битем боҙолоп йонсотоуын һөйләп бирҙем. Ҡарт ашъяулыҡ өҫтөндәге банканан үлән төнәтмәһе алып бирҙе лә: «Ҡайтҡас, битеңде күҙ һабыны менән яҡшылап йыу ҙа тиҙ генә ошо дарыуҙы һөртөрһөң», — тине.

Мин әүлиә ҡушҡанса эшләнем. Теге төнәтмәне һөрткәс, сыҙап ҡына булмай инде, бит әсетә генә. Шунан һуң ул сир мине борсоманы. Шул барғанда Мөжәүир хәҙрәт: «Беҙ өсәүбеҙ. Бер әүлиә – Стәрлетамаҡта, икенсеһе Ҡыҙыл мәсеттә (хәҙерге Мораҡ ауылы) йәшәй», – тип һөйләп ултырғайны. Тик матбуғатта улар тураһында ни эшләптер бер ҙә яҙмайҙар. Мөжәүир хәҙрәттең тылсымлы көсөнә барыһы ла инанды. Уға мин һуңынан йөрәк ауырыуынан интеккән әсәйем менән апайымды ла дауаланырға алып барҙым. Әсәйем Йәнбикә 84 йәшкә тиклем йәшәне.

Бик күптәргә дауаһы тейҙе изге әүлиәнең. Әле лә беҙ уны яҡты хәтирәләр менән иҫкә алабыҙ. Урыны ожмах түрендә булһын.

*Мирасов Йыһанур.*
Бөрйән районы, Нәби ауылы

## Мөжәүир хәҙрәт бетеүе

Минең әсәйем Әбсәләмова (хәҙер Ғәлиәкбәрова) Зөлхизә Хөсәйен ҡыҙы Иҙелбай ауылында тыуып үҫкән. Был ауылда Мөжәүир хәҙрәт ҡасандыр уҡып, белем алған. Күрәһең, Хөсәйен ҡартатайым менән шул йылдарҙа танышып дуҫлашҡандар. Дуҫлыҡ, яҡындан аралашыу 1939 йылға, хәҙрәтте төрмәгә япҡанға тиклем, дауам иткән. Хөсәйен ҡартатайым, ике өлкән улдарының ҡара ҡағыҙын алып, 1942 йылда вафат булған.

Әсәйем хәтерләүенсә, Мөжәүир хәҙрәт 1943 йылдың көҙөндә уларҙа, йәғни Райхан өләсәйемдәрҙә, бер аҙна тирәһе йәшәп китә. Арыған, йонсоған, өҫ-башы туҙып бөткән Мөжәүир хәҙрәт, Хөсәйен ҡартатайымдың бынан 1 йыл элек гүр эйәһе булыуына бик ҡайғыра, уның рухына бағышлап аят уҡый һәм өләсәйемә:

– Килен, төрмәнән мине сығарҙылар, бына 10 көн инде йәйәүләп, ауылдан ауылға йөрөп ауырыу балаларҙы тамаҡ хаҡына өшкөрөп, һеҙгә килеп йығылдым. Бындай ҡурҡыныс ҡиәфәттә өйгә ҡайтып инһәм, еңгәң дә, балалар ҙа танымаҫ, бер-ике көн ҡатыҡ эсеп, хәл алырға рөхсәт ит, – тигән.

Әлбиттә, оҙон аҙаплы юлда аслы-туҡлы ыҙалап килгән, өс йыл буйы төрмә камераһының еүеш һауаһын һулап, һаулығы ҡаҡшаған хәҙрәтте кеше ҡиәфәтенә индереү өсөн бер-ике көн аҙ ваҡыт. Хәлле генә йәшәгән, изге күңелле, йорт эштәренә талымһыҙ, уңған өләсәйем көн дә мунса яғып Мөжәүир хәҙрәтте тәрбиәләгән. Бер аҙна үткәс, хәҙрәт:

— Килен, Баймаҡҡа баҙарға килеүселәргә әйтеп ебәр, килеп алһындар, — тигән.

Икенсе көн үк Мөжәүир хәҙрәттең улы Ғәбделварис ат егеп килеп етә. Өләсәйем мәрхүм Хөсәйен ҡартатайымдың ситек-калушын, күлдәк-ыштанын, кәзәкейен Мөжәүир хәҙрәткә хәйер итеп бирә. Хәҙрәт доғалар уҡып, өләсәйемдең етем (атаһыҙ) ҡалған ейәндәренең арҡаларынан һөйөп, уның изгелегенә риза булып, хушлашып ҡайтып китә.

60-сы йылдарҙың йылы сентябрь айҙарының береһендә атайымдың күҙ ҡараһындай күреп, ҡурсалап ҡына үҫтереп килгән биш йәшлек берҙән-бер малайы, Рәшит ҡустым, йәнтәслим ауырып китә. Әсәй врачтарға алып бара. Улар, кисекмәҫтән, больницаға ятырға ҡушалар. Әсәйем илап ҡайтып инә. Рәшит ҡустымдың йөҙө ап-аҡ, хушһыҙ, саҡ ҡына тын алып, урындыҡта ята. Беҙ, ҡурҡышып, дүрт ҡыҙ ситтә баҫып торабыҙ. Атайым: «Машина... Маклаковҡа барам. Манһырға, Мөжәүир хәҙрәткә барырға кәрәк», — тигән һүҙҙәр менән сығып йүгерҙе. Беҙҙең Хоҙайбирҙин урамының машинаһы булған берҙән-бер кешеһе, аэродром хужаһы Маклаков, күп тә үтмәй шыжлап ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Рәшитте ҡулдарына һалып, атайым машинаға инеп ултырҙы.

Артабан әсәйем ошолай тип һөйләй:

— Рамаҙан балам да ошолай күҙ менән ҡаш араһында ғына үлде лә ҡуйҙы. Быныһы ла үлә инде, тип илайым, атайың мине әрләй. Ауылға етәрәк, Рәшит күҙҙәрен асты.

— Атай, ҡайҙа китеп барабыҙ? — тип, тороп ултырҙы.

Манһырға эңер төшөп етеп килгәндә килеп индек. Хәҙрәт ошо йортта йәшәй, тип күрһәттеләр. Атайың машинала Рәшит менән ултырып ҡалды, мин өйгә инеп киттем. Инһәм, бер ауырлы йәш ҡатын мейес буйында һөйәлеп баҫып тора.

— Эңерҙә кешеләрҙе ҡабул итмәй ул, — тине ҡоро ғына бышылдап.

Шул саҡ төпкө яҡтан хәҙрәттең тауышы ишетелде:

— Миңә килделәр, килен. Әйт, үтһендәр.

Килен кеше өндәшмәй торһа ла, йәһәт кенә төп яҡҡа үттем, һаулыҡ һорашып, хәлемде һөйләйем генә тигәйнем:

— Беләм, беләм, бар, баланы алып ин, — тине.

Машина тәҙрәнән күренмәй, ҡайҙан белде икән, тип аптыраным.

Рәшитте алып ингәс:

– Юлда булғанығыҙҙа уҡ мин уны өшкөрә башланым, шуға хәл инеп, тороп ултырҙы, балаңа ҡаты күҙ тейгән. Бына бетеү яҙып бирәм, балам төҙәлде тип, ҡайтҡас та ташлап ҡуйма, өсмөйөшләп күнгә төрөп тек тә, муйынына тағып ебәр. Ир еткәнгә тиклем 3 тапҡыр ошолай ҡаты ауырыр, минең доға яҙған бетеүем аяҡҡа баҫтырыр, онотма, муйынына тағып йөрөт. Кемегеҙ ауырыһа ла шифаһы тейер, – тигән хәҙрәт олатай.

Мәктәпкә барғанға тиклем Рәшит ҡустым был бетеүҙе тағып йөрөнө.

Унынсы класта уҡығанда ҡустым тағы ла сәсрәп ауырып китте. Был ваҡытта мин институтта уҡый инем, каникулдамын. Атай-әсәй өйҙә юҡ. Рәшиттең ҡапыл температураһы күтәрелде, ҡоҫа, эсе китә, һаташа, ваҡыт-ваҡыт һушын юғалта. «Ҡараңғы төндә, сәғәт 2-лә, бик ҡурҡһам да берҙән-бер телефонлы милицияға барып, «Тиҙ ярҙам» саҡырттым. Ә улар килмәй ҙә килмәй. Дарыуҙар эсерәм, тәьҫире юҡ. 3–4 сәғәт үтеп китте, таң беленде. Керпек тә ҡаҡмайым, берҙән-бер ҡустым үлеп ҡуймаһын тип, иплләп кенә илап та алам. Шул саҡ ҡапыл Мөжәүир хәҙрәттең бетеүе иҫкә төштө. (Хәҙер уйлайым, уның рухы миңә ярҙам иткәндер.) Эҙләй торғас, әсәйемдең тотонолмаған сәйнүге эсенән таптым.

– Нимә ул? – тине Рәшит көс-хәлгә.

– Мөжәүир хәҙрәттең һиңә тип биргән бетеүе, – тинем.

Ул ваҡытта, Аллаһҡа ышанмаған, коммунизм рухында тәрбиәләнгән, ике комсомолецтың был ҡыланышы, ситтән ҡарағанда, бик сәйер тойолғандыр инде.

Ун-ун биш минут та үтмәне, Рәшит тынысланды, температураһы төштө, бер аҙ ваҡыттан һалҡын итеп тирләп, тәрән йоҡоға талды. Сәғәт таңғы 7-лә генә, саҡыртҡандан һуң 5 сәғәт үткәс, «Тиҙ ярҙам» килеп етте. «Где больной?» – тигәс, «Вот спит», – тигән булам. Рәшитте уята алмайбыҙ, рәхәтләнеп йоҡлай. Врач ҡарағандан һуң: «Он у вас совершенно здоров», – тип сығып китте.

Хәҙрәт олатайҙың яҙып биргән доғаһының тылсымлы көсөнә тағы бер инандыҡ.

Ҡустымды армияға оҙатҡанда, бетеүҙе ҡалайтабыҙ инде, тип аптыраныҡ. Биреп ебәрһәк, юғалтыуы көн кеүек асыҡ. Бетеүһеҙ китте. Әсәйемдең йөрәге һиҙгән икән. Ҡустым армияла ауырып, ун көн госпиталдә ятып, һуҡыр эсәген ҡырҡтырып ҡайтты. Ярай әле, ахыры һәйбәт бөткән.

Хәҙрәт олатайҙың өшкөрөп биргән тоҙо ла беҙгә күп тапҡыр ярҙам итте.

...Рәйхан өләсәйем беҙгә ҡунаҡҡа килгәйне, һәр ваҡыттағыса күстәнәскә тәм-том алып килгән. Кәнфитте ҡабып, ҡыуанып, урындыҡта аунап уйнайбыҙ. Ҡапыл нығ итеп ауырттырып тешем һыҙлай башланы. Иңләп кенә өләсәйемдең тубығына ятып, мыш-мыш танау тартам.

– Ни булды, балам? – ти өләсәй.

– Тешем һыҙлай... – Мин аҡырып илап ебәрҙем.

– Бына Мөжәүир хәҙрәттең өшкөргән тоҙо бар, – тип өләсәйем, түшелдерегенән ҡулъяулыҡҡа төрөлгән тоҙҙо алып, семтеп ҡабып минең ауыҙҙы астырып өрә башланы, үҙе доғалар уҡый. Өләсәйем Ҡөрьәнде лә шатырлатып уҡый ине. Тешем нисек тиҙ һыҙлай башланы, шулай тиҙ туҡтаны ла.

Хәҙер хәҙрәт олатайҙың бетеүе әсәйемдә. Күҙ ҡараһылай һаҡлап, тағып йөрөй.

Ҡай саҡта шул серле көскә эйә тылсымлы бетеүҙе асып, яҙыуын ҡарағым килә, тик әүлиә Мөжәүир хәҙрәттең үҙе кеүек буй буйламаҫлыҡ, аҡыл етмәҫлек сер булып ҡалһын тигән уй туҡтата.

*Ғәлиәкбәрова Разифа.*
Баймаҡ ҡалаһы

## «Хәҙер батырайҙың инде...»

Мин дә атайым һөйләгәндәрҙе иҫкә төшөрөп, уның хәҙрәткә бәйле хәтирәләре менән таныштырғым килә. (Атайым – Сәлимов Һибәтулла Ҡаһарман улы – 1912 йылда Баймаҡ районының Баймырҙа ауылында тыуған, бөгөнгө көндә Ҡарамалы ауылында йәшәй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Башҡорт атлы дивизияһында булған.)

Атайым менән 30-сы йылдарға тиклем үк бер ғибрәтле хәл була. Бесәндә эшләп йөрөгән сағында атайым һәм уның бер иптәше ағаслыҡҡа барып һыу эсәләр. Күп тә үтмәй, атайым ҡапыл телдән яҙа. Иптәшенә ҡайтыу яғына ымлап ҡына күрһәтә. Ҡыуышҡа ҡайтһалар – береһе лә ышанмай икән.

Ул саҡта атайымдың Шәрифулла исемле бер ағаһы Йолалыла эшләп йөрөгән була. Ошо хәлдән һуң, өс көн үткәс, ул атайымды Манһыр ауылына – Мөжәүир хәҙрәткә алып барған. Хәҙрәт йорто янында ғәҙәтенсә халыҡ бик күп. Сират атайыма килеп етә.

– Ә-ә-ә, ҡоҙаға матур ҡыҙҙар эйәләгән икән! – тип шаярта хәҙрәт һәм өшкөрөп, доға яҙып бирә.

Бер сәғәттән ашыуыраҡ ваҡыт уҙғас, атайым телгә килгән. Ул өс көн ашамай йөрөгәндән һуң ағаһынан һорап ҡымыҙ эсә.

Бер нисә көн үткәс, атайым тағы ла күҙһенеп (күҙ тейеп) ауырып китә, сөнки бесәндә халыҡ бик күп була һәм, күрәһең, улар Һибәтулла һауығып ҡайтҡан, тип артығыраҡ һөйлән-гәндәрҙер. Атайым Мөжәүир хәҙрәт биргән доғаны һыуға

һалып сайҡап эсеп, бер аҙ ваҡыт кеше күҙенә күренмәй һаҡланып йөрөй һәм һауығып китә. Бына ҡайҙа ул хәҙрәттең көсө!

Мөжәүир хәҙрәтте Баймырҙа ауылына Ғәлимйән исемле кеше йыш ҡына ҡунаҡҡа саҡыра торған була (Ғәлимйән ҡарт хәҙрәткә бажа булған). Бер шундай мәжлестә атайым да ҡатнаша.

Ҡунаҡта булғанда Мөжәүир хәҙрәт атайыма: «Һибәтулла! Минең сәсемде алсы», — тип өндәшә. Атайым ҡурҡыңҡырап, шикләнеп ҡуя. Шулай ҙа «Бисмилләһир-рахмәнир-рахим»-ды уҡып, әстән: «Ал яғын алһам, батырайыр инем», — тип уйлап ҡуя. Сәстең алғы өлөшөн алып бөткәс, Мөжәүир хәҙрәт: «Хәҙер батырайҙың инде», — тип, атайымды аптырауға һала.

Был хәлдән һуң да хәҙрәт бер нисә тапҡыр атайымдан сәсен алдырған. Бөгөнгө көндә лә атайым Мөжәүир хәҙрәттең бер өлөш сәсен ҡомартҡы итеп һаҡлай.

1948 йылда Мөжәүир хәҙрәт Баймаҡта Бәхтигәрәй исемле ҡустыһында ҡунаҡта ултырғанда, ашап-эсеп бөтмәҫтән элек уҡып, доға ҡылған. Хәҙрәттән ни өсөн улай эшләүен һорағандар. Ә ул: «Әле генә Баймырҙа ауылынан Фазлетдин мулла донъя ҡуйҙы, мәрхүм булып ҡалды», — тип яуап биргән.

Мөжәүир хәҙрәт менән был мәжлестә Баймырҙа ауылы кешеләре лә булған һәм улар Фазлетдин мулланың үлеме тураһында хәҙрәттән ишеткәс тә ҡайтырға ашыҡҡандар.

Был миҫал да Мөжәүир хәҙрәттең кешенең ни уйлағанын белеү (телепатия) һәләте тураһында һөйләй.

Бер кеше хәҙрәтте ҡунаҡҡа саҡырам тип, атайым менән һарығын алыштырған. Мәжлескә атайымды ла саҡырған. Ит ашап ултырғанда Мөжәүир хәҙрәт: «Һибәтулла! Һинең һарығың әле йөрөй, уны ла бергәләп ашарбыҙ әле», — ти икән. Ә эш былай булып сыға: баяғы кеше атайым биргән һарыҡты түгел, ә ферма һарығын һуя.

Бер ваҡыт Баймырҙа ауылының бер ҡарты хәҙрәтте ҡунаҡҡа саҡырған. Хәҙрәт ул ҡартҡа: «Саҡырыуын саҡыраһың да ул, балаларыңа ҡушып саҡырмаһаң ни була? Намаҙ уҡый алмайым бит», — ти икән. Теге ҡарт аптырай,

хәҙрәт шулай тип әйтте тип өйөнөң алғы бүлмәһендә ултырған балаларына өндәшә икән. Ә теге балаһының иҫенә төшөп ҡалған – «балаларың» тип хәҙрәт урындыҡ аҫтында ултырған бер йәшник араҡыны әйтмәй микән? Ысында ла шулай була: урындыҡ аҫтында ултырған араҡыны һиҙеп, Мөжәүир хәҙрәт намаҙын уҡый алмаған икән.

Сибай ҡалаһынан Камилә инәйем (юғарыла яҙып үтелгән Шәрифулла олатайымдың әбейе) Фәйзулла ауылында машинан төшөп ҡалып, Манһыр аша Байышҡа туғандарына барырға бер үҙе юлға сыға (был хәл көҙгә табан, кис мәлендә була). Иптәш тә булмағас ҡурҡа: «Һис юғында бүреһе лә осрамай», – тип уйлап бара икән. Бына шул саҡ инәйҙең ҡаршыһына ете бүре килеп сыҡмаһынмы?! Бүреләр уның алдына сығып та, ҡушлап та, арттан да эйәргәндәр – әйтерһең дә, Манһырға тиклем оҙатыу өсөн килгәндәр.

Шулай итеп, Камилә инәй Манһырға барып етеп, таныштарына инеп, сәй эсеп ултыра икән. Шул саҡ Мөжәүир хәҙрәт үҙе лә килеп инә. Ҡунаҡтар менән һаулыҡ һорашып сыға ла:

– Камилә, иптәштәреңде ҡайҙа ҡалдырып киттең? – тип һораған.

Камилә инәй ниндәй иптәш тураһында әйтә икән был тип аптырағас, Мөжәүир хәҙрәт:

– Баяғы һиңә эйәреп килгән ете бүрене әйтәм: үҙең һорап алдың бит, һорамаҫ кәрәк ине, – тигән. (Был хәтирәне инәйемдең ҡыҙы – Маһира апайҙан яҙып алдым.)

*Әлимов Мөхәмәтйән.*
Баймаҡ районы,
Ҡарамалы ауылы

## Тағы ла тылсымлы олатай хаҡында

Мөжәүир олатай беҙҙең Иҙелбай ауылында (Баймаҡ районы, хәҙер ул ауыл юҡ) Сырлыбаев Ғатаулла хәҙрәттә мәҙрәсәлә уҡыған. Ошо осорҙа 2 йыл буйына ҡартатайым Заһретдин Сырлыбаевтарҙа фатирҙа торған. Уның менән булған бер хәл тураһында атайым Әминев Әхмәтхәләф мәрхүм һөйләгәйне.

Бер ваҡыт атайымдың ағаһы Әминев Әхмәтшәриф ҡаты ауырып китә. Ҡартатайым йәһәтләп йәш атын егә лә атайыма:

– Улым, һин тиҙ генә Манһырға барып, Мөжәүир олатайыңды алып кил инде, шунһыҙ ағайың йүнәлә алмаҫ, ахыры, – тип әйтә.

Атҡа ултырып, дилбегәне ҡағыуы була, ат буран туҙҙырып сабып сығып та китә.

– Ҡурҡышымдан нишләргә лә белмәнем, – тип үҙенең хәтирәләрен һүтә башланы атай мәрхүм. – Манһырға нисек барып еткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Хәҙрәт олатай ҡапҡаһының тышында мине көтөп торған. Ҡайтырға юлланғанда, ат тағы ла сабып сығырға самалағас, Мөжәүир олатайҙың: «Шаярма!» – тиеүе була, ат шунда уҡ яйлап юрта башлай. Иҙелбайға килеп еткәс тә хәҙрәт, аттан төшә һалып толобон санаға ҡалдырҙы ла, өйгә шәп атлап инеп китте. Әхмәтшәриф олатайыбыҙҙы тотоп: «Ниңә бала менән булышаһың?» – тип өс мәртәбә сикәһенә һуҡты. Ағайым шунда уҡ шыбыр тирգә батты. Хәҙрәт, өс көн беҙҙә торғас, бетеү яҙып биреп, ҡайтып китте. Ошонан һуң, ағай ҙа һаташып ауырыуынан йүнәлде.

Атайым иҫән саҡта Мөжәүир хәҙрәт беҙгә йыш ҡына килгеләп йөрөнө. 1951 йылда мин шоферлыҡҡа уҡып сығып, эшләй башланым. Беҙҙе «Йылайыр» совхозына командировкаға ебәрә торғайнылар, мин күберәген Байыш бүлексәһенә эләгә инем. Шунда эшләгәндә мин һәр ваҡыт Мөжәүир олатайҙарға хәл белешергә инеп йөрөнөм. Үҙемдең дә тылсымлы олатайға ҡағылышлы иҫтәлектәрем бар, шуларҙы ла яҙып үтәйем әле.

1963 йылда Рыҫкилдин Бохарбай исемле егет менән начальнигыбыҙ Нурбаев Рәшит ағайға һәм диспетчер Георгий Кодаковҡа Коммунар участкаһынан бүрәнә алып ҡайтырға барҙыҡ. Барһаҡ, бүрәнә юҡ, тинеләр. Шул саҡ участка начальнигы беҙгә: «Буш ҡайтҡансы хәҙрәт олатайҙың бураһын тейәп ҡайтығыҙ, ҡайтҡас машина өсөн олатай үҙе түләр», – тине. Киске сәғәт бишкә бураны тейәп бөтөп, Манһырға юл тоттоҡ. Унда килеп еткәндә, сәғәт төнгө бер тирәһе булғандыр. Мин төнгә ҡаршы олатайҙы бимазаламайыҡ тип, Ғәбделварис ағайҙарға барып ишек шаҡылдаттым. Ул: «Атайым һеҙҙе көттө», – тигәс, бер аҙ аптырап ҡалдым. Йөгөбөҙҙө бушатып, аш ашап, ҡайтырға сыҡҡанда сәғәт төнгө 2-не уҙған ине инде. Юлға сыҡҡас ҡолаҡҡа «Туҡтап ял ит» тигән ниндәйҙер тауыш сагылды кеүек. 30 метр самаһындай юлдан ситкә сығып, машиналарҙы һүндереп, сәғәт көндөҙгө 12-гә тиклем йоҡлағанбыҙ.

1965 йылда тағы ла бер хәл булды. Минең улым ауырып китте, врачтарға күрһәтеүҙең файҙаһы теймәне. Шул саҡта мин уны Мөжәүир олатайға алып киттем. Беҙ барғанда олатайға килеүселәр байтаҡ ҡына ине. Хатта Куйбышев өлкәһенән, Ҡаҙағстандан да кешеләр булды. Олатайға инһәм, ул: «Бар улыңды индер!» – тип мине сығарып ебәрҙе. Сығып малайҙы индерәйем тиһәм, улым, инмәйем, тип ҡарышып илай башланы. Кире инеп олатайға был хәлде әйткәс: «Ярай, йөрөһөн», – тине лә тоҙ өшкөрөп бирҙе. Шунан һуң ғына малайым йүнәлде.

*Әминев Ғәлимйән.*
Баймаҡ ҡалаһы

## Араҡы — ҡара йылан

2005 йылда Президент тарафынан наркоманияны, алкоголизмды һәм тәмәке тартыуҙы иҫкәртеү йылы итеп иғлан ителде, шуға ла гәзит уҡыусыларға үҙем менән булғанды еткергем килә.

Миңә Мөжәүир хәҙрәт менән өс мәртәбә осрашыу бәхете тейҙе ул тере саҡта. Беҙ Матросов урамындағы 16-сы өйҙә өләсәй, әсәй, ҡустылар һәм тормош иптәшем менән мин — бөтәһе 7 кеше йәшәнек. 1953 йылда Мөжәүир хәҙрәт Сибайға килгәнен белеп, өйгә саҡырып ҡунаҡ иттек. Хәҙрәт әсәйемде, өләсәйемде өшкөрөп дауаланы, тоҙ өшкөрөп бирҙе. Мөжәүир хәҙрәт менән икенсегә күрешеү былай булды. Күсей ауылында йәшәгән ҡәйнәм Мусина Файза ныҡ ауырып Түбә дауаханаһында ята ине. Ҡатыным менән икәүләп уны ат менән Сибайға килтерҙек. Мөжәүир хәҙрәткә алып барып күрһәтергә булдыҡ. 1954 йыл, бесән ваҡыты. Хәҙрәт бесәндә йөрөһә, өйҙә булмай торған, тип ишеттек тә, Әбдерәхмән ауылы аша, тау юлынан тура бесәнлегенә төштөк. Ат тирләп бик арып барҙы. Хәҙрәт тә, башҡа кешеләр ҙә күренмәй, ҡайын ботағында 5—6 салғы эленеп тора. Манһырға барҙыҡ. Унда ла тап итмәй кире бесәнлегенә барҙыҡ. Мөжәүир хәҙрәт унда ине, беҙҙе бик яҡшы ҡаршы алды. Миңә атты туғарырға ҡушты, ҡатыным Шәһәрбаныуға самауыр ҡуйырға әйтте. Үҙ ризығы менән яҡшы итеп сәй эсергәс, ҡәйнәмде өшкөрҙө, тоҙ өшкөрөп бирҙе. Дауаханала үлер тип ҡайтарғайнылар, бынан һуң 1983 йылға хәтлем йәшәне. Мине, ҡатынымды һәм

8 айлыҡ ҡыҙыбыҙҙы өшкөрҙө. Барған юлдан ҡайтырға сыҡһаҡ, ни күрәбеҙ – кеше йөрөгәне күренмәһә лә, беҙ килгәндә генә үҫеп ултырған бесән сабып ҡуйылған ине!

Өсөнсө тапҡыр 1955 йылда күрештек. Йыл аҙағы ине, беҙгә Нуғай – Әбдрәш ауылынан Кәримов Фитрат ҡоҙа килде, ул ауырый ине. Иптәш итеп мине Мөжәүир хәҙрәткә алып бармаҡсы. Минең барғым килмәй, сөнки бер көн алда иптәштәр менән эскәйнем, баш ауырта, һин күренмәйһең бит, мин күренәм, тигәс, ризалаштым. Фәйзулла туҡталышында төшөп, ары йәйәү атланыҡ. Түбәлекте үткәс, кисеү йылғаны аша сыҡтыҡ, шунда 1 ярты араҡы ултыра ине, беҙ уға теймәнек, ары киттек. Түбәндә йылғала һыу инеп алдыҡ.

Беҙ барғанда Мөжәүир хәҙрәт урындыҡта ултыра ине, беҙҙе сәйгә саҡырҙы. Мине мәрәкәләп: «Улым, башың ауыртҡас, йылға буйында төҙәтеп алырга ине, иптәштәрең көтөп ултырғанда», – тине. Мин уңайһыҙланып, юҡ, тигән булдым. Кәримов Фитрат ҡоҙаны ҡараны ла, беҙ һаубуллашып ҡайтырға сыҡтыҡ. Ҡайтышлай баяғы араҡы ултырған ерҙә туҡтарға булдыҡ. Ҡараһаҡ шул урында ҙур ҡара йылан ята ине.

Тәмәкене 19 йәштән, ололарға күрһәтмәй тарта инем. Шул өсөнсө барыуҙан 25 йәшемдә тәмәкене ташланым. Араҡыны һирәк, ҡунаҡ булғанда ғына эсәм.

*Рәсүлев Ә.*
Сибай ҡалаһы

## Хәзрәттең күңеле һиҙгер ине

1966 йылдың йәйендә Өфө ғилми үҙәгенә буйһонған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре Башҡортостан буйлап экспедицияға сығырға булды. Мин дә уларға эйәрергә ҡарар иттем. Экспедицияның маҡсаты — партияның милли сәйәсәте нисек үтәлеүе хаҡында социологик мәғлүмәттәр туплау ине. Минең дә яҙыласаҡ диссертациямдың темаһы институт хеҙмәткәрҙәре шөғөлләнгән эшкә яҡын. Уларҙың да анкетаһы әҙерләп баҫылған, мин дә үҙемдең анкеталарымды алдым. Ике машинаға тейәлеп, Башҡортостан райондары буйлап сығып киттек. Етәксебеҙ — ошо институттың ул саҡтағы директоры Х. Сайранов. Шуныһын да әйтергә кәрәктер: Хәйҙәр Сайранович үҙ һүҙле, арҡыры кеше булып сыҡты. Экспедиция ағзаларының тәҡдим-кәңәштәренә ҡолаҡ һалмай, дөрөҫ булһа ла, булмаһа ла үҙенекен эшләү яғын шаҡара. Шуға күрә юлда барғанда уҡ етәксе менән ябай хеҙмәткәрҙәр араһында аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡты.

Экспедицияны Баймаҡ районынан башларға кәрәк тигән ҡарарға килдек. 1966 йылдың йәйе үтә эҫе ине. Беҙ, ауылдарға барып, мөмкин тиклем күберәк кешегә анкеталарыбыҙҙы таратып, уларҙың фекерҙәрен белергә тейешбеҙ. Йәй көнө халыҡ баҫыуҙа. Халыҡты күпләп йыйыу ауыр бер мәсьәләгә әйләнде. Беҙҙең эш башлап ебәреү өсөн тәүге туҡталған урыныбыҙ Йылайыр совхозының үҙәк ауылынан алыҫ түгел булып сыҡты. Арабыҙҙа ғилми экспедицияларҙа күп йөрөгән Нигмәт Шоңҡаров та бар. Ул элегерәк тә был яҡтарҙа булған



Өфө ҡалаһынан Мөжәүир хәҙрәт ҡәберен зыярат ҡылырға килеүсе Римма Яйҡарова

икән. Бер нисә көн тирә-йүндәге ауылдарҙа йөрөп ҡайттыҡ, әммә халыҡты табыуы ҡыйын булғанлыҡтан, әллә ни эш ырамай. Хеҙмәткәрҙәрҙең күңеле төшөнкө. Ошо хәлде бер аҙ йәнләндерергә булһа кәрәк, Ниғмәт шундай хәбәр һалды:

– Беләһегеҙме, беҙҙең таборҙан (беҙ бер нисә палатка ҡороп, шунда йәшәй инек) алыҫ түгел, Манһыр тигән ауыл бар, унда республикабыҙҙа ғына микән, юҡ, барлыҡ Советтар Союзына билдәле кеше Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов йәшәй. Әйҙәгеҙ шуға барып сығайыҡ, – тип иғлан итте.

– Әйҙәгеҙ ҙә әйҙәгеҙ, – тип ҡысҡырыштылар ҡыҙҡыҙҡын.

Мин, етәксе Сайрановтың ғилми юҫыҡтан урынбаҫары булараҡ йомош үткәргәнлектән, үҙемдең һүҙемде әйтмәй булдыра алманым.

– Беренсенән, бындай уйыбыҙ хаҡында Хәйҙәр Сайрановичҡа әйтеү кәрәкмәҫ ине. Беләһегеҙ бит, ул был шө-

ғөләгөҙҙө тыйып ҡуясаҡ. Икенсенән, экспедицияның барлыҡ коллективы менән түгел, ә күп тигәндә 4–5 кеше барырға тейеш. Барған сүрәттә нимә эшләргә тейешлегебеҙҙе алдан һөйләшеп, сценарий төҙөргә тейешбеҙ, — тинем.

— Дөрөҫ, дөрөҫ, — тип ҡеүәтләнеләр минең тәҡдимде.

Тәүге тәҡдим һәр кемгә асыҡ ине, етәксегә өндәшеүсе булманы. Хәҙрәт янына барыусылар иҫәбенә Ниғмәт Шоңҡаровты, Роза Нафиҡованы, мине, тағы ике ҡыҙҙы индерергә булдыҡ. Сценарий яҡынса шулай: Шоңҡаров, йәнәһе, үҙенең ҡатыны менән (уныһы Роза Нафиҡова) уға күренергә килгәндәр. Оҙаҡ бергә йәшәһәләр ҙә, балаға уҙа алмай, имеш.

Бер машинаға тейәлеп, биш кеше Манһыр ауылы янына йүнәлдек. Көн эҫе. Тик һалҡын урында йә булмаһа һыу эсенә инеп ятҡы килеп кенә тора.

Машинабыҙ ябай ғына ауыл өйө алдына килеп туҡтаны. Ҡапҡа алдында беҙҙе бер йәш кеше ҡаршы алды. Аҙаҡ ҡына белдек, ул хәҙрәттең улы икән. Хәҙрәттең йортта булыу-булмауы хаҡында белештек.

Ул өйҙә икән. Ниғмәт менән Роза хәҙрәт янына инеп китте. Беҙ тышта машина янында ҡалдыҡ. Көткәнгә оҙаҡ күренә, беҙҙең алып килгән «Ир менән ҡатын» һаман күренмәйҙәр. Ярты сәғәт тирәһе ваҡыт үткәндер.

Бына бер заман Ниғмәт менән Роза көлөшә-көлөшә өйҙән килеп сыҡты. Уларға хәҙрәт үҙе лә эйәргән. Ябай ғына кейемдә, башында таҡыя.

Беҙ, машина янында ҡалғандар:

— Әссәләмәғәләйкүм, хәҙрәт, — тип ҡаршы алдыҡ.

— Вәғәләйкүмәссәләм, — тип сәләмебеҙҙе алды хәҙрәт һәм барыбыҙҙы ла: — Әйҙәгеҙ, сәй эсеп китегеҙ, — тип өйөнә саҡырҙы.

Һыуһатылғайны ла, аштан оло булыу ҙа килешмәҫ, тип беҙ хәҙрәт артынан йорт эсенә атланыҡ.

Өй эсе бик йыйнаҡ, таҙа. Мосолмандар йортондағы кеүек һике һаҡланған. Уның янында борҡоп самауыр ҡайнап ултыра. Уның эргәһендә йәш кенә ҡатын өйөрөлә, күрәһең, киленелер.

Шунда уҡ табынға теҙелешеп ултырҙыҡ. Хәҙрәт әкрен генә һүҙ башланы.

– Эх, уландар, сибәр ҡыҙҙар, юҡ менән ҡыланаһығыҙ. Белеп торам, һеҙ барығыҙ ҙа юғары белемле, хөкүмәтебеҙҙең олуғ йомошон башҡарып йөрөй торған әҙәм балалары. Ин шәәъ Аллаһ, сәләмәтлегегеҙ ҙә бына тигән. Ә был улым (ул Ниғмәткә ҡарап ҡуйҙы) ҡатыным сирләй, тип кәмит күрһәткән була. Мин һеҙҙең ниндәй уй менән килгәнегеҙҙе әллә ҡайҙан һиҙеп, белеп торам бит. Йә, алдығыҙҙағы ашһыуға етешегеҙ, көн эҫе, һыуһағанһығыҙҙыр...

– Хәҙрәт беҙҙең алдан һөйләшеп килгән бөтә уй-фекерҙәребеҙҙе әйтеп бирҙе лә ҡуйҙы, беҙгә бер ни тиклем оят та булып китте, – тип һөйләп китте Шоңҡаров.

– Ярар, зарар юҡ, – тип беҙҙе тынысландырырға ашыҡты Мөжәүир хәҙрәт. – Был тирәгә килеп сығып, мине лә күрергә булып, беҙгә табан йүнәлгәс, үҙегеҙгә күп рәхмәт яуһын. Кешенең, бигерәк тә ололарҙың, хәлен белеү – оло сауаплы шөғөл. Һеҙҙең бик тә яуаплы, ауыр эш менән йөрөүегеҙ миңә билдәле. Эшегеҙҙә уңыштар теләйем. Иң мөһиме – сәләмәт булыуығыҙ шарт. Ә һау-сәләмәт әҙәм балаһы үҙенең алдына ҡуйған бурысына өлгәшә.

Беҙ һый-хөрмәткә доға ҡылып, хәҙрәткә оло рәхмәттәр әйтеп, тышҡа сыҡтыҡ. Нык тәьҫирләнеп машинабыҙға ултырып, үҙебеҙ торған еребеҙгә табан юл алдыҡ. Юлда нишләптер беребеҙ ҙә һүҙ ҡуҙғатырға баҙнат итмәй. Ҡөҙрәтле көскә эйә булған олуғ шәхес – Мөжәүир хәҙрәт менән осрашыуҙың тәьҫир көсө һәммәбеҙҙә лә тәрән эҙ ҡалдырғайны.

*Ҡотошов Рамаҙан*,
РФ һәм БР Журналистар
берлеге ағзаһы

# Хәҙрәт фатихаһы

1948 йылдың июнь айында Башҡорт АССР-ы Мәғариф комиссариатының рөхсәте менән Хәйбулла районы Әбеш ете йыллыҡ мәктәбенән, йәш уҡытыусы булараҡ, Баймаҡ РОНО-һы ҡарамағына ҡайтарылдым. Әсәйем фронтовик ҡатыны, уның ҡарамағында минән башҡа тағы ла ике ҡустым һәм ҡарындашым булыуын, өҫтәүенә әсәйемдең үтә ҡартлығын Мәғариф комиссариаты, әлбиттә, иҫәпкә алған.

1948 йылдың 15 авгусында ул йылдарҙағы РОНО мөдире булып эшләгән үтә итәғәтле, иғтибарлы Әҙһәм ағай Чанышев ҡыҫҡа ғына әңгәмәнән һуң: «Әйҙә, Манһыр башланғыс мәктәбенә мөдир булып барығыҙ. Бөгөн үк приказ алығыҙ ҙа эшләй башлағыҙ», – тине лә уңыштар теләп хушлашты.

Ул йылдарҙа уҡытыусылар өсөн закон да, хөкөм ҡарары ла аяуһыҙ ҡаты булды: әгәр ҙә дәрескә 20 минутҡа ғына һуңлаһаң да былай ҙа саҡ ҡына алған эш хаҡыңдың 25 процентын тотоп, 6 айға хөкөм итеп, етмәһә, шул эшеңдә бушлай эшләтерҙәр ине.

Манһыр башланғыс мәктәбендә 1948–1949 уҡыу йылында, бер йыл буйы уҡытыусы булып эшләп йөрөгәнемдә, миңә Мөжәүир хәҙрәт менән бергә ултырып, бишбармаҡ ашап, сәй, ҡымыҙ эсеп аш-һыу мәжлестәрендә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Мине һуғым, ураҙа, ҡорбан ғәйеттәренә лә ҡалдырманылар.

Беренсе тапҡыр мәшһүр хәҙрәт олатай менән 1948 йылдың август айының аҙағында күҙмә-күҙ осрашыуым бөгөнгөләй хәтеремдә. 1948–1949 йылдарҙа Мөжәүир хәҙрәт сағыштырмаса йәш ине, энергияһы, сихри көсө, табиплыҡ таланты,

күрәҙәселек һәләте, мин аңлай ҙа алмаған башҡа иҫ киткес көскә эйә булған башҡа ғәжәйеп сифаттарының ташып торған сағы ине. Мин кергән ошо хәҙрәт йортона төрлө диндән, төрлө милләттән, төрлө сәйәси ҡарашлы, бөгөнгө көндә тарҡалып бөткән элекке СССР-ҙың бөтә төбәктәренән дә, магнит тартҡан һымаҡ, меңдәрсә кешеләр ағыла ине. Мин ҡыйыуһыҙ ғына изге йортҡа индем, сәләм бирҙем. Хәҙрәт олатай ҡаршы алды, урын бирҙе, доға уҡыны.

Миңә ул йылда (1948) 20 йәш тә тулмаған ине. Хәҙрәт олатайҙың шул тиклем йылы ҡаршы алып, йәш уҡытыусы менән ябай ғына итеп, ихлас әңгәмәләшеүенә хайран ҡалып ултырҙым. Мөжәүир хәҙрәттән ниндәйҙер йәнлелек килгәнен һиҙҙем мин. Уның ошо ихласлығы ҡурҡыуымды ла, шикләнеүемде лә, икеләнеүемде лә еңеләйтеп ебәргәндәй булды. Хәҙрәт олатайҙан изгелек, кешелеклелек, ябайлыҡ, ихласлыҡ сифаттары бөркөлөп тора ине. Уның йортонан ҡанатланып сыҡҡандай тойҙом үҙемде.

Манһыр башланғыс мәктәбенә ошо уҡыу йылына 2-се, 3-сө кластарында бөтәһе 10 бала уҡыны, ә ауылда 10–12 самаһы йорт булыуын хәтерләйем.

«Урғаҙа» колхозының йылҡысылыҡ-тауар фермаһы Баймаҡ заготскотының эре мөгөҙлө мал һимертеү базаһы бар ине, эшселәр ҙә байтаҡ булды.

Мөжәүир хәҙрәттең ике балаһы миндә уҡыны: ҡыҙы Мәҡсүдә һәм улы Мөхәммәт. Икеһе лә тәртипле, әҙәпле, кешелекле булдылар, яҡшы уҡынылар.

Хәҙрәт олатай мәктәпкә матди ярҙам да күрһәтә торғайны. Сөнки ул ваҡыттарҙа Баймырҙа ауыл Советының бюджеты ярлы ине, хәҙер ҙә шәптән түгел инде. Мөжәүир хәҙрәт йыш ҡына мәктәпкә ягыу өсөн утын алдыртыр булды.

Мин бер йыл буйына Манһыр ауылында Заһита инәйҙәрҙә фатирҙа торам, ә ул үҙе мәктәптә ут яғыусы булып эшләне: тал утыны яғып уны йылытты, таҙа, бөхтә, йылы тотто.

Мөжәүир хәҙрәттең үтә ғилем эйәһе, белемле шәхес булыуы мине хайран ҡалдыра торғайны. Хәҙрәт йортона бер ингәнемдә, ул күҙлек кейеп, ниндәйҙер гәзит уҡый ине. Сәләмемде алғас, йылмайып, кеткелдәп көлдө лә: «Улым, күрәһеңме: мин – хәҙрәт, ә һин – замана мөғәллиме. Шулай ҙа мин

тормоштан артта ҡалмаҫ өсөн, Аллаһҡа шөкөр, «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитен һәр ваҡыт уҡып барам», – тип минең менән ихлас күңелдән әңгәмәләште. Мин: «Рәхмәт, олатай», – тип, оло ихтирам, илаһи эске бер изге ҡәнәғәтләнеү белдереүҙән башҡа бер яуап та бирә алманым.

Мөжәүир хәҙрәттән үҙем дә бер нисә тапҡыр ҡаралдым. 1948–1951 йылдарҙа ни сәбәптәндер һирәкләп күҙҙәрем ауырыны, башым да ауыртты. Хәҙрәт олатай тоҙ өшкөрөп бирҙе, доғалыҡ һәм бетеү яҙҙы. Ин шәәъ Аллаһ, төҙәлдем. Шул бетеүҙең сихри көсөн, әһәмиәтен яҡшы аңланым мин. Әсәйем мәрхүмә һуңынан да һандыҡ төбөндәге бетеүҙе оҙаҡ йылдар ҡәҙерләп һаҡланы.

1949 йылдың июнь айында Баймаҡ РОНО-һы Манһыр мәктәбен япты. Ауыл халҡы, эш булмау сәбәпле, күпләп күсеп китергә мәжбүр булды. Балалар һаны ҡырҡа кәмене, мине Ибраһим башланғыс мәктәбенә күсерҙеләр. Хәҙрәт олатай менән хушлашып китергә ниәтләнем.

Июнь айы ине булһа кәрәк. Хәҙрәткә индем. Сәләм биреп, хәлемде һөйләнем. Миңә доға ҡылды, үҙенең оло фатихаһын биреп, аҡ юл, сәләмәтлек теләп, йылмайҙы.

– Рәхмәт, улым. Аллаһы Тәғәлә абруйыңды, тәүфиғыңды бирһен. Үҙеңдәге яҡшы сифаттарҙы артабан үҫтерергә, ғилемеңде арттырырға тырыш, замана ла шулай ҡуша бит. Йәш быуынға Фирғәүендәр кеүек булырға ынтылырға кәрәк, – тине.

Беҙ бик йылы хушлаштыҡ.

Ҡайҙа ғына эшләһәм дә (45 йыл уҡытыусы булып эшләнем), юғары белем алыуым да, ғүмер буйы халыҡ араһында ҡайнап йөрөүем дә Мөжәүир хәҙрәт биргән доғалар ҙа, изге фатихалары ла ярҙам иткәндер, тип бөтә йөрәктән әйтергә иманым камил. Сөнки мин уға бөтә күңелем менән ышандым.

Хәҙрәт олатай менән беҙҙең арала бәйләнеш дауам итте. Фронтовик ҡоҙам Мазһар Кәримов (ул күптән вафат инде) 1950 йылдың 20 майында хәҙрәт олатайҙың Хәҙисә исемле ике туған һеңлекәшенә өйләнеп, әсәйем менән миңә лә ҡоҙа булып барып, туйҙа ҡатнашырға насип булды. Ә 1950 йылдың Октябрь байрамында Байыш ауылында ҡалым бирҙек, унда Мөжәүир хәҙрәт тә ҡоҙа булып килде.


بها امتنطخ به آدم عليه السلام أبو البشر ( و شيث ( و هابيل
( و ادريس ( و نوح ( و لوط ( و ابراهيم ( و سليمان ( و هود (
( و شعيب ( و صالح ( و اليسع ( و لقمان ( و يونس ( و موسى
( و هارون ( و عيسى ( و زكريا ( و داود ( و اسماعيل ( و اسحاق ( و يعقوب
( و يوسف ( و الاسباط ( و ايوب ( و ذو الكفل ( و ذو القرنين ( و طالوت
( و عزير ( و دريس ( و الخضر ( و الالياس ( و محمد صلى الله
عليه و سلم * و كل ملك مقرب و نبي مرسل و تقربهم و نبيهم
من علو عليه هذا الكتاب باسم الله تعالى لاجل الحسينين
مكتوب ... تحت العرش لا اله الا الله محمد رسول الله حق
فسيكفيكهم الله و هو السميع العليم لا اله الا انت سبحانك
اني كنت من الظالمين لا حول و لا قوة الا بالله العلي العظيم
برحمتك يا ارحم الراحمين * تمام شد ... است

Пәйғәмбәрҙәр исеме

1994 йыл. Ниһайәт, изге хәбәр ишеттек: Мөжәүир хәҙрәттең өлкән улы Ғәбделварис Сиражетдиновтың шәхси инициативаһы менән Йылайыр ауыл хакимиәте етәкселәре ярҙамында Мөжәүир хәҙрәт тыуған ерҙә, Манһыр ауылындағы мәсетте аяҡҡа баҫтырыу эштәре башланасаҡ.

Мәктәп итеп файҙаланып килгән оло изге мәсет 1881 йылда төҙөлгән булған, 100 йылдан ашыу тарихы бар. Мәсет ауылдан ситтәрәк, бәләкәй ҡалҡыулыҡ өҫтөндә урынлашҡан. Стеналары ныҡ булғанлыҡтан уға капиталь ремонт үткәрмәксе булдылар. Урындағы хакимиәт башлығы Рим Һатыбал улы Сыңғыҙов төҙөлөш материалдары бүлеп, эшселәр беркетте. Оҫталар ялтыр ҡалай менән мәсеттең ҡыйығын ябып та ҡуйҙылар.

Совхоз-техникум етәкселәре һәм Ғәбделварис Мөжәүир улы киләсәктә был изге урынды музейға әйләндерергә хыялланды. Ул саҡта был изге аҙым арҙаҡлы шәхес, халыҡ табибы, көрәҙәсе, оло дин әһеле Мөжәүир хәҙрәттең яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү, уға тере һәйкәл ҡуйыу тигән үтә ҙур ваҡиға булыр ине. Мәсеткә капиталь ремонт бөтмәгән әле, эштең масштабы ла ҙур. Шулай уҡ хәҙрәт олатай йәшәгән йортто ла ремонтларға кәрәк. Заманында ошо мәсеткә Мөжәүир хәҙрәт йома намаҙына йөрөгән, дин өсөн йәнен-тәнен биргән, шуға күрә лә ул үтә ҡәҙерле.

Оло йөрәкле дин әһеле Мөжәүир хәҙрәттең әбейе Гөлйемеш абыстай ҙа (хәҙрәттең икенсе ҡатыны) белемле, изге мөслимә ине. Ул кеселекле, ябай, йомарт, алсаҡ йөҙлө ҡатын булды: Мөжәүир олатайға йөҙәрләгән сырхау кешеләр килһә лә, бер ваҡытта ла тарыҡманы, ризығын йәлләмәне. Шуға ла кешеләр уны ихтирам итте.

Ғәбделварис Мөжәүир улы кесе йәштән эш һөйөүсән булып үҫте. Тәүге йылдарҙа элекке «Урғаҙа» колхозында, ә 1957 йылдың апрель айынан Йылайыр совхозында бына 50 йылға яҡын йылҡы ҡарай. Тырышып, фиҙаҡәр эшләй, ҙур яуаплылыҡ тоя. Сезон осоронда хужалыҡ өсөн ҡымыҙ етештерә, үҙенең сәләмәтлеген дә, ваҡытын да, көсөн дә йәлләмәй. Шуның өсөн дә Ғ. М. Сиражетдиновҡа 1994 йылдың 9 ноябрендәге Президент Указы менән «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде.

...Мин был мәҡәләмдә, килтерелгән хәтирәләрҙә тулы мәғлүмәт бирергә йыйынманым һәм үҙемә ундай маҡсат ҡуйманым. Әммә мин Бөрйән ырыуының арҙаҡлы шәхесе Мөжәүир хәҙрәт тураһында уны күреп белеүселәрҙең гәзит биттәрендә сығыш яһауын күрергә бик риза булыр инем.

*Шәйәхмәтов Сабирйән.*
Баймаҡ районы,
Байыш ауылы

## Ул кәзә бит Бохар баҙарында

1953 йылдың февраль айы ине. Бригаданан хат алып, сана менән хәҙрәт олатайға юлландым. Бер яңғыҙымын. Байыш ауылы аша Манһырға тартырға булдым. Ниңәлер, аҙашып Улаҡ тауының башына барып сыҡҡанмын. Ә көн һәйбәт ҡояшлы ине, ап-аҡ ҡар сана аҫтында күңелле шығырлай. «Әлдә буран түгел», – тип уйлайым.

Монасипты күргәс, кире боролоп Манһырға барып индем. Ғәбделварис ҡустыла сәй эскәс, хәҙрәт олатайға күренергә булдым. Мине ҡарағандан һуң олатай: «Сәхрәләрҙә йөрөп ерһыу күреп килдеңме? – тип шаяртты. – Йә, Манһыр тирәһе матурмы? Бураны ла юҡ, эйеме?» Ни әйтергә белмәйем: «Эйе, олатай, юл юҡ ине, мин аҙаштым», – тип яуапланым. Хәҙрәт: «Ни өсөн ауылығыҙҙан эре аҡсалы кешене эҙләнең? Ул һиңә барыбер арыу иптәш була алмаҫ ине. Һинең эргәңдә бер ярҙамсың – Аллаң, ике иңеңдә ике фәрештәң, ҡулыңда ҡамсың, егелгән атың бар», – тип мине иҫкәртте. Шул тиклем ояллым, нимә эшләргә лә белмәнем, ғәфү үтендем. Хәҙрәт минең ауылда бер ҡатын менән бергә барырға һөйләшеп тә, уның юлға сығыр алдынан: «Аҡсам эре, хәйер итеп вис бирһәм, йә кире ҡайтарып бирмәҫ», – тип әйтеүенә ишаралай ине. Ҡайҙан белә, тип тағы хайран ҡалдым.

1962 йылдың мартында Салауат ҡустым менән Мөжәүир хәҙрәткә барҙым. Сәләм биреп өйгә индек һәм сәй эстек. Сәйгә хуш иткәс, ҡулымды кеҫәмә тыҡһам, хәйерлек аҡсам үҙемә аҙ тойолдо. Ә хәҙрәт олатай:

– Ярай, хәйереңде бир, ыуалап туҙҙырып бөттөң, – тигәс шаҡ ҡаттым.

Аҡсаны тубығына һалғас, хәҙрәт мине ҡараны.

Шунан һуң мин:

– Хәҙрәт олатай, әсәйем һеҙгә: «Ураҙа бөтөп килә, фытыр саҙаҡаһына хәйергә кәзә бирермен, хәҙергә былай ғына уҡып торһон әле, тип әйтте», – тинем.

Хәҙрәт олатай кеткелдәп көлөп ебәрҙе:

– Ярай улайһа, уҡырмын, – тине. – Ә һеҙҙең кәзәгеҙ бармы һуң? Ул кәзә Бохар баҙарында бит. Ин шәәъ Аллаһ, шулай ҙа доға ҡылайыҡ әле, – тине.

Ысынлап та, беҙҙең кәзә юҡ ине, әсәйем баҙарҙан алырбыҙ, тигәйне.

Хушлашып, икебеҙ ҙә ҡыуанып ҡайтып киттек.

Ә май айында баҙарҙан тыу кәзә һатып алып, тағы ла Салауат менән бергәләп барып, хәҙрәткә тапшырҙыҡ. Ул шул ыңғайы Бәхтийәр олатайҙан кәзәне һуйҙыртып, бер ботон әсәйемә хәйер итеп кире ҡайтартты. Әсәйем был итте үҙе генә ашаманы: ауыл әбейҙәрен ҡунаҡҡа саҡырып алды. Бөтәһе лә хәҙрәт олатайҙың һаулығына доға ҡылды, уға хәйерле оҙон ғүмер теләне, фатиха бирҙе. Бына ниндәй изге күңелле, абруйлы кеше булған икән Мөжәүир хәҙрәт!

...1954 йылдың йәй айы ине. Хәҙрәт олатайға, Аллаһҡа шөкөр, тағы ла юлландым.

Хәҙрәт йорто эргәһендә күренергә сират көтәбеҙ.

Ҡапҡа янында сират көтөп бер ҡатын ултыра ине. Минең ҡулымдағы төйөнсөктө күрҙе лә, тик-томалдан юҡ-бар хәбәр, ғәйбәт һөйләй башланы. Мин аптыраным да: «Кеше хәҙрәткә лә тел тейҙерер икән», – тип уйланым. Әлеге ғәйбәтсе ҡатын хәҙрәт олатайға инеүе булды, ҡаралмайынса ҡыуылып та сыҡты. Минең дә сират етте. Индем. Хәҙрәт һәйбәт итеп ҡараны: «Әгәр ҙә яңы ғына сығып тайған ғәйбәтсе ҡатынға ҡушылып ултырған булһаң, һине лә ҡыуып сығарған булыр инем», – тине лә ҡуйҙы. Шулай ҙа теге ҡатын өсөн булһын тип, бик ғибрәтләндем, тәүбә ҡылдым. Бер нисә йылдар буйы мәсеткә йөрөйөм, хәйер-саҙаҡалар бирәм, Мөжәүир хәҙрәттең изге рухына тап төшөрмәҫкә тырышам.

Йомғаҡлап шуны әйткем килә: эй, мөъмин-мосолмандар! Диндең, шәригәттең яуыз дошмандары булған ғәйбәткә, көнсөллөккә, хәрәм мал артынан ҡыуыусыларға, кешене күрә алмаусанлыҡҡа, иманһыҙлыҡҡа һәм эскелеккә дин ҡанундары буйынса бергәләп көрәшәйек!

*Йәрмуллина Орҡоя*,
1936 йылғы.
Баймаҡ районы

## Башҡорт Мессингы

Мөжәүир хәҙрәттең 1937–1938 йылдарҙа ҡулға алыныуы һәм бер аҙ төрмәлә тотолоуы тураһында күптәр белә инде. МВД органдарында эшләгән сағымда миңә Йылайыр төрмәһен күрергә һәм хәҙрәт тураһында заманында бөтә төрмәне хайран ҡалдырған ҡыҙыҡлы хәл тураһында ишетергә тура килде: Мөжәүир хәҙрәт ултырған камераның йоҙағы «үҙенән-үҙе» асыла торған булған. Ә ҡайһы бер осраҡтарҙа камерала бикле ҡалған хәҙрәттең ишекте асмайынса нисектер сығып, коридор буйлап йөрөгән саҡтарын да күргәндәр, тип һөйләнеләр.

Ошондай кеше ышанмаҫлыҡ хәл тураһында бөтә донъяға билгеле гипнозсы һәм телепат (күрәҙәсе) Вольф Мессинг яҙып сыҡҡайны. Ул 1959–1960 йылдарҙа «Наука и религия» журналында баҫылған. «Үҙем тураһында» (О самом себе) тигән мәҡәләһендә ғәҙәти булмаған күренештәрҙең серҙәрен аса.

Мессинг үҙенең гипнотик һәм телепатик һәләттәрен күҙ бәйләп урлашыу өсөн бер ҡасан да файҙаланмаған. Тик бала сағында ғына билет тикшергән ревизорҙы алдаған: билет урынына быссраҡ ҡағыҙ киҫәге тоттороп, ышандырған. Мөжәүир хәҙрәттең төрмәләге мөғжизәләре кеүек хәлдәргә оҡшаш миҫал да килтерә: көнбайыш илдәренең береһендә бер гипнозсы банкынан ҙур күләмдә аҡса алып сыға, ул касса хеҙмәткәрҙәренә банк управляющийы сүрәтенә инеп күренгән һәм уларҙың күҙен бәйләгән булған. Ә Мөжәүир хәҙрәткә

килгәндә, унын надзирателдәргә төрмә башлығы сүрәтенә инеп күренеүе шик ҡалдырмай. Шуға күрә лә ул коридорҙа тороп ҡала алған, хәтта камера эсендә ҡалған осраҡта ла төрмә һаҡсылары ккамера ишеген бөтөнләй бикләмәй ҡалдырғандар йә йоҙаҡты бикләмәйсә генә элеп киткәндәр.

Әгәр Вольф Мессингтың иҫкә алынған мәҡәләһе гәзит уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырһа, мин уның руссанан башҡортсаға тәржемәһен «Атайсал» редакцияһына бирергә әҙермен. Ә хәҙер һүҙҙе үҙебеҙҙең «башҡорт Мессингы» тураһында дауам итәм.

Паралич һуҡҡан әсәйемде атайым Манһырға Мөжәүир хәҙрәткә күрһәтергә алып барғайны. Ҡайтырға тип ат еккән ваҡытта хәҙрәт атайыма:

– Айса ҡустым, киленден алты айлыҡ ғүмере ҡалған, – тигән.

(Шулай булды ла — алдағы йылдың 16 мартында әсәйем донъя ҡуйҙы.)

Атайым арбаға ултырғас, уны оҙатырға сыҡҡан хәҙрәт йылмайып:

– Айса, теге ағас өңөшөнә һалып киткән тәмәкеңде онотма, – унан әсәйемә өндәшеп: «Ә һин, һылыу, бирешмә, балаларыңдың һаулығын телә», – тип, хушлашып тороп ҡалған. Күрәһең, әсәйемә тураһын әйтергә теле бармаған. Шулай ҙа, йәшәүгә бөтөнләй өмөтө өҙөлгән әсәйемдә ниндәйҙер ышаныс уятып, уның ғүмерен алты айға оҙайта алған. «Хәҙрәттә сәй эсеп, ашап сыҡҡас, шул хәтле тәмәке тартҡым килгәйне», – тип хәтерләй торғайны атайым һуңынан.

Был хәлдән һуң утыҙ йыл ваҡыт үткәс, мин Өфөгә китергә тип юлға сыҡтым. Баймаҡты үтеп, автозаправкаға еткәс, юл ситендә беҙҙең туҡтауҙы һорап ҡул күтәргән ике әбей күҙгә салынды. Ултыртып алдыҡ – Сибайға баралар икән. Фәйзулла ауылы тәңгәленә еткәс:

– Манһыр ауылы ҡайһы яҡта әле? – тип һорап ҡуйҙым. Әбейҙәрҙең береһе:

– Мөжәүир хәҙрәттең ауылымы? Уң яҡта. Арыраҡ, – тип яуап бирҙе лә, үҙенең хәҙрәткә күренеүе тураһында һөйләй башланы:

– Ҡыш көнө ине, хәҙрәт өйҙә булмай сыҡты. Теге оста – ҡунаҡта, – тинеләр. Уның ҡайтыуын көтөп торам. Өшөп киттем, тешем тешкә теймәй. Бер ваҡыт теге остан берәү йүгереп килә.

– Әйҙә, хәҙрәт саҡыра, киттек! – ти.

– Мин килгәнде ул ҡайҙан белгән? – тип һорайым.

– Хәҙрәт, тышта мине берәү көтә, өшөп киткән, саҡырығыҙ, ти.

Ашығыҙ мул, беҙҙең менән бергә ашап сыҡһын, тип һине алып килергә ебәрҙе, – тигән яуап алдым теге кешенән...

Мөжәүир хәҙрәтебеҙ Вольф Мессинг кеүек үк үҙенә тиңе булмаған гипнозсы һәм күрәҙәсе булған. Айырма тик шунда: хәҙрәт бөтә булмышын кешеләр һаулығына бағышлаған, ә Мессинг бөтә ғүмерен сәхнәлә уҙғарған, телепатияның биополе тулҡындары бирелә торған тәбиғи күренеш икәнлеген иҫбат итергә тырышҡан, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда булған бөтә аҡсаһын СССР-ҙың Оборона фондына тапшырған.

*Буләков Тимерғәле,*
1930 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Һуҡыр күҙҙе асыр ҡөҙрәт

– Беҙ ҡыҙ булып үҫеп килгәндә, 1950 йылдарҙа, ҡайҙа барма бөтә кеше хайран ҡалып, шаҡ ҡатып Мөжәүир хәҙрәттең мөғжизәләрен һөйләй торғайны. Миңә айырыуса нык тәьҫир иткәне Татлыбай ауылында йәшәгән Өмөтбай ағайымдың һөйләгәндәре булды, – тип башланы һүҙен Гөлбикә апай. – Уларҙың сабынлығы Урғаҙа аръяғында була торғайны. Бер шулай улар бесән сабып ҡайтып килгәндәр. Урғаҙаға етеп барғанда арба юлынан саҡ ҡына арыраҡ салғы, беләү, тырма ятҡанын күреп ҡалалар. Бөтмөр ағайым, хужалыҡта кәрәге тейер, тип баяғы нәмәләрҙе арбаһына һалып та ала. Татлыбайға ҡайтыу өсөн уларға йылға аша сығырға кәрәк була. Тик, ни хикмәттер, күк бейә һыу аша сығырға теләмәй ҙә ҡуя икән. Нык ҡына сыбыртҡылап та алалар, туғарып киренән егеп тә ҡарайҙар, ат урынынан ҡуҙғалмай, ти. Меҫкен хайуан үҙе манма тиргә бата. Инде ни эшләргә? Былар аптырай-алйый, эштең ниҙә икәнен һис аңлай алмай. Шулай байтаҡ ҡаңғыра торғас аранан берәү:

– Ошо һалып алған нәмәләребеҙ Мөжәүир хәҙрәттеке түгелме икән? – тип әйтеп һала. – Әйҙә, урынына кире илтеп ҡарайыҡ.

– Ысынлап та, – тип бот саба бесәнселәр, – нисек бая уҡ башҡа килмәгән. Олатайҙың сабынлығы ошо тирәлә бит. Кәнишнә, уныҡы!

Һәнәк, тырма, беләүҙе урынына алып барып һалыуҙары була, бесәнселәр арбаға саҡ-саҡ ултырып өлгөрә, күк бейә

саптырып сығып та китә. Меҫкен хайуан Татлыбайға ҡайтып еткәнсе саба.

– Беҙҙең олатай бына шулай! – ти бесәнселәр көлә-көлә.

Шунан китә уның төрлө ҡыҙыҡ-мәҙәктәрен һөйләү. Берәүҙәре, кемдеңдер бында килгәндә ағас ҡыуышына араҡыһын йәшереп китеүе, хәҙрәттең теге йәшергән нәмәңде онотоп ҡуйма, тип иҫкәртеүе, ҡайтышлай алайым тиһә, шешәһе ҡулынан ыуылып төшөп китеүе, араҡыһының түгелеүе хаҡында һөйләй, икенселәре тотлоҡҡан баланың телмәре рәтләнеүенә хайран ҡала, өсөнсөләренең нимә уйлап килеүҙе белеүенә иҫе-аҡылы китә.

Бөтә балалыҡ хисе менән эй күргеһе килә бит илаһи хикмәт эйәһен Гөлсирәнең, эй, күргеһе килә! Ихлас теләһәң теләк ҡабул була, тиҙәр, ҡыҙыҡайға ла бер яйы сыға. Бер ваҡыт күршеләре Хәтирә инәй Манһырға хәҙрәткә күренергә була. Беҙҙе лә үҙең менән ал, хәҙрәтте күргебеҙ килә, тип ялбарабыҙ Хәтирә инәйгә әхирәтем Флүрә менән.

– Сибайҙан йәйәүләп барһаҡ, Манһыр 35 саҡрымда, арымаҫһығыҙмы? – ти ул.

– Юҡ, юҡ! – Әхирәтем менән бер тауыштан ҡыуанып ҡысҡырып ебәрәбеҙ.

Сибайҙан Йәнйегет, Йәнйегеттән Татлыбай сығып уңға бороллоҡ.

Манһырға юл ялтырап ята. Дәртләнеп алғас, ауылға барып еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ.

...Беҙ барып ингәндә, Мөжәүир хәҙрәт әбейе менән әүеҫлектә сәй эсеп ултыра ине. Мин уға ҡарағанмын да, шаҡ ҡатып тик торам икән. Башында ап-аҡ сәллә, аҡ ыштан, аҡ күлдәктән. Ике сикәһе алланып, аҡ йөҙө нурланып, матур булып ултырған кешенең мин күрергә теләгәндең нәҡ үҙе икәнен шунда уҡ аңланым. Уғаса булмай Хәтирә инәйем:

– Әссәләмәғәләйкүм, Мөжәүир ҡайнаға, әссәләмәғәләйкүм, Гөлйемеш абыстай, – тип уларға сәләм бирҙе.

– Ә-э-ә, Хәтирә килен, вәғәләйкүмәссәләм, әйҙә, үтегеҙ, һыуһап киткәнһегеҙҙер, сәй эсергә ултырығыҙ, – тине.

Беҙҙе лә табынға ултырттылар. Миндә сәй ҡайғыһы юҡ. Хайран ҡалып тирә-яҡҡа ҡарайым. Әүеҫлектән алыҫ түгел

ерҙә ихатаны ҡап уртаға бүлеп, сылтырап ҡына шишмә ағып ята. Аръяғында урманлыҡ китә. Ағастар эргәһендә усаҡлыҡ күренә. Унан аулап ҡына төтөн сыға ла, шунда үҫкән ҡайындарға һырылып, бейеккә, зәңгәр күккә күтәрелә. Усаҡ-ҡа ҡаҙан аҫылған, унда ит бешә, ахырыһы, тәмле еҫе хатта әүеҫлеккә лә килеп еткән, ҡаҙандан алыҫ түгел самауыр ҡайнап ултыра. Мин: «Береһенән сәй эсәләр, икенсеһе ҡайнап ултыра, ҡайһылай ҡыҙыҡ», – тип уйлап та өлгөрмәнем:

– Ҡыҙым, аптырама, – тип көлдө хәҙрәт, мин ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәһәм дә, уйымды әллә ҡайҙан белеп. – Хәҙер алыҫтан, Бөрйән яғынан булыр, килеп етергә тейештәр, улар йыраҡ юлдан асығып-талсығып килә, – тине. – Хәтирә еңгәмде ҡарап бөтөүгә килеп тә инер ул мосафирҙар, иншәәъ Аллаһ.

Хәҙрәт олатайҙы беренсе күреүем ошолай булды. Бынан тыш уны тағы өс тапҡыр күреү насип булды.

1953 йыл ине. Тик торғанда ун алты йәшлек дөм-ҡара күҙле, оҙонсараҡ аҡ йөҙлө, зифа буйлы сибәр апайым һу-ҡырайып ҡуйҙы. Әсәйемдәр хәҙрәтте саҡырып өшкөртөп ҡарарға булдылар. Ҡарап тора, күҙе һап-һау һымаҡ, ә үҙе күрмәй. Уны ҡайҙа ғына йөрөтмәнеләр: Магнит дауахана-һына ла, Өфөгә лә алып барып ҡаранылар, файҙаһы теймәне. Хәҙрәт апайымды оҙаҡ ҡына итеп өшкөрҙө. Ҡайтып китер сағында:

– Мин сығыу менән минең урыныма ултырығыҙ, – тип әйтте.

Әсәйем Көнһылыу апайымды хәҙрәт ултырған ергә алып барып ултыртты.

Табибыбыҙ ҡапҡанан сығып әллә ни йыраҡ китеп тә өлгөрмәгәндер, апайым ҡысҡырып та ебәрҙе:

– Әсәй, мин күрәм! Күрәм! Күрәм! Ана, ҡояш! Урындыҡта ятҡан балаҫтың юлаҡтарын күрәм! Аҡ, йәшел, көрән! Күрәм! Күрәм!

Инде ҡыҙым тома һуҡыр булып ҡалыр тип ҡурҡҡан әсәйем йүгереп килеп апайымдың ауыҙын ҡапланы:

– Өндәшмә, балам, күҙ тейеп ҡуйыр!

Ә апайым уның һайын алҡышлана, илай-илай:

– Рәхмәт, хәҙрәт олатай, һин минең күҙемде астың, рәхмәт, – ти.

– Рәхмәтте үҙенә барып әйтербеҙ, ҡыҙым, – тине әсәйем.

Был мөғжизәгә иҫе-аҡылы киткән күрше-тирәһе, ауылдаштар барып рәхмәт әйтеп ҡайтығыҙ, тип кәңәш бирҙе. Бер көндө йыйындыҡ-тейәндек тә киттек Манһырға. Мин дә, исмаһам, тағы бер күреп ҡалайым тип, уларға эйәрҙем. Хәҙрәт әсәйемде күңелһеҙ генә ҡаршы алған:

– Юҡҡа килгәнһегеҙ, – тигән. – Теге саҡ әйтмәгәйнем, ҡыҙығыҙ оҙаҡ йәшәмәҫ, һәр яңы тыуған кешегә Аллаһы Тәғәлә үҙенең өлөш япрағын таратып бирә. Унда күпме йәшәре, низәр күрәһе яҙылып ҡуйылған була. Был балаға тыумыштан юғарынан ғүмер бик самалап бирелгән, ғүмер япрағы һарғайған, өҙөлөп төшөргә генә тора, – тигән олатай.

Ысынлап та, Көнһылыу апайым оҙаҡҡа барманы, гүр эйәһе булды.

Өсөнсө күреүем былай булды: тимер юлында эшләп йөрөйөм, вагондан цемент бушатабыҙ. Күҙемә цемент төштө лә ҡуйҙы. Шунда уҡ дауаханаға алып киттеләр, өс ай яттым, күҙ рәтләнмәй. Шунда ҡайным мәрхүм әйтте:

– Киленемде хәҙрәткә алып барам.

Ҡара атын егеп алды. Ун ике йәшлек Рәүилә исемле бикәсем менән арбаға менеп ултырҙыҡ, киттек Манһырға. Ҡайным егеп килгән атын тышаулап Урғаҙа буйындағы күк үләнгә ебәрҙе лә беҙҙе баҫма аша сығарып, хәҙрәт йәшәгән йортҡа табан алып китте. Инергә сират ине, беҙ ҙә баҫтыҡ. Сиратыбыҙ еткәс, ҡайным миңә:

– Бар, килен, һин алдан ин, – тине.

Олатай мине, ниңәлер, мәрәкәләберәк ҡаршы алды.

– Ай-һай, ҡыҙым, алыҫтан килгәнһең икән, хатта ки Сибай шәһәренең үҙенән, – тине. – Шәпле ҡара айғырығыҙ бар икән, ҡайның бик тә һәйбәт кеше икән. – Үҙе тағы мут йылмайҙы.

Олатай мине ихласлап оҙаҡ ҡына өшкөрҙө, күҙең йүнәлер, башҡаса күҙ менән йонсомаҫһың, тине, бетеү яҙып бирҙе.

«Их, тоҙ алып килергә онотҡанмын», – тип уйлайым, үҙемде-үҙем, иҫһеҙ, тип әрләп алам. Уғаса олатай:

– Бошонма, ҡыҙым, – ти, үҙе шыҡ йылмая. – Ҡайның алып килгән тоҙ бөтәгеҙгә лә етер.

Ысынлап та, хәстәрлекле ҡайным бөтәбеҙгә лә етерлек итеп, күп итеп тоҙ алып килгән булған икән. Ҡайтып барғанда юл буйынса, ҡайҙан белгән беҙҙең ҡара айғыр менән килгәнде, ҡайнымда тоҙ барлығын, тип уйлап барҙым. Ҡайтып бер нисә көн торғас, күҙем һауыҡты. Хәҙрәт әйткәнсә, ошо йәшкә тиклем, башҡаса күҙ менән ыҙаламаным.

Дүртенсе күреүем 1962 йылда булды. Ни эшләптер, ғаиләбеҙҙә татыулыҡ китеп торҙо. Был юлы ла олатай бетеү яҙып бирҙе. «Арағыҙ татыуланыр, йәшәрһегеҙ», – тине. Ирем гүр әйәһе булғансы, ҡырҡ биш йылға яҡын, бергә-бергә ғүмер иттек.

Хәҙрәт һуҡырайған күҙҙәребеҙҙе асҡан, шулай тейеш кеүек ҡабул иткәнбеҙ. Рәхмәт хистәребеҙҙе лә үҙенә әйтем бармағанбыҙ. Тик йылдар үткәс кенә шуны аңланым, беҙгә нindәй бөйөк шәхес менән йәнәшә йәшәү бәхете насип булған! Һуңлап булһа ла, һис юғы ошо хәтирәләр аша, юғарыла осоп йөрөгән йәне, бәлки, ишетеп ҡыуаныр тип, күңел түрендә йөрөткән изге хистәребеҙҙе еткерәбеҙ. Ярай әле ҡәҙерле хәҙрәтебеҙ тураһында яҙыусы табылды, шуға ҡыуанабыҙ. Рәхмәт уға!

*Әхтәмова Гөлсирә,*
1939 йылғы.
Сибай ҡалаһы

# Мине хәҙрәт бетеүе һаҡлай

Ишбикә апай сығышы менән Хәйбулла районы, Суҡраҡ ауылынан. Бәләкәй генә сағынан үкһеҙ етем ҡалып (башта әсәһе, аҙағыраҡ атаһы мәрхүм була) Әбделкәрим балалар йортонда тәрбиәләнә.

– Ярай әле өләсәйем булды, – ти ул аянысլы балалыҡ йылдарын хәтерләп. – Ул мине әҙәп-тәртипкә, динебеҙҙе яратырға өйрәтте, һөйөклө бала – көйөклө, тип һөйә торғайны мәрхүмә өләсәйем. – Ата-әсәң күреп туймаҫтай булып ярата, иркәләтә торғайны, тип хәтерләй торғайны.

Яғымлы, итәғәтле, ысын мөслимә Ишбикә апай менән һүҙҙәребеҙ килешеп, байтаҡ серләштек. Аҙаҡ ул алдыма ҙур бер фотоальбом килтереп һалды.

– Минең бөтә тормошом ошонда сағыла, – тине.

Тәүге биттән миңә иҫ киткес сибәр ҡыҙ йылмайып ҡарай. Нур сәсеп торған ҙур ҡара күҙҙәр, һыҙылып киткән ҡыйғас ҡара ҡаш, ап-аҡ түңәрәк йөҙ, ынйылай теҙелеп киткән тештәр, ике ҡалын толом үреп төшөрөлгән, ҡупшы буй-һын.

– Һинме был, Ишбикә апай? – тим, әле лә матурлығын юғалтмаған апайға һоҡланып ҡарап.

– 19 йәшлек сағым, – ти ул һәм хәтирәләргә төшөп китә. – 1950 йыл.

Баймаҡ баҙарына барҙым. Баҡһаң, Мөжәүир хәҙрәт тә бында килгән икән. Мине күреп ҡалды ла (бер саҡ балалар йортонда миңә бетеү яҙып биргәйне):

– Балам, эргәмә кил әле, – тип мине саҡырып алды. –

Теге саҡта яҙып биргән бетеүҙе юғалттың инде, ә? – тине. – Мин һиңә уны мунсаға тағып бармаҫҡа ҡуштым, ниңә әйткәнде тыңламаның?

Ояндым, ҡыҙарындым, бетеүен юғалтҡанды ҡайҙан белде икән тип аптыраным.

– Һиңә, ҡыҙым, бетеүһеҙ йөрөргә ярамай, Манһырға килеп сыҡ, һаҡлап йөрөтөр булһаң, тағы яҙып бирермен, – тине.

Тиҙ генә барып булманы, йылдар үтеп китте. Йәшлек менән хәҙрәттең ниндәй илаһи зат икәнлеген дә аңлап етмәгәнмендер, ахырыһы.

1963 йыл. Хәҙрәт ҡартайған, түкһанға яҡынлап килгән сағы. Шулай ҙа бер-ике генә күрһә лә ул мине таныны.

– Килдеңме, балам, – тине. – Мине генә көтөп ултырғандай ихлас ҡабул итте. – Һиндә боҙом бар. Бәлки, кешеләрҙең һоғо тейгәндер, – тине. Ул миңә өскөлләп тегелгән бетеү һондо:

– Ал, балам, бөгөн бында юлланырыңды белеп, яҙып әҙерләп ҡуйғайным, – тине. Шунан тоҙ, сәй, һабын өшкөрөп бирҙе.

Ишбикә апай, был осрашыуға 43 йыллап ваҡыт үтһә лә, шул саҡтағы хәҙрәттең әйткән һәр бер һүҙен онотмайынса, йөрәк түрендә һаҡлай икән. Ул дауам итте:

– Балам, һине кеше һөйләр, урынһыҙ рәнйетергә тырышыусылар булыр, – тине олатай.

– Ниңә улай? – Бер ни аңламайым.

– Һин – Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө ҡоло. Раббыбыҙ һиңә Таһирҙың һөйгәне Зөһрәнекенә тиң матурлыҡ биргән. Матур гөлгә күҙ тейеүсән. Яман күҙ кешене генә түгел, хатта ағасты ҡорота. Минең әйткәнемде онотма: кеше һөйләй тип һүҙ ҡыуып йөрөмә, яманлап һөйләһәләр ҙә, маҡтап һөйләһәләр ҙә, мине иҫкә алғанығыҙ өсөн рәхмәт, тиң дә кит тә бар. Ҡабатлап әйтәм, – тине ул, – һин – Аллаһтың яратҡан бәндәһеһең.

– Белмәйем инде, олатай, – тип ул әйткән һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә лә төшөнөп етә алмай.

– Балам, мин барыһын да белеп ултырам, – тине хәҙрәт. Ул минең етем үҫеүемде лә, иремдең ниндәй холоҡло икәнен

дә, үгәй ул үҫтереүемде лә әйтеп бирҙе.

– Яҙмыш һиңә һынауҙарҙы күп ебәрер. Яратҡан ҡолон ул шулай һынай. Сабыр ит, түҙ! Хоҙай һиңә маңлай бәхете бирһен! Маңлай бәхете... Был һүҙҙең мәғәнәһен дә мин яңы аңланым.

– Бетеүен юғалтманыңмы?

– Юҡ, икенсеһен күҙ ҡараһындай һаҡланым.

– Апай бетеүҙе ҡулына алып күрһәтте. – Ҡырҡ өс йыл тағам. Ул мине, ысынлап та, һаҡлай. Хәҙрәт мине ауыр яҙмыш көткәнен алдан белгән, күрәһең. Бетеүен биреп тәҡдиремде еңеләйтергә иткән ул. Бер-бер артлы дүрт баламды ерләнем, ирем дә иртә китте. Япа-яңғыҙ ҡалдым. Минең аянысл хәлемде бер әҙәм аңламаҫ.

Ишбикә апай шулайтып үҙ хәлен һөйләп биргәс, уйланым: ысынлап та, олатай уның маңлайына яҙылған тәҡдирен белеп, нисек тә булһа яҙмышын еңеләйтергә тырышҡан.

– Һин көслө рухлыһың! – Һаман да бирешмәҫкә тырышҡан ҡатынға ихтирам менән ҡарайым. – Ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмағанһың, дин юлына баҫҡанһың, кешеләрҙең изгелеген күңел түрендә һаҡлайһың, әйләнә-тирәләге яҡындарыңа йөрәк йылыңды таратып йәшәйһең.

– Хәҙрәт фатихаһынан барыһы ла, – тине изге күңелле апай «Мөжәүир хәҙрәт» китабын ҡулына алып:

– Егерменән ашыу китап һатып алып, мохтаждарға тараттым. Үҙем ете ҡат уҡып сыҡтым. Тағы ла бер ҡат уҡып сығам әле, хәҙрәт тураһында уҡыу минең яралы күңелемә дауа бит ул.

*Аблаева Ишбикә,*
1931 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Татарстандан хат

Мин Татарстандың Теләнә районында тыуып үҫтем. Яҙмыш тулҡындары тыуған яҡтан алыҫ тарафтарға илтеп ташланы. Башҡортостанда тыуып үҫкән Сибай егете Василға тормошҡа сыҡтым, һеҙҙең яҡтарҙа беҙ 1960–1972 йылдарҙа йәшәнек. Гөлсинә, Әлмира исемле ике ҡыҙым тыуҙы. Ирем дә, үҙем дә матур, икебеҙ ҙә уңған, булдыҡлы инек. Тормошобоҙ ҙа бәхетле башланды. Ҡайным-ҡәйнәм, иремдең бөтә туғандары беҙҙең өсөн үлеп торҙо. Кеше бәхетенә көнләшеүселәр ҙә табыла бит ул. Күрәһең, беҙҙең дә бәхетле йәшәүебеҙҙе күрә алмаусылар булғандыр. Бәлки, уңғанлығымды, егәрлелегемде оҡшатмағандарҙыр.

...1964 йылдың ғинуары ине. Васил төнгө сменаға эшкә китте, яңғыҙ йоҡлағансы тип иптәшкә күрше ҡыҙын индерҙем. Иртәнсәк тороп сәй эстек тә мәктәпкә ашыҡҡан Машаны ҡапҡанан сығарып ебәрергә булдым. Ҡапҡаны асайым тип ынтылһам, аяғым менән ниндәйҙер шәреле һыуға баҫтым. Был ни хәл, нисек инде ҡыш уртаһында аяҡ аҫтында был тиклем һыу? Күренеп тора, кемдер махсус килтереп түккән. Тик ни өсөн? Ниңә кәрәк булған уға беҙҙең ҡапҡа төбөнә һыу түгергә? Күңелгә шиктөштө. Беҙҙең һәйбәт йәшәүебеҙҙе күреп көнләшеүҙән юҡ-бар һөйләп йөрөгән күршем барлығы иҫкә төштө. Шуның эше түгелме икән? Йөрәгем жыу итеп ҡалды. Өҫтөмә боҙло һыу һипкән кеүек булды. Аяҡтан ингән һыуыҡ, үҙемә һиҙелеп, башҡа бөтә тәнгә таралды, ә бер аҙҙан түбәмә тиклем күтәрелде. Ни уйларға белмәй, өйгә индем.

Ирем төнгө сменанан ҡайтып ингәнсе, төрөнөп алдым да, өшөп ҡалтыраныуҙан ни эшләргә белмәй, шулай аптырап ултырҙым. Васил килеп инде лә:

– Ҡапҡа төбөндә ниндәй бысраҡ, ҡыйлы һыу түгелгән ул? – тип һораны. Мин нисек булғанын һөйләп бирҙем. Ул да аптырап ҡалды. Төш етеп килгәндә мин үҙемде бөтөнләй насар һиҙә башланым. Тәнем ҡалтырай башланы, башым ауыртты, йөҙөм йәмһеҙләнеп салышайҙы. Ҡәйнәмдәргә киттем. Мәрхүм ҡәйнәм, исеме Ғәйшә ине, үҙгәреп киткән йөҙөмә ҡарап:

– Берәйһе яман ниәт менән һиңә боҙом эшләгән булыр. Иртәгә үк хәҙрәт олатайға бара һалайыҡ, – тине.

– Тәүҙә балнисҡа барам, – тип үҙһүҙләндем. – Хәҙрәт был сирҙе нисек дауалай алһын, ти? Ҡәйнәм, һаман үҙенекен тыҡый:

– Һиңә балнистыҡы килешмәҫ, быны хәҙрәт кенә әмәлләй алыр, – ти.

Ул көн шулай бер ҡайҙа ла бармай үтте. Икенсе көн иртән тороуға хәлем тағы ла ныгыраҡ насарайҙы: битем-күҙем ен алыштырғандағы кеүек булып үҙгәрҙе, һул күҙем, эсенә быяла тыҡҡандай, йомолмай ҡатты, ауыҙым салышайып, ҡолағыма етте, ҡурҡыныс булып төҫөм ҡасты, әҙәм танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙем. Был хәлде күреп, ҡайным менән ҡәйнәмдең ҡото, иҫе-аҡылы китте.

– Киноактриса кеүек киленебеҙҙе ҡайһы ҡороп ҡалғыры боҙҙо? – тип илай ҡәйнәм. – Кеше бәхетенә көнләшеүсе әҙәмдәр була шул.

Ҡайным менән ҡәйнәм, тиҙ генә йыйындырып, минең айвайыма ҡуймай, олатайға алып киттеләр. Минең үҙенә килергә теләмәй тиҫкәреләнеүемде хәҙрәт белеп ултырган икән.

– Ниңә киленеңде алып килдең, Ғәйшә? Уның бит балнисҡа барғыһы килә, – тине хәҙрәт.

– Миңә ышанмағас, ҡарамайым, кире ҡайтып китегеҙ.

Үҙе шыпырт ҡына ҡәйнәмә күҙ ҡыҫа. Ул арала битем үҙгәргәндән-үҙгәрә, һаман йәмһеҙләнгәндән-йәмһеҙләнә бара, ахырыһы. Ҡәйнәм бер ҡасан булмаганса, олатайға ялбара башланы:

– Хәҙрәт, зинһар, баланы ҡара инде, – ти. – Киленем бигерәк һәйбәт, үҙ баламдай күреп яратам. Ошондай сибәр бала ғәрип булып ҡала күрмәһен инде.

Мин дә илап-илап олатайға ялбарып әйттем:

– Ғәфү итә күр, мине йәллә, олатай! Ике балам менән ямаҡ тип ирем ташлап ҡуйһа, ни эшләрмен? Бөтә йөрәгемдән ялбарып ғәфү үтенәм.

Олатай мыйыҡ аҫтынан ғына хәйләкәр йылмайҙы ла:

– Өшкөртөргә алып килгән нәмәләрегеҙҙе бында килтереп һалығыҙ, – тине.

Ул ыңғайлағас, үҙем менән нимә булғанын һөйләп бирергә иткәйнем, ярты һүҙҙән бүлдерҙе:

– Барыһы ла миңә мәғлүм, – тине. Ин шәәъ Аллаһ, йүнәлерһең, сарпыу яңы ғына ҡағылған. Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ, тигәндәр. Ул бисә һиңә йән тыныслығы бирмәҫ, иреңде, ғаиләңде ал да үҙ яғыңа ҡайтып кит, шунда тормошоғоҙ яйға һалыныр.

Башта битемде, унан алып килгән нәмәләремде өшкөрҙө. Йәшлек йүләрлеге инде, өшкөргән саҡта уйлап ултырам: «Аҡса аҙ бит әле, риза булырмы икән? Ҡәйнәмдән алып тормаһам». Ныҡ ҡына етешмәй йәшәгән сағыбыҙ ине шул, өй һала инек.

Хәҙрәт өшкөрөп бөттө лә:

– Ҡыҙым, борсолма, саҙаҡаны күпме бирә алаһығыҙ, мин шуға риза, – тине. Үҙе абыстайына ҡарап:

– Самауырыңды ҡуя һал, алыҫ юлдан, Грузиянан булыр, беҙгә туралап сыҡҡан юлаусылар етеп килә, – тине. – Бик бай кешеләр, һауығыу өсөн бөтә мөлкәтен бирергә әҙерҙәр.

Ул йәнә иғтибарын беҙгә йүнәлтте:

– Сибайға килгән саҡтарығыҙҙа, ул саҡта мин булмам, әлбиттә, ҡәберемә килеп китегеҙ, үҙемде күргәндәй булырһығыҙ, өшкөргәндәй шифаһы тейер, – тине.

Беҙ ҡапҡанан сығып, әҙ генә атлағайныҡ, оло юлдан Манһыр яғына бер еңел машина елдереүен күрҙек. Хәҙрәт әйткән юлаусылар ошолор, тип уйланыҡ.

Ҡайтып бер-ике көн өшкөрөлгән әйберҙәрҙе ашап йөрөгәйнем, ауырыуым ҡул менән һыпырып ташлағандай бөттө.

Күҙем, ауыҙ тирәм элекке хәленә кире ҡайтты. Бындай ауырыу башҡаса ҡабатланманы. Беҙҙе тик бәхетле итеп күрергә теләгән ҡәйнәм өҙмәне лә ҡуйманы:

– Хәҙрәт үҙе ҡушҡас, китегеҙ. Минең өсөн борсолмағыҙ. Яңғыҙ түгелмен әле, – тип беҙҙе йәһәтләп Татарстанға ебәреү хәстәрен күрҙе.

Беҙ Сибайҙан күсеп киттек. Әммә ундағы туғандар, дуҫтар менән араны һыуытҡаныбыҙ юҡ. Бигерәк тә һоҡланғыс тылсым эйәһе, әүлиә Мөжәүир хәҙрәт тураһында хәтирәләр күңел түрендә һаҡлана.

*Ғәлимйәнова Дания*,
1941 йылғы.
Татарстан Республикаһы,
Йәшел Үҙән районы, Осиново поселогы

# Тылсым эйәһе

1950 йылдарҙа эшләп йөрөгән сағымда ҡапыл нык ҡына ауырып киттем. Өйҙә бер килкем ятҡандан һуң, Баймаҡ больницаһында 2 айҙан ашыу дауаландым. Әммә файҙаһы теймәне. Ҡатыным ҡайтанан ат менән мине ауылға алып ҡайтты. Артабан совхоз больницаһында айҙан ашыу яттым. Аҙаҡ хәлем шул тиклем насарайҙы, хатта ашай алмай башланым. «Мөжәүир хәҙрәткә алып барып күрһәтһәңсе», – тип әсәйем атайыма әйткәс, ул мине Манһырға алып барҙы.

Хәҙрәт олатай беҙгә ҡоҙа кеше, атайымдың бер ҡарындашын килен итеп төшөргәндәр. Барып еткәндә, өйө алдында халыҡ шығырым тулы. Атайым мине урамда ҡалдырҙы ла, хәҙрәткә үҙе инде. Күп тә үтмәй, кире сығып, мине саҡырҙы. Олатай мине ултыртып, баштан өшкөрә башланы. Хәҙрәт нимә уйлағанды әйтә лә ҡуя, тигәнде ишеткәнем бар ине. Минең нимә уйлағанымды белерме икән тип, төрлө уйҙар уйлайым, ә ул өндәшмәй. Ҡулы елкә тирәһенә еткәс, һыйпауҙан туҡтаны ла атайым менән һөйләшеп тик тора. Мин тын ала алмай башланым. Атайым быны күреп: «Ҡуй, Мөжәүир, баланы ыҙалатма инде», – тигәс, ул: «Ярай, ярай, коммунист кеше беҙгә ышанып етмәй шул», – тип ҡулын аҫҡа табан һыпырыуы булды, миңә тын алыуы рәхәт булып та ҡалды. Аҙаҡ бетеү яҙып бирҙе лә: «Мә, һиңә сепрәк, энә менән еп, өскөлләп тегеп ал», – тине. Минең хәлде аңлап, атайым үҙе тегеп элеп ҡуйҙы. Бергәләшеп сәй эстек тә ҡайтырға юлға сыҡтыҡ.

Өс көн үткәс, хәҙрәт олатай төшкә керә: ауыл осонда тау башында ап-аҡ һарыҡтар көтөп йөрөй, үҙе мине саҡырып ҡул болғай.

Уянғас, төшөмдө әсәйемә һөйләнем. «Улай булғас, балам, ҡабат бар хәҙрәткә», – тип әсәйем колхоз идараһына ат һорарға китте.е. Идара рәйесе үҙенең атын, арбаһын алырға рөхсәт биргән.ı. Шул көндә үк беҙ Манһырға юлландыҡ.

Күктүбә ауыуылына яҡынлашҡас, ат манма тиргә батты, саҡ атлай башланы. Атайым арбанан төшөп, аттың башын һыйпаштырып, етәтәкләп алып китте. Мин арбала ятам, торалмайым. Бер саҡрҡрымдан ашыу шулай барғас, ат туҡтап һелкенеп алды. «Хәҙер я яйлап китербеҙ», – тип атай арбаға ултырҙы.

Байыш ауыуылын үткәс, бына ғәләмәт, ат бышҡырып юрта башламаһынмы?! Манһыр зыяратына етеп барғанда, ат кинәт тауға алылып ҡасып китте, саҡ юлға төштөк. Ауылға еткәс, тағы ла һырт ҡа яҡҡа – иҫке мәсет яғына елдерҙе. Ат хәҙрәттең өйө яғына барırмай ҙа ҡуя, атай етәкләп тигәндәй алып барҙы. Килһәк, олатағай өйө алдында көлөп ултыра:

– Ғәбделвәваристарҙың ҡоймаһына бәйләп ҡуй, был яҡҡа килмәҫ, – тиүә.ы.

Эргәһенә б барып күрешкәс, хәҙрәт:

– Тағы лала килдегеҙме? Ярай, Ғәйнулла, атыңды һәләк итмәнеләр.

Әгәр ҙә киҡире боролған булһаң, атың харап була ине. Юлға сыҡҡас, шулғлай ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, тәүәкәлләп етеү сараһын ҡарарарға кәрәк, – тип бик серле һөйләнә-һөйләнә беҙҙе өйгә саҡыҡырҙы. Миңә ниңәлер теге бетеүҙе һүтеп сисергә ҡушты. Ҡайсысы алып һүтергә керештем, ә үҙемдең ҡулым ҡалтырай, шыныр тиргә баттым. Бетеүҙе һүтеп, асып ебәрһәм, унда ике себебен үлеп ята, һиҫкәнеп киттем. Хәҙрәт: «Кеҫәңә һалып ал», –, – тигәс, атайым нишләптер себенде ташлап ебәрҙе. «Ай, і, Ғәйнулла, кәрәшкәс, һин көрәшә тиһеңдер инде», – тип м миңә бетеү тәрөлгән сепрәкте усаҡҡа ташларға ҡушты. Шуҡунан олатай минән ниндәй төштәр күреүемде һорашты. КүКүргән төштәремде һөйләнем. Ә тағы нимәләр күренә һуң титигәс, минең иҫкә төштө: әҙ генә серем итһәм дә бер һары ҡатын н мине өйҙән алып сығып китә, икәү шаярышып йөрөйбөҙ икәкән тип күрә ишем бит...

– Ана, шшул инде һеҙҙе юлда ыҙалатыусы, хәҙер ул һине ҡайтыуҙа кı көтә. Һинән китһә, миңә һуҡранмаҫмы? – тип олатай миңә ҙә һораулы ҡараш ташланы.

Мин ҡуруҡып киттем. «Юҡ» тигәнде аңлатып, баш сайҡаным.



Байыштан Манһырға килгәндәге бер күренеш

— Ярай, улайһа, — тип көлдө лә, хәҙрәт мине тағы өшкөрә башланы.

Ҡабаттан бетеү яҙып, уны тегеп муйыныма элеп ҡуйҙы ла:

— Бар ҡарындашың янына, ҡымыҙ эсерһең, ә беҙ ҡоҙа менән сәй эсеп алайыҡ, һин эсһәң һыу етмәҫ, — тип шаяртты.

Мин сығып киттем. Ҡапҡаға яҡынлашыуым булды, бер аяғым тышта, икенсеһе эстә, ҡуҙғалып булмай ҙа ҡуя. Кешеләр аптырашалар. Әйләнеп тәҙрәгә ҡараһам, Мөжәүир ҡоҙа ҡарап тора, бер нисә минуттан аяҡтарым ҡатҡан урынынан ҡуҙғалды. Ғәбделварис кейәүҙәргә барғансы шул хәтле һыуһаным. Ингәс, Хәйрикамал:

— Ҡайным һуҡранманымы икенсегә килгәс, тәүҙә шикләнгәнһеңдер? — тип һораны.

— Эйе, мин шундайыраҡ уйҙарҙа булдым, — тиһәм, ҡарындашым көлдө лә, миңә ҙур ағас сеүәтә менән ҡымыҙ алып килеп тотторҙо. «Нисек эсеп бөтөрмөн» икән тип уйлаһам да, «һә» тигәнсе эсеп тә бөтөрҙөм. Ҡайтырға сыҡҡанда Мөжәүир олатай: «Баймырҙа аша ҡайтмағыҙ, югиһә ыҙаларһығыҙ», — тип беҙҙе икенсе юлдан ҡайтарып ебәрҙе. Ҡайтҡас, икмәк ҡушып сәй эсеп алдым. Ун биш көндән һуң колхоз эшенә лә сыҡтым.

Ошонан йүнәлеп китһәм, хәҙрәт олатайға берәр баш ваҡ мал бирер инем, тип әйтеү әйткәйнем.

Ҡышҡы бер буранлы көндә олатайға кәзә алып барырға булдым.

Өйгә инеп сәләм биреп, хәлемде һөйләнем. Олатай миңә:

– Йә, ярай, ул кәзә мәлгүн беҙҙең кәзәләрҙе һөҙөрмө икән? – тип көлдө лә, – бар кәртәгә индереп ебәр, – тине. – Ана, ҡоҙағыйың малға бесән төшөрә алмай яфалана, уға ла ярҙам ит.

Тышҡа сыҡҡас аптырауға ҡалдым: мин бит уға кәзә тураһында бер нәмә лә әйтмәгәйнем. Кәзәне кәртәгә индерҙем дә инәйгә бесән төшөрөп, олатайҙан фатиха алып, ҡайтырға сыҡтым.

Был ваҡиғаларға байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Бер мәл ҡатынымдың аяғы оҙаҡ һыҙлап ыҙалатҡас, Мөжәүир олатайға алып барырға булдым. Олатай ҡараны ла: «Яман ергә баҫҡанһың, күп бейемә», – тип өшкөрөп, бетеү биреп ҡайтарҙы. Шул төндә үк аяҡтарының һыҙлауы баҫылды. Бына, мөғжизә!

Күп йылдар үткәс, ҡатыным, ҡарындашым Сәхибә менән Манһырға олатайҙың зыяратына барып аят уҡып ҡайтырға йыйындыҡ. Ғәбделварис кейәүгә рөхсәт алырға индек. Ул өйҙә юҡ ине, Хәйрикамал ҡарындашҡа әйттек. Ул: «Хәйерен шунда һалып китерһегеҙ», – тине һәм беҙҙе сәй табынына саҡырҙы. «Ҡабаланабыҙ, миңә төштән һуң эшкә», – тип сәйгә туҡтаманыҡ. Әммә, ни ғәләмәттер, өр-яңы машина юлда һүнде лә ярты сәғәттәй мәшәҡәтләнергә тура килде. Шул саҡ ҡарындашым:

– Әҙер сәйҙе эсмәнек, ризаһыҙлыҡ билгеһе инде, – тип ҡуйҙы.

Зыяратҡа етеп, аят уҡып ҡайтып киттек.

Бына ошолар инде тылсымлы олатай тураһындағы хәтирәләрем.

Мөжәүир хәҙрәт Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән күрәҙәсе һәм халыҡты һауыҡтырыусы тылсым эйәһе булған, минеңсә.

*Яныше в С.*
Баймаҡ районы,
Ҡарамалы ауылы

# Шәхестәребеҙҙе үҙҙәре иҫән саҡта ҡәҙерләргә өйрәнәйек

Саф алтынды ом-таштан ҡасан да булһа айыра алырбыҙмы? Ә беҙ донъя йөҙөндә билдәле булырлыҡ шәфҡәтле кешеләребеҙ – өс әүлиәбеҙҙән мәхрүм ҡалдыҡ. Өсәүһе лә Баймаҡтан: Мөжәүир хәҙрәт – Манһыр ауылынан, Хәйерниса әбей («Дана әбей» тип танынылар, ул хәҙерге «Ашығыс ярҙам» машинаһы һымаҡ ауылдан ауылға йөрөп, кешеләрҙе төрлө ауырыуҙарҙан ҡотҡара ине) – Әбдрәхмән ауылы килене. Шәһишәриф хәлфә (уның да ҡушаматы вафат булғансы «диуана» ине) – Ғәле ауылынан. Баймаҡта данлыҡлы Мөхлис [illegible]улла менән Шәһишәриф диуананың Мифтахетдин Аҡмулланың шиғырҙарын яттан кем уҙарҙан ярышып көйләп уҡығандары билдәле. Улар бер-береһе менән аралашып, ҡатнашып йәшәгән. Был әүлиәләр үҙҙәре иҫән саҡта ҡот осҡос кәмһетелеүҙәр кисергән кешеләр, нахаҡҡа төрмәгә ултыртылғандар (Хәйерниса әбейҙән башҡаһы). Үткәндәргә байҡау яһап, уйлана-уйлана, һыҡтана-һыҡтана, ошо юлдар яҙыла бит.

Мөжәүир хәҙрәт әүлиәнең ауылы Манһыр бөтөнләй тиерлек юҡҡа сыҡты. Хәйерниса әбей йәшәгән Мырҙабулат ауылы күптән инде тамырынан ҡороған. Шәһишәриф хәлфәнең Ғәле ауылы ла шул уҡ хәлдә.

Нинә шул тиклем халҡыбыҙға арымай-талмай, көндәрен-төндәрен йоҡламай хеҙмәт иткән оло йөрәкле кешеләргә үкенерлек битарафлыҡ беҙҙә?!

Миңә заманында улар менән һирәк кенә булһа ла аралашып йәшәү бәхете тейҙе.

1967 йылдың йәйендә Мөжәүир олатайҙы һуңғы тапҡыр ауыр хәлдә түшәктә ятҡанда күрергә насип булды. Оҙаҡламай вафат булды. Был ваҡиғаға өс тиҫтәгә яҡын йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, Мөжәүир хәҙрәт олатай менән осрашыуым бөгөнгөләй күҙ алдымда. Баймаҡ районының ябай халҡы, түрә-ҡаранан айырмалы, күбеһе әүлиә иҫән саҡта уларға ҙур ихтирам һәм хөрмәт күрһәтте. Был изге кешеләр рухы алдында мин башымды эйәм. Әүлиәләребеҙгә ваҡытында властар тарафынан тейешенсә баһа бирелмәне, һуңлап булһа ла улар алдында бурысыбыҙҙы үтәү фарыз. Уларҙың яҡты иҫтәлегенә бағышлап, өс ауылда ла мәсет төҙөү кәрәктер. Был эш башҡарылһа, Баймаҡ еренә, эсер һыуыбыҙға, ғөмүмән, Башҡорт иленә шифаһы теймәй ҡалмаҫ.

Эй, замандаштарым, ошондай кешеләрҙе үҙҙәре иҫән саҡта ҙурларға өйрәнәйек!

*Дәүләтов Салауат.*
Өфө ҡалаһы

## Ул мәҡәлә баҫылманы

Күренекле фән эшмәкәре, дәүләт хеҙмәткәре, сығышы менән Әбйәлил районы Ташбулат ауылынан булған Зиннур Әхмәҙи улы бала сағынан үҙҙәренән 40–45 саҡрымда ятҡан Манһырҙа иҫ китмәле тылсым эйәһе, кирамәтсе, өшкөрөү-имләү аша кешеләрҙе һауыҡтыра алыусы дин әһеле йәшәүен белеп үҫә. Хәйер, ул тирә райондарҙа, ауылдарҙа йәшәүселәр араһында, моғайын, Мөжәүир хәҙрәттең исемен, уның илаһи көсөн, Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ҡөҙрәте тураһында белмәгән, ишетмәгән берәү ҡалмағандыр.

– 1960 йылдар ине, – ти ғалим, – «Башҡортостан» гәзитендә мөхәррир урынбаҫары булып эшләп йөрөйөм. Дингә ҡаршы көрәштең ауыһыҙ ҡаты сағы. Беҙгә өлкә комитеттың идеология бүлегенән Баймаҡ районы Манһыр ауылында йәшәгән Сиражетдинов Мөжәүир тураһында, уның халыҡты дин менән ағыулап ятыуын ҡаты тәнҡит утына тотоп көнүҙәк темаға мәҡәлә яҙырға ҡушылды. Был эш әҙәбиәт бүлеге мөдире Зиннәт Ишмаевҡа йөкмәтелде. Ни эшләһен Зиннәт, партия ҡушҡас, китте материал тупларға Баймаҡ районына. Ул саҡтарҙа өлкә комитет ҡушҡанды үтәмәү енәйәткә тиң һанала торғайны. Әҙәбиәт бүлеге мөдире Баймаҡ яҡтарына сығып, кемдәрҙән һорашҡандыр, хәҙрәттең бөтә изге эштәрен кирегә һаплап «Мөжәүир хәҙрәтте фашлау» тигән ҙур тәнҡит мәҡәләһе яҙып, ҡырҡ бәләгә тарып, үҙе саҡ үлемдән ҡалып, ҡайтып килде. Күренекле дин әһелен нисек кенә мәсхәрәләмә-

гән дә, нисек кенә мыҫҡыл итләгән ине яҙыусы: уның төрмәлә ултырыуы ла ҡалмаған, кеше өшкөрөп саҙаҡа йыйыуы ла, яҡын-тирәгә дин таратып ятыуы ла һ. б. Бер һүҙ менән әйткәндә, өлкәнән ҡушылғас, әҙәбиәтсе үҙенең бөтә оҫталығын һалып тырышҡан инде. «84 йәшлек ил ҡарты тип аяп тормаған был», — тип уйлаһым эстән. Инде ни эшләргә? Минең «Мөжәүир хәҙрәтте ошлау» мәҡәләһен һис гәзиттә баҫтырғы килмәй бит. Был яҙылғандарҙың төптө ялған булыуын, хәҙрәттең бөйөк кеше икәнен беләм. Үҙебеҙҙең Ташбулат ауылынан ғына ла күпме кеше унда барып һауығып, хәҙрәттең әүлиәлегенә хайран ҡалып ҡайтты лаһа. Тоттом да юғарыла эшләп ултырған яҡташым Өмөтбаев Рамаҙан ағайға шылтыраттым.

— Мөжәүир хәҙрәт тураһында шундай-шундай мәҡәлә полосаға китә, иртәгә гәзиттә сығырға тейеш, ни эшләйек? — тим.

— Дөрөҫ эшләгәнһең мыҡә әйтеп, — тине ағай. — Үҙ шәхесебеҙҙе үҙебеҙ мыҫҡылларға, беҙҙең башҡа тай типкәнме әллә?

Мәҡәлә полосаға барып еткән ерҙән тотҡарланып сыҡмай ҡалды. Урынына мин әҙерләп ҡуйған икенсе бер очеркты урынлаштыра һалдыҡ. Бер аҙан хәҙрәт төшкә инә:

— Рәхмәт, улым. Изге эш эшләгәнһең, мин бит Аллаһы Тәғәлә илсеһемен. Бер саҡ минең турала китаптар яҙылыр, хәтирәләрҙе йыйырҙар, шунда ошо хәлдәрҙе иҫләп яҙырырға онотма, улым, — ти.

Зиннур Әхмәҙи улы әле мине, Мөжәүир хәҙрәт тураһында яҙған кешене, осраҡҡас, шатланды, ашыҡһа ла бер тынала ошо хәлде һөйләп бирҙе.

— 45 йыл үтте ул хәлдәргә ә бөтәһе бөгөнгөләй иҫтә! — тип ул төшөнөң онотолмауына аптырап ҡуйҙы.

— Сер ғилеме был, — тим. — Һеҙ, бәлки, онотор инегеҙ, уны хәҙрәттең рухы онотторһай.

— Шул мәҡәләне үҙ ваҡытында тотҡарлап ҡала алыуыбыҙға ғүмер буйы шатландым, — тине минең менән йылы хушлашып Зиннур Нурғәлин.

Үҙенең 78 йәшендә лә йәштәрсә дәрт, энергия менән янып йәшәүсе ғалимдың артынан: «Башҡорт халҡының күренекле шәхесе булып китеүегеҙҙең сере лә хәҙрәттең фатихаһын алыуҙандыр әле, ағай», – тип уйлап ҡалдым.

*Нурғәлин Зиннур*,
1928 йылғы.
Филология фәндәре докторы,
профессор

## Улар илһамды ҡартатаһынан ала

Ҡыҙҙарым Әлиә менән Зәлиә бәләкәйҙән ҡартатайын һәм уның тыуған төбәге Манһырҙы, ауылдың тирә-яғындағы икһеҙ-сикһеҙ киң далаларҙы яратып, үҙ күреп үҫте. Уларҙың тәүге һүрәттәре лә ошо төбәктең тауҙарына, ялан-ҡырҙарына, сылтырап аҡҡан шишмәләренә арналды, – ти рәссам әсәһе Зилә Сиражетдинова. (Зилә – хәҙрәттең килене. Сәүҙә ҡыҙының улы Шамилдың хәләл ефете.)

– Өйөбөҙҙә һаҡланған ҡартатайыбыҙҙың берҙән-бер фотоһүрәтенә оҙаҡ итеп теклә п ултырабыҙ ҙа күңелгә илһам килә. Һүрәт төшөрә башлайбыҙ. Әйҙә, ат һүрәте яһайыҡ, тибеҙ ҙә эшкә тотоноп китәбеҙ. Ҙур итеп ап-аҡ ат һүрәте төшөрәбеҙ ҙә, быныһы ҡартатайыбыҙ, тибеҙ. Эргәһенә тағы ала сыбар һәм тимер күк ат эшләп ҡуябыҙ – быныһы атайым менән әсәйем. Йәнә ике ҡолонсаҡ яһап ҡуябыҙ. Былары беҙ – Әлиә менән Зәлиә.

Тәү һүрәт төшөрә башлауҙарын ҡыҙҙар бына ошолай ҡыҙыҡ итеп хәтерләй.

– Тәбиғәттән бирелгән талант, тыуған яҡҡа сикһеҙ һөйөү, хозур матурлыҡты күрә һәм тоя белеү ҡыҙҙарыма мәшһүр ҡартатаһы Мөжәүир хәҙрәттән тапшырылған аманат, – ти Әлиә менән Зәлиәнең атаһы Шамил, ҡыҙҙарының уңыштары өсөн шатланып.

Мөжәүир хәҙрәт тураһындағы хәтирәләр китабының тышлығына «Мөжәүир хәҙрәт йәшәгән йорт», эске биттәрҙә «Манһыр мәсете», «Әүлиә шишмәһе», артҡы биттә «Тыуған

яҡ» (хәҙрәттең тыуған ауылы Манһыр тирәһендәге күренеш) исемле картиналарҙан репродукциялар бирелде. Йәшәгән өйө, мәсете, һыу алып эскән шишмәһе бөгөнгө көндә нисек һаҡланған, ейәнсәрҙәре тарафынан картиналарҙа шулай үҙгәртеүһеҙ яҙылған.

– «Тыуған яҡ» картинаһы бик тәрән һәм киң мәғәнәгә эйә, – ти йәш рәссам Әлиә Сиражетдинова. – Бында тәбиғәт бар матурлығы, камиллығы, байлығы менән һүрәтләнә: күгәреп ятҡан Ирәндек тауҙары, Урғаҙа йылғаһы, ҡылғанлы дала...

Кеше өсөн иң кәрәкле булған ер, һыу, һауа – өс ҡөҙрәтле мөғжизә һынландырыла. Ә аттар аша рәссам картинала кешеләрҙең ҡатмарлы яҙмыштарын сағылдыра. Бейеклектә олпат баҫып торған аҡһыл күк ат аша Мөжәүир ҡартатай образы һүрәтләнә. Ул күпте белгән, яҡшыһын да, яманын да үҙ башынан үткәргән, инде ил ҡартына, аҡһаҡалға әйләнеп, халҡынан ҡәҙер-хөрмәт күреп йәшәй. Ике юл сатында торған вайымһыҙ ҡолонсаҡ алға, билдәһеҙлеккә ҡыҙыҡһынып баҡ-ҡан. Урталыҡтан ерән айғыр менән һары бейә йәшел үлән утлай – үҙ хәстәрен хәстәрләй, донъя менән ҡәнәғәттәр, тыуған ерендә көн итһәләр, улар өсөн шул бәхет.

– «Мөжәүир хәҙрәт йәшәгән йорт» картинаһын бөтә күңел йылымды биреп яҙҙым, – ти Зәлиә Сиражетдинова. – Ап-аҡ нигеҙ ташы, емеш ағастарында аҡсәскәләр, бүрәнә өйҙөң аҡ түбәһе, күктән һуҙылған аҡ юлаҡ... Изге ҡартатайым йәшәгән йорт бөтә донъяға бәхет нуры сәсә. Юғарынан да өйгә нур һибелә, әйтерһең, Хоҙай Тәғәлә ҡартатайым йәшәп киткән изге ергә юғарынан үҙенең рәхмәтен ебәрә.

Хәтирәләрҙе туплап, китап итеп сығарыусы Лира Яҡшыбаева ла ҡыҙҙарымдың эштәренә яҡшы баһа бирҙе:

– Картиналарҙа Әлиә менән Зәлиәнең ҡартатаһына булған тәрән ихтирамы сағыла. Был китапҡа йәш рәссам Әлиә менән Зәлиәнең йөрәк йылыһы һеңде, күңел наҙы бөркөлдө, шунлыҡтан уны ҡулға тотҡандан йән рәхәтләнә, күҙ шатлана.

Аллаһҡа шөкөр, ниһайәт, бөйөк шәхесебеҙ тураһында хәтирәләр китабы сыға. Шатлығыбыҙҙың сиге юҡ, сөнки бар хәленсә минең ҡолонсаҡтарым да китапҡа үҙ өлөшөн индереп, ҡартаталарының рухын шат ҡылды.

Ҡыҙҙарымдың нескә күңелле, изге холоҡло булып үҫеүенә ҡыуанам.

Йөрәктәренә Аллаһы Тәғәлә миһырбанлыҡ һалған, күңелдәренә дәрт биргән, ижади һәләтен дә йәлләмәгән. Балаҡайҙарымды әҙәм кәмләһә лә, Аллаһы Тәғәлә кәмләмәһен. Ҡартатайҙары рухы Хыҙыр Ильяс булып һәр ерҙә үҙе һаҡлап, яҡлап, ҡурсалап алып йөрөтһөн, ин шәәъ Аллаһ!

*Сиражетдинова Зилә,*
1957 йылғы.
Сибай ҡалаһы

## Мөжәүир хәҙрәт хикмәттәре

Баймаҡ районы Кәрешкә ауылында тыуған, шунда ғүмер кисергән 1920 йылғы Йәнтилина Һәҙиә Әйүп ҡыҙы Мөжәүир хәҙрәт тураһында бик күп ҡыҙыҡлы хәтирәләр белә, тигәйнеләр. Әммә беҙгә ҡапылда осрашыу насип булманы. Бер йыл тигәндә был изге күңелле инәйҙе үҙем эҙләп таптым.

Башта миңә Һәҙиә инәйҙең ҡыҙы Тәнзиләнең Манһыр әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәткә арналған шиғыры осраны. Шиғыр авторы йөрәк түрендә әсәһе Һәҙиә, атаһы Фәйзулла һөйләгәндәрҙе рухи хазина итеп һаҡлай. Көн дә тиерлек ишетеп, белеп йөрөгәнгә уның күңелендә тыуған яғының бөйөк әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәткә ҡарата оло һөйөү һәм ихтирам йәшәй. Был ихлас, саф тойғо Тәнзилә күңеленән урғылып сығып, түбәндәге шиғри юлдарҙа сағылыш таба.

* * *

*Киртәле лә тауҙар араһында,*
*Ожмах кеүек матур бер ерҙә,*
*Борон-борон заманда йәшәгән*
*Мөжәүир ҙә атлы әүлиә.*

*Ҡыңғыраштан аша тура сыҡһа,*
*Йыраҡ түгел беҙҙең Кәрешкә.*
*Ниндәй бәхет, тыуған ерҙә*
*Йәшәгән бит изге фәрештә.*

Шиғырын уҡып сыҡҡас, тиҙерәк Тәнзиләне күргем, осрашып һөйләшкем килде. Әммә беҙҙе әүлиә рухы үҙе йөрөтә буғай, ниңәлер, юл төшмәне. Йәнтилиндәрҙән миңә тәү башлап йәш быуын вәкилен, Һәҙиә инәйҙең ейәнсәрен, Миңзилә исемле ҡыҙының ҡыҙы, СиБГУ талибәһе Ләйсән Солтанғолованы осратырға тура килде.

Сибай ҡала китапханаһы менең «Мөжәүир хәҙрәт» әҫәре буйынса фәнни-ғәмәли конференция үткәргәйне. Был сарала Ләйсән исемле талибә, ул ҡыҙ Һәҙиә инәйҙең ейәнсәре булып сыҡты, фәнни хеҙмәте менән беренсе урын яуланы. Беҙ шулай танышып киттек. Аҙаҡ та был тырыш, булдыҡлы талибә тураһында төрлө бәйгеләрҙә ҡатнаша, гел призлы урындар яулай, тип йыш ишетергә тура килде. Ә быйыл, 2008 йылда, Ләйсән Алтайҙа студенттар араһында үткәрелгән Бөтә Рәсәй студенттарының төрки телдәре буйынса үткәрелгән олимпиадаһында ҡатнаша. СиБГУ талиптары командаһы икенсе урынға сыға, Ләйсән шәхсән икенсе урын яулай.

Баймаҡ районының билдәле Йәнтилиндәр ырыуынан булған, йәше туҡһанға етеп барған Һәҙиә инәйҙе эҙләп табыу миңә ҡыйын булманы. Уны Баймаҡ ҡалаһында йәшәгән ҡыҙы Миңзиләлә осраттым. Оҙон көнө буйы һөйләштек. Баҡһаң, Йәнтилина Һәҙиә инәйҙең балалары, ейәндәре — бөтәһе әүлиә олатайҙы сикһеҙ яратып, хөрмәт итеүселәрҙән булып сыҡты. Ә ағинәйҙең үҙенең һөйләгәндәре бер яҡтан Мөжәүир хәҙрәттең иҫ китмәле илаһи ҡөҙрәте тураһында әлегә тиклем ишетеп белгәндәрҙе дәлилләһә, икенсе яҡлап, әүлиә образының әлегә тиклем яҡтыртылмаған сифаттарын да асырға булышлыҡ итте.

— Шәп кеше булды Мөжәүир хәҙрәт, — ти уны яҡындан белгән Һәҙиә инәй. — Көлөп-көлдөрөп, һөйләп-һөйләшеп ултырыр, һинең ни уйлағаныңды белеп ултырыр ине. Кеше яратты, үҙенә төбәп килгән һәр кемде йылы ҡаршы алып, ризалатып ебәреү хәстәрен күрҙе, хәленән килгәненсә ярҙам күрһәтте. Күңеле киң, өйө иркен, ниәте изге, зар-интизар булып килгәндәргә, бала-сағаға мәрхәмәтле, итәғәтле булды, — тип хәтерләй әүлиәгә йөрәк түрендә мәңгелек рәхмәт хисе һаҡлаған Һәҙиә инәй. Оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан,



Артышлы тау битләүендә

инәй бағыһын иҫләй. Олатай нимә әйткән, барыһы хәтерендә һаҡлаға. Кешеләрҙе һауыҡтырыу, дауалау буйынса ҙур тәжрибә туплаған бағымсынан инәй ниҙәр ишеткән, шуны һүҙмә-һүҙ бирәбеҙ.

— Ауырыу кешегә өс төрлө юл менән тейә. Беренсеһе — һыуыҡ тейҙереүҙән, икенсеһе — нәмә ҡағылыуҙан, өсөнсөһө — әрөҫ туҡланмауҙан, — тигән ул. — Күҙ тейеү, боҙом, ен ҡағылыу, сихыр булһа, ундайҙарға минең әмәл бермәбер килешр, — тигән. Ниндәй юл менән сирләп килһәләр ҙә, хәҙрәтең ҡөҙрәтенә инанып, йүнәләм тип килгән кеше, мотлаҡ йүнәлеп ҡайтыр булған.

Әҙәм балаһының ауырыуға һабышыуын күберәк ҡара көстәр ҡағылыуҙан күргән ул. Бағымсы шуларҙы ҡыуа торған булған Ябай кешенең көсө етмәҫ яуыз ҡара көстәр менән гел алышып-көрәшеп йәшәгән.

— Шундай шәпле, хикмәтле табип һәм әүлиәнең тере сағында ҡәҙерен белеп еткермәнеләр. Хәҙер күптәр ҡәберенән ҡаҙыпалып ултыртырҙай булалыр ҙа бит, әүлиәләр ҙә ергә мәңгелеккә килмәй икән шул, — ти Һәҙиә инәй.

Һүҙә әүәҫ әңгәмәсем үҙенең Булат исемле ейәне менән булғанбер хәлде хәтерләп һөйләп алды.

– Һигеҙ айлыҡ ҡына бәпес ҡапыл сәсрәп ауырып китте. Ни эшләтергә белмәйбеҙ, бала һығылып ауырый. Тиҙ генә ат ектек тә туранан ғына Ҡыңғыраш аша төшөп, Манһырға сыҡмаҡсы булдыҡ. Кәрешкә менән Манһыр араһы туранан биш-алты саҡрым тирәһе булыр. Ошо ғына араны үтә алмай атыбыҙҙың йәне сыға яҙҙы. Сөм-күк ат ҡара һыуға төшөп тирләне, төҫө ҡараға әйләнде. Тау башына менеп еткәнсе әллә нисә сәғәт ваҡыт үтте. Ҡыңғыраш башына менеп етһәк, тау түбәһенә арба үҙе китер ине, тибеҙ. Меҫкен ат тамам әлһерәне. Әйтерһең, бер нәмә арбаны артҡа тартып һөйрәй. Элек кешеләрҙән «Ен ҡағылған ауырыуҙарҙы алып барғанда аттың арбаға көсө етмәй икән», – тип һөйләгәндәрен ишеткәнебеҙ булғайны. Әкиәт, тип ышанмай торғайныҡ. Бына хәҙер үҙебеҙ шул хәлдә ҡалдыҡ. Ниһайәт, ни хикмәт булғандыр, ат көс-хәл менән тауҙың башына килеп етте лә көслө итеп бер дер һелкенде, тирә-яҡҡа ҡара тире сәселде. Шунан саптырып сығып китте. Күсерҙәге килен дилбегәне ҡулынан ысҡындырмай саҡ тотоп барҙы. Мөжәүир хәҙрәттең ҡапҡаһы ябыҡ тора ине, ат бикле ҡапҡаны емереп, ихатаға елдереп килеп инде. Олатайға күренергә килеүселәр урам тулы ине. Быны күреп улар аптырап ҡалды. Хәҙрәт өйөнән килеп сыҡты ла, сиратһыҙ саҡырып индерҙе.

– Әйҙә ин, балам, һеҙҙе көтөп торам, – тине. – Ҡулыңдан ризыҡты күп ейҙем, минең дә һеҙгә ярҙамым тейһен.

Ингәс тә хәҙрәт баланы ҡулына алды.

– Кыш, мәлғүндәр, китегеҙ бынан, – тип өрөп, ниндәйҙер күҙгә күренмәгән заттарҙы ҡыуғандай итте. – Һеҙ килә ятҡанда уҡ, атығыҙҙың арбаға көсө етмәгәнен күреп, мин уларҙы бер килке борхолдатҡайным инде, – тине. Бәпәйҙең башынан башлығын systereп өшкөрөп кейҙерҙе. – Ин шәәъ Аллаһ, йүнәлер, – тине, беҙҙе тынысландырып оҙатып ҡалды. Булатым шул өшкөрөүҙән аҙаҡ, иншәәъ Аллаһ, бер ауырыу-сырхау күрмәне.

Түбәндә бирелгән айырым-айырым ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе лә Һәҙиә инәй ауыҙынан яҙып алдым.

## Кире алды

1947 йыл ине. Ниңәлер башым ауыртып тик тора. Хәҙрәткә барғайным, бетеү яҙып бирҙе. Үрмес таҫмаға тегеп, бетеүҙе оҙаҡ ҡына тағып йөрөнөм. Йүнәлгәйнем, сөйгә элеп ҡуйҙым да уның тураһында оноттом. Башым ауыртҡанға, иҫемә төшәп ҡараһам, таҫма тора, бетеүем юҡ.

Бер көндө, Мөжәүир хәҙрәт ауылыбыҙға, Йәмилә инәйҙәргә килгән, тип ишетеп ҡалдым да барҙым. Олатай бөхтә генә кейенеп, башына аҡ түбәтәй кейеп, түрҙә ултыра.

– Бетеүемде юғалттым, миңә яңы бетеү яҙып бир, – тим.

– Һин уны үҙеңә тағырға алманың бит, сөйгә элергә алдың, – ти, үҙе рәхәтләнеп көлә. – Тағып йөрөмәгәс, кәрәкмәйҙер, тинем. Исемен яңырттым да Иҫәнгилде ауылы Хәйернисаға бирҙем.

– Миңә тағы яҙып бирсе әле, олатай, – тим ялбарып.

– Ҡыҙыл аҡсаның эйәһе өсөн яҙып бирмәһәм, – ти, үҙе тағы көлә.

Ирем Фәйзулла, теге хикмәтле Баймаҡтан повестка алып ҡайтып килгәндәге осрашыуҙы мәңге онотманы, һуғыштан хәҙрәт фатихаһы арҡаһында тере ҡайттым тип, уны гел хөрмәт итте. Был юлы ла, хәйергә һал тип, 30 һумлыҡ ҡыҙыл аҡса биреп ебәргәйне. Күрәҙәсе олатайҙың шуны әллә ҡайҙан белеп, шаяртып ултырыуы инде.

Бетеүҙе яҙғанда тағы шаяртып алды.

– Был юлы мөһөр баҫып тороп бирәйем әле, ҡайҙа һалһаң да башҡаса юғалтмаҫ, башың да ауырымаҫ, – ти. Миңә ҡарап торҙо ла, етди тонға күсеп, өйрәтеп әйтте.

– Һинең башыңдың ауырыу сәбәбе – кеше һүҙен ишетмә. Эт өрөр, бүре йөрөр. Үҙ-үҙеңде бел дә, юҡ-бар өсөн көйәләнмә. Яҡшылыҡ иткәнгә насарлыҡ ҡылма. Ямандарҙан йыраҡ йөрө. Йәнә бына ошо доғаны эстән гел ҡабатла. Еңел генә ул, – тине.

*Юлда, юлда, юлдашым,*
*Хыҙыр Ильяс юлдашым.*
*Юлда булыр юлдашың,*
*Хыҙыр Ильяс юлдашың.*

Доғаны хәҙрәт бер нисә ҡат әйттереп ҡараны. Бетеүҙе күнгә теғеп ҡулыма тотторҙо.

– Инде хәҙер туҡһан йәшкә етеп барам, хәҙрәт яҙып биргән шул бетеүҙе янымдан ебәргәнем юҡ. Уны, Аллаһ бирһә, ейәндәремә ҡомартҡы итеп ҡалдырасаҡмын.

Һәзиә инәйҙең хәҙрәткә булған оло ихтирамы минең дә күңелемә күсте.

– Ниндәй бөйөк әүлиә йәшәгән бит был бәрәкәтле төбәктә! Уны күреп белеүсе, эргәһендә йәшәүселәр ҡайһылай ҙа бәхетле! – тип уйланым, күңеле хазиналай инәйҙе яратып, ҡосаҡлап алдым.

### Хикмәтлененең Фәйзуллаға күрһәткән хикмәте

Был хәл 1941 йылдың 26 авгусында була. Кәрешкә ауылынан Йәнтилин Фәйзулла Баймаҡҡа барып, һуғышҡа китергә повестка алып ҡайтып килә. Һыбайлы егет ауылына Манһыр эргәһенән сығып, Ҡыңғырташты аша төшөп, туранан ҡайтырға була. Был юл менән барғанда Кәрешкә Манһырға биш-алты саҡрымда ята. Урғаҙа аша сығырға торғанда үҙенең йылға буйындағы сабынлығында, еғеүле аттың арбаһында Мөжәүир хәҙрәт ултыра, ти. Ул башына аҡ сәллә ураған, бөхтә кейемдә булған.

– Һине көтөп ултырам, Фәйзулла ҡусты, – ти икән күрәҙәсе. Үҙе тиҙ генә арбаһынан төшөп, ҡиблаға ҡарап ултырған да намаҙ уҡый башлаған.

Шунан бер ни аңламай хайран ҡалып торған Фәйзулланы эргәһенә саҡырып ултыртҡан да былай тигән:

– Һин һуғышта оҙаҡ йөрөмәҫһең. Сәфәрең ҡыҫҡа күренә. Әҙерәк һаулығыңа зыян килер, уның ҡарауы, иҫән ҡалырһың. Минең теләк-фатихала булырһың, ин шәәъ Аллаһ.

Фәйзулла үҙ күҙенә үҙе ышанмаған. Хәҙрәт бит 1939 йыл ҡулға алынып, әле төрмәлә ултыра. Нисек ул бында килеп сыҡҡан? Ниндәй хикмәт был? Иҫенә килеп, ауыҙын асып һорашырға ғына итһә, ҡаршыһында торған хәҙрәт тә, арба ла юҡ булған. Башта ҡурҡышынан был турала Фәйзулла бер

кемгә лә өндәшмәгән. Йылдар үткәс кенә әбейе Һәҙиәгә һөйләп ҡалдырған.

Ысынлап та, Фәйзулла һуғышта йыл ярым йөрөп, һул ҡулын өҙҙөрөп, сулаҡ булып ҡайтып килә. Ҡайтҡас өйләнә, балалары була, оҙаҡ йылдар бәхетле ғүмер һөрә. Шулай итеп, хикмәт эйәһенең күрәҙәлек ҡылыуы дөрөҫкә сыға. Тик төрмәлә ултырган хәҙрәттең нисек Урғаҙа буйында хасил булыуы уларҙы ғүмер буйы хайран итә. Әҙәм ышанмаҫ хәбәрҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмәйҙәр. Әммә Баймаҡ яғында хәҙрәт хикмәттәрен етди ҡабул итәләр һәм ихлас ышаналар.

### Инселәнгән ҡаҙ

Ирем Фәйзулла биш-алты йыл Күсейҙә колхоз председателе булып эшләп алды ла, Басай менән Күсей ҡушылғас, ферма мөдире булып үҙебеҙҙең яҡҡа Әбдрәхмән фермаһына эшкә ҡайтты. Был 1952 йылдар ине. Шул йылда ҡош-ҡортобоҙ уңды, егерме ҡаҙ һуйып алдыҡ. Эй, һимеҙ, эре булдылар, һәр береһе биш-алты кило тартҡандыр. Иң һәйбәттәренән ике ҡаҙҙы «Аллаһ бирһә, олатайға алып барып ашатырмын», – тип айырып элеп ҡуйҙым. Алып барып бирергә яйы сыҡмай, яҙ етте.

Бер көн ирем әйтә, әйҙә, управляющий Хәйепназарҙы ҡунаҡҡа саҡырып алайыҡ, ти. Уның шул тиңдәше менән ҡатнашып йәшәгеһе килә ине. Апрель айы. Үҙемдең ике ҡаҙ, олатайға тип инселәнгән ике ҡаҙ элеүле тора. Тулайым бер ҡаҙҙы ҡаҙнаға һалып ебәрҙем. Ит бешеп сыҡты, көткән ҡунағыбыҙ һаман юҡ.

Уны, Хәйепназар Баймаҡҡа киткән, юлда бер нәмәгә тарыған шикелле, тинеләр. Ҡаҙҙы баҫырып ултыртып торҙом. Иремдең ҡайтҡанын көтәм. Фәйзуллам ҡайтып инде лә:

– Хәйепназар күренмәй, уның ҡарауы Мөжәүир хәҙрәт абыстайы менән Хәйрулла ағайҙарға ҡунаҡҡа килгән. Мин уларҙы саҡырып ҡайттым, – тине.

Мин арлы-бирле иткеләгәнсе Хәйрулла ағай Сәлимәһе менән, Мөжәүир хәҙрәт Гөлйемеше менән дүртәүләп килеп тә инделәр. Мин олатайҙы ике йыл күрмәгәйнем, ҡыуанып киттем. Йүгереп йөрөп табын хәстәрләйем. Урындыҡҡа

ашъяулыҡ йәйеп ебәрҙем, бөтөн ҡаҙҙы батмусҡа һалып олатай алдына ҡуйҙым.

– Ҡаҙҙы өлөшләп һеҙ бүлегеҙ, хәҙрәт, – тип хөрмәтемдә алданыраҡ шылдырып ҡуям. Ҡунағыбыҙ рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе:

– Һай, шаян ҡаҙ булды был, Күсей һыуында ҡойоноп, һипһимеҙ булып үҫте. Осоп китергә иткәйне, беҙ уны осорманыҡ, – ти. – Миңә инселәнеп һаҡлап ҡуйылһа ла, саҡ-саҡ Хәйепназар түрәнең ауыҙына барып инмәне. Ин шәәъ Аллаһ, үҙебеҙҙең ризыҡҡа яҙҙы, – ти, үҙе тағы көлә. Миңә лә өлөш һалып:

– Шулай бит, Һәҙиә һылыу, миңә мисәбәләнгән (инселәнгән) ине бит? Насип ризыҡ, ана шулай, теш ярып килеп инә ул, – тип көлә.

Олатай ҡаҙҙы өлөшләп-өлөшләп бүлеп ашата, ә мин һаман һушымды йыя алмай, олатайҙың күрәҙәлегенә хайран ҡалып ултырам. Ул ҡаҙҙың Күсейҙә үк үҙенә инселәнеп ҡуйылғанын ҡайҙан белгән ул?

Хушлашып ҡайтырға сыҡҡанда тағы шаярта, тағы күрәҙәлеге менән хайран итте хәҙрәт.

– Инселәнгән ҡаҙҙың икенсеһен бирмәһәң дә ярай, ҡәҙер итеүең биргәндән дә артыҡ булды, рәхмәт, – ти.

– Юҡ, хәҙрәт, һеҙгә инселәнгән ул, – тип күстәнәсемде Гөлйемеш абыстайҙың ҡулына тотторҙом.

– Ярар улайһа, әйтеүҙе мотлаҡ үтәү фарыз, әйтеү үтәлмәйенсә, ризыҡтың юлын быуып тормаһын.

Һәҙиә инәй был ҡыҙыҡ хәлде көлә-көлә һөйләне. Йәш саҡтарын, яратҡан хәләл ефетен иҫкә алыуҙан, ахырыһы, йөҙө яҡтырып, күңеле күтәрелеп китте.

### Дахаң һәйбәт тә инде

1956 йылдың көҙө. Туғыҙ айлыҡ улым Батыргәрәй ныҡ итеп ауырып китте. Был яҡҡа элек кешенең бер белгәне Мөжәуир хәҙрәт ине. Ат егә һалып алдыҡ та киттек Манһырға. Көн һыуыҡ ҡына. Яңылбикә апайым өҫтөнә ныҡ ҡына кейенгән, миңә лә даханды кей, йылы булыр, ти.

– Иҫкергән, яғаһы ла туҙған, ошо даханы кейгем килмәй, – тип киреләнәм.

Шулай ҙа апайым, йылы һөйәк һындырмай, тип өгөтләп даханы кейҙерҙе.

Хәҙрәт, ғәҙәттәгесә, беҙҙе йылы ҡаршы алды. Баланы ҡулына алып өшкөрә башланы. Ике көн буйы алһыҙ-ялһыҙ илаған сабый шунда уҡ иҙрәп йоҡлап китте. Бетеүен дә шунда уҡ яҙа һалды. Мин, ҡайһылай тиҙ яҙҙы, тип уйлап та өлгөрмәнем, олатай:

– Белгән кешегә оҙаҡмы ни, – тип көлөп ҡуйҙы.

Уңарсы Гөлйемеш абыстай сәй табыны әҙерләне.

Сәй эсеп, йылынып, ҡайтырға әҙерләнә башлағас, Мөжәүир хәҙрәт серле генә йылмайып:

– Һәҙиә, даханды иҫке лә иҫке тип кейгең килмәй ине, ап-аруҡ кейерлек тәһә. Яғаһы ла һәйбәт кенә әле, – ти. Яңылбикә апайың әйткәнде тыңламай ҡаршылашһаң, өшөп һыуыҡ тейҙерер инең. Шулай, һылыу, йылы һөйәк һындырмай.

Ҡайтып барабыҙ, аптырап барабыҙ.

– Эй, ошо олатайҙың барыһын белеп тороуҙары!!! Ни уйлайһың, ни булған, әнәһенән ебенә белеп, әйтә лә тора бит. Даханы иҫке тип кейге килмәй торғанға хәтле белеүе бигерәк инде, – тип һөйләштек Яңылбикә апайым менән. – Бындай кешенең көсө-ҡөҙрәтенә нисек инанмайһың, ана, Батыргәрәйҙе йүнәлтергә бер тыны етте ләһә.

**Хәҙрәт бетеүе**

Кәрешкә ауылы Ырыҫкужин Мөхәммәт улы Имаметдиндың Бөйөк Ватан һуғышында нисек немец фашистарына пленға эләгеүен, тотҡонлоҡта күргәндәрен бәйән итә башлаһаң, бер роман яҙырға булыр ине. Әҙәм көсө етмәҫтәй ауыр-ауыр таштарҙы күтәреп ташытып юл төҙөүҙәре, төрлөсә язалау, бер сәбәпһеҙ туҡмау, иптәшеңә ярҙам иткән өсөн дә үлем язаһы, атыу һәм фашистарҙың башҡа яуызлыҡтары тураһында Имаметдин гел илап һөйләр булған.

Бер рәт тотҡондарҙы ат урынына һабанға егеп, миналанған баҫыуҙы һөрөргә ҡушалар. Аслыҡтан ҡаҡ һөйәккә ҡалған тотҡондарҙың тәрәнгә көсө етерлек түгел. Саҡ ҡына хәл алырға туҡтаһалар, шашынған немец палачтары аҡырынып,

автоматтан ут яуҙыра башлай. Баҫыуҙы һөрөп барғанда минаға эләгеп, тотҡондарҙың бөтәһе һәләк булды. Был мәхшәрҙә бер Имаметдин тере ҡала. Һуғышҡа китер алдынан Мөжәүир хәҙрәт яҙып биргән йән һаҡлау бетеүе арҡаһында иҫән ҡалды ул.

– Әҙерәк барам да күкрәгем тәңгәленә эстән тегелгән бетеүемде һәрмәп ҡарайым. Эй, Аллам, ярҙам ит, Олатай доғалары миңә көс-ҡеүәт бир, тип теләйем. Баҫыуҙың теге осона имен-аман килеп сыҡҡас, немецтар үҙҙәре лә минең тере ҡалыуыма аптырап ҡуйҙы бугай, – тип хәтерләй торғайны Имаметдин еҙнә. Ул йәнә ошоларҙы һөйләй.

Бер яуызы:

– Азиат, һин барыбер үләсәкһең, – тип ҡара тиргә батып әлһерәгән Имаметдингә автоматын тоҫҡағайны, икенсеһе, кешелеклерәге, уның ҡулынан тотто:

– Ҡуй, теймә, үҙе дөмөккәнсе йөрөһөн, әйҙә.

Шулай итеп, Имаметдин был тамуҡтан да тере ҡала. Ҡайҙа йөрөһә лә, ни эшләһә лә, ул бетеүенән һис бер ваҡытта ла айырылманы. Аҙаҡ та уны пуля алманы, крематорий мейесенән дә ҡотолоп ҡалды, төрлө ауырыуҙарға ла бирешеп барманы. Һуғыш бөткәс, пленда азат ителеп, ауылына иҫән-һау әйләнеп ҡайтыу насип булды.

Ҡайтып яҡындарынан иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас та Имаметдиндең тәүге һорауы:

– Мөжәүир хәҙрәт иҫәнме? – була. Түш кеҫәһенән иҫкереп, туҙып, тетелеп бөткән әйбер килтереп сығара ла:

– Бына ошо Мөжәүир хәҙрәт бетеүе арҡаһында мең үлемдән ҡотолоп, тере ҡайттым, – ти.

– Нисек һаҡлай алдың уны, – тип хайран ҡалды немецтарҙың яуызлығын, кеҫәләрҙе ныҡ тентеүен, шәхси нәмәне һаҡларға рөхсәт итмәүен ишетеп белгән ауылдаштары.

– Тентенеләр, тик ни хикмәт менәндер бетеүгә теймәнеләр, әллә күрмәнеләр. Уйлай торғас, аңланым, тентеүҙәр башланһа, бетеү йәшеренә, кешегә күренмәй. Был олатай ҡөҙрәте икәненә инандым, – тип һөйләне тотҡонда булған Имаметдин.

Ул һөйләгәндәргә Мөжәүир хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәтен белмәүсе башҡа яҡ кешеләре булһа, бәлки, уйҙырма тип, шик

белдерер, йә ышанмаҫ ине, ә әүлиәнең хикмәттәрен күн дә үҙ күҙе менән күреп, аҙым һайын ишетеп йөрөгән күрше ауыл халҡы был ишеткән хәбәргә инанып ышанды.

Имаметдиндең был һөйләгәндәренә алтмыш йыл тулып үтһә лә, һаман ул хәлде үҙ күҙе менән күреүсе Һәҙиә апай хайран ҡалып беҙгә бәйән итә.

Иртәгеһен Кәрешкәнән бер төркөм кеше, барлыҡ эшен ҡуйып, Имаметдингә эйәреп, туранан тау аша төшөп, хикмәт күрер өсөн Манһырға йүнәлде. Хәҙрәт килеүселәрҙе ҡапҡа төбөнә сығып ҡаршыланы.

– Һиңә яңы бетеү яҙып бирмәй булмаҫ, Имаметдин туған. Тегеһе һуғышта йөрөп туҙып тетелеп бөттө, әрһеҙләп ҡайттың, – тине Олатай көлөп. – Бетеү ҡәҙерен белдең үҙең дә. Ана, әйткәнде тыңламаған Вәлиулланан кире алдым. Бер ағас ботағына элде лә китте. Иҫенә төшөп кире килгәйне, эҙләгәне урынында булманы.

– Ошо бетеү арҡаһында әллә нисә рәт үлемдән ҡотолоп ҡалдым. Рәхмәт һиңә, хәҙрәт, тыуған илемә ҡайтып, туғандарымды күрҙем, – тине лә Имаметдин илап ебәрҙе.

Утты-һыуҙы кисеп тере ҡайтҡан яугирға ҡушылып бөтә килендәр иланы. Был күҙ йәштәре, беренсенән, Имаметдиндең имен ҡайтыуы өсөн шатланыу булһа, икенсенән, бөйөк хикмәт эйәһенә рәхмәтле булыу йәштәре ине.

## Яҙыусыға рәхмәт һүҙем

Лира Яҡшыбаеваның Мөжәүир хәҙрәт тураһында яҙған китаптарын уҡып сыҡҡас, мин, туҡһан йәшкә етеп килгән оло кеше, шатлығымдан ни эшләргә белмәнем. Ҡартлығымды онотоп, осоп-төшөп йөрөнөм. Йүгереп кенә барып шул яҙыусыны күргем, уға ихлас рәхмәттәремде әйткем килде. Гел көтөп йөрөгәйнем, бындай ҙа бөйөк кешене, моғайын, яҙыусы табылыр, тигәйнем. Алламдың биргәненә мең дә мең шөкөр, мәңгелек донъяға китер алдынан, теләгән теләгемә ирештем. «Мөжәүир хәҙрәт» китабын үҙ ҡулым менән тотоп уҡыу ғына түгел, яҙыусы ҡыҙымды күреп, күңелемдә ярты быуаттан ашыу һаҡлап йөрөткән хәтирәләремде лә һөйләп ҡалдырыуға өлгәштем.

Әле мин һөйләгән хәтирәләрҙә лә, Лира ҡыҙым яҙғандар араһында ла ябай кеше ышанмаҫтай хәлдәр бар. Хәҙрәт олатайҙы беҙҙең кеүек үҙе белеп, күрмәгән, яҡындан аралашмаған ҡай берәүҙәр, бәлки, ышанып етмәҫтәр. Ә уны күреп белгәндәрҙең һәр береһе, ҡайһылай ҙа һәйбәт, дөп-дөрөҫ яҙылған, ҡайҙан белеп бөткән, әйтерһең, эргәһендә бөтәһен үҙ күҙе менән күреп-белеп торған, тип, яҙыусыға рәхмәтен белдерә. Минең дә бөтә балаларым, туған-тыумасам, дуҫ-иштәр, таныш-белештәр яҙыусыға алҡышлана. Әүлиә Олатайҙы ҙурлағанда, Лира ҡыҙыбыҙҙы Аллаһы Тәғәлә үҙе ҙурлаһын, тибеҙ.

Минең бөтә балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем, гел телемдән төшөрмәй һөйләй торғас, мәңге хәзрәт олатайҙы онотмаҫтар ине. Китап яҙылыу уның исемен тағы ғүмерлерәк итте. Манһыр әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәт һымаҡ аҫыл заттар донъяға мең йылға бер киләләр. Ин шәәъ Аллаһ, ул беҙҙең ерҙә йәшәп киткән. Беҙ ул йөрөгән юлдарҙан йөрөйбөҙ, ул эскән һыуҙарҙы эсәбеҙ. Олатай менән бер төбәктә тыуғанмын, уны күреп белгәнем, унан фатиха алыуым менән бәхетлемен. Әүлиәбеҙҙе китап яҙып ҙурлаған ҡыҙыбыҙға уңыштар һәм бәхет теләйбеҙ. Рәхмәт уға.

— Мин Ҡөрьән сығам да хәзрәт олатай рухына бағышлайым, — тине бер осрашҡанда Разия тигән хаҡлы ялдағы уҡытыусы.

Уның ошо бер һөйләме етте минең күңелемде иретергә, торабара яҡын дуҫыма әүерелде. Беҙҙең һөйләшеүҙәр Ислам дине, изге әүлиәләр, изге доғалар көсө, йән-тән сәләмәтлеген һаҡлау тураһында булды.

## Хәҙрәт үләне

*«Хәҙрәт үләне» бүлеге Баймаҡ районы, Иҫке Сибай ауылы, Баймөхәмәтова Разия Хәйбулла ҡыҙы хәтирәләренә таянып яҙылды.*

Ғабдулла Сәиди мәҙрәсәһендә уҡыған сағында уҡ Мөжәүир хәҙрәт мөршиденән үләндәр менән дауалау серен ныҡлап өйрәнә.

— Дауа беҙҙең аяҡ аҫтында, шифалы үләндәрҙе беҙ тапап йөрөйбөҙ, — тип әйтә торған булған ул. Үҙе лә күпләп артыш, йыуа, балан, боланут үләне, дегәнәк тамыры һәм башҡа бик күп шифалы үлән-тамырҙарҙы һәм емештәрҙе йыйыр булған. Ауырып килгәндәргә биреп ебәргән, үҙҙәренә лә ваҡытында йыйып алырға тәҡдим иткән.

Йәйен уйһыулыҡта, урман ситтәрендә көлтәләй булып алһыу-ҡыҙыл сәскәле бер үлән күкрәп үҫә. Һәр ботағы сәскә атып, тирә-яҡҡа йәм биреп, балҡып ултыра ул. Варис Ғүмәровтың «Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре» тигән китабында был шифалы үләнде боланут тип атайҙар. Русаһы Иван-чай, фәнни исеме — кипрей узколистый. Ә беҙҙең яҡта,

Манһыр, Байыш, Ҡарамалы, Яңғаҙы, Кәрешкә, Татлыбай, Әбдрәхмән, Иҫке Сибай ауылдарында уны хәҙрәт үләне тип йөрөтәләр. Мөжәүир хәҙрәт боланут сәскә атҡас, ҡырға сығып, үҙ ҡулы менән шул шифалы үләнде күп итеп йыйып ала ла, килгән һәр кешегә өшкөрөп биреп ултыра торған булған.

Разия апай хәтерләй:

– Бер Мөжәүир хәҙрәткә барғайным, – ти, – күренергә килгән һәр кем ҡулында боланут үләне. Кешеләр белеп, хәҙрәт үләнен үҙҙәре тотоп килгән, тип уйлай Разия апай. Шулай ҙа һорарға була:

– Ниңә бөтәгеҙҙең ҡулында был үлән?

– Юлда ултыра ине, алдыҡ, – тиҙәр күренергә килеүселәр.

Шунда Разия апай быны ң хәҙрәт хикмәте икәнен аңлай. Кешеләрҙең, килгәндә осраған үләнде «Бисмилләһир-рахмәнир-рахим» тип өҙөп алырға кәрәк, сөнки уны олатай юлға үҙе сығарып ҡуя икән, тип әйтеүҙәре иҫенә төшә. Тимәк, был шифалы үлән бөгөн килеүселәрҙең юлында үҫеп ултырған.

Боланут, айырыуса, эскелектән яфаланған ауырыуҙарға килешкән.

Ул араҡыны эске килеү теләген туҡтатҡан, эсәк-ашҡаҙан эшмәкәрлеген яйға һалған. Ҡан тамыры, ҡан баҫымы кеүек сирҙәрҙе иҫкәрткән. Күҙ ауырыуы менән яфаланыусыларға бермә-бер килешкән.

Олатай болануттан сәй яһарға ла өйрәтер булған. Быны ң өсөн үләнде сәскә атҡан сағында япрағы-ние менән йыйып алып, ит турағыстан үткәрәһең, йәиһә балта менән ваҡ ҡына итеп сапҡылап турап, өс көн эмаль һауытҡа һалып баҫырып быҡтыраһың, шунан еләҫ ергә, йә йылы мейескә һалып киптерәһең. Боланут сәйе һинд сәйенә биргеһеҙ тәмле була, ҡып-ҡыҙыл булып сыға, өйгә хуш еҫе таралып китә, табынға ҡот ҡуна. Бындай сәйҙе эсеү үҙе бер ләззәт, аҙаҡ хәл инеп, кәйеф күтәрелеп китә.

Башта уҡ Мөжәүир хәҙрәт боланут үләнен киң ҡулланған тигәйнек.

Төрлө сирҙәрҙән, сихыр, боҙом, ҡара уй, һоҡ, күҙ тейеү, тел-тештән өй эсен төтәҫләп таҙалау өсөн дә ул боланут үләнен ҡулланырға ҡуша. Төтәҫләүҙең үҙенсә бер тәртибе бар. Башта

тәһәрәтләнәбеҙ, доғалар уҡыйбыҙ. Еләҫ ерҙә генә киптерелгән артыш, мәтрүшкә, хәҙрәт үләнен самалап алабыҙ. Шунан үләндәрҙе бер-бер артлы тәрилкә һымағыраҡ һауытҡа һалып ут ҡабыҙабыҙ. Иң беренсе артыш, шунан мәтрүшкә, артабан хәҙрәт үләнен яндырабыҙ, аҙаҡ төтөнө менән өйҙө төтәҫләйбеҙ. Ишектең һул яғынан башлайбыҙ, сәғәт теле йөрөүе буйынса барабыҙ. Мөйөштө аҫтан өҫкә төтәҫләйбеҙ. Үлән ҡайһы ерҙә шытырлап яна, шул ерҙә төтөнлө һауытты оҙағыраҡ тоторға кәрәк. Изге әүлиәбеҙ ошолай итеп йылына бер нисә рәт өйҙө таҙалап торорға ҡушҡан. Шунан кешенең тормошо ыңғайланыр, һаулыҡ-сәләмәтлеге арыуланып, үҙ-ара мөнәсәбәттәре көйләнеп китер.

Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында йәшәүсе Баймөхәмәтова Разия Хәйбулла ҡыҙының хәтер һандығындағы Мөжәүир хәҙрәт исеменә ҡағылышлы уникаль мәғлүмәт һаҡланған булып сыҡты. Италиянан килгән был хат тураһында элек тә бер ишетеп ҡалғайным, ләкин осона сыға алмай ҡуйғайным. Әле Разия апай ана шул хатҡа асыҡлыҡ индерҙе. Уны кем ауыҙынан ишеткәнен, хатҡа нимә тураһында яҙылғанын энәһенән-ебенә тәпсирләп һөйләп бирҙе.

## Италия Рим папаһынан хат

Мөжәүир хәҙрәттең изге йәне, баҡый донъяға күсеп, бер нисә йыл үтеп киткәс, 1970 йылдарҙа, Баймаҡ райкомының беренсе секретары исеменә Италияның Рим папаһынан хат-мөрәжәғәт килеп төшә. Ул Баймаҡ районы етәкселегенә лә тәғәйенләнгән була. Был хатта Италия руханиҙарының Мөжәүир хәҙрәтте белеүҙәре, донъя кимәлендәге бөйөк шәхес тип таныуҙары тураһында әйтелә һәм изге әүлиә **Мөжәүир Уйылдан улы йәшәгән төбәкте һәм уның бөтә тирә-яғын, йөҙ километр радиус менән дәүләт заказнигы итеп һаҡлау кәрәклеге тураһында иҫкәртелә.** «Һеҙҙең халыҡ бик мөғжизәле урында йәшәй. Ерегеҙ бай, тәбиғәтегеҙ хозур, халҡығыҙҙың киләсәге яҡты», – тиелә был русса яҙылған хатта.

Тере сағында Мөжәүир әүлиә тыуған халҡы һәм ер йөҙө халҡы өсөн бөйөк ыҙа сигеүсе булды, тип яҙа, Италия

руханийы. Йәнә хатта ошондай юлдар була: **«Мөжәүир әүлиәнең йәне ерҙән киткәс, изге рухы үҙе йәшәп киткән төбәккә генә түгел, бөтә планетаға бәрәкәт, именлек ебәреп ятыр»**. Рим папаһы үҙенең был хатында изге дин әһеле йәшәгән ерҙәрҙе халыҡ күҙ ҡараһындай һаҡлаһын ине, ти.

Был ҡыҙыҡлы хат тураһында беҙ Разия Хәйбулла ҡыҙы менән оҙаҡ фекер алыштыҡ. Күп йылдар элек ул быны үҙ ҡолағы менән Сырлыбаев Рәхмәтулланан ишетә. Быһың нисек, ниндәй шарттарҙа булыуын бөтә дөрөҫлөгө менән, Разия апай үҙе һөйләгәнсә, һүҙмә-һүҙ бирәбеҙ.

– Бер мең туғыҙ йөҙ етмешенсе йылдың яҙы ине. Миңә утыҙ йәштәр тирәһе булғандыр. Бер туған ағайым Хәйрулла Хәйбулла улы әйтте:

– Разия туғаным, Рәхмәтулла ағайың менән кисен һеҙгә барып сығырбыҙ. Беҙҙең һөйләшеп кәңәшләшәһе эш бар.

Ағайым кем менәндер айырым һөйләшергә теләһә, гел шулай беҙгә алып килә торғайны. Тормош иптәшем Азамат Вәли улы менән дә ышаныслы дуҫ булдылар.

Мин аш-һыу әҙерләнем.

Сырлыбаев Рәхмәтулла Сабир улы райондың абруйлы кешеһе, халыҡ судьяһы булып эшләй, ағайым да күпте күргән, күпте белгән милиция хеҙмәткәре. Улар бала саҡтан дуҫтар, фекерҙәштәр, икеһе лә барыһын белеп, ишетеп, күреүсе органдарҙа эшләй. Икеһе лә башҡорт халҡының патриоттары ине.

Уларҙың һөйләшеүе мәңгелеккә күңелемә уйылып ҡалды, бөгөнгөләй иҫемдә. Һүҙ беҙ бөтәбеҙ ҙә яратып, сикһеҙ ихтирам иткән мәрхүм Мөжәүир хәҙрәт хаҡында барҙы.

Рәхмәтулла ағай райкомға Италиялағы Рим папаһынан хат килеүе тураһында әйтте. Бөтәһен дә күреп-белеп, асыҡ һөйләп ултырҙы. Ул туҡтағас ағайым:

– Был хат тураһында юғарыға хәбәр ителдеме һуң? – тип һораны.

– Ҡайҙан хәбәр ителһен. Үҙең белеп тораһың бит, буржуйҙар менән хат алышып ятаһығыҙ тип, берҙе биш итеп, партиянан сығарып, тик торғанда үҙеңдән халыҡ дошманы яһап, сит ил шпионы тип хурлап төрмәгә илтеп тығырҙар.

Заманы шулай бит, – тине халыҡ судьяһы Рәхмәтулла ағай. Бөтәбеҙ ҙә уның фекеренә ҡушылдыҡ. Ысынлап та, ул йылдарҙа беҙҙең илдә дин әһелдәре өсөн түҙеп торғоһоҙ шарттар булдырылғайны.

Беҙ, табындаштар, үҙебеҙҙең яҡ халҡының ғәҙәте буйынса, изге олатайыбыҙ хаҡында тағы оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Уның хикмәттәрен, мөғжизәләрен һөйләп хайран ҡалдыҡ...

– Был хат тураһында киләсәк быуын белергә тейеш. Хат, бәлки, берәй архивта яталыр. Уны эҙләп ҡарарға кәрәк. Бәлки, шул саҡтарҙа райкомда секретарь-машинистка булып эшләгән кеше беләлер, – тине Разия апай.

Эйе, партия нисек кенә тыйһа ла, закон динде инҡар итһә лә, Мөжәүир хәҙрәтте төрмәләргә ултыртып ҡуйһалар ҙа, беҙҙең яҡтың һәр кеме, кесеһенән алып олоһона тиклем, Мөжәүир хәҙрәтте белде, яратты, ихтирам итте. Был бәйәнде ишеткәс, миңә, ике китап авторы булған кешегә, тынғылыҡ бирмәгән ике сер сиселеп киткәндәй булды. Беренсенән, гел аптырай торғайным, шундай ҙа илаһи ҡөҙрәт эйәһе нисек үҙен ҡулға алырға, төрмәләрҙә ултыртыуға юл ҡуйҙы икән тип уйлай инем. Баҡһаң, был уның туған халҡы өсөн ыҙа сигеүе, тәҡдиргә буйһоноуы булған. Шуға ул күндәмлек күрһәткән булып сыға.

Икенсенән, бына ни өсөн Манһыр тирәһен һөрөргә тип килгән тракторҙар боҙолоп ултырған. Кире ҡайтыр булһа, бөтә кешене аптыратып, һин дә мин эшләп киткән. Тимәк, бынан шуны аңларға була, олатай рухы еренең соҡолоп тәләфләнеп ятыуын теләмәй. Геологтар килеп Манһыр тирәһен ҡаҙып ҡарарға итһә, тракторҙары боҙола, йә үҙҙәре ауырып китә икән. Был да юҡҡа түгел. Мөжәүир әүлиә йәшәгән изге ерҙәргә юғарынан ҡул тейгеҙергә ҡушылмаған.

## Уйҙар, уйҙар...

Рим папаһының хаты тураһында уйланыуҙар зиһенде яҡтыртып, күп нәмәгә күҙҙе асып ебәргәндәй булды. Ысынлап та, бөтә халыҡ данлаған, хатта сит илдәрҙә ҙурлап иҫкә

алынған шәхесебеҙҙең исемен мәңгеләштереү беҙҙә тейешле кимәлдә ҡуйылғанмы?

Совет власының дингә ҡаршы булыуын, Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген танымауын беләбеҙ. Ошондай ҡараш сәбәпле беҙ бөйөк әүлиәбеҙгә асыҡтан-асыҡ ихтирамыбыҙҙы күрһәтә алмай йәшәнек. Хәҙер ул замандар үтеп китте. Дәндәр тергеҙелде, хәҙер Аллаһы Тәғәләгә табыныуҙан, пәйғәмбәрҙәргә, изгеләргә, әүлиәләргә ихтирам күрһәтеүҙән тыйыусы юҡ. Әммә, ниңәлер, беҙ үҙ яғыбыҙҙың бөйөк әүлиәһе Мөжәүир хәҙрәт исемен мәңгеләштерергә ашығып бармайбыҙ. Уның йәшәгән ерҙәрен, Рим папаһы үтенгәнсә, заказник итеү түгел, хатта ҡәбере лә тейешле кимәлдә тәрбиә ҡылынмаған. Белеүебеҙсә, бөтә донъя кимәлендә изгеләр ҡәбере ҡәҙерләп һаҡлана. Мәҫәлән, Болгария күрәҙәсеһе бөйөк Ванга Димитрова ерләнгән Рупите ҡалаһындағы Изге Петка тигән урын шау сәскәгә күмелгән. Иҫ китмәле таҙалыҡ, матурлыҡ, шулай уҡ изге күрәҙәсе ерләнгән урын иғтибар һәм һөйөү менән солғанған. Унда әүлиә рухын шат ҡылырға теләүселәр ағылып килә, йән тынысҙығы, рухи көс алып китә.

Халҡыбыҙҙың бөйөк шәхесен данлау, беренсе сиратта, терләргә, беҙгә, кәрәк. Был йәһәттән болгарҙарҙан өлгө алыу зыян булмаҫ ине. Ванга тураһындағы материалды ентекле өйрәнеп, үҙебеҙҙең Мөжәүир әүлиәнең ҡөҙрәтен уныҡы менән сағыштырып ҡараным. Улар бер иш илаһи көс-ҡөҙрәткә эйә, тигән фекергә килдем. Шулай уҡ ике бөйөк шәхескә ҡарата мөнәсәбәттәрҙе лә сағыштырҙым. Уңайһыҙ, сикһеҙ оят булһа ла танырға тура килә, беҙҙең Мөжәүир хәҙрәт ҡәбере ташландыҡ хәлендә. Быйыл апрель айында «Аргументы и факты» гәзитенән килгән шеф-редактор Жданов Альберт Әнәс улы бөйөк әүлиә ҡәберен зыярат ҡылып, уның ташландыҡ хәлендә булыуын башына һыйҙыра алманы.

– Ниңә былай ул? – тине журналист. – Изгеләр ҡәбере ҡурсаулыҡҡа алынырға тейештер бит.

Альберт Әнәс улы ғына түгел, килгән һәр бер кеше ҡәберлектең меҫкен хәлдә булыуына, мосафирҙарға булған мөнәсәбәткә ҡәнәғәтһеҙлек белдереп китә.

Быйыл май айында Ислам институтын тамамлаған егерме дин әһеле хәҙрәт ҡәберенә килеп, рухына аяттар бағышланы. Улар ҙа шул уҡ баяғы фекерҙе әйттеләр.

Әбйәлил районының инвалидтар ойошмаһынан йөҙгә яҡын кеше килеп, әүлиәнең ҡәберен зыярат ҡылды.

– «Мөжәүир хәҙрәт» китабын уҡып, ошо изге ергә килеп йөрөй башлағаны бирле беҙҙең арала эскелек бөттө. Доғалар уҡып, Аллаһы Тәғәләгә инанып, изге юлдан йөрөргә тырышабыҙ, – ти улар. Нурлы йөҙҙәренә, ихласлыҡтарына ҡарап, мин әйтелгәндәрҙең хаҡ булыуына ышандым.

Мөжәүир хәҙрәт ҡәберенә алыҫтан юлланыусы мосафирҙар, китап авторы булараҡ, миңә һәм үҙебеҙҙең Тәҡүә мәсетенә киләләр. Беҙ һис тә тарһынмайбыҙ, ни бар, шуның менән ашатып-эсереп, изгеләр юлынан йөрөүселәрҙе ҡәҙер итәбеҙ, юлдарында оҙатып йөрөйбөҙ. Бындай аралашыу миңә артабан да изгеләр тураһында яҙырға кәрәклекте дәлилләй. Кешелек донъяһына һөйөү менән һуғарылған тема – мәңгелек тема. Изгеләр темаһы мөхәббәт темаһы кеүек үк, мең йыл үтһә лә иҫкермәй, ялҡытмай, кешелектең рухын байытып йәшәйәсәк.

Кешеләрҙең изгеләр юлынан йөрөүе, уларҙың йәшәйешен өйрәнеүе халыҡтың рухи кимәлен билдәләүсе фактор. Рухи ҡиммәттәр һанланмай, әҙәпһеҙлек, боҙоҡлоҡ донъяны ялмап алып барған бер саҡта, кешеләр изге хәҙрәт ҡәберенә күңелдәрен сафландырыу өсөн килә. Кешеләрҙең иман юлына баҫыуы – был бит бик һәйбәт. Шуға күрә меңәрләгән мосафир ағылған изге ерҙе тиҙ арала йүнәтеү, тәрбиә ҡылыу кәрәк.

Балалары, туғандары ҡараһын, тип, үҙҙәренән яуаплылыҡты алырға итеүселәр булыр. Ә бит Мөжәүир хәҙрәт балалары, туғандары өсөн генә йәшәмәгән, тыуған ере, бөтә ер йөҙөндәге халыҡтарҙың яҡты киләсәге өсөн бөйөк ыҙа сигеүсе (великомученик) изге әүлиә булған. Йәнә, уның балаларының күбеһе гүр эйәһе икәнде онотмайыҡ, булғандары ла олоғайған, бындай яуаплы эшкә тотонорға уларҙың хәле етмәй. Минеңсә, Мөжәүир әүлиә ҡәберен мәңгеләштереү, халыҡ килеп рухына баш эйерлек күркәм урынға әүерелдереү хөкүмәт кимәлендәге ҙур эш булырға тейеш.

Бөйөк шәхестең исемен мәңгеләштереү буйынса хәҙергә беҙҙә бер эш эшләнде. Был «Мөжәүир хәҙрәт» тигән китаптарҙың сығыуы булды. Халыҡтан йыйып алынған хәтирәләр, шуға нигеҙләнеп яҙылған бәйән ике китап сығарылып, һәр кемдең күңелен шат ҡылдыҡ. Тик ҡайһы бер аңлап етмәгән кешеләр генә:

– Ошо Лира китап яҙҙы ла ҡәберенә килеүселәрҙән тынғы юҡ, – тип һуҡранып ҡуя.

Китапты яҙыуын яҙҙым да ул. Алға уны нисек сығарырға, тигән һорау килеп баҫты. Йәшермәйем, китапты баҫтырыу минең өсөн бик ҡыйынға төштө. Был эшкә хөкүмәт тиҙ тотонмаҫтай булғас, үҙнәшер менән сығарыу юлы ҡалды. Үҙнәшер булғас, китап сығарған өсөн йөҙәр мең аҡсаны үҙем түләргә тейеш булып сығам. Башта ике мең тираж менән сыҡты. Уның хаҡын бик ҡыйынлыҡ менән түләнем. Китап етмәй ҡалды, кешеләр тағы һорай. Олатай рухы үҙе быны теләйҙер тип, тағы баҫтырып сағарҙым. Дүрт мең, тағы ике мең тираж менән беренсе китап сыҡты. Икенсе «Хәтирәләр» китабы өс мең ярым тираж менән, унан һуң тағы бер мең, бер аҙҙан йәнә бер мең тираж менән сығарҙым. Шулай итеп, йәмгеһе үҙнәшер юлы менән бөтәһе ун бер мең ярым китап сыҡты. Матди ярҙам булманы. Бер саҡ, шулай өс мең ярым тираж менән сыҡҡан китап өсөн аҡса түләй алмай үҙәгемә үтте. Хатта асырғанып, өйөмдө һатһам, һатырмын, әммә «Мөжәүир хәҙрәт» китабын барыбер сығарырмын, тип ҡәһәтләндем. Аллама шөкөр, өйөмдө һатырға тура килмәне. Сибай типографияһы директоры Хәлитов Азат Ибраһим улы, хәҙер ысын донъяла ята, бурысҡа, йәғни, китапты һатып, аҡсаһын түләү шарты менән баҫып сығарҙы. Типографияға ике йөҙ мең бурысты яйлап түләй башланым. Был бурысты түләп, осона сыҡмаҫтай инем, миңә Өфө ҡалаһында йәшәүсе күренекле дин әһеле, Хәйриә фонды рәйесе, һигеҙ мәсет һалдырған Хәмзә хажи Әкбәр ярҙамға килде. Ул типография иҫәбенә илле мең һум аҡса күсерҙе. Бурыслы булыу бик насар нәмә икән. Бурыс минең илһамымды быуҙы, ҡулымдан ҡәләмемде төшөрҙө. Ә кешеләр, быны белмәй, һаман Мөжәүир хәҙрәт хаҡында өсөнсө китап яҙыуымды һорай.

Түләүҙән, йәнемде ҡоршап торған бурыстан ҡотолғас ҡына кире ҡулыма ҡәләм ала алдым. Шуға күрә бындай изге эштәр башҡарыусы Хәмзә хажи хәҙрәтебеҙгә мин бик бурыслы һәм рәхмәтлемен. Инде әүлиәне ололоҡлап ҡәберенә зыярат ҡылыусы күп һанлы мосафирҙарға китапты бүләк итеп бирергә лә мөмкинселек тыуҙы. Китап тышындағы Мөжәүир хәҙрәт һүрәтен күреп күптәр, тыйыла алмай, илап ебәрә. Олатай рухы, шулай, күңелдәрҙе нескәртеп, беҙҙе дөрөҫ, хаҡ юлдан әйҙәйҙер, ахырыһы. Юҡҡа ғынамы ни, хәҙрәт ҡәберенә килгәндән һуң, күптәр эсеүен ташлай, изге юлға баҫа. Мин ошондай хәлдәрҙең шаһиты булараҡ, бик күп миҫалдар килтерә алыр инем.

«Мөжәүир хәҙрәт» китабы иң уҡымлы китап тип табылып, республика китапханалар селтәренең йыл китабы тип билдәләнде. Халыҡтың әүлиә хәҙрәткә оло ихтирамының сағылышы булған минең ошо китаптарым хөкүмәт етәкселәренең Мөжәүир хәҙрәткә һәм башҡа изгеләргә, әүлиәләргә күҙен асһын ине. Улар йәшәп киткән ерҙәрҙе заповедникка әүерелдереп, зыяратына тейешенсә тәрбиә ҡылынһын.

Яңыраҡ минең өсөн бик ҙур ҡыуаныслы хәл булды. Хөкүмәткә ҡараған Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте «Мөжәүир хәҙрәт» китабын сығарасағы билдәле булды. Ниһайәт, боҙ ҡуҙғалды, тип ҡыуандым. Минең әле яҙылып ятҡан Ғафури районы, Сәйетбаба ауылы зыяратында ерләнгән Сабир әүлиә тураһындағы сығасаҡ «Сабир хәҙрәт» тигән китабымды ла шулай ҙурлаһындар ине, тим.

Бөтә мосолман донъяһында танылыу тапҡан, хатта сит илдәрҙә, икенсе милләт вәкилдәре тарафынан ихтирам ителгән бөйөк шәхестәребеҙ Зәйнулла ишан, Мансур мөфтөй, Сабир хәҙрәт, Ғабдулла Сәиди, Байым ишан, Әбйәлил ишан, Ғатаулла ишан, Хәлил хәҙрәт, Шамиғол хәлфәләрҙең олуғ исемдәре, ин шәәъ Аллаһ, онотолмаҫ. Һәр төбәктә лә әүлиә зыяраты, әүлиә шишмәләре бар. Тимәк, ул ерҙәрҙә лә әүлиәләр йәшәп киткән, исемдәре онотолһа ла, рухтары беҙгә фатиха һын биреп яталыр. Ундай изге ерҙәрҙе, һис ҡыйынһынмай, тәрбиә ҡылырға тейешбеҙ. Халыҡ хәтере ҙур көс ул, ин шәәъ Аллаһ, оноторға ирек ҡуймаҫ. Ил төкөрһә, күл булыр, ти. Быға

дәлил – Зәйнулла ишандың тыуыуына 175 йыллығын билдәләү булды. Халыҡ яй ҡуҙғала, бер күтәрелһә, вулкандан урғылған лава кеүек, уны тыйып та, баҫырып та торор көс булмай. Ин шәәъ Аллаһ, халҡыбыҙ үҙ ягының әүлиәләрен онотмаҫ. Мөжәүир хәҙрәт зыяраты ла, Болгария күрәҙәсеһе Ванганыҡы кеүек, йөҙ төрлө сәскәләргә күмелеп, килгән бер кешене нур бөркөп ҡаршы алыр.

# Йомғаҡлау

Был әҫәр халыҡ араһында киң билдәлелек, оло абруй яулаған, арҙаҡлы шәхес – хәҙрәт, әүлиә, табип Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улына арналды. Ул 1876 йылда Баймаҡ районы Манһыр ауылында донъяға килә, вафаты – 1967 йыл. Ғүмер иткән ауылы эргәһендә ерләнгән.

Тормош иптәшем Вахит Шәрифйән улы (1941–2001) менән вуз тамамлап, Баймаҡ районы «Йылайыр» совхозына эшкә килгәс (1968) тәү тапҡыр Мөжәүир хәҙрәт хаҡында ишеттем. Ҡайҙа барма, кем менән һөйләшмә, телдән төшөрмәй әүлиәне һағынып хәтерләйҙәр, хайран ҡалып табиплығын, күрәҙәселеген, һоҡланғыс кешелек сифаттарын данлайҙар ине. Уның менән ҡатнашып, күрешеп йәшәүселәр үҙҙәрен сикһеҙ бәхетлегә һанай, унда барып дауаланыусылар әйткән һәр һүҙен яттан һөйләй, яҙып биргән бетеүен күҙ ҡараһындай һаҡлай, өшкөртөп алған тоҙон хазиналай ҡәҙерләп тота.

Халҡыбыҙ араһында ошондай оло мөхәббәт яулаған шәхестең исеме минең дә күңелемә уйылып ҡалды, уға булған тәрән ихтирам йылдар үткән һайын баҙығайҙы һәм ҡулыма ҡәләм алдырҙы.

Тәүге китап, художестволы юҫыҡтағы әҫәр булараҡ, повеста хәҙрәттең тормош юлын нисек бар, шулай күсереп биреүҙе, факттарҙы туранан-тура теркәүҙе, туған-тыумасаларының һәр ҡайһыһы тураһында сурытып яҙыуҙы маҡсат итеп ҡуйманым. Күп кенә ҡәрҙәштәренең, таныштарының исеме, әҙәби образға әйләндерелеп, дөйөмләштерелде. Оло

йәштәге, уны күреп-белгән кешеләрҙән һорашып, байтаҡ материалдар тупланым, хатта бөтәһен дә был китапта файҙаланыу мөмкин булманы.

Оҙайлы ғүмер юлы үткән Мөжәүир хәҙрәткә төрлө сәбәптәр арҡаһында дүрт тапҡыр өйләнергә тура килә. Әҫәрҙә, тәүге ҡатындарының образы дөйөмләштерелеп, Сөмбәлә исеме менән бирелде. Ҡырҡ йылға яҡын бергә ғүмер иткән, ун бала әсәһе Гөлйемеш абыстайҙың исеме үҙгәртелмәне.

Әлеге көндә Байыш ауылында йәшәгән Теүәлбай ҡустыһының ҡыҙы Кәримова Хәҙисә инәй әйтеүенсә, хәҙрәттең ун алты балаһы була. Китапта ике улының, Варис менән Мөхәммәттең, исемдәре телгә алынды. Сибай ҡалаһында йәшәгән улы Мөхәммәткә айырыуса рәхмәтлебеҙ. Иң күп мәғлүмәттәрҙе биреүсе ул булды. Форзацтағы Мөжәүир хәҙрәттең фотоһүрәтен дә, «Ҡөрьән»дәге яҙыуҙарҙы ла, хәҙрәттең үҙ ҡулы менән яҙылған бетеү, доға өлгөләрен дә унан алдыҡ. Хәҙрәттең холоҡ-фиғеле, төҫө-башы уның хәтерләүҙәренә таянып тасуирланды.

Хәҙрәттең ҡөҙрәтенә мөкиббән ышанған, «Ҡөрьән» китабын ҡулынан төшөрмәгән Булатова Фирдәүес Шаһимырҙан ҡыҙы һөйләгән мәғлүмәттәр шулай уҡ киң файҙаланылды. Фирдәүес апайҙың әсәһе Нәзилә Биишеваны хәҙрәт бик ихтирам иткән, күп кенә серҙәрен, мәҫәлән, күктән өҫтөнә йәйғор төшөү мөғжизәһен, уға һөйләп ҡалдырған. Нәзилә инәй үҙ сиратында быларҙы ҡыҙы Фирдәүескә бәйән иткән.

Хәтирәләрҙе йыйыуҙа, айырыуса Ҡәҙерғолова Үлмәҫбикә, Мәхмүтова Зәйнәп, Баймөхәмәтова Разия, Иҙрисова Миңлеямал, Йәнтилина Һәҙиә, Иҙрисов Байтүрә, Сиражетдинов Зәйнулла, Туҡаев Мөхәмәтйәр, Сиражетдинов Хөсәйен, Аширбаева Факиһа һ. б. ихлас ярҙам итте, уларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

Мөжәүир хәҙрәткә ҡағылышлы күп кенә ғәжәйеп хәлдәрҙән Байназарова Зәкиә, Хабирйәнова Гөлйыһан, Хәсәнова Фәйрүзә, Кәримова Һандуғас һәм башҡа тиҫтәләрсә кешеләр үҙе ишеткән-белгәндәр менән ихласлап уртаҡлашты. Уны күреп белеүселәргә шуны ҡабатлап әйтәм: тәүге китапта хәҙрәттең тормош юлы нисек булған, шул көйө яҙылманы.

Легендаға әүерелгән шәхес биографияһы нәфис әҙәбиәт ҡанундары буйынса художестволы образ итеп һынландырылды.

Изге эштәре, алтын аҡылы менән халҡы күңелендә үҙенә мәңгелек һәйкәл ҡуйған дин әһеле ул Мөжәүир хәҙрәт!

Был яҡтарҙа бөгөн дә намаҙ уҡыусылар тәүге аятын Мөжәүир хәҙрәт рухына бағышлай. Сирҙән ҡотола алмай интегеүселәрҙең телендә:

— Их, хәҙрәт олатай тере булһасы! Ул мине һауыҡтырыр ине, — тигән үкенеү. Уны һағыныусылар, уны ололаусылар ҡәберенә барып баш эйәләр, хатта ундағы юлдарҙы таҡырлап бөтәләр.

Әйтергә кәрәк, Мөжәүир хәҙрәт хаҡында хәбәрҙар булған һәр берәү ошондай китап менән булһа ла уның исемен мәңгеләштереүҙе хуплай, сөнки уның ғүмере халҡыбыҙға, йәш быуынға фәһем дә, ғилем дә, фиҙаҡәрлек өлгөһө лә булып тора, һәр кем күңелендә һоҡланыу һәм ғорурлыҡ уята.

«Мөжәүир хәҙрәт» китабын яҙыу үҙемдең дә рухи кимәлемде күтәрергә, ер, күк серҙәрен, сер ғилемен аңларға булышлыҡ итте. Ул мине ҡайҙарҙа ғына илтеп юлыҡтырманы ла, кемдәр менән генә осраштырманы. Китап көсө мине ҙур йыйындарҙа ҡатнаштырҙы, әүлиәләр ҡәберен зыярат ҡылдырҙы, яңы асылған мәсеттәргә, Ҡөрьән һәм ҡорбан ашы табындарына саҡыртты, әүлиә шишмәләренең шифалы тереһыуҙарын тәмләтте!

Хәйбулла районы Вәлит ауылында үткән олуғ шәхесебеҙ Зәйнулла шәйехтең яҡын дуҫы Ғатаулла ишанды иҫкә алыу йыйынында ла ҡатнашырға тура килде. Оло ҡор шундай ҙа ихласлыҡ, рухи күтәренкелек менән үтте. Бына ҡайҙа ул әҙәпкә, иманға ҡайтыу! Афарин, хәйбуллалар! Изге эш башҡарылды. Зәйнулла ишанға арналған йыйындарҙа ҡатнаштым. Троицкиға барып уҡытҡан мәҙрәсәһен, намаҙ уҡыған мәсетен, ерләнгән ҡәберен күреү насип булды. Ғафури районы Оло Үтәш ауылында Халиҡов Хатип хәҙрәт йыйынына саҡырылып, был данлы ырыу тураһында сығыш яһаным. Халиҡовтар ырыуының данлы вәкиле Сабир хәҙрәткә арналған повесы, Аллаһ teләһә, 2009 йылда донъя күрер, тип ниәтләнем.

Баймаҡ районының изгеләре ятҡан ерҙәргә: Байым ишан зыяратына, Ғабдулла Сәиди ҡәберенә барып доғалар уҡыным. Тыуған ауылым Сәйетбаба зыяраттарында ерләнгән Әбйәлил ишан (XVIII быуат), Әбйәлил мулла, Сабир хәҙрәттәрҙең ҡәберҙәрен барып күреп, рухтарына Ҡөрьән аяттары бағышланым, Алламдың юлдар асҡанына мең шөкөр.

Учалы районы Әүеш ауылы эргәһендә Әүеш тауына күтәрелгән шәйех Мөхәммәд Рамаҙан Әүеши ҡәберен зыярат ҡылдым, Әүеш шишмәһенән һыу эсергә насип булды, ин шәәъ Аллаһ.

Тылсым эйәһе тураһында яҙғас, аңлашыла, һәр төрлө хикмәтле хәлдәргә лә осрап торолдо. Ҡайһы бер күңелгә бирелеп яҙылған нәмәләрҙең аҙаҡ факттар менән иҫбатланыуы мине хайран итте.

Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә килеп баш эйергә, Ҡөрьән уҡырға тип алыҫтан килгән изге ҡунаҡтарҙы ла ҡабул итергә яҙҙы. Хәҙрәттең яратҡан төйәге Манһыр тирәһен иңләп-буйлап сыҡтым. Киң яландарынан – ҡөҙрәт, күк һыртлы тауҙарынан – ныҡлыҡ, сылтыр шишмәләренән илһам алдым.

Китапта хәҙрәттең тыуған яҡ тәбиғәтен яратыуын, уны ныҡ һаҡларға тырышыуын иҫкә алып, ул һаҡларға васыят итеп әйтеп ҡалдырған урындарҙың фотоһүрәте бирелә. Был – Манһыр менән Кәрешкә араһында ятҡан Ҡыңғырташ тауы һәм Күлтабан ауылы эргәһендәге Яугүл күле, ауылы эргәһенән генә аҡҡан Урғаҙа үҙәне, йәйрәп ятҡан икһеҙ-сикһеҙ далалары.

Манһыр ауылынан алыҫ түгел ерҙә, Улаҡ башында, боронғо ҙур ҡала барлығы беленә. Археологтар, геофизиктар, Өфөнән Фәндәр академияһы ғалимдары, Мәскәү ҡалаһынан Д. С. Лихачев исемендәге фәнни-тикшереү институты менән берлектә махсус программа төҙөп, эш башлаған. План буйына Мөжәүир хәҙрәт йәшәгән өйҙө йорт-музейға әйләндереү. XIX быуат ҡомартҡыһы – мәсетте төҙөкләндереү күҙ уңында тотола икән. Шулай итеп, үҙендә быуаттар серен һаҡлаған Манһыр ерҙәре башҡортомдоң Мәккәһенә әүереләсәк инде, Аллаһ бирһә. Мөжәүир хәҙрәттең исеме лә быуаттарҙан быуаттарға барып етер. Амин, шулай булһын.

Эй, илаһи зат, Мөжәүир әүлиә! Ер йөҙөнә килеп-китеүселәрҙең иң бөйөгө, иң һөйөклөләренең береһе! Рухың ниндәй көслө һинең! Исемеңде генә ишетеүҙән күңелдәр сафлана. Һин Аллаһы Тәғәләнең яратҡан ҡоло, ергә уның рәхмәте булып яралтылған зат. Һине төрмәләргә япҡандар, яманатыңды таратып, кешеләрҙе биҙҙерергә тырышҡандар. Яуыз уйҙырмалар таратып ҡарағандар... Бер ни ҙә халҡыңды һинән биҙҙерә алмаған! Һине ғазап сиктергән, эҙәрлекләгән залимдар, моғайын, ҡәберҙәрендә әле тыныс ята алмайҙарҙыр. Бөйөклөгөңдө туған халҡың белә, арҙаҡлы шәхес итеп таный. Ҡайҙа барһам, бөтә ерҙә, яҡташтарың ғына түгел, бөтә башҡорт халҡы китап өсөн миңә рәхмәт әйтә. Быны китаптың шәп яҙылыуынан ғына түгел, ә Мөжәүир хәҙрәткә меңәрләгән кешеләрҙең рәхмәте итеп ҡабул итәм. Кешеләр һине, әүлиә, һағына, юҡһына, тағы ергә шундай яңы илаһи зат килеүен теләй. Эйе, ергә тағы әллә күпме әүлиәләр килеп етер, әммә изге Мөжәүир хәҙрәт исеме мәңге онотолмаҫ. Туған халҡы бит уның исемен юйылмаҫлыҡ итеп йөрәк түренә яҙып ҡуйҙы һәм аҙаҡ ташҡа баҫтырып мәңгеләштерҙе!

## Автор хаҡында ҡыҫҡаса белешмә

Яҡшыбаева Лира Миңләхмәт ҡыҙы 1947 йылда Ғафури районының Сәйетбаба ауылында тыуған. Шунда уҡ урта белем ала.

Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Һайлаган һөнәре буйынса 34 йыл мәктәптәрҙә эшләй, инде хаҡлы ялда. Республика матбуғатының әүҙем яҙышыусыһы.

Авторҙың «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Һылыу ҡарағас» китабы китап уҡыусылар тарафынан бик йылы ҡабул ителде. Балалар өсөн «Исемең Салауат булһын» китабы ла ҡулдан ҡулға йөрөтөп уҡыр китапҡа әүерелде.

Мөжәүир хәҙрәттең тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы «Мөжәүир хәҙрәт. Бәйән», «Мөжәүир хәҙрәт. Хәтирәләр» тигән китаптары халыҡ һөйөүен яуланы. Китап уҡыусыларҙың һорауы буйынса ҡабатлап нәшер ителә. Бөгөнгө көндә яҙыусы «Сабир хәҙрәт» исемле күләмле әҫәрен яҙып бөтөп баҫтырыуға әҙерләне, шулай уҡ «Инә бөркөт» тигән повесть һәм хикәйәләр йыйынтығын әҙерләне.

Китап авторы 2002 йылдан Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы.

# Йөкмәткеһе


Баш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3

**I бүлек**

Бәйән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 8
Ямғыр яуҙырған малай . . . . . . . 8
Ғилем эстәгәндә . . . . . . . . . . . . 21
Сөмбәлә . . . . . . . . . . . . . . . . . 39
Тәҡдир . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Ҡайтыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Чабан Миңлегол . . . . . . . . . . . . 73
Әүлиә аманаты . . . . . . . . . . . . 82
Миһырбанлыҡ . . . . . . . . . . . . . 90
Сая килен . . . . . . . . . . . . . . . . 101
Йәйгорҙан туҡылған тәхет . . . 119
Йән дауаһы . . . . . . . . . . . . . . 128
Шаңдау . . . . . . . . . . . . . . . . . 136

**II бүлек**

Хәтирәләр . . . . . . . . . . . . . . . . . 140
Атайым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 140
Онотмабыҙ һине, хәҙрәт олатай! . . 149
Хәҙрәт шишмәһе . . . . . . . . . . . . . 156
Мөжәүир хәҙрәт . . . . . . . . . . . . . 158
Мөжәүир хәҙрәт тыуған ерҙә. Манһыр ауылы ҡасан нигеҙләнгән? . . . . . . . . . . . . . 160
Олатай ҡанаты аҫтында үҫтем . . . 163
Хәҙрәт олатай беҙҙе никахланы . . 170
Олатайымды бик яраттым . . . . . . 174
Ағас танк . . . . . . . . . . . . . . . . 174
Калуш . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
Рамаҙан Йәнбәков . . . . . . . . . 175
Хажиәхмәт Унасов . . . . . . . . 176
Гәбделварис Сиражетдинов . . 177
Ат башындай алтын . . . . . . . . 178
Мөжәүир әүлиә . . . . . . . . . . . . . . 179
Әүлиә олатайым хаҡында . . . . . . 185
Кирамәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 187
Урҙаң төбө йүнәлгәндер инде . . . 189
Эй, ғүмерҙең һуңғы минуты... . . 199
Дыуамал Хажи . . . . . . . . . . . . . 202
Әүлиә тирәге . . . . . . . . . . . . . . . 205
Юрауҙары юш килде . . . . . . . . . 213
Һеңлемдең исеме Гөлнур булһын . . . . . . . . . . . . . . . . . 217
Рухы ҡыуанып ҡайтһын! . . . . . . 220
Күпме эсһәк тә самауырҙың һыуы бөтмәне . . . . . . . . . . . . . 223
Хәҙрәтте беҙгә Аллаһ үҙе ебәргән . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
Ҡартәсәйем Ҡөрьән менән дауаланы . . . . . . . . . . . . . . . . 232
Гел бойҙай урлап йөрөмә, һоһоһон да ал . . . . . . . . . . . . . 238
Артыңа әйләнеп ҡарама . . . . . . . 241
Енде еңгән уҙаман . . . . . . . . . . 244
Игелек ерҙә ятып ҡалмай . . . . . . 247
Хәҙрәт име . . . . . . . . . . . . . . . . 252
Шафиҡ мулла еңәнеме? . . . . . . . 254
Кеше күңелен аңлаған шәхес . . . . 257
Атайың – Ҡужахмәт йырау ине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
Тылсымлы көсөнә барыһы инанды . . . . . . . . . . . . . . . . . . 266
Мөжәүир хәҙрәт бетеүе . . . . . . . 268
«Хәҙер батырайҙың инде...» . . . . 272
Тағы ла тылсымлы олатай хаҡында . . . . . . . . . . . . . 275

Араҡы — ҡара йылан . . . . . . . . . . 277
Хәҙрәттең күңеле һиҙгер ине . . . . 279
Хәҙрәт фатихаһы . . . . . . . . . . . . . 283
Ул кәзә бит Бохар баҙарында . . . 288
Башҡорт Месcингы . . . . . . . . . . . 291
Һуҡыр күҙҙе асыр ҡөҙрәт . . . . . . 294
Мине хәҙрәт бетеүе һаҡлай . . . . . 299
Татарстандан хат . . . . . . . . . . . . . 302
Тылсым эйәһе . . . . . . . . . . . . . . . 306
Шәхестәребеҙҙе үҙҙәре иҫән саҡта ҡәҙерләргә өйрәнәйек . . . . . . . . 310
Ул мәҡәлә баҫылманы . . . . . . . . . 312
Улар илһамды ҡартатаһынан ала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 315
Мөжәүир хәҙрәт хикмәттәре . . . . 318
Кире алды . . . . . . . . . . . . . . . 322
Хикмәтләнең Фәйзуллаға күрһәткән хикмәте . . . . . . . . . 323
Инселәнгән ҡаҙ . . . . . . . . . . . 324
Дахаң һәйбәт тә инде . . . . . . . 325
Хәҙрәт бетеүе . . . . . . . . . . . . . 326
Яҙыусыға рәхмәт һүҙем . . . . . 328
Хәҙрәт үләне . . . . . . . . . . . . . . . . 330
Италия Рим папаһынан хат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 332
Уйҙар, уйҙар . . . . . . . . . . . . . . 334
Йомғаҡлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . 340

*Духовно-просветительное издание*

**ЯКШИБАЕВА Лира Минниахметовна**

**МУЖАВИР ХАЗРЕТ**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Фирүзә Камалова*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Исхаков*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева*
Корректорҙары *Гөлсирә Таһирова, Лилиә Морсалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.10.08. Форматы 60 x 84 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы № 1. «Светлана» гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 20,23. Шартлы буяу отт. 21,16. Иҫәп-нәшер таб. 16,18. Тиражы 3000 дана. Заказ № 1.0212.08.

Башҡортостан Республикаһының «Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

